# БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ТАРИХЫ

Ә. Ф. ИШБИРҘИН, И. Ғ. ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ, Р. Х. ХАЛИҠОВА

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ТАРИХЫ

*Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан раҫланды*

ӨФӨ
«КИТАП»
1993

ББК 81.2 Баш
И 89

Рецензенттары:
филология фәндәре докторы **С. Ф. Миржанова**
һәм филология фәндәре кандидаты **З. З. Әбсәләмов**

Яуаплы редакторы
филология фәндәре кандидаты **Ҡ. Ғ. Ишбаев**

**Ишбирҙин Э. Ф. һ. б.**

И 89 Башҡорт әҙәби теленең тарихы. — Өфө: Башҡортостан «Ҡитап» нәшриәте, 1993. — 320 б.

ISBN 5-295-00804-5

Ҡитапта Урал — Волга буйы төрки теленең барлыҡҡа килеүе, башҡорт ерлегендә камиллашыуы, уның төп үҙенсәлектәре, башҡа яҙма төрки телдәрҙән айырмаһы, шулай уҡ башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәре, фольклор әҫәрҙәренең теле һәм Урал — Волга буйы төрки теленең нигеҙендә хәҙерге башҡорт әҙәби теленең формалашыуы һәм артабан үҫеүе мәсьәләләре тикшерелә.

Был хеҙмәт юғары класс уҡыусыларына, мәктәп һәм юғары уҡыу йорттарының студенттарына, шулай уҡ башҡорт теле уҡытыусыларына, башҡорт халҡының тарихы һәм культураһы менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәҡдим ителә.

И $\frac{4602020400-125}{М\ 121(03)-93}$ 168—93 ББК 81.2 Баш

ISBN 5-295-00804-5

© Ишбирҙин Э. Ф., Ғәләүетдинов И. Ғ.,
© Халиҡова Р. Х., 1993

## ИНЕШ

Әҙәби тел мәсьәләһенә төрлө ҡараш булыуға ҡарамаҫтан, уны өйрәнеүҙең оҙайлы тарихы билдәле. Бөтә әҙәби телдәр өсөн дөйөм ҡабул ителгән төп билдәләр бар, улар түбәндәгеләр: әҙәби телдең эшкәртелгән, нормалашҡан булыуы; оҙаҡ йылдар буйына яҙма әҙәбиәтте хеҙмәтләндереүгә мөмкинлек биреүсе анығ бер төрлөлөгө; диалекттарҙан юғары тороуы; әҙәби телде белеүселәр өсөн мәжбүрилеге; бөтә сфераларҙа ҡулланыуға мөмкинлек биреүсе дөйөмлөгө; тарихи осорҙарҙа барлыҡҡа килгән берҙәм фонетик һәм грамматик ҡоролошо, ләкин билдәле бер телмәр төҙөлөшө һәм уларҙы тормошҡа ашырыуҙа традицион нормалары менән айырылыусы төрҙәренең булыуы (стиль айырымлыҡтары) һ. б. Ошоноң менән бергә телселәр араһында төрлө ҡараштар барлыҡҡа килтергән ҡайһы бер билдәләре лә бар.

Әҙәби телдең иң әһәмиәтле шундай проблемаларының береһе — уның яҙмаһы булыуының мәжбүрилеге, йәғни әҙәби телдең тик яҙыуҙа ғына сағыла алыу мөмкинлеге. Был мәсьәлә буйынса Л. В. Щерба түбәндәгеләрҙе яҙҙы: «Иң алда әҙәби тел менән яҙма телде бутауҙан иҫкәртеп ҡуйырға кәрәк: һәр яҙма тел, билдәле, был терминды минең аңлауымса, әҙәби тел була, ләкин әҙәби тел һис һүҙһеҙ яҙыуҙа ғына сағылмай. Бының иң асыҡ миҫалы булып оратор телмәрҙәренең төрҙәре тора. Бында шулай уҡ, былина йәки таҡмаҡ булһынмы, әкиәт йәки ябай хикәйәт, көләмәс булһынмы, — бөтә халыҡ ижады ҡарай» [1]. Әҙәби тел белгестәре М. М. Гухман менән Н. А. Семенюк, А. М. Финкель менән Н. М. Баженов ошондай фекерҙе яҡлап сығалар [2]. Бындай ҡараштар, йәғни әҙәби телдең тик яҙыуҙа ғына сағылыу мөмкинлегенән баш тартыу халыҡ ижады әҫәрҙәренең телен әҙәби тел менән бутауға, улар араһында тигеҙлек билдәһе ҡуйыуға килтерә.

Әҙәби тел тарихы менән шөғөлләнеүсе тел белгестәренең күбеһе яҙманы әҙәби телдең иң әһәмиәтле, мотлаҡ билдәләренең береһе тип таный. «Социаль үҫештең билдәле бер этабында теге йәки был йәмғиәт коллективында, телмәр аралашыуының иң юғары баҫҡысы буларaҡ, әҙәби тел, ғәҙәттә, яҙмала сағы-

---

[1] Щерба Л. В. Избранные работы по русскому языку. М., 1957. 115-се бит.

[2] Гухман М. М., Семенюк Н. А. О некоторых принципах изучения литературных языков и их истории // Изв. АН СССР. Отд. литер. и языка. 1977. Т. 36. Вып. 5. 441-се бит; Финкель А. М., Баженов Н. М. Курс современного русского литературного языка. Киев, 1960. 15-се бит.

лыш алмаусы иң түбән, кодификацияланмаған төрлө телмәр сараларына ҡапма-ҡаршы ҡуйыла, — тип яҙа Н. А. Мещерский. — Яҙмала ныҡынған булыуы әҙәби телдең иң кәрәкле, иң үҙенсәлекле билдәһе итеп ҡарала»[3]. «Әҙәби тел (беҙ уны нисек кенә аңлаһаҡ та) һәр ваҡыт тик текста ғына, шуның менән бергә гипотетик яңынан булдырылғандарында түгел, ә реаль кәүҙәләнешле текстарҙа ғына тормошҡа ашырыла», — тип яҙҙы Ф. П. Филин[4]. Л. А. Булаховский, Б. А. Ларин, В. Д. Левин, А. И. Горшков һымаҡ бик күп телселәр ошондай ҡарашты яҡлай[5].

Әҙәби телдең һөйләү формаһына килгәндә, уның реаль күренеш булыуын кире ҡағып булмай. Айырым бер тарихи осорҙа әҙәби телдең киң таралыуы нигеҙендә уның тел-һөйләү формаһы барлыҡҡа килә. Тик ул эшкәртелгән, ныҡынған, йәмғиәт тарафынан ҡабул ителгән яҙма әҙәби тел булғанда ғына формалаша һәм үҫешә ала. Ошо халыҡтың яҙма әҙәби телде тулыһынса үҙләштергән белемле кешеләре әҙәби телдең һөйләү формаһын беренсе булып ҡуллана башлайҙар. Дөйөм халыҡ һөйләү теле менән яҙма әҙәби телдең үҙ-ара мөнәсәбәттәре нигеҙендә бара-тора әҙәби телдең ауыҙ-тел формаһы үҫешә, ҡулланыу күләме һәм сфераһы артҡандан-арта бара, уның йоғонтоһонда ерле һөйләштәрҙең төп билдәләре юғала барыуға дусар игелә.

Шул уҡ ваҡытта бөтә яҙма ҡомартҡыларҙы ла әҙәби тел үрнәге тип ҡарап булмай, сөнки әҙәби тел нигеҙендә ижад ителмәгән яҙмаларҙың да булыуы мөмкин. Уларға, мәҫәлән, төрлө диалектизмдар менән сыбарланған ябай һөйләү телмәрендә яҙылған хат өлгөләрен йәки үҙгәртелмәйенсә яҙып алынған халыҡ ижады әҫәрҙәренең үрнәктәрен индерергә мөмкин.

Әҙәби тел тарихын өйрәнеүселәр әҙәби телдең милләткә тиклемге һәм милли осорҙарын билдәләп, уларҙың төп айырмаларын күрһәтәләр. Мәҫәлән, Ф. П. Филин бындай айырмаларға түбәндәгеләрҙе индерә: «1) милләткә тиклемге әҙәби телдәр ғәҙәти һөйләү йәки фольклор телмәрҙәре менән бер системала тормай (телдең дөйөм нигеҙе күләмендә); 2) улар бик киң поливалентлыҡҡа эйә булмай, йәғни йәмғиәттең бөтә ихтыяждарын да хеҙмәтләндермәй; 3) был телдәр төрлө регионализмдар менән һыйышып йәшәүгә (ләкин фольклор теленә ҡарағанда кәмерәк кимәлдә) иркен юл ҡуя»[6]. Милләткә тиклемге һәм милли телдәрҙең дөйөм яҡтары ла бар, һәм улар әҙәби телде берҙәм тарихи категория булараҡ асыҡ һүрәтләй: «1) телмәр тексын ойошҡанлыҡтың юғарыраҡ баҫҡысына күтәреүсе, телгә аралыҡ һәм ваҡыт рамкалары менән сикләнмәгән аралашыу үҙенсәлектәрен биреүсе үҫешкән яҙманың һис шикһеҙ булыуы; 2) билдәле кимәлдә эшкәртелгәнлеге, диалекттарҙан сағыштырмаса юғарыраҡ тороуы, тотороҡлолоҡҡа ынтылышы, традицияларға тоғро булыуы (был уның һөйләштәргә бүленеү процесы һәм төрлө осраҡлы үҙгәрештәр көслөрәк барған

[3] Мещерский Н. А. История русского литературного языка. Л., 1981. 14-се бит.

[4] Филин Ф. П. Истоки и судьбы русского литературного языка. М., 1981. 90 һәм 180—183-сө биттәр.

[5] Булаховский Л. А. Курс русского литературного языка. Ҡиев, 1952. Т. 1. 3-сө бит; Ларин Б. А. Лекции по истории русского литературного языка (X — середина XVIII в.). М., 1975. 8-се бит; Левин В. Д. Краткий очерк русского литературного языка. М., 1958. 3-сө бит; Горшков А. И. Теоретические основы русского литературного языка. М., 1983. 16-сы бит.

[6] Филин Ф. П. Күрһәтелгән хеҙмәт. 189-сы бит.

һөйләү телмәренән аныҡ айырымланыуына килтергән һәм килтерә), йәшерен кодификацияға, йәғни теге йәки был әҙәби документтарҙағы нормаларға, йүнәлеүе; 3) цивилизация сараһы сифатында сығыш яһауы, йәмғиәт һәм уның ағзаларындағы төркөмдәрҙең, ҡатламдарҙың ихтыяждарын хеҙмәтләндереүе»[7]. Бөтә әҙәби телдәр өсөн уртаҡ булған был айырмалыҡ һәм дөйөмлөк үҙенсәлектәрен тулыһынса башҡорт халҡының әҙәби теленә лә ҡаратып була.

Әҙәби тел — һәр дәүерҙең объектив һәм субъектив үҙенсәлектәре менән, конкрет социаль-экономик, ижтимағи-политик шарттарҙа халыҡтың материаль һәм рухи культураһының үҫеше менән бәйле ифрат ҡатмарлы система ул. Әҙәби тел тарихын өйрәнеү, күп кенә объектив дәлилдәрҙе иҫәпкә алыуҙан һәм системаға һалыуҙан тыш, яңы фәнни ҡараш нигеҙендә тикшерелә торған тел күренештәренә идара итеүсе законлылыҡтарҙы асыуҙы, эмпирик материалды дөйөмләштереү нигеҙендә яңы идеялар булдырыуҙы һәм асыҡлауҙы үҙ эсенә ала. Әҙәби тел тарихын өйрәнгәндә, халыҡ тарихын, уның ижтимағи-политик тормошон, фән һәм техникаһы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте кисергән үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алмай булмай. Төрлө жанрҙа ижад ителгән әҙәбиәт, бер яҡтан, йәшәп килгән әҙәби телдең үҙенсәлектәрен сағылдырһа, икенсе яҡтан, уның сараларын үҫтереүгә һәм артабан байыҡтырыуға булышлыҡ итә. Теләһә ниндәй халыҡтың әҙәби теле үҙ аллы итеп кенә түгел, ә «халыҡ һәм милләт теле» тигән киң тулы системаның тейешле бер өлөшө итеп ҡаралырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта әҙәби тел үҙ аллы система ла булып тора: ул матур әҙәбиәт теле, публицистика теле, фән һәм техника теле, официаль эш ҡағыҙҙары теле һымаҡ түбәнерәк кимәлдәге өлөшсәләрҙән тора. «Халыҡ һәм милләт теле» системаһы халыҡтың һөйләү һәм фольклор телдәрен дә үҙ эсенә ала. Әҙәби тел — һуңыраҡ барлыҡҡа килгән күренеш, һәм, үҙ аллы система буларак, уларҙан үҙенең төҙөлөшө, функцияһы һәм әһәмиәте менән киҫкен айырыла[8]. Ошо айырмалыҡ нигеҙендә халыҡ һөйләү теле тарихы менән әҙәби тел тарихы араһына сик ҡуйыла[9].

Хәҙерге совет тел белемендә әҙәби тел тарихын тикшереүҙең төҙөк нигеҙҙәре яҡшы уҡ эшләнгән, һәм ул төп өс аспектты үҙ эсенә ала: 1) әҙәби телдең формалашыу нигеҙҙәре һәм сығанаҡтары; 2) әҙәби тел нормаларының үҫеүе һәм юлға һалыныуы; 3) әҙәби телдәге функциональ стилдәрҙең формалашыуы һәм үҫеүе. Әҙәби телдең нормалашыу тарихы формаль, йәғни яҙыуҙың, дөрөҫ әйтелеш һәм дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләренең үҫеүе һәм камиллашыуы, һәм төҙөлөш, йәғни фонетик, грамматик, лексик нормаларҙың үҫеүе һәм камиллашыуы, кимәлдәрендә асыла.

Башҡорт әҙәби теленең тарихы ошоға тиклем системалы рәүештә тикшерелмәне, шулай ҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теленең барлыҡҡа килеүенә ҡағылышлы айырым ҡараштарҙы табырға була. Мәҫәлән, был мәсьәлә буйынса Ж. Ғ. Ҡиекбаевтың концепцияһы киң таралыу алды. Ж. Ғ. Ҡиекбаевтың фекере буйынса, Октябрь социалистик революцияһына тиклем башҡорт әҙәби теленең һүҙ оҫталары — сәсәндәр һәм йырсы-ҡурайсылар тарафынан эшкәртелгән һәм

---

[7] Филин Ф. П. Күрһәтелгән хеҙмәт. 189-сы бит.

[8] Был турала ҡарағыҙ: Галяутдинов И. Г. Некоторые методологические аспекты системного исследования башкирского литературного языка // Вопросы истории башкирского литературного языка. Уфа, 1985. 5—19-сы биттәр.

[9] Тенишев Э. Р. О построении истории народно-разговорного и литературного языков // Тюркологические исследования. М., 1976. 230-сы бит.

поэтик халыҡ ижадында сағылыш тапҡан һөйләү формаһы ғына булған; әҙәби телдең яҙма формаһы Октябрь революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килгән; хәҙерге башҡорт яҙма әҙәби теле барлыҡҡа килгәнгә тиклем башҡорттар өсөн рәсми яҙма тел булып иҫке төрки теле, дөрөҫөрәге уның региональ варианты — Урал — Волга буйы төрки теле йөрөгән[10]. Башҡорт яҙма әҙәби теленең формалашыу тарихы В. Ш. Псәнчин тарафынан да ошо позициянан сығып хәл ителә, йәғни яҙма әҙәби телдең барлыҡҡа килеү ваҡытын һанау нөктәһе итеп Октябрь революцияһының еңеүе алына[11]. Ж. Ғ. Киекбаев үҙенең хеҙмәтендә, Октябрь революцияһына тиклем башҡорт яҙма әҙәби теленең булмауын билдәләп тә: «Ләкин Октябрь революцияһына тиклем башҡорттарҙың, йәғни башҡорт йәмғиәтенең, яҙмаһы булмаған тип әйтеп булмай», — тип иҫкәртеүенә ҡарамаҫтан, үрҙәге сәбәптәргә нигеҙләнеп, айырым тарихсылар һәм филологтар башҡорт телен йәш яҙмалы телдәр иҫәбенә ҡараттылар. Башҡорт яҙмаһы тип, билдәле булыуынса, Ж. Ғ. Киекбаев ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән Урал — Волга буйы төрки телендәге текстарҙы атаны[12].

Яңы тикшеренеүҙәр нигеҙендә һуңғы йылдарҙа башҡорт әҙәби теленең тарихына икенсе төрлө ҡараш барлыҡҡа килде, ул баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәрҙә сағылыш тапты һәм йәмғиәт тарафынан ыңғай ҡаршы алынды[13].

Башҡорт әҙәби теленең был бәхәсле мәсьәләһен асыҡлау өсөн, иң алда әҙәби тел менән фольклор (халыҡ ижады) телдәре араһындағы айырмаларҙы билдәләп үтергә кәрәк. Фольклор әҫәрҙәренең теле халыҡ тарафынан быуаттар буйынса эшкәртелеүенә һәм билдәле бер кимәлдә ерле һөйләштәрҙән өҫтөн тороуына ҡарамаҫтан, уны түбәндәге сәбәптәр нигеҙендә әҙәби тел тип ҡарап булмай: беренсенән, теләһә ниндәй әҙәби телдең иң мөһим һәм кәрәкле билдәһе булып уның яҙмала сағылыуы һанала, сөнки яҙманың барлыҡҡа килеүе генә әҙәби телде тыуҙыра һәм үҫтерә, — фольклор иһә яҙмала сағылмайынса, яҙма текстһыҙ барлыҡҡа килә, йәшәй һәм үҫеш ала; икенсенән, һәр әҙәби тел стилдәр системаһынан тора, йәғни тарихи ерлектә барлыҡҡа килгән һәм йәшәү сфераһына ярашлы рәүештә үҙенсәлекле телмәр ҡоролошо, телмәр сараларының йыйылмаһы һәм берҙәмлеге менән айырылған төрҙәрҙән тора (мәҫәлән, матур әҙәбиәт, публицистика, фәнни, рәсми эш ҡағыҙҙары стилдәре һымаҡ), — фольклор теле иһә стилдәр йәһәтенән бүленмәй, тик уның саралары жанр үҙенсәлектәренән сығып ҡына үҙгәреш алырга мөмкин; өсөнсөнән, әҙәби тел билдәле бер тарихи осорҙа китап һәм һөйләү сфераларында ҡулланыла башлай, ә фольклорҙа быны булыуы мөмкин түгел. Фольклор теле, яҙмаһыҙ тел булараҡ, тик ауыҙ-тел сфераһында ғына йәшәй, тарихи тикшереүгә бирелмәй, сөнки уның эҙмә-эҙ яҙылып килгән ҡомартҡылары юҡ, ҡағыҙға яҙылған булһа ла, ҡайһы осорҙа яҙылып алынһа, тик шул осорҙоң ғына һөйләү теле үҙенсәлектәрен сағылдыра. Ошо сәбәптәр арҡаһында фольклор теле менән әҙәби телде тиң итеп ҡарап булмай, Ф. П. Филин әйтмешләй: «Фольклор менән әҙә-

---

[10] Киекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө, 1966. 19—29-сы биттәр.

[11] Псянчин В. Ш. История формирования башкирского литературного письменного языка: Автореф. дис... канд. филол. наук. Ҡазань, 1965, 23—24-се биттәр.

[12] Киекбаев Ж. Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 28-се бит.

[13] Хөсәйенов Ғ. Б. Урал — Волга буйы төрки әҙәби теле тарихына ҡарата // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1976, № 6. 33—37-се биттәр; Письменные памятники Башкирии: (историко-филологические исследования). Уфа, 1982; Вопросы истории башкирского литературного языка. Уфа, 1985.

биәтте һүрәтләү образлылығы берләштерә, ә тел үҙенсәлектәре айыра»[14]. Шул уҡ ваҡытта халыҡ ижады әҫәрҙәре башҡорт әҙәби теленең әһәмиәтле сығанаҡтарынан иҫәпләнә, һәм ул әҙәби телдең стилдәренә, телмәр сараларына ныҡ йоғонто яһай.

Милли осорға тиклем башҡорттар өсөн яҙма әҙәби тел булып уйғыр-уғыҙ һәм сығатай яҙма традицияларына нигеҙләнгән һәм төрки халыҡтарын бер тигеҙ хеҙмәтләндергән төрки теле һаналған. Башҡорт һәм татар халыҡтары араһында уның региональ (урындағы) варианты — Урал — Волга буйы төрки теле таралған була. Урал — Волга буйы төрки теленең барлыҡҡа килеүенә һәм артабан үҫеүенә башҡорт һәм татар халыҡтарының йәнле һөйләү телмәре, бай халыҡ ижады әҫәрҙәренең теле ифрат ҙур йоғонто яһаған. Шул уҡ ваҡытта беҙ башҡорт һәм татар халыҡтарының яҙмаға булған мохтажлыҡтарын хеҙмәтләндереүсе Урал — Волга буйы төрки теленең ике төрө тураһында һүҙ алып бара алабыҙ. Төрки теленең был ике төрө XIX быуаттың икенсе яртыларына тиклемге башҡорт һәм татар халыҡтарының дөйөм әҙәбиәте ерлегендә матур әҙәбиәт стилендә асыҡ сағылмаһа ла, рәсми эш ҡағыҙҙары һәм хроникаль йылъяҙма стилдәрендә асыҡ сағылыш таба. Улар иң алда төҙөлөш элементтары — лексик ҡоролошо һәм ҡайһы бер телмәр саралары менән айырылалар.

Урал — Волга буйы төрки теле, поливалент тел булмаһа ла, йәғни башҡорт йәмғиәтенең һәм бөтә социаль ҡатламдарҙың ихтыяждарын тулыһынса хеҙмәтләндермәһә лә, башҡорт халҡы өсөн ят тел булманы. Унда башҡорт халыҡ йәнле һөйләү теленең төп һүҙлек фонды һәм грамматик ҡоролошоноң иң әһәмиәтле үҙенсәлектәре сағылыш тапты. Боронғо стилистик һәм грамматик сараларҙың, фонетик үҙенсәлектәрҙең булыуы, сит тел элементтарының (ғәрәп һәм фарсы телдәренән) күплеге — былар милләткә тиклемге әҙәби телдәргә хас булған күп быуатлы традицияларҙың һөҙөмтәһе. Урал — Волга буйы төрки теле үҙ нәүбәтендә халыҡ йәнле һөйләү телмәренә йоғонто яһап, унда үҙенең күп кенә һыҙаттарының эҙен ҡалдырҙы.

Шулай итеп, Башҡортостанда милләт барлыҡҡа килгәнгә тиклем (XIX быуаттың аҙағынаса) тел шарттары түбәндәгесә була: башҡорт халҡының аралашыуға булған ихтыяждарын ике төрлө тел хеҙмәтләндерә — ғәҙәттәге көнкүреш аралашыу теле булып ерле һөйләштәрҙән торған йәнле һөйләү телмәре, ә яҙма әҙәби тел булып Урал — Волга буйы төрки теле йөрөй. Яҙма әҙәби телдә төрлө эш ҡағыҙҙары, хаттар, шәжәрәләр, матур әҙәбиәт, тарих, география һәм башҡа өлкәләрҙә текстар ижад ителә. Был ике телдән тыш, дини тел булып (ҡөрьән, доғалыҡтар һ. б.) классик ғәрәп теле йөрөй.

Башҡорт әҙәби телен өйрәнеүҙә әһәмиәтле мәсьәләләрҙең береһе булып уның үҫеш тарихын осорҙарға бүлеү һанала. Әҙәби телдең тарихын осорҙарға бүлеү әҙәби тел (уның фонетик ҡоролошо, грамматикаһы, һүҙлек составы) кисергән үҙгәрештәргә генә нигеҙләнмәйенсә, ә ошо үҙгәрештәрҙең йәмғиәт тормошондағы, башҡорт халҡының мәҙәниәт һәм әҙәбиәтендәге үҫеш менән бәйләнешен асырға тейеш.

Ж. Ғ. Ҡиекбаев башҡорт әҙәби теленең үҫешендә өс осор билдәләй: 1) XV—XVI быуаттарҙан алып XIX быуаттың икенсе яртыһына тиклемге — әҙәби тел классик халыҡ йырҙарында, героик эпостарҙа, легендаларҙа, әкиәттәрҙә һәм халыҡ ижадының башҡа әҫәрҙәрендә сағылған осор. Был осорҙа

---

[14] Филин Ф. П. Күрһәтелгән хеҙмәт. 186-сы бит.

башҡорт халҡының рәсми яҙма теле булып Урал — Волга буйы төрки теле йөрөй; 2) XIX быуаттың икенсе яртыһынан Октябрь революцияһына тиклемге — дөйөм башҡорт теле нигеҙендә яҙма булдырыуға ынтылыш осоро. Был осорҙоң аҙағында — XX быуаттың башынан алып Октябрь революцияһына тиклем башҡорт йәмғиәтенең рәсми яҙма теле булып үҙенең лексик-грамматик үҙенсәлектәре менән иҫке төрки теленә яҡын тороусы иҫке татар теле йөрөй; 3) Октябрь революцияһының тәүге йылдарынан алып (1919—1922 йылдар) бөгөнгө көнгә тиклемге — дөйөм башҡорт һөйләү теленә нигеҙләнгән яҙма әҙәби телдең барлыҡҡа килеү осоро [15].

Ғ. Б. Хөсәйенов башҡорт әҙәби теленең үҫешендә ике осор билдәләй: 1) XIII—XIV быуаттарҙан алып Октябрь революцияһына тиклемге осор; 2) 1919—1922 йылдарҙан алып бөгөнгө көнгә тиклемге осор. Беренсе осорҙо ул икегә бүлә: 1) XIII—XIV быуаттарҙан алып XIX быуаттың аҙағына тиклем, был ваҡытта әҙәби тел булып ҡыпсаҡ теле йоғонтоһондағы ырыу-ҡәбилә теле нигеҙендә барлыҡҡа килгән Урал — Волга буйы төрки теле йөрөй; 2) XIX быуаттың аҙағынан Октябрь революцияһына тиклем, был ваҡытта яҙма тел булып татар яҙма әҙәби теле йөрөй. Октябрҙән һуңғы осорҙо ул башҡорт милләтенең милли әҙәби теле осоро тип атай [16].

Беҙҙең ҡарамаҡҡа ла, башҡорт әҙәби теленең үҫеү тарихын ике осорға бүлеп ҡарарға кәрәк: милләткә тиклемге осор (XIII быуаттан алып XIX быуаттың аҙағынаса) һәм милли осор (XX быуаттың башынан алып бөгөнгө көнгәсә). Был ике осор әҙәби телдең һәм әҙәбиәттең үҫеүенә ярашлы рәүештә айырым-айырым этаптарға бүленә. Беренсе осор дүрткә бүленә: 1) XIII быуаттан алып XVI быуаттың урталарына, йәғни Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуына тиклемге — был ваҡытта үҙенең лексик-грамматик күрһәткестәре менән Урта Азия төркиенә яҡын торған Урал — Волга буйы төрки теле әҙәби тел була; 2) XVI быуаттың уртаһынан XVIII быуатҡа тиклемге — был ваҡытта Урал — Волга буйы төрки телендә, бигерәк тә уның рәсми документтар һәм йылъяҙма-хроникаль стилдәрендәге әҙәбиәтендә, ҡыпсаҡ элементтары, шулай уҡ рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр күбәйә; 3) XIX быуаттың беренсе яртыһы — был ваҡытта Урал — Волга буйы төркиендә суфыйсылыҡ әҙәбиәте үҫеше, әҙәби телдең, халыҡ һөйләү телмәренең һәм халыҡ ижады телдәренең үҙ-ара мөнәсәбәттәре көсәйә; 4) XIX быуаттың икенсе яртыһы — был ваҡытта мәғрифәтселек әҙәбиәте үҫеш ала, Урал — Волга буйы төрки телендә төп башҡорт элементтары арта, әҙәби телдең яңы стилдәре формалаша һәм үҫеш ала. Башҡорт милли әҙәби теленең осоро шулай уҡ дүрткә бүленә: 1) XIX быуаттың аҙағынан Октябрь революцияһына тиклемге — был башҡорт милләте формалашыуының башланғыс осоронда әҙәби тел сифатында Урал — Волга буйы төрки теле йөрөй, ә матбуғат ихтыяждарын Урал — Волга буйы төрки теленең үҙенсәлектәренән арынып бөтмәгән иҫке татар теле хеҙмәтләндерә, әҙәби телдә демократлашыу процесы киңәйә һәм төп башҡорт лексик-грамматик күрһәткестәре арта; 2) 20-се йылдар — был ваҡыт халыҡ йәнле һөйләү теле, Урал — Волга буйы төрки теле һәм фольклор теле йоғонтоһонда хәҙерге башҡорт әҙәби теле формалаша; 3) 1930—1940 йылдар — был ваҡытта хәҙерге башҡорт әҙәби теле тиҙләшкән үҫеш ала, уның функциональ

---

[15] Ҡиекбаев Ж. Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 32—33-сө биттәр.

[16] Хөсәйенов Ғ. Б. Урал — Волга буйы төрки әҙәби теле тарихына ҡарата // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1976. № 6. 33-сө бит.

стилдәре яңы нигеҙҙә тулыһынса ойоша; 4) 50-се йылдарҙан алып бөгөнгө көнгәсә — был ваҡытта хәҙерге башҡорт әҙәби теле нығыныу процесы кисерә, уның нормалары юлға һалына, артабан үҫешә, әҙәби телдең рус әҙәби теле һәм СССР-ҙағы башҡа халыҡтарҙың әҙәби телдәре менән мөнәсәбәттәре көсәйә.

Тик Совет осоронда ғына хәҙерге башҡорт әҙәби теле үҙенең өн-яҙма үҙенсәлектәренә буйһондоролған бер нисә алфавиттан файҙалана. Октябрь революцияһына тиклем һәм уның тәүге көндәренән алып 20-се йылдарҙың аҙағынаса башҡорт әҙәби теле ғәрәп алфавитына нигеҙләнгән яҙыуҙы файҙалана. Был яҙыу үҙенең йәшәү осоронда бер нисә тапҡыр үҙгәреш кисерә. 30-сы йылдарҙа яҙыу латин алфавитына нигеҙләнеп ҡорола, ә 40-сы йылдарҙың башынан уны бөгөнгө көндә лә файҙаланылған рус алфавиты нигеҙендәге яҙыу алмаштыра.

Октябрь революцияһына тиклем Урал — Волга буйы төрки теле өсөн махсус рәүештә эшләнгән һәм дөйөм ҡабул ителгән тулы орфографик һәм орфоэпик ҡағиҙәләр булмай: дөрөҫ яҙыу һәм дөрөҫ уҡыу быуаттар буйына килгән традицияларға буйһонған була.

Совет власының тәүге көндәренән башлап, бигерәк тә 1919 йылда Башҡорт автономиялы республикаһы төҙөлгәс, хәҙерге башҡорт әҙәби телен булдырыу мәсьәләләре менән бер ҡатарҙан уның дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен эшләү өҫтөндә лә әҙерлек алып барыла. Башҡорт әҙәби теленең беренсе проекты 1923 йылда орфография комиссияһы тарафынан ҡарала, раҫлана һәм бер аҙҙан матбуғатта баҫтырылып сығарыла [17]. Был беренсе башҡорт әҙәби теленең орфографияһы, ҙур ғына етешһеҙлектәре булыуға ҡарамаҫтан, орфография ҡағиҙәләренең үҫеүе өсөн нигеҙ булды. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренең артабан камиллаштырылыуы, алфавиттың өҙлөкһөҙ алмашынып тороуы хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфографияһын һәр ваҡыт яңынан ҡарауҙы һәм үҙгәрештәр индереүҙе талап итте. Шуға сәбәпле орфографияның үҙгәртелгән ҡағиҙәләре эшләнеп, бер-бер артлы баҫылып сыға торҙо [18].

Башҡорт әҙәби теленең бөгөнгө орфографияһы дөйөм халыҡ телмәренең һөйләү нормаларына бик яҡын, йәғни ул фонетик принципҡа нигеҙләнгән. Бынан башҡа, унда морфологик, тарихи-традицион, символик принциптарҙың да элементтары бар. Ләкин әҙәби телдең орфографияһын ни тиклем генә камиллаштырһаң да, ундағы проблемалар бөтмәй, яңынан тыуып тора. Бындай осраҡтарҙы дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләре иҫәпкә алып, юлға һалырға тейеш. Хәҙерге орфография әҙәби телде ҡулланыуҙың бөгөнгө талаптарына яуап бирәме — төп мәсьәлә шунда тора. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфографияһының төп лексик, фонетик, грамматик күренештәрҙе эҙмә-эҙ регламентлаған ҡағиҙәләре бар. Улар, башҡорт әҙәби теленә яңы лексик берәмектәрҙе һәм грамматик күренештәрҙе ҡабул итеү өсөн юлды япмау менән бергә, йәшәп килгән сараларҙы төрлөсә аңлауҙы сикләй. Йәшәп килгән нормалар грамотаға эйә булыуҙы еңеләйтерә, дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен тулыһынса үҙләштерергә булышлыҡ итә,

---

[17] Яңы юл. 1924. № 1 (9). 28—30-сы биттәр.

[18] Башҡортса яҙыу ҡоралы. Өфө, 1924: Башҡорт теле имләһе. Өфө, 1925; Белем. 1928. № 5—6. 43—45-се биттәр; Башҡорт теле имләһе. Өфө, 1930: Башҡорт теле орфографияһы. Өфө, 1934; Башҡорт теле орфографияһы. Өфө, 1939; Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө. 1941: Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1951; Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1982.

әйтелергә тейешле фекерҙе әҙәби телдең төрлө стилдәрендә дөрөҫ һәм аңлайышлы итеп яҙырға ярҙам итә.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең барлыҡҡа килгән һәм ойошҡан осоронда (20-се йылдарҙа) уның дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләре лә булмай, шуға күрә яҙма әҙәби тел үҙенең саралары менән йәнле һөйләү телмәренән ныҡ ҡына айырылған була. Йәнле һөйләү телмәре ерле һөйләштәргә йәки ерле **һөйләш менән** Урал — Волга буйы төрки теле үҙенсәлектәре ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән телмәргә нигеҙләнгән була. Ғөмүмән, йәнле аралашыуҙа диалект саралары өҫтөнлөк иткән.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең киң таралыуы һәм төрлө сфераларҙа интенсив ҡулланылыуы нигеҙендә уның һөйләү формаһы барлыҡҡа килеүгә мөмкинлектәр тыуҙы. Был процестың көсәйеүенә, Ә. Ә. Юлдашев әйткәнсә, «башҡорт дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренең һөйләү нормаларына яҡын тороуы, башҡорт фонетикаһының үҙенсәлектәрен яҡшы һәм тулы сағылдырыуы, аңлауға һәм үҙләштереүгә еңел булыуы» [19] көслө булышлыҡ итә. Әҙәби телдең ерле һөйләштәргә, уларҙың төп айырмалыҡтарына йоғонтоһо көсәйгәндән-көсәйә бара. Тик орфоэпия ҡағиҙәләрен кодификацияламайынса, йәғни дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләрен тәртипкә һалып законлаштырмайынса, әҙәби телдә һөйләү формаһының үҫеүен күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

Башҡорт орфоэпияһының ҡағиҙәләре беренсе булып Ж. Ғ. Ҡиекбаев тарафынан эшкәртелде [20]. Башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәрендә һүҙҙәрҙәге өндәрҙең төрлө үҙгәрештәрен, ритмик төркөмдәрҙе, һүҙ, фраза, логик, эмфатик (хис-тойғо) баҫымдарҙы, телмәр мелодикаһын ентекле өйрәнеү, уларҙы тикшереү һәм йомғаҡлау нигеҙендә Ж. Ғ. Ҡиекбаев хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һөйләү ҡағиҙәләренең төҙөк системаһын булдырҙы.

Бөгөнгө көндә беҙ башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһы һәм уның төп ҡағиҙәләре барлыҡҡа килде һәм нығынды, тип ышаныслы рәүештә әйтә алабыҙ. Был ҡағиҙәләрҙе республикалағы грамотаға эйә булған һәм башҡорт телендә һөйләшкән халыҡтарҙың күпселек өлөшө дөрөҫ һәм уңышлы ҡуллана.

Шул уҡ ваҡытта яҙма әҙәби телдең йоғонтоһонда йәки дөйөм һөйләү культураһының үҫеүе нигеҙендә башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһында өҙлөкһөҙ үҙгәрештәр булып тора. Бындай үҙгәрештәр башҡорт әҙәби теленең һөйләү нормаларын эшкәрткәндә иҫәпкә алынырға тейеш.

Әҙәби телдең дөрөҫ һөйләү һәм яҙыу нормаларын нығытыуҙа һәм киң таратыуҙа мәктәп, матбуғат, театр, телевидение, радио бик ҙур урын ала. Әҙәби телдең стилдәрен, уларҙың сараларын байыҡтырыуҙа башҡорт яҙыусыларының, фән һәм культура эшмәкәрҙәренең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ ҙур.

Бай һүрәтләү һәм биҙәкләү сараларына, үҫешкән функциональ стилдәргә, ҡағиҙәләре эшкәртелгән һөйләү һәм яҙыу төрҙәренә эйә булған хәҙерге башҡорт әҙәби теле дөйөм халыҡ теленең иң юғары формаһына әүерелде.

Ғәрәп яҙыуындағы миҫалдар һәм китап исемдәре хәҙерге башҡорт алфавиты нигеҙендәге транскрипцияла бирелә.

---

[19] Юлдашев А. А. Орфография башкирского языка // Орфография тюркских литературных языков СССР. М., 1973. 89-сы бит.

[20] Ҡиекбаев Ж. Ғ. Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө, 1964.

# XIX БЫУАТҠА ТИКЛЕМГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ТАРИХЫ

*Беренсе глава*

## БОРОНҒО ТӨРКИ, УРТА БЫУАТ ҠОМАРТҠЫЛАРЫНЫҢ ТЕЛЕ ҺӘМ УРАЛ — ВОЛГА БУЙЫ ТӨРКИ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ

### *1. Боронғо төрки яҙма ҡомартҡылар һәм уларҙың башҡорт теленә мөнәсәбәте*

Әҙәби тел нормалары телдең һәм уның стилдәренең оҙайлы һәм ҡатмарлы тарихи үҫеше һөҙөмтәһендә формалаша.

Башҡорт әҙәби теле үҙенең тамырҙары менән боронғо төрки яҙма ҡомартҡылары теленә барып тоташа. Башҡорт әҙәби теленең нигеҙендә был ҡомартҡылар теленең лексик, фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәре сағылыш таба.

Башҡорттарҙың килеп сығышын тикшереүсе ғалимдар, күсенеп йөрөүсе һун ҡәбиләләре II—IV быуаттарҙа Көнсығыш Европаға, шул иҫәптән хәҙерге Башҡортостандың көньяҡ өлөшөнә лә, үтеп инә; башҡорт халҡының формалашыуы Алтай, Көньяҡ Себер һәм Урта Азияның төрки телле ҡәбиләләре менән бәйле, тип иҫәпләй[1]. Шуға ла «һундарҙың бик ҙур ҡәбилә берләшмәһенә ингән төрки телле ҡәбиләләр урындағы төп халыҡты тел яғынан үҙҙәренә оҡшаш итеүгә көслө тәьҫир яһай. Был күренеш элгәрге тимер эпохаһында Себерҙән боронғо төрки телле ҡәбиләләрҙең ошонда үтеп инеү осорҙарында уҡ башланған була»[2]. Төрки ҡәбиләләренең теле «Урал буйындағы ҡәбиләләр, йәғни хәҙерге фин-уғыр халыҡтарының был крайҙа төпләнеп йәшәгән ата-бабалары... һәм савроматтар (сарматтар), телдәренән әкренләп өҫтөнлөк ала бара». Шуныһы характерлы: «башҡорттарҙың килеп сығышында болғар ҡәбиләләре, шулай уҡ уғыҙҙар, печенегтар һәм айырыуса Ҡыпсаҡ союзына ҡараған ырыу-ҡәбилә берләшмәләре ҡатнашыу сәбәпле»[3], был процесс һуңыраҡ та дауам итә.

---

[1] Аристов Н. А. Заметки об этническом составе тюркских племен и народностей // Живая старина. 1896. Вып. III—IV. 453-сө бит; Руденко С. И. Башкиры. М.; Л., 1955. 328—352-се биттәр; Мажитов Н. А. Южный Урал в VII—XIV вв. М., 1977; Археология СССР: Степи Евразии в эпоху средневековья. М., 1981. 23—28-се биттәр; Халиков А. Х. Основные этапы тюркизации Среднего Поволжья и Приуралья // Фольклор, литература и история Востока. Ташкент, 1984. 416-сы бит.

[2] Очерки по истории Башкирской АССР. 1956. Т. I. Ч. 1. 30-сы бит.

[3] Шунда уҡ.

Башҡорт теленең формалашыу процесы V—X быуаттарҙа Урал буйындағы ҡәбиләләрҙең этник тарихында күсенеп йөрөүсе бик күп халыҡтарҙың ҡатнашыуы менән бәйле. Улар бер-бер артлы төрлө ҡәбилә берләшмәләрен, атап әйткәндә, Печенег-уғыҙ ҡәбилә союзын һәм Ҡоман (Ҡыпсаҡ) берләшмәһен, ә һуңғараҡ Болғар һәм Алтын Урҙа дәүләттәрен төҙөй.

Һәр бер әҙәби телдең тарихы тулыһынса яҙма ҡомартҡыларға нигеҙләнә. Был тарих, — асылда, яҙма тел тарихы, йәғни төрлө типтағы яҙма ҡомартҡыларҙы ҡулланыу тарихы ул [4]. Әҙәби телдең тамам формалашып етеүе өсөн уның яҙма рәүештә тупланыуы, йәғни әҙәбиәте булыуы, кәрәк. Шундай әҙәбиәт булған осраҡта ғына әҙәби тел тураһында һүҙ йөрөтөргә хаҡыбыҙ бар [5].

Төрки әҙәби телдәренең формалашыуы һәм үҫеше, уларҙың нормаларының барлыҡҡа килеүе — ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Ҡайһы бер төрки халыҡтарының әҙәби телдәре алдараҡ үҫешеп, тамам формалашыу кимәленә етһә, икенселәре байтаҡҡа һуңлай. Бына шуға ла бөтә төрки халыҡтарының әҙәби телдәре туранан-тура руна яҙыулы боронғо төрки яҙма ҡомартҡылары («Күлтәгин хөрмәтенә иҫтәлек», «Тоньоҡуҡ хөрмәтенә иҫтәлек» һ. б.), уйғыр яҙыулы («Манихейҙарҙың тәүбә ҡылыу доғалыҡтары», «Алтын яруҡ» һ. б.) һәм ғәрәп яҙыулы ҡомартҡылар (Й. Баласағунлының «Ҡутадғу билиг», йәки «Ҡотлолок белеге» [7], Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуан әл-лөғәт әт-төрк», Әхмәт Юғнаҡиҙың «Атабат-әл-хаҡаиҡ» әҫәрҙәре һ. б.) теленә ҡарай, тип әйтеү дөрөҫ булып бөтмәҫ, күрәһең. Шул уҡ ваҡытта боронғо төрки осоронда юғары художество оҫталығына эйә булған әҫәрҙәр ижад ителеүен дә иҫәпкә алырға кәрәк. Унан һуңғы осорҙарҙа улар төрлө төрки халыҡтарының әҙәби нормалары үҫеүенә булышлыҡ итә.

Башҡорт ғалимдарының һуңғы йылдарҙағы тикшеренеү һөҙөмтәләре башҡорт теленең боронғо төрки ҡомартҡылары теле менән генетик яҡтан бәйләнеш үҙенсәлектәрен табырға, унда билдәле бер уртаҡ элементтар һаҡланыуын асыҡларға мөмкинлек бирҙе [8].

---

[4] Серебренников Б. А. Об основных отличиях истории строевых элементов языка от истории литературного языка // Советская тюркология. 1981. № 4. 3-сө бит.

[5] Конрад Н. И. Вопросы формирования и развития национальных языков // Тр. Ин-та языкознания АН СССР. 1960. Т. X. 49-сы бит.

[6] Малов С. Е. Памятники древнетюркской письменности. М.; Л., 1951. 224-се бит.

[7] Иванов С. Н. Благодатное знание. Л., 1983.

[8] Ахметов М. А. Глагол в языке орхоно-енисейских памятников в сравнительном плане с современным башкирским языком: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Алма-Ата, 1970; ш у л у ҡ: Деепричастие в языке орхоно-енисейских памятников и их отношение к современному башкирскому языку // Советская тюркология. 1974. № 3. 39—51-се биттәр; ш у л у ҡ: Глагол в языке орхоно-енисейских памятников. Саратов, 1978; Аҙнабаев Ә. М., Псәнчин В. Ш. Башҡорт теленең тарихи морфологияһы. Өфө, 1976; Псәнчин В., Әхмәтов М. Боронғо төрки яҙма ҡомартҡылары тураһында // Сов. Башҡортостаны, 1968. 12 декабрь; ш у л у ҡ: Боронғо һүҙҙәр телдә нисек һаҡлана? // Сов. Башҡортостаны, 1969. 22 октябрь һ. б.

Башҡа төрки телдәрендәге һымаҡ, дөйөм башҡорт һәм башҡорт әҙәби телендә лә боронғо төрки ҡомартҡылары телендә булған бер үк мәғәнәле күп кенә лексик берәмектәр һаҡланған. Мәҫәлән: *ай, алты, ала, ата-«атау», аш, аңла-, бай, бел-, буш, ҡыйын, тамыр* һ. б. Боронғо төрки лексикаһының бер ни тиклем өлөшө хәҙерге башҡорт әҙәби телендә билдәле бер фонетик үҙгәрештәр кисергән: *ач > ас, адырыл- > айырыл-, аз > аҙ, эр > ир, есид- > ешит- > ишет-, меңгү > мәңге, йүгүр- > йүгер-, йурт > йорт, кел- > кил-, кўчлүг > көслө, улуг > оло, сана- > һана-, түш- > төш-, төшөү, семиз > һимеҙ, уч- > ос-, осоу, ур- > ор-, ороу, һуғыу* һ. б.

Үҙгәрештәр һүҙҙең мәғәнәһендә лә күҙәтелә. Мәҫәлән, тарихи үҫеш процесында ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнәләре киңәйә (*бин-* «һыбай менеп ултыр-» (БТҺ) *>*мен-* «ғөмүмән мен-, күтәрел-»; *ен-* «тауҙан төш-» (КТҙ, МҠ) > *ин-* «ин-»: *өйгә ин, һыу ин, эшкә ин-* «эшкә ин-»; *сөкүр-* «тубыҡландыр-» (ҠБ) > *сүк-*), икенселәренеке, киреһенсә, тарая (*сағ* «шат, таҙа, уңышлы, һаҡ; саф, яҡшы» (ҠБВ) > *һаҡ; керү* «кире, киреһенсә; ҡаршы; файҙаланылмай торған» (КТҙ) > *кире*; *тутку* «һап, тотҡа; ҡулланма» (ҠБВ) >*тотҡа* һ. б.), ә өсөнсөләренең мәғәнәләре тулыһынса үҙгәрә (*уҫаллыҡ* «ғәмһеҙлек, вайымһыҙлыҡ» (ҠБ) > *уҫаллыҡ; илгәрү* «элек, әүәл» (Рабғ.) > *элгәре; адаш* «иптәш» (ҠБ)>*аҙаш* һ. б.).

Ҡайһы бер боронғо төрки һүҙҙәре кеше исемдәрендә һәм ер-һыу атамаларында һаҡланған: *алп* «батыр, ҡаһарман» (КТб) > *алпамыша > Алпамыша; Урмияз, Кубияз, Бозаяз, Малояз* һ. б. Был исем һәм атамаларҙың икенсе компоненты боронғо төрки телендәге *йазы* «дала, тигеҙ урын» һүҙенә барып тоташа.

Боронғо төрки һүҙҙәре, һүҙ яһаусы ялғауҙар ҡабул итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килтергәндәр: *атағ* «атама, ҡушамат дан»; (Йәнәсәй)>*атаҡлы, маг* «дан, маҡтау, хөрмәт, ихтирам» (КТҙ)>*маҡтау, маҡтаулы* һ. б.

Ҡайһы бер башҡорт тамғалары руна алфавитының хәрефтәрен хәтерләтә. Улар араһында түбәндәге тамғалар иғтибарға лайыҡлы:

ᛟ — ҡойошҡан

X — әүернә (киндер һуғыу станогының бер өлөшө)

Y — һәнәк

ᛉ — һуйыр аяҡ[9].

---

* Ҡыҫҡартмалар: БТҺ — Боронғо төрки һүҙлеге; КТҙ — «Көлтәгин хөрмәтенә иҫтәлек»тең ҙур тексы; КТб — «Көлтәгин хөрмәтенә иҫтәлек»тең бәләкәй тексы; МҠ — Мәхмүт Ҡашғари; ҠБ — «Ҡудатғу билиг»; ҠБВ — «Ҡутадғу билиг» (Веналағы ҡулъяҙма); Рабғ. — Рабғузи хеҙмәте.

[9] Ахметов Р. Б. О генезисе башкирских тамг // Научная сессия по этногенезу башкир. Уфа, 1969. 117—119-сы биттәр.

## Руна яҙмаһының хәрефтәре
## һәм башҡорт тамғаларының сағыштырма таблицаһы



*2. Боронғо һәм урта быуат әҙәби ҡомартҡыларының теле*

Руна яҙма ҡомартҡыларының теле төрки ҡәбиләләре әҙәби теленең боронғораҡ варианттарының береһе булып һанала. «Был телде төрки халыҡтарының төрлө ҡәбиләләре, йәғни ҡәбиләләр союздары, файҙалана, ә ул... уғыҙ һәм уйғыр элементтарының ҡушылмаһы була» [10].

Һуңғараҡ боронғо уйғыр әҙәби теле лә формалаша. Ул артабан аҙаҡҡыраҡ осорҙағы күп кенә төрки әҙәби телдәренең барлыҡҡа килеүендә һәм үҫеүендә һиҙелерлек роль уйнай.

Руна һәм уйғыр яҙмалы ҡомартҡыларҙың тел элементтары күсәгилешле Й. Баласағунлының «Ҡутадғу билиг» әҫәрендә (XI быуат), шулай уҡ әҙип Әхмәт Юғнаҡиҙың уға тел яғынан яҡын булған «Атабат-әл-хаҡаиҡ» исемле ҡомартҡыһында (XII быуат) осрай. «Улар ғәмәлдә ислам культураһы йоғонтоһонда барлыҡҡа килеп, Ҡөнсығыш һәм Көнбайыш Төркөстанға таралған, артабан Хорезм-Алтын Урҙа дәүләтендә үҫә һәм үҙгәрә барған әҙәби тел үрнәге ролен үтәйҙәр» [11]. Үрҙә әйтелгән ҡомартҡылар теленең характерлы үҙенсәлектәре Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһында (XIII быуат) артабан үҫтерелә. Быны Рабғузиҙың «Ҡисас-әл-әнбийә» исемле етешһеҙлектәр хаҡындағы хикәйәһендә (XIV быуат), хатта XV быуатта үрнәк булырлыҡ «Тәзкирә-йи әүлийә» һәм «Мирадж намә», шулай уҡ «Ташхис-ул-инсан» манускрипты [12] һымаҡ әҫәрҙәрҙә «уртаҡ лексик, атап әйткәндә, архаик элементтар булыуы раҫлай» [13]. Был ҡомартҡыларҙа телмәр ике төрлө формала бирелә. Мәҫәлән, «Ҡутадғу билиг», «Атабат-әл-хаҡаиҡ», «Йософ һәм Зөләйха» шиғыр менән яҙылған булһа, «Ҡисас-әл-әнбийә», «Ташхис-ул-инсан» — прозаик әҫәрҙәр. Уларҙа ҡараханлы-уйғыр, хорезм-алтын урҙа һәм көнсығыш-төрки үҙенсәлектәрен үҙләштергән конгломерат әҙәби телдең тамам формалашыуы күҙәтелә. Төрлө ваҡыттарҙа яҙылған был ҡомартҡыларҙа әҙәби телгә бәйле уртаҡ һыҙаттарҙы ла һәм шулай уҡ теге йәки был авторҙың йә әҫәрҙе күсереп яҙыусының ниндәй этник төркөмгә ҡарауынан, уның тел үҙенсәлегенән килгән айырмалыҡтарҙы ла табырға була.

Яҙма сығанаҡтарҙың бер-береһенә яҡын территорияла таралыуы, тел яғынан оҡшашлығы уларҙың күбеһенең ҡәрҙәш төрки халыҡтары өсөн уртаҡ байлыҡ булыуын күрһәтә. Бына шуға ла үрҙә телгә алынған ҡомартҡыларҙы тик бер халыҡтыҡы ғына тип ҡарау хата булыр ине. Күренекле тел белгесе Э. В. Севортян теге йәки был яҙма ҡомартҡыларҙы һәм уларҙың ҡайһы бер фактарын ниндәйҙер хәҙерге төрки теленә «тағырға» маташыуҙың уңыш-

---

[10] Тенишев Э. Р. О наддиалектном характере тюркских рунических памятников // К 70-летию акад. А. Н. Кононова. Л., 1976. 170—171-се биттәр.

[11] Насилов В. М. Язык средневековых тюркских памятников уйгурского письма // Вопросы языкознания. 1971. № 1. 104-се бит.

[12] Наджип Э. Н. О языке памятника начала XIII в. «Кысса-и Юсуф» Али // Советская тюркология. 1976. № 2. 79-сы бит.

[13] Насилов В. М. Күрһәтелгән хеҙмәт. 104—105-се биттәр.

һыҙ һәм бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән булыуы хаҡында әйтеп үткәйне инде [14].

XI—XV быуаттарҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙең теле уларҙан алдағы Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларының теленән нимәһе менән айырыла һуң? Бында, барыһынан элек, боронғо төрки теленә хас булған *-иг//-ығ* ялғаулы төшөм килеш формаһының ҡулланылышта ҡыпсаҡ телдәрендәге *-ин//-ын//-н,* шулай уҡ уғыҙ телдәрендәге *-и//-ы* аффикстарынан ҡалыша башлауын күрһәтергә кәрәк. «Ташхис-ул-инсан», «Тәзкирә-йи әүлийә» һәм «Мирадж намә» әҫәрҙәрендәге кеүек «Ҡисас-әл-әнбийә»лә төшөм килештә *-г//-ғ* ялғауы ҡулланылмай. Урта быуаттар осорондағы әҙәби ҡомартҡыларҙың телендә уғыҙ телдәренең йоғонтоһо һиҙелә. Мәҫәлән, төбәү килештә *-гә//-ға, -кә//-ҡа* һәм *-а//-ә* ялғауҙарының икеһе лә йөрөй *(адамгә//адама «кешегә», ергә//ерә «ергә»* һ. б.). Улар эйәлек ялғауҙарынан һуң килгәндә айырыуса асыҡ күренә: *башыма «башыма», сөзүмә «һүҙемә».*

Боронғо төрки ҡомартҡыларында урын-ваҡыт килеш ике мәғәнәлә, йәғни урын һәм сығанаҡ мәғәнәләрендә, йөрөтөлгән булһа, XIII—XV быуаттарҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙең телендә ул, сығанаҡ килеш мәғәнәһен юғалтып, бер мәғәнәлелеккә юл ала. Хорезм-Алтын Урҙа ҡомартҡыларында сығанаҡлыҡ мәғәнәһе сығанаҡ килештә нығына.

Төрлө этник төркөмдәр теленең йоғонто яһауы арҡаһында аталып үтелгән осорҙағы әҙәби ҡомартҡыларҙың грамматик төҙөлөшө байый бара. Мәҫәлән, «Ҡутадғу билиг» һәм «Атабат-әл-хаҡаиҡ» текстарында Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларының грамматик төҙөлөшөнә хас формалар һаман да һаҡланған булһа, XIII—XV быуаттарҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙә теге йәки был грамматик формалар юғалып, яңылары барлыҡҡа килә башлай. Уларҙың ҡайһы берҙәре элекке мәғәнәлә ҡулланыла, икенселәре яңы мәғәнәләрҙе үҙләштерә. Ҡулланылышын юғалтҡан формалар иҫәбенә ҡылымдан яһалған *-дачы//-дәчи, -тачы//-тәчи, -дуҡ//-дүк, -гли//-ғлы* ялғаулы исемдәрҙе индерергә була. Дөрөҫ, Хорезм-Алтын Урҙа ҡомартҡыларында ҡылымдан яһалған *-дуҡ//-дүк* аффикслы исем һирәк булһа ла ҡулланыла, ә *-дачы//-дәчи, -гли//-ғлы* формалы бындай исем осрамай.

*-мыш//-меш* ялғаулы шундай уҡ исемдәр ҡайһы бер үҙгәрештәргә бирелә. Әгәр улар боронғо төрки ҡомартҡыларында, *-дуҡ// -дүк* аффикслы исемдәр һымаҡ, исем, сифат, рәүеш һәм хәбәр мәғәнәләрендә ҡулланылһалар, урта быуат ҡомартҡыларында иһә ҡыпсаҡ телдәренең йоғонтоһонда икенсе *-ған//-гән* формалы исемдәр өҫтөнлөк ала башлай. Һуңғыларының хәбәрлек функцияһы башлыса Алтын Урҙа ҡомартҡыларында нығынып китә.

Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларының теленә хас булған ҡылым формалары XIII—XV быуаттарҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙең телендә шаҡ-

---

[14] Севортян Э. В. Современное состояние и некоторые вопросы исторического изучения тюркских языков в СССР // Вопросы методов изучения истории тюркских языков. Ашхабад. 1961. 20-се бит.

тай киң ҡулланылыш таба. Әммә был осорҙоң әҙәби теле бүтән этник төркөмдәрҙең үҙенсәлектәрен үҙләштерә башлай. Ә ул этник төркөмдәрҙең телендә «verbum finitum»дың үҙенә генә хас генезисы бар» [15]. Мәҫәлән, «Ҡисса-йи Йософ», «Мирадж намә», «Тәзкирә-йи әүлийә» әҫәрҙәрендә хәл ҡылымдың *-п+-турур//-дурур* ялғаулы тулы һәм *-п+-дур//-тур* ялғаулы ҡыҫҡартылған формаларының икеһе лә бар. Ҡылымдың *-ғай//-гәй* формаһы боронғо төрки ҡомартҡыларында киләсәк заманды белдерһә, XIII—XV быуаттарҙа һәм унан һуң үткән заман мәғәнәһен күрһәтә. Шарт һөйкәлешенең Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларына хас булған *-сар//-сәр* аффиксы урта быуат әҙәби әҫәрҙәре телендә *-са//-сә* формаһына үҙгәрә.

Шулай итеп, телдең эске үҫеш закондары һөҙөмтәһендә, шулай уҡ төрлө этник төркөмдәр теленең йоғонтоһо арҡаһында XIII—XV быуаттарҙағы әҙәби әҫәрҙәр телендә боронғо төрки ҡомартҡыларының ҡайһы бер грамматик формалары юғала бара, икенселәре урынына яңылары барлыҡҡа килә.

## *3. XII быуаттан алып XIII быуаттың беренсе яртыһына тиклемге Урал — Волга буйы төрки теле*

Әҙәби тел халыҡ тарихы менән тығыҙ бәйләнгән. Б. А. Серебренников, әҙәби телдәрҙең барлыҡҡа килеүен тикшергәндә, уны мәҙәниәт һәм тарихи үҫеш процесынан айырып ҡарарға ярамай, ти. «Тик тарихи факторҙарҙы килтереү генә әҙәби телдең ниндәй эпохала һәм ни өсөн барлыҡҡа килеүен, уның туҡтауһыҙ үҫешенә ниндәй социаль көстәр, ижтимағи ҡараштар, поэтик мәктәптәр һәм йүнәлештәр сәбәпсе булыуын йәки, кирсһенсә, тотҡарлауын, быларҙың барыһының да һәм ниндәй яҙыусылар ижадының уға ни дәрәжәлә йоғонто яһауын дөрөҫ аңлауға асҡыс бирергә мөмкин» [16].

Шуға күрә башҡорт әҙәби теленең тарихын тикшергәндә, башҡорт халҡының тарихына, уның мәҙәниәтенә ҡағылышлы төрлө материалдарҙы һәм факттарҙы иғтибарға алырға кәрәк.

Археологик һәм тарихи-этнографик тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: әгәр беҙҙең эраның беренсе мең йыллығы Урал буйындағы һәм Бөгөлмә ҡалҡыулығындағы халыҡ теленең һәм мәҙәниәтенең боронғо башҡорт йүнәлешендә формалашыуына сәбәпсе булһа, XI быуаттан алып XIII быуат башына саҡлы осор — боронғо башҡорт этносының күсмә тормошта йәшәүсе башҡорттарҙың мәҙәниәт-тел ролен һаҡлай килеп, артабан нығыныу осоро [17]. Был ҡатмарлы процеста ҡыпсаҡтар ҙур роль уйнай, сөнки XI—XIII

---

[15] Насилов В. М. Күрһәтелгән хеҙмәт. 108-се бит.

[16] Серебренников Б. А. Об основных отличиях истории строевых элементов языка от истории литературного языка // Советская тюркология. 1981. № 4. 3-сө бит.

[17] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М., 1974. 508-се бит.

быуаттар — Урал буйындағы ҡыпсаҡтар менән ҡыпсаҡлашҡан төркөмдәрҙең актив үтеп инеү осоро ул. Башҡорт теленең формалашыуында Волганан алып Уралға тиклемге территорияла күсенеп йөрөүсе ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең теле иң мөһим урындарҙың береһен алып тора. Урал — Волга буйы төрки теленең һәм уның аша башҡорт теленең әҙәби нормалары барлыҡҡа килеүендә Болғар дәүләтенең әҙәби теле лә билдәле бер роль уйнай. Башҡорттарҙың тәүге яҙма ҡомартҡылары Болғар дәүләтенең йәшәү осорона ҡарай. Уның составына Боронғо Башҡортостандың көнбайыш райондары ла инә. «Башҡорттарҙың этник һәм мәҙәниәт тарихында ла болғарҙарҙың ҡатнашлығы бар» [18]. Ислам динен әле X быуаттың башында уҡ ҡабул иткән Болғар дәүләте был диндең башҡорттар араһына үтеп инеп, таралып китеүенә ниндәйҙер кимәлдә йоғонто яһай. Р. Г. Кузеевтың фекеренсә, Волга буйы Болғар дәүләте йоғонтоһоноң көсәйеүе болғар-мадъяр ҡәбиләләренең көнсығыш йүнәлешендә, йәғни Башҡортостандың көнбайыш һәм көньяҡ өлөштәренә, күсеүе менән бер үк ваҡытта була. Был иһә уларҙың башҡорт ҡәбиләләре менән ҡатнашыуын көсәйтә һәм йыш ҡына берҙәм ырыу-ҡәбиләләргә ойошоуға алып килә [19]. Болғар сауҙагәрҙәренең Иран, Урта Азия һәм Ҡавказ аръяғы менән сауҙа итеүе шулай уҡ Башҡортостанда болғар культураһының таралыуына булышлыҡ итә; «Башҡортостан халҡы улар аша (сауҙагәрҙәр аша — Р. Х.) көнсығыш баҙарҙарына йәнлек тиреләре, умартасылыҡ продукттары һәм металл изделиелар һата» [20].

Болғар теле хаҡында әлегә берҙәм һәм анығ ҡына ҡараш булғаны юҡ. Боронғо ғәрәп яҙыусылары уҡ уға төрлө-төрлө характеристика бирәләр [21].

Болғар телен өйрәнеүсе О. Прицак Волга буйы Болғар илендә иң кәмендә өс ҡәбилә теле булыуы ихтимал, ти [22]. Ул икенсе төрлө тезистар ҙа тәҡдим итә. Мәҫәлән, тикшеренеүсе «XI—XIV быуаттарҙа ике болғар теле йәшәп килгән, уларҙың береһе — һунболғар теле — Кубань-Азов территорияларынан килгән нәҡ ошо Волга буйы болғарҙарының аралашыу теле, ә икенсеһе йәмғиәттең рухи һәм культура өлкәләрендә файҙаланылған уғыҙ-ҡыпсаҡ элементтары менән семәрләнгән мосолман-болғар теле булған, тип иҫәпләй» [23].

---

[18] Смирнов А. П. Гуннский элемент в культуре волжских булгар // История и культура Восточной Европы по археологическим данным. М., 1971. 146-сы бит.

[19] Кузеев Р. Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 458-се бит.

[20] Очерки по истории Башкирской АССР. Уфа, 1956. Т. 1. Ч. 1. 21-се бит.

[21] Гаркави А. Я. Сказание мусульманских писателей. СПб., 1870. 219-сы бит; Путешествие ибн-Фадлана на Волгу / Под ред. акад. И. Ю. Крачковского. М.; Л., 1939. 706-сы бит; Хвольсон Д. Известия о хазарах, буртасах, болгарах, мадьярах, славянах и руссах Абу-Али Ахмеда бен Омара ибн-Даста, неизвестного доселе арабского писателя X в., по рукописи Британского музея. СПб., 1868.

[22] Pritsak O. Ķasgaris Angaben über die Sprache der Bolgarin // ZDMG. 1959. Bd. 109, H. 1. 105-се бит.

[23] Pritsak O. Die Bulgarische Fürsten-liste und die Sprache der Protobulgarin. Wiesbaden, 1955. 9-сы бит.

Болғар дәүләтенең яҙма әҙәби теле проблемаһы теге йәки был дәрәжәлә Л. З. Зәләй, Б. А. Серебренников, Ғ. В. Йосопов, Н. А. Андреев, М. З. Зәкиев, Ф. С. Фасеев һәм башҡа ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә тикшерелә [24]. Волга буйы Болғар иле яҙма әҙәби теленең барлыҡҡа килеүе һәм уның характеры Ф. С. Хәкимйәновтың хеҙмәттәрендә тулыраҡ яҡтыртыла. X—XII быуаттарҙа, «йәғни монголдарға тиклемге осорҙа, Волга буйы Болғар илендә арыу уҡ эшкәртелгән, диалекттан өҫтөн торған тел формаһы йәшәп килгән. Уның характеры ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе сифат яғынан тамырынан яңыртыуға бәйле рәүештә үҙгәрә барған. Шул осорҙа был дөйөм телдең яҙма теле булып китеүе лә ихтимал» [25], тип иҫәпләй автор.

Әҙәби телдәрҙең барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше мәҙәниәт-тарихи процесҡа туранан-тура бәйле.

Төрки халыҡтарының тарихында урта быуат һәм унан һуңғы дәүерҙәр шаҡтай ҡатмарлы осорҙарҙан һанала. Нәҡ бына урта быуатта «һәр төрлө ижтимағи-политик ваҡиғалар, үҙ-ара һуғыштар, территориялар яулап алыуҙар һөҙөмтәһендә ҡайһы бер мәҙәниәт усаҡтары емерелә, башҡа урындарҙа уңайлыраҡ тарихи шарттар тыуыу арҡаһында яңылары барлыҡҡа килә, юҡ ителеүҙән һәм бөлгөнлөктән ҡасып киткән ғалимдар, яҙыусылар, шағирҙар һәм башҡалар шул тирәләргә ағыла» [26].

Әгәр Урта Азияла «...X—XI быуаттарҙа ике әҙәби тел, йәғни көнсығыш тармаҡтан ҡараханлы һәм көнбайыштан уғыҙ-ҡыпсаҡ телдәре барлыҡҡа килә башлаһа» [27], Волга буйында «XIV быуатта, мәҙәниәт тормошоноң ҡатмарлыраҡ осоронда, төрки әҙәби теленең Волга буйы варианты» [28], Урал буйындағы дөйөм төрки әҙәби теленең айырым бер варианты булараҡ Урал төрки теле тыуа. Урал һәм Волга буйына яраҡлаштырылған төрки теле, уның образлылығы һәм стилистик үҙенсәлектәре шул телдә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр аша XX быуат башына саҡлы йәшәп килә. Артабан башҡорт һәм татар телдәре нормалары йоғонтоһонда был региондың төрки теле үҙ позицияларын әкренләп юғалта башлай.

---

[24] Заляй Л. З. К вопросу о происхождении татар Поволжья по материалам языка // Происхождение казанских татар. Казань, 1948; Серебренников Б. А. К вопросу о действительных взаимоотношениях между чувашским, булгарским и татарским языками // Учен. зап. НИИЯЛИЭ Совета Мин. Чув. АССР. 1956. Вып. 14; Юсупов Г. В. К вопросу об истории и классификации булгаро-татарской эпиграфики // Этнография Востока. 1956. Вып. II; шул уҡ: Введение в булгаро-татарскую эпиграфику. М.; Л., 1960; Андреев Н. А. Чувашские порядковые числительные в сравнении с порядковыми числительными булгарских намогильных памятников // Учен. зап. НИИЯЛИЭ Совета Мин. Чув. АССР. 1956. Вып. 14; Зәкиев М. З. Татар халкы теленең барлыкка килүе. Казан, 1977; Фасеев Ф. С. Старотатарская деловая письменность. Казань, 1981.

[25] Хакимзянов Ф. С. Язык эпитафий волжских булгар. М., 1978; шул уҡ: О поволжском варианте среднетюркского литературного языка // Историко-лингвистический анализ старописьменных памятников. Казань, 1983.

[26] Наджип Э. Н. О некоторых недостатках в изучении истории тюркских языков // Советская тюркология. 1970. № 6. 49-сы бит.

[27] Бертельс Е. Э. Литература народов Средней Азии // Новый мир. 1939. № 7. 265—270-се биттәр.

[28] Хакимзянов Ф. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 19-сы бит.

Шулай итеп, Урал һәм Волга буйы төрки теленең барлыҡҡа килеүе, бөтә төрки халыҡтары өсөн булмағанда ла, уларҙың күпселеге, бигерәк тә башҡорт һәм татар халыҡтары өсөн мәҙәниәт-тарихи процестар уртаҡ булған осорға ҡарай. Сөнки Ф. Энгельстың раҫлауынса, «Тарих төпкөлөн төпкәрәк төшөп байҡаған һайын, сығыштары менән бер үк булған халыҡтарҙың айырмалыҡ билдәләре юғала бара» [29].

XI быуаттан алып XIII быуаттың башына саҡлы осор Башҡортостандағы этник процестар өсөн башҡорт, болғар һәм башҡа компоненттарҙың бер-береһенә ҡушылыуы һәм нығыныуы менән характерлы. Шул уҡ ваҡытта был процесҡа көньяҡтан күсмә ҡыпсаҡтар һәм ҡыпсаҡлашҡан халыҡтар ағымы торған һайын өҫтәлә бара. «Улар барыһы ла боронғо башҡорт этносының бөтә өлөштәренә лә үтеп инеп, уның этнокультура билдәләренең артабан формалашыуына һәм айырмалыҡтарының бөтә барыуына йоғонто яһайҙар» [30]. Был факттар Урал һәм Волга буйы төрки теленең таралыуына ыңғай шарттар тыуҙыра.

Боронғо башҡорттарҙа телдән һөйләнелеп йөрөтөлгән һәр төрлө фольклор әҫәрҙәре күп була. Улар һуңыраҡ, яҙма ҡомартҡылар барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк, эпостар, ҡобайыр, шәжәрә, легенда һәм риүәйәттәр кимәленә етеп формалаша.

Урал буйы төрки теленең формалашыуына, уның художество алымдарын һәм мөмкинлектәрен шымартыуға башҡорттарҙың теле һәм бай ауыҙ-тел ижады традициялары ныҡ йоғонто яһай. Әлбиттә, әҙәби нормаларға ҡағылған был йоғонто төрлө тарихи осорҙарҙа төрлөсә була.

X—XIII быуаттарҙа ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән яҙыуҙың таралыуы менән башҡорттарҙа тел ситуацияһы ныҡ ҡына үҙгәрә. Күп кенә бүтән төрки халыҡтар һымаҡ, башҡорттар ҙа ислам дине менән бергә, бер ни тиклем өҫтәмәләр һәм үҙгәрештәр индереп. ғәрәп яҙыуын үҙләштерә.

Мосолман дине һәм уның идеологияһы таралыу һөҙөмтәһендә, ғәрәп традициялары ла көсәйә. «Урындағы халыҡ араһынан сыҡҡан күп кенә ғалимдар һәм философтар ...X быуатта һәм хатта бөтә XI быуат буйы үҙ әҫәрҙәрен... ғәрәп телендә яҙғандар. Философ һәм ғалим Әбү-Наср әл-Фараби (X быуат), тарихсы әл-Бируни (X—XI быуаттар), атаҡлы ғалим Әбү-Ғәли ибн-Сина (Авиценна, XI быуат), «Диуан әл-лөғәт әт-төрк» әҫәренең авторы Мәхмүт Ҡашғари һәм башҡалар миҫалында быны асыҡ күрергә мөмкин» [31]. Ғәрәп мәҙәниәтенең көсһөҙләнеүе менән ғәрәп теле үҙенең йоғонтоһон һиҙелерлек кимәлдә юғалта, әммә башҡорттар араһында дин, ғибәҙәт ҡылыу, бер аҙ фән һәм философия теле сифатында һаҡланыуын дауам итә.

---

[29] Энгельс Ф. История Ирландии // Маркс К., Энгельс Ф. Соч. 2-е изд. Т. 16. 521-се бит.

[30] Кузеев Р. Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 461-се бит.

[31] Усманов А. «Мухакамат ал-Луғатаин» Алишера Навои. Ташкент, 1948. 19-сы бит.

Волга буйы төркийе (шулай уҡ Урал төркийе лә) «диалекттан өҫтөн торған дөйөм болғар теленең яҙма формаһы нигеҙендә, илләмәгәр ҡараханлы-уйғыр теле яҙма традицияһының, һуңыраҡ — хорезм-төрки әҙәби теленең көслө йоғонтоһо аҫтында барлыҡҡа килә»[32]. Волга буйы һәм Урал төрки теле нигеҙендә ҡыпсаҡ-уғыҙ әҙәби теле ята. «Был әҙәби телдә Хорезмиҙың «Мөхәббәт намә», Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин», Сәғдиҙең фарсы теленән тәржемә ителгән «Гөлстан» кеүек әҫәрҙәре яҙылған»[33].

Урал — Волга буйы төркийе әҙәби тел функцияһын үтәүсе дөйөм бер тел була. Уны башта махсус әҙерләнгән һәм уҡытылған сағыштырмаса аҙ һандағы кешеләрҙән мосолман дине башлыҡтары, власть вәкилдәре һәм шағирҙар ғына белә.

Тимәк, Урал һәм Волга буйы төрки халыҡтарының дөйөм яҙма төрки теленең бер вариантын кәүҙәләндергән үҙ әҙәби теле була, үҙ сиратында артабан үҫеш процесында ул халыҡтың һөйләү теле менән үҙ-ара тәьҫир итешә.

Урал һәм Волга буйы төрки теленең үҙенсәлектәрен сағылдырған, күберәк шул Урал — Волга буйында таралған иң әүәлге әҙәби ҡомартҡыларҙан (башҡорт әҙәби теле лә тамырҙары менән шунда барып тоташа) Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһын (XIII быуат) күрһәтергә мөмкин.

«Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының теле лә, әҫәрҙең үҙе кеүек үк, элек-электән ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итә килә. Был әҙәби ҡомартҡының теле хаҡында һәр төрлө ҡараштар бар. Поэманың телен ҡайһы бер тикшеренеүселәр уғыҙ йәки иҫке осман[34], икенселәре — хорезм[35], өсөнсөләре кама-болғар[36], дүртенселәре болғар-татар йәки боронғо татар теле[37], тип иҫәпләй.

Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының теленә, беҙҙеңсә, иң объектив һәм дөрөҫ характеристика Э. Н. Нәжип тарафынан бирелә. Ул, әҫәрҙең телен «үҙенең составына уғыҙ һәм ҡыпсаҡ элементтарын туплаған ҡатнаш, күп диалектлы һәм боронғо тел»[38], тип билдәләй. Э. Н. Нәжип үҙенең ҡарашын поэманың тел үҙенсәлектәренән сығып ҡына түгел, ә урта быуаттарҙа Хорезм, Урта Азия, Алтын Урҙа һәм Мәмлүк Египты территорияларындағы бөтә төрки телдәрҙең дә ҡатнаш булыуына таянып аңлата һәм иҫбатлай[39]. Тимәк, аталып үтелгән региондарҙағы төрки халыҡтарының әҙәбиәте лә ҡатнаш булып сыға. Әхмәт Йәсәүиҙең «Хик-

---

[32] Хакимзянов Ф. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 19-сы бит.

[33] Наджип Э. Н. «Мухаббат-наме» Хорезми. М., 1961. 7-се бит.

[34] Brockelman C. Alis «Gissai jusuf» // Der alteste Volanter der osmanischen literatur. Berlin, 1916. № 5. 59-сы бит.

[35] Бертельс Е. Э. Литература народов Средней Азии от древнейших времен до XV в. // Новый мир. 1939. № 9. 271-се бит.

[36] Яфаров Б. А. Литература камско-волжских булгар X—XIV вв.: «Нахджэль-фарадис»: Дис. ... канд. филол. наук. Казань, 1950.

[37] Алмаз Дж. «Кысса-и Юсуф» Али — булгарско-татарский памятник // Тр. XXV Международного конгресса востоковедов. М., 1960. 1-се бит.

[38] Наджип Э. Н. О языке памятника начала XIII в. «Кысса-и Юсуф» Али // Советская тюркология. 1976. № 2. 79-сы бит.

[39] Наджип Э. Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 77-се бит.

мәттәр»е, Бакырғаниҙың шиғырҙары һәм төрлө авторҙарҙың күп кенә бүтән художестволы әҫәрҙәре быға миҫал була ала. Улар, Волга — Урал буйы территорияһында ижад ителмәһәләр ҙә, был региондағы татарҙар менән башҡорттар араһында киң тарала. Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһы ла шулар иҫәбендә тора.

«Ҡисса-йи Йософ» әҫәренең телен тикшереүселәрҙең иғтибары күбеһенсә уның лингвистик яғын, йәғни лексик һәм морфологик үҙенсәлектәрен, байҡауға ҡайтып ҡала. Ә поэманың художестволы үҙенсәлектәре, төрки әҙәби телдәренең үҫеш тарихында уның тотҡан урыны әле һаман ситтәрәк ҡала килә. Шул уҡ ваҡытта сағыштырма-тарихи анализ һәм шулай уҡ поэма теленең художестволы үҙенсәлектәрен асыҡлау, беренсенән, әҫәрҙең электән килгән тәжрибәгә таянып ижад ителгән булыуын күрһәтһә, икенсенән, уның һәм унан һуңғы осорҙарҙағы күп кенә әҙәби ҡомартҡыларҙың теле менән стиле шаҡтай оҡшаш икәнлеген сағылдыра. Поэма теленең шыма һәм матур булыуы — уға тикле́мге осорҙарҙа дөйөм төрки теленең тарихи үҫеше һөҙөмтәһе ул. Әле XI—XII быуаттарҙа уҡ Й. Баласағунлының «Ҡутадғу билиг», Әхмәт Юғнаҡиҙың «Атабат әл-хаҡаиҡ» кеүек әҫәрҙәр ижад ителә. Һәм, әлбиттә, уларҙың әҙәби теленең «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының теленә һәм стиленә ниндәйҙер кимәлдә йоғонтоһо булмай ҡалмаған. Улар өсөн уртаҡ лексик, шулай уҡ ҡайһы бер фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәр булыуы быға асыҡ дәлил. Ҡол Ғәлиҙең поэмаһында боронғо төрки теленең, атап әйткәндә, боронғо уйғыр әҙәби теле традицияларының ҡайһы бер элементтары сағыла. Мәҫәлән, һүҙҙәрҙең бер өлөшөн, уларҙың мәғәнәләрен һәм формаларын «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының теле өсөн борондан ҡалған күренеш, тип аңлатырға була. Сағыштырығыҙ: *алп//алып* «батыр, ҡаһарман» (КТҙ, МҠ), *ҡамуғ* «тотош, тулы, бөтөн» (ҠБ, МҠ), *сөңүк* «һөйәк» (МҠ), *чериг* «ғәскәр» (ҠБ, МҠ), *яулаҡ* «ныҡ, таҙа, көслө; бик, ифрат» (МҠ), *ялауач//ялаучы* «сапҡын; илсе» (ҠБ, МҠ), *кизин* «аҙаҡтан, аҙаҡ, һуңынан» (ҠБ), *төмән төрлө кейем* «бик күп төрлө кейем-һалым» (ҠБ) һ. б.

«Ҡисса-йи Йософ» поэмаһы үҙендә төрлө төрки, шул иҫәптән ҡыпсаҡ һәм уғыҙ, этностары вәкилдәренең тел үҙенсәлектәрен туплаған. Поэма телендә уғыҙ элементтарының булыуын элегерәк, йәғни боронғо төрки ҡомартҡыларының яҙма әҙәби теле традицияларының ныҡлы һаҡланып ҡалыуы, тип кенә ҡарау дөрөҫ үк булып етмәҫ, күрәһең. Был мәсьәләне тикшергәндә поэма теленең характеры күпмелер дәрәжәлә XII—XIII быуаттарҙа Урал һәм Волга буйындағы күсенеп йөрөүсе күп һанлы халыҡтарҙың ҡатмарлы этник һәм мәҙәниәт процестарын сағылдырыуын да иҫәпкә алырға кәрәктер.

«Ҡисса-йи Йософ» поэмаһында мәғәнәләре йәки формалары менән уғыҙ телдәренә ҡараған һүҙҙәрҙе айырып күрһәтергә мөмкин (*ҡараваш* «тотҡон, әсир», *йохсил* «ярлы, фәҡир», *гизлә-* «йәшереү», *коку-* «еҫ сығыу; аңҡыу» һ. б.; *вар* «бар», *вер-* «бир-» һ. б.).

Шулай ҙа ҡомартҡының телендә ҡыпсаҡ элементтары күберәк осрай.

Поэма теленең билдәле бер ҡатламын ғәрәп (*мәхбүб* «һөйөклө», *жасус* «ғәйбәтсе», *жәмәл* «матурлыҡ», *шәриф* «хөрмәтле», *холҡы латиф* «характеры йомшаҡ») һәм фарсы (*гөмраһ* «яңылыштырыусы», *заһир* «асыҡ, эскерһеҙ», *бигөнаһ* «гонаһһыҙ, ғәйепһеҙ», *нәгәһ* «көтмәгәндә») һүҙҙәре алып тора.

«Ҡисса-йи Йософ» — романтик поэма. Быны уның йөкмәткеһе менән композицияһы ғына түгел, ә әҫәрҙең теле лә, йәғни аныҡлаусылар менән эпитеттарҙың үҙенсәлекле һәм матур булыуы ла, раҫлай. Аныҡлаусылар менән эпитеттар йөкмәткеләре буйынса йыш ҡына төрлө-төрлө булһалар ҙа, уларҙы хис-тойғолар байлығы берләштерә. Сағыштырығыҙ: *оҙаҡ юлым* «оҙон-оҙаҡ юлым», *көйдөрөр хәсрәт уты* «көйҙөрөрлөк хәсрәт уты», *зиба буйың, озон сачың* «зифа буйың, оҙон сәсең» һ. б. Һанап үтелгән аныҡлаусылар менән эпитеттарҙың күбеһе һәм *бал шәкәрдән татлыраҡдыр дудаҡларың* «бал-шәкәрҙән татлыраҡтыр һинең ирендәрең», *инжүйә биңзәр синең дишләрең* «нәҡ ынйылайҙыр һинең тештәрең», *тул[ғ]ан ай тек балҡыр иде аның йөзе* «тулған айҙай балҡыр ине уның йөҙө» һымаҡ сағыштырыуҙар артабанғы быуын авторҙарының әҫәрҙәре телендә лә күҙәтелә.

«Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының телендә *сабыр берлә морад хасил олур имде* «моратҡа сабырлыҡ менән ирешеләләр», *морадына тиз йетер сабыр кеше* «моратына тиҙ етер сабыр кеше», *ожмах веруб тамуғ утын сатуб алмаң* «ожмах биреп тамуҡ утын һатып алмағыҙ» кеүек төрлө образлы әйтемдәр һәм афоризмдар осрай.

Ҡол Ғәли поэмаһының миҫалында XII—XIII быуаттар шағирҙарының үҙ әҫәрҙәрендә поэтик халыҡ ижады һәм шулай уҡ халыҡтың йәнле теленә мөрәжәғәт итеүҙәре күренә. Шағирҙар был бай сығанаҡтарҙан образлы һүрәтләү саралары ала, реаль донъяны, геройҙың һәм үҙҙәренең уй-тойғоларын тағы ла дөрөҫөрәк һәм матурыраҡ итеп сағылдырыу мөмкинлеге таба. Сағыштырығыҙ: *Дөрлө-дөрлө тирәкләр анда диксун. Бер ничә дирәкләре ғаҡыҡ олсун. Бер ничә дирәкләр ынжу олсун. Бер ничәсе ҡызыл мәржән олсун имде. Саҡый ҡызыл алтундан ат иләсүн. Гәүһәр, яҡут, ынжу, мәржән бизәкләсүн.* «Унда төрлө колонналар һалһындар әйҙә. Ҡайһы берҙәре аҡыҡтан булһын. Икенселәре ынйынан булһын әйҙә. Бүтәндәре ҡыҙыл мәрйендән булһын. Атты улар саф алтындан яһап ҡуйһындар әйҙә. Уны гәүһәр, яҡут, ынйы һәм мәрйендәр менән биҙәһендәр».

XIII быуат әҙәби телендә артабанғы быуаттар әҫәрҙәре телендә ҡулланылған түбәндәге билдәле бер синонимдар һәм антонимдар теҙмәһе ижад ителә: *бал ~ шәкәр* «бал ~ шәкәр [һымаҡ татлы]», *җөмлә ~ бөтә* «бар ~ бөтә», *мәлик ~ падша* «хаким ~ батша», *мал ~ хазина* «муллыҡ ~ байлыҡ», *тәмле ~ татлы* «тәмле ~ татлы», *баҡ- ~ күр-* «баҡ- ~ ҡара-», *саҡый ~ шәрәбдәр* «көрәгәсе ~ аяҡсы», *оло-кече* «оло-кесе», *төн-көн* «төн-көн», *ожмах~тамуғ* «ожмах ~ тамуҡ» һ. б.

Әҙәби әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын асыуҙа графика-өндәр системаһы менән грамматик факторҙарҙың да ҡатнашы юҡ түгел. Был аңлашыла ла, сөнки художестволы, «бигерәк тә поэтик әҫәрҙә өндөң, ижектең эстетик информацияһы, шулай уҡ ялғауҙарҙың яңғырашы һәм синтаксик конструкцияларҙың ҡыҫҡалығы мөһим әһәмиәткә эйә» [40].

Графика-өндәр системаһы планында ҡарағанда яҙма әҙәби телдә һүҙҙәрҙең билдәле бер өлөшөнөң һаман да уғыҙса формалашҡан көйөнсә йөрөтөлөүен билдәләргә кәрәк. Мәҫәлән: *дөш* «төш», *дөкәл* «теүәл, бөтәһе», *дөбе тирән* «төбө тирән», *дағы* «тағы», *вер-* «бир-», *вар-* «бар-, кил-, йөрө-» һ. б. Һирәк-һаяҡ «урта быуаттар ҡомартҡыларына, шулай уҡ төрки ҡәбиләләренең айырым ырыуҙар теленә хас булған түбәндәге *з, ҙ* өндәре менән килеүсе вариант һүҙҙәр осрай: *әҙгү* «изге, яҡшы, һәйбәт», *кеҙин* «аҙаҡтан, һуңынан», *ҡаҙғыр-* «ҡайғыр-», *йаҙы* «үҙән, тигеҙ ер» [41].

Исемдәрҙән һүҙ һәм форма яһалышы, шул уҡ зат менән үҙгәреүсе һәм зат менән үҙгәрмәүсе ҡылым формалары үҙенсәлекле булыуы менән айырыла. Мәҫәлән: *биәдәплек* «әҙәпһеҙлек, тәрбиәһеҙлек», *бихуд* «иҫһеҙ, иҫ(ен) юғалтып», *арзула-* «телә-», *зинданла-* «зинданға ултыртып ҡуй-», *сатып ал-* «һатып ал-», *тәбәссем ҡыл-* «йылмай-», *очсыз сатып алдачысаң* «һис шикһеҙ арзанға һатып алырһың», *бағлаюбан* «оялып, уңайһыҙланып», *дирнәшүбән* «йыйылышып», *өлтәчи* «үлә торған, вафат була торған», *ығлайыу* «илап-илап», *бикләйү* «бикләп», *ҡылыбан* «эшләп, эш ҡылып» һ. б.

Морфологик үҙенсәлектәрҙән сығанаҡ килештең ике төрлө, йәғни *-дан//-дән, -нан//-нән* һәм *-дин* формаларының ҡатар ҡулланылыуын күрһәтергә мөмкин. Мәҫәлән: *уйҡудан мәхрүм ҡалды* «йоҡонан мәхрүм ҡалды», *күзләрендин... йәшләр аҡты* «күҙҙәренән... йәштәр аҡты» һ. б. Төшөм һәм төбәү-йүнәлеш килештәр уғыҙ формаһында *-е//и, -а//-ә* ялғауҙары менән ҡулланылып йөрөй. Миҫалдар: *Өнеме ишед* «өнөмдө (тауышымды) ишет», *сөчеңези белдем* «гонаһтарығыҙҙы белдем», *зиндана яҡын килде* «зинданға яҡын килде» һ. б.

Ҡылым формалары ла бай һәм төрлө-төрлө. Мәҫәлән, бойороу ҡылымдың нигеҙе менән аңлатыла, ә ҡәтғи бойороу *-ғыл//-гел* формаһы менән белдерелә: *саҡлағыл* «һаҡларға тейешһең», *аңлағыл* «аңларға тейешһең», *тыңлағыл* «тыңларға тейешһең», *ҡылғыл* «эшләргә, ҡылырға тейешһең» һ. б. Әйткәндәй, бойороҡ һөйкәлешенең был формаһы Ә. Юғнаҡи һәм Рабғузиҙың әҫәрҙәрендә лә йыш осрай [42].

Үткән заман сифат ҡылым йыш ҡына *-ан//-ән, -мыш//-меш* ялғаулы уғыҙ формаһы менән ҡулланыла: *күрән кеше* «күргән ке-

---

[40] Гальперин И. Р. О понятиях «стиль» и «стилистика» // Вопросы языкознания. 1973. № 3. 22-се бит; ш у л у ҡ: Информативность единиц языка. М., 1974. 21-се, 37-се биттәр.

[41] Наджип Э. Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 83-сө бит.

[42] Насилов В. М. Язык тюркских памятников уйгурского письма XI—XV вв. М., 1974. 72—74-се биттәр.

ше», *ҡурҡмыш кеше* «ҡурҡҡан кеше», *ҡачмыш ҡол* «ҡасҡан ҡол» һ. б.

«Ҡисса-йи Йософ» поэмаһында төҙөлөшө яғынан нығынып еткән төрлө һөйләм төрҙәре бар, уларҙың составында һөйләмдең тиң киҫәктәрен (*Олы, кече, бай, юҡсыл... килде* «Олоһо, кесеһе, байы, ярлыһы... килде»; *...ҡаны синең... зиба буйың, озон сачың, хуб жәмалың* «...ҡайҙа һинең... зифа буйың, оҙон сәсең, сихри матурлығың?»), диалогтарҙы (*Атасы сорар...: «Нә ағларсың?» ...Зәләйха әйдәр: «...Төшөм ичрә бер зиба сүрәт күрдем»* «Уның атаһы һораған: «Ниңә илайһың?» ...Зөләйха: «Мин төшөмдә матур бер һын күрҙем», — тигән), өндәш һүҙҙәрҙе (*Йә, Зөләйха, бу уғланға хөрмәт ҡылғыл* «Йә, Зөләйха, был егеткә хөрмәт күрһәт»; *Йә, мәлик, син безгә инан* «Йә, хаким, һин беҙгә инан») айырып күрһәтергә мөмкин.

Урал һәм Волга буйы яҙма әҙәби төрки теле ҡайһы бер грамматик формаларҙың V—VIII быуаттарҙағы, йәғни боронғо төрки ҡомартҡылары теле менән [43], икенселәренең — XI—XIII быуаттар осорондағы уйғыр яҙыуы ҡомартҡылары менән [44], өсөнсөләренең — хәҙерге ҡыпсаҡ (башҡорт, татар һ. б.), шулай уҡ уғыҙ (әзербайжан, төрөкмән, төрөк) телдәренең теге йәки был формалары менән уртаҡ булыуын күрһәтә.

«Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының төп һүҙлек фонды, грамматик категорияларының күп өлөшө һәм һөйләмдәр төҙөлөшөнөң үҙенсәлеге ҡыпсаҡ телдәренә ҡарай. Был факт әҙәби әҫәрҙең оҙайлы тарихи ваҡыт һуҙымында «фәҡәт Волга буйында, Урал буйында» [45] һәм Уралда ғына таралған булыуында хәл иткес роль уйнай.

Ҡол Ғәли, «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһын яҙғанда, күп кенә төрки халыҡтары теленә хас булған лексик һәм грамматик байлыҡтарҙы файҙалана. Был иһә ниндәйҙер кимәлдә уның идеяһын, темаһын, шулай уҡ художестволы үҙенсәлектәрен асыуға ярҙам итә. Тимәк, Х. Мөхәммәтов [46], М. Львов [47] һәм Ф. С. Фасеевтар [48] һымаҡ был әҙәби әҫәрҙе тик айырым бер халыҡтыҡы ғына, тип ҡарау хата булып сыға. «Ҡисса-йи Йософ»тоң ижад ителеү ваҡыты Болғар дәүләтенең йәшәү осорона тура килеүгә ҡарамаҫтан, поэманың теле болғар теле, тип атау ҙа дөрөҫ булып бөтмәй. «Ҡисса-йи Йософ»тоң телен Урал — Волга буйының тәүге осор төрки теле тип билдәләүҙе иң объектив һәм ғилми яҡтан нигеҙле фекер, тип ҡарарға кәрәк. Билдәле булыуынса, поэманың теленә күпмеләр дәрәжәлә уғыҙ һәм ҡыпсаҡ телдәре йоғонто яһай. Әгәр Урал — Волга буйы тәүге осор төркиәненең лексикаһында ҡыпсаҡ һүҙҙәре

---

[43] Малов С. Е. Памятники древнетюркской письменности. М.; Л., 1951. 46—48-се биттәр.

[44] Наcилов В. М. Күрһәтелгән хеҙмәт. 48—49-сы, 54—55-се, 72-се биттәр.

[45] Хисамов Н. Ш. Поэма «Кысса-и Юсуф» Ҡ. Гали. М., 1979. 27-се бит.

[46] Борынгы татар әдәбияты. Казан, 1963. 67-се бит.

[47] Антология татарской поэзии. Казань, 1957. 46-сы бит.

[48] Фасеев Ф. С. Кол Гали «Кыйссаи Йосыф»: Йосыф турында кыйса. Казан, 1983. 7—44-се биттәр.

өҫтөплөк алһа, «уның фонетикаһы менән морфологияһында иһә уғыҙ, йәғни әзербайжан һәм төрөкмән телдәре элементтары күберәк» [49].

Әүәлге тел художестволылығы традицияларын дауам итеп, Көнсығыштан килгән яңы алымдар һәм һүрәтләү саралары иҫәбенә байый төшкән «Ҡисса-йи Йософ» тарихи поэтиканан хәҙерге татар һәм башҡорт поэзияһына һуҙылған күпер була» [50]. Поэманың башҡорт һәм татар халыҡтарының тарихында үткәне менән хәҙергеһен бәйләүендә, бөтәһенән элек, уның теле һәм художестволы үҙенсәлектәре мөһим роль уйнай. Был үҙенән-үҙе аңлашыла, «сөнки художестволы әҫәрҙә һүҙҙәрҙән һәм телдән тыш образлылыҡҡа ирешеү мөмкин түгел» [51].

Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ» поэмаһының теле — V—X быуаттарҙағы Орхон-Йәнәсәй һәм X—XI быуаттарҙағы уйғыр яҙмаһы ҡомартҡылары телдәре менән генетик яҡтан бәйле булған Болғар дәүләте яҙма әҙәби теленең, йәғни Урал — Волга буйындағы тәүге осор төрки теленең, өлгөһө ул.

XI—XII быуаттарҙа Урал һәм Волга буйы территорияһында ижадында «суфыйсылыҡ һәм дәрүишселек, тип аталған ағымдар менән» [52] уртаҡлығы күп булған Әхмәт Йәсәүиҙең шиғырҙары киң таралыу таба.

Уның шиғырҙарының күбеһе сағыштырмаса ябай тел менән ислам диненең төп положениеларын аңлата, пәйғәмбәр, теге донъялағы тормош һ. б. хаҡында һөйләй. Ә. Йәсәүи үҙенең ижадында төрки халыҡтары араһында ислам динен таратыу һәм нығытыу маҡсатын ҡуя. Шуға ла уның әҫәрҙәренең телендә ғәрәп һәм фарсы телдәренән алынған һүҙҙәрҙе, ҡөрьәндән килтерелгән тотош өҙөмтәләрҙе, ҡатмарлы, аңлашылып етмәгән, буталсыҡ грамматик һәм синтаксик конструкцияларҙы күп табырға була.

Ә. Йәсәүи, халыҡҡа аңлайышлы булһын өсөн, уғыҙ һәм ҡыпсаҡ элементтары күп булған телде файҙалана. Уның суфыйсылыҡ поэзияһында фольклор формаларын һәм тел нормаларын файҙаланыуҙы нығытыуҙа ла хеҙмәте була. Шул арҡала ул артабан яҙма әҙәби телдең фольклор теле менән бәйләнешен нығыта.

Шулай итеп, XII быуат һәм XIII быуат башы осоро Урал — Волга буйы, йәғни болғар дәүере төркийе, боронғо төрки ҡомартҡылары теле һымаҡ, төрки телле бик күп халыҡтар, шул иҫәптән башҡорт һәм татарҙар, өсөн уртаҡ булған диалекттан өҫтөн торған телдең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен һаҡлай килә. Урал һәм Волга буйы төрки әҙәби теленең теге йәки был территория өсөн бер үк типта һәм уртаҡ булыуы географик шарттарҙың яҡынлығы, социаль-тарихи һәм мәҙәниәт факторҙарының уртаҡлығы, шу-

---

[49] Наджип Э. Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 79-сы бит.

[50] Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа. Уфа, 1973. 175-се бит.

[51] Пустовойт П. Г. Взаимоотношение слова и образа // Поэтическая стилистика. Воронеж, 1982. 19-сы бит.

[52] Бертельс Е. Э. Литература народов Средней Азии // Новый мир, 1939. № 7. 264-се бит.

лай уҡ был регионда бер үк типтағы әҙәбиәт таралғанлығы менән аңлатыла [53].

XII быуат һәм XIII быуат башындағы Урал — Волга буйы төрки теленең, йәғни уның лексикаһы, фонетикаһы һәм грамматикаһының, әле шул ваҡытта уҡ системалы төҫ алған, традицияға әйләнеп нығынып киткән үҙенә генә хас үҙенсәлектәре була. Был күренеш артабанғы осорҙа, татар-монгол ябырылыуынан һуң Урал — Волга буйы төрки телле халыҡтары башҡа төрки халыҡтары менән берлектә XIII—XIV быуаттарҙа шаҡтай ҙур Алтын Урҙа дәүләтенең бер өлөшөн алып торған ваҡыттарҙа, тағы ла асығыраҡ һәм анығыраҡ сағыла.

### *4. XIII быуаттың икенсе яртыһынан алып XVI быуатҡа тиклемге Урал — Волга буйы төрки теле*

Татар-монгол баҫҡынсылары халыҡҡа ҡот осҡос бөлгөнлөк алып килә. Улар ҡулына эләккән халыҡтарҙың яҙмышы төрлөсә була. Татар-монголдарҙың килеүе үтеп барышлай һөжүм итеү характерында булған урындарҙа юғалтыуҙар ҙур булмай. Ә оҙаҡ ваҡыттар буйы урынлашып алып үҙ власын һәм йәйләүҙәрен туплаған ерҙәрҙә ҡалалар һәм дәүләттәр бөтөнләй юҡҡа сыға. Биләр, Болғар, Сувар һымаҡ сауҙа һәм һөнәрселек үҙәктәре булған Болғар дәүләте быға асыҡ миҫал.

Татар-монгол ябырылыуы һөҙөмтәһендә төрки ҡәбиләләре һәм халыҡтары тарихында күп кенә үҙгәрештәр була.

Буйһондороусылар, Алтын Урҙа халҡы составында аҙ булғанлыҡтан, һуңынан төрки халыҡтары, башлыса ҡыпсаҡтар араһында йотолоп ҡала.

Әле XIII быуаттың уртаһында уҡ телселәрҙең төрки телдәрен өйрәнеүгә ныҡ иғтибар итә башлауы һис тә ғәжәп түгел. Был планда Әбү Хәййәндең «Ҡитап әл-Иҙраҡ ли-лисан әл-әтрәк» тигән әҫәре, «Ҡитап әт-төхфәт әз-Зәкиә» исемле әҫәр һ. б. һис шикһеҙ ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. «Ҡодекс куманикус» һәм «Ҡитаб-и мәжмүғә-йи тәржемән-и төрки вә әжеми вә мөғөли вә фарсы», йәғни төрки тел белемендә «Төрки-ғәрәп һүҙлеге» булараҡ билдәле булған һирәк осрай торған һүҙлек һымаҡ ҡомартҡылар айырыуса иғтибарға лайыҡлы. Был «Төрки-ғәрәп һүҙлеге»нең телен өйрәнеүҙә А. Зайончковский, Э. Нәжип, З. Б. Мөхәммәтова һәм А. Ҡ. Курышжановтар [54] ҙур хеҙмәт күрһәттеләр.

[53] Хусаинов Г. Б. Особенности развития литературы региона Урало-Поволжья XI—XIII вв. // Литературоведение и история: Тезисы докладов и сообщений. Ташкент, 1980. 19-сы бит.

[54] Зайончковский А. Арабо-кыпчакский словарь эпохи государства мамлюков: Сообщения польских ориенталистов. М., 1961; Наджип Э. Н. Қыпчакско-огузский литературный язык мамлюкского Египта XIV в.: Автореф. дис. ... докт. филол. наук. М., 1965; Мухамедова З. Б. Исследования по истории туркменского языка XI—XIV вв. по данным арабоязычных филологических сочинений: Автореф. дис. ... докт. филол. наук. М., 1969. Курышжанов А. Қ. Исследование по лексике старокыпчакского письменного памятника XIII в. «Тюркско-арабского словаря». Алма-Ата, 1970 и др.

С. Е. Маловтың фекеренсә, «Төрки-ғәрәп һүҙлеге» хәҙерге ҡыпсаҡ телдәре менән туранан-тура бәйле[55]. Тимәк, был һүҙлек ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ телдәренең генә түгел[56], шулай уҡ башҡорт теленең дә, дөрөҫөрәге XIII быуат Урал — Волга буйы төркийенең тарихын өйрәнеүҙә ҡиммәтле сығанаҡ булып һанала.

Һүҙлектең төп өлөшөн исемдәр, уларҙан ҡала ҡылымдар алып тора. Исемдәр тематик төркөмдәрҙә, ҡылымдар алфавит тәртибендә бирелә.

«Төрки-ғәрәп һүҙлеге»нең лексик-тематик билдәләр буйынса берләштерелгән лексикаһының күп өлөшө хәҙерге башҡорт әҙәби теле лексикаһынан айырылмай. Күк йөҙө есемдәренең һәм тәбиғәт күренештәренең атамаларын сағыштырып ҡарайыҡ: *ҡойаш* «ҡояш», *ай* «ай», *йаңы ай* «яңы ай», *йолдоз* «йондоҙ», *йамғур* «ямғыр», *йел* «ел», *ҡар* «ҡар» һ. б.; төҙөлөш объекттары һәм уларҙың өлөштәре атамалары: *йорт* «йорт», *күпер* «күпер», *ишек* «ишек» һ. б.; башаҡлы культуралар атамалары: *иген* «иген», *арпа* «арпа», *бидай//буғдай* «бойҙай» һ. б.; ҡош исемдәре: *ҡош* «ҡош», *ҡаз* «ҡаҙ», *ҡарға* «ҡарға», *йабалаҡ* «ябалаҡ» һ. б.; һан атамалары: *бер* «бер», *биш* «биш», *ун* «ун», *алтмыш* «алтмыш», *йөз* «йөҙ» һ. б.; төҫтө белдереүсе һүҙҙәр *аҡ* «аҡ», *ҡара* «ҡара», *ҡуңыр* «ҡуңыр» һ. б.

«Төрки-ғәрәп һүҙлеге»нең үҙләштерелгән лексикаһы составында хәҙерге башҡорт әҙәби теле менән уртаҡ булған һүҙҙәр ҙә күп кенә осрай. Улар араһында *гәүһәр* «гәүһәр», *пәйғәмбәр* «пәйғәмбәр», *шәкирд* «шәкерт», *шәһәр* «шәһәр, ҡала» һымаҡ һүҙҙәр өҫтөнлөк ала.

«Төрки-ғәрәп һүҙлеге»ндә, хәҙерге башҡорт телендәге һымаҡ, *й*, *ҡ* өндәренә башланған һүҙҙәр күп теркәлгән. Мәҫәлән: *йаман//йауыз*, *йаҡа* «яға, яҡа», *йаҡын* «яҡын», *йала-* «яла-», *йан* «ян, эргә», *йапраҡ, йат, йетмеш, йем, йыл, йылан, йыраҡ, йул* һ. б.; *ҡазан* «ҡаҙан», *ҡайа* «ҡая, тау», *ҡалын, ҡар, ҡатун* «ҡатын», *ҡуйан* һ. б. Һүҙлектең лексикаһында һүҙ башында һаңғырау *т* өнө күберәк (*тағ* «тау», *тайаҡ, тал, тана, ташҡын, тейен* һ. б.), ә яңғырау *д* өнө һирәк осрай (*дағы* «тағы», *де-* «ти-», *дырнаҡ* «тырнаҡ» һ. б.). Был үҙенсәлек, һүҙ башында *г*, *ҡ* тартынҡылары һаҡлаған кеүек (*өгрәт* «өйрәт», *даҡуҡ* «тауыҡ» һ. б.), бынан алдағы осор әҙәби ҡомартҡылары теле өсөн дә хас була.

«Төрки-ғәрәп һүҙлеге» лексикаһының төрки өлөшө Египет төркийенең торошон билдәләһә лә һүҙлектең нигеҙендә ҡыпсаҡ теле ята»[57].

XIII быуаттың беренсе яртыһы аҙағында Урал буйы территорияһында «...монголдар тарафынан ҡыйратылған Ҡоман (Ҡыпсаҡ)

---

[55] Малов С. Е. Каракалпакский язык и его изучение // Каракалпакия. М.; Л., 1934. 200—207-се биттәр.

[56] Малов С. Е. К истории казахского языка // Изв. АН СССР. Отд. литературы и языка. 1941. № 3. 98-се бит.

[57] Наджип Э. Н. Кыпчакско-огузский литературный язык мамлюкского Египта XIV в.: Автореф. дис. ... докт. филол. наук. М., 1965. 10—11-се биттәр, 24-се бит.

союзы ҡәбиләләре һәм ырыуҙары эркелеп йөрөй»[58]. Был союз иseme менән бәйле булған яҙма сығанаҡ «Кодекс куманикус», С. Е. Маловтың фекеренсә, XIII быуатҡа ҡараһа ла «...ул XIV быуат башында, йәғни 1303 йылда, тамамлана»[59].

«Кодекс куманикус» — иҫке ҡыпсаҡ ҡомартҡыларының иң ҙуры. Беренсенән, унда боронғо төрки ҡомартҡылары теле менән уртаҡлыҡтар күп булһа, икенсенән, «Көньяҡ Рус һәм Дешти Ҡыпсаҡтың көнбайышында йәшәүсе ҡыпсаҡтарҙың һөйләү теле»[60] һәм әҙәби нормалары сағыла. Был ҡомартҡының «төньяҡ-көнбайыш төрки телдәре төркөмөнә туранан-тура мөнәсәбәте бар»[61].

Урал — Волга буйы төрки теленең лексик, фонетик, грамматик һәм стилистик нормаларының үҫешен һәм формалашыуын өйрәнеүҙә «Кодекс куманикус» яҙма ҡомартҡыһы айырым урын алып тора.

Был ҡомартҡы теленең фонетик үҙенсәлектәренән сығып, XIII—XIV быуаттар осорондағы Урал — Волга буйы төрки теле өсөн хас булған түбәндәге күренештәрҙе билдәләргә мөмкин: һүҙ башында *дж* урынына *й* өнөнөң ҡулланылыуы (*йаҡшы, йаңы, йарлы, йат-* һ. б.), һүҙ башында яңғырау *д* өнөнөң ҡулланылыуы (*дағ* «тау», *дары* «тары», *де-* «ти-» һ. б.), һүҙҙең аҙағында һәм уртаһында тел арты *ғ, ҡ* өндәренең төшөп ҡалыуы (сары<*сарығ* «һары», ябыу<*ябуғ* «ябыҡ», тыуме<*туғме* «төймә», ила-<*иғла-* «ила-» һ. б.), ҡайһы бер һүҙҙәр башында яңғырау *б* өнө килеүе (*бечән*//*печән* «бесән», *бечәнлек*//*печәнлек* «бесәнлек» һ. б.), тел арты *ғ, ҡ* өндәренең төшөп ҡалыуы йәки уларҙың иренләшкән *у* өнөнә күсеүе (*тағ*>тау «тау», *бағ*>бау «бау»). Башҡорт һөйләү телендә *ҡыҫҡа*//*ҡыҫҡаҡ, һаҫы*//*һаҫыҡ* кеүек һүҙҙәрҙең икеһенең дә ҡулланылыуын әле лә осратырға мөмкин.

«Кодекс куманикус» ҡомартҡыһы лексикаһының нигеҙен дөйөм төрки һүҙҙәре алып тора. Мәҫәлән: *ай, айаҡ, айғыр, аҡсаҡ* «аҡһаҡ», *аҡыл, алты, арпа, баҡа, бал, башҡа* «башҡа, бүтән», *беркет-, ҡамыр, ҡанат, ҡанлы, ҡар, йылан, элгәре* һ. б.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле менән уртаҡлығы булыу йәһәтенән был ҡомартҡының үҙләштерелгән лексикаһы ла ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Миҫалдар: *азат, ант, баһа, бәрәкәт, ваҡыт, дәүләт, һәм, һәр* һ. б.

Күрһәтелгән яҙма сығанаҡтың телендә, беренсенән, боронғо төрки яҙма ҡомартҡылар теле, икенсенән, хәҙерге төрки, шул иҫәптән башҡорт телдәре менән күп кенә уртаҡлыҡтар табыла.

XIII—XIV быуаттарҙа Египетта монгол баҫҡынсыларынан ҡасып китеүсе төрки ҡәбиләләре, йәғни ҡыпсаҡтар, уғыҙҙар һәм

---

[58] Очерки по истории Башкирской АССР. Уфа, 1956. Т. I. Ч. 1. 34-се бит.

[59] Малов С. Е. К истории казахского языка // Изв. АН СССР. Отд. литературы и языка. М., 1941. № 3. 97-се бит.

[60] Курышжанов А. К. Язык старокыпчакских письменных памятников XIII—XIV вв.: Дис. ... докт. филол. наук. Алма-Ата, 1972. 79-сы бит.

[61] Махмутова Л. Т. Татарский язык и его отношение к древнеписьменному памятнику «Codex Cumanicus» по данным лексики // Исследования по исторической диалектологии татарского языка. Казань, 1982. 68-се бит.

башҡалар, вәкилдәренән яугир-ҡол мәмлүктәр араһында башҡорттарҙан Ғилметдин Сәнжал әл-Башҡорди һәм Насретдин ән-Насри һымаҡ яҙыусылар ҙа була [62]. Насретдин ән-Насриҙың ижады замандаштары тарафынан юғары баһалана [63]. Яҙыусы тыуған иләндә Урал — Волга буйы төркийендә, ә сит илдә Египет төрки телендә ижад иткән булыуы ихтимал. Насретдин ән-Насри кеүек оҫталар теленең урта быуат осорондағы Урал — Волга буйы төркийенең формалашыуына һәм үҫешенә ниндәйҙер кимәлдә йоғонтоһо булмай ҡалмаған, әлбиттә.

Ямалатдин әбү-Мөхәмәт Абд-алла әт-Тукиҙың «Китап бүлгәт әл-мөштәк фи лөғәт әт-төрк вә әл-ҡыпсаҡ» («Төрки һәм ҡыпсаҡ телдәрен белеү теләгән етерлек кимәлдә ҡәнәғәтләндерә алған китап») тип аталған грамматикаһы менән авторы билдәһеҙ «Әл-ҡауани әл-көллийәт ли-дәбт әл-лөғәт әт-төркийәт» («Төрки телен өйрәнеүселәр өсөн тулы ҡулланма») исемле ҡулланмала XIII—XIV быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийе хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр һаҡланған.

Алтын Урҙа осоронда дини һәм дәрүишселек характерлы суфыйсылыҡ поэзияһы актив үҫә башлай. Әгәр Яҡын Көнсығышта суфыйсылыҡ әҙәбиәте фәҡәт фарсы телен файҙаланған булһа, Урал һәм Волга буйы дәрүиштәре иһә, Урта Азия дәрүиштәре кеүек үк, төрки телен яҡыныраҡ күрәләр. Был бик мөһим факт. «Дәрүиштәр һәр ваҡыт ниндәйҙер бер һайлап алынған аудиторияға түгел, ә халыҡҡа мөрәжәғәт итәләр, һәм әгәр төрөк теле (төрки — Р. Х.) уларҙың күңеленә ятҡан икән, тимәк ул киң массаларға яҡын булған, тигән һүҙ» [64].

XIII—XV быуаттарҙа Волга буйында һәм Уралда шағир Сөләймән Баҡырғани киң танылыу ала. Ул, Әхмәт Йәсәүиҙең варисы, Хәким-ата исеме менән билдәле була. «Һаҡланып ҡалған өс китапты — шиғри доғалар йыйынтығын, Мария хаҡында легенда һәм ҡот оҫҡос суд тураһындағы китапты уныҡы, тип иҫәпләйҙәр» [65]. Уның әҫәренең теленә характеристика биреү бик ҡыйын, сөнки уларҙың төп нөсхәһе беҙгә килеп етмәгән, ә күсермәләр һуңғыраҡ осорҙарға ҡарай. Әммә Сөләймән Баҡырғаниҙың теле ғәрәп һәм фарсы телдәренең көслө йоғонтоһо аҫтында булған, тип ҙур ышаныс менән әйтергә мөмкин. Быны уның әҫәрҙәренең йөкмәткеһе дидактика биҙәктәре ҡушылмаһы менән дини-хоҡуҡи характерҙа булыуы күрһәтеп тора.

---

[62] Рамзи Мурат. Тәлфӣк ал-ахбāр ва тәлкӣх ал-асāр фӣ вакāиги Казан ва Болгāр ва мүлкāт татар // Сборник сообщений и преданий о казанских, булгарских и татарских правителях и событиях, связанных с ними. Оренбург, 1907. Т. I. 327—328-се биттәр.

[63] Амин аль-Холи. Связи между Нилом и Волгой в XIII—XIV вв. Сокращенный перевод с арабского. М., 1962. 31-се бит.

[64] Бертельс Е. Э. Литература народов Средней Азии от древнейших времен до XV в. // Новый мир. 1939. № 9. 270-се бит.

[65] Бертельс Е. Э. Шунда уҡ.

XIII—XV быуаттар дәүерендәге Урал һәм Волга буйы әҙәбиәте өсөн дини, донъяуи һәм башҡа мотивтарҙың тығыҙ үрелеп барыуы хас күренеш. Был иһә «урта быуат әҙәбиәте структураһының һәм функцияһының күп ҡатламлы булыуына алып килә» [66]. Былар барыһы ла Урал — Волга буйы төркийендә билдәле бер кимәлдә сағылыш таба. Икенсенән, был төрки теле халыҡ ижадының да һәм уның теленең дә байтаҡ йоғонтоһон кисерә.

Алтын Урҙа осоронда ҡоллоҡҡа төшөрөүселәрҙең ҡанһыҙлығын һәм ҡомһоҙлоғон, халыҡтың уларға уғата көслө нәфрәтен, Тыуған илде сит-ят баҫҡынсыларҙан һаҡлауға саҡырыуҙарҙы киң масштабта сағылдырған фольклор әҫәрҙәре лә барлыҡҡа килә. Әйтелгәндәр күбеһенсә «Бейек тауҙың үлгәне», «Ҡуҙыйкүрпәс», «Ирекбай» кеүек эпик әҫәрҙәргә ҡағыла. Уларҙа, һис шикһеҙ, «сәсәнлек сәнғәте һәм халыҡ аҡылы» [67] сағыла.

Дөрөҫ, яҙма сығанаҡтарҙың теле фольклор әҫәрҙәренең теленән айырыла. «Уларҙың, яҙма формала булыуҙан тыш, ҙур ғына текстарҙа бирелеүҙәре тел сараларын икенсе төрлөрәк ойоштороуҙы талап иткән» [68].

Был положениеның дөрөҫлөгө Рабғузи исеме менән билдәле булған Насретдин бине Борхан әт-Динден «Ҡисас-әл-әнбийә» («Пәйғәмбәрҙәр хаҡында хикәйәләр»), Ҡотбтоң «Хөсрәү вә Ширин», Хорезмиҙың «Мөхәббәт намә»һе һымаҡ XIV быуат ҡомартҡыларының телендә шаҡтай асыҡ сағыла. Был һанап үтелгән һәм йәнә башҡа әҫәрҙәр Урал — Волга буйында киң таралыш ала.

«Пәйғәмбәрҙәр хаҡындағы хикәйәләр» теленең нигеҙендә уйғыр-ҡарлуҡ теле ята. Уға уғыҙ төркөмөндәге төрки телдәренең дә бер аҙ йоғонтоһо була. Рабғузиҙың «Ҡисас-әл-әнбийә» әҫәренең теле Урта Азия төркийенең артабан айырым үҫеп китешенә база була [69]. Волга буйында һәм Уралда Рабғузиҙың «Пәйғәмбәрҙәр хаҡында хикәйәләр»е Урта Азияға ҡарағанда бер ни тиклем һуңыраҡ тарала.

Урал һәм Волга буйы төркийенең үҙенсәлекле һыҙаттарының артабанғы үҫеше XIV быуатта Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин», Хорезмиҙың «Мөхәббәт намә», Хөсәм Кәтибтең «Жөмжөмә-солтан», Сәғдиҙең Сәйф Сараи тарафынан фарсы теленән тәржемә ителгән «Гөлстан», Ғ. Болғариҙың «Нәһж әл-фәрәдис» («Ожмах ҡапҡалары») әҙәби әҫәрҙәренең барлыҡҡа килеүе менән бәйле.

Һанап үтелгән әҙәби ҡомартҡыларҙың һәр береһенең теле әҫәрҙең йөкмәткеһе менән билдәләнә. Мәҫәлән, «Мөхәббәт намә», «Хөсрәү вә Ширин» һәм төркисәгә тәржемә ителгән «Гөлстан» әҫәрҙәренең теле Ғ. Болғариҙың дини-дидактик характерҙағы «Ожмах ҡапҡалары» теленән байтаҡ айырыла. Һуңғыһының теле бер

---

[66] Хусаинов Г. Б. Күрһәтелгән хеҙмәт. 20-се бит.

[67] Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа. Уфа, 1973. 67-се бит.

[68] Филин Ф. П. Истоки и судьбы русского литературного языка. М., 1981. 209-сы бит.

[69] Наджип Э. Н. «Мухаббат-наме» Хорезми. М., 1961. 7-се бит.

ни тиклем консерватив, унда, бынан алдағы осорҙар ҡомартҡылары телендәге кеүек, ғәрәп-фарсы лексикаһы, дини һәм архаик һүҙҙәр, грамматик формалар, ҡатмарлы һәм буталсыҡ синтаксик конструкциялар күп.

Уйғыр-ҡарлуҡ әҙәби теле Ғ. Болғариҙың «Нәһж әл-фәрәдис», Хорезмиҙың «Мөхәббәт намә», Ҡотбтоң «Хәсрәү вә Ширин», шулай уҡ тәржемә ителгән «Гөлстан» әҫәрҙәре теленә традицион йоғонтоһон һиҙелерлек юғалта. Улар шул ваҡыттағы Урал — Волга буйының лексикаһы бай, художестволылыҡ йәһәтенән үҫешкән һәм стилистик яҡтан камиллашҡан төрки телендә яҙылған була.

Алтын Урҙа осоро Урал һәм Волга буйы төркийе, ҡағиҙә булараҡ, лингвистик күҙлектән сығып ҡына яҡтыртыла. Уның яҙма әҙәби тел булыуын иғтибарға алғанда, оҙайлы үҫеш тарихы осоронда төрки телле халыҡтарҙың әҙәби теленең формаль һәм байтаҡ дәрәжәлә лексик яғын билдәләү йәһәтенән уны үҙенә күрә үрнәк, тип иҫәпләргә мөмкин.

Конкрет тарихи шарттар һәм законлылыҡтар арҡаһында башҡорттар Алтын Урҙа осоро Урал — Волга буйы төркийен әҙәби тел функцияһында файҙалана. Э. Н. Нәжип, Алтын Урҙа әҙәби теле бик ҙур территорияла, йәғни Һырдаръяның түбәнге ағымы бассейнында, Хорезмиҙың төньяғында, Урал һәм Волга буйында йәшәүсе байтаҡ ҡәбиләләр өсөн уртаҡ тел була, тип яҙа. «Һуңынан был ҡәбиләләр тотош халыҡтар һәм милләттәрҙән хәҙерге үзбәктәрҙе, ҡаҙаҡ, башҡорт, төрөкмән, татар, Ҡырым татарҙарын һәм башҡаларҙы формалаштырыуҙа ҡатнаша. Шуға ла ошо территорияла ижад ителгән был осор әҙәби ҡомартҡыларын аталып үтелгән халыҡтарҙың уртаҡ байлығы, уртаҡ мираҫы, тип иҫәпләргә тулы нигеҙ бар»[70].

Алтын Урҙа осоро әҙәби әҫәрҙәренең лексикаһы менән морфологияһында ҡыпсаҡ нигеҙе өҫтөнлөк ала, ә уғыҙ элементтары шаҡтай аҙ процент тәшкил итә. Шуға күрә художестволы әҫәрҙәрҙең теле ябай һәм аңлайышлы.

XIII—XIV быуаттар осоро Урал — Волга буйы төркийенең яҙма теленә хас булған иң характерлы үҙенсәлектәрҙе билдәләп үтәйек. Фонетик үҙенсәлектәр: ҡайһы бер осраҡтарҙа һүҙ уртаһында *д, ғ* тартынҡылары ҡулланыла (*адаҡ* «аяҡ», *ағыҙ* «ауыҙ» һ. б.), айырым һүҙҙәрҙең аҙағында *ҡ, ғ* тартынҡылары һаҡлана (*кичик* «кесе», *ҡороҡ* «ҡоро» һ. б.), һүҙ башында күпселек *й* өнө килә (*йаҡа* «яға, яҡа», *йаҡту* «яҡты», *йалған* «ялған», *йер* «ер», *йел* «ел», *йыраҡ* «йыраҡ» һ. б.), ҡайһы бер һүҙҙәрҙең башында *г, д* өндәре ҡулланыла (*гөз* «күҙ», *гел-* «кил-», *дағы* «тағы», *де-* «ти-» һ. б.), *бу* «был» күрһәтеү алмашы килеш менән үҙгәргәндә *б* һәм *м* өндәренең сиратлашыуы (*муны* «быны, мыны», *мунын* «бының, мының»); морфологик үҙенсәлектәр: 1-се һәм 2-се зат ялғауҙарының зат алмаштары менән тап килеүе (*терекмен* «теремен», *көзүмсин* «күҙем һин», *син китүрсин* «һин китерһең» һ. б.), эйәлек ялғаулы урын-ваҡыт һәм сығанаҡ килештәрҙә этимологик *н* өнө-

[70] Наджип Э. Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 19-сы бит.

нөң элеккесә йөрөүе (*телендә* «телендә», *эшләриндин* «эштәренән», *ичинда* «эсендә» һ. б.), эйәлек ялғауҙарынан һуң төшөм килештең ҡыҫҡартылған формаһының өҫтөнлөк итеүе (*башын* «башын», *тәңренең атын* «тәңренең атын, алланың исемен», әммә *сачыны* «сәсен», *ҡулыны* «ҡулын» һ. б.), төбәү килештә күпселек *-гә//-кә, -ға//-ҡа* ҡыпсаҡ аффикстарының ҡулланылыуы менән бер рәттән *-а//-ә* уғыҙ ялғауҙары ла осрай (*ханға* «ханға», *сүзгә* «һүҙгә», *белемгә* «белемгә», әммә *гөзләрә* «күҙҙәргә», *сезә* «һеҙгә» һ. б.), *-ған//-гән* формалы сифат ҡылымдар менән берлектә ҡайһы бер осраҡтарҙа *-мыш//-меш* ялғаулы сифат ҡылымдар ҙа осрай (*сез үлтергән кеше* «һеҙ үлтергән кеше», *вафа ҡылған кеше* «ышаныслы кеше», әммә *ачыҡмыш бүре* «ас бүре», *йад ҡылынмыш меҫкен* «иҫкә алынған меҫкен» һ. б.), һирәк осраҡтарҙа сифат ҡылымдың *-ан//-ән* аффикслы уғыҙ формаһы ҡулланылыуы күҙәтелә (*тулан ай кеби* «тулған ай кеүек», *гөлән ҡыз* «көләс ҡыҙ»), берлектәге 2-се зат бойороҡ ҡылым, ҡылымдың нигеҙенән тыш, *-ғын* һәм *-ғыл* ялғауҙары менән дә белдерелә (*ғәзәлне гөш ҡылғын* «ғәзәлде аңлау кәрәк», *олтурмағыл* «ултырма» һ. б.), *-ар//-әр* ялғаулы ҡылым формаһы хәҙерге һәм киләсәк заман эш-хәрәкәтте белдерә (*бөгөн шөкрин ҡылурмын* «һиңә бөгөн рәхмәт белдерермен», *«шәһдигә охшар»* «балға оҡшаған//балға оҡшаған булыр» һ. б.), киләсәк заманды белдереүсе *-сар* формалы ҡылым ҡулланылыусан (*гөлләр сулысар* «гөлдәр һулыр», *топраҡ булысар* «(үлгәс) тупраҡ булыр» һ. б.).

Борон замандан килгән һәм үҙләштерелгән лексика Алтын Урҙа осоро художестволы әҫәрҙәренең, шулай уҡ бынан алдағы һәм унан һуңғы быуаттарҙағы әҙәби ҡомарҭҡылар теле өсөн уртаҡҡа әйләнә. Сағыштырығыҙ: *ачыҡ* «әсе; асыулы», *асра-* «аҫра-», *аш* «аш», *аша-* «аша-», *урам* «урам», *уруғ//ороғ* «ырыу», *үлтер-* «үлтер-», *олоғ* «оло; бөйөк», *илле* «илле», *баҡ-* «баҡ-», *дағы//тағы* «тағы», *төн* «кис; кисә», *дәгүл* «түгел», *ҡамчы* «ҡамсы», *күрк* «күркәмлек», *китур-* «килтер-», *йаҡту* «яҡты», *көн* «көн», *кер-* «кер-», *мал* «мал; байлыҡ», *нур* «нур», *нилүк* «нилектән; ни өсөн», *йәш* «йәш, күҙ йәше», *йәшә-* «йәшә-», *йалған* «ялған», *йыраҡ* «йыраҡ», *йөрө-* «йөрө-», *йул* «юл», *йыу-* «йыу-», *йер* «ер» *һ. б.*

Ҡыпсаҡ нигеҙе XIII—XIV быуаттар әҙәби теленең базаһын тәшкил итһә лә, унда бер ни тиклем уғыҙ төркөмө телдәре өсөн хас булған лексик ҡатламды, ҡайһы бер формаларҙы һәм мәғәнәләрҙе айырып күрһәтергә мөмкин. Мәҫәлән: *эл* «ҡул», *әйлә-* «эшлә-; ит-», *эв* «өй», *үзә* «өҫтөнә, өҫтөнән, өҫтөндә», *улус* «халыҡ», *дудаҡ* «ирен», *куртул-* «ҡотол-», *йоғрул-* «ҡушылған йәки ҡатыштырылған бул-» һ. б.

«Мөхәббәт намә», «Хөсрәү вә Ширин», «Нәһж әл-фәрәдис» әҫәрҙәренең һәм XIII—XIV быуаттар осорондағы башҡа әҙәби ҡомарҭҡыларҙың лексикаһын анализлау уларҙың составында Алтын Урҙа ҡомарҭҡылары телендә архаизмдар йәки ҡайһы бер һүҙҙәрҙең иҫкергән формалары булып һаналғандарын билдәләргә мөмкинлек бирә. *Миҫалдар: ажун* «донъя, ер йөҙө», *тигмә* «һәр, һәр бер; һәр кем», *әсру* «бик, ифрат», *битекче* «[күсереп] яҙыусы»,

*текин* «саҡлы, тиклем», *ҡамуғ* «бөтә», *ҡайыу* «ниндәй; ҡайһы», *нилүк* «ни өсөн; ниңә», *йармаҡ* «аҡса» һ. б.

XIII—XIV быуаттарҙа төрки халыҡтарының әҙәби ҡомартҡылары теленә тажик-фарсы һәм ғәрәп әҙәбиәте ҙур йоғонто яһай. Был йоғонтонан шул осорҙағы Урал — Волга буйы әҙәби теле лә ситтә ҡалмай. Ғәрәп-фарсы жанрҙары, формалары һәм метрикаһы менән бергә бик күп ғәрәп һәм фарсы алынмалары ла килеп инә. Бына шуға ла XIII быуат — XIV быуаттың беренсе яртыһы дәүерендәге әҙәби ҡомартҡылар лексикаһының билдәле бер өлөшөн ғәрәп-фарсы үҙләштермәләре алып тора. Шуныһы характерлы: алынмаларҙың күбеһе теге йәки был абстракт төшөнсәләрҙе аңлата йә иһә улар поэтик лексиканың бер өлөшөн тәшкил итә. Сағыштырығыҙ: *ижәбәт* «ҡабул итеү», *ижәзәт* «рөхсәт», *ихтираҡ* «ялҡын, яныу», *иҡбал* «бәхет; рәхәт тормош», *илтимас* «үтенес, ялбарыу», *инжу* «тоғро ҡол», *баҡый* «мәңгелек, ғүмерлек», *бәзм* «туй, мәжлес», *бәлә* «бәлә», *бәйән* «аңлатыу, яҙып йәки һөйләп биреү», *би сәр-у-пай* «бик бәләкәй, бик аҙ; юҡ тип әйтерлек», *пәрвәз* «осоу; осош», *пәри рухсар* «бик матур; һылыу», *тәбәссүм* «йылмайыу», *ҫәнә* «маҡтау, дан», *джәду* «күңелде биләүсе, сихырсы», *джанан* «һөйөклө», *хайран* «хайран», *хумар* «дәрт, көслө теләк», *ғилем* «ғилем», *ғүмер* «ғүмер», *гәһед* «ант, вәғәҙә», *фани* «фани», *кәрәм* «рәхимлелек, миһырбанлыҡ», *мескен* «меҫкен», *меһр* «һөйөү» һ. б.

Һанап үтелгән ғәрәп-фарсы алынмаларының һәм уларҙың формаларының ҡайһы берҙәре артабанғы осорҙарҙағы әҙәби яҙма ҡомартҡыларҙа осрай (*әжәл* «әжәл», *әсхәб* «кешеләр; дуҫ-иштәр», *ғүмер* «ғүмер», *ғашиҡ* «ғашиҡ», *ғишыҡ* «ғишыҡ» һ. б.), икенселәре, архаизмдарға әйләнеп, бик күп ҡомартҡыларҙың һүҙлек составынан төшөп ҡала (*арай* «биҙәүсе», *әрмәған* «бүләк», *әсрар* «сер», *иҡбал* «бәхет; рәхәт йәшәү», *чәхрә* «йөҙ; сырай» һ. б.), өсөнсөләре бара-тора төрки әҙәби телдәренә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә апеллятив лексиканан (уртаҡлыҡ исем) ономастик лексикаға, дөрөҫөрәге кеше исемдәренә күсә (*хәбиб* «дуҫ»>Хәбиб (ир-егет исеме), *дәриғ* «ай-һай»>Дәриғә (ҡатын-ҡыҙ исеме), *кәрәм* «яҡшылыҡ»>Ҡарам (ир-егет исеме), *кәрим* «киң күңелле, мәрхәмәтле»>Кәрим (ир-егет исеме), Кәримә (ҡатын-ҡыҙ исеме), *морад* «маҡсат, теләк»>Морад (ир-егет исеме), *мостафа* «һайлап алынған»>Мостафа (ир-егет исеме), *мәҡсүд* «ниәт ителгән, теләп алынған»>Мәҡсүд (ир-егет исеме), *нәсим* «йомшаҡ ел»>Нәсим (ир-егет исеме), Нәсимә (ҡатын-ҡыҙ исеме) һ. б.

Алтын Урҙа осоро Урал — Волга буйы төркийенең ғәрәп-фарсы алынмалары араһында билдәле бер өлөштө дини лексика алып тора. Мәҫәлән: *иман* «иман», *ожмах* «ожмах», *фәриштә* «фәрештә», *хаҡ* «алла, тәңре», *ходa* «хоҙа, хоҙай» һ. б. Был лексиканың бер өлөшө башҡа ғәрәп-фарсы алынмалары менән бергә артабанғы быуаттар әҙәби телендә лә осрай.

XIII—XIV быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки әҙәби телендә үҙҙәренең төп мәғәнәләренән тыш художестволы, поэтик функциялар үтәүсе һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе айырым-асыҡ

билдәләргә мөмкин. Миҫалдар: *хыял* «хыял», *дилруба* «күңелдәрҙе биләүсе», *сайрамаҡ* «һайрау», *булбул* «һандуғас, былбыл», *сунбул* «сөмбөл», *гулчаһра* «алһыу йөҙлө», *мөхәббәт* «мөхәббәт», *әжәл* «әжәл», *иҡбал* «бәхет; рәхәт тормош», *нур* «нур» һ. б.; *ал йаңаҡ* «алһыу йөҙлө (яңаҡлы)», *ғумер бағы* «ғүмер баҡсаһы», *таза гөл* «таҙа гөл», *сайрар булбулың* «һайрар былбылың (һандуғасың)», *күңелеми көйөрди* «йөрәгемде яндырҙы», *йавуз күз* «яуыз (яман) күҙ» һ. б.

XIII—XIV быуаттар осоро Урал — Волга буйы төркийендә йыш ҡына аныҡлаусы һәм эпитеттар функцияһында ҡулланылған һүҙҙәр ҙә осрай. Мәҫәлән: *латыф* «зифа, нәфис; яғымлы», *мәғрур* «мәғрүр», *вафалыҡ* «тоғро», *вафалыҡ ҡол* «тоғро ҡол», *яҡут* «яҡут; ҡыҙыл яҡут», *яҡут иренледә* «ҡыҙыл яҡут иренлелә», *ширин* «татлы, тәмле», *ширин сүзле* «татлы һүҙле», *ҡәмәр* «ай; айлы», *ҡәмәр күзлү* «ай күҙле».

Байтаҡ синонимдар ҙа теркәлгән. Уларҙың бер өлөшө фәҡәт үҙ заманы өсөн генә норматив була. Синонимдарҙың икенсе өлөшө артабанғы осорҙар әҙәби ҡомартҡыларының телендә лә осрай. Сағыштырығыҙ: *әнжәм//тамам//хәтимә* «ахыр, тамам, бөтөү», *хуршид//көн//ҡояш* «ҡояш, көн», *дудағ//ирен* «ирен», *шәкәр//кәнд* «шәкәр», *шәһд//бал* «бал», *ваҡыт//форсат//заман* «ваҡыт, уңайлы ваҡыт», *ҡараҡчы//уғры* «ҡараҡ, уғры», *ай//ҡәмәр* «ай», *тор-//ҡуб-* «тор-», *фәҡир//гәдә* «фәҡир», *гәүһәр//инже//ләлә* «гәүһәр, ынйы», *ай//маһ* «ай», *меһр//мөһәббәт//ғышыҡ* «мөхәббәт, ғишыҡ», *нәдим//нүкәр//ҡол* «хеҙмәтсе», *һәр даим//һәмишә* «һәр ваҡыт, гел, даими», *һич//һәргиз* «бер ҡасан да, бер ваҡытта ла», *күңел//йөрәк* «күңел; йөрәк», *сәғәдәт//бәхет* «бәхет», *дилбәр//дилруба* «сибәр, күңелдәрҙе биләүсе» һ. б.

XIII—XIV быуаттар авторҙары Хорезми, Ҡотб, Ғ. Болғари һәм башҡалар үҙ әҫәрҙәрендә художестволы сараларҙан метафораны (күсмә мәғәнәлә әйтелгән һүҙҙәрҙе) киң ҡулланалар. Мәҫәлән: *ашйан* «оя», күсмә мәғәнәһе «һыйыныр урын, ышыҡ урын», *арслан* «арыҫлан», күсмә мәғәнәһе «ҡыйыу, батыр», *арслан йөрәк* «арыҫлан йөрәк, ҡыйыу йөрәк», *алма* «алма», күсмә мәғәнәһе «ҡатын-ҡыҙ түше», *ҡулум алмаңызға тимәде һеч* «ҡулым түшегеҙгә (һеҙҙең) теймәне һис», *лаал* «ҡыҙыл яҡут», күсмә мәғәнәһе «сибәркәйҙең ирендәре», *лаал үзрә* «ирендәреңдә һинең», *ҡараҡчы* «ҡараҡ», күсмә мәғәнәһе «һөйгән йәрҙең күҙҙәре», *нәвәк* «керпектәр», күсмә мәғәнәһе «уҡ», *нәргис* «нәркәс (гөл)», күсмә мәғәнәһе «һөйгән йәрҙең күҙҙәре», *урур нәргисләрең нәвәкни жанға* «күҙҙәрең һинең йөрәгемде ата уҡ булып» һ. б.

Алтын Урҙа осоро әҫәрҙәренең һәм уларҙағы образдарҙың художестволылығы сағыштырыуҙарҙы оҫта файҙаланыу арҡаһында тормошҡа аша. Миҫалдар: *таң йаҡтусы тек* «таң яҡтыһындай», *тулан ай дек* «тулған айҙай», *шәкәр дек тел* «шәкәрҙәй (татлы) тел», *шәкәрдин татлы сүзле дилрубасы* «сибәренең шәкәрҙән дә татлылыр телдәре», *пәри хурдин һәм көрклүрәк син* «хур ҡыҙҙарынан да матурһың һин» һ. б. Һөйгән йәр образы *яҙ, ҡояш, ай* булып күҙ алдына баҫа, уның йөҙө шулай уҡ ҡояш һәм ай менән,

ҡаштары айға, тештәре ынйыға, әйткән һүҙҙәре, йәғни теле, татлылыҡта шәкәргә сағыштырыла. Мәҫәлән: *Сән айны бөйлә би нуҡсан йаратты* «Һине, айҙы ниндәй камил итеп яратҡан»; *Ҡойаш йанлығ йөзеңезни йаратты* «Хоҙай һеҙҙең йөҙөгөҙҙө балҡып торған ҡояштай итеп яратҡан»; *ысырған данасы — Зөхрә, йөзең — ай* «Зөһрә — алҡаңдағы ни бары бер бәләкәй генә таштыр, ә ай — һинең йөҙөңдөр!»; *Йөзең — нәвруз, ҡашың — байрам айы* «Яҙҙыр һинең йөҙҙәрең, тыуып килгән айҙыр һинең ҡаштарың»; *Тешең, ләәлең — гәүһәр жан дәржи ичрә. Йөзең, ҡашың — ҡояш ай бурджи ичрә* «Затлы ирен-ҡумталарҙағы ынйылыр һинең тештәрең. Ай-ҡаштарындағы йондоҙлоҡтоң ҡояшылыр һинең йөҙҙәрең» һ. б.

Шулай итеп, XIII—XIV быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийендә әҫәрҙәрҙең темаһын, идеяһын һәм образын художестволы асыу өсөн шул осор әҙәби телендә, арыу уҡ нығынып китеп, поэтик лексикаға әйләнгән билдәле бер эпитеттар, синонимдар, антонимдар һ. б. теҙмәһе ҡулланыла.

XIII—XIV быуаттарҙа Алтын Урҙа әҫәрҙәренең теле төрки халыҡтары, шул иҫәптән татарҙар һәм башҡорттар араһында, Ҡытай, Японияның[71] һәм уйғыр ҡағанлығының[72] боронғо әҙәби телдәре һымаҡ, фәҡәт яҙма формала аралашыу теле булыуын дауам итә.

Урал — Волга буйы төркийенең формалашыуына һәм үҫешенә, уның художестволы алымдары һәм сараларының камиллаша барыуына башҡорттарҙың бай ауыҙ-тел ижады традициялары нық ҡына йоғонто яһай. Эпостарҙа һәм төрлө жанрҙарға ҡараған яҙма ҡомартҡыларҙа (поэтик әҫәрҙәрҙә, шәжәрәләрҙә һ. б.) хикәйәләү тәртибе быға асыҡ миҫал. Мәҫәлән, эпоста ла, әҙәби әҫәрҙәр менән шәжәрәләрҙә лә *көнләрдин бер көн* «көндәрҙән бер көн», *борын-борын заманда* «борон-борон заманда», *...дип әйтә икән* «...тип әйтә икән», *бер хикәйәт ҡылайым* «һөйләйем әле», *бар иде* «бар ине», *тыңла имде* «хәҙер тыңла инде» һымаҡ бер үк типтағы конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр осрай. Йәнә сағыштырығыҙ: *Заманасында бер ғалим бар иде Әхнәф бине Ҡайс тип әйтүр ирделәр* (Мәхмүт бине Ғәли «Наһж әл-фәрәдис») «Заманында бер ғалим бар ине, уны Ҡайс улы Әхнәф тип йөрөткәндәр»; *Шәйех Сәғди әйтүр: сүһбәтемездә бер йегет бар иде...* (С. Сараи «Гөлстан») «Шәйех Сәғди былай тигән: «Беҙҙең әңгәмәләшеүҙә бер йәш кеше ҡатнашты...» һ. б.

Әҙәби телгә һәм ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре теленә бер үк сағыштырыуҙар һәм һүрәтләүҙәр хас. Миҫалдар: *йөзе — тулған ай* «йөҙө тулған ай», *күзе — ҡара* «күҙе ҡара», *иренләре — шәкәр* «ирендәре — шәкәр», *керфекләре уҡ кебе* «керпектәре уҡ кеүек», *сүзе бал-шәкәрдән татлы* «һүҙе бал-шәкәрҙән татлы» һ. б. XIII—XIV быуаттарҙағы төрки яҙма әҙәби телендә лә һәм халыҡтың

---

[71] Гухман М. М. Литературный язык // Общее языкознание. М., 1970. 528-се, 545-се биттәр.

[72] Тенишев Э. Р. Функционально-стилистическая характеристика древнеуйгурского литературного языка // Социальная и функциональная дифференциация литературных языков. М., 1977. 61--78-се биттәр.

ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре телендә лә батырлыҡ һәм ҡыйыулыҡ юлбарыҫ менән сағыштырыла, унан тыш романтик гиперболалар ҙа осрай (дейеү пәрейҙәре, аждаһалар һ. б. менән сағыштырыуҙар).

Урал — Волга буйы төркийендәге кеүек үк халыҡтың ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре телендә лә тура телмәр автор телмәре менән *...диде ирсә...* «тип әйтһә», *...әйде кем...* «тип әйтте», *...диб жауаб бирде* «тип яуап бирҙе» һымаҡ трафареттар ярҙамында бәйләнеп килә.

XIII быуаттан алып XIV быуаттың беренсе яртыһына тиклем әҙәбиәт теленең поэтикаһы халыҡтың ауыҙ-тел ижадының үҙенсәлекле теге йәки был тел саралары менән тығыҙ бәйләнгән. Әҫәрҙең жанрына бәйле рәүештә автор көнсығыш әҙәбиәте алымдары менән бер рәттән халыҡ ижады әҫәрҙәре теленән алынған элементтарҙы ла файҙалана. Йәнле һөйләү теле нормаларына тиңләшеүгә булған ынтылыш, сығышы менән ғәрәп-фарсынан килгән ҡыйын һәм ҡатмарлы конструкцияларҙан, аңлашылып етмәгән һүҙҙәр һәм әйтелештәрҙән ҡотолорға теләү, нисек тә булһа халыҡ теленә яҡынайырға тырышыу билдәле бер кимәлдә Урал — Волга буйы төркийенең артабанғы үҫеш осорҙарында ла күренә.

Урал — Волга буйы төркийенең үҫеш тарихында Алтын Урҙа осорона ҡараған хан ярлыҡтары теле лә айырым ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Улар араһында Туҡтамыш һәм Тимер Ҡотлоҡ ярлыҡтары әүәлгерәк осорҙағылар булып иҫәпләнә. В. В. Радловтың фекеренсә, хан ярлыҡтары телендә әүәлге яҙма, мәҫәлән, уйғыр һәм Урта Азия төркийе традицияларының дөйөм төрки элементтары меменән бер рәттән урындағы, йәғни көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш төрки халыҡтары телдәрендәге, элементтар ҙа мөһим өлөш алып тора. Алтын Урҙа акт документтарының һәм канцелярияһының тел үҙенсәлеге, бер яҡтан, ошондай тарихи сәбәптәр арҡаһында килеп сыҡҡан төрлөлөктә, икенсе яҡтан, ерле һөйләштәр менән тығыҙ бәйләнештә сағыла ла [73]. Был ярлыҡтарҙың теле һәм стиле ябай булыуы менән айырыла. Сағыштырығыҙ: *Бу йарлыҡны тотоп торған кешегә мәғлүм булсун* «Был ярлыҡты тотоп торған кешегә мәғлүм булһын», *базарда торғандарға* «баҙарҙа торғандарға» һ. б.

XIV—XV быуаттарҙа шул дәүергә хас булған үҙ ижтимағи-политик терминологияһы эшләнә. Мәҫәлән, ярлыҡтар телендә армияны унарлы система нигеҙендә ойоштороу менән бәйле хәрби терминология сағылыш таба (*меңләр* «меңдәр», *йөзләр* «йөҙҙәр», *төмән* «ун меңлеләр» һ. б.). Шулай уҡ XVIII—XIX быуаттарҙағы һуңғыраҡ акт документтәры телендә осрай торған ижтимағи-политик һәм башҡа терминдар ҙа теркәлгән: *илче* «илсе», *бәк* «бәк», *катиб* «[күсереп] яҙыусы», *битикче//биткәче* «[күсереп] яҙыусы; писер», *шарт намә* «договор хаты» һ. б. Ярлыҡтарҙа акт һәм эш ҡағыҙҙары стиленә хас булған ҡалыплашҡан һөйләмдәр барлыҡ-

---

[73] Усманов М. А. Жалованные акты Джучиева улуса XIV—XVI вв. Казань, 1979. 107-се бит.

ҡа килә: *...мәғлүм булсун* «мәғлүм булһын», *безнең сүз ол* «беҙҙең һүҙ бына шул, беҙҙең һүҙ түбәндәгесә», *Тоҡтамыш сүзүмүз олдырки* «беҙҙең Туҡтамыштың һүҙе бына шул//беҙҙең Туҡтамыштың һүҙе түбәндәгесә» һ. б.

Болғар, унан һуң Алтын Урҙа осорҙары әҙәби ҡомартҡыларының теле уйғыр һәм ғәрәп яҙмалы боронғо төрки, шулай уҡ һуңғыраҡ дәүерҙәге Урал — Волга буйы төрки ҡомартҡылары телдәре араһында уларҙы тоташтырып тороусы бер быуын булып тора.

Болғар һәм Алтын Урҙа осорҙарына ҡараған Урал — Волга буйы әҙәби телендә боронғо төрки ҡомартҡыларының күбеһенең теленә хас булған байтаҡ лексик-грамматик үҙенсәлектәр менән синтаксик конструкцияларҙы осратырға мөмкин.

XIV—XV быуаттарҙағы Алтын Урҙа ҡомартҡыларының теленән һуңғыраҡ осорҙағы Урал — Волга буйы төрки әҙәби теле типологияһына күпер һалырға мөмкинлек тыуа. Һуңғыһына әкренләп шул регионда йәшәүсе этник төркөмдәрҙең ерле һөйләштәренә хас булған байтаҡ диалекталь үҙенсәлектәр килеп инә башлай. Тап ошондай специфик үҙенсәлектәр артабан теге йәки был халыҡтың әҙәби теленең бүленеп сығыуына алып килә лә.

Эске ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан өҙгөләнгән Алтын Урҙа тиҙ һәм ҡотолғоһоҙ рәүештә политик яҡтан тулыһынса тарҡалыуға табан бара. Алтын Урҙа емереклектәре ерлегендә Нуғай, Әстрхан, Ҡазан, Себер ханлыҡтары үҫеп сыға һәм нығына.

Был осорҙағы әҙәбиәттә бер ни ҡәҙәр «Ғәли батыр» серияһынан булған дини-дидактик, дини-героик дастандар өҫтөнлөк ала. Улар араһында «Ҡиҫекбаш», «Ҡисса-йи Сәкәм», «Ҡисса-йи Ибраһим», «Ҡисса-йи Фәттәхетдин» һымаҡ дастандар айырым урын алып тора. Аталып үтелгәндәрҙән тыш, башҡа әҫәрҙәрҙә лә дини һәм донъяуи мотивтарҙың үрелеп килеүе хас. Был иһә үҙ сиратында уларҙың телендә лә билдәле бер эҙ ҡалдыра. Дастандарҙың художестволы һәм стилистик үҙенсәлектәре фантастикаға һәм саманан тыш ҡабартыуға, ғәрәп-фарсы әҫәрҙәре менән көнсығыш әкиәттәре традицияларына нигеҙләнгән [74].

Дүрт ханлыҡ хакимлыҡ иткән осорҙағы әҙәби ҡомартҡылар күп түгел. Улар араһында, алда әйтелеп үтелгән дастандарҙан тыш, бигерәк тә Мөхәммәтйәрҙең «Төхфә-йи мәрҙән» («Ирҙәр бүләге») һәм «Нур-и Содур» («Йөрәктәр яҡтыһы») поэмаларын, шулай уҡ исемдәре билдәһеҙ булған бүтән шағирҙарҙың әҫәрҙәрен айырып күрһәтергә кәрәк. Бөтә был әҫәрҙәр феодализм эпохаһы өсөн хас дини-әхләҡи йөкмәткеле була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, телгә алынған поэмалар беҙҙең көндәргә саҡлы оригиналда килеп етә алмаған, шунлыҡтан уларҙың тел үҙенсәлектәре хаҡында нимә булһа ла аныҡ ҡына әйтеүе ҡыйын.

Был осорҙағы яҙма ҡомартҡылар телендә ғәрәп, фарсы, бо-

---

[74] История башкирской литературы в 5-и томах: План-проспект. Уфа, 1979. 11-се бит.

ронғо төрки һәм уғыҙ телдәре лексикаһы, ҡатмарлы һәм аңлашылып етмәгән грамматик формалар, синтаксик конструкциялар өҫтөнлөк ала. Был күренеш әҙәби тел менән һөйләү теле араһында ҙур ғына айырмалыҡтар барлыҡҡа килтерә [75].

XIII быуаттан XVI быуатҡа тиклемге дәүерҙә башҡорттар әкренләп күсмә малсылыҡтан ярымкүсмә тормошҡа күсәләр. Был күренеш, Р. Ғ. Кузеев билдәләүенсә, ырыу-ҡәбилә территориялары сиктәренең тотороҡланыуына, хужалыҡтың үҫеүенә һәм үҙенсәлекле мәҙәниәт һыҙаттарының формалашып етеүенә килтерә. «Былар бөтәһе лә тыуған ергә бәйлелек, күрше ҡәбиләләр менән тығыҙ аралашыу тойғолары тәрбиәләгән. Башҡорттарҙың күсмә хужалыҡтан ярымкүсмә тормошҡа күсеүҙәре уларҙың тамам халыҡ булып формалашыуындағы тәүшарттарҙың береһе була» [78].

Төрлө хандарҙың, мырҙаларҙың һәм үҙ феодалдарының аяуһыҙ иҙеүенең көсәйеүе башҡорт халҡы араһында килешмәүсәнлек һәм ҡаршылыҡ тыуҙыра. Халыҡтың үҙаңы үҫә, бойондороҡһоҙлоҡ һәм азатлыҡ идеялары ныҒый бара.

Был күренештәрҙе тасуирлаған яҙма ҡомартҡылар һаҡланмаған, ләкин башҡорт халҡының үткән ауыр тормошо, үҙаңының үҫә барыуы һәм иҙеүселәргә ҡаршы көрәшеүҙәре уларҙың эпостарында, ҡобайырҙарында, тарихи йырҙарында, шәжәрәләрендә һәм хикәйәттәрендә киң сағылыш таба.

XIX быуаттың икенсе яртыһы осорондағы тыуған яҡты өйрәнеүсе тарихсы Р. Г. Игнатьев үҙ ваҡытында бик ҙур ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Ул Башҡортостандың боронғо материаль ҡомартҡылары менән бер рәттән халыҡ ижады үрнәктәрен дә өйрәнә [77].

«Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостары башҡорт халҡы тарихындағы ҡатмарлы осорҙоң поэтик сағылышы булып әүерелә. Туҡтауһыҙ үҙ-ара бәрелештәр ҡобайырҙарҙа, әйтештәрҙә, шулай уҡ башта һөйләү, һуңыраҡ яҙма формала таралған генеалогик йылъяҙмаларҙа, йәғни шәжәрәләрҙә, асыҡ сағыла. Мәҫәлән, «Һуңғы һартай» ҡобайырында башҡорттарҙың Аҡһаҡ Тимергә ҡаршы көрәшеүҙәре күҙәләндерелә. «Ирекбай», «Мамай хан хикәйәте» кеүек ҡобайырҙарҙа социаль-тарихи проблемалар күтәрелә. «Мамай хан хикәйәте» ҡобайырындағы факттар, хәл-ваҡиғалар, шәхестәр Башҡортостандың Нуғай ханлығы аҫтында булған осорҙо, йәғни XI быуаттан алып XVII быуаттың башына тиклемге ваҡыт һуҙымын үҙ эсенә ала.

Башҡорт эпостарының сюжеттары менән йөкмәткеләре ҡатмарлы һәм күп төрлө. Эпик әҫәрҙәр араһында башҡорттарҙың төп

[75] Хаков В. Х. Татар әдәби теле тарихы буенча очерклар. Казан, 1965. 68-се бит.

[76] Ҡузеев Р. Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 491-се бит.

[77] Игнатьев Р. Г. Сказания, сказки и песни, сохранившиеся в рукописях татарской письменности и устных пересказах у инородцев-магометан Оренбургского края. Оренбург, 1875.

үҙҙәренеке генә булғандары ла («Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Күсәк бей», «Алдар һәм Зөһрә») һәм башҡа төрки халыҡтары менән уртаҡ булғандары ла («Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»», «Буҙйегет») бар.

Эпостарҙа башҡорт ырыуҙарының тормош-көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре, Әстрхан, Нуғай, Ҡазан, Себер ханлыҡтарының бөтә барыуы һәм тарҡалыуы, башҡорт ҡәбилә һәм ырыуҙарының үҙ-ара һуғышыуҙары менән бер үк ваҡытта дауам иткән этник үсеш процестары яҡтыртыла.

«Урта быуат әҙәбиәттәренең үҙ тибы һәм үсеш темпы була»[78]. Был фекерҙе үстереп шуны әйтергә була: Урал — Волга буйы яҙма әҙәби төрки теленең дә үҙенә хас темпы һәм стиль үсеше була.

XIII быуаттан алып XIV быуаттың аҙаҡтарына саҡлы осорҙа дөйөм культураның күтәрелеүе менән бергә әҙәбиәттә лә уңышлыҡтар күренә (Хорезмиҙың «Мөхәббәт намә»һе, Ҡотбтоң «Хөсрәү вә Ширин»ы, Сәғдиҙең «Гөлстан»ы һ. б.). Урал — Волга буйы төрки теленең тарихи үсешендә лә ҡайһы бер үҙгәрештәр була. XIV быуат аҙағы — XVI быуаттың беренсе яртыһында әҙәби ижад һәм әҙәби тел башҡорттарҙа, ғөмүмән, төрлө тарихи шарттар нигеҙендә, башлыса һөйләү теле формаһында үҫә. Был осорҙа яҙма тел бик аҡрын тарала. Ғәрәп һүҙҙәре, иҫкергән грамматик формалар, синтаксик конструкциялар характерлы булған төрки теле әҙәби нормаларының алдынғы традицияларын һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә халыҡтың роле бик ҙур була.

XVI быуаттың беренсе яртыһында башҡорт ҡәбиләләренең иҙеүселәргә ҡаршы көрәше көсәйә. Был ваҡиғалар уларҙы социаль-этник яҡтан берләшеүгә, милли үҙаңдың артабан үҫеүенә һәм нығыныуына, үҙҙәренең бер милләт кешеләре булыуҙарын аңлауға алып килә. Шулай ҙа «...был дәүер шарттарында башҡорт ырыуҙарының тик үҙ көстәре менән генә политик берләшеүгә ынтылыуҙары тормошҡа ашырлыҡ булмай... Башҡорт ҡәбиләләренең бер үк ваҡытта тиерлек үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуҙары был процестың иң ныҡ көсөргәнешкә етеү моменты булып тора»[79].

Шулай итеп, башҡорт халҡы өсөн XIV быуат аҙағы — XVI быуаттың беренсе яртыһы уның экономикаһы һәм культураһы өсөн бик ауыр һәм бөлдөргөс осор һанала. Был дәүер әҙәбиәт һәм тел өсөн дә ҡатмарлы була.

XIV быуат аҙағы һәм XVI быуаттың беренсе яртыларында Урал — Волга буйы төркийе үҫешенең бер аҙ тотҡарланыуын һәм башҡорт халҡының Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң килеп тыуған ҙур үҙгәрештәрҙе ошо осорҙағы тарихи шарттарҙы иҫәпкә алмайынса аңлатып булмаҫ ине.

---

[78] Хусаинов Г. Б. Особенности развития литературы региона Урало-Поволжья в XI—XVIII вв. // Литературоведение и история: Тезисы докладов и сообщений. Ташкент, 1980. 20-се бит.

[79] Кузеев Р. Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 504-се бит.

*Икенсе глава*

## БАШҠОРТОСТАН РУС ДӘҮЛӘТЕНӘ ҠУШЫЛҒАНДАН ҺУҢ. ТӨРКИ ЯҘМА ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ҮҪЕҮЕ

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыу дәүеренән Урал — Волга төркийенең тарихи үҫешендә яңы этап башлана.

Башҡортостандың Рус дәүләте составына инеүе һөҙөмтәһендә Нуғай тархандары һәм мырҙаларының, Ҡазан һәм Себер хандарының ҡаты иҙеүҙәренә сик ҡуйыла. Башҡортостандың политик тарҡаулығы бөтөрөлә һәм башҡорт халҡы формалаша. Башҡорттарҙың тел һәм культура үҫеше дөйөм халыҡ үҫеше менән ҡушыла.

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы әҙәбиәттә яңы тарихи, социаль-экономик һәм культура өлкәһендәге үҙгәрештәрҙе сағылдырған яңы темалар, сюжет һәм мотивтар барлыҡҡа килеүгә этәргес яһай. Тыуған ил һәм тыуған ер темаһында яңы тарихи, административ, культура, географик һәм башҡа билдәләргә бәйле рәүештә поэтик дифференциациялау барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, әгәр ҙә элек төрки халыҡтарының политик һәм этник берҙәмлеге һаҡланған дәүерҙә үҙәк образда башлыса төрлө хандарға ҡаршы ажарланып һуғышҡан батырҙар, төрлө сит илбаҫарҙарынан тыуған ерҙе һаҡлауға өндәгән сәсәндәр, шулай уҡ патриархаль-община ҡоролошоноң башҡа бик күп геройҙары торған булһа, XVI быуаттың икенсе яртыһынан башлап төп герой һәм Тыуған ил темалары асыҡ һәм конкрет һыҙаттарҙа кәүҙәләнә башлай.

Художестволы әҫәрҙәрҙең тематикаһы элекке кеүек үк патриархаль община тормошона бәйле булһа ла, уларҙағы сюжет һыҙығы синфи ҡаршылыҡтарҙы сағылдыра һәм әхләҡ унда синфи характер ала башлай.

Художестволы әҫәрҙәрҙең тематикаһы үҙгәреүе, уларҙа яңы герой һәм образдарҙың барлыҡҡа килеүе XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга яҙма әҙәби төрки теленең артабанғы үҫешенә һәм формалашыуына йоғонто яһай.

Башҡорттарҙа, Рус дәүләте составына ингәндән һуң, дәүләт ҡоролошо үҫә һәм нығый башлай. Тәүге ҡалалар барлыҡҡа килә һәм үҫә. Мәҫәлән, XVI быуаттың аҙаҡҡы сирегендә Башҡортостанда Өфө ҡалаһы төҙөлә, 1586 йылдан башлап ул яһаҡ йыйыуҙың үҙәгенә әүерелә, «был инде башҡорттарҙы Рус дәүләте ҡаҙнаһына яһаҡ түләү өсөн яфаланып Ҡазанға йөрөүҙәренән азат итә» [1].

XVII быуаттың башында уҡ Өфөлә Урта Азия, Ҡазан, шулай уҡ Себер яҡтарындағы һәм башҡа ҡалалар менән һатыу итә башлаусы руханиҙар һәм сауҙагәрҙәр барлыҡҡа килә.

---

[1] Усманов А. Н. Добровольное присоединение Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1982. 224-се бит.

Өфө ҡалаһының төҙөлөүе Башҡортостанда йәнә Бөрө, Табынск, Минзәлә, Заинск кеүек яңы ҡалаларҙың барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Шул нигеҙҙә улар 1700 йылда Петр I указы менән Өфө провинцияһына ойоша. 1708 йылда бөтә Россияны губерналарға бүлеү сәбәпле, Өфө провинцияһын Ҡазан губернаһы составына индерәләр. Ә Өфөлә Провинциаль канцелярия ойошторола [2].

Бөтә был үҙгәрештәр башҡорттар араһында төрки яҙма теленең таралыуына һәм үҫеүенә, белем кимәленең күтәрелеүенә, уҡый-яҙа белеүселәрҙең күбәйеүенә киң мөмкинселектәр аса. Уҡый-яҙа белгән кешеләр тәүҙә төрлө дәүләт акттарын теркәү, сауҙа һәм иҫәп-хисап эштәрен алып барыу, налог йыйыу ҡағыҙҙарын яҙыу эше менән генә сикләнһә, артабан улар төрлө дәүләт ойошмалары араһында хаттар яҙышыу һәм күрше халыҡтар менән дипломатик мөнәсәбәттәр алып барыу өсөн кәрәк була.

Шуға күрә лә беренсе сиратта яҙма телде Джучи империяһының, йәғни Алтын Урҙаның, хакимлыҡ итеү осоронда уҡ киң таралыш алған килешеүҙәр, грамоталар һәм жалоба акттары тибында юридик характерҙа киң һәм интенсив үҫтереү кәрәклеге килеп тыуа [3].

Элекке ваҡытта, нигеҙҙә, һөйләү телендә генә таралған башҡорт шәжәрәләренең дә яҙма формалары барлыҡҡа килә башлай.

Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теленең XVI—XVIII быуаттарҙың икенсе яртыһы осорондағы яҙмышы бер ни тиклем башҡорттарҙа дәүләт-административ системаһы өлкәһендәге хужалыҡ, экономика һәм мәҙәниәт тормошондағы үҙгәртеп ҡороуҙар менән дә билдәләнә.

Башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе һәм XVI—XVII быуаттарҙа үҙәкләштерелгән дәүләттең нығыныуы менән рус-башҡорт тел бәйләнештәре лә активлаша. Башҡорттарҙың хәрби хеҙмәттә һәм Рус дәүләте алып барған төрлө һуғыштарҙа, походтарҙа ҡатнашыуҙары быға айырыуса ныҡ булышлыҡ итә. Башҡорттарҙың рус армияһы сафтарында даими хеҙмәт итеүҙәре ике халыҡтың мәҙәниәттәрен һәм хәрби дуҫлыҡтарын ғына нығытып ҡалмаған, ә уларҙың телдәренең дә бер-береһенә йоғонто яһауына килтергән, был күренеш яҙма ҡомартҡыларҙа ла сағылыш тапҡан [4].

XVI—XVII быуаттарҙа батша хөкүмәтенең Башҡортостанға ҡарата социаль-экономик политикаһы, нигеҙҙә, иҙеүселәр синыфы мәнфәғәттәре һәм Рус дәүләтенең Көнсығышҡа ҡарашы менән бәйле була.

XVI—XVII быуаттарҙың икенсе яртыһында Башҡортостанда

---

[2] Памятная книжка Уфимской губернии. Уфа, 1873. Ч. II. 5-се бит.

[3] Усманов М. А. Жалованные акты Джучиева улуса XIV—XVI вв. Казань, 1979.

[4] Халикова Р. Х. Русско-башкирские языковые контакты после присоединения Башкирии к Русскому государству // Советская тюркология. 1983. № 6. 11—18-се биттәр.

беренсе ҡалалар төҙөлә башлаһа ла, мәсеттәр, мәктәптәр (башланғыс мәктәп), мәҙрәсәләр йәки башҡа төрлө аң-белем биреү учреждениелары һалдырыуҙы хөкүмәт ҡайғыртмай. Мәсет һәм мәҙрәсәләр, башлыса, ҡала үҙәктәренән алыҫта һалына, электән эшләп килгәндәре лә ситтә була. Бәлки мәсет һәм мәҙрәсәләрҙең Башҡортостандың үҙәк һәм көньяҡ райондарының алыҫта ятҡан Һөйөндөк (1709), Сытырман (1713), Стәрлебаш (1720), Ырымбур Ҡарғалыһы (1740), Таҙлар (1767), Балыҡлыгүл (1771) ауылдарында барлыҡҡа килеүе шуның менән аңлатылалыр ҙа[5]. Ихтимал, XVIII быуатта, хатта XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорттар араһынан булған белемле кешеләрҙән күренекле шағир һәм яҙыусылар Мәүлә Ҡолой, Ғабдрахман Усман, Ҡандалый, Ҡарғалый һәм башҡаларҙың ҡалаларҙан түгел, ә ауылдарҙан сығыуҙары ла шуның менән аңлатылалыр.

Иҙеүсе синыфтар мәктәп һәм мәҙрәсәләрҙең эштәрен хуплағандар, сөнки улар мосолман диненә хеҙмәт иткәндәр һәм халыҡта идара итеүсе дәүләт түрәләренә буйһоноусанлыҡ тойғоһо тәрбиәләгәндәр. Шуның өсөн дә XVIII быуаттың аҙағында батша хөкүмәте башҡорттар араһында ислам динен таратыуҙы көсәйтә һәм шул һөҙөмтәлә Өфө 1788 йылдан башлап Россия мосолмандарының Дини идаралығы үҙәгенә әйләнә.

Ошо ваҡыттан алып Башҡортостанда дини йөкмәткеле китаптар тағы ла ныҡыраҡ тарала башлай. Был китаптар, башлыса, ҡанунлаштырылған текслы махсус әҙәбиәт була.

XVI—XVII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төркийендә ғәрәп, фарсы телдәренең йоғонтоһо һаман да ныҡ була, сөнки Урал — Волга буйы төрки телендәге әҙәби әҫәрҙәрҙең теле XVII быуаттың аҙағына тиклем халыҡтың һөйләү теленә түгел, ә ғәрәп һәм фарсы телдәренең йоғонтоһо бик ныҡ булған Алтын Урҙа дәүерендәге төрки теленә таяна.

XVI—XVII быуаттарҙың икенсе яртыһында башҡорттарҙың дәүләт төҙөлөшөн үҙгәртеп ҡороу һәм нығытыу, ошо эштәрҙе, тормоштағы төрлө башҡа үҙгәрештәрҙе билдәләү һәм теркәп барыу яҙма телдең артабан үҫешенә йоғонто яһай. Ошо үҙгәрештәр нигеҙендә Урал — Волга буйы төркийендә йылъяҙма (шәжәрә теле), акттар, әҙәби, публицистик, эпистоляр һәм башҡа стилдәр формалаша.

Урал — Волга буйы төркийендә шәжәрә һәм уның теле айырылып тора. Шәжәрә — үҙенең формаһы һәм сығышы менән ярайһы уҡ боронғо күренеш, ул бик күп төрки халыҡтарында ғына түгел, Көнсығыштың башҡа халыҡтарында ла киң таралған. Шәжәрәләр тәүҙә һөйләү теле формаһында, ә һуңыраҡ, сама менән XVI—XVII быуаттарҙан башлап, яҙма рәүештә тарала[6].

Фәҡәт сығышты ғына билдәләгән шәжәрәләр һәм айырым текстар яҙылған шәжәрәләр барлыҡҡа килә. Беҙҙе бигерәк тә һуңғылары ҡыҙыҡһындыра.

---

[5] История Урала. Пермь, 1976. Т. 2. 165-се бит.

[6] Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы. Өфө, 1984. 86-сы бит.

Шәжәрәләрҙе берләштергән дөйөм маҡсат шунда: улар теге йәки был башҡорт ҡәбиләһенең ҡайҙан башланыуын, теге йәки был ырыуҙы кемдәр башлап ебәреүен асыҡларға тейеш була. Был маҡсатҡа төрлө юлдар менән ирешелә. Уларҙа, туфан һыуы ҡалҡҡандан һуң, ерҙе бүлеү кеүек, төрлө библия легендалары, ҡөрьәндән алынған цитаталар, дини сюжеттарҙы тасуирлауҙар менән сиратлашып килә. Риүәйәттәр ҙә ҙур ғына урын ала.

Бындай шәжәрәләрҙең телендә ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре күберәк осрай. Улар төрлө иҫкергән грамматик формалар, ҡатмарлы әйтемдәр, синтаксик конструкциялар менән сыбарланған була.

Шулай ҙа шәжәрәләрҙең төп өлөшөн, уларҙың сюжет нигеҙен, тарихи темалар һәм ваҡиғаларҙы тасуирлау тәшкил итә. Шәжәрәләрҙең был өлөшөндә теге йәки был ҡәбилә һәм ырыу ерҙәренә ентекле характеристика бирелә, сиктәре билдәләнә, төрлө ҡәбиләләрҙең, ырыуҙарҙың, халыҡтарҙың аралашыуҙары һәм бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәттәре яҡтыртыла. Ҡайһы берҙәрендә төрлө иҙеүселәргә ҡаршы азатлыҡ һәм ирек өсөн көрәшкә күтәрелеүгә саҡырыуҙар осрай.

Шәжәрәләрҙә патриотик һәм интернациональ һыҙаттарҙың асығыраҡ сағылыуы уларға бер ни тиклем публицистик характер бирә.

Икенсе төр шәжәрәләр теленең нигеҙен төрки һүҙҙәре тәшкил итә, бигерәк тә бында боронғо төрки һүҙҙәре ҡатламы айырылып тора (*имде* «хәҙер», *кизин* «һуң» һ. б.), теге йәки был күләмдә фонетик (*тағ* «тау», *уғлан* «улан», *ямғур* «ямғыр» һ. б.), грамматик (*урмандин* «урмандан», *башиндин* «башынан», *баҡың* «баҡ, ҡара» һ. б.) билдәләре лә һаҡлана.

Шәжәрәләрҙең был төрөндә бер ни тиклем ғәрәп, фарсы, шулай уҡ рус теленән ингән һүҙҙәрҙең дә ҡулланылыуҙары күҙәтелә.

Шәжәрәләр идея йөкмәткеһе, формаһы һәм тасуирлау характеры менән йылъяҙма жанрына яҡын тора. Уның телен дә йылъяҙма стиленә ҡаратып йөрөтәләр.

Башҡорт шәжәрәләре — XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийенең тарихи үҫешенең иң ҡиммәтле сығанаҡтары.

Шәжәрә яҙыусылар әҙәби әҫәрҙәрҙе, бигерәк тә дини китаптарҙы, күсереп яҙыусыларҙан айырмалы рәүештә, текстарҙың бер хәрефен дә үҙгәртмәй тормағандар. Билдәле булыуынса, һуңғыларына бер һүҙҙе икенсе һүҙ менән алыштырыу ҡәтғи рәүештә тыйылған һәм улай эшләү бөтөнләй рөхсәт ителмәгән.

XVI—XVII быуаттарҙа йылъяҙма формаһы — шәжәрәләр һәм ауыҙ-тел ижады нигеҙендә барлыҡҡа килгән ҙурыраҡ әҫәрҙәр — тарихи-әҙәби әҫәрҙәр (тәуарих яҙмалары) менән алмашына һәм үҙенең оҙайлы традицияһын барлыҡҡа килтерә [7].

---

[7] Хөсәйенов Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 107-се бит.

Монголдар дәүерендә үк тарихсылар хеҙмәте бер аҙ үҫеш ала. «Монгол хакимдары тарих менән ҡыҙыҡһынғандар, үҙҙәренең батырлыҡтарының яҙылып ҡалыуын теләгәндәр. Буйһонған халыҡтар ҙа үҙҙәренең буйһондороусыларын өйрәнгәндәр, уларҙың сығыштарын, үткән тормошон асыҡлап, ихтимал, уларға ҡаршы тороу юлдарын эҙләгәндәрҙер [8]. Ошо дәүерҙә иран монголдарының вәзире Ф. Рәшитәтдиндең фарсы телендә яҙылған, һуңыраҡ төрки теленә тәржемә ителгән «Йылъяҙмалар йыйынтығы» («Джама-йи әт-тәуарих») исемле хеҙмәте барлыҡҡа килә. Был тарихи ҡомартҡы Волга буйында һәм Уралда бик киң тарала.

Урта быуаттарҙа башҡа тарихи хеҙмәттәр ҙә була. Мәҫәлән, Ата Малик Джувейни тарафынан яҙылған «Илбаҫарҙар тарихы» ана шундайҙарҙан һанала. Был китап тәүҙә Урта Азияла, һуңынан Волга буйында һәм Уралда тарихи-әҙәби жанрҙың (тәуарих яҙмалары) барлыҡҡа килеүе һәм үҫеп китеүенә ҙур этәргес көс була.

XVI быуаттың башында уҡ (1502—1504) Ф. Рәшитәтдиндең «Джама-йи әт-тәуарих» исемле әҫәренең бер өлөшө (төрки халыҡтары ырыуҙарының һәм ҡәбиләләренең тарихы, Сыңғыҙ хан һәм уның вариҫтарының походтары һ. б.) «Тәуарих-и гөзидә-йи нөсрәт намә» («Һайланма тарих — еңеүҙәр китабы») исеме менән Урта Азия төрки теленә тәржемә ителә. Был тәржемәгә шейбанидтар һәм уларҙың хөкүмәте хаҡында бер ни тиклем өҫтәмәләр ҙә индерелә. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ере шул хөкүмәт составында була.

Йөҙ йылдан һуң, йәғни XVII быуаттың башында (1602) Ф. Рәшитәтдиндең «Джама-йи әт-тәуарих» исемле тарихи хеҙмәтенең беренсе бүлеге Ҡадир Ғәли Джалаир тарафынан бер аҙ ҡыҫҡартылып Урал — Волга буйы төркийенә тәржемә ителә. Был тәржемә башҡорт, татар, ҡаҙаҡ һәм башҡа төрки халыҡтары араһында үҙенең оригиналындағы «Джама-йи әт-тәуарих» исеме менән киң таралыу таба.

Ҡадир Ғәли Джалаирҙың «Джалаир әт-тәуарих»ының тәржемәһе төрлө дәүерҙәрҙә бик күп ғалимдарҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итә [9].

XVI—XVII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийенең ҙур тарихи-әҙәби ҡомартҡыһы булып, ҙур булмаған инеш өлөштән һәм алты бүлек-дастандан торған «Сыңғыҙ намә» йәки «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә» әҫәре һанала.

---

[8] Бертельс Е. Э. Литература народов Средней Азии // Новый мир. 1939. № 9. 269-сы бит.

[9] Березин И. Н. Татарский летописец, современник Бориса Федоровича // Москвитянин. 1851. № 24. Кн. 2. 543—554-се биттәр; Вельяминов-Зернов В. В. Исследование о Касимовских царях и царевичах. СПб., 1863—1867. Ч 1—4.; Валиханов Ч. Ч. Собр. соч. Алма-Ата, 1961. Т. 1. 142—168-се биттәр; Усманов М. А. Татарские исторические источники XVII—XVIII вв. Казань, 1972. 33—96-сы биттәр; Хөсәйенов Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 107—108-се биттәр.

Был тарихи-әҙәби ҡомартҡы ла бик күп тикшеренеүселәрҙең иғтибар үҙәгендә тора [10].

Был әҙәби әҫәрҙең исемендә намә «хат, грамота, китап» тигән һүҙ булһа ла, үҙенең сюжеты, стиле һәм тел үҙенсәлектәре менән «Сыңғыҙ намә» әҫәре менән «Джама-йи әт-тәуарих» араһында бик ҙур уртаҡлыҡ бар.

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең теле шуны күрһәтә: был осорҙағы Урал — Волга буйы төркийендә ҡыпсаҡ, уғыҙ телдәренә хас булған фонетик, лексик һәм грамматик үҙенсәлектәр аралашып ҡулланыла. Шулай уҡ унда боронғо (иҫке төрки, иҫке уйғыр), ғәрәп һәм фарсы телдәре ҡатламы ла айырым урын ала.

Ошо күренештәр генә лә «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең телен ҡыпсаҡ-татар теле [11] тип йәки ул айырым бер телгә генә ҡарай, тип әйтеүҙе юҡҡа сығара [12].

Шуныһы характерлы, «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»лә лә, иҫке төрки һәм урта быуаттар яҙмаларындағы кеүек үк, һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында *г, ғ, ҡ* тартынҡыларының ҡулланылыуы (*өгрәнделәр* «өйрәнделәр, белделәр», *ханлыҡ кемгә тигәр* «ханлыҡ кемгә тейер», *ушбундағ* «шундай», *терек* «тере» һ. б.); һүҙҙәрҙә яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙың ҡулланылыуы (*йәбүшде* «йәбеште», *маҡсатына ирешде* «маҡсатына ирешт», *өгрәтде* «өйрәтте» һ. б.); һүҙ башында һаңғырау тартынҡыларҙың ҡулланылыуы (*түрт* «дүрт», *төйә* «дөйә»); айырым һүҙҙәрҙә һәм ялғауҙарҙа ирен гармонияһының һаҡланыуы (*уғул* «ул», *ултур* «ултыр», *булур* «булыр» һ. б.); барлыҡ ялғауҙарында *ғ* тартынҡыһының һаҡланыуы (*аҡ саҡаллығ ҡарт* «аҡ һаҡаллы ҡарт//ҡарт аҡ һаҡаллы», *файдалығ эш* «файҙалы эш» һ. б.) осрай.

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең тел үҙенсәлектәренән шул күренә: XVI быуаттан алып XVII быуат башына саҡлы Урал — Волга буйы төркийендә иҫке төрки һүҙҙәре актив ҡулланыла. Мәҫәлән: *ил* «ырыу берләшмәһе, халыҡ, дәүләт», *имде* «хәҙер», *йорт* «йорт, йәшәү урыны, ер, ил», *ҡатиғә* «янына» (*анасы ҡатиғә* «инәһе, әсәһе янына»), *суйурға-* «һөйөндөр-; ғәфү ит-», *үзгә* «башҡа», *ярлыҡа-* «бойор-, бойороҡ бир-» һ. б.

XVI—XVII быуат баштарындағы Урал — Волга буйы төркийендә ғәрәп, фарсы һүҙҙәре ҙур ғына урын ала. Был һүҙҙәр Урал — Волга буйы төркийендәге һуңғы осорҙағы ғәрәп, фарсы һүҙҙәре-

---

[10] Халфин И. И. Жизнь Джингиз-хана и Аксак-Тимира, с присовокуплением разных отрывков, до истории касающихся, коих все слова обучающихся расположены по алфавиту. Казань, 1822; Ауэзов М. История Казахской ССР. Алма-Ата, 1957. Т. 1. 127—128-се биттәр; Усманов М. А. Татарские исторические источники XVII—XVIII вв. Казань, 1972. 97—133-сө биттәр; Галяутдинов И. Г. Палеографические особенности списков памятника «Дафтар-и Чингиз-наме» // Бартольдовские чтения: Тезисы докладов и сообщений. М., 1981. 27—28-се биттәр; ш у л у ҡ: Графемы, передающие гласные фонемы, в тексте анонимного сборника «Дафтар-и Чингиз-наме» // Проблемы изучения башкирских литературно-публицистических и фольклорных источников. Уфа, 1982. 72—76-сы биттәр; Хөсәйенов Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 108—123-сө биттәр

[11] Усманов М. А. Күрһәтелгән хеҙмәт. 125-се бит.

[12] Davids A. L. A grammar of the turkish language. London, 1832. XLI.

нән бик аҙ айырыла: *бәли* «эйе, шулай, дөрөҫ», *дәлил* «сәбәп, нигеҙ», *ваҡыт* «ваҡыт», *заман* «заман, ваҡыт, осор», *гәүһәр* «гәүһәр», *ғәдил* «ғәҙел», *ғәйеп* «ғәйеп, нахаҡ», *ләшкәр* «ғәскәр, армия», *мәжлис* «мәжлес, һый», *шәһәр* «ҡала, шәһәр», *нишан* «билдә, эҙ» һәм башҡалар.

Беҙ тикшергән «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең телендәге күп кенә һүҙҙәр үҙҙәренең формалары һәм мәғәнәләре менән хәҙерге башҡорт әҙәби теленә яҡын йәки унан айырылмай[13]. Улар араһынан шундай һүҙҙәрҙе айырырға булыр ине: тамырҙа *-л-* сонор тартынҡыһы булған һүҙҙәр (*килтүреңез* «килтерегеҙ», *ултырың* «ултыр», *үлтер* «үлтер»); хәҙерге башҡорт теленә һәм уның һөйләштәренә хас булғанса, һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында һаңғырау *с* өнө ҡулланыу (*сирхау* «сырхау», *кисен* «кис, кисә», *ҡамсылаб торды* «ҡамсыланы»), һүҙ аҙағында *ыу* дифтонгыһының ҡулланылыуы (*айыу* «айыу», *сыу* «һыу, йылға») һ. б.

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең телендә хәҙерге башҡорт, татар һәм башҡа телдәрҙә, һөйләштәрҙә ҡулланылған күп кенә һүҙҙәр осрай: *миләш, ҡарама, тирәк, имән, ҡайын, өйәңке, торна, шоңҡар, бөркөт, йылҡы, айыу, йомортҡа, таңға ҡал-* «таң ҡал-», *күрмәккә килделәр* «күрергә килделәр», *инмә* һ. б. Шуны ла билдәләргә кәрәк, «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»лә тик башҡорт теленә генә хас булған һүҙҙәр ҙә осрай: *артыш, баш күнәк* «баш күнәк (мал тиреһенән яһалған күнәк)» һ. б.

Был тарихи-әҙәби ҡомартҡының теле үҙенең художестволы һүрәтләү саралары менән дә айырылып тора. Унда *ләшкәр* ~ *чирү* «ғәскәр», *орош алды* ~ *тоҡош алды* ~ *соҡош алды* «һуғыш булды», *ғәйәт* ~ *яман* «бик», *ҡара-*~*баҡ-* «ҡара-», *нишан* ~ *билгү* «билдә», *башҡа* ~ *ғәйре* «башҡа, икенсе», *ат* ~ *исем* «исем», *ҡычҡыр-* ~ *баҡыр-* «ҡысҡыр-», *дәүер* ~ *ваҡыт* ~ *заман* «дәүер, ваҡыт, заман» кеүек синонимдарҙы, *яҡшы — яман* «яҡшы — яман», *билгеле — билгүсез* «билдәле — билдәһеҙ» һымаҡ антонимдарҙы, *ата-ана* «ата-әсә», *ант-шарт* «ант-шарт», *йәр-юлдаш* «иптәш», *сан-хисаб* «һан-хисап», *дарыу-дарман* «дарыу, сара» кеүек ҡушма һүҙҙәрҙе осратырға мөмкин.

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә» әҫәрен уҡығанда, XVII быуат аҙағынан алып XVIII быуат башына саҡлы Урал — Волга буйы төркийендә әҙәби әҫәрҙәрҙә төрлө ваҡиғаларҙы тасуирлау, художестволы образдар тыуҙырыу, теге йәки был әҫәрҙең йөкмәткеһен асыу өсөн бер төркөм эпитеттар тыуҙырылғанын күрергә мөмкин. Эпитеттарҙа ҡулланылған иң киң таралған һүҙҙәрҙән түбәндәгеләрҙе күрһәтергә булыр ине: *ышанычлы* «ышаныслы, өмөтлө» /*ышанычлы кәңәшче* «ышаныслы кәңәшсе», *лайыҡ*/*падишаһлыкҡа лайыҡ* «батшалыҡҡа лайыҡ», *уңмаған йорт нишаны билгүсе* «уңмаған йорт ғөрөф-ғәҙәте» һ. б. Шулай уҡ *жаның тимер* «йөрәгең тимер», *үзе бүре бәгерле* «ҡаты бәғерле» һымаҡ метафоралар, *диңгеҙ дек күңел* «күңел диңгеҙ кеүек», *күҙ өҫтөндәге ҡаш*

---

[13] Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының Санкт-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фонды. B344.

*тек* «күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек» һ. б. сағыштырыуҙар ҙа осрай. Йыш ҡына әҙәби әҫәрҙәрҙең телен тағы ла көсәйтеп, матурлап ебәреү өсөн төрлө тотороҡло һүҙбәйләнештәр һәм конструкциялар ҡулланыла: *анасын санға санамадылар* «әсәһен һанға һуҡманылар», *халыҡ уғлы күнмәс, чыдамас булды* «халыҡ сыҙай, өйрәнә алманы», *итемез бөтөб, сөйәкемез ҡалды* «итебеҙ бөтөп, ҡоро һөйәгебеҙ ҡалды» һ. б.

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»лә күп кенә мәҡәл һәм әйтемдәрҙең ҡулланылыуы был әҫәргә фольклорҙың да ҙур ғына йоғонтоһо булыуын күрһәтә. Мәҫәлән: *Йәнә билүңләр, кем уңмаған йортоноң нишаны, билгүсе ул торор; үҙе йортон яманлар, кеше йортон маҡтар; үзе ороғон яманлар, кеше ороғон маҡтар; үз ағасын яманлар, кеше ағасын маҡтар; олосы торор, кечесе сөйләр; атасы торор, уғлы сөйләр* — «Белегеҙ, уңмаған йорттоң (халыҡтың) билдәһе шул булыр: үҙ йортон яманлар, кеше йортон маҡтар, үҙ ырыуын яманлар, кеше ырыуын маҡтар, үҙ ағаһын яманлар, кеше ағаһын маҡтар, олоһо торор, кесеһе һөйләр, атаһы торор, улы һөйләр»; *Уз йортын яманлаған үзгә йортда сүкеш булур* «Үҙ йортон яманлаған ситтә лә һүгелер»; *Анасын яманлаған ят — дошманға тотғон булур* «Әсәһен яманлаған ят — дошманға тотҡон булыр» һ. б.

XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийендәге кеүек үк, «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең телендә лә боронғо төрки һәм урта быуаттар ҡомартҡыларының телендә ҡулланылған төрлө грамматик формалар осрай. Уларҙың бер өлөшө хәҙерге төрки телдәрендә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә һаҡланып ҡалған, ә икенселәре, архаик формаларға әйләнеп, телдә бик һирәк ҡулланыла йәки бөтөнләй ҡулланылмай.

Һаҡланып ҡалып, хәҙерге төрки телдәрендә актив ҡулланылған формаларҙан исем һәм ҡылым яһаусы, шулай уҡ форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы күрһәтергә мөмкин. Сағыштырығыҙ: *дошман*>*дошманлыҡ, хан*>*ханлыҡ, кәңәш*>*кәңәшче* «кәңәш>кәңәшсе», *ил*>*илче* «ил>илсе»; *ышаныч*>*ышанычлы* «ышаныс>ышаныслы», *үлән*>*үләнле* һ. б.; *дошман+ға* «дошманға», *хан+дан* «хандан», *эне+лер+ем* «энеләрем» һ. б.; *кил+де* «килде», *ҡал+ды* «ҡалды», *күр+гән* «күргән», *тала+ған* «талаған», *сора+р* «һорар» һ. б.

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә»нең теленән күренеүенсә, XVII һәм XVIII быуат баштары Урал — Волга буйы төрки телендә боронғо төрки һәм урта быуат яҙма ҡомартҡыларында киң таралған грамматик формалар ҡулланылғанын белеп була. Мәҫәлән: *уғлыдин* «улынан», *андин суң* «унан һуң», *Һиндустан шәһәригә* «Һиндостан ҡалаһына», *миңәргә йәбүшде* «миңә йәбеште», *андағ* «ундай», *шундағ* «шундай», *ушал* «шул», *безләр* «беҙ»; *файдалығ* «файҙалы», *йөгөрөк* «йүгерек», *икәгүсе* «икәүһе», *өчәгүсе* «өсәүһе», *шәһәрне талабдур* «ҡаланы таланы», *уҙған-барғанны талар ирделәр* «уҙған-барғанды таланылар», *анда алғалы ебәрде* «унда алырға ебәрҙе», *рөхсәт биргел* «рөхсәт бир», *ул нәрсәләрне күргәзгел* «ул нәмәләрҙе күрһәт», *ҡалдырмағыл* «ҡалдырма», *үлтү-*

*рең* «үлтер», *аны үлтүрәиң* «уны үлтерәйек», *хандан сорайын* «хандан һорайым әле», *арбаға ултурайын* «арбаға ултырайым әле» һ. б.

XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийендәге ҡайһы бер грамматик күренештәр хәҙерге башҡорт телендә һәм уның һөйләштәрендә ҡулланылған грамматик формалар менән тап килә (*бар имеш; көң булуб инәрмен, бүре булуб чыҡармын* «ҡолоң булып инермен, бүре булып сығырмын» (хәйләкәр кеше тураһында), *таңға ҡалды* «таң ҡалды», *күрмәккә килде* «күрергә килде», *йорт тотмаға лайыҡ* «йорт тоторға лайыҡ» һ. б.).

«Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә» теленең синтаксисында ябай һөйләмдәр күберәк урын ала. Мәҫәлән: *Чыңғыҙ хан етмеш ике йыл ғүмер кичерде. Ун өч йәшендә ханлыҡҡа ултурды. Хан булды. Илле туҡыз йыл ханлыҡ сөрдө* «Сыңғыҙ хан етмеш ике йыл йәшәне. Ун өс йәшендә хан булып ултырҙы. Хан булды. Илле туғыҙ йыл ханлыҡ итте» һ. б.

Составында ябай һөйләмдәр бер-береһе менән *аның өчөн кем* «шуның өсөн, шуға күрә», *вә йәнә* «йәнә, шулай уҡ», *йәнә андин суң* «унан һуң» кеүек бәйләүес һәм теркәүестәр менән бәйләнеп килгән ҡушма һөйләмдәр ҙә осрай. Сағыштырығыҙ: *Беҙгә рөхсәт биргел, безләр ҡайтурмыз, аның өчөн кем без мунда киткәндән суң Таңғутдан илче килебдүр* «Беҙгә ҡайтырға рөхсәт бирегеҙ, сөнки, беҙ киткәс, Танғуттан илсе килде» һ. б.

«Джалаир әт-тәуарих» теленең нигеҙен, «Дәфтәр-и Сыңғыҙ намә» теленеке кеүек үк, халыҡ теле, Алтын Урҙа дәүерендәге художестволы әҙәбиәт, шулай уҡ ауыҙ-тел ижады телдәре тәшкил итә.

«Джалаир әт-тәуарих» фарсы теленән тәржемә ителгән булһа ла, теле ябай һәм аңлайышлы. Уның теленең былай булыуы халыҡ теле менән тығыҙ бәйләнеүҙән килә, сөнки «халыҡ теленән айырылған әҙәби тел үҫеүҙән туҡтай һәм ҡатып ҡала» [14].

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, XVI—XVII быуаттарҙағы күләмле тарихи-әҙәби ҡомартҡылар беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланмаған. Тик уларҙың һуңғыраҡ осорға ҡараған күсермәләрҙә генә бар. Шулай ҙа XVIII быуат баштарында һәм унан һуң яҙылған айырым акт документтары (ғариза, үтенес яҙыуы, ярлыҡ, рәсми хаттар һ. б.) өлгөләре һаҡланған [15].

Бигерәк тә 1663 йылдың 16 ноябрендә Нуғай юлы башҡорттарының Өфө воеводаһы кенәз А. М. Волконскийға яҙған хаттары иғтибарға лайыҡ.

Акт документтарында рәсми яҙма телдең башҡорт халҡының йәнле һөйләү теленә яҡын булыуы күренә. Унда дингә ҡараған һүҙҙәр, ғәрәп, фарсы һүҙҙәре бик аҙ, булғандары ла халыҡ телендә киң ҡулланылған *падишаһ* «батша», *хат, дуст* «дуҫ», *әсир* кеүек һүҙҙәргә ҡайтып ҡала.

---

[14] Бертельс Е. Э. Литература народов Средней Азии // Новый мир. 1939. № 6. 223-сө бит.

[15] Материалы по истории Башкирской АССР. М.; Л., 1936. Ч. 1. 76—77-се, 83—84-се, 166—167-се биттәр.

Текст телендәге морфологик үҙенсәлектәрҙең ябайлығы иғтибарҙы йәлеп итә. Һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреше һөйләү теленә бик яҡын. Сығанаҡ килеш күберәк *-дан//-дән* ялғауҙары менән яһала (*башҡортлардан* «башҡорттарҙан», *падишаһдан* «батшанан» һ. б.), *-дин* ялғауы һирәк осрай; төбәү килештә уғыҙ телдәрендәге *-а//-ә* ялғауҙары ҡыпсаҡ телдәре формаһы *-ға//-гә* ялғауҙары менән алмашына (*безгә уфкәләмә* «беҙгә үпкәләмә», *падишаһға* «батшаға» һ. б.).

Бигерәк тә ҡылым формалары ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, Урал — Волга буйы төркийендәге стиль үҙенсәлектәрендә төрлө ҡылым формаларының ҡулланылыуы күҙәтелә. Сағыштырығыҙ: *Имде падишаһ безне ҡол итәрмен боронғодай дисә аманатымызны ебәрсен үземезгә* «Әгәр ҙә беҙҙе батша боронғолай ҡол итәм тиһә, үҙебеҙгә беҙҙең аманатыбыҙҙы ебәрһен»; *Безнең ни эшемез булса да, син, кенәз, падишаһға еткермәйсен. Инде сүземезне падишаһға еткер* «Беҙҙең эшебеҙ булһа ла һин, кенәз, батшаға еткермәйһең. Инде һүҙебеҙҙе батшаға еткер» һ. б.

XVII быуат Урал — Волга буйы төрки теленең синтаксисында Алтын Урҙа һәм уға тиклемге осорҙарҙағы ҡомартҡылар менән уртаҡлыҡ ҙур, улар бигерәк тә һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр төҙөлөшөндә күренә. Мәҫәлән: *Сүз ул: бездән әсерне ничек теләйдер. Бездән дахи ни яхшылыҡ теләйдер. Без падишаһдан яхшылыҡ көтәбез. Падишаһ безне аманат берлән борон тотған юҡ иде* «Һүҙебеҙ шул: беҙҙән әсирҙе нисек алырға теләйҙер. Беҙҙән тағы ниндәй яҡшылыҡ теләйҙер. Беҙ батшанан яҡшылыҡ көтәбеҙ. Борон батша беҙҙән әсир алманы».

Элекке формалар урынына төрлө тел факторҙары йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән яңы формаларҙың ҡулланылыуы ла осрай. Сағыштырығыҙ: хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заман беренсе зат күплек формаһы *-мез* урынына *-без* ялғауы менән яһала (*теләйбез* «теләйбеҙ», *яхшылыҡ көтәбез* «яҡшылыҡ көтәбеҙ» һ. б.), хәҙерге заман категорияһы өсөнсө зат берлектәге *-тур-//-турур, -әр-//-әрур* ҡылымдары урынына *-дер//-дыр* ялғауҙары ҡулланыла (*ул әсиремезне аладыр, алмашҡа ебәрмәйдер* «әсиребеҙҙе ала, алмашҡа ебәрмәй» һ. б.).

XVI—XVIII быуаттарҙағы үтенес яҙыуҙарында, рус батшаларына һәм юғары дәрәжәле шәхестәргә яҙылған рәсми хаттарҙа башҡорттар, башлыса, был осорҙа үҙҙәрен борсоған етди проблемаларҙы күтәргәндәр, улар быны менән, йәмәғәт фекеренә йоғонто яһап, тормошта политик һәм социаль-экономик үҙгәрештәр яһарға ынтылғандар.

XVI—XVIII быуаттарҙағы башҡорт яҙма ҡомартҡыларының күбеһе үҙҙәре күтәргән мәсьәләләрҙең актуаллеге, идея йөкмәткеһе, теленең тойғоға бай һәм айырым маҡсатҡа йүнәлтелгән булыуы менән публицистик стилгә яҡын. Был бигерәк тә төрки теленэ тәржемә ителгән С. Юлаевтың саҡырыу һәм өндәмәләрендә, шулай уҡ Е. Пугачевтың бойороҡ һәм указдарында асыҡ күренә.

XVII быуаттың икенсе яртыһынан алып Урал — Волга буйы төркийендә рәсми һәм халыҡтың һөйләү теле һыҙаттары киңерәк

һәм төрлөрәк сағылыш таба башлай (билдәле, был күренеш бөтөнләй үҙгәрешһеҙ ҡабул ителмәй, ә яҙма тел талабы буйынса йыйнаҡ һәм уйланылған булыуы менән айырыла, артабан үҙ традицияларын барлыҡҡа килтерә).

XVII быуаттың уртаһынан алып Урал — Волга буйы төркийендә ғәрәп, фарсы һүҙҙәре рус теленән ингән һүҙҙәр менән ҡысырыҡлап сығарыла башлай. XVII—XVIII быуаттарҙа рус теленән ҡабул ителгән һүҙҙәр хәҙерге башҡорт әҙәби телендә лә һаҡланған. Сағыштырығыҙ: *армия, кенәз, ыстаршина* «старшина» һ. б. Шуныһы мөһим: рус теленән һүҙҙәр үҙләштереү тормош талабы буйынса эшләнә. XVII быуаттың урталарынан башлап башҡорттар Рус дәүләтен нығытыуға йүнәлтелгән төрлө һуғыштарҙа актив ҡатнашалар. Мәҫәлән, XVII быуатта улар Ҡырым һәм Азов походтарында, ә XVIII быуат башында Швецияға ҡаршы һуғышта ла була.

Башҡорттар Урта Азия, Себер ханлыҡтары һәм Рус дәүләтенең көнсығыш күршеләре менән тышҡы политик мөнәсәбәттәргә лә йәлеп ителә. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтарға барған Россия илселәре составында башҡорттар ҙа була. «1713 йыл Петербургтан Ҡесе йөҙҙөң Абулхаир ханына килгән Ҡотлоәхмәт, керәшенсә Алексей Иванович Тевкелев, илселәре составында абруйлы эшмәкәрҙәрҙән Алдар Исәкәйев, Таймаҫ Шаимовтар һәм күп кенә башҡорттар була» [16].

Шул уҡ ваҡытта рустар көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанды төрлө дала күсмә халыҡтарының сапҡындарынан һаҡлауҙа ҡатнаша.

Былар бөтәһе лә рус һәм башҡорт халыҡтары араһындағы дуҫлыҡты нығытыуҙа ҙур роль уйнай, уларҙың тел өлкәһендәге бәйләнештәрендә лә асыҡ күренә. Был бәйләнештең һөҙөмтәләре XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийендә үҙенсәлекле сағылыш таба.

Башҡорттар ҡушылғас та, Рус дәүләте уларға ҡарата бик һаҡ һәм зирәк политика алып барған булһа, XVII быуат аҙағынан башлап батша хөкүмәтенең Башҡортостанда ҡаты колонизаторлыҡ политикаһы көсәйә. Башҡорттар өсөн батша Россияһы, В. И. Ленин әйтеүенсә, «халыҡтар төрмәһенә» [17] әйләнә. Башҡорт халҡы оҙаҡ ваҡыттар азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ өсөн ҡаты һәм көстәр нисбәте тигеҙ булмаған һуғыш алып бара. Күп һуғыштар ут һәм ҡылыс менән баҫтырыла, башҡорт халҡының бөтә экономикаһы тарҡала һәм ҡаҡшай. Уның мәҙәниәте ҙур юғалтыуҙар кисерә. Колонизацияның көсәйеүе социаль ҡаршылыҡтарҙы тәрәнәйтә һәм халыҡ массаларының тағы ла көслөрәк сыуалыштарын барлыҡҡа килтереүгә сәбәп була. Шуларҙың береһе 1755 йылдағы башҡорт восстаниеһы була, ул тарих аренаһына «...Башҡортостандың иң уҡымышлы һәм популяр муллаһын» [18] Батырша Алиевты күтәрә.

---

[16] Усманов А. Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 282-се бит.
[17] Ленин В. И. Полн. собр. соч. Т. 25. 66-сы бит.
[18] Очерки по истории Башкирской АССР. Уфа, 1956. 193-сө бит.

Батырша «Башҡорттарға өндәмә»нең [19] авторы булараҡ билдәле, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был яҙманың беҙгә тик русса тәржемәһе генә килеп етә. Шулай уҡ Батырша беҙгә императрица Елизавета Петровнаға яҙған хаттың авторы булараҡ та билдәле, был хат беҙҙең көндәргә төрки яҙмаһында һәм русса тәржемәһендә килеп еткән [20].

Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хатын матбуғатта тәүге тапҡыр Ғ. Б. Хөсәйенов [21] баҫтырып сығарҙы, ул был хатты, «XVIII быуаттың беренсе яртыһындағы Башҡортостан тураһында тарихи-политик, социаль-экономик һәм әхләҡи-философик трактат» [22], тип билдәләй.

Батыршаның хаты — үҙенең композицияһы һәм характеры менән бик ҡатмарлы әҫәр. Уны дәүләт һәм йәмғиәт эшмәкәрҙәренең индивидуаль стилдәре төҫмөрләнә башлаған, ә яҙыусылар һәм шағирҙарҙың был һыҙаттары бик үк күренеп бармаған дәүергә ҡаратырға мөмкин [23]. Шуға күрә лә Батыршаның хатында төрки теленең һәм уның локаль варианты — XVIII быуат урталарындағы Урал — Волга буйы төркийенең — традицион һыҙаттары сағылыш тапҡан, тип иҫәпләргә кәрәк.

Хаттың тексында төрлө стилдәр (хат, әҙәбиәт, публицистика, эш ҡағыҙҙары һ. б.) ҡатнаша. Батыршаның хаты XVII быуат аҙаҡтары һәм XVIII быуат урталарында башҡорттар араһында шаҡтай юғары культуралы, төрки яҙмаһының үҙенсәлектәрен һәм характерын яҡшы уҡ белгән, Урал — Волга буйы төрки телен төрлө маҡсаттарҙа ҡуллана алған белемле кешеләр булғанлығын күрһәтә.

Был осорға ҡараған төрки теле, хат тексынан күренеүенсә, ярайһы уҡ аңлайышлы, бай һәм һығылмалы. Унда ғәрәп, фарсы һүҙҙәрен дә, дин аша килеп ингән һүҙҙәрҙе лә, уйғыр, ҡарлуҡ, уғыҙ, ҡыпсаҡ, рус һүҙҙәрен дә осратырға була. Мәҫәлән: *Аның чурасында мәғәнәләре вардур, вәсиләсе... мәнеғ идәрләр...* «Улар (батшалар) янында ышаныслы кешеләр бар... бөтәһен дә туҡталар»; *Бәс ғәдәләт аб хаят мисалыдур* «Шулай итеп, дөрөҫлөк тере һыуға тиң»; *ҡачдуҡымыз вә дотолдыҡымыз* «беҙҙең ҡасыуыбыҙ һәм тотолоуыбыҙ»; *халайыҡлара ...вирәдүр* «халыҡтарға бирә»; *ҡанун дүкдүм* «ҡанын түктем»; *шәриғәтемезгә ха-*

---

[19] Воззвание к башкирцам муллы Абдуллы Мягзялдина // Витиевский В. Н. И. И. Неплюев и Оренбургский край. Казань, 1897. Вып. 5. 92—100-сө биттәр.

[20] ЦГАДА. Ф. 7, оп. 1, д. 1781. Ч. 2.

[21] Хөсәйенов Ғ. Б. Батыршаның батшаға яҙған хаты // Ағиҙел. 1970. № 10. 95—104-се биттәр; Хусаинов Г. Б. Письмо Батырши как историко-литературный источник // Южноуральский археографический сборник. Уфа, 1973. Вып. 1. 122—127-се биттәр; ш у л  у ҡ: Батырша хатының аҡҡа күсермә нөсхәһе // Башҡорт әҙәбиәтенең текстология мәсьәләләре. Өфө, 1979. 131—159-сы биттәр.

[22] Хусаинов Г. Б. Письмо Батырши как памятник письменного языка // Археография и источниковедение истории литературы на Южном Урале. Уфа, 1979. 121-се бит.

[23] Лихачев Д. С. Развитие русской литературы X—XVII вв. Л., 1973. 134, 143, 169, 171, 182, 216-сы биттәр.

*рамдыр* «шәриғәтебеҙгә харам»; *инша алла тәғалә* «инша алла» һ. б. Йыш ҡына юғары стилгә характерлы һүҙҙәр ябай халыҡтың һөйләү телендәге һүҙҙәр менән сиратлашып килә. Мәҫәлән: *Барчаларымыз хәзерләрдүр киләсе йәй күк ут ваҡытында ат туйынгач атланурға* «Барыбыҙ ҙа әҙер, киләһе йәй күк үлән ваҡытында ат туйынғас атланырға»; *Урманға керүб, ҡар өстүнә ятуб, ачығуб вә һәм сыуҡға тунуб үләйүк* «Урманға кереп, ҡар өҫтөнә ятып, асығып йә һыуыҡта туңып үлергәме беҙгә?» һ. б.

XVII быуат баштары һәм XVIII быуат урталарындағы төркиҙә һөйләү телендәгесә, күп һүҙлелек, бер үк һүҙбәйләнештәрҙең һәм бер үк мәғәнәле һүҙҙәрҙең йыш ҡабатланыуы, өндәүҙәр һәм һорауҙар осрай. Мәҫәлән: *Көндә бөтәр эшне айға, айда бөтәр эшне йылға суздылар* «Бер көндә бөтөр эште айға, айҙа бөтөр эште йылға һуҙҙылар»; *ҡәһәр вә ләғәнәт* «ҡәһәр һәм ләғнәт»; *залим вә жафил* «залим һәм яфалаусы»; *михнәт вә ыза* «михнәт һәм ыҙа»; *мәшәҡәтләнүб вә хәсрәтләнүб* «мәшәҡәтләнеп һәм хәсрәтләнеп»; *аманда вә сәләмәтдә* «аманда һәм сәләмәтлектә»; *Әй хәсрәт! Залимләрдән башларымызны ҡуртаруб ҡалурмызму?* «Әй, хәсрәт! Залимдарҙан баштарыбыҙҙы һаҡлап ҡалырбыҙмы?» һ. б.

Төрлө стилгә ҡараған һүҙҙәрҙең ҡатнашып китеүе, ғәрәп, фарсы һүҙҙәренең һөйләү теле һүҙҙәре менән сиратлашып килеүе — авторҙарҙың үҙҙәренең яҙма телендә, элеккерәк осорҙан айырмалы рәүештә, традицион әҙәби формалар менән иҫәпләшмәй, үҙҙәренсә ижад итеүгә ынтылыуҙарын күрһәтә. Улар оҙаҡ ваҡыттар дауам иткән стилистик ҡағиҙәләрҙе, традицияларҙы, «әҙәби этикеттарҙы» үҙҙәренсә үҙгәртәләр.

XVII быуаттар аҙағы һәм XVIII быуат уртаһы осоронда Урал — Волга буйы төркийендә демократлаштырыу тенденцияһы көсәйә бара. Был бигерәк тә авторҙарҙың мәҡәл һәм әйтемдәрҙе ҡулланыуында асығыраҡ сағыла. Мәҫәлән: *Халыҡ теленә төшкән буш булмас* «Халыҡ теленә төшкән буш булмаҫ»; *Ахыр кәмәләремез ҡомға ултурды* «Ахырҙа кәмәләребеҙ ҡомға ултырҙы»; *Ҡулы еткән ергә күзе етмәс* «Ҡулы еткән ергә күҙе етмәҫ»; *Үз ҡуйныдан китмәгән, безгә килеб етмәгән* «Үҙ ҡуйынынан китмәгән, беҙгә килеп етмәгән». Шулай уҡ был үҙенсәлек тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланғанда ла күренә: *ҡулумыз ҡысҡадур* «ҡулыбыҙ ҡыҫҡа»; *йөзөне чытды* «йөҙөн һытты»; *өмидләрүне өзсүн* «өмөттәрен өҙһөн»; *«һа» дигүнчә* «һә тигәнсә»; *эт үлемендә үлделәр* һ. б.

XVIII быуат урталарында Урал — Волга буйы төркийендә халыҡ яратмаған шәхестәргә (генерал, старшина, сотниктар) ҡарата төрлө эпитеттар ҡулланыла: *фәһемсез (фәһемсез янарал* «фәһемһеҙ генерал»); *ҡуштан (ҡуштан ыстаршина* «ҡуштан старшина»); *залим (залим сотниклар* «залим сотниктар») һ. б.

XVII быуат аҙағында һәм XVIII быуат урталарында ҡулланылған ҡайһы бер сағыштырыуҙар хәҙерге башҡорт телендә лә осрай. Мәҫәлән: *айырылған ҡош тек булуб* «айырылған ҡоштай булып»; *атлануб ел тек күчәрләр* «атланып елдәй күсерҙәр»; *ожмах тек хуш ерләремез* «ожмах кеүек ерҙәребеҙ» һ. б.

Был осор төркийендә шаҡтай ныҡынып, ҡалыплашып киткән синонимдар ҙа ҡулланыла: *китте — үтде* «китте — үтте», *ҡунаҡ — меһман* «ҡунаҡ», *башҡа — ғәйре* «башҡа — икенсе», *деләмекем — ихтыярым* «теләгем — ихтыярым», *хуш — яҡшы* «хуш — яҡшы», *батыр — баһадир — пәһлеүән* «батыр — баһадир — бәһлеүән», *суҡ- — ор-* «һуҡ- — ор-», *бур — уғры.*

Шуныһы характерлы: был осор төркийендә парлы синонимдар ҙа йыш осрай. Мәҫәлән: *ҡәһәр вә ләғнәт* «ҡәһәр һәм ләғнәт»; *залим вә жафил* «залим һәм яфалаусы»; *михнәтләр вә ызалар* «михнәттәр һәм ыҙалар»; *мәшәҡәтләнүб вә хәсрәтләнүб* «мәшәҡәтләнеп һәм хәсрәтләнеп»; *аман вә сәләмәт* «аман һәм сәләмәт»; *жан вә дил илә* «йән һәм йөрәк менән» һ. б.

XVII—XVIII быуаттар төркийендә теге йәки был стилистик мәғәнәгә эйә булған парлы һәм ҡабатланып килгән һүҙҙәр ҙә айырылып тора. Мәҫәлән: *алуш-бирүш* «алыш-биреш», *йорт-кәртә, айлыҡ-йыллыҡ* (аҙыҡ), *әүәл-әүәлдән* һ. б.

XVII—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төркийендә, XII—XV быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийенән айырмалы булараҡ, тормоштағы реаль картинаны сағылдырған ғәрәп, фарсы һүҙҙәре күберәк ҡулланыла: *залимлек утлары* «залимлыҡ уттары», *хәләүәт ер* «аулаҡ урын», *хәт вә ғәйәтдин кичкән золомлыҡ* «бөтә сиктәрҙән ашҡан золомлоҡ», *камил жауаб* «камил яуап», *рәхимле указ, хаҡ сүз* «хаҡ һүҙ», *ҡеүәтле кеше* һ. б.

Дини-философик, әхләҡи-этик, ижтимағи-хоҡуҡ ҡараштары сағылған сығанаҡтарҙың телендә хәҙерге башҡорт телендә бөтөнләй ҡулланылмаған формалар, архаик һәм ғәрәп, фарсы һүҙҙәре өҫтөнлөк ала. Мәҫәлән: *Аб хаят ғиззәт вә шәрәфәтдә шөйләдер ким, аның кәтрәсенәдин олмаз донъя ғаләменең... хазинасы* «Тере һыуҙың ҡиммәте һәм даны шундай: донъялағы бөтә байлыҡ уның бер тамсыһына ла тиң түгел» һ. б. Былдай текстарҙа уғыҙ телдәренә ҡараған һүҙҙәрҙең формаһы ҡулланыла. Миҫалдар: *дөшөмдә* «төшөмдә», [*мөмкин*] *дәгүлдер* «[мөмкин] түгел», *дөзөгәнләр* «төҙөгәндәр», *делә-* «телә-» һ. б.

Ошо уҡ текстарҙа ҡайһы бер осраҡтарҙа һүҙ башында һаңғыраү *т* өнө осрай башлай:*ташлар яға* «таштар яуа»; *мөмкин түгел; телә-, тыңла-* һ. б.; *б, м* өндәренең һүҙ башында ҡатар ҡулланылыуы күҙәтелә: *бән//мән//мин* «мин»; *бең//мең* «мең» (*бәнүм өстөмә* «минең өҫтөмә», *бең сум* «мең һум») һ. б.; *бар, бар-, бир-, бул-* һүҙҙәре ҡайһы ваҡыт шул уҡ мәғәнәлә уғыҙ теле формаһында ҡулланыла: [*халайыҡа*] *вирәдүр* «халыҡҡа бирә», [*бәхил*] *олуңуз* «[бәхил] булығыҙ» һ. б. Боронғо төрки яҙма ҡомартҡылары телендәге формалар ҙа осрай. Мәҫәлән, һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында *к, ҡ, г, ғ* өндәренең һаҡланыуы күҙәтелә: *туғма* «туған, ҡәрҙәш», *ярағлы кеше* «яраҡлы кеше», *ачыгум килүб* «асыуым килеп», *үгрәтүб ебәрдек* «өйрәтеп ебәрҙек», *шундағ залимләр* «шундай залимдар», *төрлөк бәләләр* «төрлө бәләләр» һ. б.

Урал — Волга буйы төркийендә ябайлыҡ һәм демократлаштырыу тенденциялары булһа ла, уның һүҙ составында һәм фонети-

каһында ғәрәп, фарсы һүҙҙәренең һәм иҫкергән формаларҙың сағыштырмаса киң урын алыуын онотorға тейеш түгелбеҙ.

Башҡортостанда йәшәгән бейҙәр, дин әһелдәре, старшиналар, сотниктар һәм башҡа төп халыҡ вәкилдәре башҡорт телендә, уның төрлө диалекттарын, ерле һөйләштәрен сағылдырған телдә һөйләшкәндәр.

Ғәрәп, бер ни тиклем фарсы телдәренең йоғонтоһо аҫтында белем алған һәм ғәрәп-фарсы әҙәбиәтенең ҡаҙаныштарын күреп белгән авторҙарға элекке форма һәм традицияларҙан ябай, халыҡҡа яҡын телгә күсеүе еңел генә булмағандыр. Башҡорт халҡының күп өлөшө белемһеҙ булған, уларҙың һөйләү телендә ғәрәп, фарсы һүҙҙәрен ҡулланыуы мөмкин түгел, сөнки улар был телдәрҙе белмәгәндәр. Ә инде төрлө дини йолалар ваҡытында уҡыла торған өгөт-нәсихәттәрҙе бөтөнләй аңламағандар. XVII—XVIII быуаттарҙа Урал һәм Волга буйында төрлө өгөт-нәсихәтле үҙ аллы дини әҙәбиәт барлыҡҡа килмәй. Ул, башҡа төрки халыҡтарындағы кеүек үк, башҡорттарҙа ла әҙер көйөнсә килеп инә. Һуңыраҡ уларҙың төрки теленә тәржемә ителгән варианттары һәм аңлатмалары күренә башлай. Дини әҙәбиәттең тәржемә теле күп кенә фонетик, лексик һәм морфологик үҙгәрештәр кисерә. Был йәһәттән фонетика өлкәһендә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ғәрәп теленең *'айн* формаһының тел арты *ғ* өнө менән алмашыныуын (*ғазраил, ғәдәт* «ғәҙәт», *ғариза, ғәфү ит-* һ. б.); морфологик үҙгәрештәрҙән ғәрәп теленән алынған ҡайһы бер һүҙҙәрҙең, күплек мәғәнәһен юғалтып, төрки телдәренең күплек ялғауын ҡабул итеүҙәрен (*халайыҡлар* «халыҡтар», *әхүәлләре* «хәл-әхүәлдәре» һ. б.); күп осраҡта төрки телдәрендәге юҡлыҡ формаларының ҡулланылыуын (ғәрәп-фарсылағы *бихаҡ* урынына *хаҡсыз* «хаҡһыҙ», *биәдәп* урынына *әдәпсез* «әҙәпһеҙ» һ. б.); төрки телдәрендә *-лы//-ле* аффикстарының йыш осрауын (фарсы телендәге *шадкәм* урынына *шадлыҡлы* «шатлыҡлы» һ. б.) күрһәтергә мөмкин. Шулай итеп, Урал — Волга буйы төркийендә ғәрәп, фарсы тел күренештәрен, һүҙҙәрен үҙләштереүҙең үҙ юлы, үҙ механизмы барлыҡҡа килә. Артабан был һүҙҙәр башҡорт әҙәби теленең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнә.

Башҡортостанда дини әҫәрҙәрҙең ғәрәп телендә лә, Урал — Волга буйы төрки теленә тәржемә ителеп тә таралыуы хаҡында әйтеп үткәйнек инде. Функциональ яҡтан был ике тел бер төрлө булмаған, әлбиттә. Ғәрәп теле ислам диненең донъяға ҡарашын һәм уға бәйле төшөнсәләрҙе сағылдырһа, икенсеһе, дини төшөнсәләрҙе биреү менән бер рәттән, төрлө донъяуи талаптарҙы һүрәтләү, йәғни рәсми эш ҡағыҙҙары, художестволы, тарихи әҫәрҙәр йәки документтар яҙыу өсөн ҡулланыла. Тимәк, сығыштары менән төрлө булған был телдәр функциональ яҡтан да бер-береһенән айырылғандар. Бәлки, ғәрәп телендә яҙылған яҙма ҡомартҡылар ҡасандыр һан яғынан күберәк тә булғандыр, ләкин тарихи үҫештә ул мөһим роль уйнай алмай. Урал — Волга буйы төркийенең үҫеү һәм башҡорт милли әҙәби теленең формалашыу процесында бара-тора төрки теле алғы планға сыға.

XVII быуатта һәм XVIII быуат баштарында Урал — Волга буйы төрки теленә ғәрәп һәм фарсы телдәренең йоғонтоһо шаҡтай көслө була әле. Әммә XVIII быуат урталарынан башлап был йоғонто күпкә кәмей һәм төрки теленә башҡорт халҡының һөйләү теле ныҡ ҡына тәьҫир итә башлай. Был күренеш Салауат Юлаев ижадында айырыуса асыҡ сағыла.

Урал — Волга буйы төрки үҫеш процесында конкрет ижтимағи күренештәргә, йәғни дөйөм мәҙәниәткә, айырым алғанда, башҡорт йәмғиәтенең билдәле бер ваҡытта һәм билдәле бер региондa барлыҡҡа килгән теленә таяна һәм яраҡлаша бара.

Быны яҙма сығанаҡтарҙың характерында, йөкмәткеһендә, тәғәйенләнешендә, рус теленең болғар осоронда уҡ башланған йоғонтоһоноң дауам итә килеүендә тағы ла сағыуыраҡ күрергә була.

XVI быуаттың икенсе яртыһынан башлап рус теленән төрки теленә төрлө тарихи документтар һәм эш ҡағыҙҙары тәржемә ителә. Һөҙөмтәлә рус теленең төрки теленә йоғонтоһо көсәйә. Бынан тыш, XVII быуат аҙағынан XVIII быуат аҙағына саҡлы осорҙағы Урал — Волга буйы төрки теле рус теле аша Көнбайыш Европа телдәренең дә көслө йоғонтоһон кисерә.

Урал — Волга буйы төркийендәге ғәрәп, фарсы һүҙҙәре рус һүҙҙәре менән ҡыҫырыҡланып сығарыла башлай.

Башҡорт телендәге иң тәүге рус һүҙҙәре VII—VIII быуаттарға ҡарай, тип иҫәпләйҙәр. Нәҡ ошо осорҙа «Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында болғарҙар барлыҡҡа килә, уларҙың бер өлөшө башҡорт халҡы (бүләр һәм байлар башҡорт ырыуҙары) составына инә» [24].

А. П. Смирнов Болғар дәүләте халҡы менән рус кенәзлектәре вәкилдәре араһында тығыҙ ҡәбилә яҡынлығы булыуын билдәләй [25]. Был бәйләнештәр башҡорт халҡы составына ингән болғарҙар теленә лә ныҡ ҡына йоғонто яһай. Телгә рус һүҙҙәренең килеп инеүендә ҡыпсаҡтар ҙа (ҡыпсаҡтар, ҡыпсаҡ ырыуҙары) ҙур роль уйнай [26]. Үҙ ваҡытында был турала Л. П. Якубинский: «Ҡыпсаҡ теленең «Кодекс Куманикус» (XIII быуат) һүҙлегендә *изба, печь* кеүек боронғо рус һүҙҙәре бар» [27], — тип билдәләгәйне. Шулай итеп, рус һүҙҙәре Урал — Волга буйы төрки теленә шаҡтай иртә инә башлай.

Башҡортостан рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, башҡорт теленең рус алынмалары иҫәбенә байыуының яңы һыҙаттары барлыҡҡа килә. Н. К. Дмитриев, Иван Грозный дәүерендә рустар менән башҡорттар араһында көнкүреш өлкәһендә тығыҙ бәйләнеш урынлаша һәм артабанғы тарихи ваҡиғалар рус-башҡорт телдәренең үҙ-ара мөнәсәбәте үҫешендә һис шикһеҙ сағылыш таба [28], тип билдәләй.

---

[24] Руденко С. И. Башкиры. М.; Л., 1955. 329-сы бит.
[25] Смирнов А. П. Волжские булгары. М., 1951. 153-сө бит.
[26] Руденко С. И. Күрһәтелгән хеҙмәт. 329-сы бит.
[27] Якубинский Л. П. История древнерусского языка. М., 1953. 350-се бит.
[28] Дмитриев Н. К. Русско-башкирские языковые отношения // Строй тюркских языков. М., 1962. 467-се бит.

XVII быуатта Минин һәм Пожарский ополчениеһында бергәләп һуғышыуҙары, кантондар идаралығы барлыҡҡа килгәндән һуң, башҡорттарҙың рус ғәскәрендә даими хеҙмәт итеүҙәре — былар бөтәһе лә башҡорт, рус халыҡтарының һәм уларҙың телдәренең бәйләнешен көсәйтә.

Башҡортостанда феодал-крепостниклыҡ иҙеүенең көсәйеүе арҡаһында XVII быуат аҙағы һәм XVIII быуат урталарында синфи ҡаршылыҡ ғәҙәттән тыш киҫкенләшә. Был осорҙағы бик күп баш күтәреүҙәр (1705—1711, 1735—1740, 1747, 1755) бының асыҡ сағылышы. Ә инде Е. И. Пугачев һәм Салауат Юлаев етәкселегендәге 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы был күтәрелештең иң юғарғы нөктәһе була.

Синфи ҡаршылыҡтарҙың көсәйеүе, рус-башҡорт бәйләнешенең үҫеүе бер ни тиклем Урал — Волга буйы төрки телендә лә, айырыуса уның лексикаһы менән фразеологияһында сағылыш таба.

XVII—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төрки теленә рус һүҙҙәренең, тотош һүҙбәйләнештәрҙең инеүенә рустар менән башҡорттарҙың сит ил дошмандарына ҡаршы бергәләп һуғышыуҙарына ҡағылышлы төрлө эш ҡағыҙҙарын, указдарҙы, манифестарҙы һәм рапорттарҙы төрки теленә тәржемәләү булышлыҡ итә. Был эште тәүҙә махсус тәржемәселәр, ә һуңыраҡ мәҙрәсәлә белем алған һәм рус дәүләтенә хеҙмәткә ингән урындағы башҡорт халҡы вәкилдәре башҡара. Был кешеләр рус самодержавиеһына Урал һәм Волга буйында колониаль политика үткәреүҙә актив хеҙмәт итә. Сараһыҙҙан улар башҡорттар араһында рус телен һәм культураһын таратыусылар ҙа була. Был күренеш башҡорт ярлыларын да ситләтеп үтмәй, улар рус крепостной крәҫтиәндәре менән яҡындан аралаша. Бындай аралашыуҙар дөйөм синфи берҙәмлек тойғоларын уятыуға килтерә. Был 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы миҫалында һәм башҡа баш күтәреүҙәрҙә лә асыҡ күренә.

Рус һүҙҙәре башҡорттар тарафынан һөйләү теле менән дә яҙма тел аша ла үҙләштерелә. Был һүҙҙәр киң ҡатлам теленә йыш ҡына формалары, ә ҡайһы ваҡытта мәғәнәләре үҙгәргән көйө килеп инә. Мәҫәлән: *билет* «мисәт менән теркәлгән документ; паспорт; квитанция», ә хәҙерге башҡорт әҙәби телендә «нимәнелер хәл итеү өсөн бирелгән справка» һ. б.

XVIII быуатта Башҡортостанда рус мәктәптәре асыла, уларға рус булмаған милләттәрҙең балалары ла алына [29].

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы хаҡындағы килешеүгә ҡул ҡуйыу осоронда уҡ Урал — Волга буйы төрки теленә *дағауыр*<«договор», *кенәз*<«князь, *сар Ибан Ғрузный*<«царь Иван Грозный», *тамға салды* «тамға һалды» урынына *батпис ҡылды* «ҡул ҡуйҙы» кеүек һүҙҙәр ингән булырға тейеш.

Башҡортостандың экономикаһы, мәҙәниәте үҫеүе, яңы социаль-политик күренештәрҙең барлыҡҡа килеүе төрки телен яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр менән байыта. XVII—XVIII быуаттарҙа

---

[29] Очерки по истории Башкирской АССР. Уфа, 1956. Т. 1. Ч. 1. 285—286-сы биттәр.

төрки теленә актив ингән рус һүҙҙәре тормош талаптары менән бәйле була.

XVII—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төрки теленә рус теленән алынған һүҙҙәрҙе түбәндәге төркөмсәләргә бүлергә булыр ине:

I. Дөйөм ҡулланыла торған һүҙҙәр: 1) оҙонлоҡ һәм үлсәү төшөнсәләрен белдергән һүҙҙәр: *дисәтин*<«десятина», *бот*<«пуд», *сажын*<«сажень»; 2) әйберҙәрҙең билдәһен белдереүсе һүҙҙәр: *разнуй*<«разный», *ғрамутный* < «грамотный», *асубай* < «особый» һ. б.; 3) төрлө хәрәкәтте аңлатҡан һүҙҙәр: *жалават (итте)*<«пожаловал», *трибоват (итте)*<«потребовал», *ысрамит (итте)*<«срамил» һ. б.; 4) ай исемдәрен аңлатҡан һүҙҙәр: *ғинуар*<«январь», *фибрал*<«февраль», *марыт*<«март», *абрил*<«апрель» һ. б.; 5) абстракт төшөнсәле һүҙҙәр: *нужа*<«нужда», *бульза*<«польза»; 6) шәхесте белдергән һүҙҙәр: *бур*<«вор», *бакупатил*<«покупатель». Дөйөм ҡулланылып йөрөтөлә торған һүҙҙәргә *нумир*<«номер», *числа*<«число», *сирибра*<«серебро», *ысхут*<«сход» һ. б. кеүек һүҙҙәр инә.

II. Ижтимағи-политик лексика: 1) административ-идара итеү төшөнсәләрен аңлатҡан һүҙҙәр: *брисутствие*<«присутствие», *кәнсәләр*<«канцелярия», *сут*<«суд», *камисиә*<«комиссия» һ. б.; 2) административ-идара итеү аппаратында эшләгән шәхесте аңлатҡан һүҙҙәр: *бисар*<«писарь», *намисник*<«наместник», *становуй*<«становой», *үрәтник*<«урядник» һ. б.; 3) теге йәки был титулы булған шәхесте аңлатҡан һүҙҙәр: *сар*<«царь», *кенәз*<«князь», *бамишик*<«помещик»; 4) батша Россияһындағы административ бүленеште белдергән һүҙҙәр: *вулус*<«волость», *кантун*<«кантон», *өйәз*<«уезд» һ. б.; 5) эш ҡағыҙы атамалары: *билит*<«справка», *ғрамут*<«грамота», *дағауыр*<«договор», *купчий*<«купчая», *чилабитнай*<«челобитная» һ. б.

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы халыҡтың игенселеккә күсеүен тиҙләтә. Башҡорттар игенселек менән шөғөлләнгән рустарҙан һәм ситтән килгән башҡа милләттәрҙән «ауыл хужалығы ҡорамалдары алалар, уларҙан ер эшкәртеү, иген сәсеү, уңыш йыйыу, ауыл хужалығы аҙыҡтарын эшкәртеү кеүек һөнәрҙәргә өйрәнәләр» [30].

Башҡорт йәмғиәте хужалығындағы был үҙгәрештәр төрки теленә лә йоғонто яһай. Унда яңы төр производство тармаҡтарын һәм етештереү мөнәсәбәттәрен сағылдырған һүҙҙәр барлыҡҡа килә. Был һүҙҙәрҙең байтаҡ өлөшө ауыл хужалығына ҡарай.

III. Производство һәм производство мөнәсәбәттәрен аңлатҡан һүҙҙәр: 1) ер участкалары һәм сабынлыҡтарҙы аңлатҡан һүҙҙәр: *ушаска*<«участок», *нариз*<«нарез», *атвуд*<«отвод», *угодий*< «угодье»; 2) эш ҡоралдары атамалары: *бурана*<«борона»; 3) ауыл хужалығы өлкәһенә бәйле ҡайһы бер шәхестәр атамалары: *ватчиник*<«вотчинник», *зимләмир*<«землемер», *брипушынник*<«при-

[30] Очерки по истории Башкирской АССР. Уфа, 1956. Т. I. Ч. I. 97-се бит.

пущенник», *керестиән*<«крестьян»; 4) ауыл хужалығына ҡағылышлы башҡа һүҙҙәр: *балутнай*<«болотный», *мижа*<«межа», силский<«сельский».

XVIII быуаттың беренсе сиреге аҙаҡтарында Башҡортостанда тау заводтары төҙөлә башлай. Шул уҡ ваҡытта башҡа промышленность предприятиелары ла барлыҡҡа килә. XVIII быуаттан башлап Урал — Волга буйы төркиендә промышленность производствоһына ҡараған рус һүҙҙәре урын ала.

IV. Фабрика-завод производствоһын сағылдырған һүҙҙәр:

1) промышленность предприятиелары атамалары: *забут*<«завод», *фабрик*<«фабрика»; 2) фабрикала эшләгән шәхестәр атамалары: *завутчик*<«заводчик», *фабрикант.*

V. Хәрби лексика:

1) хәрби званиелы шәхестәрҙең атамалары: *сутник*<«сотник», *харунжа*<«хорунжий», *янарал*<«генерал», *балкауник*<«полковник» һ. б.;2) хәрби кешеләр һәм уларҙың тормошо менән бәйле төрлө әйбер, ысынбарлыҡ күренештәре атамалары: *военнай*<«военный», *бахут*<«поход», *бахутнай*<«походный», *сүтнә*<«сотня» һ. б.

Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң рустарҙың ерһыуға бай крайға күпләп күсеп ултырыуы башлана. Рус халҡы бында сиркәүҙәр төҙөй, христиан йолаларын тарата. Урал — Волга буйы төрки телендә был күренештәр ҙә сағылыш таба.

VI. Дингә ҡараған һүҙҙәр:

1) ниндәйҙер дини дәрәжәгә эйә булған шәхестәр атамалары: *буп*<«поп», *диак*<«дьяк», *сабурнай*<«соборный (мулла)» һ. б.; 2) дингә бәйле башҡа һүҙҙәр: *сиркәү*<«церковь», *керәшен*<«крещенный» һ. б.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркиендә рус теленән ингән калькалар һәм ярым калькалар ҙа осрай: *Үзен үзе атаучы Бугәчоу*<«самозванец Пугачев», *тел*<«язык» (кәрәкле мәғлүмәттәр алып булырлыҡ әсир); *дошманлар ғәскәриндин тотолған ике тел*<«пойманных два вражеских языка»; *юрамалы бушта*< «нарочная (специальная) почта», *буштавай юл*<«почтовая дорога»; *утлы туб вә ҡылыч илә*<«огнем и мечом (досл.: огненными ядрами и саблей)» һ. б.

XVII—XVIII быуаттарҙа рус һүҙҙәре Урал — Волга буйы төрки теленә башҡорт теленең фонетик системаһы нигеҙендә үҙгәртелеп үҙләштерелә.

Рус теленән алынған һүҙҙәрҙә һуҙынҡылар ҙа, тартынҡылар ҙа сиратлаша. Был айырыуса тартынҡылар өлкәһендә асыҡ күренә. Мәҫәлән: *бисыр*<«писарь», *буп*<«поп», *сар*<«царь», *сиркәү*< «церковь», *фибрал*<«февраль», *брибушынник*<«припущенник» һ. б.

Төрки теленә алынған рус һүҙҙәренең фонетик үҙгәрештәре өндәрҙең сиратлашыуы менән генә сикләнеп ҡалмай. Улар протеза, эпентеза, апокопа кеүек фонетик процестарҙың йоғонтоһо арҡаһында төрлө комбинаторлы үҙгәрештәр ҙә кисерә. Сағыштырығыҙ: *ыстаршина*<«старшина», *кенәз*<«князь», *фабрик*<«фабрика» һ. б.

Рус теленән ингән һүҙҙәр XVII быуаттың икенсе яртыһынан

башлап Урал — Волга буйы төрки телен тулыландырып тороусы мөһим бер сығанаҡ була. Уларҙың бер аҙы төрки теленең үҫеш дәүерендә, башҡорт әҙәби теле формалашҡанға тиклем үк ҡулланыуҙан төшөп ҡала. Икенселәре һүҙ составының пассив өлөшөнә күсә, ә өсөнсөләре — хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һәм диалекттарында һаҡланып ҡалған һәм әле лә актив ҡулланыла.

Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуы башҡорт халҡының политик һәм экономик тормошонда ҙур ваҡиғаға әйләнеү генә түгел, мәҙәниәт өлкәһендә, шул иҫәптән хәҙерге башҡорт әҙәби теленең үҫешендә, байтаҡ роль уйнаған Урал — Волга буйы төрки теленең үҫеү тарихындағы мөһим этаптарҙың береһе булды.

Йәмғиәттәге социаль-экономик үҙгәрештәр башҡорт телендә төрлө күренештәрҙең һәм төшөнсәләрҙең атамалары, йәғни терминдар, үҫеүгә һәм формалашыуға килтерә. XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийендә ижтимағи-политик терминдар урынына ҡулланылған түбәндәге һүҙҙәрҙе күрһәтергә була: *бий* «бей», *өлөш, миржәмәғәт* «башлыҡтар (етәкселәр) һәм халыҡ», *төтөн башы хаҡы* «һәр мөрйә өсөн һалынған һалым», *түрә, дәғүә* һ. б.; хәрби өлкәгә ҡараған һүҙҙәр: *ғәскәр, ваевуд*<«воевода», *бахут*<«поход», *сутня*<«сотня», *бриказ*<«приказ» һ. б.; ер-һыу атамалары: *арҡа, һырт* «[тау] һырты», *уба* «курган», *ҡул* «ҡул (йылға ҡулы, ҡушылдығы)», *күл* һ. б.

XVI—XVIII быуаттар осоро Урал — Волга буйы төрки телендәге терминдар сығыштары буйынса борондан килгән (*бий* «бей», *уруғ//ырыу* «ырыу», *түрә* һ. б.) һәм сит телдәрҙән алынған (*рәғыят* «граждандар», *хәзрәт* < «хәҙрәт», *купчий* < «купчая» *ваевуд*<«воевода», *балкауник*<«полковник») һүҙҙәрҙән тора. Сит телдәрҙән алынған терминдар фарсы, ғәрәп һәм рус телдәренә ҡарай. XVI быуаттың икенсе яртыһы һәм XVII быуаттың башынан алып Урал — Волга буйы төрки теле көслө ағылып килгән русса терминдар (айырыуса ижтимағи-политик, хәрби һ. б.) һәм рус теле аша башҡа Көнбайыш Европа телдәренән ингән төрлө атамалар иҫәбенә тулылана. XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки теленең терминдар составында рус теленән ингән терминдар айырым урын биләй.

Терминологик лексика өлкәһендә фәҡәт күрһәтелгән осор өсөн генә термин булып йөрөгән һүҙҙәрҙе айырып күрһәтергә мөмкин. Мәҫәлән: *төтөн башы хаҡы* «һәр мөрйә башына һалым», *зәҡәт* «сауҙагәрҙәргә һалынған һалым» һ. б. Төрки теленең тарихи үҫешендә ҡайһы бер терминдар, үҙҙәренең йөкмәткеһен юғалтып, ябай һүҙҙәр рәтенә күскәндәр. Сағыштырығыҙ: *өлөш, хат* һ. б.; икенселәре, иҫкергән, тарихи һүҙҙәргә әйләнеп, һүҙ составының пассив өлөшөн тәшкил итәләр (*мәғлүм намә* «книга сведений, данных», *мирхалаиҡ* «начальники и люди» һ. б.); өсөнсөләре үҙҙәренең мәғәнәләрен һәм йөкмәткеләрен һаҡлап ҡалып, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең терминдар составында ҡулланыла (*ғариза, дәүләт, бриказ*<«приказ», *балкауник*<«полковник», *указ* һ. б.). XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки те-

лендәге ҡайһы бер терминдар, совет осоронда яңы формаларға күсеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең терминдар составына ингәндәр.

Төрки теленең тарихи үҫешендәге ҙур үҙгәрештәр, шул иҫәптән уның лексикаһы өлкәһендәге үҙгәрештәр, ниндәйҙер «яңы тел» барлыҡҡа килеүгә түгел, ә ғөмүмән, һүҙ байлығының һәм терминдарҙың йәмғиәтте хеҙмәтләндереү маҡсатында әкренләп үҫә һәм камиллаша барыуға килтергәнлеген күрһәтә.

XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки телендә грамматик нормаларҙың формалашыу процесы төҫмөрләнә.

XVII—XVIII быуаттар осоро яҙма ҡомартҡыларында грамматик категорияларҙың аҙмы-күпме тотороҡло грамматик мәғәнәләре һәм формалары булғанлығын билдәләргә мөмкин. Был осорҙағы төрки телендә килештәр системаһы формалаша. Шулай ҙа ҡайһы бер килештәрҙә норманан ситкә сығыуҙар булғылай. Мәҫәлән: сығанаҡ килеш *-дан//-дән, -нан//-нән* ялғауҙары менән генә түгел *-дин* ялғауы менән дә яһала (*башындин* «башынан»), төшөм килештә, ҡыпсаҡ телдәре ялғауҙарынан (*-ны//-не*) тыш, уғыҙ телдәре ялғауҙары (*-ы//-и*) ла осрай (*бези* «беҙҙе», *сезләре* «һеҙҙе»), төбәү килештә *-гә//-ға, -кә//-ҡа* кеүек ҡыпсаҡ телдәре ялғауҙарынан тыш, уғыҙ телдәрендәге *-а//-ә* ялғауҙары ла ҡулланыла (*сезләрә* «һеҙгә», *ерә* «ергә», *йортомоза* «йортобоҙға» һ б.).

1-се һәм 2-се зат күплектә эйәлек ялғауҙары булып *-мыз//-мез, -ңыз//-ңез* ялғауҙары ҡулланылған (*дуслыҡымыз* «дуҫлығыбыҙ», *ҡулумыз* «ҡулыбыҙ», *динемез* «динебеҙ», *башыңыз* «башығыҙ», *телеңез* «телегеҙ»).

1-се һәм 2-се зат алмаштары күплектә *без* «беҙ», *сез* «һеҙ» формалары менән бер рәттән *безләр* «беҙ», *сезләр* «һеҙ» формалары менән дә килгән.

Ҡылым һәм ҡылым формаларына килгәндә, уларҙа әле һаман ҡыпсаҡ, уғыҙ һәм боронғо төрки теле формалары параллель ҡулланылғандар. Мәҫәлән: үткән заман сифат ҡылым, *-ған//гән, -ҡан//-кән* ялғауҙарынан башҡа, *-ан//-ән, -мыш//-меш* ялғауҙары менән дә яһалған (*атҡан уҡларымыз* «атҡан уҡтарыбыҙ», *аҡып дөшән шишмәләр* «ағып төшкән шишмәләр», *ебәрүлмеш дүрт кеше* «ебәрелгән дүрт кеше» һ. б.); *б* өнөнә бөткән хәл ҡылымдар, ғәҙәттә, иренләшәләр (*баруб* «барып», *бирүб* «биреп һ. б.). Хәл ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһы һирәкләп *-майуб//-мәйүб* ялғауҙары менән яһала (*тыңламайуб* «тыңламай», *теләмәйүб* «теләмәй» һ. б.). Бойороҡ ҡылымдың *-ғыл//-гел* формалары йыш осрай (*ҡолаҡ салыб торғыл* «ҡолаҡ һалып тор», *сөйләгел* «һөйлә» һ. б.). Теләк, үтенес мәғәнәләре айырым осраҡтарҙа *-ғай//-гәй* ялғауҙары менән бирелә (*рәнжү тотмағайсыз* «рәнйеү тотмағыҙ», *серләшмәй ҡалмағайсыз* «серләшмәй ҡалмағыҙ» һ. б.).

*-гүче//-ғучы, -күче//-ҡучы* ялғауҙары менән яһалған исем ҡылымдар актив ҡулланылалар, ҡайһы ваҡытта улар сифат ҡылым урынында ла килә (*әйтгүче кешеләр* «әйтеүсе кешеләр», *йыртҡучы бөркөтләр* «йыртҡыс бөркөттәр», *ер биләгүче кешеләр* «ер биләүсе кешеләр» һ. б.); *-дек//-дуҡ//-дүк* ялғауҙары менән яһалған исем

ҡылымдар ҙа актив (*сез киддекүңездән суң* «һеҙ киткәндән һуң», *ҡачдуҡымны вә дотолдоҡымны яздум* «ҡасыуымды һәм тотолоуымды яҙҙым» һ. б.); *-дек//-дүк* ялғауҙары менән яһалған исем ҡылымдар шулай уҡ сифат ҡылым урынында ҡулланыла алғандар (*ишетдүкүм хәбәр* «ишеткән хәбәрем», *әйтдүкүм сүз* «әйткән һүҙем» һ. б.). Бындай исем ҡылымдарҙың һуңғыраҡ формалары ла осрай (*баш ороучы* «баш эйеүсе» һ. б.).

XVI—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төрки телендә төрлө ваҡиғаларҙы, тормош факттарын тасуирлау өсөн, авторҙың был ваҡиғаларға үҙе шаһит булыуын йә булмауын күрһәтеү өсөн күп төрлө ваҡыт формалары ҡулланылған.

Хәҙерге заман формаһы *-а//-ә, -й* ялғауҙары һәм уларға зат, күплек ялғауҙарының ҡушылыуы менән яһала (*йайаг ҡайталар* «йәйәү ҡайталар», *ямғур яға* (ямғыр яуа» һ. б.). Ҡиләсәк замандың барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары *-р /-ур//-үр,* һирәгерәк *-ар// -ер, -ыр//-әр* һәм *-мас//-мәс* ялғауҙары менән бирелә (*кемгә әйтәсе булурмыз* «кемгә әйтербеҙ», *золомлоҡ эшләр* «золомлоҡ эшләр», *яр идер* «иҫкә төшөрөр», *халыҡ теленә төшкән буш булмас* «халыҡ теленә төшкән буш булмаҫ», *указдан тыш ылау бирмәзмез* «указдан тыш ылау бирмәҫбеҙ» һ. б.). Үткән заман ҡылымдары билдәле үткән заман (*бура бурамаҡ булдылар* «бура бурарға булдылар», *жафалар күргәзделәр* «яфалар күрһәттеләр» һ. б.), билдәһеҙ үткән заман (*үземезнең йортомыз тарафына киткәнләр* «үҙебеҙҙең йортобоҙ тарафына киткәндәр», *башҡорт жәмәғәтләре кәңәшкәнләр, береккәнләр* «башҡорттар кәңәшкәндәр, берләшкәндәр»), билдәле күптән үткән заман (*сорар өчөн килә торғанлар ирделәр* «һорар өсөн килә торғайнылар», *ғәйнә халайыҡларының ярымы атланғанлар иде* «ғәйнә халыҡтарының яртыһы атҡа атланғайнылар» һ. б.) формаларында йөрөй алған.

XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки теленең грамматик формаларын тикшереү шуны күрһәтә: был осорҙа, нигеҙҙә, ҡыпсаҡ телдәренең грамматик формалары ҡулланылған, уғыҙ теле элементтары бик аҙ булған.

Был осорҙағы Урал — Волга буйы төрки теленең синтаксисы өсөн яҙма сығанаҡтарҙың характеры һәм идея йөкмәткеһенә авторҙарҙың грамоталылығы һәм белем кимәлдәренә бәйле рәүештә төрлө ҡатмарлы конструкциялар характерлы булған.

Ябай һөйләмдәр яҙма ҡомартҡыларҙа тәбиғәт күренештәрен, тормоштағы ысынбарлыҡты, авторҙың теге йәки был ваҡиғаға ҡарата уй-фекерҙәрен тасуирлау өсөн ҡулланыла. Мәҫәлән: *Бер заман йыллар ҡытлыҡ булды. Ҡыш бик озаҡ булды. Өч йылғача йылҡы, ҡуй бөтте. Игенләр һич уңмады. Күп халайыҡлар дармансыз булдылар. Вә күб халайыҡ ач-яланғач булдылар...* (Юрматы башҡорттары ырыуы шәжәрәһе) «Бер заман йылдар ҡытлыҡ булды. Ҡыш бик оҙаҡ булды. Өс йыл эсендә йылҡы, һарыҡ бөттө. Игендәр һис уңманы. Күп халыҡтар дарманһыҙ булдылар. Күп халыҡ ас-яланғас булды».

Текстарҙа ябай һөйләмдәр ундағы хис, тойғоларҙы асығыраҡ

һәм ышандырырлыҡ итеп тасуирлау өсөн ҡулланыла. Мәҫәлән: *Бундан яманыраҡ эш булурмы? Вәй хәсрәт! Ни өчөн бәнем әмерне еренә еткүрмәйсез? Залимләрдән башларымызны ҡуртаруб ҡалурмызмы?* (Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хаты) «Бынан яманыраҡ эш булырмы? Бына хәсрәт! Ни өсөн минең әмерҙе еренә еткермәйһегеҙ? Залимдарҙан баштарыбыҙҙы ҡотҡара алырбыҙмы?»

XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки телендә һөйләмдең теркәүес менән һәм теркәүесһеҙ килгән тиң киҫәктәрен йыш осратырға мөмкин: *Жафалар күргәзделәр ҡыйнамаҡ, суҡмаҡ вә алум алмаҡ, вә уғырламаҡ берлә* «Туҡмап, һуғып, ришүәт алып, урлап яфа сиктерҙеләр»; *Бүрәнә кисмәк, вә таҡта ярмаҡ, вә дыранча ярмаҡ, вә бура бурамаҡ булдылар* «Бүрәнә киҫергә, таҡта ярырға, транса ярырға һәм бура бурарға булдылар» һ. б. Һөйләмдең тиң киҫәктәренең стилистик маҡсаты хәл-ваҡиғаларҙы һанап, уларҙы үҫеү процесында күрһәтеүҙә сағыла.

Төрлө стилистик тәғәйенләнешкә эйә булған өндәү һәм һорау һөйләмдәр ҙә киң ҡулланылған. Бындай һөйләмдәр тасуирлауға йәнлелек, асыҡлыҡ, тапҡырлыҡ биргәндәр. Мәҫәлән: ...*Әйттем ки бәнем ғүмерем ахырына ирешде, мондин суң донъяны нә ғәмәл илә көтөрсезләр, диб* (Юрматы башҡорттары ырыуы шәжәрәһе) «...Мин, ғүмерем аҙағына еттем, бынан һуң нисек донъя көтөрһөгөҙ икән, тип әйттем»; *Бән сиңә баруб, барун ҡыямәт көнөндә ирүмә нә жауап бирүрмен?* (Ҡарағай-ҡыпсаҡ башҡорттары ырыуы шәжәрәһе) «Мин, һиңә барып, ҡиәмәт көнөндә иремә ни тип яуап бирермен?» һ. б.

Яҙма ҡомартҡыларҙағы философик-дини, философик-дидактик пландағы тасуирлауҙарҙа, ғәҙәттә, ҡатмарлы синтаксик конструкциялар ҡулланыла.

XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки теленең синтаксисына һөйләү теленә хас структур элементтар киң ингән. Ғәҙәттә, был күренеш, һөйләм киҫәктәренең айырымланыш килеүе сәбәпле, инверсия менән яҙылған текстарҙа йышыраҡ осрай. Мәҫәлән: *Андан суң ыстаршина Яныштың писаре Кузмаға бардум пашпурт алырға Оренбургка барыу өчөн* (Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хаты) «Унан һуң старшина Яныштың писары Кузьмаға барҙым, Ырымбурға барыу өсөн паспорт алырға».

XVI—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки телендә йәнлелек, ябайлыҡ, халыҡтың йәнле һөйләү теленә яҡынлыҡ текстарҙа тура телмәрҙәрҙе оҫта һәм урынлы ҡулланыу юлы менән ирешелә. Мәҫәлән: *Имде сез дә ҡабул ҡыламусыз диб сорадым. Һәммәсе шул халайыҡлар: — Яхшы барчаларымыз жан-делдән ыразый булдыҡ, — диделәр. Әммә бән әйдүм: Вә бадишаһ бән мырзаға ясаҡ булмас диде. — Яхшы булыр, — диделәр* (Юрматы башҡорттары ырыуы шәжәрәһе) «Инде һеҙ ҙә ҡабул итәһегеҙме, тип һораным. Шундағы бар халыҡ: — Яҡшы, бөтәбеҙ ҙә бер күңелдән риза булдыҡ, — тинеләр. Әммә мин әйттем: батша мин мырҙаға яһаҡ булмаҫ тине. — Яҡшы булыр, — тинеләр».

Төрки теленә матурлыҡты һәм динамиканы бигерәк тә диалогтар бирә: — *Бурлар дип әйтәсез. Ни нәрсәләреңезне уғырлаб китделәр? — Һич нәрсәмезне уғрамадылар, мәгәр падишаһның әмерендән баш тартуб китделәр* (Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хаты) «— Уғрылар тип әйтәһегеҙ. Нимәләрегеҙҙе урлап киттеләр? — Һис нәмәбеҙҙе урламанылар, мәгәр батшаның әмеренән баш тартып киттеләр».

XVI—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төрки теле халыҡ теленә яҡыная бара һәм яҙма әҙәби телдә иркенлек һыҙаттары нығына башлай.

Айырым әҙәби жанрҙар (башҡорт шәжәрәләре, тарихи документтар, хаттар, Салауат Юлаевтың поэтик әҫәрҙәре, хикәйәттәр, парсалар, ҡиссалар һ. б.[31]) дини китаптарға нигеҙләнмәй, халыҡтың һөйләү теле байлығына таянған төрки теленә туранан-тура йүнәлеш тота.

XVIII быуат урталарында Урал — Волга буйы төрки телендә һөйләү сараларының ижтимағи-идеологик дифференцияланыуы асыҡ күренә. Ошо идеологик һәм башҡа айырымлыҡтар рәсми эш яҙмаларында, аноним авторҙарҙың әҫәрҙәре һәм дини-дидактик сығанаҡтар телендә асыҡ күренә.

Икенсе һүҙ менән әйткәндә, XVII быуат аҙағы һәм XVIII быуат урталарындағы яҙма ҡомартҡыларҙа төрки теленең үҙгәрә башлауы күренә. Бында әҙәби телгә хас булған айырымлыҡтар барлыҡҡа килә.

Был дәүерҙең төрки телендә ижтимағи күренештәргә бәйле рәүештә «иң тотороҡло һәм универсаль»[32] булған функциональ-стилистик бүленештәр формалаша.

Урал — Волга буйы төркийенең ижтимағи бүленеше күп кенә варианттарҙан торған, сөнки ҡомартҡыларҙа XVII—XVIII быуаттарҙағы башҡорт халҡының төрлө ҡатлам кешеләренең теле сағылдырылған. Мәҫәлән, төрлө мәктәп, мәҙрәсәләрҙә белем алған кешеләрҙең (бей, старшина, руханиҙар, тәржемәселәр һ. б.) теле аҙ белемле, бигерәк тә белемһеҙ кешеләрҙең теленән айырылып торған. Был шуның менән аңлатыла: грамоталы һәм уҡымышлы кешеләр мәктәптәрҙә, мәҙрәсәләрҙә уҡыған ваҡытта Урал һәм Волга буйына Урта Азиянан ингән төрки телендәге әҙәби әҫәрҙәр («Ҡәлилә вә Димнә», «Тути намә», «Әбу-ғалисина» һ. б.) һәм Урал — Волга буйының үҙендә барлыҡҡа килгән Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ»о, Мәхмүт бине Ғәлиҙең «Нәһж әл-фәрәдис»е кеүек әҫәрҙәр менән танышҡандар. Был әҫәрҙәрҙең теле, һис шикһеҙ, башҡорт халҡының культура үҫешендә мөһим эҙ ҡалдырған.

Тәүҙә уларҙың яҙма төрки теленең үҫешенә йоғонтоһо булһа, артабан улар башҡорт әҙәби теленең формалашыуында ла ҙур урын тотҡандар.

---

[31] История башкирской литературы в 5-ти томах: План-проспект. Уфа, 1979. 12—16-сы биттәр.

[32] Гухман М. М. Социальная и функциональная дифференциация литературных языков. М., 1977. 4-се бит.

Юғары дәрәжәләге һәм башҡа рәсми кешеләр, ғәҙәттә, манифест, приказ, указ, рапорт, ордер һ. б. кеүек документтар төҙөгәндәр. Бындай документтар төҙөгән авторҙарҙың үҙҙәренең «ғалимлығын һәм уҡымышлылығын», өҫтөнлөгөн күрһәтергә тырышыуҙары уларҙың телдәрен дә халыҡ теленән алыҫлашыуға килтергән, нindәйҙер «ят», халыҡ аңлап етә алмай торған тел барлыҡҡа килгән.

Императрица Екатерина II, генералдар, губернаторҙарҙың приказ һәм указдарының, старшина һәм сотниктарҙың рапорттарының төрки теленә тәржемәләре — башҡорт йәмғиәтендәге юғары ҡатлам кешеләренең үҙенсәлекле тел культураһының миҫалы.

Юғары дәрәжәләге һәм уларға яҡын кешеләр яҙған төрки телендәге яҙма сығанаҡтарҙың ғәҙәти булмауҙары шунда: был яҙмаларҙа күп кенә ғәрәп, фарсы һүҙҙәре һәм һүҙбәйләнештәре урын алған. Мәҫәлән: *менәүәр* «яҡты, ҡыуанысл*ы*», *билистикләл* «ҡиммәтле, ҡәҙерле», *әғләмәртәбәле* «иң юғары дәрәжәләге, сикләнмәгән власлы», *вәжәбәт* «бурыс, вазифа», *мәдех* «маҡтау, дан», *жаваз* «рөхсәт», *ғәдәләт аб хаят мисалыдур* «ысын мәғәнәһендәге», *доға-и сәләм* «доғалы сәләм» һ. б. Бынан тыш, текстарҙа байтаҡ архаик һүҙҙәр осрай (*бити-* «яҙ-», *имде* «инде», *кизин* «аҙаҡ, һуңынан», *үзгә* «башҡа» һ. б.), ҡайһы бер һүҙҙәрҙә уғыҙ телдәрендәге фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәр ҡулланыла (*дағ* «тау», *деди* «тине», *вер-* «бир-», *вар* «бар», *эл* «ҡул», *әйлә-* «эшлә-»; төбәү килеш ялғауы *-а//-ә: әдәмәләрә* «әҙәмдәргә», *падишаһа* «батшаға» һ. б.), шулай уҡ уларға ҡайһы бер архаик грамматик формалар (сығанаҡ килеш ялғауы *-дин*): *ҡаладин* «ҡаланан», *синдин* «һинән»; *-дук//-дуҡ* һәм *-гүче//-ғучы* аффикслы ҡылым формалары: *яздуғум* «мин яҙған», *килгүче* «килеүсе», *барғучы* «барыусы» һ. б.) килеп инә.

XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төрки телендә асыҡ төҫмөрләнгән социаль бүленеш, беренсенән, уны төрлө сферала ҡулланыу менән бәйле булһа (төрлө характерҙағы яҙма сығанаҡтарҙа ҡулланыу), икенсенән, төрлө социаль төркөмдәрҙең (мәҫәлән, етәкселек аппараты вәкилдәре, чиновниктар, аҙ белемле кешеләр араһынан сыҡҡан шәхестәр һ. б.) тел эшмәкәрлектәре менән бәйләнгән ижтимағи айырмалыҡтарҙан тора.

Күтәренке, рәсми тантаналы стилдең миҫалы итеп Екатерина II-нең башҡорт йәмғиәтенең «юғары» ҡатламдары: имам, мулла, аҡһаҡал, старшина һәм сотниктарға ебәргән приказдарының фрагментын, шулай уҡ Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хатының бер өлөшөн күрһәтергә була. Мәҫәлән: *Ул олоғ импратурский ғәзәми шәрифләренүң кәләмәт илә биләгүче олоғ мәликә импратрица Екатерина Әләксәүнәнең истиҡләли вә жәмиғ мәмләкәт Русияның вә ғәйреләрнүң вә ғәйреләрнүң* «Һеҙ Россия һәм башҡалар, һәм башҡалар, һәм башҡалар менән камил идара итеүсе ғали йәнәптәре Екатерина Алексей ҡыҙы...»

Башҡорт имам һәм старшиналарының В. Н. Татищевҡа яҙған хатының тәүге өлөшөндә күп һүҙлелек, ҡабарынҡылыҡ, тавтоло-

гия характерлы. Шулай уҡ ул өндәш һүҙҙәрҙең ҡалыплашҡан юғары формаһы менән дә айырыла: *Сәләм би нәһәйә вә доға-и сәләм ғиззәтлү хөрмәтлү сәғәдәтлү шәфғәтлү меһрибан рәхимлү гуспадин йанарал Вачили Микитәич Татышауға* «Бөтмәҫ-төкәнмәҫ сәләм һәм доға данлыҡлы, хөрмәтле, шәфҡәтле, бәхетле, миһырбанлы, рәхимле Василий Микитич Татышауға».

Башҡорт шәжәрәләренең теле күпселек осраҡта ябай һәм аңлайышлы. Әммә һүҙ бейҙәр, тархандар, хандар тураһында бара башлаһа, төркиҙең характеры үҙгәрә, ҡатмарлана һәм юғары, тантаналы стилгә күсә.

XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийенең социаль бүленешен яҙма ҡомартҡыларҙың шул осорҙағы башҡорт халыҡ теле сағылған башҡа өлөштәрендә лә күрергә мөмкин.

Хөкүмәт указдарының, губернатор әмерҙәренең, старшиналар рапорттарының рәсми-тантаналы стиленә С. Юлаев бойороҡтарының, Е. Пугачев һәм уның күп һанлы атамандарының төркигә тәржемә ителгән указ һәм өндәмәләренең демократлаштырылған стиле ҡаршы ҡуйыла. Был документтар 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышының характеры һәм маҡсаттары тураһында мәғлүмәт биреп кенә ҡалмайҙар, ә XVIII быуатта йәшәгән ябай башҡорт халҡының тел байлығын сағылдырыусы ҡиммәтле миҫалдар ҙа булып торалар. Көрәшкә саҡырыусы ҡыйыу һәм ялҡынлы өндәмәләрҙә баш күтәреүселәрҙең иҙеүселәргә булған ҡарашын асыҡ күрһәткән үҙенсәлекле лексика файҙаланыла: *ул мулла дуңғызның сүзе* «ул мулла дуңғыҙҙың һүҙе», *үз хезмәтләре илә ютадылар* «үҙ хеҙмәттәре менән иҙҙеләр (беҙҙе)», *рәхәт сөрөб йөрийләр* «рәхәт йәшәйҙәр», *шундағ залимләр* «шундай яуыздар» һ. б.

Эҙәрләүҙән, язанан ҡасып йөрөүсе башҡорттарҙың хаттарында, шулай уҡ хөкөм ителеүселәр күрһәтмәләрендә, XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга төркийендә яҙылған килешеү ҡағыҙҙарында боронғо төрки лексикаһы, ҡалыплашҡан ябай һүҙбәйләнештәр өҫтөнлөк итә: *сораймыз* «һорайбыҙ», *жир үбеб, тез чүкүб* «ер үбеп, теҙ сүгеп (йәғни баш эйеп)», *үтенәмез* «үтенәбеҙ», *баш салдыҡ* «баш һалдыҡ» һ. б. Ҡайһы саҡта уларҙа саф башҡорт теленә хас булған фонетик үҙенсәлектәр ҙә сағыла: *хығыр* «һыйыр», *бархалар* «барһалар», *балкауник* «полковник», *бауеринный* «поверенный (ышаныслы, йомош үтәүсе)» һ. б. Был яҙма ҡомартҡыларҙың теле күберәк йәнле һөйләм теленең структураһына оҡшаған грамматик формаларҙан һәм ябай һөйләмдәрҙән тора. Мәҫәлән: *1798 йылда белмәймен ҡаю йолдуз иркәнен. Бер үк бечән өстөндә ирде. Мәзкүр Иштуған Байрамғол уғлы илән икүмез бергә ҡунаҡ булуб килгән ирдүк... Ҡунаҡ булуб тордоҡ өч көн. Андан суң ҡайтуб киткәч булдуҡ үземезнең ауылымызда* (ГАОО. Ф. 6, оп. 1, ед. хр. 413. 18-се бит) «1798 йылда, белмәйем ҡайһы айҙа, әммә бесән мәлендә ине. Ирем Иштуған Байрамғол улы менән икебеҙ бергә ҡунаҡ булып килгән инек. Өс көн ҡунаҡ булып торҙоҡ. Шунан һуң, ҡайтып китеп, үҙебеҙҙең ауылыбыҙҙа булдыҡ».

Тыуған илгә, халыҡҡа булған һөйөү пафосы менән һуғарылған

сәсәнлектең асыҡ миҫалы итеп Салауат Юлаевтың шиғырҙарын килтерергә мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был шиғырҙар беҙгә оригиналда килеп етмәгән, әммә улар халыҡ хәтерендә һәм күңелендә ҡалған.

Шулай итеп, XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийенең социаль характеры яҙма сығанаҡтарҙың тәғәйенләнешенә, маҡсатына яраҡлашҡан. Был үҙ нәүбәтендә «тел бер ваҡытта ла абсолют бер төрлө булмай» [33] тигән фекерҙе ҡеүәтләй.

Ҡайһы бер телмәр үҙенсәлектәренең барлыҡҡа килеүе кешенең билдәле бер синыфҡа ҡарауына, социаль сығышына бәйле [34]. Тимәк, XVII—XVIII быуаттарҙағы Урал — Волга буйы төркийенең социаль бүленеше, берҙән, уның ҡулланылыш сфераһындағы даими айырмалыҡтар менән аңлатылһа, икенсенән, бындай бүленеш шул осор башҡорт йәмғиәтендәге төрлө социаль төркөмдәр һүҙлегендәге үҙенсәлектәрҙе лә сағылдыра.

XVII быуат аҙаҡтарында — XVIII быуат баштарында Урал — Волга буйы төркийендә лексик, грамматик һәм синтаксик нормалашыу процесының билдәле бер контурҙарҙағы үҫеше күренә. Быға, әлбиттә, Башҡортостанда күп һанлы мәҙрәсәләр, мәктәптәр асылыуы, уларҙа тел һәм әҙәбиәт дәрестәре уҡытыла башлауы ла мөһим сәбәп була. Тел дәрестәрендә грамматикаға өйрәтеүгә әһәмиәт бирелә. Был грамматика үҙенең структураһы менән ғәрәп теле грамматикаһына яҡын була.

Ошо осорҙағы төркиҙә төрки лексикаһы өҫтөнлөк итә. Ғәрәп һәм фарсы телдәренән ингән элементтар әкренләп үҙ позицияһын юғалта башлай, сөнки XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийе был мәлдә рус теле йоғонтоһон кисерә. Был күренеш акт документтарында асыҡ сағыла. XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы яҙма ҡомартҡыларҙың жанр төрлөлөгө (шәжәрәләр, акт документтары, әҙәби әҫәрҙәр теле) традицион төркигә түгел, ә шул осорҙа йәшәгән башҡорттарҙың ерле һөйләшенә иғтибарҙы йүнәлтә.

Ул заман төркийенең грамматик төҙөлөшө ҡайһы бер ҡылым формаларының юғалыуы (мәҫәлән, *-дуҡ, -ғали, -гәли* һ. б.) менән характерлана, унда шулай уҡ сығанаҡ килеш *-дин* аффиксының һирәгәйеүе күренә, ә һан, сифат, алмаштарҙың ҡулланылышы, киреһенсә, ҡалыплашҡан форма ала.

Ә синтаксик үҙенсәлектәргә килгәндә, аныҡлаусының аныҡланыусы һүҙ алдына ҡуйыла башлауы (препозитив позиция), ә ҡылымдың һөйләм аҙағына күсеүе күҙәтелә. Постпозиция ғәмәлдә стиль үҙгәртеү маҡсатында ҡулланыла. Һөйләм синтаксисында ҡушма конструкцияларҙың өҫтөнлөк итеүе күҙгә ташлана. Эйәртеүле конструкциялар, әгәр улар араһындағы ваҡытлы йәки шартлы мөнәсәбәттәрҙе иҫәпкә алмағанда, яҙма ҡомартҡыларҙа һирәк осрай. Һөйләмдәрҙе теркәүесһеҙ ҡушыу һаман да киң ҡулланылыуын дауам итә. Шулай ҙа XVIII быуаттың аҙаҡтарында һөй-

---

[33] Серебренников Б. А. Общее языкознание. М., 1970. 452-се бит.
[34] Серебренников Б. А. Күрһәтелгән хеҙмәт. 478-се бит.

ләмдәрҙе ҡушыу ысулы төрләләнә. Төп һөйләмгә эйәрсән һөйләмде ҡушҡанда төрлө теркәүестәрҙе, теркәүес һүҙҙәрҙе ҡулланыу йышыраҡ күҙәтелә башлай. *«Ләкин», «вә ләкин», «әгәр, әгәр-ки»* иң киң ҡулланылған теркәүестәр, *«чөнки»* теркәүесе һирәгерәк осрай.

Ул замандағы төрки текстарҙа ҡайһы саҡта ҡатмарлы синтаксик конструкциялар күҙәтелә. Һөйләмдәрҙә мәғәнәһе менән бер-береһенә яҡын торған бер типтағы формаларҙың күп булыуын күрергә мөмкин. Шунлыҡтан бындай һөйләмдәр сырмалған һәм ҡатмарланған. Аңлау өсөн ҡыйын булһалар ҙа, был осорҙа тап ошондай һөйләмдәр сәсәнлек һәм яҙма тел культураһының үрнәге һаналған.

Яҙма тел сифатында XVII—XVIII быуат төркийе Ырымбур, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө, Силәбе кеүек ҙур үҙәктәрҙә киң таралған була. Уларҙа йәшәгән халыҡтың һөйләү теле Урал — Волга төркийенең артабанғы үҫешенә ниндәйҙер кимәлдә йоғонто яһаған. Был осор төркийе шулай уҡ халыҡтың ауыҙ-тел ижады үҙенсәлектәрен дә ҡабул иткән.

Рәсәй составында ике йөҙ йыл йәшәү дәүерендә Башҡортостан нығына һәм үҫә. «Ярым күсмә хәлдә йәшәгән һәм малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорттарҙың ултыраҡ тормошҡа һәм игенселеккә күсеү процесының көсәйеүе етештереүсе көстәрҙең артыуына, ырыу-ҡәбилә волостарының территориаль бүленешкә әүерелеүенә, феодаль мөнәсәбәттәрҙең тәрәнәйеүенә килтерә...»[35]. XVII быуатта башланған, XVIII быуаттың икенсе яртыһында нык көсәйеп киткән игенселек колонизацияһының йоғонтоһо аҫтында Башҡортостанда ауыл хужалығы һиҙелерлек уңыштарға өлгәшә. «XVIII быуаттың өсөнсө сирегендә Көньяҡ Уралда металлургия промышленносының нығыныуы урындағы баҙарҙың киңәйеүенә алып килә»[36].

XVIII быуаттың урталарында Башҡортостанда игенселекте, промышленносты үҙгәртеп ҡороу буйынса яңы аҙымдар яһала, халыҡтың материаль һәм рухи культураһы үҫә. Башҡорт йәмғиәтенең идаралыҡ системаһы ла үҙгәрештәргә дусар була. Документтар менән эш итеү рус телендә генә түгел, ә төрки теле ярҙамында ла алып барыла. XVII быуаттың аҙағында уҡ күп һанлы акт документтары: рапорттар, ғаризалар, танытмалар, хат-хәбәрҙәр, формаль яуаптар, үтенес яҙыуҙары, алыш-биреш ҡағыҙҙары (уларҙың күпселеге завод, воевода, провинция канцелярияһы чиновниктары тарафынан төҙөлгән, йә ябай башҡорт халҡы вәкилдәре исеменән яҙылған) Волга — Урал буйы төркийендә эшләнгән йәки руссанан тәржемә ителгән.

Акт ҡағыҙҙары араһынан бигерәк тә манифестар, өндәмәләр, указдар һәм күп һанлы прокламацияларҙың телен билдәләп үтер-

---

[35] Васильев С. М. Роль Батырши в восстании 1775 г. в Башкирии // Страницы истории Башкирии. Уфа, 1974. 25-се бит.

[36] Зобов Ю. С. Проникновение товарно-денежных отношений в помещичье хозяйство Оренбургской губернии в первой половине XIX в. // Страницы истории Башкирии. Уфа, 1974. 49-сы бит.

гә кәрәк. 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы вәкилдәре тарафынан яҙылған был документтар төрки телендә яҙылғандар йәки төркигә руссанан тәржемә ителгәндәр. «Пугачевтың Башҡортостанға ебәргән күп һанлы манифест һәм указдары халыҡҡа ныҡ тәьҫир итә, сөнки улар халыҡтың яҡты хыялдарын һәм өмөттәрен сағылдыра ине» [37].

XVIII быуаттың икенсе яртыһына ҡараған акт документтарының ҙур өлөшөн Пугачевтың тоғро ярҙамсылары — Салауат Юлаев һәм Кинйә Арыҫлановтарҙың приказдары, манифестары, өндәмәләре тәшкил итә. Ҡайһы бер хаттар, рапорттар, акт документтары шул уҡ Салауат Юлаев һәм Кинйә Арыҫлановтың отрядында тороусы старшиналар, сотниктар, советниктар Аптыраҡ Йәүгәтшин, Әлибай Мырҙағолов, Иҙер Бахмутов, Ҡасҡын Һаҡмаров [38] һәм башҡалар тарафынан яҙылғандар. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: теге йәки был социаль төркөмгә, милләткә төбәлгән прокламацияларҙы тәүҙә үҙҙәре шул уҡ сығыштан булған ябай пугачевсылар төҙөгән йә иһә төҙөргә булышлыҡ иткән [39]. Ә. Н. Усманов фекеренсә, «халыҡ массаларының Пугачев указдарын төҙөүҙә ҡатнашыуы был документтарҙы аңлайышлы һәм тәьҫирле иткән» [40].

Документтар текстарынан күренеүенсә, авторҙар башҡорттарҙың тормошон һәм уй-кисерештәрен генә түгел, ә урындағы халыҡ араһында таралған төрки телен дә яҡшы белгән.

Шулай итеп, XVIII быуаттағы башҡорт йәмғиәтендә төрки телен дин әһелдәре һәм аристократия ғына түгел, ә төрлө ҡатлам хеҙмәт вәкилдәре лә ҡулланған. Дөрөҫ, идара итеүсе синыф төрки яҙма теленең ике төрө: архаик лексика һәм грамматик формалар, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған классик тел һәм һөйләү теленә яҡын торған йылъяҙмалар, акт документтары теле менән эш иткән.

Шуға күрә һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк, акт документтарының теле XVIII быуатта, асылда, дәүләт теленә әүерелә. Электән йәшәп килгән тел нормаларын ҡабул итеп, ул, әлбиттә, ниндәйҙер кимәлдә һөйләү теленә ҡаршы ҡуйыла. Әммә шуны ла иҫтән сығармаҫҡа кәрәк: башҡорттар йәшәгән ерҙә документтар теле нормаларының таралыуы башҡа социаль факторҙар менән бергә халыҡты туплауға һәм үҙәкләштереүгә ыңғай йоғонто яһаған.

XVII—XVIII быуат яҙма ҡомартҡылары (айырыуса эш ҡағыҙҙары, йылъяҙмалар) төрлө социаль-экономик, политик һәм

---

[37] Участие башкир в первом этапе Крестьянской войны 1773—1775 гг. // Научная конференция, посвященная 200-летию Крестьянской войны 1773—1775 гг. в России под предводительством Е. И. Пугачева: Тезисы докладов. Оренбург, 1973. 31-се бит.

[38] Усманов А. Н. Кинзя Арсланов — сподвижник Пугачева // Исторические записки АН СССР. Институт истории, 71. М., 1961. 114—115-се, 126-сы биттәр.

[39] Материалы по истории революционного движения в России XVII—XVIII вв.: «Пугачевщина». М.; Л., 1926. Т. 1. 225-се бит.

[40] Усманов А. Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 118-се бит.

культура үҙгәрештәренән, социаль институттарҙың тыуыуынан һәм, ахырҙа, яңы этник ойошма — башҡорттарҙың халыҡ булып формалашыуынан килгән яңы һүҙҙәрҙе лә теркәй барған. Улар араһынан яҙма ҡомартҡыларҙа бигерәк тә йыш ҡулланылған ошондай һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе күрһәтеп китергә була: *«башҡорт волосы», «башҡорт командасы», «башҡорт әтрәте», «башҡорт старшинасы», «Өфө воеводасы», «вайскауай атаман Ҡинзә Арслан уғлы», «балкауник Салауат Юлай уғлы», «Әбей батшаға һәм байларға ҡаршы», «керәстиән», «ғрамут бирелде», «купчий язылды».*

Башҡорт халҡының әҙәби теле функцияһын үтәгән XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийе яңы функциональ стилдәр барлыҡҡа килтергән.

Яҙма сығанаҡтарҙың тәғәйенләнешенән, жанр үҙенсәлегенән, шулай уҡ йөкмәткеләренән сығып) ул осор Урал — Волга буйы төркийендә документтар (эш ҡағыҙҙары) стилен, йылъяҙма, художестволы стилдәрҙе билдәләргә мөмкин.

I. Эш ҡағыҙҙары стиле. XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийенең формалашыуына һәм үҫеүенә эш ҡағыҙҙары стиле йәки документтар теле билдәле роль уйнаған. Документтар теленең таралыуына төрлө учреждениелар араһындағы яҙма бәйләнештәр сәбәп булған.

Акт ҡағыҙҙары (приказдар, указдар, ордерҙар, рапорттар һ. б.) ҡалыплашҡан трафарет буйынса төҙөлгәндәр: 1) документ кемгә тәғәйенләнгән: *Сәғәдәтлү һәм бәләнд мәнсәблү йанарал майур һәм кауалир Оринбурхның ғәскәри губирнаторы... хәзрәтләренә* «Хөрмәтле һәм юғары ихтирамлы генерал-майор һәм кавалер, Ырымбурҙың ғәскәри губернаторы... хәҙрәттәренә»; 2) документтың төҙөүсеһе йәки авторы: *Эстәрлетамаҡ өйәзе башҡортларының йеденче кантун... йортавуй ыстаршина Ғосман Ибрахим уғлылиндин* «Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттарының етенсе кантон... йорт старшинаһы Ғосман Ибраһим улынан»; 3) документтың атамаһы: *рипурт* «рапорт», *урдур* «ордер» һ. б.; 4) төп йөкмәтке (мәҫәлән, мөәзин итеп тәғәйенләү тураһында үтенес); 5) документтың яҙылыу датаһы (*ийуннең 4-че көнө 1783-нче йыл* «1783 йыл июндең 4-се көнө»).

Эш ҡағыҙҙары стиленә тотороҡло айырым формулалар (штамптар), фразеологизмдар, ҡалыплашҡан һүҙбәйләнештәр, ысынбарлыҡтың теге йәки был күренештәрен сағылдырған махсус терминдар ҡулланыу хас, мәҫәлән: *ҡул ҡуйдум* «ҡул ҡуйҙым», *тамғамызны салдуҡ* «тамға һалдыҡ», *ҡул ҡуймаҡ урнына тамғам салдум* «ҡул ҡуйыу урынына тамға һалдым», *рипурт илә мәғлүм ҡылурға бойоролған* «рапорт менән белдерергә бойоролған», *Иржәш уғлыны теләдүк йортауай ыстаршиналыҡҡа* «Иршәж улын йорт старшиналығына теләнек», *жир фармальнуй мижывать иткәндә* «ергә формаль межа һалғанда» һ. б.

Эш ҡағыҙҙары стиле XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийенең ярайһы уҡ кимәлдә үҫешкән ижтимағи-политик терминологияһын сағылдыра. Әйтергә кәрәк, был терминология Урта

Азия төркийенең шул типтағы терминологияһынан бер ни тиклем айырылып тора.

Эш ҡағыҙҙары стилендә художестволы образлылыҡ, поэтик троптар хас түгел. Ваҡиғаларҙы, факттарҙы, тәбиғәт күренештәрен һәм кешеләрҙе ул художестволы һынландырмай, ә ғәмәлдә уларҙың фотографик копияһын ғына бирә, мәҫәлән: *Ошбонларның әмеренчә бән мулла Ғәбдеразаҡ Муса уғлы ҡулум ҡуйдум* «Ошоларҙың әмеренсә мин мулла Ғәбдеразаҡ Муса улы ҡулымды ҡуйҙым», *Верхнеуральскуй ҡалғасына алуб баруб Чиләбе ҡалғасының сәүдәгәре Иванға сатып ебәргән ирдем* «Верхнеуральск ҡалаһына алып барып, Силәбе ҡалаһы сауҙагәре Иванға һатып ебәргәйнем».

XVII—XVIII быуаттарҙағы башҡорт йәмғиәтенең юридик һәм эш мөнәсәбәттәрен хеҙмәтләндереүсе акт документтарының стиле лә үҙенә бер төрлө һәм үҙенсәлекле. Был стилдә дәүләт указдары һәм бойороҡтары яҙыла, шулай уҡ шәхси договорҙар, үҙ-ара килешеү ҡағыҙҙары төҙөлә.

Эш ҡағыҙҙары стиле дини лексиканан бөтөнләйгә азат тиерлек. Дини һүҙҙәр традиция буйынса акт документтарының башында һәм аҙағында ғына ҡулланыла. Йөкмәткенең эсендә улар айырым һүҙҙәр, һирәгерәк һүҙбәйләнештәр формаһында ғына күренгеләп ҡала: *аның өчөн алла разы олсун* «уның өсөн алла ярлыҡаһын», *шәриғәтимез ҡушҡан буйынча* «шәриғәтебеҙ ҡушҡан буйынса», *барча мосолманлар* «бөтә мосолмандар» һ. б.

Эш ҡағыҙҙары стиле, шаҡтай нормалашҡан һәм ҡанунлашҡан булыуына ҡарамаҫтан, XVII—XVIII быуат башҡорттарының һөйләү теле йоғонтоһон да кисерә. Был бигерәк тә урындағы ябай халыҡ вәкилдәре тарафынан төҙөлгән документтарҙың морфологияһы, фразеологияһы һәм лексикаһында сағыла. XVIII быуат урталарында һиҙелә башлаған был йоғонто 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда айырыуса ҙур масштаб ала. Күпселек акт документтарында төрки лексикаһы өҫтөнлөк итә, ғәрәп-фарсы элементтары төрки һәм рус һүҙҙәре менән, архаик лексика (шул иҫәптән ҡарлуҡ һәм уғыҙ) башҡорт халыҡ теленә яҡын торған формалар менән алмашына башлай. Мәҫәлән, элекке *бадишаһ, ғәйре, итифаҡда, мөһөр, мөхәкәмә, фарман, чок, тегди, кизин, эл* һүҙҙәре урынына *«сар (йәки импратур), башҡа, берлекдә, мичәт (бичәт), сут, бриказ, күб, тейде, суң, ҡул»* һүҙҙәренең ҡулланылыуы шул хаҡта һөйләй.

Халыҡтың йәнле һөйләү телендәге кеүек, эш ҡағыҙҙары стилендә лә ҡайһы бер һүҙҙәр, үҙҙәренең төп мәғәнәләрен үҙгәртеп, яңы йөкмәтке алалар: *мулла* (дин әһеле) һүҙе, мәҫәлән, йыш ҡына «белемле, хөрмәтле; мөғәллим» мәғәнәһендә ҡулланыла. Е. Пугачевтың яҡын ярандарының береһе Ҡинйә Арыҫлановҡа, ғәмәлдә ул дин әһеле булмаһа ла, мулла тип өндәшкәндәр [41].

Эш ҡағыҙҙары стиленә ингән ғәрәп-фарсы элементтары акт

---

[41] Усманов А. Н. Кинзя Арсланов — сподвижник Пугачева // Исторические записки АН СССР. Институт истории, 71. М., 1961. 113-сө бит.

документтарының башында документҡа рәсмилек, тантаналыҡ, күтәренкелек биреү өсөн һәм шуның менән мөрәжәғәт тәғәйен кешенең юғары дәрәжәһен һыҙыҡ өҫтөнә алып күрһәтеү маҡсатында ҡулланылған.

Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ғәрәп-фарсы һүҙҙәре (мәҫәлән, *хат, бәлә, бәхәс, ваҡыт, зат, заман, халыҡ, ҡәдәр* һ. б.) ситтән ингән лексика тип ҡаралмай. Улар шул заманда уҡ нейтраль һәм электән килгән үҙ һүҙҙәр итеп ҡабул ителә башлай.

Рус теленән ингән һүҙҙәр эш ҡағыҙҙары стилендә айырыуса ҙур урын алып тора.

XVII—XVIII быуат башҡорт йәмғиәтендәге социаль-экономик, политик һәм культура үҙгәрештәре рус теленән алынған һүҙҙәрҙең йәнле һөйләү теленә генә түгел, ә төрки яҙма әҙәби теленә лә тәрән үтеп инеүенә булышлыҡ итә. Айырыуса был эш ҡағыҙҙары стилендә, бигерәк тә уның хәрби һәм ижтимағи-политик терминологияһына ҡағылған өлөшөндә, ныҡ сағыла: *вайскауай, бриказ, афисир, капитан, рапурт, сутник, ғрамут, абрук, нариз, крипаснуй, чилабитна* һ. б.

Сит телдән инеүсе һүҙҙәр үҙҙәренең ҡулланылыш процесында башҡорт теленең фонетик төҙөлөшөнә яраҡлаша һәм был үҙ нәүбәтендә төркиҙә лә сағыла. Мәҫәлән, XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркиендә осраған русизмдар, башҡорт теленең өн төҙөлөшөнә яраҡлашып, түбәндәге үҙенсәлектәргә эйә булалар: а) һуҙынҡылар өлкәһендә өндәрҙең көсеше: *а>ә (канцелярия>кәнсәләр, надзиратель>нәзирәтил)*; *о>а (команда>каманда, особый>асубый)*; *о>у (борона>бурана, кантон>кантун)*; б) тартынҡылар өлкәһендә өндәрҙең көсеше: *п>б (поп>буп, полковник>балкауник)*; *ц>с (царь>сар, офицер>афисир)*; *ч>ш (почтовый>буштавай)*; *в>б (волость>булус, февраль>фибрал)*; *щ>ш (общество>убшиства, помощник>бамушник)* һ. б.

Рус теленән ингән һүҙҙәр шулай уҡ фонетик процестарҙан (протеза, эпентеза, апакопа күренештәренең барлыҡҡа килеүенән) тыуған комбинаторлы үҙгәрештәргә лә дусар булған. Мәҫәлән, бер нисә тартынҡының йәнәш килеүе һүҙ башында һуҙынҡы ҡушылыуға сәбәп була (протеза): *старшина>ыстаршина, следствие>эслитства.* Һүҙ уртаһында йәнәш килгән тартынҡылар ҙа һуҙынҡылар менән айырыла башлай (эпентеза): *князь>кенәз, книга>кенәгә, труба>торба.* Һүҙ аҙағында ҡайһы бер һуҙынҡылар һәм тартынҡыларҙың төшөп ҡалыуы, шунлыҡтан һүҙҙең ҡыҫҡарыуы күҙгә ташлана (апокопа): *ратуша>ратуш, уезд>өйәз* һ. б.

Һүҙ яһалышында ла ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе күҙәтергә мөмкин. Был осор Урал — Волга буйы төркиендә төрлө телдән булған ике тамыр һүҙҙең бергә килеүе күҙәтелә. Мәҫәлән: *батпис ҡылды, рапурт итте* һ. б.

Артабан эш ҡағыҙҙары стиле йәнле һөйләү теленә яҡыная. Эш ҡағыҙҙары һыҙаттары һәм алымдары, йәнле һөйләү теленең үҙенсәлектәре менән аралашып, документтар стиленең, шулай уҡ дөйөм төркиҙең артабанғы үҫешенә булышлыҡ итеп кенә ҡалмай, ә башҡорт әҙәби теленең формалашыуында ла ҙур роль уйнай.

2. Й ы л ъ я ҙ м а л а р  с т и л е. Был стиль башҡорт халҡының элекке тормошон, яҙма әҙәби тел тарихын өйрәнеү өсөн ҡиммәтле сығанаҡ булған шәжәрәләрҙе хеҙмәтләндергән.

Шәжәрәләрҙең нигеҙен төрлө материалдарҙы үҙ эсенә алған йылъяҙмалар тәшкил итә. Бер автор исеменән төҙөлһә лә, ғәмәлдә, улар төрлө кешеләр тарафынан яҙылған булырға тейеш. Шәжәрәләрҙең төп өлөшө тарихи хикәйәләүҙәр менән берлектә теге йәки был яҙма ҡомартҡыға нигеҙләнгән.

Башҡорт шәжәрәләренең яҙма документ булып әүерелеү процесы шаҡтай оҙаҡ барған[42]. XVI—XVII быуат аҙаҡтарынан башлап шәжәрәләрҙең йөкмәткеһе үҙгәрә, уларҙа башҡорт халҡының политик һәм социаль-экономик көнкүрешен сағылдырған, реаль ваҡиғаларға яҡын торған тарихи материалдар ҙурыраҡ урын ала башлай.

Башҡорт шәжәрәләре — көнсығыш халыҡтарының күпселегенә хас булған йылъяҙмалар традицияһының дауамы ул[43]. Шәжәрәләр теле шуны раҫлай: Урал — Волга буйы төркийе үҙенең барлыҡҡа килгән мәленән алып шул регион төрки телле халыҡтар өсөн уртаҡ әҙәби тел булып хеҙмәт иткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был фактты ҡайһы бер татар ғалимдары иҫәпкә алмай[44]. Әйткәндәй, үҙ ваҡытында иҫке славян теле лә ошондай уҡ функция үтәгән, йәғни славяндар өсөн тәүге әҙәби тел булып хеҙмәт иткән[45].

Урал — Волга буйы төркийенең йылъяҙма стилендә, берҙән, төрки һәм ғәрәп-фарсы (ҡайһы саҡ рус) һүҙҙәренең йәнәш ҡулланылыуы күҙәтелһә, икенсенән, китап теле менән йәнле һөйләү элементтарының бергә ҡушылыуы күҙгә ташлана.

Төрлө стиль элементтарының шаҡтай еңел берләшеүе социаль телмәр үҫешенә, шулай уҡ ысынбарлыҡты үҙенсәлекле сағылдырыуға хеҙмәт иткән индивидуаль художестволы алымдарҙың барлыҡҡа килеүенә, әлбиттә, ыңғай йоғонто яһаған.

Йылъяҙма стилендә ғәрәп-фарсы лексикаһы менән архаик һүҙҙәр һәм формалар әллә ни күп түгел, әммә нәҡ ана шулар ысынбарлыҡ фактын сағылдырыуҙа телмәр фонын барлыҡҡа килтерәләр ҙә инде. Шул арҡала йылъяҙмаларҙа боронғолоҡ колориты — үҙенә күрә тарихи стилизация тыуа. Был күренеш һуңыраҡ төрки яҙма әҙәби теленең художестволы стилендә лә файҙаланыла.

Йылъяҙма стилендә ғәрәп-фарсы һәм архаик һүҙҙәрҙең иҫкергән грамматик формалар менән комплекста ҡулланылышы мате-

---

[42] Автобиография Тимира. Богатырские сказания о Чингиз-хане и Аксак-тимире / Перевод, вступительная статья и комментарий В. А. Панова. М., 1934; Рашид ад-Дин. Сборник летописей. М.; Л., 1952. Т. 1. Кн. 1—2. Шара Туджи. Монгольская летопись XVII века / Сводный текст, перевод, введение и примечания Н. П. Шастиной. М.; Л., 1957; Кононов А. Н. Родословная туркмен, сочинение Абу-л-Гази, хана Хивинского. М.; Л., 1958.

[43] Кузеев Р. Г. Башкирские шежере. Уфа, 1960. 9-сы бит.

[44] Хисамова Ф. М. XVIII йөздәге татарча эш кәгазьләренең тел үзенчәлекләре. Казан, 1982; Усманов М. А. Татарские исторические источники XVII—XVIII вв. Казань, 1972.

[45] Филин Ф. П. Истоки и судьбы русского литературного языка. М., 1981. 212-се бит.

риалға тантаналы-патетик пафос бирә, авторҙың патриотик тойғоларын сағылдырыу өсөн уңайлы сара була. Шундай стиль һәм пафос менән әйтелгән һүҙҙәр кешене граждандык һәм әхләҡи бурыстар тураһында уйланырға мәжбүр итә: *Ҡәрендәш, оруғ, дусларым, хушларымны өндәб алдым да әйтем, ки: — Бәнем ғүмерем ахырына ирешде. Мондин суң донъяны нә ғәмәл илә күтәрсезләр, — диб* (Юрматы ырыуы башҡорттарының шәжәрәһе) «Ҡәрендәштәремде, ырыуҙаштарымды, дуҫтарымды, яҡындарымды саҡырҙым да әйттем: — Минең ғүмеремдең ахыры етте. Бынан һуң һеҙ нисек йәшәрһегеҙ?»

Йылъяҙма стилендә художестволы һүрәтләү саралары сағыу һәм ҡыҙыҡлы. Бында иң характерлыһы — аныҡлаусыларҙы урынлы һәм оҫта ҡулланыу. Мәҫәлән: *ҡара башлы, ҡыҙыл йөҙлө бер егет; йөгөрөк төлкө* һ. б. Аныҡлаусы сифатында ҡулланылған ҡайһы бер һүҙҙәр йыш ҡына эпитетҡа әүерелеп китәләр: *асыл зат, рәхимле шаһ* һ. б. Бындай һүҙҙәрҙең даими рәүештә эпитет функцияһында ҡулланылышы йылъяҙмалар стилен халыҡ теленә һәм ауыҙ-тел ижады теленә яҡынайта.

XVII—XVIII быуат авторҙары, шәжәрә тексын төҙөгәндә, шул осор әҙәби тел элементтарын ҡайтанан төркөмләү эшен дә башҡаралар һәм йыш ҡына халыҡтың тел байлығына мөрәжәғәт итәләр. Был тенденцияны, әлбиттә, ыңғай яңылыҡ тип баһаларға кәрәк.

Быларҙың барыһы ла йылъяҙма стилендә синонимик һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙең оҫта файҙаланыу мөмкинселеген тыуҙыра, мәҫәлән: *атадылар — исем бирделәр, тордоҡ — ғүмер сөрдөк, үлде — вафат булды — әжәл зәхмәте ирешде — донъянан үтте — донъянан күчде* һ. б.

Урал — Волга буйы төркийенең йылъяҙма стилендә, эш ҡағыҙҙары стиленән кәмерәк булһа ла, башҡорт йәмғиәтенең ижтимағи-политик сфераһында ҡулланылған терминологик лексика осрай. Улар араһында борондан килгәндәре лә (*ант, бий, биләү, бай, шыбаға, ант ит-, ил башлығы, уруғ* һ. б.), һуңғыраҡ осорҙағы алынмалар ҙа (*шарт, хат, хакимчелек, хәрәмлек, әмер, кенәгә, ыстаршина* һ. б.) бар.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийендә традицияларҙы һаҡлау йәһәтенән ҡулланылған архаик һүҙҙәрҙе, шулай уҡ ҡарлуҡ-уғыҙ формаларын һәм элементтарын да күрергә мөмкин, мәҫәлән: *бән* «мин», *эв* «өй», *эл* «ҡул», *әйләде* «эшләне», *белеңезләр* «белегеҙ», *булмаңызлар* «булмағыҙ», *уғырлаб... бешермеш»* «урлап... бешерҙе», *аманат бирүлдикдин кизин* «аманат биргәндән һуң», *бу ер вә су синеке олсун* «был ер һәм һыу һинеке булһын» һ. б.

Йылъяҙма стиленең төп лексик составын предметтарҙы, эшхәрәкәтте, шулай уҡ абстракт фекерҙе аңлатҡан һүҙҙәр тәшкил итә. Әйтеп китергә кәрәк, исемдәр араһында дини мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәр һирәк осрай. Уның ҡарауы, феодализм осорон сағылдырған ижтимағи-политик лексика киң файҙаланыла.

Ҡылымдарҙан торған лексика ла бай һәм күп төрлө. Шулар

араһында хәрби хәрәкәттәрҙе һәм уларға бәйле ваҡиғаларҙы тасуирлаған һүҙҙәр йыш күҙгә ташлана. Мәҫәлән: *хөсүд булдылар* «дошманлаштылар», *яулар булды, баш салдуҡ, ҡол булдуҡ, һәләк булдылар, моҡатәлә булды* «алыш булды» һ. б. Башҡорт йәмғиәтенең феодаль үҫешендә осраған төрлө хәл-ваҡиғаларға бәйле әйтелгән һүҙҙәр ифрат күп: *риғиәт булдуҡ* «подданный булдыҡ», *ясаҡ итеб бирдек, йорт бозолдо, мырзалыҡ чине бирде* һ. б.

Йылъяҙма стилендәге ҡылым лексикаһының ғәҙәти булмауы һәм мәғәнә яғынан төрлөлөгө *-ш, -ды, -ған, -гән, ирде, -ң, -еб-дер* аффикстарын киң ҡулланыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Мәҫәлән: *бар имеш, диде ирсә* «тине иһә», баҡыңлар «ҡарағыҙ», *аңар көлөбдер* «унан көлдө», *уғырлап бешермеш* һ. б. Йылъяҙмалар стилендә үткән заман ҡылым аффикстарының ҡулланылышы билдәле дәрәжәлә шәжәрәләрҙең характерына бәйле, сөнки уларҙа, ғәҙәттә, үткән дәүер тарихындағы ваҡиғалар тасуирлана. Үткән заман ҡылым формаһы менән шул ҡәҙәр йыш эш иткән башҡа бер стилде лә күрһәтеп булмайҙыр. Шул уҡ ваҡытта йылъяҙмалар стилендә үткән заман формаларының XVII—XVIII быуаттарҙағы башҡорт теленә яҡынайыуын һәм уның грамматикаһы нигеҙендә нығыныуын билдәләп китергә мөмкин. Был осор төркийендә *-мыш, -еб, -дер* һәм башҡа ҡайһы бер ҡылым аффикстарын ҡулланыу әкренләп кәмеүгә бара.

Һөйләү теле элементтарының төркигә ниндәй юлдар менән килеп инеүен асыҡлау әлегә ҡыйын мәсьәлә. Әммә шуны әйтергә була: был процесҡа башҡорт йәмғиәтенең прогрессив ҡарашлы, белемле һәм һәләтле ҡатламдарының, йәғни ырыу аҡһаҡалдарының, мәҙрәсә бөткән кешеләрҙең, шулай уҡ ябай халыҡ араһынан сыҡҡан сәсән һәм шағирҙарҙың яҙыу-һыҙыу өлкәһендәге эшмәкәрлеге ҙур йоғонто яһаған.

Төрки әҙәби теленә йәнле һөйләү теле элементтарының үтеп инеүен һәм нығыныуын йылъяҙмалар стилендә осраған мәҡәл-әйтемдәр, ябай халыҡ һүҙҙәре нигеҙендә раҫларға мөмкин. Башҡорттарҙың үткән тормошон, тарихын һәм мәҙәниәтен сағылдырыуҙа архаик лексика һәм ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән берлектә улар ҙа әһәмиәтле роль уйнай.

XVII—XVIII быуат төркийен ябайлаштырыу, аңлайышлыраҡ итеү маҡсатында һөйләү телендәге стилистик ресурстар киң файҙаланыла. Йылъяҙма телендә, мәҫәлән, фразеологик берәмектәр, тотороҡло һүҙбәйләнештәр йыш осрай, улар телдең художество дәрәжәһен күтәрә, уға йәнлелек бирә [46]. Мәҫәлән: *ғаҡыллы аңлар, ғаҡылсызның бер ҡолағындин керүб, берсендин чығар* «аҡыллы аңлар, аҡылһыҙҙың бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сығыр», *нәселедин белмәгән кеше бадишаһ алдында сүз сүзләргә ярамас* «нәҫелен белмәгән кешегә батша алдында һүҙ һөйләргә ярамаҫ»,

---

[46] Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы. Өфө, 1984. 92-се бит.

*ахырғудин хәбәр белмәгән хакимчүлүккә ярамас* «мәғлүмәтһеҙ кеше хакимлыҡҡа ярамаҫ».

Төркиҙең йылъяҙма стилендә башҡорттарҙың географияһына һәм тарихына бәйле ономастик лексика ҙур урын тота: гидронимдар (*Нөгөш, Селәүек, Тор* һ. б.), оронимдар (*Туратау, Шәкетау, Ҡуштау, Йөрәктау* һ. б.), этнонимдар (*бөрйән, бүләр, ҡара табын, ҡатай, табын, юрматы* һ. б.), антропонимдар (*Алтынбай, Байсура, Бикбулат, Ҡилдеяр, Мораҙым* һ. б.).

Әҫәргә йәнлелек һәм көсөргәнешлелек биреү өсөн йылъяҙма стилендә йыш ҡына ымлыҡтарҙы һәм сағыштырыуҙарҙы үҙ эсенә алған тура телмәр ҙә ҡулланыла.

Башҡорт шәжәрәләренең жанр булып формалашыуы һәм уларҙың тел-стилдәренең үҫеше ике сығанаҡ менән бәйле. Тәүгеһе — яҙма әҙәбиәт, икенсеһе — ауыҙ-тел ижады. Айырым шәжәрәләрҙең яҙылыу характеры, стиль үҙенсәлектәре, шулай уҡ уларҙың структураһына ингән төрлө тарихи-әҙәби сығанаҡтарҙың айырым өҙөктәре, йәнә уларҙа осраған башҡорт эпик әҫәрҙәренең фрагменттары быға шаһит [47].

Йылъяҙмалар стиленән күренеүенсә, XVII—XVIII быуат төркийендә яҙма һәм һөйләү теле бер-береһенә тартыла һәм яҡыная. Уларҙың бер-береһенә үтеп инеүе һуңғараҡ күҙәтелә. Был хәл бигерәк тә шиғри формалағы шәжәрәләрҙә һәм әҙәби-художестволы стилдә, атап әйткәндә, бәйеттәрҙә сағыла [48].

Ҡөнсығыш халыҡтарының йылъяҙма традициялары дауамында башҡорт шәжәрәләре халыҡ теле үҙенсәлектәренә ярашлы үҙ алымдарын барлыҡҡа килтерә. Был алымдар, нигеҙҙә, һуңғараҡ яҙылған шәжәрәләрҙә киң файҙаланыла.

XVII—XVIII быуат төркийендә йылъяҙмалар стиле ныҡлы урын ала һәм башҡорт әҙәби телен тыуҙырыуға һәм үҫтереүгә ерлек әҙерләй.

3. Публицистик стиль. Был стилдең айырым элементтары юрматы һәм меңле ырыуы башҡорттарының шәжәрәләрендә күҙәтелә.

Ул бигерәк тә Нуғай юлы башҡорттарының 1663 йылдың 16 ноябрендә Өфө воеводаһы А. М. Волконскийға яҙған хатында асыҡ күренә [49]. Был хатта XVII быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт йәмғиәтендә абсолют монархияның нығыуы, крепостной иҙеүҙең көсәйеүе, социаль протестың һәм ризаһыҙлыҡтың артыуы сағыла.

Артабан был стиль Өфө өйәҙе башҡорттарының Петр I-гә яҙған хатында (1706 йыл) [50], өндәмәләрҙә һәм Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған тарихи хатында [51], Салауат

---

[47] Хөсәйенов Ғ. Б. Күрһәтелгән хеҙмәт. 92—123-сө бит.

[48] Ахмедьянов К. А. Переходные формы образности и их роль в становлении письменной поэзии тюрко-язычных народов // Литературное наследие народов Урало-Поволжья и современность. Уфа, 1980. 37-се бит.

[49] Материалы по истории БАССР. М.; Л., 1936. Ч. 1. 166-сы бит.

[50] ЦГАДА. Ф. 108, оп. 1, д. 2.

[51] ЦГАДА. Ф. 7, оп. 1, д. 1781.

Юлаевтың саҡырыу ҡағыҙҙарында һәм приказдарында файҙаланылған.

Атап ителгән текстарҙың теле өсөн художестволы әҙәбиәт стилендәге ялтырауыҡлы, тантаналы ғәрәп-фарсы һүҙҙәре һәм һүҙбәйләнештәре хас түгел. Унда, йылъяҙмалар йәки эш ҡағыҙҙары стилендәге кеүек, факттарҙы, ваҡиғаларҙы ҡоро теркәү күҙәтелмәй. Публицистик стилдә һәр саҡ авторҙың үҙ ҡарашы, ынтылышы, теләге сағыла. Был уҡыусыны һәр һүҙгә ҡолаҡ һалырға, уйланырға мәжбүр итә. Шул уҡ ваҡытта публицистик стилгә йыйнаҡлыҡ, эмоционаллек һәм аныҡлыҡ та хас.

Урал — Волга буйы төркийенең тарихи үҫешендәге һәр этапта публицистик стиль ниндәй ҙә булһа үҙенсәлек һаҡлай. Һыҙыҡ өҫтөнә алып, шуны әйтергә кәрәк: XVII—XVIII быуаттарҙағы күпселек текстар төрлө стиль элементтарының ҡушылмаһын тәшкил итә (мәҫәлән, юрматы, меңле ырыуҙары башҡорттарының шәжәрәләре, Өфө өйәҙе башҡорттарының Петр I-гә яҙған хаты, Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға арнаған хаты һ. б.).

Публицистик стилгә тартым төрки текстарҙа XVII—XVIII быуаттарҙағы башҡорттарҙың социаль-экономик тормошондағы ҡаты шарттарҙың, халыҡтың көндәлек мөһим уй-теләктәренең, шулай уҡ философик, политик көрәшенең тулы сағылышын күрергә мөмкин.

Фекер үткерлеге, хистәр тәрәнлеге, патриотик һәм гражданлыҡ пафосы — публицистик текстар өсөн иң хас һыҙаттар. Шул уҡ ваҡытта уларҙа һүҙ көрәштереү күренештәре, тенденциялы мәсьәләләр осрауын да әйтеп китергә кәрәктер.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төрки текстарындағы публицистик фрагменттарҙа социаль тормоштоң төрлө күренештәренә ҡағылған бик күп материалдар бар. Шунлыҡтан улар ижтимағи-политик көрәштең йылъяҙмаһы ролен үтәйҙәр һәм төрлө социаль ҡатламдарҙың позицияларын сағылдырған тарихи сығанаҡ булып хеҙмәт итәләр.

Тимәк, Урал — Волга төркийендәге публицистик стилдең барлыҡҡа килеүе башҡорт йәмғиәтенең социаль үҫешендәге һынылыш моменттарына, айырыуса Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуына, ә артабан төрлө восстаниеларға (1704—1711, 1735—1740, 1754—1755), бигерәк тә уларҙың кульминацияһын тәшкил иткән Е. Пугачев һәм С. Юлаев етәкселегендәге 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларына, бәйле.

Башҡортостан халыҡ массаларының ҡоралы көрәше «Рәсәйгә ҡушылыуға, йә иһә ерле халыҡтың башҡа милләттәргә ҡаршы көрәше түгел, ә рус батшалығының һәм дворяндарының, шулай уҡ уларҙың терәге булған башҡорт феодалдарының феодаль һәм милли иҙеүенә ҡаршы йүнәлтелгән массовый протесы ине» [52].

---

[52] Акманов И. Г. Башкирское восстание 1735—1736 гг. // Учебное пособие к спецкурсу «Классовые и национально-освободительные движения в России в конце XVII — первой трети XVIII вв.». Уфа, 1977. 3-сө бит.

Күп төрлө тарихи документтарҙың, шул иҫәптән Өфө воеводаһы кенәз А. М. Волконскийға, Петр I һәм императрица Елизавета Петровнаға яҙылған хаттарҙың, авторҙары ғәмәлдә публицистар булараҡ сығыш яһай, йәғни уларҙың үҙ принципиаль позициялары, үҙ ҡараштары бар, һәм был ҡараштарҙы улар уҡыусыға еткерә алған.

Авторҙар үтә ауыр йәшәү шарттары, физик һәм әхләҡи ҡыҫырыҡлауҙар тураһында һүҙ алып бара һәм был хәлдәрҙе тасуирлау өсөн шул осорҙағы хат, шикәйәт кеүек айырым әҙәби жанрҙар менән эш итә [53]. Идея-тематик йүнәлеше, тасуирлау формаһы, тел үҙенсәлектәренән сығып, был сығанаҡтарҙы публицистик ҡомартҡылар иҫәбенә индерергә мөмкин.

Публицистик стилдең формалашыуын һәм үҫешен XVII—XVIII быуат башҡорт йәмғиәтенең политик демократиянан, иректән мәхрүм булған эске атмосфераһы «стимуллаштыра». Был йәһәттән А. И. Герцендың һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп китеү урынлы: «Ижтимағи иректән мәхрүм халыҡ өсөн әҙәбиәт — ул ризаһыҙлыҡ һәм выждан тауышын ишеттереүсе берҙән-бер трибуна» [54].

Был хаттарҙы һәм башҡа сығанаҡтарҙы тулыһынса эшләнеп бөткән художестволы әҙәби әҫәр, тип ҡарап булмаған хәлдә лә, публицистикаға бирелгән билдәләүенән — «Публицистика — йәмғиәт тормошондағы актуаль мәсьәләләргә һәм күренештәргә арналған, уның төрлө яҡтары тураһында фактик мәғлүмәттәрҙе биргән һәм уларға авторҙың социаль идеалы күҙлегенән баһаһын, маҡсатҡа ирешеү юлдарын кәүҙәләндергән әҫәр» [55] — сығып, уларҙы һис бер тартып-һуҙыуһыҙ публицистика ҡомартҡылары, тип ҡарарға кәрәк. Улар ижтимағи тәрбиә, агитация һәм пропаганда ҡоралы булып та, шулай уҡ идеялар көрәшен, төрлө социаль информацияларҙы сағылдырыу сараһы булып та хеҙмәт итәләр. XVII—XVIII быуат төркиенең теле ижтимағи тормоштоң дөрөҫ картинаһын тыуҙырырға, шулай уҡ ул осорҙағы башҡорт йәмғиәтенең актуаль күренештәренә объектив баһа бирергә булышлыҡ итә.

Төрлө текстарҙа осраған публицистик йүнәлешле ижтимағи-политик лексика шул замандың актуаль һәм тантаналы идеяларын сағылдырыу өсөн хеҙмәт иткән. Мәҫәлән, Нуғай юлы башҡорттарының Өфө воеводаһы кенәз А. М. Волконскийға аманаттарҙы ҡайтарыуҙы һәм үҙ үтенестәрен батшаға еткереүҙе һорап яҙған хатында публицистик йүнәлеш ошондай һүҙҙәрҙә һәм һүҙбәйләнештәрҙә сағыла: *падишаһ яхшылыҡ рәхиме берлән саҡлаған ирде* «батша (элек) яҡшылығы һәм рәхиме менән һаҡлаған ине», *падишаһдан яхшылыҡ көтәмез* «батшанан яҡшылыҡ көтәбеҙ», *ҡол итәрмен боронғодай дисә аманатымызны ебәрсүн* «элеккеләй ҡол итәбеҙ, тиһә, аманаттарыбыҙҙы ебәрһен», *имде сүземезде падишаһҡа еткүр* «инде һүҙебеҙҙе батшаға еткер» һ. б.

---

[53] Хөсәйенов Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 140—147-се, 152—161-се биттәр.
[54] Герцен А. И. Собр. соч. 1956. Т. 7. 198-се бит.
[55] БСЭ. М., 1975. Т. 21. 628-се бит.

Крепостной ҡоролоштоң күп һанлы ижтимағи ғәҙелһеҙлектәре, социаль яуызлыҡтары Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хатында, шулай уҡ Е. Пугачев һәм уның ярандарының төркигә тәржемә ителгән бойороҡтарында асыҡ сағылыш таба. Мәҫәлән: *өйәз кешеләренә бөлгөнчөлөк килтерә* «өйәҙ кешеләренә бөлгөнлөк килтерә», *халыҡ бөлгөнлекдә йәшәде* «халыҡ бөлгөнлөктә йәшәне», *барлы-юҡлы мөлкәтен талады* «барлы-юҡлы мөлкәтен таланы», *залимлардан башларымызны ҡуртаруб ҡалырмызмы* «яуыз кешеләрҙән баштарыбыҙҙы һаҡлап ҡалырбыҙмы», *үз хезмәтләре илә ютатдылар* «үҙ хеҙмәттәре менән таланылар», *чыдамаҡ мөмкин түгел* «сабыр итеү мөмкин түгел», *сабыр итмәк тәкәтемез ҡалмады* «сабыр итер тәкәтебеҙ ҡалманы», *жафалар күргәзделәр ҡыйнамаҡ, суҡмаҡ вә алум алмаҡ, вә уғырламаҡ берлә* «туҡмап-һуғып, ришүәт алып, урлашып, яфалар күрһәттеләр», *халыҡ икмәксез ҡалды* «халыҡ икмәкһеҙ ҡалды» һ. б.

XVII—XVIII быуат төркийенең публицистик стилендә батша һәм урындағы администрацияның колониаль иҙеүенең, баш-баштаҡлыҡ ҡылыуҙарының, талауҙарының, йәберләүҙәренең көсәйеүен сағылдырған лексика күренә. Халыҡтың яңынан-яңы һалымдар менән күмелеүе (умарта, мунса, мейес, тирмән, мәке, ҡапҡа, күпер, тәҙрә, баҙ, ат, туй һәм башҡалар өсөн булған налогтар [56]) ошондай телмәр саралары ярҙамында бирелә: *абруклар белән бөлгөнлөккә төшөрә* «оброктар менән бөлгөнлөккә төшөрә», *көч етмәслек налоглар, төтөн налогы, ылау сабыу налогы, өчәр сум налог* һ. б.

Телдең публицистик йүнәлеше ризаһыҙлыҡ, протест белдергән һүҙҙәрҙә һәм һүҙбәйләнештәрҙә лә сағыла: *халыҡ арасына ғауға дөшде; указдан тыш ылау бирмәймез, сүземезне падишаһға еткермәсәң безгә үфкәләмә; ни... юл табсаҡ үҙең белерсең, ахыр чикдә бөлгөнлөкләр мундин булмасун; урманға керүб, ҡар өстөнә ятуб, ачығуб вә сыуыҡҡа тунуб үләйүкмү* һ. б.

Ышаныслыраҡ картина тыуҙырыу маҡсатында авторҙар кешеләрҙе һәм уларҙың хәл-характерын, шулай уҡ теге йәки был ваҡиға һәм уның һөҙөмтәләрен образлы итеп һүрәтләргә тырышалар, мәҫәлән: *безнең хәлемездән Нуғай юлы халҡының хәле мөшкөлрәкдүр; ул ялғанчы ҡарт дуңғызның сүзе; ҡыүәтле кеше, ышанычлы жан; яраҡлы вә ышанычлы кеше, мескен халайыҡлар; мәлғүн би фәһем янарал, залимлыҡ вә жафиллыҡ исеме илә шөһрәтләнгәндүр.*

Урал — Волга буйы төркийендә яҙылған текстарҙа революцион идеяларҙы алға һөрөүсе өндәү, саҡырыу, өгөтләү кеүек публицистиканың ғәҙәти һыҙаттары бик үк күҙгә ташланмаһа ла, уларҙа башҡорт халҡының ауыр хәлен сағылдырған антифеодаль, антикрепостной характерҙағы байтаҡ мәғлүмәттәр табырға мөмкин.

Шулай итеп, XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төрки-

---

[56] ЦГАДА. Ф. 108, оп. 1, д. 2. 3—4-се биттәр.

йендә тик бер публицистик стилдә генә төҙөлгән әҫәрҙәрҙе табыуы ҡыйын. Шул уҡ ваҡытта публицистик стиль элементтарын теге йәки был кимәлдә бик күп төрлө яҙма ҡомартҡыларҙа осратырға мөмкин.

4. Әҙәби-художестволы стиль. XVII—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төркийе, ошо региондың әҙәбиәте һымаҡ уҡ, үҙендә күп төрлө урындағы һыҙаттарҙы, традицияларҙы һаҡлай һәм үҫтерә бара.

XVIII быуат башындағы һәм икенсе яртыһындағы социаль-экономик, политик үҙгәрештәр арҡаһында Урал — Волга буйы төркийенең функциональ масштабы киңәйә. Яңы жанрҙарҙың һәм поэтик формаларҙың барлыҡҡа килеүе[57] уны дини-мистик әҙәбиәттең ҡанунлаштырылған теленән ситләшеүгә килтерә.

Хисаметдин Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғарийа» (XVII), Тажетдин Ялсығолдоң «Тарих намә-и Болғар» (XVIII), Мәүлә Ҡолойҙоң «Хикмәттәр»е (XVII) кеүек популяр тарихи-хроникаль һәм хроникаль-көнкүреш әҙәби ҡомартҡыларҙың, шулай уҡ билдәһеҙ авторҙарҙың ҡасыда, мәдхиә, мәрҫиә, ғәзәл, робағи, мәснәүи тибындағы күп һанлы поэтик әҫәрҙәренең барлыҡҡа килеүе башҡорт халҡының художестволы әҙәбиәткә булған ҡыҙыҡһыныуын һәм ынтылышын көсәйтә.

Культура кимәле күтәрелеү менән, ғәрәп-фарсы китаптарын тәржемә итеү системаһы һәм принциптары үҙгәрә. Тәржемәләр аңлайышлы халыҡ теленә яҡыная. Ғәрәп грамматикаһын өйрәнеүгә арналған яңы әсбаптәр барлыҡҡа килә. Быларҙың барыһы ла төрлө ҡатлам вәкилдәренең, бигерәк тә XVII—XVIII быуаттарҙа башҡорт йәмғиәте башында тороусыларҙың, аң һәм мәҙәниәте үҫешендә сағылыш таба. Өфө өйәҙе башҡорттарының 1706 йылда Петр I-гә яҙған үтенес хаты, Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға 1756 йылда ебәрелгән хаты — быны асыҡ миҫалы.

Башҡорттарҙың ижтимағи тормошонда, экономик ҡоролошондағы үҫеш һәм үҙгәрештәр талантлы башҡорт шағирҙарының һәм сәсәндәренең күтәрелеп сығыуына булышлыҡ итә. Әҙәби тел үҫешенә Урал — Волга буйы төркийенең быуаттарға һуҙылған традициялары һәм халыҡ ижады әҫәрҙәренең теле төп сығанаҡ булып хеҙмәт итә.

Ҡобайыр, йыр, сәсәндәр әйтешенең (бигерәк тә Ҡобағош, Ерәнсә, Байыҡ сәсәндәрҙең) тел үҙенсәлектәре XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийенең әҙәби стиленә һиҙелерлек эҙ һала. Был Салауат Юлаев шиғырҙарында, шулай уҡ 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусы айырым авторҙарҙың яҙма сығанаҡтарында бик асыҡ һиҙелә.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийе тарихын байҡағанда, тик художестволы әҙәбиәткә, атап әйткәндә, поэзияға

---

[57] Хусаинов Г. Б. Особенности развития литературы региона Урало-Поволжья в XI—XVIII вв. // Литературоведение и история: Тезисы докладов и сообщений. Ташкент, 1980. 20-се бит.

хас тел сараларының ҡулланылышын күрһәтеп китмәй булмай. Лексика, морфология, синтаксис өлкәһендә әҙәби ҡатлам айырыуса ныҡ күҙгә ташлана.

Урал — Волга буйы төркиенең әҙәби-художестволы стилендәге морфологияһына шундай һыҙаттар хас: сығанаҡ килештә торған исемдәр аҙағында *-дин* аффиксын ҡулланыу *(балдин татлы)*, төбәү килештең *-а//-ә* аффикстары менән килеүе *(баҡ жиһана* «йыһанға ҡара», *адамлара* «әҙәмдәргә» һ. б.), ҡайһы бер алмаштарҙы ҡушарлау *(бән//мән, бунларның//мунларның, сән//син)*, бойороҡ ҡылымда *-ғыл//-гел, -ҡыл//-кел* аффикстарын ҡуйыу *(барғыл, килгел)*, хәл ҡылымдарҙа *-уб//-үб* формаһын файҙаланыу *(башы ҡәдәменә төшүб* «башы аяғына төшөп», *ғаҡылым шашуб* «аҡылымдан шашып»), затлы ҡылым формаһына *-мыш* ялғауын ҡушыу *(ярышмышмын* «ярыштым»), эпизодик рәүештә исем ҡылымды *-мыш//-меш* аффиксы менән биреү *(тигмешдин суң* «тейгәндән һуң»), сифат ҡылымда *-ғучы//-гүче* ялғауы ҡулланыу *(теләгүче әдәм* «теләүсе әҙәм», *барғучы кеше* «барыусы кеше») һ. б.

Синтаксис өсөн һөйләмдәге баш киҫәктәрҙең тура ғына түгел, ә кире бәйләнешен, күп осраҡта *-ки* теркәүесен ҡулланыу характерлы.

Әҙәби-художестволы стилдең үҙенсәлеге айырыуса уның Көнсығыш поэзияһына тартым күп төрлө лексикаһында сағыла: *деле былбыл* «теле былбыл», *донъяуи ниғмәтләр* «донъяуи байлыҡтар», *шөйлә ғаҡылым шашуб* «шул рәүешле аҡылымдан шашып», *изге эшем; мисле Мәжнүн олдум имде* «хатта Мәжнүн һымаҡ булдым инде», *назлыда үҫкән жанларым* «наҙлыла үҫкән йәндәрем», *ләбе ләғел, деле былбыл. Деше ынжу, сачы сөнбөл* «ирене — гәүһәр, теле — былбыл. Теше — ынйы, сәсе — сөмбөл».

Әҙәби-художестволы стиль лексикаһында иҫке төрки, ғыҙ һүҙҙәре һәм формалары шаҡтай ҙур урын алған: *күңел ичрә* «күңелдә», *нитек* «нисек», *тигмә* «һәр кем», *имде* «хәҙер», *бити-* «яҙ-», *үзгә* «башҡа», *эл* «ҡул», *истә-* «телә-», *чок* «күп» һ. б.

Был стилдә йыш ҡына дини һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҙә ҡулланыла, мәҫәлән: *ҡарғыш булур* «ҡарғыш булыр», *изгү доға* «изге доға», *пиғәмбәр* «пәйғәмбәр», *тамуғ уты* «тамуҡ уты», *ҡыямәт көнө, илаһи, шайтан* һ. б. Бындай тел элементтарын ҡулланыу — ысынбарлыҡҡа ҡарата автор мөнәсәбәтен, автор эмоцияларын сағылдырыуҙың традицион сараһы ул.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: төрки телендә яҙылған шиғри әҫәрҙәр, прозанан айырмалы рәүештә, стилистик йәһәттән бер төрлөрәк, ҡоршаулыраҡ. Шуға күрә уларға һөйләш теле элементтары ҡыйыныраҡ үтеп инә.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркиендә, уға тиклемге башҡа осорҙар менән сағыштырғанда, әҙәби тел нормаларының үҫеш процесының, шулай уҡ әҙәби-художестволы стиль тарихына бәйле ваҡиғаларҙың асыҡ сағылышын күрергә мөмкин. Функциональ-поэтик лексика юғары стиль традицияларын дауам

итә һәм, тантаналы риторика сараһы булараҡ, художестволы эҫәргә күтәренкелек, гүзәллек бирә.

Был осор төркийенең прозаик һәм поэтик теле бер үк әҙәби телдең стилистик төрҙәре булып торалар. Улар өсөн архаик һәм сит телдән ингән лексиканы, бигерәк тә ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен һәм һүҙбәйләнештәрен ҡулланыу (мәҫәлән, *бостан* «баҡса», *ғишыҡ, ихлас, диуана, жиһан* «йыһан», *донъяуи, ғәм, ләбе ләғел* «ирене — гәүһәр» һ. б.) — ғәҙәти күренеш.

Шулай ҙа XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийе архаизмдарҙан һәм ғәрәп-фарсы элементтарынан әкренләп ҡотола бара. Бындай элементтар әҙәби телгә риторика, тантаналыҡ бирергә кәрәк булғанда ғына файҙаланыла. Тап бына ошо үҙенсәлек шул осор Урал — Волга буйы төркийенең йөҙөн билдәләй.

Әҙәби-художестволы стилдә эмоциональ, саф поэтик лексика әллә ни күп төрләнөк менән айырылмай. Һөйгән йәрҙең матурлығын тасуирлаған лексика ғына шаҡтай байыраҡ. Элегерәк образ тыуҙырыу өсөн автор уҡыусы ғына түгел, үҙе лә аңлап етмәгән һүҙҙәр ҡулланһа, XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийендә иһә яҙыусы формаһы һәм мәғәнәһе менән халыҡ теленә яҡын торған юғары поэтик лексикаға мөрәжәғәт итә.

XVIII быуатта Башҡортостанда тыуған ҡулъяҙма поэзия, М. Х. Иҙелбаев фекеренсә, асылда, бары мөхәббәт хистәрен тасуирлауҙан йә иһә дидактик өндәмәләрҙән торған[38]. Шуны ла билдәләп үтмәй булмай: был осорҙағы проза һәм поэзия шартлы поэтик һәм образлы биҙәү сараларынан ҡотолоу йүнәлешендә үҫә. Шартлы художестволы штамптар кәмегәндән-кәмей бара. Әммә был процесс поэзияла һәм прозала бер тигеҙ бармай.

Әҙәби-художестволы стилдең һүҙлек составы, бөтә Урал — Волга буйы төркийендәге кеүек, ҡатмарлы системаны тәшкил итә. Ул айырым һүҙьяһалыш типтарының, синонимик мөнәсәбәттәрҙең, антонимик ҡаршылыҡтарҙың, фразеологик бәйләнештәрҙең, стилистик төркөмләүҙәрҙең ҡатмарлы ҡушылмаһы. Ныҡлабыраҡ күҙ һалғанда, шуны күрергә мөмкин: ваҡыт үтеү менән, һүҙлек тулыланып ҡына ҡалмай, ә сифат яғынан да үҫә. Был процесс авторҙарҙың түбәндәге синонимдар менән эш иткәнендә лә асыҡ күренә: *сөәл — сорағ — сорау* «һорау», *чоҡ* «күп», *сәнә* «йыл», *тараф* «яҡ», *ләб* «ирен», *ҡәдәм* «аяҡ», *истә-* «телә-», *бостан* «баҡса», *үзгә* «башҡа», *жөмлә* «бөтә», *тир-* «йый-», *тек — кебек* «кеүек», *бити-* «яҙ-», *биғәйеп — ғәйепсез* «ғәйепһеҙ» һ. б. Күренеүенсә, әҙәби-художестволы стилдә синонимик берәмеккә халыҡ теленә яҡын торған аңлайышлы һүҙ өҫтәлә.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийендәге прозаик әҙәбиәттә синоним функцияһын рус һүҙҙәре лә үтәй. Мәҫәлән: *вәли — нәчәлник* «начальник», *ғәскәр — әрмийә* «армия», *хәким — судийа* «судья», *әфәнде — ғуспадин* «господин», *хәрби — военнай* «военный», *бичәт* «печать», *ҡул ҡуй — батбис ит* «расписаться» һ. б.

[58] Идельбаев М. Х. Литературные традиции в Башкирии накануне Крестьянской войны 1773—1775 гг. и творчество С. Юлаева // Литературное наследие народов Урало-Поволжья и современность. Уфа, 1980. 24-се бит.

Әҙәби-художестволы стилдә антонимдарҙы һәм парлы һүҙҙәрҙе ҡулланыу эмоциональ-экспрессив функцияға бәйле. Иң йыш файҙаланылған антонимдарҙан түбәндәгеләрҙе күрһәтергә мөмкин: *дошман — дуҫ, изге — яман, күп — аҙ, хаста — дауа, сорап — яуап бир-*; парлы һүҙҙәрҙән: *ата-ана, уғыл-ҡыҙ, малы-мөлкө* һ. б.

XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийендә уның артабанғы тарихына йоғонто яһаусы ҡатмарлы процестар күҙәтелә.

Был осор әҙәбиәтендә Ғәйед Сива улы, Абдулмәндан Мөслим, Мәүлә Ҡолой, Ғәбдрәхим Усман (Утыҙ Имәни) кеүек, башлыса, урындағы шағирҙарҙың дини-дидактик шиғырҙары ҙур урын тота.

Бигерәк тә Мәүлә Ҡолойҙоң «Хикмәттәр»ен айырып билдәләргә кәрәк. XVII быуатта ижад ителгән был әҫәрҙәрҙең асылы — нотоҡ уҡыу, кәңәш биреү, фәһем күрһәтеү, өйрәтеү. Шуға күрә уларҙың теле лә ябай һәм аңлайышлы.

XVII—XVIII быуат эсендә Урал — Волга буйы төркийенең лексик системаһы тәрән үҙгәрештәр кисерә. Әҙәби әҫәрҙәрҙең сюжетына, тематикаһына ғына түгел, ә жанр системаһына ла ҡағылған тарихи үҙгәрештәр әҙәби-художестволы стилде лә ситләтеп үтмәй.

XVIII быуаттың 50—80-се йылдарында ҙур ғына үҙгәрештәр күҙәтелә. Тап ошо осорҙа халыҡ араһында сыуалыштар көсәйә, һәм улар 1773—1775 йылдарҙа Е. Пугачев һәм С. Юлаев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы мәлендә иң юғары нөктәгә етә. «Башҡорт әҙәбиәтендә был осорҙа ҡулъяҙма һәм ауыҙ-тел формаһы йәшәп килгән. Улар менән параллель рәүештә дини-дидактик йөкмәткеле һәм көнсығыш классикаһынан тәржемә ителгән донъяуи әҫәрҙәр ҙә булған» [59].

Тап ошо йылдарҙа әҙәби-художестволы стилгә яңы һүҙҙәр килеп инә һәм активлаша. Был Урал — Волга буйы төркийенең лексик системаһында ҙур ғына стилистик төркөмсәләрҙе барлыҡҡа килтереүгә сәбәп була.

Телдең интенсив үҫеше, айырып әйткәндә, лексик үҙгәрештәр эске һәм тышҡы факторҙар менән аңлатыла. Рәсәйҙәге, шул иҫәптән Башҡортостандағы, ижтимағи-политик тормоштоң, мәҙәниәттең үҫеше XVII—XVIII быуат Урал — Волга буйы төркийендә яңы номинатив һәм һүрәтләү сараларының барлыҡҡа килеүенә ыңғай йоғонто яһай. Төркиҙәге яңы күренештәр иҫәбенә иң әүәл түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе индерергә мөмкин: *атҡа менегез, ирләр, ағалар; әйәрләгез, ирләр, арғымаҡлар; ылачындай төслө батырлар; әдерне тарттым, уҡ аттым* һ. б.

Башҡорт йәмғиәтендәге ижтимағи тормош һәм аң үҙгәрешенә бәйле төрки әҙәби телдәге стилистик системаның үҙгәртеп ҡоролоуы яңы лексик-семантик төркөмсәләрҙең яңы фразеологик берәмектәрҙең барлыҡҡа килеүенә сәбәп була, һәм ул, аҙаҡ сиктә, бер әҙәби-художестволы стилдең генә түгел, ә бөтөн төркиҙең яңырыуына килтерә.

---

[59] Идельбаев М. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 23-сө бит.

XVIII быуаттағы Урал — Волга буйы төркийенең әҙәби-художестволы стилендәге үҙгәрештәр, элегерәкке осорҙар менән сағыштырғанда, үҙенең айырым йүнәлештәре, законлылығы менән айырылып тора. Улар араһында башҡорт йәмғиәтенең ижтимағи тормошона ҡағылышлы төшөнсәләрҙе аңлатҡан лексик системаның үҙгәреүе күҙгә ташлана. Идеология өлкәһен сағылдырған лексик ҡатлам да ситтә ятып ҡалмай, әлбиттә. Мәҫәлән: *Донда ла тормош тар икән; Эсем буйҡайларын баяр басты; Алмаған да завод ҡалманы* һ. б. Әгәр XVI быуатта һәм XVII быуат башында рус һүҙҙәренең төркигә үтеп инеүе сикләнелгән булһа, һәм улар тик прозала ғына ҡулланылһа, XVII быуаттың аҙағында — XVIII быуатта иһә рус һүҙҙәре поэзияла ла киң урын ала.

XVIII быуаттың икенсе яртыһы, атап әйткәндә, 60-сы йылдар аҙағы һәм 70-се йылдар уртаһы — С. Юлаев ижад иткән осор. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бары тәржемә хәлендә йә телдән генә беҙгә килеп еткән С. Юлаев шиғырҙары, тәрән мәғәнәле, актив һәм тәьҫирле әҫәрҙәр булараҡ, үҙ мәле өсөн генә түгел, ә артабанғы йылдар дауамында ла ҙур ижтимағи-эстетик әһәмиәткә эйә булдылар. С. Юлаев әҫәрҙәренең теле Урал — Волга буйы төркийендәге әҙәби нормаларҙың артабанғы үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. «Уралым», «Яу», «Йәшлегем», «Егеткә», «Ыласын», «Уҡ», «Зөләйха», «Тирмәмдә»[60] шиғырҙарынан күренеүенсә, автор бай тел культураһына эйә булған һәм ундағы милли элементтарҙы оҫта файҙалана белгән, мәҫәлән: *Өйөр генә йылҡы араһында һөйөп менгән атым бүртә ине; Эшләп көн күргән халыҡҡа, тирҙәрен түккән улдарға; Ай кеүек һылыу ҡыҙҙар* һ. б. *«һай», «әй», «ай»* кеүек рефрендарҙың ҡулланылыуын да саф башҡорт теле күренеше, тип ҡарарға кәрәк. С. Юлаев әҫәрҙәренең нигеҙендә төрки лексика ята. Ғәрәп-фарсы телдәренән ингән һүҙҙәр традиция буйынса ғына, йәғни юғары, тантаналы стиль тыуҙырыу маҡсатында, файҙаланыла. Архаик формалар, ғәрәп-фарсы лексикаһын ҡулланыу, шулай уҡ махсус эпитеттар менән эш итеү поэтик телде ябай һөйләү теленән айырыу өсөн нигеҙ булып хеҙмәт итәләр (сағыштырығыҙ: *күрең анлары* «уларҙы күр», *башы ҡәдәменә төшүб* «башын аяҡтарына саҡлы эйеп», *дөрлө эшләр* «төрлө эштәр», *ләбе ләғел* «ирене — гәүһәр», *сачы сөнбөл* «сәсе — сөмбөл», *ләгеле гәүһәр ташларым* «гәүһәр аҫыл таштарым», *мәджнүн улдум* «мәжнүн (диуана) булдым» һ. б.). Был осор Урал — Волга буйы төркийенең поэтик теле әҙәби телдең стилистик төрө булараҡ сығыш яһай.

XVIII быуат аҙағынан XIX быуат уртаһына тиклемге дәүерҙәге Урал — Волга буйы төркийенең формалашыуы һәм үҫеүе күренекле шағир һәм аҡыл эйәһе Ғәбдрәхим бине Усман бине Сармаки бине Ҡырым әл-Болғари (1752—1836) йәки Ғәбдрәхим Усман (һуңынан Утыҙ Имәни) * әҫәрҙәренең художестволы теле менән тығыҙ бәйле.

---

[60] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең фәнни архивы. Ф. 3, оп. 12, д. 445. 194—204-се биттәр.

* Бында һәм артабан беҙ Ғ. Б. Хөсәйеновтың «Ғәбдрәхим Усман (1752—1836)» тигән ҡулъяҙма мәҡәләһенә таянабыҙ.

Ғәбдрәхим Усмандың ҡулъяҙма мираҫы бай һәм күп төрлө. Бында лингвистика, философия, этика, дингә ҡағылышлы хеҙмәттәр һәм шулай уҡ көнсығыш классик әҫәрҙәренә комментарийҙар бар. Әммә ижадының күп өлөшө әҙәби-художестволы әҫәрҙәрҙән тора. Шулар араһында бигерәк тә «Йнсаф улмаҡ бейаны» («Инсафлы булыу тураһында хикәйә»), «Ҡарап белмәк ни була инде мынан» («Бынан нимә ҡарап белеп була»), «Ғүмереңнең адымында уйлағыл уй» («Ғүмереңдәге һәр аҙымыңды уйла»), «Егет улмаҡның бейаны» («Егет булыу тураһында хикәйә»), «Ғалимләр бейаны» («Ғалимдар тураһында хикәйә») әҫәрҙәре иғтибарға лайыҡ.

Ғәбдрәхим Усман үҙенсәлекле поэтик юлдар менән йортһоҙерһеҙ кешеләрҙең ауыр яҙмышын, бай-түрәләрҙең хәйлә һәм мәкерлектәрен ҡыйыу рәүештә асып һалырға ынтыла. Шағир, үҙ заманының яҡшы һәм насар яҡтарын анализлап, уларға тейешле баһа бирә һәм фәһем сығара. Уның әҫәрҙәрендәге тел һәм стиль бер маҡсатҡа социаль тигеҙһеҙлекте, байҙар һәм ҡайһы бер дин әһелдәренең баш-баштаҡлыҡтарынан килгән нужаларҙы сағылдырыуға хеҙмәт итә.

XVIII быуат аҙағынан XIX быуат уртаһына тиклемге осорҙа, бөтә Урал — Волга буйы төркийендәге кеүек үк, Ғәбдрәхим Усмандың әҙәби-художестволы әҫәрҙәрендә лә элекке төрки элементтарын файҙаланыу күҙәтелә. Мәҫәлән, һүҙ аҙағында тел арты *ғ* тартынҡыһын ҡулланыу (*ачығ итмә* «асыуланма», *ачығ тел* «асыҡ тел»); күп һанлы боронғо төрки, уйғыр-карлуҡ һәм уғыҙ лексик берәмектәре һәм формаларын һаҡлау (*битедем* «яҙҙым», *узгә* «башҡа»; *кем ирсәнә ебәрмәсләр янымa* «кемде булһа ла янымa ебәрмәҫтәр», *синең сүзеңдин* «һинең һүҙеңдән», *әйлә-* «эшлә-», *ул-* «бул-») һ. б. Шулай ҙа элекке традицион художестволы алымдарҙан тыш, яңылары барлыҡҡа килә. Был бигерәк тә лексикала, атап әйткәндә, антонимдар менән эш иткәндә, асыҡ күренә. Элекке авторҙар йышыраҡ *донъя — әхир* «теге донъя», *дуст — дошман* тибындағы дөйөмөрәк антонимдарға мөрәжәғәт итһәләр, Ғәбдрәхим Усман әҫәрҙәрендә күберәк социаль ҡаршылыҡтарҙы сағылдырған антонимдар файҙаланыла. Мәҫәлән: *бай — фәҡир, байлыҡ — фәҡирлек, ғәдиллек — залимлыҡ* һ. б. Синонимдар, башлыса, ошондайыраҡ формала ҡулланыла: *надан — белексез* «наҙан — белдекһеҙ», *ғанилар — байлар* «хәллеләр — байҙар», *ғәрип — фәҡир* «фәҡир», *ғыззәт — хөрмәт* «хөрмәт», *йыһан — донъя* һ. б.

XVIII быуат аҙағы — XIX быуат уртаһындағы уҡымышлы шағирҙарҙың, шул иҫәптән Ғәбдрәхим Усмандың, әҫәрҙәрендә ғәрәп-фарсы лексикаһы шаҡтай ҙур урын тота.

Был осорҙағы Урал — Волга буйы төркийендә хәҙерге башҡорт телендә һәм уның диалекттарында ҡулланылған ғәрәп-фарсы һүҙҙәре осрай. Мәҫәлән: *тәкәбер* «тәкәббер», *залим, әхлаҡ, мәнфәғәтле, хыянат, сабыр, йыһан* һ. б. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге башҡорт теленә инмәгән ғәрәп-фарсы һүҙҙәре лә байтаҡ. Сағыштырығыҙ: *мәхмбус* «тотҡон», *хибес* «төрмә», *ғәдәвәт* «күрә ал-

маусылыҡ, дошмансылыҡ», *зәужә* «ҡатын-ҡыҙ», *мәфтүн* «һөйөклө кеше», *тәрәхем* «йәлләү» һ. б.

XVIII быуат аҙағы — XIX быуат уртаһы Урал — Волга буйы төркийендә шул осор йәмғиәтенең ғәҙел булмаған закондарына, социаль иҙеүгә ҡаршы ризаһыҙлыҡты белдергән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҡулланыла. Был 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының баҫтырылыу, Башҡортостанда феодаль һәм милли иҙеүҙең көсәйеүе дәүеренә ауаздаш була.

Замандың алдынғы кешеләре Урал — Волга буйында йәшәүсе төрки халыҡтарының мәҙәниәтен, белемен күтәреүҙә төркиҙең ниндәй ҙур роль уйнауын яҡшы аңлайҙар. Шул осорҙоң алдынғы кешеһе булараҡ, Ғәбдрәхим Усман төрки телен өйрәнергә, уны халыҡ араһында киң таратырға саҡыра.

Күреп төрки имеш диб, санама еңел,
Чалыш, сәғий ит, жәмеғ сүзләрен бел.
Әгәр гәндәки төрки олса, и яр,
Ғәжәп мөшкөл олан ерләре бар.
«Төрки, имеш тип, күреп, һанама еңел,
Өйрән, тырыш, барлыҡ һүҙҙәрен бел.
Төрки ябай ғына тип иҫәпләнһә лә, дуҫ,
Күптер унда хикмәт һәм сер».

Урал — Волга буйы төркийе, үҙенең тарихи үҫеш процесында уйғыр-ҡарлуҡ һәм уғыҙ элементтарын юғалта барып, әкренләп башҡорт теле нигеҙенә күсә, уның лексик, фонетик, грамматик закондарына яраҡлаша. Был күренештең тамырҙары халыҡ ижады әҫәрҙәре теленә яҡын торған Салауат Юлаев поэзияһына барып тоташа.

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының легендар полководецы, башҡорт халҡының данлы улы С. Юлаев үҙе лә тиҙҙән билдәле фольклор геройы булып китә. Үҙе тере саҡта уҡ уның тураһында күп һанлы легендалар, йырҙар, бәйеттәр һәм ҡобайырҙар барлыҡҡа килә. Был әҫәрҙәргә Салауаттың үҙ шиғырҙары ла инеп китә. «Юлай менән Салауат» ҡобайырында, мәҫәлән, М. Сәғитов билдәләүенсә, Салауаттың бик күп кенә шиғри һүҙҙәрен осратырға мөмкин[61]. «Салауат телмәре», «Салауат приказы»[62], легенда һәм риүәйәтендә лә Салауат тарафынан яҙылған тарихи документтарҙағы мәғлүмәттәр булыуы ихтимал.

Урал — Волга буйы төркийендәге әҙәби-художестволы стилдең формалашыуы һәм үҫешендә шулай уҡ XVIII быуатта ижад итеүсе Мәхмүт, Килдеш, Байыҡ сәсәндәрҙең дә роле ҙур.

Был осорҙағы Урал — Волга буйы төркийенең әҙәби тел үҫе-

---

[61] Сәғитов М. М. Үлемһеҙ батыр тураһында ҡобайыр // Ағиҙел, 1982. № 6. 66—78-се биттәр.

[62] Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Ф. Нәҙершина. Өфө, 1980. 201—202, 208—209-сы биттәр.

шенә тарих, тәуарих, хикәйәт, сәйәхәтнамә, хажнамә кеүек жанрҙар теленең йоғонтоһо һиҙелерлек була.

Урал — Волга буйы төркийенең тарихи үҫешендә, фольклор һәм әҙәбиәт бәйләнешенең башы, башланғысы булараҡ, йыр жанрының да билдәле өлөшө бар. Шуға күрә йырҙарҙа төрки яҙма ҡомартҡылары менән фольклор теленең аралашыуын күҙәтергә мөмкин.

Шулай итеп, XVIII быуаттың аҙағында, төрки яҙма әҙәби теле элементтарының үтеп инеүе арҡаһында, фольклор теле ниндәйҙер кимәлдә үҙгәрешкә дусар була. Шул уҡ ваҡытта төрки яҙма теле үҙе лә фольклор үҙенсәлектәрен ҡабул итә. Ике-ара тел элементтары барлыҡҡа килә, ә был — «художестволы фекерләүҙә фольклор һәм профессиональ башланғыстарының бер-береһенә йоғонтоһо, бәйләнеше күрһәткесе» [63]. Ошо йәһәттән бигерәк тә бәйет жанры иғтибарға лайыҡ. Ф. Урманчеев билдәләүенсә, ул фольклор һәм яҙма поэзия ҡушылдығында барлыҡҡа килә [64].

Элекке традицияларға таяныч, шулай уҡ ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәренең эске ресурстарын һәм элементтарын файҙаланып, дөйөм халыҡ теле нигеҙендә XVI—XVIII быуаттарҙа Урал — Волга буйы төркийе үҫә, камиллаша һәм төрлө һүрәтләү саралары менән байый.

Урал — Волга буйы төркийенең ошо осорҙағы үҫеше ҡатмарлы тарихи шарттарҙа бара. Унда әле тотороҡло нормалар формалашып өлгөрмәй, ә урта быуат һәм боронғо төрки теле ҡомартҡыларының традициялары йәшәп килә. Уйғыр-ҡарлуҡ, уғыҙ элементтары, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре, шулай уҡ рус теленән ингән һүҙҙәр ҡулланылыуы дауам итә. Эске семантик һәм грамматик берҙәмлек булмау сәбәпле, яҙма әҙәби тел менән башҡорт һөйләү теле араһында шаҡтай ҙур айырмалыҡтар һаҡлана.

Урал — Волга буйы төрки әҙәби теле XVI—XVIII быуат башҡорт йәмғиәтенең культура тарихында ҙур роль уйнаны. Урта быуаттарҙағы төрки әҙәби теле менән XIX быуат һәм XX быуат башындағы Урал — Волга буйы төркийе араһында тороусы күпер булараҡ, ул һуңғыһын байытты һәм башҡорт әҙәби теленең тарихи үҫешенә ҙур өлөш индерҙе.

---

63 Ахмедьянов К. А. Переходные формы образности и их роль в становлении письменной поэзии тюркоязычных народов // Литературное наследие народов Урало-Поволжья и современность. Уфа, 1980. 37-се бит.

64 Урманчеев Ф. Халык тавышы. Казан, 1974. 9-сы бит.

# XIX БЫУАТ ҺӘМ XX БЫУАТ БАШЫНДАҒЫ БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ ТАРИХЫ

Башҡорт әҙәби теле тарихында XIX быуат һәм XX быуат башы — иң мөһим дәүерҙәрҙең береһе. Был осорҙа, бер яҡтан, феодаль нигеҙҙәр яйлап тарҡалһа, икенсе яҡтан, буржуаз мөнәсәбәттәр урынлаша барып, милли-азатлыҡ хәрәкәте тағы ла киҫкенләшә. Урындағы был тарихи үҙгәрештәр Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теленең башҡорт йәнле һөйләү һәм фольклор телдәре менән үҙ-ара йоғонто яһашып үҫеү юлында ыңғай шарттар тыуҙыра.

Башҡорт әҙәби теле тарихының XIX быуат һәм XX быуат башы осоро үҙенән алдағы дәүерҙәргә ҡарағанда сығанаҡтарға бай булыуы менән айырыла. Ғәрәп яҙмалы әҙәби ҡомартҡыларҙы тышҡы сифаттары һәм үҙенсәлектәре буйынса түбәндәге төркөмдәргә бүлергә мөмкин:

1) ҡулъяҙма әҫәрҙәр: а) авторы билдәле йәки билдәһеҙ ҡулъяҙма әҫәрҙәрҙең төп нөсхәһе, б) ҡулъяҙма күсермәләр (әҫәрҙең варианттары);

2) баҫма китаптар.

Был төр сығанаҡтар Башҡортостанда ғына Үҙәк дәүләт архивында һәм Китап палатаһында, Зәки Вәлиди исемендәге Башҡортостан милли китапханаһында, Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивында һәм китапханаһында, ошо уҡ үҙәктең «Почет Билдәһе» орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Ҡулъяҙмалар һәм иҫке баҫма китаптар фондында, Башҡорт дәүләт берләштерелгән музейында һаҡлана. Ҡулъяҙма һәм иҫке баҫма китаптар Россияның Европа өлөшө һәм Себер мосолмандарының Дини идаралығы (Диниә назараты) эргәһендәге архив-китапханала ла байтаҡ тупланған. Башҡорт әҙәби теле тарихының беҙ тикшергән осорға ҡағылышлы сығанаҡтары Мәскәү (Боронғо акттарҙың Үҙәк дәүләт архивы, В. И. Ленин исемендәге дәүләт китапханаһы), Санкт-Петербург (Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фонды), Ҡазан (Ҡазан дәүләт университетының Н. И. Лобачевский исемендәге ғилми китапханаһы), Ырымбур (Ырымбур өлкәһенең дәүләт архивы) ҡалаларында ла осрай.

Башҡорт әҙәби теле тарихын сағылдырған сығанаҡ-текстар был осорҙа бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән төп өс төрҙә — поэзияла, проза һәм драматургияла һынлана. Әҙәби телдең үсеш дәүерҙәрендә улар төрлө кимәлдә ҡулланылышта була. XIX быуат башына тиклем Башҡортостандағы әҙәбиәт күпселегән ҡулъяҙма поэзияла үҫә. XIX быуат аҙағынан өҫтөнлөктө проза ала башлай; публицистик әҙәбиәт үҫеп сыға һәм хикәйә, повесть, драма кеүек яңы жанрҙар барлыҡҡа килә. Беҙ тикшергән осорҙоң поэзияһына ҡараған сығанаҡтар түбәндәгеләр: авторҙары билдәһеҙ (аноним) поэтик әҫәрҙәр, XIX быуаттың тәүге яртыһында ижад иткән суфый шағирҙарҙың (Т. Ялсығолов, М. Ҡотош-Ҡыпсаҡи, Ә. Ҡарғалы, Һ. Салихов, Ш. Зәки һ. б.) әҫәрҙәре, XIX быуаттың икенсе яртыһындағы мәғрифәтселек әҙәбиәте вәкилдәренең (М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев) әҫәрҙәре, XX быуат башында М. Ғафури, С. Яҡшығолов, Я. Юмаев, Ш.Бабич, Ф. Туйкин, Ғ. Иҫәнбирҙин, Б. Мирзанов, Д. Юлтый, Х. Ғәбитов, Ғ. Хоҙаяров, Ш. Әминев, С. Рәхмәтуллин, Ш. Тулвинскийҙарҙың поэтик әҫәрҙәре һәм 1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда матбуғат биттәрендә сыҡҡан революцион йөкмәткеле шиғырҙар.

Эпик әҙәбиәт традицион һәм хәҙерге проза жанрҙарында (хикәйәт, рисалә, намә, нәҫер, хикәйә, повесть һ. б.), публицистикала (газета-журнал һәм әҙәби тәнҡит мәҡәләләре), фәнни әҙәбиәттә (философия, логика, астрономия, математика, география, медицина, әҙәбиәт, тел ғилемдәре буйынса дәреслектәр һәм ғилми хеҙмәттәр), тарихи-документаль сығанаҡтарҙа (акттар, килешеүҙәр, наказдар, указдар, шәжәрәләр), эпистоляр материалдарҙа (рәсми һәм шәхси хаттар, көндәлектәр) һәм, аҙаҡ килеп, дин әһелдәре әҫәрҙәрендә (хәдис, шәриғәт, фиҡһе кеүек өлкәләргә ҡараған дини йөкмәткеле хеҙмәттәрҙең төркисә аңлатмалары) сағыла. Һуңғы төр сығанаҡтар тарихи планда ҡаралһа ла, бөгөн улар үҙ әһәмиәтен юғалтҡан, хәҙерге әҙәби тел менән уларҙың әллә ни уртаҡлығы юҡ.

XX быуат башы прозаиктарынан һәм драматургтарынан М. Ғафури, Р. Фәхретдинов, З. Һаҙи, А. Таһиров, Ә. Таңғатаров, Ф. Туйкин, Ә. Иҫәнбирҙин, З. Өммәти, Ғ. Ниязбаев, Ғ. Ғүмәрский, Б. Бәхтигәрәй улы, Ф. Вәлиев, Ҡ. Туйкин, Ғ. Рафиҡиҙарҙың проза һәм драма әҫәрҙәре әҙәби тел тарихы күҙлегенән ҡиммәтле сығанаҡтар булып һанала.

Сығанаҡтарҙың теленә дөйөм байҡау яһағанда, ҡыҫҡаса шуларҙы әйтергә мөмкин. Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теленең башҡорт йәнле һөйләү һәм фольклор теле менән үҙ-ара йоғонто яһашыу процесы XIX быуат башында асығыраҡ сағыла башлай. Бында шуны ла әйтергә кәрәк: фольклор теле тикшерелгән осорға тиклем үк, ҡулланылышы, структураһы яғынан төрлө диалекттарҙан өҫтөн булып, халыҡ ижадының поэтик теле дәрәжәһенә күтәрелә. Ул, бигерәк тә йырау һәм сәсәндәр поэзияһы телендә асыҡ сағылып, халыҡ әҙәбиәте теле функцияһын үтәү кимәленә етешә, ләкин әҙәби телдең үҙен тулыһынса алмаштыра ал-

май, ә уға йоғонто ғына яһай. Фольклор теле үҙе лә яҙма әҙәби телдең тәьҫир итеү көсөн кисерә.

Фольклор теленең төрки яҙма әҙәби телгә булған йоғонтоһо XIX быуат башы суфыйсылыҡ әҙәбиәте телендә лә күренә. Әгәр Ә. Ҡарғалы әҫәрҙәре телендә төрки яҙма әҙәби тел традицияһы өҫтөнлөк итһә, Һ. Салихов, Ш. Зәки кеүек әҙиптәрҙең әҫәрҙәре телендә йәнле һөйләү теле һәм фольклор элементтары күҙгә ярайһы уҡ салына башлай.

Фәнни әҙәбиәт, тарихи-документаль, эпистоляр сығанаҡтар һәм дини әҫәрҙәр текстарында төрки яҙма әҙәби теле бер төрлө генә ҡулланылмаған. Фәнни һәм дини әҙәбиәт телендә ғәрәп, фарсы һүҙҙәре өҫтөнлөк итә. Тарихи-документаль һәм эпистоляр сығанаҡтарҙа башҡорт һөйләү теленә хас һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр күпләп осрай, шул уҡ рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә байтаҡ ҡына.

XIX быуаттың тәүге яртыһында башҡорт йәнле һөйләү теле үрнәктәренең һәм фольклор өлгөләренең китаптарҙа баҫылып сығыуы, уларҙың төрки яҙма әҙәби телен демократлаштырыуҙағы роле бигерәк тә М. Биксурин, С. Күкләшев, М. Иванов кеүек уҡымышлыларҙың үҙҙәре төҙөгән дәреслек-китаптарында сағылыш таба.

Төрки яҙма әҙәби теленең йәнле һөйләү теле һәм фольклор теле менән үҙ-ара йоғонто яһашып үҫеү процесы һәм яҙма әҙәби телдең халыҡ теленә яҡынайыуы XIX быуаттың икенсе яртыһында мәғрифәтселек әҙәбиәте (М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев) телендә асыҡ күренә. Шуныһы ҡыҙыҡлы: М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев ижад иткән дәүерҙә, төрки яҙма әҙәби теле демократлашыу юлына төшкән мәлдә, суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең һуңғы әҙиптәренән булған Ғ. Соҡорой ижадында төрки яҙма әҙәби теле традициялары дауам ителешен таба. Был осраҡта беҙ традиция менән новаторлыҡтың үҙ-ара ҡырҡыу бәрелешен, прогрессив яңылыҡтың традиционлыҡтан өҫкә сығыуын күрәбеҙ.

XX быуат башында башҡорт милли әҙәбиәте үҫешенең яңы дәүере башлана. Быуат башында әҙәбиәт үҫешен тиҙләтеүҙә 1905—1907 йылдарҙағы рус буржуаз-демократик революцияһының әһәмиәте ҙур булды. Революция йоғонтоһонда татар ваҡытлы матбуғатының тыуыуы XX быуат башындағы башҡорт әҙәбиәтен татар матбуғаты телендә эш итеүгә килтерҙе. Башҡорт шағирҙары, яҙыусылары төрки яҙма әҙәби теле традицияларынан йәнле һөйләү теленә ярайһы уҡ яҡынайып өлгөргән татар яҙма әҙәби телен төрки теленә ҡарағанда яҡын күрҙеләр һәм ул телдән Башҡортостан шарттарында башҡорт йәнле һөйләү һәм фольклор телдәре менән үҙ-ара йоғонто яһашып үҫеүенә тос өлөш индерҙеләр. Ләкин шул уҡ ваҡытта сал быуаттар төпкөлөнән үк үҫә килгән төрки-башҡорт яҙма әҙәби теле лә үҙенең ҡулланылышын, йәнле халыҡ теленә яҡынайып камиллашыуын ҡулъяҙма әҫәрҙәрҙә дауам итте. Башҡорт шәжәрәләре, йылъяҙмалары, айырым авторҙарҙың ҡулдан яҙылған әҫәрҙәре, ошо төбәктәге рәсми ҡағыҙҙар, хаттар һәм башҡа йәдкәрҙәр тап ана шул телдә ижад ителде. Төрки

башҡорт яҙма әҙәби теле һәм XX быуат башында Башҡортостанда файҙаланылған татар матбуғаты теле, шулай итеп, егерменсе йылдар башында барлыҡҡа килгән хәҙерге башҡорт милли әҙәби теле туҡымаһына тәбиғи рәүештә ялғанып инеп китте.

*Беренсе глава*

## XIX БЫУАТТЫҢ БЕРЕНСЕ ЯРТЫҺЫНДАҒЫ УРАЛ — ВОЛГА БУЙЫ ТӨРКИ ЯҘМА ӘҘӘБИ ТЕЛЕ

Башҡорт әҙәби теле тарихында XIX быуаттың тәүге яртыһы, беренсенән, уға тиклем булған осорға органик рәүештә бәйләнеүе, икенсенән, төрки яҙма әҙәби теленең башҡорт, татар һөйләү телдәре һәм башҡорт фольклор теле менән үҙ-ара йоғонто яһашып үҫеүенә юл ярған осор булыуы яғынан билдәләнә. Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теле бигерәк тә суфыйсылыҡ әҙәбиәте телендә сағылыш таба. Уның башҡорт һөйләү теленә яҡынайыу тенденцияһы Башҡортостанда мәғрифәтселек хәрәкәтенең башланыуы менән бәйләнгән.

### 1. *Суфыйсылыҡ әҙәбиәте теле*

XIX быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең активлашыуына йәмғиәттең үҫеш кимәле түбән булыуы, тормош ауырлығы шаҡтай ҙур булышлыҡ итте. «Суфыйсылыҡтың сәскә атҡан төп осоро халыҡтарҙың ҡот осҡос фажиғә кисергән дәүерҙәренә тура килә», — тип яҙҙы А. Е. Крымский [1].

XVIII быуат аҙағы — XIX быуаттың тәүге яртыһы Россияла феодаль-крепостниклыҡ ҡоролошоноң тарҡалған һәм киҫкен кризис кисергән осоро булды. Ул заманда башҡорттар йәшәгән территория 12 өйәҙҙән торған Ырымбур губернаһына ҡарай ине [2]. Был осорҙа башҡорт йәмғиәтендә, бер яҡтан, патриархаль-ырыу ҡалдыҡтары менән сырмалған феодаль мөнәсәбәттәр һәм, икенсе яҡтан, буржуаз мөнәсәбәт башланғыстары хакимлыҡ итте. Күрһәтелгән осор башҡорттарҙың ярым күсмә тормош шарттарынан прогрессив экономик характерҙағы ултыраҡ тормошҡа һәм игенселеккә күсеүенең көсәйеүе менән дә билдәләнә. Тик был күсеш крайҙы артабан колонизациялау, башҡорт ерҙәрен аҡрынлап үҙләштереүҙе дауам итеү, 1798 йылда уҡ волость системаһы урынына башҡорттарҙы хәрби сословиеға күсергән кантон идаралығын индереү кеүек эштәр менән бергә барҙы [3]. Бындай үҙгәреш-

[1] Крымский А. Е. Очерк развития суфизма (тасауф) до конца III в. гиджры // Древности восточные: Труды восточной комиссии Московского археологического общества. М., 1896. Т. 2. Вып. 1. 31-се бит.

[2] Очерки по истории Башкирской АССР. Уфа, 1959. Т. 1. Ч. 2. 8-се бит.

[3] Асфандияров А. З. Введение кантонной системы управления в Башкирии // Из Истории Башкирии. Уфа, 1968, 153—164-се биттәр.

тәр халыҡтың социаль-экономик һәм ижтимағи-политик хәлен ҡыйынлаштырҙы, башҡорт халҡын батша самодержавиеһы, рус помещиктары, башҡорт-татар байҙары — феодалдары, руханиҙары тарафынан аяуһыҙ иҙеүгә килтерҙе.

XVIII быуат аҙағында һәм XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорттар социаль-экономик тормош шарттарынан ғына түгел, рухи культура үҫеше яғынан да ҙур ҡыйынлыҡ кисерҙе. 1788 йылда Өфө Россия мосолмандары өсөн Руханиҙар идараһы үҙәгенә әүерелә. Башҡа урындарҙағы кеүек ислам Башҡортостанда ла, башҡорт йәмғиәтенең социаль һәм рухи тормошонда патриархаль-феодаль ҡалдыҡтарҙы яҡлап, консерватив урын тотто. Уның төп асылы пантюркизм идеяһына — бөтә илдәрҙең төрки телле мосолмандарын дөйөм милләт итеп берләштереүгә — ҡайтып ҡала ине.

Мосолман руханиҙары башҡорттарҙың идеологик һәм рухани тормошоноң бөтә сфералары өҫтөнән күҙәтеү ойоштора, белем биреү өлкәһендә лә өҫтөнлөк итә. Башҡортостанда мосолман мәҙрәсәләре мәсет һәм мулла йорттары эргәһендә барлыҡҡа килә[4]. Улар, башлыса, колонизаторҙар һәм урындағы мосолман даирәләр политикаһына яуап биргән дини белем бирә. Араларында ыңғай яҡтан күҙгә салынырлыҡтары ла байтаҡ була, әлбиттә.

Был осорҙа Ырымбур крайында ныҡ танылған Стәрлебаш мәҙрәсәһе уғата айырылып тора. Бында Урал, Волга буйынан сығыусылар ғына түгел, бәлки ҡаҙаҡ далаларынан да килеп уҡығандар[5]. Стәрлебаш мәҙрәсәһенең китапханаһы боронғо көнсығыш ҡулъяҙмаларын күп туплаған була, улар аҙаҡ шунда уҡ күсерелеп, бөтә Башҡортостан территорияһына таратыла. 1913 йылда «Ваҡыт» газетаһы (9 июнь, № 1220) академик В. В. Бартольдтың Ырымбурҙан Өфөгә барышлай Стәрлебашта туҡталыуы тураһында хәбәр итә һәм ул, «Стәрлебаш мәҙрәсәһенең китапханаһын аҡтарып, 200—300, хатта 500 йыл элек яҙылған ҡулъяҙма китаптарҙы диҡҡәт вә ләззәт илә ҡараған»[6], — тип яҙа. Был сығанаҡтар араһында дини йөкмәткеле ҡулъяҙмалар менән бер рәттән донъяуи характерҙағы яҙмалар ҙа осраған[7].

Үҙенең прогрессив яғы менән Балыҡлыгүл мәҙрәсәһе лә берни тиклем айырылып тора. Бында үҙ заманының алдынғы эшмәкәре, мәктәп схоластикаһы һәм суфыйсылыҡ дошманы Хөснөтдин Жданов 60 йыл буйына шәкерттәрҙе уҡытҡан[8].

Шулай ҙа XIX быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостандағы мосолман мәҙрәсәләренең күпселеге халыҡтың аңын дин менән

---

[4] Хәрисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы (XVIII—XIX быуаттар). Өфө, 1965. 281—282-се биттәр.

[5] Туҡаев Ш. Тарих-и Стәрлебаш. Ҡазан, 1899. 8-се бит (ғәрәп яҙыуында).

[6] Дневник путешествия по маршруту Оренбург — Башкирия — Сибирь — Кяхта // Архив АН РФ. Ф. 68, оп. 1, ед. хр. 98.

[7] Кудашев А. Г., Ганиев Б. Х. Коллекция восточных печатных и рукописных книг из села Стерлибашево // Южноуральский археографический сборник. Уфа: БФАН СССР, 1973. Вып. 1. 393-сө бит.

[8] Фәхретдинов Р. Аҫар. Ырымбур. 1908. 2-се т. 14-се китап. 480-се бит (ғәрәп яҙыуында).

ағыулау ҡоралы булды һәм уларҙан ислам диненә тоғро хеҙмәт иткән кешеләр тәрбиәләү маҡсатын алға ҡуйҙы. Руханиҙар тарафынан киң һәм ныҡышмалы һеңдерелгән дини идеология тарихта эҙһеҙ юғалманы. Был осорҙа башҡорттарҙың ауыр социаль-экономик хәлдә булыуы өҫтөнә, бындай идеология Башҡортостандағы яҙма поэзияла аскетизмды, мистицизм һәм пессимизмды, алла ҡаршыһында бөтә кешенең тиң булыуын, ярлы-ябағаны йәлләү, яҡлау кәрәклеген пропагандалаған суфыйсылыҡ йүнәлешенең үҫеүенә булышлыҡ итте. Шул уҡ ваҡытта «башҡорт суфыйсылығы башҡа эҙмә-эҙлекле суфыйсылыҡтан мосолманлыҡтың йыш ҡына гражданлыҡҡа үҫеп китеүе, ә ярлы-ябағаны йәлләү һәм яҡлау мотивы ҡайһы саҡ ғәҙел булмаған йәмғиәт күренештәрен ҡыйыу тәнҡитләүе менән айырыла» [9].

Урал — Волга буйы суфыйсылыҡ поэзияһының танылған вәкилдәре булып Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи (1763—1849), Тажетдин Ялсығолов (1767—1838), Әбелмәних Ҡарғалы (1782—1833), Һибәтулла Салихов (1794—1867), Шәмсетдин Зәки (1821—1865) һәм Ғәли Соҡорой (1826—1889) һанала. Улар үҙҙәренең әҫәрҙәрен Урта Азия төркийенән айырылып торған Урал — Волга буйы төркийе вариантында яҙған. Был йәһәттән Т. Ялсығолов тарафынан үзбәк суфый шағиры Аллаярҙың «Ҫөбәт әл-ғажизин» әҫәрен аңлатыу нигеҙендә яҙылған «Рисалә-йи Ғәзизә» ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Аллаяр, билдәле булыуынса, үҙенең китабын башта фарсы телендә яҙған, аҙаҡ, үзбәк уҡыусыларының һорауы буйынса, уны, бер аҙ ҡыҫҡартып, төрки теленә тәржемә иткән. Ләкин «Ҫөбәт әл-ғажизин»дың теле башҡорт һәм татар өсөн ҡыйын аңлашылған, сөнки унда, ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре күп булыу менән бер рәттән, Урта Азия төрки яҙмаһына хас элементтар өҫтөнлөк алған. Шуға күрә, үзбәк уҡыусылары һымаҡ уҡ, башҡорт һәм татарҙар ҙа Т. Ялсығоловҡа әҫәрҙе урындағы төрки теленә күсереүен һорап мөрәжәғәт иткән. Т. Ялсығолов был үтенесте үтәгән, һәм һөҙөмтәлә «Рисалә-йи Ғәзизә» китабы яҙылған. Бында Аллаярҙың һәр бер бәйетенә (ике юллыҡҡа) теҙмә юл менән аңлатма бирелгән. Аллаяр менән Т. Ялсығолов китаптары, дөйөм яҡтары күп булыуға ҡарамаҫтан, теле йәһәтенән бер-береһенән айырылып тора. Т. Ялсығоловтың «Рисалә-йи Ғәзизә»һе Урта Азия регионы төрки теленән Урал — Волга буйы төрки теленә күсерелгән. Ике тексты ла сағыштырып анализ яһау был региональ яҙма әҙәби телдәрҙе айырыу өсөн бай материал бирә. Миҫалдар килтерәбеҙ.

Аллаярҙа: вә ләкин булмады *һүл* Нух айағы.

Тажетдинда: Мәгәр Нух ғәлиййһи әс-сәләм сиксән кеше бергә айаҡларына *чыҡ* тиймәйин хәлас булды [10].

Артабан Тажетдин *«һүл»* һүҙен: «Һүл чыҡ суы мәғнәсенәдер,

[9] Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа (XVIII—XIX века). Уфа, 1973. 241-се бит.

[10] Ялсығолов Т. Рисалә-йи Ғәзизә. Казан, 1908. 9-сы бит (ғәрәп яҙыуында). Артабан миҫалдар алынған биттәр текста күрһәтелде.

ҡашҡар халҡы илә ғосман халҡының арасында мөштәрәк луғәтдер», — тип аңлата.

Аллаярҙа: Ҡил, әй, нәфс, ачмағыл күз һәр *ҡыйана.*

Тажетдинда: Әй, әдәми, күзеңни ачыб, һәр *тарафҡа* баҡмағыл (110-сы бит).

Аллаярҙа: Мунындик йүргәнеңдән үлгәнең *хуб.*

Тажетдинда: Бунчалайын ғәйеб вә гөнаһлар эчендә йүрмәкендин үлгәнең *изгүдер* (82-се бит).

Аллаярҙа: Үзеңдин *пәсҡа*, зинһар, *әймәғил сәхт.*

Тажетдинда: Зинһар, үзеңдин *түбән* мәртәбә кәмсенәгә ҡатылыҡ сүз берлә *рәнжетмәгел* (110-сы бит).

Тағы ла сағыштырығыҙ: Аллаяр (А): *ҡотлоғ ғаса* — Ялсығолов (Я): *мөбәрәк тайаҡ* (12-се бит); А: *ҡайтармағай ҡаш* — Я: *һич ҡаршулыҡ әйләб, ҡаш читмаз* (19-сы бит); А: *күрәндә* — Я: *күргән заманда* (180-се бит); А: *әшнәлик рәштәсен өз* — Я: *белешлек йебне өзгел* (180-се бит); А: *нечүк дирсән* — Я: *нечүк әйтүрсән* (180-се бит); А: *безмдик* — Я: *безнең кебе* (180-се бит); А: *айған сүземез* — Я: *әйткән сүземез* (181-се бит); А: *һәр ҡанда булсаң* — Я: *ҡайу урында булсаң да* (181-се бит); А: *баҡмағыл* — Я: *ҡарамағыл* (183-сө бит) һ. б.

Т. Ялсығоловтың теле бик сыбар — был Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теленә хас нәмә. Тикшерелгән әҫәрҙең телендә, бер яҡтан, яҙма әҙәби традиция һаҡланһа, икенсе яҡтан, халыҡтың һөйләү теленә хас лексик һәм грамматик элементтар осрай.

Текста *бәрәгү* (берәйһе, кемдер мәғәнәһендә) тигән китап һүҙе бигерәк күп ҡулланыла: *бәрәгү әйтсә, әүлийәләр ғәйебне белүр* (58). Лексиканың төрки өлөшөндә йыш ҡына һүҙҙең уртаһында һәм аҙағында *ғ* графофонемаһы булған һүҙҙәр осрай: *оруғ* (250) «ҡәбилә, ырыу»; *ҡозуғ* (14) «ҡоҙоҡ»; *ҡоруғ* (250) «ҡоро, буш»; *олуғ* (182) «оло, бөйөк»; *андағ* (182) «ундай»; *толуғ* (18) «тулы»; *уғлан* (184) «ул, малай, бала»; *ағыз* (184) «ауыҙ»; *йағмур* (19) «ямғыр»; *йағмаҡ* (19) «яуыу»; *уйғанмаҡ* (222) «уяныу»; *ағурмаҡ* (59) «ауырыу» һ. б.

«Рисалә-йи Ғәзизә» телендәге ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренә килгәндә, улар Т. Ялсығолов тарафынан ентекле аңлатылған: *ғәбра мунда йер мәғнәсенәдер* (7) «ғәбра бында ер мәғәнәһендә»; *Фариҡ мунда айырғучы мәғнәсенәдер* (10) «Фариҡ бында айырыусы мәғәнәһендә»; *пәста фарсы... чикләүек мәғнәсенәдер* (13) «фарсы һүҙе пәста сәтләүек мәғәнәһендә»; *чаһ-чим, фарсы илә, ҡозуғ мәғнәсенәдер вә джаһ-джим, ғәрәби илә, дәүләт мәғнәсенәдер* (14) «чаһ фарсының чим [хәрефе] ҡоҙоҡ мәғәнәһендә һәм джаһ-джим [хәрефе], ғәрәп һүҙе, байлыҡ мәғәнәһендә» һ. б

«Рисалә-йи Ғәзизә»нең теле ғосман-төрөк яҙма әҙәби теле йоғонтоһонан да азат түгел. Унда, мәҫәлән, *анчалайын, бунчалайын* (182), *шунчалайын* (98) «шулайса», *андағ* (159), *ошандаҡ* (9) «ундай, ошондай», *нета ки* (67) «сөнки», *чуҡ* (19) «күп», *таки* (12) «тағы, ләкин, шулай уҡ» кеүек һүҙҙәр йыш ҡулланыла.

Ғәрәп-фарсы һәм традицион элементтар менән бер рәттән, «Рисалә-йи Ғәзизә» телендә башҡорт фольклорында һәм йәнле һөй-

ләү телендә булған, хатта хәҙерге әҙәби тел нормаһы булып инеп киткән һүҙҙәр киң ҡулланыла. Мәҫәлән: *бал* (14), *ҡаҡлаған ит* (18), *ашйаулыҡ* (18), *аҡ май* (19), *ҡаш* (19), *йәйә* (11) һәм диал. *жәйә* (222), *кереш* (11), *күләгә* (183), *йел* (98), *батҡаҡ* (12), *туғай* (12), *айыу* (66), *таған* (66), *ҡанат* (222), *йоморҡа* (222), *ҡарға* (98), *күңел* (98), *үлән* (223), *йемеш* (222), *икмәк* (118, 251), *ат йалы* (253), *күпер* (12), *йаҡын* (11), *йомшаҡ* (10), *үкенеү* (182), *күркәм* (182), *йеңел* (185), *йарылыу* (22), *йомоу* (12), *йахшылыҡ* (67), *байағы* (222), *йыраҡ* (250), *ҡашында* (170), *хәлеңдән тыш* (251), *күңел ҡаралығы* (252), *балыҡ* (18), *болот* (19) һ. б.

«Рисалә-йи Ғәзизә» әҫәрендә суфыйсылыҡ идеологияһына хас булған һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр ҙә бик күп: *суфыйлыҡ дәғүәсе* (129) «суфыйлыҡ дәғүәһе»; *гөнаһ эшләр* (87) «гонаһ эштәр»; *ғазаб әйлә* (102), «ғазаплан»; *теләнчелек әйлә* (129) «теләнселек ит»; *тәүбә әйләгел* (87) «тәүбә ит»; *хәсрәт* (101), *бәлә вә ҡаза* (101) «бәлә һәм ҡаза, бәлә-ҡаза»; *әхирәт* (129), *сабыр әйлә* (101) «сабыр ит»; *йарлыҡағыл* (90) «ярлыҡа»; *мескен ҡол* (90) «меҫкен ҡол»; *нитаки бойурды* (208) «шуға бойорҙо» һ. б.

Морфологик үҙенсәлектәр буйынса яҙма әҙәби традицияларға түбәндәге формалар инә:

1) сығанаҡ килештең боронғо уйғыр *-дын//-дин* форманты: *атадын атаға, уғлдын уғлға ҡалуб* (11) «атанан атаға, улдан улға ҡалып». Әммә ошо уҡ миҫал текстың икенсе урынында *-дан//-дән* аффиксы менән бирелгән: *атадан атаға, уғлдан уғлға ҡалыб* (12);

2) ике төп субстантив һәм адъектив мәғәнәләрҙә йөрөгән *-чы//-чи* аффикстары ҡабул иткән *-ғу//-гү* исем ҡылым формаһы. Мәҫәлән: *ҡарағучы* (183) «ҡараусы»; *айырғучы* (10) «айырыусы»; *гөнаһ ҡылғучы* (184) «гонаһ ҡылыусы»; *исбат әйләгүчи* (24) «иҫбат итеүсе»; *файда тикүргүчи* (248) «файҙа килтереүсе». Был форма башҡа мәғәнәлә лә осрай, мәҫәлән: *йыртҡучы хайуанлар* (66) «йыртҡыс хайуандар»;

3) ҡылым нигеҙенә *-ғыл//-гел* аффиксын ҡушып яһалған бойороҡ формаһы: *барғыл* (12) «бар»; *кергел* (12) «кер»; *йүрткел* (66) «йөрөт»; *беркеткел* (66) «беркет»; *өзгел* (180) «өҙ». Әммә шул уҡ ваҡытта башҡа фонетик варианттар ҙа осрап ҡуя, мәҫәлән, *ҡоротғол* (12) «ҡорот» һ. б.;

4) *-маз//-мәз* аффикслы ҡылымдың юҡлыҡ формаһы: *китабның мәғнәсене белмәзмез* (23) «китаптың мәғәнәһен белмәйбеҙ»; *ҡарамаз* (182) «ҡарамаҫ»; *келмәз* (185) «килмәҫ» һ. б.;

5) *-ғай//-гәй* формаһы: *биргәй* (23) «бирә»; *күләгә уғлай* (185) «күләгә булар»;

6) үткән заман сифат ҡылымдың *-дыҡ+и//-дек+и//-дуҡ+и* аффикслы эйәлек формаһы: *күңелләрдән үтдеки хыйаллардан* (24) «күңелдәрҙән үткән хыялдарҙан»; *ҡачыб йөрдеки ҡолыңны* (90) «ҡасып йөрөгән ҡолоңдо»; *йазылдыҡы* (12), «яҙылған». Был форма ҡайһы ваҡыт *-ған//-гән* аффикслы ҡыпсаҡ формаһы менән алмашына. Сағыштырығыҙ: *ул ҡылдыҡы гөнаһларындин* (185) «ул

ҡылған гонаһтарҙан», ләкин *ул ҡылған эшләрендин* (185) «ул ҡылған эштәрҙән»;

7) *-мыш//-меш* аффикслы сифат ҡылым формаһы: *пешмеш балыҡ* (18) «бешкән балыҡ». Был форма сағыштырмаса әҙ ҡулланыла;

8) *-майын//-мәйен* аффикслы хәл ҡылымдың юҡлыҡ формаһы: *кем әйләмәйүн* (16) «кем дә булһа эшләмәйенсә»; *эшләмәйен вә кәсб ҡылмайын* (16) «эшләмәйенсә һәм кәсеп ҡылмайынса»; *михнәт ҡылмайын* (16) «михнәт ҡылмайынса» һ. б.

Ҡыпсаҡ теленең (халыҡ һөйләү теленең) морфологик үҙенсәлектәре түбәндәге миҫалдарҙа осрай:

1) *-ға//-гә, -ҡа//-кә* һәм эйәлек аффикслы исемдәрҙән һуң осраған *-а//-ә* ялғаулы төбәү килеш формаһы: *кемсәнәгә* (110) «кешегә»; *джиһан мәсхәрәсинә* (38) «йыһан (донъя) мәсхәрәһенә»;

2) *-дан//-дән* аффикслы сығанаҡ килеш формаһы: *ҡара болотдан* (19) «ҡара болоттан»; *күздән* (67) «күҙҙән»;

3) *ирде* ярҙамсы ҡылымы менән килгән *-ған* аффикслы үткән заман формаһы: *Аллайар суфи әввәл бу фарсы китабы йазған ирде* (23) «Аллаяр суфый башта был фарсы китабын яҙған ине»; *ғаҡаид ысулдан чыҡған ирде* (23) «иманынан сыҡҡан ине»;

4) *-ған//-гән* аффикслы үткән заман сифат ҡылым формаһы: *фарсы телендә йазылған китаб* (23) «фарсы телендә яҙылған китап»; *сүз мәғнәсене белгән кемсәнәләр* (23) «һүҙ мәғәнәһен белгән кешеләр» һ. б.;

5) хәл ҡылымдың *-уб//-үб* аффикслы формаһы: *ун йәшендә Бохараға килтүрүб, мәдрәсәгә салды* (6) «ун йәшендә Бохараға килтереп, мәҙрәсәгә һалды»; *су баҡчадан артуб урамға чыҡуб, урамның бәғз йерләрен батҡаҡ әйләмеш ирде* (115) «һыу, баҡсанан артып урамға сығып, урамдың ҡайһы бер ерҙәрен батҡаҡҡа әйләндергән ине». Хәл ҡылымдың был формаһы «Рисалә-йи Ғәзизә»лә киң ҡулланыла.

Традицион һәм яңы тел элементтарының йәнәш осрауы синтаксиста ла күҙәтелә. Тикшерелгән әҫәр телендә, мәҫәлән, эйәртеүсе бәйләнештең ике төрө лә традицион теркәүесле эйәрсән һөйләмдәр һәм сағыштырмаса һуң барлыҡҡа килгән хәл ҡылым менән бирелгән хәбәре булған эйәртеүле конструкциялар бар.

Эйәрсән һөйләмдәр баш һөйләмгә *ки, ким* (сөнки, күрә, -лыҡтан, -лектән, -ға, -гә; ҡасан, ни ваҡытта, *-ған, -гән;* тип, кеүек, хатта, хәтле, һайын, -ға, -гә, -дай, -тәй), *нитак ки, зира ки* (-ға, -гә, -лыҡтан, -лектән, күрә, шуға күрә; сөнки һ. б.), *әгәр, әгәрчә* (әгәр, әгәр ҙә, -һа ла, -һә лә), *та, таки* (тиклем, -ғанса, -гәнсә һ. б.) теркәүестәре менән теркәлә. Миҫалдар: *күрдеки атасыны джәлàдләр алуб бара торорлар* (115) «атаһын палачтар алып киткәнен күрҙе»; *әгәрчә ул күз белә ҡаш арасы кебе аз улсада...* (140) «әгәр ул күҙ менән ҡаш араһы кеүек аҙ булһа...»; *зира ки сахиб илтимасының исме һәм Ғәзизә иде, шуның үчүн «Рисалә-йи Ғәзизә» улды* (3) «Һораусының исеме Ғәзизә булғанға күрә, «Рисалә-йи Ғәзизә» тип аталды»; *йәғни, нитаки бер ҡараңғу кич берлә*

*йул йүрүсәң йаңылышурсын* (140) «йәғни, әгәр ҙә бер ҡараңғы кис менән юл йөрөһәң, аҙашырһың» һ. б.

«Рисалә-йи Ғәзизә» әҫәре телендә башҡорт, татар һөйләү телдәренә хас булған хәбәре *-ыб* формаһындағы хәл ҡылымдан килгән эйәрсән һөйләмдәр йыш осрай. Мәҫәлән: *йәғни, төрки мөридләре: «Ул фарсы теленчә улынған китаб ғаҡаидыңны төрки теленә оруб, андын файда алуб, күңелләр тынычланыб рәхәт улсун ирде», — дип әйдиләр* (23) «йәғни, төрки мөриттәре: «Был фарсы телендә яҙылған иман китабын төрки теленә күсереп, унан файҙа алып, күңелдәр тынысланып, рәхәт булһын ине», — тип әйттеләр»; *һауа йөзөндәге ҡара болотдан йағмур йаудығында, йағмур арасында күк күкрәб, йәшен йәшнәб, нәрсәләрне суғыб йандырыр* (19) «һауа (күк) йөҙөндәге ҡара болоттан ямғыр яуғанда, ямғыр араһында күк күкрәп, йәшен йәшнәп, нәмәләрҙе һуғып яндырыр» һ. б.

«Рисалә-йи Ғәзизә» тексында ябай һөйләмдең башҡорт, татар һөйләү телдәренә хас төрлө типтары киң урын алған. Был, һис һүҙһеҙ, уҡыусыларҙың киң ҡатламы өсөн шиғыр тексының билдәле күләмдә сәсмә тел менән аңлатылыуына бәйләнгән.

Т. Ялсығоловтың «Рисалә-йи Ғәзизә» әҫәре тикшерелгән осорҙоң төрки яҙма әҙәби сығанаҡтары араһында айырым урын алып тора. Уның хикәйәттәре теле яғынан шиғырҙарынан ныҡ ҡына айырыла: шиғырҙары, Аллаярҙыҡы һымаҡ уҡ, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре һәм грамматик формалары менән сыбарланған китап «төркийе» телендә яҙылған, ә шәрехтәре һәм хикәйәттәре халыҡ «төркийе» теленә тартымыраҡ. Сағыштырыу өсөн миҫал килтерәйек. Шиғырҙарынан:

Биләм дирсәң бу фәндә ғилме хали,
Назардан ҡума бу назме әл-ләали (7-се бит).
«Беләйем тиһәң был фәндә суфыйлыҡты,
Иғтибарҙан ситкә ҡыума ошо ынйылай шиғырҙы».

Был ике юллыҡта фарсы теленә хас изафеттар (*ғилме хали, назме әл-ләали*) ҡулланылған. Шәрехтәрендә Т. Ялсығолов өҫтәмә иллюстрация рәүешендә яңы хикәйәттәр килтерә һәм төрлө аңлатмалар бирә. Унда, ғәҙәттә, саф «төрки» теленә хас грамматик формалар өҫтөнлөк итә. Аллаярҙың «ысыҡ» мәғәнәһен биргән «шәбнәм» һүҙенә ҡарата ул үҙенән бына нәмәләр өҫтәп яҙған: *«...шәбнәм вәсф тәркибидер вә чыҡ суы мәғнәсенәдер. Хөккәмәләр әймешләр: чыҡ суы өч төрлөкдөр: берсе бәғзе иҡлимда хәмәл боружының әүүәлендән сәрәтән боружының ахрына дикен улур. Ул чыҡ суы мотлаҡ үләнләр өчөндөр, ғәйре хайуандар өчөн дәгелдер. Әммә әсәд боружының әүүәлендән сөнбәлә боружының ахрына дигән төшкән чыҡ суы үләнләр файдасы өчөн вә һәм ана сүнә дидеки хайуан өчөндөр. Ул заман ул хайуан чыҡ суыны ниғмәтләнеб торор. Ҡачанки көз фаслы йетсә, ул хайуан йоҡлар, хаттаки икенче йаз боружына дигән. Йаз заманында йоҡодан уйғаныб йазғы чыҡ суы илә бала чыҡарыр. Жәй фасылында улғучы чыҡ суы илә баласы тамам үсеб, үзе кебе улур. Әймешләр:*

*ан сүнә дидеки бер ҡошдор, үрдәк ҡәдәре улур, ҡанатлары чуар, башы ҡара улур. Үләнләр арасында торор, гаһ ваҡытда бүдәнә кебе очар, тиз заман үләнләр арасына төшәр. Очҡанда ҡанатындан төрлөк ауазлар чыҡар, ағызы илә чыҡармаздыр... Йоморҡасы өч булур, ике йоморҡасы шәберчәк улур, бересендән баласы чыҡар. Ғәрәб жәзирәләрендә чуҡ улур вә һәм безнең Болғарның сәрхәди Бохарада улур. Әйемешләр: чыҡ суы йаз фаслы улдуҡы болотдан иремәздер, бәлки дәүр фәләкнең дурындандыр. Һауа жәзеб идәр, зираки донйа күгендән түбән бер дарйа вардыр, аты Бәхре Мәсжүр дирләр. Ҡаты жәйәдән уҡ чыҡдыҡы кебе ағар. Бу ике ваҡытда чыҡ суыны ике ваҡытның һауасы жәзеб идәр, йәғни тартар. Ҡачанки көнөш гүә Ҡафдан баш күтәрсә, байағы чыҡ суыны кәрә'и фәләк үзенә жәзеб идәр, үләнләрдән алур. Ғарийат биргән нәрсә кебедер...* (222-се бит). Тәржемәһе: «...шәбнәм сағыштырыу формаһында ысыҡ мәғәнәһен бирә. Хакимдарҙың әйтеүе буйынса, ысыҡтың төрә өсәү: беренсе төрө ҡайһы бер континенттарҙа хәмәл айының (ирандарҙа ҡояш йылының тәүге айы, март — апрель айҙарына тап килә. — И. F.) башынан сәрәтән айының (дүртенсе ай, июнь—июлгә тап килә) аҙағына ҡәҙәр була. Ул ысыҡ үләндәр өсөн файҙалы, хайуандарға тәғәйенләнмәгән. Әммә әсәт айының (бишенсе ай, июль—авгусҡа тура килә) башынан сөмбөл айының (алтынсы ай, октябрь—ноябргә тура килә) аҙағына тиклем төшкән ысыҡ үләндәргә һәм инә сүнә исемле ҡоштарға файҙалы. Был ваҡытта ул ҡош ысыҡ һыуын эсә. Ҡөҙ еткәс тә, был ҡош киләһе яҙға тиклем йоҡоға тала. Яҙ көндәре йоҡоһонан уянып, яҙғы ысыҡ менән бала сығара. Йәйге ысыҡ менән балаһы тамам үҫеп, үҙе кеүек була. Кешеләрҙең һөйләүе буйынса, инә сүнә тигәне бер ҡоштор, өйрәк ҙурлығы булыр, ҡанаттары сыбар, башы ҡара. Үләндәр араһында йәшәй, ваҡыт-ваҡыт бүҙәнә кеүек оса һәм тиҙ генә үләндәр араһына төшә. Осҡанда ҡанаты төрлө тауыштар сығара, [тауыштарҙы] ауыҙы менән сығармай... Өс йомортҡа һала, ике йомортҡаһы серетке була, береһенән себеш сыға. Ғәрәбстан утрауҙарында күп осрай һәм беҙҙең Болғарҙың сиктәше Бохарала ла бар. Кешеләрҙең һөйләүе буйынса, ысыҡ яҙғы болоттан иреп ергә төшмәй, бәлки күк йөҙөнөң үҙенән төшәлер. Һауа уны тартып ала, сөнки донъя күгендән түбән бер дарья бар, исеме уның «Мәсжүр диңгеҙе», тиҙәр. Ҡаты (тибешле) йәйәнән уҡ атылған кеүек аға. Был ике ваҡытта (яҙ менән йәй араһында) ысыҡты ике миҙгелдең һауаһы үҙенә тартып ала. Ҡаф (Ҡавказ) тауҙары баш күтәрһә (ҡарҙан ирей башлаһа), баяғы ысыҡты күк көмбәҙе үҙенә үләндәрҙән тартып ала. Ваҡытлыса биреп торған нәмә кеүек...»

Т. Ялсығолов йыш ҡына әйтемдәр, мәҡәлдәр һәм фразеологизмдар ҡуллана: *нурның күләгәсе улмаз* (21) «нурҙың күләгәһе булмаҫ»; *ғаҡл эйәсе аз нәсихәтдән күб ғибрәтләрне алурлар вә бер ахмаҡға нә ҡәдәр олуғ вәғәз китабы уҡусаңда файда алмаз* (24) «аҡыл эйәһе әҙ генә нәсихәттән дә күп ғибрәт алыр һәм ахмаҡҡа ни ҡәҙәр (күпме) оло вәғәз китабы уҡыһаң да, файҙа алмаҫ; *күңел майы иреү* (101) «күңел йомшарыу», *ғүмереңде йелгә*

*уткәрмәгел* (251) «ғүмеренде елгә уткәрмә»; *донйа артынан йүреү* (38) «донъя артынан ҡыуыу» һ. б.

«Рисалә-йи Ғәзизә» әҫәренең тексы дөйөм кешелек тормошоноң төрлө яғын һәм тәбиғәт күренештәрен бергә бәйләгән төрлө сағыштырыуҙар, метафоралар менән тулы: *әгәрчә ул ай вә ҡуйаш тик күркәм йүзлек улса* (127) «әгәр ҙә ул ай һәм ҡояш һымаҡ күркәм йөҙлө булһа икән»; *йәғни тегермән ташы кебе олуғ бәләләр астунда ҡалса* (101) «йәғни ул тирмән ташы кеүек оло бәләләр аҫтында ҡалһа»; *ҡаты жәйәдән уҡ чыҡдыҡы кебе ағар* (222) «ҡаты йәйәнән уҡ сыҡҡан (атылған) кеүек ағыр»; *мөхәббәт баҡчасы* (99) «мөхәббәт баҡсаһы»; *михнәт шарабы* (99) «михнәт шарабы»; *ризалыҡ сарайында урын табса* (101) «ризалыҡ һарайында урын тапһа» һ. б. Т. Ялсығолов, тәржемәсе һәм аңлатма биреүсе булараҡ, «Рисалә-йи Ғәзизә»лә Аллаяр теленең лексик һәм фразеологик үҙенсәлектәрен аса, йыш ҡына төрки һүҙҙәренең сығышын билдәләй: *төркилер* «төрки һүҙе», *иске үзбәк лөғәтидер* «иҫке үзбәк һүҙе», *бохара халҡының лөғәтидер* «бохара халҡы һүҙе», *сәмәрҡәнд халҡының лөғәтидер* «сәмәрҡәнд халҡы һүҙе», *ғосманийә халҡының лөғәтидер* «ғосман (төрөк) һүҙе», *төркмән лөғәтидер* «төрөкмән һүҙе» һ. б. Урындағы һүҙҙе килтерһә, *«безнең Болғар йортонда ... дирләр»,* тип яҙып китә.

Шулай итеп, Т. Ялсығоловтың «Рисалә-йи Ғәзизә» әҫәре XIX быуаттың тәүге яртыһындағы башҡорт әҙәби теленең тарихы өсөн ҡиммәтле ҡомартҡы булып тора. Унда китап теленә хас һүҙҙәр һәм грамматик формалар менән бер рәттән һөйләү теле менән фольклор теле элементтары ла күпмелер дәрәжәлә кәүҙәләнеш таба.

Традицион төрки яҙма әҙәби теле менән йәнле һөйләү теле араһында үҙ-ара йоғонто яһашыу процесы XIX быуаттың тәүге яртыһында суфыйсылыҡ поэзияһында ла күҙәтелә.

Төрки яҙма әҙәби теле традицияһы классик Көнсығыш әҙәбиәте менән яҡын таныш булған суфый шағир Әбелмәних Ҡарғалы әҫәрҙәрендә асыҡ кәүҙәләнә. 1883 йылда М. В. Лоссиевский уның тураһында былай тип яҙҙы: «Һуңғы осор яҙыусылары араһында уҡымышлы мулла сифатында Бохара вәкиле менән Константинополгә барған, унан Египет аша Мәккә, Мәҙинәгә киткән Әбелмәних танылыҡ ҡаҙанды»[11]. «Тәрджемән хаджи Әбелмәних әлбистәви әс-Сәғиди» китабы (51 биттә) 1845 йыл Ҡазанда, шағир үлгәндән һуң, донъя күрҙе. Ул «Тәфсире кәбир» («Ҡөрьәнгә аңлатма»), «Мишкател әнвар» («Нур сығанағы») тигән ғәрәп китаптарынан төрки теленә тәржемә ителгән бер нисә хикәйәне, риүәйәттәрҙе һәм шағирҙың үҙенең оригиналь шиғырҙарын эсенә ала. Шиғри тәржемәләрҙең һәм Әбелмәних Ҡарғалының үҙ шиғырҙарының теле традицион грамматик формалар, ғәрәп, фарсы һүҙҙәре, төрки яҙма әҙәби теленең стиль саралары менән тулы. Был авторҙың уҡымышлы, Көнсығыш поэзияһы менән яҡын та-

---

[11] Лоссиевский М. В. Былое Башкирии и башкир по легендам, преданиям и хроникам // Справочная книга Уфимской губернии. Уфа, 1983. 378 се бит.

ныш булыуын күрһәтә. Миҫал итеп уның «Шикәйәт» исемле шиғырынан өҙөк килтерергә мөмкин:

Джиһанның джаһы, малы нәфсә гайәт дә хәсәндер бу,
Вәли мәғни джәһәннәм сәвиға ҡа' ид рәсәндер бу.
Үзене дохтәре душизә кебе күстәрүб донйа,
Фәрифтә әйләйән чуҡларны мәккәр пирә зәндер бу... [12]

Башҡортса тәржемәһен бирәбеҙ:

«Йыһанда дәрәжә, мал-нәфсе өсөн ғәйәт күркәм ул,
Ләкин, асылда, йәһәннәмгә алып барған бығауҙыр ул.
Үҙен матур йәш ҡыҙ кеүек күрһәтеп донъя,
Күптәрҙе алдаған мәкерле бер ҡарсыҡ ул...»

Шиғырҙа фарсы һәм ғәрәп өлгөләренә эйәреү ныҡ һиҙелә. Был бигерәк тә лексик берәмектәрҙе ҡулланыуҙа күренә: унда 50-нән артыҡ ғәрәп-фарсы, 20-гә яҡын төрки һүҙе файҙаланылған. Төрки һүҙҙәренең күбеһе — китап һүҙҙәре, мәҫәлән: *алына* «алдынан», *иргез* «әйләндер», *күстәр* «күрһәт», *вир* «бир», *сән* «һин», *бең* «мең». Морфологик күрһәткестәргә килгәндә, улар, нигеҙҙә, төрки сығанаҡлы. Бында ғәрәп-фарсы йоғонтоһо әҙ сағыла. Традицион характерҙағы *-а//-ә, -йа//-йә* төбәү килеш, *-дын//-дин* сығанаҡ килеш, *-йан//-йән* сифат ҡылым аффикстары менән бер рәттән шиғырҙа һөйләү теленә хас морфологик элементтар, мәҫәлән, *-ның//-нең* эйәлек килеш, *-ға//-гә* төбәү килеш, *-дан//-дән* сығанаҡ килеш ялғауҙары күп файҙаланылған. Әҫәрҙең синтаксисында һөйләмдәр теҙмә теркәүестәр һәм *-уб//-үб* аффикслы хәл ҡылым менән бирелгән хәбәрҙәр аша ойоша. Яҙма традиция йоғонтоһо бигерәк тә һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнештәрендә асыҡ сағыла. Унда, мәҫәлән, фарсы изафеты киң ҡулланыла: *дохтаре душизә* «йәш һылыу ҡыҙ»; *робғе мәскүн* «торған ҡоро ер»; *мәккар пирә зән* «мәкерле ҡарсыҡ»; *ғорусе нәү* «һөйкөмлө кәләш (еткән ҡыҙ)» һ. б. Фарсы изафетынан тыш, шиғырҙа беренсе компоненты *-ның//-нең,* икенсеһе 3-сө зат эйәлек аффиксы менән килгән төрки һүҙбәйләнеше йыш осрай: *джиһанның джаһы, малы* «йыһандың дәрәжәһе, малы (байлығы)»; *ғалимләрнең ғилмен* «ғалимдарҙың ғилемен (белемен)»; *сөрүренең беренә* «шатлығының береһенә». Бындай типтағы һүҙбәйләнештәр ҡатмарлы формала ла килергә мөмкин: *буның тәзвиринең бере* «уның алдашыуының береһе».

Әбелмәних Ҡарғалы, нигеҙҙә, иҫке китап теленә хас һүрәтләү һәм тасуирлау сараларын ҡуллана. Шиғырҙа тормош *«дохтаре душизә»* (йәш һылыу ҡыҙ) булып күренгән һәм күптәрҙе алдаған *«мәккар пирә зән»* (мәкерле ҡарсыҡ) образында бирелә. Бында шағир фарсы шиғыры алымдарын файҙаланған.

Төрки теле традицияһы Ә. Ҡарғалының донъяуи әҫәрҙәрендә лә ныҡлы сағылыш таба. Уның шиғри юлъяҙмаларында («Сәйәхәт намә»), матур тәбиғәт, мөхәббәт тураһындағы шиғырҙарында («Сахрада», «Мөхәммәс»), бер аҙ халыҡ һөйләү теле элементта-

---

[12] Фәхретдинов Р. Сәғид. Казан, 1897. 9-сы бит (ғәрәп яҙыуында).

ры осраһа ла, башлыса, китап теле саралары өҫтөнлөк ала. Иллюстрация рәүешендә «Сахрада» шиғырының башын килтерәбеҙ («Өммөкамал» йыйынтығынан, Ҡазан, 1884):

Ошбу күн вармыш идем сәйран үчүн сахра тараф,
Күб гүзәл улмыш чәмәнләр, лаләзар улмыш шәрәф.
Бер тарафда күке, күк-күк дәйүбән, налан идәр,
Әһле дәрдең һушыне ғарәт идәр, талан идәр.
Суфи турғайлар дәмадәм күкләрә джәүлан идәр,
Бүдәнә йердә торыб, үрдәк суда тайран идәр.
Торналар тормаз, очар, ҡазлар ҡәрар итмәз, ҡачар,
Былбыл диваналар гөлләр үчүн йәшен сачар.

«Бөгөн барғайным ял итер өсөн сәхрә тарафына,
Бик гүзәлләнгән туғайҙар, матур сәскәгә күмелгән.
Бер тарафта кәкүк, күк-күк тип, һағышлы ҡысҡыра,
Эсе бошҡандың һушын ала, аҡылын ала.
Суфый турғайҙар туҡтауһыҙ күктәргә талпына,
Бүҙәнә ерҙә йөрөй, өйрәк кинәнеп һыуҙа йөҙә.
Торна тормаҫ, осор, ҡаҙҙар ҡалмаҫ, ҡасыр,
Былбыл диуаналар гөлдәр өсөн йәшен түгер».

Әҙәби телдә традиционлыҡ менән новаторлыҡтың йәнәшә килеүе лирик шағир Шәмсетдин Зәки әҫәрҙәренең телендә асыҡ күренә башлай. «Шәмсетдин Зәкиҙең һәр шиғыры, — тип яҙҙы Ә. И. Харисов, — үҙендә философик фекер тота. Уның теле бай һәм төрлө формала. Ш. Зәки шиғырҙарының яҡшы яғы — поэтик образлылыҡта» [13].

Шағирҙың әҫәрҙәре үҙе иҫән сағында баҫтырылмаған. Тик 1907 йылда Р. Фәхретдинов үҙенең «Аҫар»ында (2 т., 13-сө китап, 1907) Ш. Зәкиҙең биш шиғырын ғына баҫтыра алды.

Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивында Ш. Зәкиҙең 40-ҡа яҡын поэмаһын, ғәзәлен индергән һәм биографияһына ҡараған мәғлүмәттәр теркәлгән 177 битле ҡулъяҙма йыйынтығы һаҡлана (фонд 3, оп. 63, ед. хр. 47). Мәжмүғә 1915 йылда Ш. Зәкиҙең ауылдашы Зиннәтулла Мөхәммәтрәхими тарафынан төҙөлгән. Ошо уҡ йыйынтыҡҡа Ш. Зәки әҫәрҙәренә ҡушымта рәүешендә башҡорт шағиры һәм сәсәне Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡиҙың «Ваҡты сәхәр» («Сәхәр ваҡыты») тигән шиғыры бирелгән (135—177-се биттәр).

Бынан тыш, Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Ҡулъяҙмалар фондында Ш. Зәкиҙең шиғырҙары ингән биш ҡулъяҙма һаҡлана (№№ 38-а34; 17—а34; 16—а60; 16—а24; 45—а8).

Ш. Зәки әҫәрҙәрендә XIX быуаттың тәүге яртыһында Урал — Волга буйы төрки әҙәби теленә хас күренештәр сағыла. Традицион яҙма тел саралары менән бер рәттән Ш. Зәки поэзияһында

[13] Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа. Уфа, 1973. 260-сы бит.

һөйләү теле, шулай уҡ фольклор элементтары файҙаланылған. Әммә улар бында механик рәүештә ҡушылмай, ә текста органик бәйләнештә килә. Мәҫәлән, «Булғай — булмағай» шиғырында ҡарсыға, ат образдарын һүрәтләгән фольклоризмдар *жан илә иман* «йән һәм иман», *йар* «йәр», *ширин кәләм* «матур һүҙ», «шағир» кеүек китап һүҙҙәре менән гармоник рәүештә бәйләнгән.

Эстәсәм ғаләмдә сәндик йары булғай, булмағай,
Булса булғай сән кебе ғәмхарә булғай, булмағай.
Бу жиһанның шәһәренең базарының сәүдасе күб,
Ҡыл бу сәүдане, йәнә базары булғай, булмағай.
Ат сәнең астыңдадыр, йөргел, бу йернең хәдден ал,
Нагәһан ул ат сәнең астында булғай, булмағай.
Ҡарчыға ҡулыңдадыр, аула бу күңле шәһәрене,
Нагәһан ул ҡарчыға өндәүгә килгәй, килмәгәй.
Жан илә иман икәүлән бер өйдә бал эчәр,
Нагәһан ул икесе бер өйдә булғай, булмағай...[14]

Был шиғырҙа дүрт һүҙҙән торған тулы төрки изафет ҡулланылған: жиһанның шәһәренең базарының сәүдасе. Бында традицион килеш формалары урынына тик халыҡ һөйләү теле формаларын ҡулланыу бар. Китап теленә хас морфологик сараларҙан шиғырҙа билдәһеҙ киләсәк заман ҡылымдың *-ғай//-гәй* аффиксы йыш килә. «Икәүлән (икәүләп)» йыйнау һаны шулай уҡ китап теле формаһында бирелгән. Берлектәге һәм күплектәге 2-се зат боййороҡ һөйкәлеше формаһы ике төрлө: традиция буйынса *(йөргел, шәфҡәт ҡылың)* һәм урындағы халыҡ һөйләү телендәгесә *(аула, сөйлә)* бирелә.

Ш. Зәкиҙең бер генә рифма (монорифма) менән берләшкән лирик шиғыр — ғәзәлдәре 4—18 бәйеттән (ике юллы шиғыр берәмегенән) тора. Шағир һәр юл аҙағында рәдифте (һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡабатлау ысулын) киң ҡуллана. Рәдиф булып күберәген ҡылымдың *(булғай — булмағай, өгрәнмәк кәрәк, булмаҡ ҡалыр)*, ҡайһы бер ваҡыт исемдең төрлө формалары йөрөй.

Ш. Зәки әҫәрҙәренең теле тапҡыр халыҡ һүҙҙәре һәм образлы әйтемдәргә бай. Уның шиғырҙарында, мәҫәлән, түбәндәге әйтемдәр һәм мәҡәлдәр осрай:

Ирләр очар һиммәт берлән,
Ҡошлар очар ҡанат берлән.

«Ирҙәр осор (күтәрелер) һиммәт менән,
Ҡоштар осор ҡанат менән».

Байның күзе малдан туймаз,
Ачның күзе ашдан туймаз.

---

[14] Фәхретдинов Р. Аҫар. Ырымбур, 1907. 2-се т. 13-сө китап. 416-сы бит. Тағы ла ҡара: Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 63, ед. хр. 47. 99—100-сө биттәр.

«Байҙың күҙе малдан туймаҫ,
Астың күҙе аштан туймаҫ».

Китап теле традицияларынан яйлап арыныу һәм урындағы халыҡ һөйләү теленә йүнәлеш алыу Һибәтулла Салихов әҫәрҙәренең телендә күренә.

Һибәтулла Салиховтың «Мәжмәғ әл-адаб» («Әҙәп ҡағиҙәләре йыйынтығы»), «Дөрр әл-кәләм» («Ынйы һүҙҙәр») исемле шиғри әҫәрҙәре Ҡазанда үҙе иҫән саҡта, 1856 йылда баҫылды. «Мәжмәғ әл-адаб» китабы, ун тапҡыр баҫылып, бигерәк тә популярлыҡ ҡаҙанды. Бер нисә лирик шиғыры, шул иҫәптән «Тәндә жаным» («Тәндә йәнем»), Р. Фәхретдиновтың «Аҫар»ында донъя күрҙе [15]. Уның күп әҫәрҙәре ҡулъяҙмала таралды: Тарих тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында ғына ла «Мәжмәғ әл-адаб»тың 6 тулы, 8 тулы булмаған, «Төхфәт әл-әүлад»тың («Балаларға бүләк») — 6, «Тәндә жаным»дың — 23, «Ничә жаһил»дың («Нисә яһил») — 6, «Әй, дариға, нидәйем»дең («Башымда ҡайғы, нимә эшләйем») 14 ҡулъяҙма күсермәһе һәм элек билдәле булмаған «Нәсихәт» шиғыры тупланған [16].

Әҫәрҙәренең телен Һ. Салихов үҙе «төрки теле» тип атай:

Гәрчә тәжүид күб ирүр фарсы, ғәрәб,
Фәһем идә алмай улунурды мозтараб.
Күңел дөшәр ирде бәнем дәмбәдәм,
Төрки телендә рисалә ҫәбәт идәм [17].

«Гәрсә тәжүид [18] күп булһа ла, фарсы, ғәрәпсә,
Фәһем итә алмай ҡалыр инем аптыраштa.
Күңелем төшөр ине минең һәр ваҡыт,
Төрки телендә рисалә [19] яҙып ҡуям».

Һ. Салихов әҫәрҙәре ысынлап та Урал — Волга регионына ҡараған төрки телендә яҙылған һәм теленең үҙенсәлеге менән Ҡарғалы әҫәрҙәренән ҡырҡа айырыла. Салихов әҫәрҙәренең теле башҡорт һәм татар һөйләү телдәре элементтарына байыраҡ. Уның әҫәрҙәрендә *д* графемаһы һүҙҙең башында һәм уртаһында регуляр рәүештә ҡулланыла: *дыңлағыл* «тыңла»; *күзәдәләр* «күҙәтәләр» һ. б. Суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең теле, ғөмүмән, һаңғырау тар-

---

[15] Фәхретдинов Р. Аҫар. Ырымбур. 1908. 2-се т. 14-се китап. 444—449-сы биттәр.

[16] Һ. Салиховтың ҡулъяҙма әҫәрҙәре тураһында күберәк белергә мөмкин: Шәрипова З. Һибәтулла Салихов әҫәрҙәренең ҡулъяҙма текстары // Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре. Өфө, 1979. 89—105-се биттәр; шул уҡ: Краткое описание источников по истории башкирской литературы // Источниковедение башкирской филологии. Уфа, 1984. 40—41-се биттәр.

[17] Салихов Һ. Төхфәт әл-әүлад: Ҡулъяҙма // Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Ҡулъяҙмалар фонды (артабан ИҠФ). № 1-а59. 11-се бит.

[18] Ҡөрьәндең орфоэпик уҡыу ҡағиҙәһе.

[19] Хикәйәт, мәҡәлә; трактат, брошюра.

тынҡыларҙың эҙмә-эҙ рәүештә яңғырау тартынҡыға күсеүе менән билдәләнә. Был фонологик күренеш башҡорт теленең диалекттарына ла хас [20].

Институттың ҡулъяҙмалар фондында һаҡланған «Төхфәт әләүлад» текстарында *ч* ~ *с* сиратлашыуы осрай. Салихов әҫәре текстарында *ч* урынына *с* ҡулланыу ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, сөнки был күренеш фәҡәт башҡорт әҙәби теленә ҡайтып ҡалырға мөмкин. Мәҫәлән, *тел очының уң йаны* (№ 1-а59, 12б бит) ~ *тел осоноң уң йаны* (№ 30-а20, 62а); *бер мәхрәж очы* (№ 1-а59, 12 б) ~ *бер мәхрәж осо* (№ 31-а20, 62б) һ. б.

*Н* ~ *й* сиратлашҡан (ҡанда ~ ҡайда); һәм *т* алдынан *л* төшөп ҡалған (*ултуруб* ~ *утуруб*) осраҡтар ҙа бар.

Фонетика өлкәһендә китап традицияһы *бул-* ҡылымының башындағы *б*-ның юҡлығында һәм *бар-* ҡылымында *б*-ның *в*-ға күсеүендә күренә. Морфология өлкәһендә түбәндәгеләрҙе күрһәтергә мөмкин:

1) исем, алмаштарҙың яңы һәм иҫке килеш формаларын параллель рәүештә ҡулланыу: *-а*//*-ә* һәм *-ға* /*-гә* аффикслы төбәүйүнәлеш килеше, *-ы*//*-и* һәм *-ны*//*-не* аффикслы төшөм килеш, *-дын*//*-дин* һәм *-дан*//*-дән* аффикслы сығанаҡ килеш формалары;

2) *-(й)уб*//*-(й)үб* һәм *-уб*//*-үб* аффикстары ярҙамында яһалған хәл ҡылымдарҙың булыуы: *үзе терек әйләйүб* «үҙе терелеп»; *күрүб аны, көтөб тордо йерендә* «уны (йыланды — И. Ғ.) күреп, көтөп торҙо (баҫҡан) ерендә». Һирәкләп булһа ла, боронғо *-йа*//*-йә* хәл ҡылым ялғауы осрай: *үзене саҡлайа, камил буладур* «үҙен һаҡлап, камиллаша» (миҫалдар «Мәжмәғ әл-адаб»тан килтерелә);

3) бойороҡ һөйкәлешенең *-уң*//*-үң* традицион күплек (*көрүң* «күрегеҙ») һәм *-ғыл*//*-гел* 2-се зат берлек (*белгел* «бел», *күргел* «күр») формаларының булыуы. Ҡайһы ваҡыт улар махсус ялғау ҡабул итмәй (*бел* «бел», *саҡла* «һаҡла»);

4) традицион *-ғай*//*-гәй* формаһының киң ҡулланылыуы (*табғай* «таба», *уҡуғай* «уҡый»);

5) билдәһеҙ киләсәк замандың *-маз*//*-мәз* традицион юҡлыҡ формаһы йыш осрай (*өндәмәз* «өндәмәҫ», *белмәз* «белмәҫ»);

6) *-маҡ*//*-мәк* менән килгән ҡылымдан яһалған исемдәр киң ҡулланылышта (*тотмаҡ* «тотоу, тотмаҡ», *белмәк* «белеү, белмәк»);

7) үткән заман *-ды*//*-де* ҡылым формаһы + күплек аффиксы йыш ҡулланыла (*диделәр* «тинеләр»);

8) *-дур*//*-дүр* аффиксының булыуы (*димешдүр* «тине», *йуҡдур* «юҡ»);

9) традицион күрһәтеү алмашының ҡулланылыуы (*ошбу* «ошо», *ошал* «шул») һ. б.

---

[20] Ҡарағыҙ: Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка в сравнительно-историческом освещении. М., 1976. 18, 36, 96, 223, 260-сы биттәр. Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М., 1979. 20, 41, 108, 186, 187-се биттәр.

Синтаксис өлкәһендә хәбәре шарт һөйкәлешенең *-са//-сә* формаһы менән килгән шарт эйәрсән һөйләм киң ҡулланыла. Миҫалдарҙы «Мәжмәғ әл-адаб»тан килтерәбеҙ:

Улурса бер мөрид камил әдәблү,
Мөхәббәт улур аңа кем шу деклү.
«Булһа бер уҡыусы камил әҙәпле,
Мөхәббәт булыр уға ла шул тикле».
Буңа йетсә, йетәр һәр маҡсада һәм.
«Быға етһә, етер һәр маҡсатына».

Хәбәре хәл ҡылымдың *-уб//-үб* аффикслы формаһынан килгән эйәртеүле конструкциялар Һ. Салихов әҫәрҙәрендә бөтә ерҙә лә осрай:

Йөрдөң донйада, үлмәстек булуб,
Ул ҡараңғу гүргә кермәстек булуб.
Кичә-көндөз уйын илә саташыб,
Йөрдөң уғланлар илә алдашыб.
(«Дөрр әл-кәләм»дән)

«Йөрөнөң донъяла, үлмәҫтәй булып,
Ул ҡараңғы ергә кермәҫтәй булып.
Төн, көндөҙөн уйын менән һаташып,
Йөрөнөң йәштәр менән алдашып».

Текстарҙа эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә китап теленә хас булған *ки, ким, гәр, әгәрчә* теркәүестәре менән бәйләнгән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр йыш осрай.

Һ. Салихов әҫәрҙәренең лексик составы ла бик сыбар. Уның шиғырҙарында ғәрәп-фарсы һүҙҙәре, терминдары ла әҙ түгел. Мәҫәлән, ғәрәп теленең фонетикаһын башлап өйрәнеүселәр өсөн яҙылған «Төхфәт әл-әүлад» поэтик трактатында ғәрәп-фарсы грамматик терминдары бик күп бирелгән: *мәхрәж* «артикуляция урыны», *оусафи* «аныҡлаусылар», *моусоф* «аныҡланыусы», *тәфзил* «сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе», *мәфтүх* «фәтхә ҡуйылған хәреф», *модғәм* «ассимиляцияға бирелгән (өн), берләшкән, ҡушылған (*әл* артикленән һуң килгән ҡояш хәреф тураһында)», *ашбағ* «өндәрҙең тулы әйтелеше», *мәнҡут* «нөктәле хәреф, нөктә ҡуйылған хәреф», *тәбаҡ* «ярашыу» һәм башҡалар. Һ. Салиховтың был хеҙмәтен ғилми әҙәбиәт рәтенә индерергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта Һ. Салиховтың поэтик әҫәрҙәрендә ғәрәп-фарсы һүҙҙәре һәм поэтик алымдары ныҡ сикләнгән. Улар, мәҫәлән, Ә. Ҡарғалылағы һымаҡ түгел. Әгәр Ә. Ҡарғалы тормошто фарсы шиғыр алымдары (*мәккар пирә зән* «мәкерле ҡарсыҡ» образында) менән һүрәтләһә, Һ. Салихов инде төрки теле сараларын (*донйа бер ҡары хатун*) ҡуллана:

Мәҫәлән, донйа бер ҡары хатун дорор,
Сачы дүклүб, дешләре дөшмөш дорор.

Хынадур диб, алына ҡанлар йаға,
Ҡара кумур күзенә сөрмә чигә.
Аҡартур аҡ кирпич илә йөзөне,
Бу бизәкләр илә бизәр үзүне... [21]

«Мәҫәлән, донъя бер ҡарт ҡатын тороп,
Сәсе ҡойолоп, тештәре төшөп тороп.
Ҡыналыр тип битенә ҡандар яға,
Ҡара күмер күҙенә һөрмә сигә.
Ағарта аҡ кирбес менән йөҙөн,
Шул биҙәктәр менән биҙәр үҙен...»

Һ. Салихов китап һүҙҙәренә һәм халыҡ һөйләү теленә хас сағыштырыуҙарҙы оҫта файҙаланған. Ҡитап тибындағы сағыштырыуҙар:

Ғаса кебе дәхи йалғузға йулдаш,
Булуб йулыда виргел жан илә баш.
Ғаса кебе айаҡсызға айаҡ бул,
Олуғ йулдын адашҡанға майаҡ бул [22].

«Таяҡ кеүек, яңғыҙға юлдаш бул,
Юлында булып, күңелен күтәр, кәңәш бир.
Таяҡ кеүек, аяҡһыҙға аяҡ бул,
Оло юлдан аҙашҡанға маяҡ бул».

Халыҡ һөйләү теленә хас сағыштырыуҙар:

Замана хакиме охшар йыланға,
Ғәдәүәт ғизләмешләрдер нәһандә.
Йылан тик йалтырар тышдан күрәндә,
Һәләкең ҡәсд идәр форсат ирәндә [23].

«Замана хакимы оҡшар йыланға,
Дошманлыҡ эҙләрҙәр аҫтан ғына.
Йылан тик ялтырар тыштан күргәндә,
Үлтереүҙе маҡсат итер, форсат килгәндә».

Һ. Салиховтың тел байлығы уның «Төхфәт әл-әүлад» тигән поэтик трактатында ла эҙмә-эҙ күренә. Бында ул уҡыусыға шундай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә: *кил биру, әй әһле талиб* «кил бында, әй, уҡыусы кеше»; *әй жан* «әй, йән»; *әй әхи* «әй, туған»; *әй йекет* «әй, егет»; *әй йар* «әй, дуҫ, иптәш»; *әй кеше; әй мөғтәбәр* «әй, хөрмәтле»; *әй дәлнәваз* «әй, һөйкөмлө, яғымлы»; *әй аға* (әй,

[21] Салихов Һ. Дөрр әл-кәләм: Ҡулъяҙма // ИҠФ № 1-а59, 21б—22а биттәр.

[22] Салихов Һ. Мәжмәғ әл-адаб // Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фонды. В2613. 17а бит.

[23] Шунда уҡ, 12а бит.

ағай»; *әй никуху* «әй, шәфҡәтле, рәхимле, эскерһеҙ»; *әй хубру* «әй, матур, һылыу»; *әй ғөләм* «әй, үҫмер»; *әй әһле нур* «әй, нурлы кеше»; *әй сәлим* «әй, сәләмәт кеше» һ. б.

Шулай итеп, XIX быуаттың тәүге яртыһындағы суфыйсылыҡ әҙәбиәтен тел яғынан сағыштырып өйрәнеү суфыйсылыҡ поэзияһы теленең структураһы төрлө-төрлө булғанын күрһәтә. Ҡайһы бер әҫәрҙәр традицион тел сараларына артыҡ бай, икенселәре күберәк халыҡсан тел элементтарын ҡуллана. Суфыйсылыҡ поэзияһы телендәге төрлөлөк әҫәрҙең жанрына йәки стиленә ҡарап ҡына түгел, бәлки шағирҙың поэзияһына һәм уҡымышлылығына ҡарап та сағыла. Мәҫәлән, башҡорт сәсәне һәм шағиры Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡиҙың шиғырҙары ниндәйҙер кимәлдә башҡорт халыҡ поэзияһындағы ҡобайыр формаһына тарта. Ул ҡобайырға хас еге ижекле шиғыр юлын йыш ҡуллана:

Ҡеме ҡылды ил шәрә,
Ғайәт озон дөшләре.
Онодмош ул мәхшәре,
Ваҡты сәхәр эчендә [24].

«Ҡем-кем илде бөлдөрҙө,
Шуның оҙон төштәре.
Онотто ул мәхшәрҙе (язаны),
Сәхәр ваҡыты килгәндә».

йәки:

Ҡорор шикәр ҡамышы,
Бал ҡортоноң табышы.
Ҡитәр заманның хушы,
Ваҡты рузгар эчендә (167-се бит).

Ирек ҡуйсаң, тел — арслан
Тыймасаң, ул — йылан.
Һәләк идер ул сәни,
Вакты рузгар эчендә.

«Ирек ҡуйһаң, тел — арыҫлан,
Тыймаһаң, ул — йылан.
Һәләк итер ул һине,
Уңай ваҡыт килгәндә».

Ҡыпсаҡиҙың теле ҡайһы ваҡыт әсе, ялҡынлы яңғырай. Ирония, көлөү тоны бигерәк тә түбәндәге миҫалда ныҡ күренә:

Ҡөндөз кизден урамы,
Сүзләнең сүз харамы.

---

[24] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 63, ед. хр. 47. 143-сө бит. Артабан алынған миҫалдарҙың бите текста күрһәтелә.

Ҡәй йоҡларсән хуррамы,
Ваҡты сәхәр эчендә (151-се бит).

«Көндөҙ гиҙҙең урамды,
Һөйләнең һүҙ харамын.
Күпме йоҡлариың иҙерәп,
Сәхәр ваҡыты килгәндә».

Ҡыпсаҡи теленең үҙенсәлеге халыҡ һөйләү теле менән бәйләнгән айырым лексик ҡатлам һәм морфологик күрһәткестәр менән генә сикләнмәй. Унда поэтик һәм стилистик алымдар ҙа шаҡтай ҙур урын ала. Ҡыпсаҡиҙың ятаҡан алымдары иҫәбенә башҡорт ҡобайырҙарында киң таралған анафора һәм эпифора элементтарын индерергә мөмкин. Шағирҙың һәр строфаһы тиерлек *кеме ҡылды* (кем ҡылды, кем эшләне) һүҙҙәре менән башланып, *ваҡты сәхәр эчендә* (сәхәр ваҡыты килгәндә), *ваҡты рузгар эчендә* (уңай ваҡыт килгәндә) тигән юлдар менән тамамлана. Быңдай ҡабатланыуҙар бер һүҙһеҙ шиғырҙың ассоциатив функцияһын көсәйтә.

Ғәли Соҡорой (Мөхәммәт Ғәли ибн Ғәбд әс-Салих уғлы Кейеков) суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең һуңғы вәкилдәренән һанала. Ул XIX быуаттың һуңғы яртыһында ла ижад иткән. Уның әҙәби мираҫы һан яғынан бик ҙур [25].

«Шул уҡ ваҡытта, — ти Ә. И. Харисов, — был факт Соҡоройҙо башҡа шағирҙарҙың береһенән дә өҫтөн итеп тә ҡуймай. Ул, асылда, шағир булыуҙан бигерәк назымсы» [26]. Уның әҫәрҙәренең күпселегендә традицион суфыйсылыҡ идеялары — дини әхләҡкә өгөтләү, исламды һәм уның эшмәкәрҙәрен маҡтау, суфыйсылыҡ аскетизмы — үткәрелә.

Ғ. Соҡоройҙоң поэтик стиле үҙенсәлекле. Әҫәрҙәренең күпселеге робағи формаһына эйәреп яҙылған һәм улар, беренсе нәүбәттә, йөкмәткеһе менән түгел, ә төҙөк формаһы, махсус һүҙҙәрҙе һайлап алыуы менән генә айырыла. Ғ. Соҡоройҙоң ятаҡан поэтик алымы булып тәүших (акростих) тора. Уның күп кенә әҫәрҙәрендә шиғыр юлдарының баш хәрефтәренән авторҙың псевдонимын *(мулла Мөхәммәдғәли Чоҡрый)* йәки шиғыр бағышланған кешенең исемен төҙөргә мөмкин.

Соҡоройҙоң ҡоро рифмаға ҡоролған күпселек назымдары ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән ныҡ сыбарланған төрки телендә яҙылған. Уның ғәрәп һүҙҙәре менән сиктән тыш мауығыуын үҙ

---

[25] Ғ. Соҡорой әҫәрҙәренең ҡулъяҙма төп нөсхәләре һәм күсермәләре Башҡортостан милли китапханаһында (туғыҙ ҡалын дәфтәрҙән торған йыйынтыҡ), Ҡазан университетының ғилми китапханаһында (Хаж намә, шифры: Т 627), Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фондында (шифрҙары: А1118, В2662, В3404), ИҠФ-ла (шифры: № 24—а34) һаҡлана. Баҫылған китаптары араһынан түбәндәгеләрҙе күрһәтергә мөмкин: Тәжүид. Ҡазан, 1860; Дөрре Ғәли. СПб., 1873; Шәмғ әз-зия. Ҡазан, 1883; Замме нәзыйр. Ҡазан, 1888; Мәдхе Ҡазан. Ҡазан, 1889 һ. б.

[26] Харисов Ә. И. Күрһәтелгән хеҙмәт, башҡортса баҫмаһы. 315-се бит.

ваҡытында Ҡәюм Насыри ҙа тәнҡитләгән һәм үҙенең саф төрки теле яғында булыуын белдергән [27].

Төрки яҙма теле үҙенсәлектәренән Ғ. Соҡорой әҫәрҙәрендә *ул-* «бул», *әйлә- «эшлә»* ярҙамсы ҡылымдары, *-ғыл//-гел* аффикслы бойороҡ формаһы, *-дын//-дин* сығанаҡ килеш ялғауы, *-маҡ// -мәк* аффикслы инфинитив формаһы, *ки, гәрсә, вә ләкин* теркәүестәре һ. б. йыш ҡулланыла. Т. Ялсығоловҡа арнап яҙылған шиғырынан үрнәк килтерәбеҙ:

Ғәзизә сахибы мулла Таж әд-дин
Өйәзгә ат чыҡарды жаһд-ү жәддин.
Аның тәдрис заманында өйөндә
Чырағы сүнмәгән дирләр төнөн дә.
Көнө-төн һәр ҡайу фәндин китабы,
Төзәтүб әйләмешдүр мөстәтәби.
Ничә бабда рисалә әйләмешдүр?
Ничә мөшкилне тәсһил әйләмешдүр?.. [28]

«Ғәзизә» авторы мулла Тажетдин
Өйәҙгә исемен сығарҙы тырышлығы менән.
Уның уҡыған заманында өйөндә
Ут һүнмәгән, тиҙәр, төнөн дә.
Көнө-төнө һәр ҡайһы фәндән китапты
Төҙәтеп эшләгән ифрат яҡшы.
Нисәмә бүлектә рисалә яҙған ул?
Күпме ҡыйынлыҡты еңеп сыҡҡан ул?»

Ғ. Соҡоройҙоң поэтик әҫәрҙәре араһында йөкмәткеһе һәм теле яғынан «Мәдхе Ҡазан» («Ҡазанды маҡтау») шиғри китабы айырылып тора. Унда башҡорт һәм татар халыҡтарының һөйләү телдәренә хас элементтар йыш ҡулланыла:

Иң әүүәл йортлары бик саф,
Икенче, ирләре бик саф,
Өченче, жырлары бик саф...

«Иң әүәл, йорттары бик саф (таҙа),
Икенсе, ирҙәре бик саф (күңелле),
Өсөнсө, йырҙары бик саф (моңло)...»

Һүрәтләүенең реаллеге һәм теленең аңлайышлылығы яғынан шағирҙың «Манзумате Ғәлийә» («Ғәли назымдары») тигән иң ҙур күләмле ҡулъяҙма дәфтәренә тупланған шиғырҙары айырылып тора. Тәбиғәтте һүрәтләгәндә, мәҫәлән, Соҡорой татар һәм башҡорт һүҙҙәрен күп индерә. «Фөсүле әрбәғә» («Йылдың дүрт миҙгеле») шиғырынан миҫал:

---

[27] Шура, 1913. № 5, 141—142-се бит.

[28] Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фонды. Ҡулъяҙма. Шифры: В2673. 12б бит.

Сыуытды ҡыш көнөн, ҡарлар йағырды,
Аҡызды су итеб йаз айларында.
Тамам донйа йөзө аҡ ҡар булубән,
Тотар боз су йөзөн һәр жайларында [29].

«Һыуытты ҡыш көнөн, ҡарҙар яуҙырҙы,
Ағыҙҙы һыу итеп яҙ айҙарында.
Донъя йөҙө тамам ап-аҡ ҡар булғас,
Боҙло һыуҙы тотто һәр тарафында».

Башҡорт һәм татар халыҡ һөйләү телдәренең йоғонтоһо бигерәк тә уның «Хаж намә» тигән ҡулъяҙмаһында ныҡ күренә. Бында яҙыусы үҙенә тиклемге юлъяҙмаларға хас булған үтә ҡатмарлы ҡушма һөйләмдәр урынына урындағы халыҡ һөйләү теленә хас синтаксик күренештәрҙе һайлай. Мәçәлән: *...Бу арбаларны тартыб барғучы машинада булған хикмәтләрене вә ҡиммәтләрене сүләб бетәрлек дәгелдер. Вә ул йулны төзләргә дә ничә йөз мең тәңкәләр чыҡкандыр. Хатта йулда туғры килгән тағларны кисеб, арба берлә читкә ташыб, тағ урынларыны төз йер йасаб киткән йерләр бар, вә чоҡорларға, вә йылғаларға ҡиммәтле күперләр йасаб киткән йерләр бар. Хатта иделләр туғры килгән йердә йасалған күперләрнең хикмәтләрене вә ҡиммәтләрене, вә һиммәтләрене сүләб бөтәргә буласы дәгел...»* [30].

«Был арбаларҙы (һүҙ поезд хаҡында бара — И. Ғ.) тартып барыусы машинала булған хикмәттәрҙе һәм ҡиммәттәрҙе һөйләп бөтөрлөк түгел. Хатта юлда тура килгән тауҙарҙы киçеп, арба менән ситкә ташып, тау урындарҙы тигеҙләп киткән ерҙәр бар һәм соҡорҙарға, йылғаларға ҡиммәтле күперҙәр яһап киткән ерҙәр бар. Хатта йылғалар тура килгән ерҙә яһалған күперҙәрҙең хикмәттәрен, һәм ҡиммәттәрен, һәм һиммәттәрен һөйләп бөтөрөп булаһы түгел...»

Был өҙөктә китап теле элементтары *(-ғучы, -дин* аффикслы формалар, *вә* теркәүесе, *тағ, туғры, бәс* һ. б. һүҙҙәр) менән бер рәттән йәнле һөйләү теленә хас эмоциональ, модаль биҙәктәр өçтәгән ҡабатлауҙар, *да//дә* экспрессив һөйләү киçәксәләре, төрлө ҡылымдар, *-ған//-гән* аффикслы үткән заман сифат ҡылым, *кәрәк* модаль һүҙе менән килгән *-ырға//-ергә* аффикслы инфинитив формаһы актив ҡулланыла.

Ғ. Соҡоройҙоң тарихи-әҙәби әçәрҙәрендә лә (был турала һүҙ алда барасаҡ) һөйләү теленә хас лексик берәмектәр, грамматик формалар һәм синтаксик конструкциялар күп ҡулланыла.

Шулай итеп, XIX быуаттың тәүге яртыһындағы суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең теле, Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теленең бер тармағы булараҡ, яйлап башҡорт һәм татар һөйләү телдәре-

[29] Соҡорой Ғ. Манзумате Ғәлийә / Башҡортостан милли китапханаһы. Ҡулъяҙмалар. IX киçәк. Шифры: № 3940. 144-се бит.

[30] Соҡорой Ғ. Хаж намә. 1872 / Ҡазан университетының ғилми китапханаһы. Ҡулъяҙма. Шифры: Т627. 4-се бит.

neң йоғонтоһон кисерҙе. Әммә ул ваҡыттағы яҙма әҙәби тел йәнле һөйләү теленең һәм фольклорҙың йоғонтоһон кисереп кенә ҡалманы, бәлки уларҙың үҙҙәренә лә даими тәьҫир яһаны.

## *2. Әҙәбиәт һәм фольклор традицияларының үҙ-ара тәьҫир итешеүе*

Фольклор менән яҙма поэзияның үҙ-ара йоғонто яһашыуы — тарихи яҡтан бик ҡатмарлы, төрлө яҡлы һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы күренеш. «Йософ менән Зөләйха», «Таһир менән Зөһрә», «Буҙйегет» кеүек мөхәббәт, романтика поэмалары, мәҫәлән, башта Көнсығыш поэзияһы йоғонтоһонда тыуҙырыла һәм яҙма формала «ҡисса», «дастан» исемдәре менән тарала. Фольклорҙан әҙәбиәткә күсеп, бындай хикәйәттәр бер халыҡтың ғына түгел, ә уртаҡ яҙма әҙәби тел менән файҙаланыу арҡаһында региондағы бер нисә халыҡтың дөйөм ҡомартҡыһына әйләнә. Артабан улар, һәр милли ерлектә яҙма ҡомартҡы булып йәшәп, был халыҡтың ауыҙ-тел традицияһына яңынан йоғонто яһаны. Миҫалға «Буҙйегет» эпик поэмаһын алайыҡ. Революцияға тиклем ул күп төрки халыҡтарҙа таралған ине [31]. Был поэманың ҡулъяҙмалары хәҙер Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалында һаҡлана (шифрҙары: А 1547, В 342, В 346, В 2198, С 175). Улар араһында 1842 йылда Өфөлә яҙып алынған «Әл-ҡисса-йи Бус йегет» тип аталған ҡулъяҙма (А 1547, 3а бит) [32] ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Н. Т. Зарипов фекеренсә, был текст оригиналь шиғри әҫәр булып тора. Ул билдәле сюжетты проза менән яҙылған фарсы тексы һәм телдә һөйләнеп йөрөгән варианттар нигеҙендә яңынан эшкәртеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. «Әл-ҡисса-йи Бус йегет»тең авторы — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында йәшәгән Баһауи тигән кеше [33].

Поэманың теле үҙенсәлекле: унда Урал — Волга буйы төрки теле элементтары элек-электән ҡаҙаҡтар менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының тел үҙенсәлектәре

[31] Ҡарағыҙ: Бос жигит. В. В. Радловтың «Образцы народной литературы тюркских племен» китабында. III киҫәк. СПб., 1870; Ҡисса-йи Буз йикет. А. Уразаев-Ҡурмаши тексы / Ҡазан университеты типографияһы, 1874 (ғәрәп яҙыуында, революцияға тиклем 13 тапҡыр баҫылған); Бузуғлан. Әхмәтбәк менән Йософбәк тексы. Ҡазан, 1896, 1910; Ҡиссаи Буз жигет. Ноғай теленән ҡаҙаҡ теленә Аҡылбәк бине Сабала тәржемәһе. Ҡазан, 1911 һ. б.

[32] Был ҡулъяҙманың фотокопияһы Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивында һаҡлана (Ф. 4, оп. 15, ф. м. 8-се бит). Әҫәрҙең тексы Н. Т. Зарипов тарафынан транскрипцияланған: Әл-ҡисса Буҙйегет // Ағиҙел. 1979. № 2. 100—118-се биттәр; Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө, 1982. Өсөнсө китап. 201—256-сы биттәр. Был ҡисса хаҡында тағы ла ҡарағыҙ: Зарипов Н. Т. «Буҙйегет ҡиссаһы»ның Өфө варианты // Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре. Өфө, 1979. 106—118-се биттәр; шул уҡ: Уфимский вариант поэмы «Бузъегет» // Литературное наследие народов Урало-Поволжья и современность. Уфа, 1980. 29—36-сы биттәр.

[33] Зарипов Н. Т. Уфимский вариант поэмы «Бузъегет» // Күрһәтелгән йыйынтыҡ. 32-се бит.

менән органик рәүештә ҡушылған. Шуға күрә поэманың телендә башҡорт (*баҫыб, киҫеб башын, ҡул ҡаушырыб, тавыб, килдүң ҡашыма, ҡарай, устаб алыб* һ. б.) һәм ҡаҙаҡ (*айнаҡ* «быяла», *кик* «үс алыу», *ҡустамаҡ* «яҡлау», *бер дайын* «бер юлы», *өтрөк* «алдыҡ, ялған», *исел* «йәл», *сасыу* «юғалып ҡалыу», *сайлау* «тәртип урынлаштырыу» һ. б.) һүҙҙәренең ҡулланылыуы осраҡлы түгел. Ғәрәп-фарсы һүҙҙәре текста сағыштырмаса аҙ. Поэма телендәге һөйләмдәр ябайлығы менән айырыла.

Яҙма әҙәби һәм ауыҙ-тел поэтик традицияларының үҙ-ара йоғонтоһо «Буҙйегет» поэмаһының структураһында ла күренә. Эпик әҫәрҙең бөтә тексы авторҙың хикәйәләүенән, монолог һәм диалогтан тора. Авторҙың хикәйәләүе композицион яҡтан монолог менән диалогтан ҡырҡа айырыла, сөнки унда, классик көнсығыш поэзияһына хас үҙенсәлеккә таянып, ун бер-ун бер үлсәмле шиғри система ҡулланыла. Мәҫәлән:

Ҡыз баҡир йәренән айырулмайды,
Йәремне азат итдәб күб йығлайды.
Хан үзе түбән ҡараб, йерне чоҡоб,
Ҡызның бул сүзенә ҡайырулмайды (18а бит).

«Ҡыҙ бахыр йәренән айырыла алманы,
Йәремде азат итәм тип күп иланы.
Хан үҙе түбән ҡарап, ерҙе соҡоп,
Ҡыҙҙың был һүҙенә ҡайырылманы»

(*ҡайырылманы* — «тыңламаны, иғтибарға алманы» мәғәнәһендә).

Яҙма тел традициялары бигерәк тә «Ҡызларның әйткән йар-йары» (11б—12а бит) тигән мөхәббәт шиғырында асыҡ сағыла. Бында һәр шиғыр юлы *йар* (йәрем, һөйөклөм) һүҙе менән тамамлана, шулай уҡ төрки халыҡтарының мөхәббәт поэзияһы өсөн дөйөм булған традицион эпитеттар һәм сағыштырыуҙар осрай: *мәрвәрид* «мәрүәр», *мәрджан* «мәрйен (муйынсаҡ)», *тути* «тутый (ҡош)», *былбыл* «һандуғас», *алтун* «алтын», *көмүш* «көмөш», *гүл* «гөл», *йофар* «йофар», *гәүһәр* «гәүһәр (таш)», *йаҡут* «яҡут (таш)», *хур ҡыз* «хур, ожмах ҡыҙы», *нур йегет* «нурлы (матур) егет» һ. б.

Монолог менән диалогта, нигеҙҙә, ҡобайыр, халыҡ йыры һәм бәйет формаһын хәтерләткән ете юллыҡ ҡулланылған. Уларҙа фольклор теле һәм стиле саралары ярылып ята. Миҫал итеп Ҡарасәс йырынан өҙөк килтерәбеҙ (35б бит):

Алтун йаҡа, кеш тунлар,
Сине кейәр кешем йуҡ.
Алтун эйәр, күк йурғам,
Сине менәр кешем йуҡ.

«Алтын яға, кеш тундар,
Һине кейер кешем юҡ.

Алтын эйәр, күк юрғам,
Һине менер кешем юҡ».

Ҡобайыр элементтары бигерәк тә йырсы сәсән ауыҙынан матур бирелгән (39а—40б биттәр):

Малым күб диб ҡыуанма,
Малны күрмәс көн булар.
Алтун менән йер тулса,
Күзең салмас көн булар.

«Малым күп, тип ҡыуанма,
Малды күрмәҫ көн булыр.
Алтын менән ер тулһа,
Күҙең һалмаҫ көн булыр».

Шулай итеп, «Буҙйегет» поэмаһы һымаҡ эпик әҫәрҙәр яҙма поэзия йоғонтоһонда дөйөм билдәле сюжет нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм, һәр урында яҙма тел менән ауыҙ-тел традициялары үҙ-ара өҫтәлмә йоғонто яһашып, күп төрки халыҡтары араһында яҙма ҡомартҡы булараҡ та, халыҡ ижады ҡомартҡыһы булараҡ та ҡулланылған [34].

Башҡа эпик әҫәрҙәр яҙма төрки әҙәби теле йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән, әммә уларҙың һәр береһе тик бер халыҡтың үҙенә генә хас поэтик һүҙ әҫәре булып ҡалған. Бындай әҫәрҙәргә башҡорттар араһындағы ырыу-ара ыҙғыштарҙы асыҡ сағылдырған «Күсәк бей» эпик поэмаһын индерергә мөмкин. «Күсәк бей» поэмаһы, — тип яҙҙы Ә. И. Харисов, — Көнсығыш поэзияһы йоғонтоһон кисергән замана шағиры тарафынан яҙылған, тип ышандырып әйтергә була. Был уның классик төрки шиғыры булған робағи формаһында (дүрт юллыҡта) яҙылыуында күренә, унда башҡорт фольклорында билдәле булмаған, әммә китап теленә ныҡ хас булған ғәрәп-фарсы һүҙҙәре осрай. Ләкин был поэма беҙҙең өсөн бик үҙенсәлекле һәм йөкмәткеһе яғынан саф башҡорт күренеше булыуы менән мөһим» [35].

«Күсәк бей» эпосының ҡыпсаҡ һәм бөрйән версиялары йәшәй. Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивында 15 ҡыпсаҡ һәм туғыҙ бөрйән версияһындағы варианттар һаҡлана [36]. Ҡыпсаҡ версияһына ҡараған варианттар араһында үҙенең тулылығы һәм тексының камиллығы яғынан 1924 йылда Ә. Х. Исламғолов тарафынан латин яҙмаһына күсерелгән текст

---

[34] «Буҙйегет» поэмаһының башҡортса һөйләнгән варианттары Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивында (ф. 3, оп. 21/1, 15—20-се биттәр; оп. 21/3, 166—167-се биттәр; оп. 67/7, 22—24-се биттәр; оп. 65/8, 1—16-сы биттәр) һәм Башҡорт дәүләт университетының Фольклор фондында һаҡлана. Был турала ентекләп ҡарағыҙ: Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө, 1982. Өсөнсө китап. 327—331-се биттәр.

[35] Харисов А. И. Күрһәтелгән хеҙмәт, русса баҫмаһы. 80—81-се биттәр.

[36] Тулырағын «Башҡорт халыҡ ижады»ның 2-се китабынан ҡарағыҙ. Өфө, 1973. 352—361-се биттәр.

айырылып тора[37]. Оригиналдың авторы — Сабирйән Мөхәмәтҡолов.

Поэманың тексына яһалған лингвистик анализ тикшерелгән текста бөтәһе 750 лексик берәмек (төп һәм яһалма нигеҙ) ҡулланылғанын күрһәтә[38]. Поэмала ҡайһы бер һүҙҙәр бик күп ҡабатлана. Был бигерәк тә ҡылымдар (хәрәкәт ҡылымдары) һәм исемдәр (яңғыҙлыҡ исемдәр, тәбиғәт күренештәре һәм предмет атамалары) өсөн хас. Төп һүҙ байлығын диалекттан азат булған башҡорт теленең дөйөм лексикаһы тәшкил итә. Улар *урман, иген, батыр, ырыу, ҡот, дөбөр-шатыр, бәйге, ҡара йурға, боғаҙ, уҡ, ҡурмас, тоҡом* һ. б. шуның кеүек һүҙҙәр. Әммә текста халыҡ һөйләү теле һәм диалект һүҙҙәрен дә осратырға мөмкин: *белгеҙеү* «белдереү», *баҡырыу* «ҡысҡырыу», *инәй* «әсәй», *ҡашында* «янында» һ. б.

Поэманың лексикаһында шулай уҡ ҡаҙаҡ һүҙҙәре лә осрай: *сыраҡтарым* «күҙ нурым», *баҡыллашыу* «бәхилләшеү», *таңдап-таңдап* «һайлап алыу», *ҡарағым* «күҙ нурым» һ. б.

Лексикаһында яҙма төрки әҙәби теленән ингән ҡайһы бер ғәрәп-фарсы сығышлы һүҙҙәр айырылып тора( улар йөҙҙән артыҡ осрай). Улар, нигеҙҙә, абстракт мәғәнәләге һүҙҙәр: *афәт, бәлә, вафа* «бирелгәнлек, инанғанлыҡ», *изен* «рөхсәт, мөмкинлек», *мөсәл* «кеүек», *бикар* «файҙаһыҙ, буш», *пәйда булыу* «күренеү, килеп сығыу» һ. б.

Эпоста һүҙҙәр тура һәм күсмә мәғәнәлә лә ҡулланыла.

Текста синоним, антоним һәм омонимдар кеүек лексик саралар ҙа бар: *арслан* (арыҫлан) — *йыртҡыс* — *януар; тыныслыҡ* — *яу; аты* (исеме) — *аты* (кемдеңдер аты).

Троптарҙан сағыштырыуҙар, метафоралар, метонимия, синекдоха һәм гиперболалар күренә: *даръялай, алтын һөйәк Бабсаҡ, аҡ батша, Мәсем яҡҡа* (яғына), *бер уғын биш пар үгеҙ тартыр булған.*

«Күсәк бей» эпосында фольклор менән әҙәби телдең үҙ-ара йоғонтоһо унда ғәрәп-фарсы һүҙҙәре булыу менән генә түгел, ә яҙма традициялағы морфологик элементтар ҡулланылыуында ла күренә:

1) атрибут мәғәнәһендә ҡулланылған *-мыш//-меш* сифат ҡылым аффиксы: *йебәрмеш хат-хәбәрен* «ебәрелгән хатын»;

2) субъектив үткән заманды белдергән *-ып* аффиксы менән өсөнсө заттың берлек күрһәткесе ҡушылмаһы: *уҡыпты* «уҡыны», *килепте* «килде»;

3) хәҙерге һәм киләсәк замандарҙы белдергән *булады* ҡылымының өсөнсө зат берлектәге хәбәр һөйкәлеше аффиксы һ. б.

Шулай итеп, миҫалдарҙан күренеүенсә, фольклор менән әҙәбиәттең бер-берећенә ара-тирә йәки өҙлөкһөҙ йоғонто яһауы һө-

---

[37] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 12/247. 1—59-сы биттәр.

[38] Тулырағын Н. Ғ. Ғайсарова менән И. Ғ. Ғәләүетдиновтың «Күсәк бей» эпосының лексик үҙенсәлектәре» тигән мәҡәләһенән ҡарағыҙ // Вопросы лексикологии и лексикографии башкирского языка. Уфа, 1983, 69—71-се биттәр.

ҙөмтәһендә әҙәби текста ғына түгел, ә фольклорҙа ла тел һәм художество структураһын бер-береһенә яҡынайтыу йүнәлешендә үҙгәртеп ҡороу бара.

Фольклор менән яҙма поэзияның үҙ-ара йоғонтоһо ваҡытында бәйет кеүек жанрҙар барлыҡҡа килеү өсөн шарттар тыуа. Был жанрҙың ике яҡлы характеры беренсе нәүбәттә уның һөйләү формаһында ла, яҙма формала ла таралыуында күҙәләнә. «Һәр әҫәр тип әйтерлек, — тип яҙҙы К. Ә. Әхмәтйәнов, — уны яҙыу, һөйләү ысулын күрһәтеүҙән башлана: автор йә «бәйетте һөйләргә» («мин әйтәйем, һеҙ тыңлағыҙ»), йә «бәйет яҙырға» («бәйет яҙҙым ултырып, аҡ ҡағыҙҙы тултырып») йыйынғанын әйтә. Бында билдәле бер законлылыҡ сағыла: фольклор поэтикаһына нигеҙләнгән һәм бигерәк тә үҙ көйө булған әҫәрҙәр, ғәҙәттә, һөйләү формаһында йәшәй: көнсығыш шиғыр системаһына тартҡан бәйеткә килгәндә, улар яҙыу рәүешендә тарала» [39]. Эпик һөйләү теле ижады булараҡ, бәйеттәр йә ҡобайыр йоғонтоһонда («Кинйәкәй бәйете»), йә тарихи йырҙар (Салауат бәйете, 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы һәм 1812 йылғы Ватан һуғышы бәйеттәре, ер бәйете, һалдат бәйеттәре) менән үҙ-ара бәйләнештә барлыҡҡа килгән; әҙәби әҫәр булараҡ, бәйеттәр көнсығыш халыҡтарының классик поэзияһы йоғонтоһонда яҙылған.

Ҡайһы бер бәйеттәр, һүрәтләүҙең стилистик һәм ритмик сараларын дини-дидактик поэзиянан, мөнәжәттәрҙән үҙләштереп, уларҙың жанр формаларына яҡынлашҡан [40]. Бындай бәйеттәр хатта текстың үҙендә үк мөнәжәт тип аталған. Мәҫәлән:

Мына яҙам мөнәжәт,
Уҡымаҡ та көйләмәк.
Мөнәжәттә һөйләмәк
Тыуған илем хаҡында.
*(«Кинйәкәй бәйете»)*

Яҙма формала таралған бәйеттәрҙең теленә килгәндә, уларҙа төрки әҙәби теленең нормалары морфология йәһәтенән сағыштырмаса тулы сағылған. Иң йыш ҡулланылған формаларға *-дин, -мыш* аффикстары, алмаштарҙан *ошбу, бән, сән,* бәйләүестәрҙән *илә, илән, берлә* һ. б. инә. Әммә лексика ғәрәп-фарсы һәм башҡа китап һүҙҙәре менән генә сикләнмәй. Бында саф башҡорт лексикаһына ҡараған һүҙҙәр ҙә бик күп осрай.

Яҙма поэзияның традициялары айырым кешеләрҙең шәхси трагедияһына бағышланған («Ғәйшә бәйетләре»), ер һәм тыуған ил («Ер бәйетләре», «Ҡарағайүҙәк бәйете», «Урал бәйете», «Йәйләү бәйете»), һалдат тормошо һәм һуғыштар («Рус-төрөк һуғышы бәйете», «Рус-япон һуғышы бәйете», «Герман һуғышы бәйетлә-

---

[39] Ахмедьянов К. А. Переходные формы образности и их роль в становлении письменной поэзии тюркоязычных народов // Литературное наследие народов Урало-Поволжья и современность. Уфа, 1980. 39-сы бит.

[40] Хусаинов Г. Б., Сагитов М. М. Башкирские баиты (Эволюция жанра в дооктябрьский период) // Вопросы башкирской фольклористики. Уфа, 1978, 34-се бит.

ре», «Әсир һалдат бәйете» һ. б.) тураһындағы бәйеттәрҙә бигерәк тә асыҡ сағылыш тапҡан.

Шулай итеп, башҡорт әҙәбиәтендә аралыҡлы жанр булараҡ, бәйет фольклор менән әҙәбиәттең үҙ-ара йоғонто яһашыуы һөҙөмтәһендә шаҡтай ҡатмарлы эволюция кисергән. XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында унда коллектив һәм индивидуаль ижади башланғыстар бергә ҡушыла барған; фольклорға хас үҙенсәлектәрҙе яйлап юғалта барып, ул шиғыр жанры менән яҡынайған.

### *3. Башҡорт әҙәби теленең тарихында мәғрифәтселектең урыны*

Был осорҙа Башҡортостанда башҡорттар араһында прогрессив ижтимағи аң һәм мәғрифәтселек үҫешендә ҙур урын тотҡан рус милли культураһы актив тарала башлай. Быға 1812 йылғы Ватан һуғышы [41] һәм декабристар восстаниеһы [42] булышлыҡ итә.

Башҡорт халҡының тарихын һәм культураһын өйрәнеүгә Ырымбур йәшерен йәмғиәтенең етәксеһе декабрист шағир П. М. Кудряшев (1797—1827) һәм XIX быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур крайына һөргөнгә ебәрелгән билдәле рус композиторы А. А. Алябьев (1787—1851) ҙур өләш индергән [43]. Башҡорт халҡының белемгә ынтылышын ваҡытында П. М. Кудряшев, мәҫәлән, түбәндәгесә билдәләп үткән: «...башҡорттарҙы айырыуса маҡтап, шуны әйтер инем — улар хәҙер үҙ белеме тураһында шаҡтай ҙур хәстәрлек күрә» [44].

XIX быуат башында Башҡортостандағы башҡорт һәм казак ғәскәрҙәре өсөн кадрҙар әҙерләү маҡсатында башланғыс гарнизон мәктәптәре һәм ғәскәри училищелар асыла. 1849 йылда гарнизон мәктәптәре эргәһендә башҡорт корпусы төҙөлә, бында хәрби хеҙмәт һәм башҡорт кантондарында эш ҡағыҙҙарын төҙөүҙе тормошҡа атҡарыу өсөн кадрҙар әҙерләнә [45].

Россияның башҡорт, татар һәм башҡа рус булмаған халыҡтары араһында мәғрифәт эшен йәйелдереүҙә Ҡазан университетында китап баҫыу эшен ойоштороу ҙур урын тотҡан. Дини ки-

---

[41] Асфандияров А. З. Введение кантонной системы управления в Башкирии // Из истории Башкирии. Уфа, 1968, 163-сө бит.

[42] Ҡарағыҙ: Рабинович М. Д. Декабристы в Башкирии и Оренбургской губернии // Материалы научной сессии, посвященной 400-летию присоединения Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1958. 147—177-се биттәр.

[43] П. М. Кудряшев менән А. А. Алябьевтың Башҡортостандағы эшмәкәрлеге тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте түбәндәге хеҙмәттәрҙән ҡарағыҙ: Харисов Ә. И. Күрһәтелгән хеҙмәт, башҡортса баҫмаһы. 52-се бит; Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Башкирские просветители-демократы XIX в. М., 1981. 23—26-сы биттәр; Атанова Л. П. Собиратели и исследователи музыкального творчества башкирского народа // Фольклористика в Советской Башкирии. Уфа, 1974. Вып. 1. 20—34-се биттәр.

[44] Кудряшев П. М. Предрассудки и суеверия башкирцев // Отечественные записки. СПб., 1826. Ч. 28. 219-сы бит.

[45] Очерки по истории Башкирской АССР. Т. 1. Ч. 2. 241-се бит.

таптар менән бер рәттән, типография донъяуи характерҙағы уҡыу әсбәптәрен дә сығарып, Башҡортостанда ла тарата.

Шулай итеп, реакцион хәрби-феодаль режимдың ауыр шарттарына, рус булмаған халыҡтарға ҡарата батша Россияһының колонизаторлыҡ политика үткәреүенә һәм Башҡортостанда дини идеологияның киң таралыуына ҡарамаҫтан, XIX быуаттың тәүге яртыһында рус революцион идеологияһының ыңғай йоғонтоһо һөҙөмтәһендә башҡорт халҡының мәғрифәтселек элементтарын үҙләштергән мәҙәниәте артабан үҫеш алды.

1825 йылдың 2 ғинуарында Ырымбурҙа Неплюев хәрби училищеһының асылыуы башҡорт, татар һәм Башҡортостандың башҡа халыҡтары араһында белем таратыуҙа ҙур ваҡиға булды. Был училище, регуляр ғәскәр өсөн тәржемәселәр һәм офицерҙар әҙерләү менән бер рәттән, үҙ алдына азиаттарҙың рустар менән яҡынлашыуына булышлыҡ итеү, уларҙа рус хөкүмәтенә ҡарата яратыу, ышаныс тыуҙырыу һәм был алыҫ яҡҡа белемле чиновниктар ебәреү маҡсатын ҡуйҙы [46]. Училищеның Азия бүлегендә ғәрәп, фарсы, татар, башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәре өйрәнелде, шулай уҡ игенселек, урман хужалығы менән бәйләнгән фәндәр уҡытылды [47].

Башҡорт һәм татар мәғрифәтселегенә училищеның уҡытыусылары М. Иванов, С. Күкләшев һәм М. Биксурин тос өлөш индергән. Улар үҙҙәренең ижади һәм ғилми педагогик эшмәкәрлегендә прогрессив рус культураһына һәм мәғарифына йүнәлеш тотҡан [48].

1842 йылда Ҡазан университеты типографияһында М. Ивановтың «Татар грамматикаһы» һәм «Татар хрестоматияһы» тигән китаптары донъя күрә [49]. «Татар грамматикаһы»нда татар һөйләү

---

[46] Краткий очерк истории Оренбургского Неплюевского кадетского корпуса. Оренбург, 1913. 14-се бит.

[47] Ырымбур өлкәһе дәүләт архивы. Ф. 6, оп. 5, ед. хр. 11615/3, 4—10-сы биттәр.

[48] Был турала тулыраҡ итеп Ә. Х. Вилданов менән Ғ. С. Ҡунафиндың күрһәтелгән хеҙмәтен ҡарағыҙ. 37—54-се биттәр.

[49] М. Ивановтың «Татар хрестоматияһы»ның ҡулъяҙмаһы Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең китапханаһында б/1490 шифры һәм яңылыш атама — Биксурин М. Халыҡ экиәтләре һәм повестлары (1845—1849 йылдар) — менән һаҡлана. Ҡулъяҙма тулы түгел, унда, нигеҙҙә, хрестоматияның 1-се бүлеге (3—205-се биттәр) һәм 2-се бүлектән айырым фрагменттар (383—402-се биттәр) һаҡланған. 1—2-се, 207—382-се, 403-сө һәм күпмелер дауам иткән биттәр бөтөнләй юҡ. Ул хрестоматияның беренсе баҫмаһының төп нөсхәһе булырға мөмкин.

1856 йылда М. Иванов хрестоматияның икенсе баҫмаһын әҙерләгән, ләкин уның баҫылмай ҡалыу сәбәбе билдәһеҙ (ҡулъяҙма Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы архивында ваҡытлыса шифрһыҙ һаҡлана, 448 биттән тора). А. Н. Кононов редакцияһында һәм инеш һүҙе менән сыҡҡан «Биобиблиографический словарь отечественных тюркологов: Дооктябрьский период» тигән китапты ҡарағыҙ (М., 1974. 168-се бит).

М. Ивановтың «Татар хрестоматияһы» тип аталған китабы, хәҙерге күҙлектән ҡарағанда, шартлы алынған, уны «Төрки хрестоматияһы» тип атарға мөмкин булыр ине, сөнки унда күп төрки халыҡтарҙың фольклор һәм яҙма әҙәбиәте өлгөләре тупланған. «Татар теле» терминынан М. Иванов, ҡайһы бер тикшереүселәр ҡабул иткәнсә, хәҙерге татар телен генә түгел, ә ул замандағы Ырымбур яҡтарының татар, башҡорт, ҡаҙаҡ һөйләштәрен аңлаған булырға кәрәк.

теле факттары ғына түгел, ә Ырымбур яҡтарында йәшәгән башҡорт һәм ҡаҙаҡ тел факттары ла һүрәтләнә. Грамматикаһының баш һүҙендә М. Иванов татар, башҡорт һәм ҡырғыҙ йәки ҡайсаҡтарҙың һөйләү телендә бер хәрефтең (фонеманың — И. Ғ.) икенсеһенә үҙгәреү ҡағиҙәһен һәм билдәле хәрефтәрҙең (фонемаларҙың — И. Ғ.) башҡалары менән сиратлашыу күренештәрен күрһәтергә тырышыуы тураһында әйтә (V бит). Артабан ул Ырымбур башҡорттарының һөйләү теленә хас ҡайһы бер фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәрҙе күрһәтә. Мәҫәлән: *с — баҡса, салҡан, осҡон; ç — аçҡыртын; һ ~ ç* (диал.) — *һыу* йәки *çу, һикермәк* йәки *çикермәк; б — бәке, бысҡы; ҙ — эҙләмәк, өҙәңге; й ~ ж* (диал) — *йыуатмаҡ* йәки *жыуатмаҡ, йер* йәки *жир* (11—14-се биттәр); *-дың//-дең* аффикслы эйәлек килеш формаһы — *алтундың; -ды//-де* аффикслы төшөм килеш формаһы — *алтунды;* һүҙ яһаусы *-тик//-тек, -ныҡ//-нек* аффикстарының диалекталь формалары — *дусттыҡ, узынныҡ* (240-сы бит); *-ды//-де* аффикслы сифаттар — *ғаҡылды* (247-се бит) һ. б.

М. Иванов үҙенең хеҙмәттәрендә, беренселәрҙән булып, киң халыҡ ҡатламы аңлаған әҙәби тел кәрәклеге тураһында әйткән. «Татарҙың үҙенең телендә, йәки дөрөçөрәге, бындағы (Ырымбур яғындағы — И. Ғ.) һөйләштә, — тип яҙҙы ул, — бер ниндәй яҙма юҡ тиерлек; күп булмаған ҡулъяҙма тәржемә лә Ҡазанда баçылған ике-өс бәләкәй генә китап — бөтә яҙма телде шулар тәшкил итә. Татар телендә, төрөк телендәге кеүек үк, тәржемә һәм оригиналь әçәрҙәрҙә һөйләмдәрҙе ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән сыбарлау һәм биҙәү ғәҙәте йәшәй. Был ғәҙәт әҙләп-әҙләп шул тиклем көсәйҙе, хатта мотлаҡ кәрәк нәмәгә әйләнде; хәҙер был ике тел ҡушылмаһын ҡулланмайынса яҙыу мөмкин түгел, тип әйтерлек. Етмәһә, һөйләү теленә яҡын яҙма ла ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән тулған; ә белемле татар, уларҙан торған һүҙ буҡтаһы менән маҡтанып, үҙенең наҙан яҡын кешеһен сәғәттәр буйы ултырырға, яҙыуының серле мәғәнәһен сисергә мәжбүр итә» [50].

М. Иванов әҙәби телдең халыҡсан тибын ауыҙ-тел ижадында күрә, уны китап теленә ҡаршы ҡуя. Уның хрестоматияһының ике өлөштән тороуы осраҡлы түгел:

1) татар, башҡорт, ҡаҙаҡ һөйләү телдәре өлгөләре (халыҡ мәҡәлдәре, әйтемдәре, әкиәттәр, йырҙар, табышмаҡ-йомаҡтар һәм рус әҙәбиәтенән тәржемәләр; бында уҡ ул үҙе «чағатай һөйләү теле өлгөһө» тип ҡараған Әбүлғазы хан тарихынан өҙөктәрҙе индерә);

2) китап теленән өлгөләр (тарихи-әҙәби характерҙағы көнсығыш яҙмаларынан өҙөктәр, хат өлгөләре, Науаи, Физули кеүек шағирҙарҙың шиғырҙарынан өҙөктәр).

Хрестоматияла дөйөм төрки өлгөләрҙән башҡорт теленә лә хас мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе һәм йырҙарҙы айырып алырға мөмкин. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: *ғаҡыл айнумас, алтун чиремәс*

---

[50] Татарская хрестоматия / Мартиниан Иванов төҙөүендә. 1—2-се киçәк. Ҡазан, 1842. 134-се бит.

«аҡыл айнымаҫ, алтын серемәҫ»; *күб йәшәгән белмәс, күб ҡыдырған белүр* «күп йәшәгән белмәҫ, күп ҡыҙырған белер»; *бер кискән икмәк йәбүшмәс* «бер киҫкән икмәк йәбешмәҫ»; *эт симерсә, эйәсен ҡабар* «эт һимерһә, эйәһен ҡабыр (тешләр)»; *ананың күңеле балада, баланың — далада* «ана (әсә) күңеле балала, баланың (баланыҡы) — далала»; *йахшы белән йулдаш булсаң, йетәрсең морадҡа, йаман менән йулдаш булсаң, ҡалурсың ойатҡа* «яҡшы менән юлдаш булһаң, етерһең моратҡа, яман менән юлдаш булһаң, ҡалырһың оятҡа».

Халыҡ йырҙары өлгөләренән:

Ҡычҡыра торған кәкүкне очормас идем күрсәм дә,
Туған-үскән йерне бер күрсәм, үкенмәс ирдүм үлсәм дә.
Бийүк кенә бийүк өйләрдин төтөн генә чыҡадур ҡыл кебек,
Туғанларым исемә түшкәндә бер-бер генә төнләр йыл кебек.
Йапраҡ ла төшсә йерләргә көзгө дә ҡаты йелләрдә,
Сағынамын да, әнкәй, сарғайамын, йабығамын йат уҡ илләрдә.
(165-се бит.)

Мәҡәл, әйтем һәм йырҙарҙан башҡа хрестоматияның ошо уҡ бүлегендә хәҙерге тикшереүселәр хаҡһыҙ рәүештә Мирсалих Биксуриндыҡы тип иҫәпләгән башҡорт телендә (Ырымбур башҡорттарының һөйләү телендә) тәү тапҡыр «Батыр бадшаның әкиәте» (158—165-се биттәр) тигән хикәйә баҫылған [51].

Хәҙерге ваҡытта хикәйә тексының дүрт варианты билдәле: Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең китапханаһында (шифры: б/1490), Иванов, Биксурин һәм Березин баҫмаларындағы текстар. Әҫәрҙең был варианттарына яһалған лингвотекстологик анализ Иванов баҫмаһының ҡулъяҙма тексҡа һүҙмә-һүҙ тап килеүен һәм тел яғынан Биксурин баҫмаһынан айырылғанын күрһәтә. Тулы булмаған Березин баҫмаһы тексы ҡайһы бер тел айырмалыҡтары менән М. Биксуриндан күсерелгән.

Иллюстрация итеп хикәйәнең бер өҙөгөн ҡулъяҙма текст менән (166—167-се биттәр) Иванов баҫмаһын (158-се бит) ҡалған баҫмалар менән сағыштырып бирәбеҙ: *Батыр бадшадын* (Биксуринда — *бадшанын,* Березинда — *бадшаһның) атҡусы тикен бер сирүе бар икән. Бер заманда ыспур* (Березинда — *сбур,* ә В. Ш. Псәнчин был һүҙҙе *сиру* тип уҡыған; күрһәтелгән эш, 140-сы бит) *хилаф эштәрүн һиҙүб, Батыр бадша ул сирүҙең* (Биксуринда — *сирүден,* Березинда — *сирүдең) әһлен* (Биксуринда ла, Березинда

[51] Ҡарағыҙ: Харисов А. И. Күрһәтелгән хеҙмәт, русса баҫмаһы. 54-се бит; Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 51-се бит; Псәнчин В. Ш. «Батыр батшаның әкиәте» // Археография и лингвистическая текстология Южного Урала. Уфа, 1977. 139-сы бит.

1859 йылда М. Биксуриндың китабында баҫылған «Батыр бадшаның әкиәте», ысынында, уның тарафынан М. Иванов китабынан алынған. Артабан был хикәйәнең бер өлөшө «Төрөк хрестоматияһы»на «Батыр бадшаһның хикәйәте» исеме менән С.-Петербург университетының профессоры И. Березин тарафынан индерелгән (Ҡазан, 1876. III том. 5—6-сы биттәр).

*ла — түбен) — тамырын ғоротмаға* (икеһендә лә *ҡоротмаға) хөсөт* (Березинда — *ҡасыд) ҡылған ине* (Березинда — *аны). Ул сирү баш тартуб ҡаршынуҡ* (икеһендә лә — *ҡаршылыҡ) итә башланы һәм анардың* (Биксуринда — *алардын,* Березинда — *алардың) эсендән ике түрә бер-береһе менән* (икеһендә лә — *белән) кәңәшүб үздәренә* (Березинда — *үҙдәренә) үҙдәредәй бериш ҫом* (икеһендә лә — *бер аз мут һәм шом) кешенәрне* (икеһендә лә — *кешеләрде) эйәртүб бадшаны үлтүрәйек тиб* (Биксуринда — *диб) һүҙ берүктүрненәр* (икеһендә лә — *беректүрделәр). Гүннәрдә* (Березинда — *күннәрдә) бер гүн* (икеһендә лә — *күн) күмәкләшүб кәңәштенәр* (икеһендә лә — *кәңәштеләр) Мәсгәүден* (икеһендә лә — *шәһәрден) уртаһындағы ҡаралтынарға* (Биксуринда — *ғаралдыларға) ут һалмаҡҡа* (икеһендә лә — *һалмаға). Батыр бадшадың* (Биксуринда — *бадшанын) бер ғылуғы* (икеһендә лә — *ҡылуғы) бар ине; ут сыҡҡан* (Березинда — *һут һыҡҡан) жиргә барсаһындан* (икеһендә лә — *барһаһынан) борон гелүб жәмағәткә* (Березинда — *джәмағәтә) булушуб ут һүндүрмәкдә* (икеһендә лә — *һүндергәндә) аралашуб йүрүр ине...*

Ҡилтерелгән өҙөктән күренеүенсә, ҡулъяҙма текст менән Иванов баҫмаһы Ырымбур башҡорттарының һөйләү теленә хас күренештәрҙе сағылдыра (даими рәүештә *-нар* күплек ялғауын, *й* урынына һүҙ башында *ж* графемаһын, *-мыз//-мез* аффиксын ҡулланыу). М. Ивановтың Петр батша тураһындағы хикәйәһе башҡорт яҙма телмәре өлгөләренән тәүгеләрҙең береһе булып тора.

М. Ивановтың хрестоматияһы дөйөм алғанда XIX быуаттың тәүге яртыһында Урал — Волга буйы яҙма әҙәби теленең ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы процесс кисереүен асыҡ күрһәтә. Бында башҡорт һөйләү теле һәм фольклоры өлгөләре беренсе тапҡыр яҙма ҡомартҡы кимәленә күтәрелә һәм боронғо яҙма әҙәбиәт традицияларына ҡаршы ҡуйыла.

Әҙәби тел һәм халыҡ һөйләү телмәренең яйлап яҡынлашыуында С. Күкләшевтең 1859 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Татар хрестоматияһы» («Дивани хикәйәте татар») билдәле әһәмиәткә эйә. Баш һүҙендә автор былай тип яҙа: «Төрөк һәм татар ҡәбиләләре һөйләшкән һәм яҙған бөтә телдәр төрки теле тигән дөйөм атама аҫтында билдәле»[52]. Төрки телен С. Күкләшев өс үҙ аллы төркөмгә — төрөк, сығатай һәм татар телдәре төркөмдәренә бүлә. Һуңғы төркөмгә ул татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, башҡорт, ноғай, ҡумыҡ, ҡарасәй (ҡарағай), ҡарағалпаҡ һәм мишәр (мищеряк) «һөйләш»тәрен индерә.

С. Күкләшев, илебеҙ тюркологияһында беренселәрҙән булып, XIX быуаттың тәүге яртыһындағы Урал — Волга буйы яҙма әҙәби төрки телен стилистик система булараҡ тикшерҙе, өс стиль: ябай, эш ҡағыҙҙары, ғилми төрҙәре барлығын әйтте. «Ябай тел, — тип яҙа ул, — һөйләү теленә ныҡ тартым һәм һәр белемле татарға аңлайышлы. Эш ҡағыҙҙары теле ябай тел менән ғилми тел араһында тора; был телде аңлау өсөн күнегеүҙәр үткәреү, күнекмә

[52] Салихжан Күкләшев төҙөгән «Татар хрестоматияһы». Ҡазан, 1859, II бит.

алыу һәм оҙон, тарҡау фекерҙәрҙе аңлап тотоп алыу тәжрибәһе булыу талап итеүә; был телдә (стилдә — И. Ғ.) теге йәки был төшөнсәләрҙе биреү өсөн татар һүҙҙәре булмағанлыҡтан, кәрәк саҡта ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре ҡулланыла. Ғилми тел ғәрәп телен яҡшы белгәндәргә генә аңлайышлы, сөнки бында, күпселектә, ғәрәп һүҙҙәре, һүҙбәйләнештәре һәм әйтемдәре өҫтөнлөк итә. Шундай китаптар бар — уларҙың татарҙыҡы икәнен һөйләмдәрҙең татар ярҙамсы ҡылымы менән бөтөүенә ҡарап ҡына белеп була» [53].

Хрестоматияла килтерелгән материалдар, дөйөм алғанда, был өс стилгә тура килә. Башта мәҡәлдәр, әйтемдәр һәм ҡыҫҡа хикәйәттәр бирелгән [54]. Мәҡәлдәр араһында башҡорт мәҡәлдәре лә бар: *уғыл таб, иркәләнүб йат; йүрегән айаҡға йүрмә әләгә; сабыр иткән морадына йеткән; аҡрун эшен бөтүрер; алты йәшәр йулдан ҡайтса, алтмыш йәшәр күршә килүр* һ. б.

«Хикәйәт» тигән дөйөм баш аҫтында башҡорт, татарҙарға аңлайышлы телдә яҙылған донъяуи әкиәттәр, анекдоттар, әҙәби һәм тарихи яҙмаларҙан өҙөктәр бирелгән. Миҫал итеп түбәндәге хикәйәтте килтерергә мөмкин:

*Бер кешенең йете йәшәр уғлы бар ирде. Ҡайусы һәр ваҡыт олуғ кешеләр арасына керүб сүзгә ҡатушуб сүйләшүр иде. Бер күн бер аҡсаҡал, бу баланың күбне белүб сүйләгәненә танға ҡалуб, әйтде: «Мәнем ишеткәнем бар. Әгәр кеше бала чағында зирәк булса, олғайғач ахмаҡ булур», — диб. Мәҙкүр* (алда күрһәтелгән — И. Ғ.) *бала әйтде: «Алай булса, бабай, сән йәш чағыңда бик зирәк булғансуң икән»* (7-се бит).

Ул заман башҡорт һәм татар шағирҙарының әҫәрҙәре хрестоматияла «бәйет» исеме менән бирелгән. Улар араһында Һибәтулла Салиховтың «Тәндә йәнем», Әбелмәних Ҡарғалының «Жиһангир ханға» тигән һәм башҡа шиғырҙары бар. Бәйеттәрҙе С. Күкләшев «ғилми» (китап) стиленә миҫал итеп килтергән.

Эш ҡағыҙҙары стилен төрлө эш ҡағыҙҙары (ғаризалар, рапорттар, алыш-биреш ҡағыҙҙары һ. б.) өлгөләре тәшкил итә.

Шул уҡ хрестоматияла И. А. Крылов менән И. И. Дмитриевтың мәҫәлдәре (төҙөүсе тәржемәһендә), Фирҙәүсиҙең «Шах намә»-һе бирелә.

С. Күкләшев хрестоматияһында ҡушымта рәүешендә айырым һүҙлек тә баҫтырған. Бында ғәрәп, фарсы, төрөк, ҡаҙаҡ, татар һәм башҡорт лексик ҡатламдарын күрергә мөмкин [55].

Шулай итеп, С. Күкләшев хрестоматияһында XIX быуаттың тәүге яртыһында Урал — Волга буйы әҙәби телендә өс стилдән: ябай, эш ҡағыҙҙары, ғилми стилдәрҙән торған бөтөн бер материалдар комплексы бирелә. Төҙөүсе шул уҡ ваҡытта башҡорт, татар араһында көнсығыш һәм Европа, бигерәк тә рус художестволы әҙәбиәтенең һоҡланғыс ҡомартҡыларын таратыуға иғтибар

---

[53] С. Күкләшевтең күрһәтелгән хрестоматияһы. III бит.

[54] «Хикәйәт» тигәндә, хрестоматия авторы «повесть», «хикәйә» һүҙен күҙ уңында тота.

[55] Күкләшев С. Күрһәтелгән хрестоматия. 107-се бит.

иткән. С. Күкләшев эшмәкәрлегенең төп әһәмиәте унын әҙәби телде беренсе тапҡыр системаға һалырға тырышыуында тора.

1859 йылда Ҡазанда тағы бер уҡыу әсбәбе баҫылып сыға. Уны шул уҡ Неплюев кадеттар корпусының көнсығыш телдәр буйынса уҡытыусыһы Мирсәлих Биксурин төҙөгән[56]. «Начальное руководство...»ла башта ғәрәп, фарсы һәм татар телдәрендәге текстарҙы уҡыу өсөн төп ҡағиҙәләр бирелә. Татар теленә М. Биксурин, М. Иванов һәм С. Күкләшев кеүек үк, Ырымбур татарҙары, башҡорттары, ҡаҙаҡтары «һөйләш»тәрен индерә. Артабан уҡыу өсөн юғарыла күрһәтелгән телдәрҙә һәм «һөйләш»тәрҙә текстар бирелә. Башҡортсаға миҫал итеп беренсе тапҡыр М. Иванов хрестоматияһында баҫылған һәм алда күрһәтелгән «Батыр бадшаның әкиәте»нән өлгөләр килтерелгән. Әммә М. Иванов менән М. Биксурин текстары тел яғынан бер-береһенән айырыла. Быны түбәндәге лингвотекстологик сағыштырыуҙан күреп була:

| М. Ивановтың ҡульяҙма тексында (168—175-се биттәр) һәм китабында (154—165-се биттәр) | М. Биксуринда (62—66-сы биттәр) (Березиндыҡы йәйә эсендә) |
|---|---|
| 1 | 2 |
| һиндән | һинән |
| ут һүндермәкдә | ут һүндергәндә |
| менән | белән |
| һүҙ беркүштенәр | һүҙ беркүштеләр |
| ғамаб | ҡамаб |
| аҡыр | һәр нисүк |
| билгүләненәр | билгүләнеләр |
| үздәриден | үҙдәринен (үҙдәриден) |
| тигеннен | тигенден (тигәндең) |
| көнден буйына | көн буйына |
| ултурнинар | ултурдилар |
| инте | инде |
| бадшады | бадшаны |
| үҙемеҙдүң моратымызға | үзүбезден моратыбызға |
| житәмез тиб | житәмез диб |
| ике кемһәнә | икәүһе |
| үкүниннәр | үкүнделәр |
| аҡруныna | аҡрунғына |

[56] Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с кратким объяснением существующих в Оренбургском крае наречий башкир и киргизов и приложением к нему русско-персидско-татарских слов, разговоров и прописей // Составил старший учитель арабского и персидского языков в Оренбургском Неплюевском кадетском корпусе и преподаватель татарского языка в школе киргизских детей, учрежденной при Оренбургской пограничной комиссии, коллежский асессор Мирсалих Бекчурин. Казань, 1859. 128, (3) бит; икенсе өҫтәп эшләнгән баҫма «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана и с русско-персидско-татарскими словами, расположенными по предметам, разговорам и прописям» тип атала. Казань, 1869. 159, (13) бит.

| 1 | 2 |
|---|---|
| ай-эттә | ай-һай |
| бәнем | мәнем |
| эшемез | эшебеҙ |
| жахшы | йахшы, арыу |
| жаҙуҡ | йазыҡ |
| анарға | аларға |
| булһаҡ | булсаҡ |
| ҡул тотособ | ҡул тотошоб |
| әйттенәр | әйттеләр |
| андуб | аңдуб |
| үлтүрермеҙ | үлтүрүрбеҙ |
| ҡалдынар | ҡалдылар |
| бунар | булар |
| бадша хәзрәттәриденң үҙенә әҙердә бик гәрәкте жәшрүн һүземеҙ бар тиненәр | юҡ |
| гөнаһны | гөнаһды |
| ҡаладың | ҡаланын |
| шунта абаруб | шунда сабтуруб |
| ҡарағулға | ҡараулға |
| һалтатнар | һалдатлар |
| килтүрне | килтүрде |
| абтурашуб ҡалнынар | абтурашуб ҡалдулар |

Үрҙә килтерелгән төрләсә яҙыуҙарҙан күренеүенсә, диалектизмдар ҡулъяҙма текст менән Иванов баҫмаһында күберәк осрай. Биксурин баҫмаһы, башҡорт теленең ҡайһы бер диалектизмдары булыуға ҡарамаҫтан, сағыштырмаса унификацияланған характерҙа. Был яҡтан М. Биксуриндың батыр батша тураһындағы тексы башҡорт милли әҙәби телен барлыҡҡа килтереү юлында беренсе ҡарлуғас һәм ынтылыш булды, тип әйтергә хаҡлыбыҙ.

Түбәндә М. Биксурин тексын тулы килеш килтерәбеҙ.

## БАТЫР БАДШАНЫҢ ӘҠИӘТЕ.

Батыр бадшанын атҡуси тикән бер сирүе бар икән. Бер заманда ыспур хилаф эштәрүн һиҙүб, батыр бадша ул сирүҙен түбентамырын ҡортмаға хөсөт ҡылған ине. Ул сирү баш тартуб ҡаршылыҡ итә башланы һәм аларҙун эсендән ике түрә бер-берһе белән кәңәшүб үҙҙәренә бер аҙ мут һәм шом кешеләрде эйәртүб бадшаны үлтүрәйек диб һүҙ берүктүрделәр. Гүннәрдә бер күн күмәкләшүб кәңәштеләр. Шәһәрдең уртаһындағы ғаралдыларға ут һалмаға батыр бадшанын бер ҡылығы бар ине. Ут сыҡҡан жиргә барһаһынан борон килүб жәмағәткә булушуб, ут һүндүргәндә аралашуб йөрөр ине. Бығанағы ике түрә ибдәштәре араһында бер-берһе белән һүҙ беркүштеләр: ут сыҡҡан саҡта һүндерешкән булуб, белдүртмәйенсә бадшаны ҡыҫыҡ жиргә алуб ҡамаб баһыб

үлтерергә. Һәр нисүк ул кәңәштәрүн жиринә килтүрмәк өсөн уахыт билгүләнеләр һәм үҙҙәренүн араһындан Һукуникуф тигәнден ыҙмаһына ашҡа жыйулуб килүб, күн буйына һәр төрлө эскеләр: араҡы, бал, һыра эсүб, түнгә саҡты иҫерешүб ултурдылар. Төрлө уйыннар уйнаб, көлкө һүҙләр һөйләшүб күңелдәрен жуатуб, ҡарундарын туйдуруб, жөрәктәрен жилкүтүб, инде бадшаны үлтүрүб, үзебезден моратыбызға житәмез диб шаулашуб ултурған замандарында, аларҙын араһындан икәүһе күңелгә алған киңәштәрүндән ҡайтуб, үҙҙәрен эсендә үкүнделәр. Анан һуң аҡрын ғына тышка сығуб, аулаҡ жиргә инүб, берһе әйтте: «Ай-һай, ибдәш, минем эсем бик боша башланы. Бу беҙден эшебеҙ әллә нисек булур шикелте, башыбыҙдын китәрен күңелем һиҙеб тора, тине. Минем белүемсә, бу эште таштаб ҡуйубыҙ йахшы булур ине», — тигәс, икенсеһе шуған ғаршы: «Бик дүрүст әйтәһең, һүҙеңә мин бик разимын», — тине. — Мин иһрекдегем белән гәрсә ибдәштәремә эйәрүб бер кәңәштә булһам да, үҙемден жөрәккә боҙ төшөб, ҙур ҡайғуға ғалдум. Аның өсөн бу беҙден бадшаһбыҙ бик ару бадша бит, бунын шикелте бадшанын башын жуғалтуы бик ҙур йаҙыҡ булыр, йаҙаһы ҡасан булһа ла башыбыҙға төшәр, тине. — Инде ни эштәйек, бунан башҡа сара жуҡ. Бадшанын үҙенә баруб бу эште баштан айаҡ һөйләб, башыбыҙды кисүрмәген үтүнүрбеҙ», — тине. Икенсеһе: «Ошлай иткәнебеҙ бик ошар, бер үк бүтән ибдәштәребеҙдән нисүк итүб ғотолорбоҙ икән, киткәнебеҙне һиҙҙүрмәйенсә», — тине. Беҙ аларға әйтүрбеҙ: «Әй, жарандар, әгәр ошо төндөн уртаһында ут сығарур булсаҡ, инде эскүне таштаб беҙгә таралушу кәрәк, тиб, — һәр ҡайһыбыҙ ыҙмабыҙға ҡайтушуб киткән булурбыҙ». Шунан һуң çүздәрен беркетүб, ҡул тотошоб, ыҙма эсенә инүб киттеләр. Ибдәштәренә әлеге һүҙде ибләп кенә әйттеләр. Алар да рази булдулар. Берүк төн жарумы йетмаһтан борон бер-берһе илән үғдә ҡуйдулар: ултурған жиргә тағы ла жыйулурға. Иһрекләре ҡайтаһы килмәне. Бергә ултуруб, ҡыҙышыб, төн жарымынаса ибдәштәрен көтөб, уахыт уҙдурмаҡсы булдылар. Төн уртаһында тағы ла жағынан жыйулуб билгүләгән ҡаралдыларға ут һалуб, бадшаны аңныб, ҡулыбыҙға төшөрөб, үлтүрүрбеҙ, тип ҡалдылар. Былар ибдәштәренә бер ҙә тойдормайынса, иҫергән булуб, ыҙмаларыбыҙға ҡайтуб, бер аҙ жал итүб айыҡайыҡ тиб, сығыб киттеләр. Шунан һуң туб тура бадшаның үҙенә баруб, килгәндәрен тейеште кешеләрдән белдүртүб, бадша хәҙрәттәре белән күрүшүб, һөйләшәһе һүзебеҙ бар тиб, әйттеләр. Бадшаға баруб мәғлүм иттеләр. Бадша ул сирүҙен уафаçыҙлығын белүб, ҡаршыһына килтүрмәйенсә, булардын гилгәндәренен çәбәбен һуратты. Алар бадшанан башҡа кеше белән һүҙләшер һүҙебеҙ жуҡ, тинеләр. Анан буң батыр бадша алдағы бүлмәһенә сығыб күрүште. Бадшаны күргәс, йөҙ түбән жығылуб, әйттиләр: «Баш хәҙрәтебеҙ, һеҙден алдығыҙда гөнаһды булдуҡ, ҙат шәрифеңезде үлтүрмәк ҡыçымында булғайныҡ. Әҙерҙә ул уйыбыҙдан ғайтуб тәүбә иттүк. Рәхимне эшегенеҙгә гилүб, гөнаһыбыҙды мәғлүм итәбеҙ. муйыныбыҙды хәҙрәтегезгә табшурдыҡ, үлтүрһәгеҙ дә беҙ рази. Бер үк беҙден ибдәштәребеҙ бар. Алардын барсаһы әҙер Һукуни-

куфтын ыҙмаһына жыйулушуб эсеб ултурадар. Төн уртаһында ҡаланын эсендә ут һалыб көйдөрөб, һеҙде ут сыҡкан жиргә гилгән саҡта үлтүрүрбеҙ тиб, төндөн жарымын көтөб ултурадар» — тинеләр. Бадша бу һүҙде ишүтүб, хәбәр растығын ғайта-ғайта һораны. Алар ант эсүб әйттеләр: «Бадша, муйыныбыҙ һеҙден ҡулығыҙда инде. Беҙден белән теләһәгеҙ ни эштәгеҙ, бер үк әйткәнебеҙден дөрөстөгөн белмәк өсөн ышанысты бер кеше шунда сабтуруб, ни эштә торғандарын үҙегеҙ белешеңез, әҙер дә төн жарымынаса шунда бер-берһен эске белән һыйлаб ултурадар», — тинеләр. Анан һуң батыр бадша ул ике кешене ҡарауылға ҡуйды. Үҙе бер булк һалдатлар әҙердәтеб һәм аларға үҙинен ышанысты синауникнарындан берәүһен йаҙған буйуруғы белән ҡушуб, бағанағы ыҙмаға төндөн ун беренсе һағәттә барурға ҡушты. «Ул ҡаралдыны ҡоршаб алуб шунда ултурған кешенен барсаһын тотоб бәйләб алуғыз», — диб. Ул синауник бадшаның буйуруғын кирәгенсә жиренә килтүрде. Бер үк батыр бадша жөрәгенә сыдай алмайынса, билгүләгән һағәтте онтоб, инде эш бөтөннәй бөткәнтер тип уйлаб, үҙе йөрөй торған ике көбшәкте бер арбаһы бар икән, бер хеҙмәтсеһе белән шуған ултуруб, шунда ашуғуб китте. Ул ғаралдуға ҡараһа, урамда кеше күрмәгәс, абтураны. Һалдаттарым ишек алдунда булмаһа, ыҙма эсендәдүр тиб, һис дә ҡурҡмайынса ишек алдына инеб, арбаһынан төшөб, йалғыҙ хеҙмәтсеһе белән ыҙма эсенә инүб китте. Ултурған албауттар бадшанын ҡапыл килгәнен ишетүб, ҡоттары сығуб, абтурашуб ҡалдулар. Батыр бадша һис тә төҫөн үҙгәртмәйенсә жыйын араһына инде. Алар шунтуҡ һикерүб тороб бадшаға баш ороб, инкәйә бируб, муйын һондолар. Бадша асыҡ йөҙө белән көлөмһө бите белән әйтте: «Урамдан үтүб бара инем, ыҙмағыҙдын тәҙрәһеннән күп шәм уттар күрүб, ошонда йахшы ғунаҡдар бар ошай тиб уйланым да, шунан һуң кистен иртәлүген белгәс, буш ҡына өйөмә ғайтуб йатҡансә, ыҙмағыҙға инүб, хөрмәтте ғунаҡтарығыз белән бер аҙ бергә ултурушуб, берәр тустаҡ эсеб китәйем тиб, килгәйнем», — тине. Анан һуң бадшанын бағанағы синауниге һуңға ҡалған өсөн, бик йарһуб килүб ошо ғунаҡтарға бер дә һиҙдүрмәйенсә, түргә уҙуб ултурду. Ул арала бер аҙ уахт үткәс, жыйундары кешеләр бадшаны ҡоттаб, һаулығына эскеләр эсүб, бадша бер дә абтурамайынса һәм төһөн боҙмайынса алар белән әңгәмәләшкән булуб ултурған саҡта, ғунаҡлардын берәүһе хужанын ғолағына килүб, уахыт житте, диб шыбырланы. Бадша шуны ишетүб ҡалды. Ыҙма эйәһе бер нәрҫә белмәгән булуб: «Жуҡ әле, житмәгән», — тине. Ул арала батыр бадша ултурғысындан тора килүб, бик шәб тауш белән һөрәннәб: «Атандын этенә һабҡыры, һинең уахтың житмәгән булһа ла, минен күбдән житте!» — тиб, Һукуникуфтын сикәһенә һалуб эйде лабаһа, тегенен иһе китүб көлтәләй тәгәрәб китте. Ул уахтта бығанағы синауник ҡораллы һалдаттар белән килеб житте. Аларды күрүб һөрәннәб:. «Тиз, бу эттәрде бәйләб — сырмаб ҡуйығыз», — тине. Үзгә минауат ғәдимлар йөзтүбән айағына жығылуб, безден гөнаһыбызды кисер, тиб инәлдүләр. Шунан һуң барсаһын берәм-берәм тотоб тырмыслаб таштанылар.

Анан һуң батыр бадша бик асулануб, әлеге синауниккә әйләнүб тороб: «Ни өсөн һуңға ғалдуң?», — тиб, ҡаҡ маңғайына йомороҡ белән һалуб ебәргәс, күҙәренән уттар сәселүб китте. Шунан һуң әлеге синауник йан тоҡсаһынан буйуруҡ ҡағыҙын сығаруб, бадшаға күрһәтте, дөрст сыҡты. Бадша үҙенен хатаһын күрүб, синаунигенен маңғайынан үбүб һөйөндө лә: «Һин минен ышанысты кешем икәнһең», — тине. Анан һуң бәйләб ҡуйған әлеге минауат кешеләрде аға табшуруб, баструк эсенә индүрүб һалдурды. Анан һунда һәр береһенән йаҙуғына күрә йахшы ғына йаҙаһы бирде.

Дәреслектең һуңғы яртыһын тематик принципта урынлаштырылған рус-фарсы-татар һүҙлеге тәшкил итә. Унда татар теленән айырылған 200-ҙән артыҡ «башҡорт һөйләше»нә ҡараған һүҙ бирелә.

| **Башҡортса** | **Татарса** | **Русса** |
|---|---|---|
| бисә | хатун | жена |
| анай | тута | старшая сестра |
| танау | борын | нос |
| ауыҙ | агыз | рот |
| саң | тузан | пыль |
| борсаҡ | боз | град |
| ҡурпы | йәшелләүк | мурава |
| ҡомороҡ | упкын | пучина |
| муйыл | шоморт | черемуха |
| ҡарағат | карлыган | смородина |
| тапма | бизгәк | лихорадка |
| күбә | чүмәлә | копна |
| мөйөш | почмак | угол |
| тоҡ | капчык | мешок |
| турғай | чыпчык | воробей |
| кәртә | койма | ограда |
| ижау | чүмеч | ковш |

Дөйөм алғанда, М. Биксуриндың «Начальное руководство...»-һында башҡорт материалдарының теле башҡорт теленең бөтә һөйләштәренең тип әйтерлек үҙенсәлектәрен сағылдыра һәм характеры буйынса диалекттан өҫтөн тора [57]. Башҡорт әҙәби теленең тарихы өсөн уның ҡиммәте ошонда тора ла.

1861 йыл «Ҡазан университетының ғилми яҙмалары»нда Н. Ильминский «Өс ул» тигән башҡорт әкиәтен (үҙе әйткәнсә, хикәйәһен) тәүге тапҡыр рус хәрефтәре менән баҫып сығара. Был әкиәт уның тарафынан Ырымбурҙа «Ҡыпсаҡ ырыуынан булған грамоталы бер башҡорт ауыҙынан» яҙып алынған [58].

---

[57] Ишбердин Э. Ф. Рукописные и печатные словари XVIII—XIX веков как источник изучения истории башкирского языка // Письменные памятники Башкирии: (историко-филологические исследования). Уфа, 1982. 75-се бит.

[58] Ильминский Н. Вступительное чтение в курс турецко-татарского языка // Ученые записки Қазанского университета. Қазань, 1861. Қн. III. 58-се бит.

Н. Ильминский үҙенең хеҙмәтендә башҡорт теленә һәм уның ҡайһы бер һөйләштәренә хас тел үҙенсәлектәренә лә туҡталып киткән [59]. Түбәндә әкиәттең башы килтерелә:

*Бер падшаның үс улы бар ини, уланларына айта йуклагыз бул тунда, тушугузда ни кураһигиз. Уланлары килди атаһына иртан, улуһу айтты мин падша булдум, ти. Куб гаскар бирди, падша ҡылды. Уртансыһы мин игин сасиб байыҡтым тини; уга йуз киши бирди игин сасирга. Ҡесиһи угурлук билан байыҡтым ти. Ҡеси улун тукмаб шагардан кууб жибарди...*

Н. Ильминский «төрөк-татар теле» терминын шартлы һәм бик үк дөрөҫ түгел тип иҫәпләй. «Уны төрки тел тип атау яҡшыраҡ булыр ине, — тип яҙҙы ул, — сөнки ул төрки халыҡтарға ҡарай һәм көнсығыш халыҡтары уларҙы төрки халыҡ тип атай» [60]. Н. Ильминский терминологияһы буйынса «татар ул төрки сығышлы һәр бер сит кеше (инородец), өҫтәүенә ул мөхәммәт динен тота» [61].

Шулай итеп, XIX быуаттың тәүге яртыһындағы Урал — Волга буйы әҙәби теле үҙенең үҫешендә тәрән үҙгәрештәр кисерә башлай. Бер яҡтан, халыҡ һөйләү теле менән фольклор теленең даими йоғонтоһонда традицион яҙма әҙәби төрки теле йәшәүен дауам итә, икенсе яҡтан, М. Иванов, С. Күкләшев һәм М. Биксуриндарҙың ижади эшмәкәрлеге арҡаһында беренсе планға яҙыу ҡомартҡыһы сифатында фольклор һәм халыҡ һөйләү теле өлгөләре күсә. Әммә һуңғылары, үҙҙәренең үҙенсәлеген һаҡлаһа ла, әҙәби телде артабан демократлаштырыу өсөн заманында уңайлы ерлек хеҙмәтен үтәне.

*Икенсе глава*

## XIX БЫУАТТЫҢ ИКЕНСЕ ЯРТЫҺЫНДАҒЫ ЯҘМА ӘҘӘБИ ТЕЛ

XIX быуаттың 50-се йылдары аҙағына Россияла феодаль-крепостной ҡоролош яңы капиталистик етештереүсе көстәр менән иҫкергән феодаль етештереү мөнәсәбәттәренең көндән-көн үҫә барған ҡаршылығы арҡаһында тәрән социаль-экономик кризис кисерә. Илдә тыуа барған революцион ситуация батша хөкүмәтен «юғары»нан помещиктар файҙаһына крәҫтиән реформаһы үткәрергә мәжбүр итте. Россиялағы крәҫтиән реформаһынан һуң (1861 йыл), алтмыш йыл буйына хәрби сословиела тороп, кантон системаһында йәшәгән башҡорттарға ҡарата ла реформа сыға-

[59] Ильминский Н. Күрһәтелгән хеҙмәт. 58-се бит.
[60] Шунда уҡ. 9-сы бит.
[61] Шунда уҡ. 12-се бит.

рылды (1863 йыл). Ҡантон системаһы бөтөрөлгәндән һуң, башҡорттар Россияның башҡа халыҡтары менән бер рәттән ирекле ауыл халҡы булып йәшәргә хоҡуҡ алды.

Россияла крепостной хоҡуҡтың бөтөрөлөүе һәм Башҡортостанда хәрби-феодаль идараның юҡҡа сығыуы, халыҡҡа бер ниндәй еңел тормош килтермәһә лә, үҙенең социаль-экономик һәм ижтимағи-политик эҙемтәләре менән прогрессив әһәмиәткә эйә ине. Был үҙгәрештәр билдәле кимәлдә башҡорттар араһында капиталистик мөнәсәбәттәрҙең артабан үҫешенә булышлыҡ итте.

XIX быуаттың икенсе яртыһында регионда капиталистик мөнәсәбәттәрҙең урынлашыуы һәм патриархаль-феодаль мөнәсәбәттәрҙең тарҡалыуы башҡорт мәҙәниәтендә демократик йүнәлештең артабан үҫеүенә киң мөмкинлектәр асты. Прогрессив үҫеш был осорҙа бигерәк тә халыҡ мәғарифы өлкәһендә барҙы.

Үҫә барған татар һәм яңы барлыҡҡа килгән башҡорт буржуазияһын мәктәпкә реформа үткәреү һәм промышленность, сауҙа, мәғариф өсөн заман талабына яуап биргән кадрҙар әҙерләү мәсьәләһе ҡыҙыҡһындырҙы. Уларҙың тырышлығы менән дини-схоластик мәҙрәсәләр урынына шаҡтай киң яңы ысуллы мосолман мәктәптәре селтәре асылды.

XIX быуаттың һуңғы сирегендә Башҡортостанда бер-береһенә дошман булған ике ижтимағи ағым: йәҙитселек (жәдид — ғәрәп һүҙенән «яңы» мәғәнәһендә) һәм ҡәҙимселек (ҡәдим — ғәрәп һүҙенән «иҫке» мәғәнәһендә) барлыҡҡа килә. Йәҙитселек, Башҡортостан һәм Татарстан шарттарында ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы һәм үҙенсәлекле бер күренеш булараҡ, башта, буржуаз ижтимағи мөнәсәбәттәр бөтә халыҡ мәнфәғәтен күҙәткәндә, бөтә яҡлап демократик көстәрҙең ҡәҙимселеккә ҡаршы берләшеүенә булышлыҡ итте, артабан буржуазия, үҙ алдына ҡуйған билдәле маҡсатҡа ирешеп, үҙенең тар синфи мәнфәғәтен күҙәтеп, ситкә тайпылғас, йәҙитселектә ике ҡапма-ҡаршы ағым барлыҡҡа килде. Һөҙөмтәлә бер яҡта панисламизм һәм пантюркизм идеяларын ҡорал итеп алған һәм 1905—1907 йылғы буржуаз-демократик революция ваҡытында, бигерәк тә унан һуң реакция яғына ауышҡан үҫә барыусы буржуаз идеологтар, икенсе яҡта йәҙитселектең, күпселектә, революцион-демократик идеяларҙы актив ҡабул иткән демократик тармағы тороп ҡалды. Уларҙың тәүгеләрен элеккесә йәҙитселәр тип, ә һуңғыларын мәғрифәтселәр тип атанылар, шуның менән бергә реакцияға бәйләнгән бөтә нәмә йәҙитселәргә ҡалды, ә бөтә прогрессив күренештәр мәғрифәтселәр ҡаҙанышына әүерелде[1].

Шулай итеп, Башҡортостан һәм Татарстан шарттарында йәҙитселек XX быуат башына, 1905—1907 йылғы буржуаз-демократик революцияға тиклем, прогрессив хәрәкәт булып торҙо. Был осор башҡорт һәм татар йәҙитселәре, урындағы мосолман руханиҙарының көслө ҡаршылығына ҡарамаҫтан, яңы типтағы мәктәп һәм мәҙрәсәләр төҙөү өсөн ныҡ көрәштеләр. Ундай мәктәптәр бы-

---

[1] Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 69-сы бит.

уат аҙағына ысын көскә әйләнгәйне инде. Йәҙит мәктәптәрендә башҡорт һәм татарҙарға аңлайышлыраҡ төрки телендә яҙылған китаптар уҡытыла; дин тәғлимәтенән башҡа, математика, тарих, география, астрономия, тәбиғәт, рус теле һ. б. фәндәрҙән белем бирелә.

Башҡорт, татар һәм Рәсәйҙең башҡа халыҡтары араһында юғары класс йәҙит мәҙрәсәләре: Өфөлә — «Ғосмания», Ырымбурҙа — «Хөсәйениә», Троицкиҙа «Рәсүлиә» бигерәк нык популярлыҡ ҡаҙанды. Үҙҙәренең яңылыҡтары менән был яңы ысул мәктәптәре тулы мәғәнәһендә донъяуи мәктәп булып ҡала алмаһалар ҙа, Башҡортостанда практик белем биреү һәм мәғрифәтселекте таратыуҙа уларҙың урыны ҙур [2].

XIX быуаттың икенсе яртыһында Өфө һәм Ырымбур губерналарында рус-башҡорт мәктәптәре һәм мәктәп, мәҙрәсәләр эргәһендә рус кластары бик күпкә арта. Быуат аҙағына уларҙың һаны 116-ға етә һәм 1897 йылда уҙғарылған Россия империяһы халыҡтарының иҫәбен алыу буйынса башҡорттарҙың 17,5 проценты — төрки телендә, 0,58 проценты рус телендә белем ала [3]. Был мәктәптәрҙә рус теле, арифметика, матур яҙыу, хисап эштәре һәм дини тәғлимәт уҡытыла. Донъяуи мәктәп булараҡ, рус булмаған халыҡтар балалары уҡыған рус мәктәптәре башҡорт һәм татар халыҡтары араһында аң-белем таратыуҙа, бай рус культураһын үҙләштереүҙә билдәле урын тотто.

Алдынғы рус, ә уның аша донъя культураһы менән яҡынайыу ике яҡлы барҙы. Бер яҡтан, башҡорттарҙың тарихын, тормошкөнкүрешен, телен, психологияһын, культура һәм әҙәбиәт традицияларын өйрәнеүгә ҙур өлөшгө рус интеллигенцияһының прогрессив вәкилдәре — ғалимдар (Р. Г. Игнатьев, В. С. Юматов, М. В. Лоссиевский, С. Г. Рыбаков, А. Г. Бессонов һ. б.) һәм яҙыусылар (Л. Н. Толстой, М. Е. Салтыков-Щедрин, А. М. Горький, Д. Н. Мамин-Сибиряк, Г. И. Успенский, Н. В. Ремезов, Ф. Д. Нефедов, П. И. Добротворский, А. М. Федоров, Н. Г. Гарин-Михайловский, В. В. Брусянин, Н. А. Крашенинников һ. б.) индерҙе. Икенсе яҡтан, алдынғы рус мәҙәниәте менән башҡорттар үҙҙәре нык ҡыҙыҡһынды. Улар араһында бигерәк тә «башҡорт мәҙәниәте тарихына рус мәғарифын, рус ғилми фекерен туранан-тура үҙләштергән һәм, рус мәҙәниәте өлгөләренә ориентация тотоп, үҙ туған халҡына хеҙмәт итергә тырышҡан ғалим һәм шағир» [4] Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәм, рус мәҙәниәте йоғонтоһон «Россияла капиталистик формация раҫланыуынан тыуған яңы идеология, иң элек демократик рус ижтимағи фекере» аша ҡабул итеп, ялҡынлы шиғырҙарын яҙған шағир Мифтахетдин Аҡмулла айырылып тора.

---

[2] Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 72-се бит.

[3] Ҡарағыҙ: Очерки по истории Башкирской АССР. Т. 1. Ч. 2. 263-сө бит; Каримов К. К. Наука Башкирии в строительстве социализма. Уфа, 1986. 12-се бит.

[4] Харисов Ә. И. Күрһәтелгән хеҙмәт, башҡортса баҫмаһы. 330-сы бит.

## *1. Мәғрифәтселек әҙәбиәтенең теле*

XIX быуаттың икенсе яртыһында прогрессив халыҡ-демократик һәм реакцион-консерватив ҡараштарҙың бәрелешеүе һөҙөмтәһендә дини-дидактик суфыйсылыҡҡа ҡаршы реализмға нигеҙләнгән мәғрифәтселек әҙәбиәте үҫеп сыҡты. Башҡорт әҙәбиәте, башҡа туғандаш әҙәбиәттәр кеүек үк, тиҙләтелгән үҫеш юлын үтте.

Төрки яҙма әҙәби телендә төп үҙгәрештәр фәҡәт ошонда, мәғрифәтселек әҙәбиәтендә барҙы. Ҡайһы бер мәғрифәтселек әҫәрҙәрендә яҙма төрки теленең традицион грамматик формалары, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре ҡулланылыуға ҡарамаҫтан, был үҙгәрештәр традицион китап теле сараларынан ситләшеүҙә, Башҡортостан шарттарында башҡорт һәм татар халыҡтарының һөйләү телдәре элементтарын ҡулланыуға йүнәлеш алыуҙа күренде.

Халыҡсанлыҡ, сәсәнлек традицияһының яҙма традиция менән бер бөтөн булып үрелеүе бигерәк тә Мифтахетдин Аҡмулланың һәм Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың әҫәрҙәрендә айырыуса ныҡ үҫеш алды.

## *2. Башҡорт әҙәби теле тарихында М. Аҡмулланың урыны*

Революцияға тиклемге башҡорт яҙма әҙәби теленең демократлашыуы тәү тапҡыр Мифтахетдин Аҡмулланың (1831—1895) әҫәрҙәрендә асыҡ сағылыш тапты.

«XIX быуаттың икенсе яртыһындағы үҙенсәлекле мәғрифәтсе шағир Мифтахетдин Аҡмулланың поэзияһы, башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының бай поэтик һүҙ традициялары ерлегендә үҫеп сыҡты» [5], — тип дөрөҫ билдәләй Ә. Х. Вилданов.

М. Аҡмулланың поэтик мираҫын, лингвистик сығанаҡтар булараҡ, түбәндәгесә классификацияларға мөмкин:

1) шағирҙың башҡорт, ҡаҙаҡ һәм татар телдәренең һөйләү формаһында йәшәгән әҫәрҙәре;

2) шиғырҙарының ҡулъяҙмаларҙа (автографтар, ҡулъяҙма күсермәләр — варианттар) һаҡланыуы [6];

3) төрки, татар, ҡаҙаҡ, башҡорт телдәрендә баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәре [7].

Аҡмулланың ижадында мәдхиә, мәрҫиә, нәсихәт, шикәйәт, хитап, мәктүб, ғәзәл, үлән, ҡобайыр, әйтеш һәм йомаҡ кеүек жанр-

---

[5] Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 254-се бит.

[6] Ентеклерәк ҡарағыҙ: Шарипова З. Я. Краткое описание источников по истории башкирской литературы // Источниковедение башкирской филологии. Уфа, 1984. 42-се бит; Вильданов Г. Рукописи о Салавате Юлаеве и об Акмулле // Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 12, ед. хр. 234. 126—192-се биттәр; Вилданов Ә. Х. Аҡмулла мираҫынан ҡулъяҙма үрнәктәр // Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре. Өфө, 1979. 70—88-се биттәр.

[7] Ҡарағыҙ: Мифтахетдин Акмулла (1831—1895). Рекомендательный указатель литературы / Төҙөүсеһе Тимашева Ф. Ф. Уфа, 1981. 4-се бит.

ҙар ҙур урын алып тора. Шағир булараҡ, ул шиғырҙарын шул заман яҙма әҙәби телендә яҙған. Әммә уның яҙма теле XIX быуаттың беренсе яртыһында ижад иткән Т. Ялсығолов, Ә. Ҡарғалы, Һ. Салихов, Ш. Зәки кеүек суфый шағирҙар һәм яҙыусылар теленән ныҡ айырыла. Аҡмулланың шиғырҙарында, башҡорт әҙәби теле тарихында тәүгеләрҙән булып, иҫке нормалар менән ҡатнашҡан йәнле һөйләү теле элементтары тотороҡло ҡулланыла башлай. Был планда Аҡмулланың яҙма поэзияһының теле яҙма әҙәби телдең нормативлығына ҡаршы тормаған яңы һәм иҫке нормаларҙың бергә йәшәүе менән билдәләнә. Был — шағир ижадының бер яғы. Аҡмулла ижадының икенсе яғы — әҫәрҙәренең күбеһен, сәсән һәм аҡын булараҡ, башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәрендә импровизациялауында. Һәм был һыҙат күпселектә телдән телгә һөйләнеп йөрөтөлгән фольклор менән яҙма әҙәби тел стихияларының нисбәтенә һәм үҙ-ара йоғонто яһашыуына, шағир ижадының үҙенсәлекле теле формалашыуына ныҡ тәьҫир итте. Аҡмулла, Риза Фәхретдинов һөйләүе буйынса, башҡорт телен ҡаҙаҡ теле менән ҡатнаштырып, башҡорт һүҙҙәрен ҡаҙаҡҡа тарттырып һөйләр булған. Әммә унда был бик тәбиғи, «шулай булырға тейеш» кеүек килеп сыҡҡан [8].

Сығанаҡтарҙы өйрәнеү аспектында башҡорт әҙәби теле тарихы өсөн шағирҙың ҡулъяҙма һәм революцияға тиклемге иҫке баҫма формаларында һаҡланған әҫәрҙәре бигерәк тә мөһим урын тота. Уларҙа тикшерелгән осорға хас иҫке әҙәби тел нормалары бигерәк тә ныҡ һаҡланған.

«Дамелла Шиһаб әд-дин хәҙрәтнең мәрҫиәсе» әҫәре, мәҫәлән, мәдхиә жанры талаптарына яуап биргән юғары патетик китап стиле менән яҙылған. Аҡмулла уны башта, ысынлап та, мәдхиә, маҡтау шиғыры итеп яҙған һәм Ш. Мәрйәниҙең үҙенә ебәрергә уйлаған. Әммә уның үлеүе тураһында хәбәр алғас, Аҡмулла мәдхиәһен мәрҫиә тип атарға мәжбүр булған, уға өҫтәп бер бүлекте ҡайғы белдереү формаһында яҙған [9]. Әҫәрҙең мәдхиә менән яҙылған төп өлөшө 11—11 үлсәме менән (ул хәҙер башҡорт әҙәбиәте ғилемендә «Аҡмулла шиғыры» тип аталып йөрөй) [10], ә мәрҫиә өлөшө һигеҙ ижекле үлсәм менән яҙылған. Аҡмулла мәрҫиәһенең теле шаҡтай сыбар. Унда юғары стиль яҙмаларына хас ғәрәп элементтары күп. Ҡайһы бер ғәрәп һүҙҙәре *ҡыл-, бул-, ит-* төрки ярҙамсы ҡылымдары менән бәйләнешкә инә: *әғраз ҡыл-* «дошманлашыу», *тәхмил ҡыл-* «көсләп тағыу», *хамил бул-* «биләү, алып барыу», *табиғ бул-* «эйәреү», *хасыл ит-* «барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу» һ. б.[11]. Әҫәрҙә шулай уҡ бөтөн ғәрәп һүҙбәйләнештәре һәм фразалары ла бирелә: *мәғани жәзаһир* «аҡыл, аң гәүһәрҙә-

[8] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 25/2.

[9] Шура. 1912. № 14. 431-се бит (ғәрәп яҙыуында).

[10] Ҡарағыҙ: Әхмәтйәнов К. Ә. Әҙәбиәт теорияһы. Өфө, 1971. 243-сө бит.

[11] Миҫалдар бында һәм артабан Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Ҡулъяҙмалар фондында № 8—а47 шифры менән һаҡланған ҡулъяҙманан алынды.

ре», *әнһарыл хәҡаиҡ* «хәҡиҡәт йылғаһы», *иннәма йахшийа алла-һе* «әгәр алланан ҡурҡһа» һ. б. Күп ғәрәп һүҙҙәре осраҡлы рәүештә түгел, ә аңлы рәүештә шиғыр юлдарының яңғырашын матурлау, әҫәрҙең эске ритмикаһының көйләнәгенә ирешеү өсөн ҡулланылған:

Эшеңез мөзәййәндүр вәһмәңездә,
Сүзеңез мөбәййәндүр зәғмеңездә.

«Эшегеҙ биҙәлгәндер хыялығыҙҙа,
Һүҙегеҙ раҫланғандыр уйығыҙҙа».

Йәки:

Әдүийә хамил булмас бәғзе мәриз,
Нәсихәт ҡабил булмас фәззе ғәлиз.

«Дарыуҙы күтәрмәҫ бәғзе ауырыу,
Нәсихәт ҡабул ҡылмаҫ тупаҫ әҙәм».

Мәрҫиәлә фарсы һүҙҙәре сағыштырмаса һирәк осрай: *сәрдар* «ғәскәр башы», *дәриға* «аяныс, ҡыҙғаныс», *шәһбаз* «ыласын, ҡыйыу», *дәрд* «ауырыу», *джода* «айырылған», *пиш* «авангард», *зәр* «алтын», *зар* «көсһөҙ», *дидар* «йөҙ, бит, сырай» һ. б.

Ғәрәп, фарсы һүҙҙәренең бер өлөшө төрки ялғауҙары менән бирелгән: *сәтүәтнең* «ҡыйыуҙың», *ғаләмдин* «ғәләмдән, йәмғиәттән», *нәджескә* «әшәкегә, бысраҡҡа», *итлаҡта* «азатлыҡта, иректә», *хасидсыз* «көнсөллөкһөҙ», *ғатасына* «бүләгенә», *әхбарим* «хәбәрем», *таснифлары* «яҙыуҙары, яҙмалары» һ. б.

Мәрҫиәлә шулай уҡ төрки китап һүҙҙәре (*йарыҡ, төрлөк, бән, мән, ҡанча, нә* һ. б.) һәм морфологик күрһәткестәр (*-дын//-дин, -а//-ә* аффикслы килеш формалары, *ул-* (бул-) *ҡылымы, -ың /-ең* бойороҡ һөйкәлеше ялғауы, *-мағa//-мәгә* инфинитив ялғауы) ҡулланылған.

Шул уҡ ваҡытта ул заман китап телендә яҙылған мәрҫиәлә шағирға туған тел булған башҡорт халыҡ һөйләү теленә хас күп һүҙҙәр һәм фразеологизмдар ҙа бар: *шоңҡар, толпар, йылҡы, ҡашҡа, бәйге, эшем таҡыр* (буш эштәр), *арйаҡ, ҡырын, күргәз-* (күрһәт-), *анау-мынау, аланда-* (алаңла-), *арыҡ бүре, ҡырын-йарын йөрөү, ҡурайы килешкәндә көйләй торған, турғайның тозағына лачин төшмәй, һәр ҡош очуб лачин булмай* һ. б.

Фольклор теле үҙенсәлектәре, тапҡыр һүҙҙәр һәм афоризмдар был әҫәрҙә лә урын алған:

Йахшыны сүккән илә аты китмәс,
Йаман сүзнең күңелдән даты китмәс.
Саф алтунны нәжескә буйау илән
Нәжес китәр, алтунның заты китмәс.

«Дамелла Шиһаб әд-дин хәҙрәтнең мәрҫиәсе» әҫәренең телендә Аҡмулла һөйләү теле китап теле традицияларының гармоник яңғырашына ирешә. Бында беренсе традиция төп, хәл иткес урын тотһа, икенсеһе әҫәр стиленә күтәренке пафос бирә.

Халыҡ һөйләү теле менән фольклор теленең байлығы Аҡмулланың башҡа әҫәрҙәрендә лә киң урын ала. Был йәһәттән «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғыры айырылып тора:

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк.
Илтифат ит, уҡыуҙалыр шәрәфәттәр,
Яһиллектән килә ятыр ҙур афәттәр.
Уҡығандар күктә осар, һыуҙа йөҙәр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, кирамәттәр...[12]

Башҡорт телендә таралған шиғырҙар йөкмәткеһе яғынан да, формаһы һәм теле яғынан да башҡорт халыҡ шиғыры — ҡобайырҙы хәтерләтә. Уларҙың һәр юлы тиерлек халыҡтың хикмәтле һүҙҙәре — әйтемдәрҙән тора. Шундайҙарға, мәҫәлән, «Өлгөр һүҙ», «Бәхет», «Тиһеңме?», «Аттың ниһен маҡтайһың?», «Йырау» һ. б. шиғырҙары инә [13].

Аҡмулланың революцияға тиклем донъя күргән китаптары [14] татар баҫмаларында татар теле йоғонтоһонда бирелһә лә, «уларҙа, ҡаҙаҡ һәм башҡорт фольклорындағы традицион образдарҙы әйтеп тормаҫтан, айырым башҡорт һәм ҡаҙаҡ һүҙҙәре, һүҙбәйләнештәре, идиоматик әйтемдәре һәм сағыштырыуҙары йыш осрай» [15]. Быны күрһәтер өсөн ҡайһы бер башҡорт мәҡәлдәре һәм әйтемдәре өлгөләрен Аҡмулла әҫәрҙәрендә бирелгәндәр менән сағыштырып ҡарайыҡ:

| Башҡорт әйтемдәре: | Аҡмулланың «Өлгөр һүҙ» шиғырынан: |
|---|---|
| *Ваҡ һибелгән йондоҙҙан балҡып торған ай артыҡ.* | *Асманда тыуған йондоҙҙан* |
| | *яҡтырып торған ай артыҡ.* |
| *Буш һимергән айғырҙан ярһып торған тай артыҡ.* | *Жабы тыуған эш атынан* |
| | *Ҡаҙанат тыуған тай артыҡ...* |
| *Дөйә һуйған йыйындан тәкә һуйған туй артыҡ.* | *Дөйә һуйған йыйындан* |
| | *туҡлыҡ һуйған туй артыҡ...* |

---

[12] Алда күрһәтелгән архив. Ф. 3, оп. 25/2.

[13] Ҡарағыҙ: Аҡмулла. Шиғырҙар / Төҙөүсеһе Ә. Х. Вилданов. Өфө, 1981. 107—114-се, 122-се, 168-се биттәр.

[14] Аҡмулла М. Дамелла Шиһаб әд-дин хәҙрәтнең мәрҫиәсе (ғәрәп яҙыуында). Ҡазан, 1892; шул уҡ: Аҡмелла әфәнденең иншад итдеки манзумат-илә башҡа бер ҡач мәжмуғадыр (ғәрәп яҙыуында). Ҡазан; И. Н. Харитонов литотипографияһы, 1904; шул уҡ: Аҡмелланың Шиһаб әд-дин Мәржәни мәрҫиәсе вә башҡа шигырлары (ғәрәп яҙыуында). Ҡазан, Шәрәф электро-типографияһы, 1907.

[15] Вильданов А. Х., Ҡунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 249-сы бит.

Аҡмулла поэзияһының теле һүрәтләү сараларының маҡсатҡа йүнәлешле рәүештә һайлап алыныуы менән айырылып тора. Билдәле идея-эстетик маҡсатҡа ирешер өсөн шағир дөйөм халыҡ һәм китап яҙма теле мөмкинлектәрен төрлөсә һәм киң файҙалана, һөҙөмтәлә айырым телмәр типтары барлыҡҡа килә.

Әйтеп кителеүенсә, юғары-патетик стилдә Аҡмулла татар реформаторы Шиһабетдин Мәржәниҙе маҡтағанда, данлағанда ҡуллана. Ул ҡараңғыла яҡтыртып торған *фанусҡа* (фонарға), яҡтылыҡ һәм йылылыҡ сығанағы булған *Ҡояшҡа,* бөтә юлсыларға юл күрһәткән *Тимерғаҙыҡ йондоҙона* һ. б. тиңләп һүрәтләнә:

Борадәр, сезгә үтенәм, сәләм йазуб,
Күзүң сал: Мәрджани ул — Тимер ҡазуҡ!
Булмаса ҡибла табмай адашурсын,
Ҡараңғыда жүн белмәй, йулдан азуб.
Ҡараңғыда фанусны ҡабызған ул,
Ҡайнар сөткә сары майны тамызған ул.

Юғары-патетик стилгә түбәнһетеү-кәмһетеү стиле ҡапма-ҡаршы тора. Уны шағир үҙен кәмһетеү маҡсатында ҡуллана. Шағирҙың «Диуанамын» тигән шиғыры тулыһынса үҙен-үҙе шелтәләүгә ҡоролған. Үҙенән-үҙе ҡәнәғәт булмаған шағир үҙен *«диуанамын» («башым хайран, үзем вайран — диуанамын»), «әфлисун араһында бер кишер», «маҡтансыҡ» («төс-башыңа ғорурланған син бер ҡышыр»)* тип атай.

Сарказм һәм ирония Аҡмулла поэзияһында айырым урын тотҡан сатирик стиль нигеҙендә ята. Ғ. Б. Хөсәйенов раҫлауынса, «Аҡмулланың сатираһы башҡорт поэзияһында яңы сифатлы күренеш булды. Байҙар менән муллалар, батша түрәләре уның әсе һүҙҙәренән, эпиграммаларынан уттан ҡурҡҡан һымаҡ ҡурҡҡан»[16]. Аҡмулла-сатирик ислам хеҙмәтселәренән һәм байҙарҙан әсе көлә: уларҙы мәңге батҡаҡта сумған сусҡа, эренле яраға һырыған себен, тимерлектәге күрек һ. б. менән сағыштыра. Үҙенең маҡсатына ирешер өсөн ул торғаны менән зәһәр мыҫҡыллы, саркастик характерҙағы төрлө эпитеттар, сағыштырыуҙар, метафора, метонимиялар һәм башҡа троптар, әйтемдәр ҡуллана.

Мәҫәлән:

Йаҡын барсаң, тимерче күрегендәй,
Ул сине керләүгә бар, паҡлауға йуҡ.
Тийүб китсәң, ҡара май чиләгендәй,
Ҡарайтуб датлауға бар, аҡлауға йуҡ [17].

Аҡмулла ижадында эпистоляр стиль дә үҙенсәлекле сағылыш таба. Уның шиғри хаттары (мәктүбтәре), айырым шәхестәргә

---

[16] Хусаинов Г. Б. Роль и место творчества Акмуллы в истории башкирской литературы и литературы других народов // Акмулле — 150 лет. Уфа, 1984. 37-се бит.

[17] Аҡмелла әфәнденең иншад итдеки манзуматы... 18-се бит.

арналған булһалар ҙа, киң ҡатлам халыҡҡа йүнәлтелгән, шуға ла айырым кешеләрҙә юғалып ҡалмайынса быуындан быуынға тапшырыла барған [18]. Уларға шартлы рәүештә аталған «Мәканем минең — аты зиндан», «Мәҙкүр Иҫәнгилде, Батучлар улан Ҡарағыз таифәсенә хассә йаздыҡы», «Нурғәли хәзрәткә ачыҡ хат», «Аҡмулланың әткәсенә йазмыш мәктүбе» шиғри хаттарҙы индерергә мөмкин. Мөрәжәғәт иткән кешегә бында «һин» йәки «һеҙ» тип һүҙ ҡушыла, башы традицион сәләмләү менән килә. Мәҫәлән:

Әссәләмәғәләйкүм асыл затҡа,
Майданда узуб килгән арғымаҡҡа.
Лайыҡдаб дәрәжәгә йаздым сәләм,
Төбөндә аса жүйрүк булмасаҡ да... [19]

Йәки:

Хат йебәрдүк Оренбург ҡаласындан,
Ҡаласында гөләмәләр арасындан.
Хөрмәтлү әткәйемә йүз мең сәләм
Күңеле сынуҡ аҡҡош-шоңҡар баласындан... [20]

Аҡмулланың эпистоляр стиле телдең башҡа төр стилдәренә тығыҙ бәйләнгән. «Аҡмелла әфәнденең Солтан Ғәбидулла бин Жәһангир хан жәнәбләренә иштикә вә ғаризасы» тигән хат, мәҫәлән, бер үк ваҡытта, юғары патетик стилдәге тел сараларын ҡаҙаҡлаштырып ҡулланып, ҙур дәрәжәле кешенең кешелек сифатын һәм күрһәткән хеҙмәтен төрлө эпитеттар, поэтик фигуралар менән маҡтаған ода һәм түбәнһетеү-кәмһетеү, ялбарыу стиль алымдары менән үҙен-үҙе аяуһыҙ тәнҡит аҫтына алған шикәйәт булып яңғырай:

Сарҡытдан Аҡмулланы буш ҡуймаңыз, —
Тасады сездең дәүләт ҡазаныңыз.
«Ҡалған аштан Аҡмулланы буш ҡуймағыҙ, —
Таша бит һеҙҙең дәүләт ҡаҙанығыҙ».

Йәки:

Жәһәннәм харам булсын этеңезгә,
Килмәсен дошманларың битеңезгә.
Ғинәйәт өстәлеңдән бер умыртҡа,
Ташласаң ни булады этеңезгә? [21]

«Йәһәннәм харам булһын этегеҙгә,
Килмәһен дошмандарың битегеҙгә.
Ҡунаҡсыллыҡ өҫтәлеңдән бер йомортҡа
Ташлаһаң ни була мин — этегеҙгә?»

---

[18] Ахмадиев В. И. Эпистолярная поэзия Акмуллы // Акмулле — 150 лет. Уфа, 1984. 60—67-се биттәр.

[19] Аҡмелла әфәнденең иншад итдеки манзуматы... 16-сы бит.

[20] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Ҡулъяҙмалар фонды. № 2-а1 шифрлы ҡулъяҙма. 29-сы бит.

[21] Аҡмелла әфәнденең иншад итдеки манзуматы... 17-се бит.

Аҡмулланың күпселек әҫәре классик робағи формаһында яҙылған, әммә башҡа поэтик формаларҙы ҡулланып яҙған әҫәрҙәре лә бар. Аҡмулла файҙаланған поэтик саралар араһында музыкаль яңғырашлы ритмик шиғыр төҙөлөшө ҙур урын тота. Уның поэзияһы баҙыҡ көйлө булыуы менән айырыла, ә был үҙ нәүбәтендә ритмик һәм яңғырауыҡлы төҙөлөш, рифмалашыу системаһы, шиғырҙың эске структураһы менән тығыҙ бәйләнгән.

Мәҫәлән, «Хатимә» («Эпилог») исемле шиғырҙан бер өҙөктө төп нөсхәһендәгесә уҡып ҡарайыҡ:

Ғәйебене күз салма дустың,
ғисмәте мәнзур имәс,
Ғәйебе изһар улса улсын,
ғәйебе мазһар улмасын.
Мәғнәүи дустҡа мәҡамдә
иттихад мәшрут имәс,
Ҡалыбы әғйар улса улсын,
ҡәлебе әғйар улмасын.

Был шиғыр киҫәгендә юлдар ғына рифмалашып килеү етмәгән, икенсе юлдың башында һәм уртаһында үҙ-ара рифмалашып килгән тағы икешәр һүҙ бар (*ғәйебе изһар — ғәйебе мазһар, ҡалыбы әғйар — ҡәлебе әғйар*).

Аҡмулла йыш ҡына, телдәге омонимия күренештәрен оҫта файҙаланып, һүҙ уйнатыу-каламбур алымын ҡуллана:

Ҡәмселегем билдәле *ҡәләмемдән,*
Йүнсезлегем билдәле *кәләмемдән* (һөйләүемдән).
Йорто *Болғар* улса улсын,
Йортны *болғар* улмасын.

Шулай итеп, Аҡмулла үҙенең гүзәл һәм саф күңелле поэзияһы менән әҙәби телдең ни тиклем халыҡсан һәм күркәм, бай һәм тәьҫирле була алғанлығын күрһәтте. Ябайлыҡ, ихласлыҡ һәм һүҙ тапҡырлығы — шағирҙың төп принциптары бына ошолар. Аҡмулланың теле, быға тиклем булған яҙма әҙәби традицияның бөтә кәрәкле стилистик ҡаҙаныштарын үҙенә туплап һәм уларҙы халыҡ һөйләү теленең тасуири стилистик саралары менән бер бөтөн итеп ҡушып, поэтик оҫталыҡты яңы сифат дәрәжәһенә күтәрҙе. Аҡмулланың ижадында беҙ йәнле һөйләү теле һәм фольклор теленең яҙма әҙәби тел традицияһы менән үҙ-ара тәбиғи йоғонто яһашыуын күрәбеҙ. Башҡорт әҙәби теле тарихында Аҡмулланың төп әһәмиәте һәм хеҙмәте бына ошонда тора ла инде. Поэзияла милли әҙәби һүрәтләү өлгөләрен барлыҡҡа килтереү бәхете фәҡәт Аҡмулла өлөшөнә төштө, һуңынан XX быуат башы шағирҙары М. Ғафури, Ғ. Туҡай, Ш. Бабич һ. б. унан өйрәнде һәм ижад итте.

### *3. М. Өмөтбаев һәм уның башҡорт әҙәби теле тарихында тотҡан урыны*

М. Аҡмулла йәнле һөйләү теленең һүрәтләү сараларын төрки теленең актив элементтары менән поэзия өлкәһендә бергә бәйләһә, М. Өмөтбаев (1841—1907) бындай синтезды поэзияла ғына түгел, ә публицистикала, ғилми хеҙмәттәрендә һәм тәржемә эшендә лә тормошҡа ашырҙы. Башҡорт мәғрифәтсе яҙыусыһы, ғалимы һәм йәмәғәт эшмәкәре Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың күп яҡлы ижадында туған халҡы фольклоры көнсығыш һәм төрки классик әҙәбиәте, алдынғы рус һәм Көнбайыш Европа мәҙәниәте менән тығыҙ бәйләнештә сағылдырыла. Был факт уның поэтик, публицистик һәм ғилми телендә йәнле халыҡ телендәге һүҙҙәр, тотороҡло һүҙбәйләнештәр һәм бөтөн бер синтаксик конструкцияларҙың Көнсығыш һәм рус яҙма әҙәби традициялары элементтары менән гармоник ҡушылыуында күренә.

М. Өмөтбаев ижадын тикшергән Ғ. С. Ҡунафин былай тип яҙҙы: «Бай башҡорт фольклоры, ниндәйҙер кимәлдә үҫкән яҙма әҙәбиәт, тыуып килгән башҡорт интеллигенцияһының прогрессив вәкилдәренең ижады М. Өмөтбаевтың донъяға ҡарашын формалаштырған ҡеүәтле сығанаҡтарҙың береһе булды. Оҙаҡ быуаттар буйы йәшәгән башҡорт культураһының ныҡлы традициялары булмаһа һәм, тәбиғи, уларға таянмаһа, М. Өмөтбаев үҙ халҡының талантлы мәҙәниәт һәм фән эшмәкәрҙәренең береһе булып китә алмаҫ ине»[22]. XIX быуаттың икенсе яртыһында йәшәгән мәғрифәтле башҡорттарҙың береһе булараҡ, ул иң төплө белем сығанағы булған, фәнгә һәм мәғрифәткә ҡыҙыҡһыныу уятҡан, Рәсәйҙың бөтә халыҡтарына хөрмәт тойғоһо тәрбиәләгән алдынғы рус әҙәбиәтенә, прогрессив рус йәмәғәтселеге фекеренә мөрәжәғәт итә[23].

М. Өмөтбаев беҙгә ифрат төрлө яҡлы әҙәби һәм ғилми мираҫ ҡалдырҙы[24]. Уның ижадында поэзия, публицистика, фән һәм тәржемә өлкәләренә ҡараған әҫәрҙәр бик күп. М. Өмөтбаевтың поэтик ижады шаҡтай ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы. Ул, бер яҡтан, мәғрифәтселек, демократизм идеялары менән, икенсе яҡтан, дини әхләҡ һәм монархизм рухы менән һуғарылған. Әммә М. Өмөтбаев суфый шағирҙар кеүек дин фанатигы булманы. Уның ижады, ҡайһы бер шиғырҙарында мәғрифәт һәм тәрбиә мәсьәләләре дини ҡараш менән тығыҙ аралашыуына ҡарамаҫтан, реаль ысынбарлыҡты, тормош хәҡиҡәтен сағылдырҙы.

---

[22] Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 117-се бит.
[23] Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 118-се бит.
[24] Ентеклерәк ҡарағыҙ: Йәдкәр / Мөхәмматсәлим бине Ишмөхоммәт Өмөдбаевның тәснифләрендән. Ҡазандағы Б. Л. Домбровский типографияһы, 1897. 122-се бит (ғәрәп яҙыуында); шул уҡ: Татар нәхүсенең мохтасары. Ҡазан: Б. Л. Домбровский типографияһы, 1901. 52-се бит (ғәрәп яҙыуында); Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 12, ед. хр. 84. 386-сы бит; ед. хр. 85. 40-сы бит; ед. хр. 86. 213-сө бит; ед. хр. 87. 157-се бит; ед. хр. 88. 159-сы бит; ед. хр. 88а. 135-се бит.

Көнсығыш классик поэзияһының М. Өмөтбаев ижадына йоғонтоһо структур аспектта асыҡ күренә. Уның әҫәрҙәренең күпселеге мәснәүи һәм робағи стилендә яҙылған. Боронғо төрки телле поэзияның традицион тел саралары, шул иҫәптән ғәрәп һәм фарсы ғосманлы төрөк һүҙҙәре, мәдхиә жанры нигеҙендә яҙылған патетик шиғырҙарында йышыраҡ осрай. «Түбән ябай һөйләү телен» һәм диалекттарҙы һанламаған «аҫыл» телдә, мәҫәлән, «Бижәнәб остаҙ Мирсалих ибн Мирсәлим генерал Биксурин» шиғыры яҙылған:

Чү ғилем бустанида сән йек сәрәфраз,
Шәфәғәтең фәшан ит безләрә раз.
Заһи кем алды бәһрә, булды чәһрә,
Бәнем эшем би бәһрә, китде дәһрә [25].

«Ғилем баҡсаһында һин иң өҫтөн,
Шәфҡәтең күрһәт, ас беҙгә серен.
Кем һинән өлөш алды, ул йөҙөн асты,
Минең эшем файҙаһыҙ, ғүмерем бушҡа үтте».

Рус әҙәбиәтенең алдынғы реалистик традициялары М. Өмөтбаев ижадында йөкмәтке аспектында, йәғни поэтик образдарҙы, лирик геройҙы, уның эске донъяһын, рухи кисерештәрен, тәбиғәт күренештәрен һ. б. дөрөҫ һүрәтләүҙә, сағыла. Маҡсатына ирешер өсөн, ул халыҡ һөйләү теленән алынған ябай һүҙ, терминдарҙы, конкрет йәбешеп торған аныҡлаусылар һәм сағыштырыуҙарҙы, ҡыҫҡа фразаларҙы оҫта файҙалана, шунлыҡтан уның стиле ҡыҫҡа, ябай образлы һәм аныҡ әйтелешле. Ышандырырлыҡ һүҙҙәр һәм сағыштырыуҙар менән туған тәбиғәттең иҫ киткес урындарын һүрәтләгән «Йомран дәүраны» шиғыры шундайҙар рәтенә инә: *«Аҡ иделнең буйы, дирләр, безүмдә дә бар гүзәл йерләр»*, *«йаталар миҫле аҡ ҡалбаҡ»* булып күлдәр, яҙ көндәре *«тотар йаз, бикләмеш йулын»*, *«лачын уйнар йасы болон, урай-урай тирәкләрдән»* һ. б. Шуның менән бер рәттән мөһәбәт урманды вәхшиҙәрсә ҡырҡыуҙы ҡаршы ҡуйыу алымы менән «тешһеҙ ауыҙ»ға сағыштыра:

Әгәр күл булса ағачсыз,
Титәккә ил ҡала башсыз.
Йә булса ағзың тешсез,
Ни файда шул дудаҡлардан!
(Йәдкәр, 13-сө бит.)

«Әгәр күл булһа ағасһыҙ,
Шулай ил ҡала башһыҙ.
Йә булһа ауыҙың тешһеҙ,
Ни файҙа шул ирендәрҙән!»

---

[25] Өмөтбаев М. Йәдкәр. 2-се бит.

Тормош хәкикәтенә, факттарҙың документаллегенә ынтылыш бигерәк тә тарихи-этнографик йөкмәткеле һәм автобиографик элементтар индерелгән әҫәрҙәргә хас. Уларҙа телдең тасуирлаусы характеры өҫтөнлөк итә, ә образлы сағылышы сикләнә. Был «Шикайәт» шиғырында ла күренә:

Айаҡлы мал тамам бөтә йазды,
Ағачлар аҡды, Әчтрханға узды.
Аның артынча очды ҡорт һәм әри,
Йуҡ имде тағ кебе ағач тауары.
Бу башҡорт урманы тамам кисүлгәч,
Сәфинәләр тауардин һәм өзүлгәч,
Фекерләб табдылар һәм башҡа шәйне:
Ҡара тал ҡайырысы, ҡош һәм күкәйне.

(Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 12, ед. хр. 85. 7-се бит.)

Ғәҙәттәге һанап сығыуға һәм күргәндә һөйләүгә ҡоролған шиғырҙарҙа һөйләм эсендә хәл әйтемдәре өҫтөнлөк итә. «Дәр сәфәр Ҡырым» («Ҡырымға сәфәр») шиғырынан өҙөк килтерәбеҙ:

Табуб форсат әмирләрдән,
Йөрүб һәнгамә йерләрдән,
Йетешдек шәһәр Аҡйарға —
Севастополь дийәнләрдән.
Ғәүдәт итүб (кире ҡайтып) ул Аҡйардан,
Ҡилүб Баҡчасарай андан,
Сарайлар һәм неча фантан
Тамаша әйләдек бер ан (күпмелер).

(Йәдкәр, 90-сы бит.)

Тарихи-этнографик йөкмәткеле әҫәрҙәрендә М. Өмөтбаев башҡорт халыҡ һөйләү теленә хас күп һүҙҙәр һәм әйтемдәр ҡуллана. Быға миҫал итеп башҡорттарҙың туй йолаһынан алынған күп мәғлүмәт ингән «Үткән заманда башҡорд ҡызларының озатылыуы» тигән шиғырҙы алырға мөмкин (Йәдкәр, 99—102-се биттәр). Әҙәби телде демократлаштырыуҙы дауам итеп, шағир унда фәҡәт башҡорт дөйөм халыҡ теле элементтарына һәм хикмәтле һүҙҙәренә мөрәжәғәт итә: *йолалаб ултыра, килен булған кеше, боронораҡ, элегерәк, ҡайтарыб биреү, килендәш, күңелдәш. лачиның, шоңҡарың очды, ҡулың буш* һ. б. Текста шулай уҡ ябай һөйләү теле һүҙҙәрен һәм фразаларын осратырға мөмкин: *тауыш-ғауға күтәреб, һай дийәләр; әгәр дә ҡайтаруб бирмәсәңез сез, белермез ни ҡылурға сезгә дә без; төшә ғауға.*

Шиғыр фольклор, этнография элементтарына бай. Әммә унда фольклор стиле оҡшатып ҡына алынмай, ә фольклор элементын әҙәби тел менән органик рәүештә ҡушып, яңынан ижади тыуҙырыла. Автор унда хатта фольклор тексынан (өләндән) яҙма әҙәби тел орфографияһы нормаһы менән өлгө килтерә:

Тәҡыйамның тайпасы,
Тәҡыйам алған ҡайсусы?
Тәҡыйамны бирүңез,
Исән үк ҡалсын илүңез.

«Үткән заманда башҡорд ҡызларының озатылыуы» исемле шиғырҙа китап теле элементтарынан иң йыш ҡулланылғаны — *-дын*//*-дин* килеш аффиксы ғына: *ғауғадин, ҡулдин, бу эшдин соң* һ. б.

Рус телендә иркен һөйләшкән М. Өмөтбаев туған телен рус һәм Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән һүҙ һәм терминдар менән байытыуға ҙур өлөш индерә. Тик бер «Үткән ғүмер, ҡалған хәтер» шиғырында ғына ла (Йәдкәр, 80—81-се биттәр) шағир рус йәки рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән егерменән артыҡ һүҙ ҡуллана: *старшина, кантон, начальник, пасон* (фасон), *һалдат, телеграф, пароход, холера, тиф, санитар, мастер, микроб, земство* һ. б.

Алдынғы рус публицистикаһының демократик һәм реалистик традициялары М. Өмөтбаевтың публицистик эшмәкәрлегенә йоғонто яһамай ҡала алманы. Ул хаҡлы рәүештә башҡорт милли публицистикаһын башлап ебәреүселәрҙең береһе итеп иҫәпләнә ала. М. Өмөтбаевтың публицистик ижады күп темалы булыуы менән айырылып тора. Был маҡсатына ирешер өсөн ул публицистиканың ҡыҫҡа хәбәр һәм телмәр, хат һәм мәҡәлә, фельетон һәм юл яҙмалары кеүек жанр төрҙәренә мөрәжәғәт итә. Уларҙың нигеҙендә ул ваҡыттағы яҙма тел орфографияһы нормаларында ҡулланылған йәнле һөйләү теле ята. Миҫал рәүешендә М. Өмөтбаевтың «Өршәк күпере» исемле ҙур булмаған мәҡәләһен тулыһынса төп нөсхәләгесә килтерәбеҙ: *«Зимства чыҡған йылдан башлаб, Оренбургски почтавай йулда Ҡамышлы* [*тигән*] *чуаш ауылында Өршәк дарйасына күперне һәм гатларны* (һаҙлыҡ йәки батҡыл урындарҙы үтеү өсөн ағастан яһалған нығытма) *йахшы итүб зимства йасатсун диб дәғүәләшдек. Мәғлүмдер, әүәлендә почтавай һәм прасилучный йуллар һәм күпер төзәтеү шаһанә һәм зимский налуг түләй торған крәстийән башҡорт һәм мишәр, тибтәр, чуаш вә ғәйре* (һәм башҡа) *йасаҡ түләй торған халыҡның зәммәсендә* (яуаплылығында) *иде. Шуның өчүн йасаҡ түләмәй торған дворянлар вә ғәйре түрәләр миңә: «Сез господин Умидбайыф натуральный павинустдән хәлас* (азат). *Йул эшләмәк ҡәдимдән крәстийән һәм ғауам* (ябай халыҡ) *зәммәсендә, анлар өчүн тырышма», — дип әйтүб ҡарадылар. Без жауаб бирә килдек: Ғауам күперне бик начар йасай. Дәхи тегермәнләрнең тибкүне Атаевка тауындан йата, ҡом, балчыҡ илән тотуб булмай», — див йаздан көзгә тикрү* (тиклем) *халыҡны Өршәк туғайына йул төзәтүргә өч-дүрт кәррә* (тапҡыр) *чығаралар иде. Бу йулны Аҡ идел буйындағы ике ауыл Йомран, Сәвәләй, Ҡолош, Ҡабаҡ, Илчекәй, Салжуд, Ҡыйышҡы, ике тимкә ауыллары Сәйхүн — Ҡамышлы һәм Николаевка ауыллары эшләй иде. Без фәҡир туғыз йыл гласный булуб йөрөгәндә дәғүәләшүб, Өршәк күперен зимства аҡча-*

*сына ташдан ғатлар илән мәхкәм* (сыҙамлы) *ҡылуб йасарға дәлаләт итдек* (күндерҙек).

*Ғауамға тырышуб йөргән өчүн çауаблар насиб әйләгәй иде. Хәлҡә* (бирәү) *белмәсә дә халыҡ белә. Соңра килгәнләр әйтүрләр: «Спасибо бундай йул һәм күперләр йасаған кешеләргә! — диб. Әммә кемләрнең тырышуб йөрөүе илән йасалғаны онотолор. Бундин соңра Уфа губернасында башҡа йерләрдә дә зур күпер вә ғатларны зимстваға күтәртдиләр. Йере куб помещиклар һәм купислар йергә налуг күп була диб, йул эшләүне һаман ғауамға ҡалсун диб тырышдылар. Без ғауам ходатайы буныңа даимән* (һәр саҡ) *ҡаршы улдыҡ»* [26].

Күренеүенсә, мәҡәләлә автор халыҡтың ябай һөйләү теле үрнәктәрен, телмәр төҙөлөшөн һәм башҡорттар өсөн «үҙ теле» булып киткән рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе киң ҡуллана.

М. Өмөтбаевтың юл яҙмалары шулай уҡ башҡорттар өсөн ныҡ аңлайышлы һәм еңел телдә яҙылған. Улар теле яғынан да, һүрәтләү саралары яғынан да ул ваҡытта төрки халыҡтар араһында ҡулъяҙма һәм баçма рәүештә ныҡ таралған хажға барыусылар яҙмаларынан ҡырҡа айырыла. М. Өмөтбаев Мәскәүҙәге «Пушкалар батшаһы»н бына нисек һүрәтләй: *Дворесның шимал* (төньяҡ) *тарафында Сар-пушка дигән зур туб бар. Тубның бейүклеге, йәғни ултырған урыны йердән ике аршин да ун ике виршок. Минем башымдан бер айаҡ йуҡару иде. Тубның алдында, йердә дүрт йәдрәсе бар. Өч йәдрәне ҡолачладум: бер ҡолач йәдрәнең йартысындан аз ғына узды. Һәр ҡайусының өч бармаҡ сыйушлы тишүкләре бар...»* (Йәдкәр, 17-се бит.)

Бында автор башҡорттар араһында таралған үлсәм берәмектәрен, уларҙың фекерләү формаһына тап килгән һүҙ һәм әйтемдәрҙе оçта файҙалана.

XIX быуат аҙаҡтарында һәм XX быуат башында М. Өмөтбаев тәржемәсе булараҡ ныҡ танылды. Рус художестволы әҙәбиәтенән М. Өмөтбаев башҡорт һәм татар халыҡтарына яҡын телгә А. С. Пушкиндың «Романс», «Наслаждение», «Делибаш» тигән шиғырҙарын һәм «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһын тәржемә итте [27].

М. Өмөтбаевтың тәржемәләре татар телендә баçылһа ла, уларҙа башҡорт теле һәм фольклорының йоғонтоһо сағыла. Пушкиндың 8—7 һәм 9—8 үлсәмле шиғырҙары уларҙа башҡорт ҡобайыры һәм оҙон көйҙәре стилендә тәржемә ителгән.

Поэзия, публицистика һәм художестволы тәржемә стилен үçтереү мәсьәләләре менән бер рәттән М. Өмөтбаев туған теленең ғилми терминологияһын булдырыуға һәм ғилми стилен формалаштырыуға ҙур көс һалды. Уның тарихи-этнографик яҙмалары, мәçәлән, башҡорт һәм татар тарихи әҙәбиәте өсөн традицион булған генеалогик һәм хронологик яҙма форманан ғилми һәм худо-

---

[26] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 12/85. 17-се бит.

[27] А. С. Пушкинның «Бакчасарай чишмәсе» / Руссанан тәржемә М. Өмөтбаевтыҡы. Ҡазан, 1901 (ғәрәп яҙыуында).

жестволы башланғыстарҙың тәбиғи берләшеүе менән тамырынан айырыла. Улар күп төрлө сығанаҡтарға, әҙәби-фольклор стиле сараларына таянып яҙылған. Был яҙмаларҙа диалогтар ҙа, монологтар ҙа, тарихи хикәйә, мәҡәл, әйтем кеүек айырым фольклор өлгөләре лә осрай. Тап бына ошо «яҙма»лар аҙаҡ башҡорт профессиональ прозаһы теленең формалашыуында ҙур урын тотто.

М. Өмөтбаев филология өлкәһендә бигерәк тә уңышлы эшләне. Фольклорист булараҡ, ул башҡорт эпик әҫәрҙәренең, хикәйәт, мәҡәл һәм әйтемдәренең йәшәү формаларын, уларҙың барлыҡҡа килеү һәм үҫеү тарихын өйрәнә[28]. Эпик әҫәрҙәрҙе ул өләң тип атай һәм был терминдың ҡырғыҙҙарҙа йөрөгән мәғәнәһенән айырмаһын күрһәтә. «Ҡырғыҙҙарҙа (ҡаҙаҡтарҙа — И. Ғ.) өләң ошо көндә лә беренсе урында тора, әммә үҙҙәре ябай йырҙарҙы өләңдән айырмай, ә бөтөнөһөн бергә өләндәргә индерә. Башҡорттарҙа иһә өләң тарихи хикәйә мәғәнәһендә ҡулланыла, йәғни, мәҫәлән, «Игорь полкы тураһында һүҙ» эпосы һымаҡ. Йыр башҡорттарҙа айырым үҙ исеме менән йөрөй» [29].

Әҙәбиәт белгесе булараҡ, М. Өмөтбаев башҡорт халҡының ныҡ үҫешкән телдән һөйләнеп йөрөгән әҙәбиәттә генә түгел, ә «Сәйфелмөлөк», «Таһир һәм Зөһрә», «Йософ һәм Зөләйха» кеүек дөйөм төрки яҙма ҡомартҡыларына ла иғтибар итте. «Йософ һәм Зөләйха» тураһында ул былай тип яҙҙы: «Башҡорттар айырыуса ҡыҙыҡһыныу менән оҫта шағир тарафынан төрки һөйләшендә яҙылған «Йософ һәм Зөләйха» шиғри романын уҡыйҙар» [30].

М. Өмөтбаев тел белеме өлкәһенә лә ҙур өлөш индерҙе. Ул татар-башҡорт донъяһының төрлө төркөмдәре араһында әҙәби тел тураһында киҫкен көрәш барған саҡта үҙенең «Татар нәхүсенең мохтасары» (Ҡазан, 1901) тигән китабын яҙҙы. Ул заманда берәүҙәр (Ә. Мәҡсүтов, М. Бигиев, И. Гаспринский) Рәсәйҙең бөтә халыҡтары өсөн әҙәби тел итеп төрөк телен ҡабул итеүҙе талап итте, икенселәр (ислам дине башлыҡтары) — ғәрәп телен, өсөнсөләре (пантюркизм яҡлылар һәм пуристар) татар милли телен алға һөрҙө. М. Өмөтбаев, яҙма әҙәби телдең дөйөм халыҡ һөйләү теле менән яҡынайыу идеяһын яҡлап, был ағымдарҙың бөтәһенә ҡаршы сыҡты.

М. Өмөтбаевтың грамматикаһы, башҡорт телсеһе Т. М. Ғариповтың дөрөҫ билдәләүенсә, «революцияға тиклемге татар авторҙары грамматикаһынан, бөтәһенән элек, рус грамматик традицияһы (ә ғәрәп традицияһы түгел) файҙаһына киҫкен ориентация тотоуы менән айырыла» [31]. М. Өмөтбаев был турала үҙе лә яҙҙы:

---

[28] Уметбаев М. Приметы, поверья, поговорки и изречения магометан Уфимской губернии // Справочная книжка Уфимской губернии. Уфа, 1883. Ч. II. 62—64-се биттәр; Боронғо башҡордларның өләңләре // Йәдкәр. Ҡазан, 1897. 83—85-се биттәр.

[29] Россия география йәмғиәте архивы. 53-сө разряд, оп. 1, № 1. 3-сө бит.

[30] Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. 154-се бит.

[31] Гарипов Т. М. Изучение башкирского языка в дореволюционный период // Вопросы башкирской филологии. М., 1959. 40-сы бит.

«Башҡорт вә татар әхуанлара (туғандарға — И. Ғ.) бер ништан (бүләк — И. Ғ.) улсун диб... мәғриб (көнбайыш — И. Ғ.) даныш-мәндләренең (ғалимдарының — И. Ғ.) низамынча (тәртибенсә — И. Ғ.) тәсниф ҡылараҡ (аңлатып — И. Ғ.) йазуб ҡалдырдым»[32].

М. Өмөтбаевтың лингвистик эшмәкәрлегенә И. И. Гиганов, М. А. Ҡазембек, С. Ҡуҡләшев, уның уҡытыусыһы М. Биксуриндың һәм татар тел белгесе Ҡ. Насыриҙың грамматикалары ла ҙур йоғонто яһаны.

М. Өмөтбаевтың грамматикаһы дүрт главанан тора: 1. Хәрф хасийаты (Хәреф үҙенсәлектәре). 2. Ҡәләм иштиҡаҡы (Һүҙ яһалышы). 3. Ҡәләм тәснифе (Һүҙбәйләнеш). 4. Рәсми хат (Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре).

Фонология өлкәһендә ул, М. Иванов һымаҡ уҡ, өндән хәрефкә килә: «Хәрф дидекемез асылында ағыздан чыҡған таушдур» (3-сө бит).

М. Өмөтбаев грамматикаһында башҡорт теленең вокализмы системаһындағы һуҙынҡылар гармонияһы эҙмә-эҙ сағыла. Һуҙынҡы өндәрҙе автор ҡаты һәм йомшаҡ төрҙәргә бүлә (ҡаты һәм йомшаҡ хәрфләр) һәм шуның менән үк һүҙҙәрҙең «шыма, йомшаҡ» йәки «ҡаты» әйтелешен бәйләй (ҡуллар, кешеләр).

М. Өмөтбаев телмәр ағышында тартынҡы өндәр (мәҫәлән, тамаҡ төбө *ҡ, ғ* өндәре) менән булған үҙгәрештәрҙе һүрәтләүгә лә ҙур иғтибар бүлә. Бөтә был тел материалын ул башҡорт дөйөм халыҡ теленән ала.

Үҙенең грамматикаһында башҡорт тел белгесе туған теле менән рус теле араһындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы күрһәткән күп факттарҙы килтерә (мәҫәлән, башҡорт телендә род категорияһының булмауы).

Һүҙ төркөмдәрен М. Өмөтбаев, рус грамматикаһындағы һымаҡ, ике ҙур төркөмгә бүлә:

1) төп төркөм *(жөмләнең олуғ ҡисмлары)* — исемдәр *(исм вөждүд йәки исм зат)*, сифаттар *(исм сифат)*, һандар *(сан исмләре)*, алмаштар *(кинәйә)*, ҡылымдар *(фиғл)*, сифат ҡылымдар *(фиғл истимрәрийә)*, хәл ҡылымдар *(фиғл мөкәрәбә)*, рәүеш *(әдәт)*;

2) ярҙамсы төркөм *(жөмләнең кечек ҡисмлары)* — бәйләүестәр *(зарф сүз азағы)*, теркәүестәр *(ғатыф ҡушучы — йалғаучы)*, ымлыҡтар *(нида чағру)*.

Морфология өлөшөндә телсе халыҡ һөйләү теленән күп лингвистик терминдар индерә: *сүз бүлеме* (ижек), *йалғаучы* (теркәүес), *түб сүзләр* (тамыр һүҙ), *дүзелгән сүзләр* (яһалма һүҙ), *ҡушуйун сүзләр* (ҡушма һүҙ), *дөшөмләргә күндереү* (килеш категорияһы), *дөшөм* ≈*-төшөм* (килеш), *бирү төшөмө* (сығанаҡ килеш), *булдыру төшөмө* (төбәү килеш), *чаҡру төшөмө* (атама килеш), *бөртөк йәғни баш хисабы* (төп һан), *рәтләү хисабы* (рәт һаны), *бүлем хисабы* (бүлеү һаны), *ваҡлау хисабы* (кәсер һаны), *жыйыу*

---

[32] Өмөтбаев М. И. Татар нәхүсенең мохтасары. Ҡазан, 1901. Титул битендә.

*саны* (йыйнау һаны), *йалғыз сан* (берлек һаны), *күмәк сан* (күплек һаны), *сүз башы* (эйә), *хәбәр* (хәбәр), *йалғау* (һөйләмдең эйәрсән киҫәге) һ. б.

Ҡитапта миҫал итеп фольклор өлгөләре, мәҡәл һәм әйтемдәр күп алынған: *шәблек малда түгел, һөнәрдә; олуғлыҡ саҡалда түгел, ғаҡылда; дустлыҡ күңелне жыуата* һ. б.

Грамматикала сығатай, ғосманлы төрөк һәм татар телдәренән шундай параллелдәр табырға мөмкин: *кәлүб* (сығ.) — *кәлеб* (ғосм. төрөк) — *килеб (тат.); ичүн* (ғосм.) — *өчүн* (тат.); *улмаҡ* (ғосм.) — *булмаҡ* (тат.); *улмаз* (ғосм.) — *булмас* (тат.); *килмәз* (ғосм.) — *килмәс* (тат.) һ. б.

М. Өмөтбаевтың үҙ грамматикаһында «татар теле» терминына биргән билдәләүе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Был турала ул былай тип яҙа: «Безем татар теле боронғо джығатай вә истәк (башҡорт — И. Ғ.) халҡлары телендән килгән телдәр. Бу тел илә күбрәк джығатай нәселендән улған ҡыбчаҡ, ҡырғыз, башҡорд вә төркмән сөйләшәләр: хашийә * (татар теле диб Русийаға табиғ улғач, шәһәр татарларына вә ҡәрйә татарларына мәнсүб ҡылуб һәм законда татар теле дип йазылур. Бу тел илә сөйләшкән халаиҡлар үзләре төрки теле диб әйтәләр. Истәк йәғни башҡорт ҡәдимдә бу тел илә сөйләшкәнгә дәлил «Ҡысас Рабғузи» вә «Әбү-л-Ғази» вә «Бабр намә» китаблары. Чөнки әүүәленең мөәллифе Наср Оғузи «Ҡысас Рабғузи» китабының башында әйтә: «Истәклеккә сәһл ** улсун диб, бу тел илә йаздым», — дийүр). Бу телгә ғам *** исм төрки диб әйтүлә» (47—48-се биттәр).

Шулай итеп, «татар теле» терминынан М. Өмөтбаев хәҙерге татар телен түгел, ә XIX быуаттың икенсе яртыһында татар һәм башҡорт телдәренең халыҡ һөйләү теле йоғонтоһонда үҙгәртеп ҡоролған, татар һәм башҡорт өсөн дөйөм булған төрки яҙма әҙәби телен аңлаған. Ҡаралған осорҙа «татар теле» термины ысынлап та «төрки теле» термины менән параллель рәүештә ҡулланылған. Шуға күрә лә М. Өмөтбаев грамматикаһында был ике терминдың бер мәғәнәлә ҡулланылыуы осраҡлы түгел: мәҫәлән, *татар телендә* (6-сы бит), *төрки вә татар телендә* (7-се бит), *төрки-татар телендә* (9-сы бит).

Ғөмүмән, М. Өмөтбаев төрки теленең күп шартлылыҡтарынан ябайлыҡҡа, фекер асыҡлығына, әҫәрҙәренең «башҡортса яңғырашына» ирешергә тырышҡан. Ул «һөйләшкәндә лә, хатта үҙенең төркисә яҙған шиғырҙарын уҡығанда ла, үҙе лә һиҙмәҫтән, төрки телен башҡорт һүҙҙәре, башҡортса әйтештәр менән сыбарлап һөйләшер һәм уҡыр булған» [33].

Үҙ туған теленең байлығын М. Өмөтбаев фәндең башҡа өлкәләрендә лә файҙаланған. «Башҡорт лөғәтенчә сабыйларға сан күрсәтү» (Йәдкәр, 109—112-се биттәр) тигән математиканан хеҙ-

---

* Хашийә — иҫкәрмә.

** Сәһл — еңел.

*** Ғам — дөйөм.

[33] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 25, ед. хр. 2, 3—4-се биттәр.

мәтендә ул дүрт арифметик ғәмәлде күрһәткән ғәрәп һүҙҙәре урынына башҡорт терминдарын индерә: *«иң йеңелерәген балалар өчүн үземезнең лөғәтемездә күрсәтәмез. Әүүәл ғилм хисабда дүрт дәрәжә бардыр: бере сифрларын жыйыу, бере чығарыб алыу, бере күбәйтеү вә бере бүлеү* (Йәдкәр, 109-сы бит).

Шулай итеп, М. Өмөтбаевтың ижады башҡорт әҙәби теле тарихында художестволы әҙәбиәттә генә түгел, ә унан башҡа өлкәләрҙә лә боролош этабы булып тора. Был ижад процесында яҙма әҙәби тел традицион төрки тел элементтарынан күпкә арына, башҡорт һәм татар телдәре базаһында китап теле саралары менән берләшеп, халыҡсан нигеҙе нығына, дөйөм әҙәби тел кимәлендә стилдәрҙең функциональ төрлөлөгө (публицистик, художестволы, ғилми стилдәр) тотороҡло урын ала.

*Өсөнсө глава*

## БАШҠОРТ ШӘЖӘРӘЛӘРЕНЕҢ ҺӘМ ТАРИХИ-ӘҘӘБИ ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ ТЕЛЕ

Шәжәрә һәм тәуарихтар[1] тарихи сығанаҡ ҡына түгел, ә бәлки әҙәби сығанаҡ та булып тора[2]. Башҡорт әҙәбиәт ғилемендә улар традицион тарихи-функциональ жанрҙар рәтенә индерелә[3].

Башҡорт шәжәрәләре һәм тәуарихтарының теле әҙәби тел төрҙәренең береһе булып тора. Бында материал синтезлашҡан ғилми, эш ҡағыҙҙары, художестволы әҙәбиәт стилдәрендә бирелә һәм яҙма әҙәби телдең халыҡ һөйләү теле менән фольклор теленә органик бәйләнгәнлеге күренә.

---

[1] Ырыу-ҡәбиләнең генеалогик яҙмаһы булараҡ шәжәрәләр (*ғәрәпсә* шәжәрә — ағас һүҙенән) тәуарих яҙмаларға (*ғәрәпсә* тарих һүҙенең күплек формаһы) ҡарағанда тар ерлектә таралған. Тәуарих, ҡағиҙә булараҡ, дөйөм регион, дөйөм дәүләт әһәмиәтендәге ваҡиғаларҙы һүрәтләй.

[2] Тарихи ҡомартҡы булараҡ башҡорт шәжәрәләре башҡорттарҙың этногенезын һәм Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыу тарихын тикшергән хеҙмәттәрҙә яҡтыртылған. Ҡарағыҙ: Кузеев Р. Г. Очерки исторической этнографии башкир (Родоплеменные организации башкир в XVII—XVIII вв.). Уфа, 1957; ш у л у ҡ: Происхождение башкирского народа. М., 1974; ш у л у ҡ: Историческая этнография башкирского народа. Уфа, 1978; Усманов А. Н. Присоединение Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1960; Кузеев Р. Г., Юлдашбаев Б. Х. 400 лет вместе с русским народом // Присоединение Башкирии к Русскому государству и его историческое значение. Уфа, 1957 һ. б.; Урал — Волга буйының революцияға тиклемге тарихи сығанаҡтары сығанаҡтарҙы өйрәнеү фәне планында М. А. Усманов тарафынан ентекле өйрәнелгән. Ҡарағыҙ: Усманов М. А. Татарские исторические источники XVII—XVIII веков. Казань: 1972.

[3] Әҙәбиәт ғилеме аспектында шәжәрә һәм тәуарихтар проф. Ғ. Б. Хөсәйенов тарафынан уңышлы ғына эшкәртелгән; ҡарағыҙ: Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы. Өфө, 1984. Революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә тәуарих жанрының традициялары М. Х. Нәҙерғолов тарафынан махсус өйрәнелгән; ҡарағыҙ: Традиции жанра таварих в башкирской литературе и «Таварих-и Болғарийа йаки Такриб-и Гари» Г. Сокорыя: Кандидатлыҡ диссертацияһының авторефераты. Өфө, 1986.

## *1. Башҡорт шәжәрәләренең теле*

Башҡорт шәжәрәләрен текст һәм тел кимәлендә тикшереү[4] әҙәби телдең фольклор теле менән үҙ-ара йоғонто яһашыуында башҡасараҡ күренеште күрһәтә: бында тәүгеһе, йәғни әҙәби тел, һуңғыһына — фольклор теленә тәьҫир итә. Билдәле булыуынса, нигеҙендә генеалогик риүәйәттәр ятҡан башҡорт шәжәрәләре башта һөйләү формаһында йәшәп килгән. Әммә, Р. Ғ. Ҡузеев әйткәнсә, «XV—XVI быуаттарҙа башҡорттарҙың етештереүсе көстәр үҫеүенә һәм ижтимағи тормош прогресына бәйле рәүештә иң халыҡсан шәжәрәләрҙең рәсми редакцияларын барлыҡҡа килтереү хәжәте тыуа — былар эре башҡорт ҡәбиләләренең нәҫел бәйләнешен күрһәткән шәжәрәләр ине. Бындай ҡәбиләләрҙә шәжәрәләрҙе яҙа барған үҙҙәренең «тарихсылары» тыуа. Улар шәжәрәләрҙең яҙма вариантын тыуҙыра һәм ул күсермәләр телдән һөйләнгән шәжәрәләргә ҡарағанда бик аҙ үҙгәргән була»[5].

Фәндә XVI быуаттың беренсе яртыһында яҙылған, әммә беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлана алмаған юрматы ҡәбиләһенең шәжәрәһе билдәле[6]. Башҡорт шәжәрәләренең һаҡланған текстары, ғөмүмән алғанда, XIX быуатта һәм XX быуат башында күсерелгән йәки яҙып алынған[7]. Улар 100 текстан артығыраҡ һанда хәҙерге көндә Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивында (Ф. 3, оп. 12, 36 бит), Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында[8], Зәки Вәлиди исемендәге Башҡортостан милли китапханаһында[9] һәм Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фондында[10] һаҡлана. Беҙҙең заманда хәҙерге әҙәби телдә төҙөлгән айырым ырыуҙарҙың генеалогик яҙмалары ла осрай. Башҡорт шәжәрәләре беренсе тапҡыр айырым йыйынтыҡ итеп Р. Ғ. Ҡузеев тарафынан баҫылды[11].

Төҙөлөшө һәм йөкмәткеһе буйынса башҡорт шәжәрәләрен өс төркөмгә бүлергә мөмкин:

---

[4] XVIII—XIX быуат башҡорт шәжәрәләренең теле Р. Х. Халиҡованың «Язык башкирских шежере и актовых документов XVIII—XIX вв.» (М.: Наука, 1990) тигән монографияһында ентекләп тикшерелә.

[5] Кузеев Р. Г. Башкирские шежере как исторический источник // Башкирские шежере. Уфа, 1960. 13-сө бит.

[6] Ҡарағыҙ: Юрматы ҡәбиләһе башҡорттарының шәжәрәһе // Башкирские шежере. 31-се бит.

[7] Фаттахутдинова А. Ш. Башкирские шежере: краткое археографическое описание // Башкирские шежере: (филологические исследования и публикации). Уфа, 1985, 88—128-се биттәр.

[8] Галяутдинов И. Г. Письменные памятники Башкирии: Проблемы полевой, камеральной и эдиционной археографии // Письменные памятники Башкирии: (историко-филологическое исследование). Уфа, 1982. 34-се бит.

[9] Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы. Өфө, 1984. 105-се бит.

[10] Дмитриева Л. В., Мугинов А. М., Муратов С. Н. Описание тюркских рукописей Института народов Азии. История. М., 1965. Т. 1. 86—87-се биттәр.

[11] Башкирские шежере / Составление, перевод текстов, введение и комментарии Р. Г. Кузеева. Уфа, 1960.

1) ырыу ағзаһы булған ир исемдәре быуындан быуынға теҙеп сығылған схема күренешендәге нәҫел тармағы;

2) аңлатма характерындағы текст менән бирелгән генеалогик схема;

3) формаһы һәм йөкмәткеһе менән хрониканы, йылъяҙма йәки телдән телгә күсә килгән риүәйәтте хәтерләткән текслы шәжәрә [12].

Башҡорт әҙәби теле тарихы өсөн һуңғы төркөм бигерәк тә ҡыҙыҡлы.

Боронғо шәжәрәләрҙә халыҡ ижады һәм китап теле өлгөләренең бер үк ваҡытта параллель рәүештә йәшәгәне күренә. Күп элек барған ваҡиғаларҙы һүрәтләгән бындай шәжәрәләрҙең башында, ғәҙәттә, миф, тарихи хикәйә, риүәйәт һымаҡ фольклор материалы өҫтөнлөк итә. Бында яҙыу стиле лә үҙенсәлекле. Мәҫәлән, юрматы башҡорт ҡәбиләһенең шәжәрәһе былай башлана: *«Чыңғыз хан заманындан ҡалған ханлар мәғлүм булсун. Асыл Йурматының уғланлары Тухал Шәғали бинең оруғы күп өчүн, барча хәлайыҡлар би дейеб әйтәләр. Борон заманда бу йердә Нуғай ирде. Зәй, Шишмә дигән йерләрдә һәр тарафдан күчүб йүрләр ирде. Анча нәгаһ ул йердә бер аждаһа йылан пәйдә булды. Бер ничә күнлек йердән йатар ирде. Моңар күб йыллар кичде, аның берлән орош ҡылдылар, күб халыҡ һәлаки булды. Шундин соң ул йылан ғәйеб булды. Хәлайыҡ аманда ҡалды»* [13].

Һуңғыраҡ шәжәрәләрҙә, айырым ваҡиғаларҙы һүрәтләгәндә, генеалогик йылъяҙманы төҙөгән автор ысын хикәйәсегә, һүҙ оҫтаһына әйләнә. Бында инде художестволы һүрәтләү стиле өҫтөнлөк итә. Драматик ситуациялар йыш ҡына диалог формаһында төҙөлә. Был үҙенсәлек әйле башҡорт ҡәбиләһе шәжәрәһендә бигерәк тә асыҡ күренә: *Кубан йортына бардум, бер ҡарт кемсәнәдә ҡунаҡ улдум. Сөʼал ҡылды: Ни йерлек фәрзәндәсен? — диде. Бән әйдүм: болғарлыҡ иштәкмен, — дидүм. Ҡарт әйде: ҡанаҡы оруғылыҡ сән? Мән әйдүм: Әйле оруғымын, — дидем. Алтмыш ҡолаҡмы сән, йа ҡомыйму сән? — диде. Бән әйдем: белмәзем, әммә атамдан ишедекем, Әйле оруғымын, — дидем. Ҡарт әйде: Тынышданму сән, йә Ҡуштаймасданму сән? Бән әйдүм: Тынышданмын. Ҡарт әйде: белмәсәң, әйтеб бирәйем, — диде. Бабаң Сәйдәш ауға чыҡмыш, утуз болан атмыш. Аның ҡолаҡларун уғрлаб, бабаң Тыныш бешермеш. Шул джиһатдан бабаң*[ны] *«Алтмыш ҡолаҡ Әйлесе» дирләр. Йәнә Ҡоштаймас бабаң Сәйдәш илән ауға чыҡмышларунда дүрт ҡондоз үлтермеш. Аның берүсен уғрлаб ҡомға күммеш. Шуның өчүн «Ҡомой Әйлесе» улмышлар. Бән бу ҡарының зирәклегенә һәзаран афаринлар уҡудум»* [14].

Был өҙөктәге тел саралары ҡатнаш ҡулланылған (халыҡ һөйләү телендәге: *шуның өчүн,* төбәү килештәге *-ға//-гә* ялғауы һәм әҙәби китап телендәге: шул джиһатдан, *-мыш//-меш үткән заман*

---

[12] Фаттахутдинова А. Ш. Источниковедческое изучение башкирских шежере // Вопросы истории башкирского литературного языка. Уфа, 1985. 31-се бит.

[13] Башкирские шежере. 233-сө бит.

[14] Башкирские шежере. 280-се бит.

ялғауы). Тартынҡыларҙың яңғыраулаНыу тенденцияҺы бында ла Һаҡлана: *бән әйдүм, белмәзем.*

Фольклор традициялары үҫәргән ырыуы шәжәрәҺендә яҡшы Һаҡланған. Ул еңел хәтерҙә ҡала торған халыҡ шиғыры — ҡобайыр формаҺында яҙылған. Әммә был шәжәрә лә китап теле йоғонтоҺон сағылдыра. Мәҫәлән, ғәрәп-фарсы Һүҙҙәренә бай булыуы Һәм *-мыш//-меш* үткән заман ҡылымы, сифат ҡылым ялғауҙарын ҡулланыуы шуны күрҺәтә:

Рабби кәрим ҡодрәте
Мәзкүр идәм орғатты
Ҡичмеш Адәм әүлады,
Чыңғыз ханның заманы.
Башҡорд халҡы бабасы,
Би Туҡ-саба уғланы,
Мөйтан димәккә аны,
Хаҡ яратмыш дан аны.
МәшҺүр идәлем аны:
Күреклек ҡылмыш жисмени,
Булмыш ирнең арысланы,
Йөзөн күрмеш адәме
Ғиззәт идәрме аны;
Ярлыҡасын хаҡ тәмам,
Рыуҙы ҡылмыш әғладан.
Заманында ул бәян,
Хаҡның биргән ҡисмәте,
Алып йөрәкле Һиммәте
Халыҡ эсендә ғиззәтле
Булмыш уның дәүләте,
Арғамаҡтан ат алды,
Сын асылдан зат алды.
Биш пар дөйә йөк артты
Хан Чыңғызға ул барды.
Ғиззәтләне аны хан,
Урын бирде янындан.
Мәдех алмыш Һәм хандан,
Вәзир ҡылмыш дәртендән
БадшаҺны дәуам көҙәткән,
Мәжлесләрен төҙәткән,
Ғиззәт-хөрмәт күб иткән,
Ҡөйлә дисә көйләгән,
Сөйлә дисә сөйләгән,
Һәр маҡсудын ул алған.
Андан ҡайтыб би Мөйтан
Үҙ илендә биләгән... [15]

XIX быуат яҙмаҺы өлгөҺө булып кантон осоронда йәшәгән башҡорттарҙың тормошон Һүрәтләгән мәмбәт ырыуы шәжәрәҺе

[15] Башкирские шежере. 81—87-се биттәр.

тора[16]. Ул башҡа шәжәрәләрҙән бөтөн бер тарихты һәм бер нисә быуын кисергән эпизодик ваҡиғаларҙы эсенә алған бай йөкмәткеһе менән айырыла. Бында фольклор һәм китап саралары айырылмаҫлыҡ булып бергә уҡмашҡан, халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре урынлы ҡулланылған. Ҡомартҡы теленең стиле лә ябай һәм еңел аңлайышлы. Был шәжәрәнән миҫал килтерәбеҙ: *«Мәмбәт ҡунаҡ сөйөүче дә булған. Олоғ уғлы Сәйфулланың Ҡыуандыҡ исемле уғлы бер ваҡыт бай булуб, түрә дә булгач, килгән мулла, түрә, ваҡ-эре ҡунаҡлар Ҡыуандыҡға төшәләр. Мәмбәт ҡунаҡсыз ҡала. «А, Ҡыуандыҡ, ҡунағымды тартыб алдың, мин ҡунаҡсыз ҡалдым, йанымдан күч, мунда килгән ҡунаҡ миңә түшәр, анда барған ҡунаҡ сезгә төшәр».— диб Бузаулыҡ суының мәшариф тарафына күчүрә. Ҡыбчаҡ ауылы түбән йағындағы «Ҡыуандыҡ ҡыйы», «Ҡыуандыҡ уры» шундан ҡалған. Байлыҡ ҡунаҡ сөйдөрә, фәҡирлек ҡунаҡ биздерә».*

Шулай итеп, мәмбәт шәжәрәһе, тарихи-әҙәби ҡомартҡы булараҡ, шәжәрәнең эволюцияһын күрһәтеүе, әҙәби традицияларҙы үҙләштереүе һәм әҙәби телде демократлаштырыуы менән ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

XIX быуат башҡорт шәжәрәләренең теленә килгәндә, ул, дөйөм алғанда, ҡатнаш характерҙа. Ваҡыт үтеү менән, ул үҙгәрә бара һәм ниндәйҙер кимәлдә был үҙгәрештәрҙең йүнәлешен билдәләү өсөн ҙур мөмкинлек аса.

Башҡорт шәжәрәләренең телендә башҡорт халыҡ һөйләү теленә хас морфологик күрһәткестәр төп һәм хәл иткес урын тота. Шәжәрә телендә иң таралған морфологик күрһәткес булып, бөтә шәжәрәләргә тип әйтерлек хас булған шаһитлы үткән замандың *-ды//-де,* төбәү килештең *-ға//-гә* һәм хәл ҡылымдың *-ыб//-еб* аффикслы формалары тора. Улар араһында *-ғас//-гәс* аффикслы хәл ҡылым формаһын да осратырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта шәжәрәнең теле бер төрлө түгел: ҡайһы бер текстарҙа халыҡ һөйләү теле саралары өҫтөнлөк итһә (мәҫәлән, юрматы, мең, үҫәргән, бөрйән ҡәбиләләре шәжәрәләре), икенселәрендә (бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән һәм тамъян) яҙма әҙәби тел традициялары күберәк ҡулланыла.

Шәжәрәнең лексикаһы ла һөйләү теленә яҡын. Башҡорт этнонимдары, антропонимдары, топонимдары, гидронимдары һ. б. дөйөм төрки һүҙҙәре уларҙа йыш ҡына саф башҡортса бирелә. Мәҫәлән: *Шишмә, Ашҡаҙар, Нөгөш, Ҡуғанаҡ, Торатау, Ҡуштау, Йөрәктау, Ҡаламан, Шөшнәк, Йылайыр, Таналыҡ, Лайымбирҙе, Ҡәмәлек, Оло Ыҡ, Уй, Яйыҡ, Әй, Өршәк, Айыу йаланы, Айаҡ, Асау, Әлемсат тамағы, Бәләкәй бүләк, Дүрткүл, Иртүбәк, Ҡаратурғай, Сәләүек, Ҡырыҡбаш, Илембәт, Ишкенә, Ишкилде, Алымбикә, Ҡотлобикә, Баллыбикә, Ҡотлогилде, Ҡилдеғол; йорт көтөү, килтереү, улты-*

[16] Шәжәрәнең тексы Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Әҙәбиәт бүлеге мөдире профессор Ғ. Б. Хөсәйеновта һаҡлана. Шәжәрәнең тексын файҙаланырға биргәне өсөн бер ыңғайҙан уға ҙур рәхмәт белдерәбеҙ.

*рыу, оран, сапсан, сара, сик, тулау, түбә, мәрәй* һ. б. Әммә башҡорт шәжәрәләрендә үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә лексиканың айырылғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил итә. Ғәрәп-фарсы сығышлы лексиканы ике төркөмгә: актив һәм пассив ҡулланылған һүҙҙәргә бүлергә мөмкин. Халыҡ һөйләү теле өсөн хас ғәрәп-фарсы һүҙҙәре шундайҙар: *заман, халыҡ, ғәзиз, ҡәбер, ғүмер, хәрәкәт, вафат, лайыҡ, тарих, васыят, дәғүә, илтимас, хисап, ғәскәр, һөжүм, милек, исем, мәғлүм, дарйа, мөһөр* һ. б. Яҙма әҙәби телгә хас түбәндәге ғәрәп-фарсы һүҙҙәре ҡулланыла: *нәгаһ* «ҡапыл», *дәфен* «мәйет күмеү», *ғәни* «бай», *мәнсүб* «ҡағылышлы, ҡараған», *мәшүрәт* «кәңәш», *тәсәрриф* «идара итеү», *сәлахийәт* «ғилемлелек», «оҫталыҡ», *тирандас* «уҡсы», *әүлад* «нәҫел», *рәтбә* «абруй, дәрәжә», *пәдәр* «атай», *тәхете пай* «баш ҡала», *фәрзәнд* «бала», *мәҡам* «урын», *мөддәт* «мәл, срок» һ. б.

Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр күберәк тамъян ҡәбиләһе шәжәрәһендә ҡулланылған [17]: *кенәз, мижа, указ, губернский кәнсә, старшина, кажуннай бичат, бушна* (пошлина), *бишат бушинәсе, граждански палат, архиб сикритар, архиварич, нумир, купийә* һ. б.

## *2. Тарихи-әҙәби тәуарих яҙмаларының теле*

Тикшерелгән осорға ҡараған тарихи-әҙәби тәуарихтар араһында өс төп сығанаҡты күрһәтергә мөмкин: Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғарийа»һы (XVIII быуат аҙағы — XIX быуат башы), Т. Ялсығоловтың «Тарих намә-йи болғар»ы (1805 й.) һәм Ғ. Соҡоройҙоң «Тәуарих-и Болғарийа йаки такриб-и Гари»йы (XIX быуат аҙағы) [18].

Тикшерелгән тәуарихтарҙың телендә, дөйөм алғанда, телдең бер нисә төрөнә: башҡорт һәм татарҙарҙың халыҡ һөйләү теленә, фольклор һәм башҡорт шәжәрәләре теленә, яҙма әҙәби традицияға хас тел саралары бер-береһенә үрелеп үҫә. Китап традицияһы үҙ нәүбәтендә ике сығанаҡҡа — Урта Азия һәм ғосманлы төрөк әҙәби телдәренә таяна. Һуңғы телдең Урал — Волга буйы төркийенә йоғонтоһо XVIII быуаттан Урал — Волга буйының Төркиә менән мәҙәниәт-экономика бәйләнеше арҡаһында башлана [19].

Тикшерелгән ҡомартҡыларға ғосманлы төрөк йоғонтоһо лексика өлкәһендә түбәндәге һүҙҙәрҙә күренә: *ад* «исем», *ада* «утрау», *әв* «өй», *дағ* «тау», *истәмәк* «талап итеү, һорау, теләү, эҙ-

[17] Башкирские шежере. 145—149, 273—274-се биттәр.

[18] Урал — Волга буйында таралған тарихи-әҙәби әҫәрҙәр араһында тел йәһәтенән Ҡадыр Алиҙың «Джама-йи әт-тәуарих», Т. Ялсығоловтың «Тарих намә-йи болғар» әҫәрҙәре тикшерелгән. Ҡарағыҙ: Хисамиева З. А. Язык дастанов Ҡадыр-Гали бека: Кандидатлыҡ диссертацияһы авторефераты. Өфө, 1980; Галяутдинов И. Г. «Тарих наме-и булгар» Таджетдина Ялсыгулова (Лингвотекстологический анализ списков памятника. Фонологическая интерпретация графики. Морфология): Автореф. дис. ... канд. филол. наук. М., 1977.

[19] Усманов М. А. Күрһәтелгән хеҙмәт. 66, 152-се биттәр.

ләү», *ошбундайын* «шундайын», *иләрү* «алда», *анчаҡ* «анса, ләкин», *анчалайун* «шулай итеп, шундай», *өтрү* «өсөн», *үзриндә* «үҙендә», *үзрә* «өҫтөндә», *кебе* «кеүек», *кенди* «үҙемдеке», *чуҡ* «күп», *шөйлә-бөйлә* «тегеләй-былай» *ағрыҡ* «арыҡ», *вармаҡ* «барыу», *вирмек* «биреү», *дәхи* «тағы», *дегин, дек* «тиклем», *дениз* «диңгеҙ», *ди* «ти, әйтә», *йағмур* «ямғыр», *йығмаҡ* «йыйыу», *шимде* «хәҙер, әле генә» һ. б. Мәҫәлән: *Ходжа Әхмәд Йәсәүи Миртимернең дөшөнә керде вә әйде: «Әй, йегет, тизлик үзрә Бохарайа варғыл»* [20]. *Бу Амланның уғлы-ҡызы чуҡ улды* [21]. *Андын кезин Булҡы идел андын кучүб, мәғриб тарафындан китде* (ТБЯ, 7б бит). *Чүн вәзир сүзен әйтдекендән өтрү хан бойурды* (ТБЯ, 8а бит).

Ғосманлы төрөк яҙма әҙәби теле тикшерелгән осор Урал — Волга буйы тәуарихтары һәм башҡа әҫәрҙәре теленә ярайһы уҡ ныҡлы йоғонто яһаны. Шунлыҡтан Урта Азия яҙма әҙәби традицияһы, ә унын аша боронғо төрки яҙма традицияһы менән бәйләнгән ҡайһы бер тел саралары ғосманлы төрөк теле арҡаһында тәуарихтар телендә яңыса йәшәй башлай. Былдайҙарға, мәҫәлән, *-ғучы* һәм *-дуҡы* күрһәткестәрен индерергә була [22]. Миҫалдар: *джәнк ҡылғучы шаһ иде* (ТБМ, 7б бит) «һуғышсан хан ине». *Башҡорт дидүки ҡәбиләдән Этҡол Зәид уғлы Әй дәрйасындан келгәндүр* (ТБМ, 29б бит). *Чыҡдуҡы йере* (ТБМ, 6а бит) «сыҡҡан ере». *Шәһәр Болғарда булғучы табиғынлар* [23] «Болғар шәһәрендә булған эйәреүселәр». *Зыйарат ҡылғучы кемсәнәләр* (ТБС, 11б бит) «зыярат ҡылыусы кешеләр», *Хастадан терелдүке ҡызны никах әйләде* (ТБЯ, 9а бит) «ауырып терелгән ҡыҙға өйләнде» һ. б.

Морфология өлкәһендә тәуарихтар телендә, һирәкләп булһа ла, традицион китап теле саралары ла ҡулланыла: *-мыш* аффикслы ҡылым формаһы (*чәчәкләр ачылмыш* — ТБМ, 4б бит); *-а//-йа* аффикслы төбәү килеш формаһы (*Аҡсаҡ Тимер Бохарайа килде* — ТБМ, 36а бит); *-ан* аффикслы сифат ҡылым формаһы (*хәйерлү улан эшләр* — ТБМ, 7б бит); *-дур* хәбәрлек аффиксы (*ағуб барадур* — ТБС, 13а бит) һ. б.

---

[20] Мөслими. Тәуарих-и Болғарийа. Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең китапханаһы. Р1510. Ҡулъяҙма. 36а бит. Был әҫәр артабан миҫалдар адресында «ТБМ» тип ҡыҫҡартып бирелә.

[21] Ялсығолов Т. Тарих намә-йи болғар. Ҡазан дәүләт университетының Н. И. Лобачевский исемендәге ғилми китапханаһының шәреҡ бүлеге. 587 т. Ҡулъяҙма. 66 бит. Артабан — ТБЯ.

[22] Сағыштырығыҙ: Кононов А. Н. Грамматика языка тюркских рунических памятников (VII—IX вв.). Л., 1980. 92, 124—126-сы биттәр; Ахметов М. А. Глагол в языке орхоно-енисейских памятников. Саратов, 1978. 97—100-сө биттәр; Щербак А. М. Грамматический очерк языка тюркских текстов X—XIII вв. из Восточного Туркестана. М.; Л., 1961. 134, 139-сы биттәр; шул уҡ: Грамматика староузбекского языка. М.; Л., 1962. 127, 165-се биттәр; Гузеев В. Г. Староосманский язык. М., 1979. 69—70-се биттәр.

[23] Соҡорой Ғ. Тәуарих-и Болғарийа йаки такриб-и Гари // Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалы Ҡулъяҙмалар фонды. Т3820. Ҡулъяҙма (ғәрәп яҙыуында). 10б бит. Артабан — ТБС.

Синтаксиста китап традицияһы, нигеҙҙә, *вә, ки, мәгәр, кем, чүнки* теркәүесле эйәртеүле һәм теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә сағыла.

Тәуарихтарҙың мөһим яғы булып башҡорттоң үҙе һөйләгәнсә ҡулланылған бай ономастик материал тупланған теле тора. Мәҫәлән, унда түбәндәге топонимдар бар: *Өфө, Бәләбәй, Тирмә* (ауыл), *Мелем* (ауыл), *Ҡурмаш йылға* (ауыл), *Алабуға; Урал, Ирәмәл, Тағанай; Жайыҡ* (Яйыҡ), *Аҡ идел, Саҡмар, Өршәк, Дим, Әй* һ. б. Антропонимдар: *Байҡы, Бәбеш, Жийанғол, Жианчура, Ҡарамыш, Ҡотлобулат, Ҡуштаймас, Тыныш, Әмҡаш* һ. б.

Тәуарих теленең халыҡ һөйләү теленә тартым ҡулланылыуы уларҙың күсермәләрендә айырыуса асыҡ күренә. Мәҫәлән, Т. Ялсығоловтың «Тарих намә-йи болғар»[24] әҫәре күсермәләрен лингвотекстологик ысул ярҙамында тикшереп һәм алынған һөҙөмтәләрҙе тарихи-сағыштырма планда аңлатып, күсермәләрҙәге бер үк төрлө текста төрлөсә килгән факттарҙы айырып алып була. Бер яҡтан, улар — традиция буйынса һаҡланған тел саралары (беренсе рәт миҫалдар), икенсе яҡтан, шул ваҡыттағы йәнле һөйләү телен сағылдырған тел факттары (икенсе рәт миҫалдар).

Графика-фонология өлкәһендә: а) *д* һәм *т* хәрефтәре менән башланған һүҙҙәр: *дәгелдүр* (А 2а, 3б, Б 6а) — *түгел* (В 3а, Г 4б), *дел* (И 2а) — *тел* (Е 74б, Ж 2а), *дот* (Б 11б) — *тот* (А 10б) һ. б.; б) һүҙ башында *б* ~ *м* сиратлашҡан осраҡтар: *бән* (А 7а, Б 9а, В 7б, Д 1б) — *мин* (Б 10б, Е 79б, Ж 1б), *бең* (В 2а, Г 4а) — *пең* (В 2а) — *мең* (Г 4а), *бундан* (В 12б) — *мундан* (А 11б) һ. б.; в) *бул-* һүҙе *б* хәрефен һаҡлаған һәм һаҡламаған осраҡтар: *улды* (А 2б, Б 7б, 9б) — *булды* (А 4б, Б 6а, В 3а, Ж 1б, И 2б), *улсун* (А 7б, Б, В, Е, Ж, К) — *булсун* (Е 74б, И 2а); г) аҙағы *ғ* һәм *у (уау)* хәрефенә бөткән һүҙҙәр: *тағ* (Б 5б, Г 4а) — *тау* (В 2б, Г 4а), *атлығ* (А 7б, Б 10б) — *атлы* (В 8а, Д, Е, И); д) һүҙ башында *в* һәм *б* сиратлашҡан осраҡтар: *вардур* (А 4б, Д 2а) — *бардур* (А 7б, В 5а), *вир-* (А 1б, 7а, Б 8а, 9б) — *бир-* (А 5б, Б 6а, В 2б, Г 4б) һ. б.

Ҡомартҡы күсермәләрендә телдең традицион һәм яңы ҡатламдарына хас лексик параллелдәр[25]: *дәфен улынды* (А 3б, Б 7а) — *вафат* (В 4а) — *үлде* (Г 5б), *чуҡ* (А 4б, Б 7б, В 4б, Г 6а) — *күб* (А 4а, В 5а, Г 6б), *атлығ* (А 7б, Б 10б) — *исемле*

---

[24] Был ҡомартҡының күсермәләре хәҙерге ваҡытта В. И. Ульянов-Ленин исемендәге Ҡазан дәүләт университетының Н. И. Лобачевский исемендәге ғилми китапханаһының шәреҡ бүлегендә һаҡлана. Инв. № 587т (иҫкеһе — 3262). Миҫалдарҙың адресы шартлы рәүештә баш хәреф менән күрһәтелә: В588т (№ 3263) артабан — Д; 597т (№ 3261) — Г; 1388т — А; 1842т — К; 1870т — Е; Россия Фәндәр академияһы Шәреҡ институтының С.-Петербург филиалындағы В2673 — Б; В3492 — Ж; Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡульъяҙмалар фондындағы Өфө күсермәһе — артабан И.

[25] Ентеклерәк ҡарағыҙ: Галяутдинов И. Г. Лексикон «Тарих наме-и булгар» Таджетдина Ялсыгулова // Вопросы лексикологии и лексикографии башкирского языка. Уфа, 1983. 106—120-се биттәр.

(Б 9б, В 10б), *ғаса* (А 8а, Б, В, Д, Е, И) — *тайаҡ* (Ж 2б, К 1а), *әв* (А 8а) — *ив* (Б 9б, В 8б, Е 75б, И 2б, К 1а) — *өй* (Ж 2б, Д 2а), *ҡары* (А 10а) — *ҡарт* (Б 11а, В 11а) һ. б.

Традицион һәм яңы формаларҙан яһалған морфологик күрһәткестәр: а) боронғо уйғыр *-дын//-дин* һәм ҡыпсаҡ *-дан//-дән* сығанаҡ килеш аффикстары менән ҡулланылған һүҙҙәр: *хандын* (А 7а, В 7б, Д 2б, Ж 3а) — *хандан* (А 8б, Б 9а, В, И, К), *йуртдындын* (В 7б) — *йуртындан* (А 6б, В 9а), *Мәдинәдин* (Д 2а, И 2а, К 1а) — *Мәдинәдән* (Б 9б, Е 75а, Ж 2а) һ. б.; б) уғыҙҙың *-а//-ә*, *-йа//-йә* һәм ҡыпсаҡтың *-ға//-гә* төбәү килеш аффикстары менән килгән һүҙҙәр: *Хажи тархана килдүк* (А 11а, Б 11б) — *Хажи тарханға килдүк* (Б 12а); *безә* (В 5а, Г 6б) — *безгә* (А 4б, Б 7б, И 2б), *Булгыйа* (В 5б, Г 6б) — *Булгыга* (А 5а); *Мәдинәйә китделәр* (А 8а, Б 10а, Е, Ж, И, К) — *Мәдинәгә китделәр* (В 9а) һ. б.; в) уғыҙҙың *-мыш//-меш* һәм ҡыпсаҡтың *-ды//-де* аффикстарын ҡабул иткән һүҙҙәр: *туғмыш* (А 10б, В 11а) — *туғды* (Б 11а); *ҡалмыш* (Б 10а, Д 3а, Е, Ж) — *ҡалды* (А 8б, В, И, К); г) уғыҙҙың *-дыҡы//-дүке* һәм ҡыпсаҡтың *-ған//-гән* аффикстары ҡушылған һүҙҙәр: *Дәфен улындыҡы йер* (А 5б, В 6а) — *дәфен улынған йер* (Б 6а), *бирдүке/вирдүке* (Б, И) *дәстар* (Б 9б, В 8б, Ж, Е, Д, И) — *биргән дәстар* (А 8а).

Шулай итеп, «Тарих намә-йи болғар» әҫәрен күсереүселәр күсермәләрҙә төрки теле традицияларын эҙмә-эҙ һаҡламаған. Быны сәбәбе: улар, был телдең традицион нормаларын ниһек кенә һаҡларға тырышмаһындар, туған телдәренең ҡайһы бер фонетик, лексик һәм грамматик үҙенсәлектәрен сағылдырмай ҡала алмағандар.

Башҡортса һөйләү формалары бигерәк тә Ғ. Соҡоройҙоң «Тәуарих-и Болғарийа»һында киң ҡулланыла:

1. *Унда ш* һәм *й* урынына *ж* графемаһын ҡулланыу күренә: *олуғ ташның өстендән жола* (юрға) *арҡасы кебек тар йулдын ағуб барадур; жоҡлаған төслө булуб йатдум* (36а бит). Был фонетик күренештәр республиканың төньяҡ-көнбайыш районларында йәшәгән, шулай уҡ дим-ҡариҙел һөйләшенә ҡараған башҡорттарҙың теленә ҡарай.

2. Ҡомартҡыла сифаттың төрлө формалары киң ҡулланыла: а) *бик* менән яһалған артыҡлыҡ дәрәжәһе *(бик гүзәл сеңлүм бар* — 36а бит; *бик гүзәл вә бик нәфис чишмә* — 11а бит); б) сифаттың тәүге ижекте ҡабатлау юлы менән яһалған артыҡлыҡ дәрәжәһе *(түб-түгәрәк* — 13а бит; *тиб-тигез* — 13а бит); в) ҡабатлау юлы менән яһалған сифаттар *(төрлө-төрлө* — 14 б бит) һ. б.

3. Башҡа төр грамматик күрһәткестәр: а) ҡылымдың ваҡыт-ваҡыт ҡабатланған йәки хәрәкәттең ваҡыт яғынан бүленеүен белдергән *-ғула//-гүлә* аффикслы күләм формаһы: *Үзенең алдына йүкрүб чыҡуб, ишек ачҡучы адамиларны* (әҙәмдәрҙе) *күреб ҡалғулаған* (ТБС, 36а бит); *тәхрирләр* (яҙыуҙар) *йазғулаб ҡуйдым* (ТБС, 34б бит); б) хәҙерге заман сифат ҡылымдың ҡушма формаһы *-а//-ә* ялғаулы төп мәғәнәле ҡылым аҙағынан *торған* ҡылымын ҡуйыу менән яһалыуы: *бу күндә дә тағ башында күрүнүб*

*тора торған таш бинадур* (ТБС, 12а бит); в) киҫәксә һәм йыйыу теркәүестәре функцияһын үтәгән *да//дә* һүҙҙәре: *Бер кич шәмне чүлмәк илә шикләдем дә* (ТБС, 36а бит); *...табиғынларны да* (ТБС, 16а бит) һ. б.

Ҡомартҡы телендә түбәндәге халыҡ һөйләү теле һүҙҙәре, һүҙбәйләнештәре һәм фразеологизмдар бар: *йердәшләр* (34б бит), *йулланған* (21б бит), *ҡаштур* (ҡыштыр, 36б бит), *ғасырдашларымыз вә шәһәрдәшләремез* (39 б бит), *ҡунаҡлау* (37б бит), *басыу кәртәләре* (37б бит), *ҡойма* (13а бит), *күңел күзе* (34а бит), *күңел йүкертеү* (33б бит), *аңдыу* (36б бит), *ҡунарға төшөү* (37а бит) һ. б.

Шулай итеп, төрки китап әҙәби теленең йәнле һөйләү теле һәм фольклор теле менән ҡушылыуы башҡорт шәжәрәләре һәм тарихи-әҙәби тәуарихтар телендә интенсив рәүештә бара. Был Урал — Волга буйы яҙма әҙәби төрки телен халыҡсанлаштырыуҙа мөһим урын тотто.

*Дүртенсе глава*

## XX БЫУАТ БАШЫ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ

Был осорҙа төрлө төркөмдәр һәм ағымдар араһында әҙәби тел мәсьәләләре буйынса көрәш көсәйҙе. Берәүҙәр төрки халыҡтарға «дөйөм» әҙәби тел итеп төрөк (ғосман) телен, икенселәр еңелләштерелгән «төрки»ҙе, өсөнсөләр ғәрәп телен бәйләргә, көсләп тағырға тырышты. Был йәһәттән бигерәк тә И. Гаспринский ҙур активлыҡ күрһәтте, берҙәм дөйөм тел идеяһын Р. Ибраһимов, М. Бигеев, Ю. Аҡсурин кеүектәр ҙә бар хәленсә пропагандаланы. Улар баҫтырып сығарған китап, газета-журналдар аша бик күп төрөк, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре телгә индерелде. Шул юл менән улар әҙәби телде халыҡ һөйләү теленән айырырға, уның дөйөм милли нормаһының үҫеү һәм формалашыу процесын тотҡарларға тырышты. Әммә уларҙың тырышлығы уңыш килтермәне: уйлап сығарылған, яһалма дөйөм төрки теле халыҡ массаларына аңлашылмай ине, һәм шуға ла ул халыҡ тарафынан ҡабул ителмәне.

XX быуат башында Башҡортостанда әҙәби телде халыҡсанлаштырыуҙа һәм үҫтереүҙә үҙҙәренең әҫәрҙәрен туғандаш башҡорт һәм татар халыҡтарына аңлайышлы телдә яҙған башҡорт шағирҙары һәм яҙыусылары М. Ғафури, С. Яҡшығолов, Д. Юлтый, Ш. Бабич һ. б. айырыуса мөһим урын тотто. Улар яҙған тел сифат яғынан яңы, күберәк татар телен нигеҙ итеп алған яҙма әҙәби тел ине.

XX быуат башында төрки теле менән татар теле диалекттарының бер-береһенә йоғонтоһо нигеҙендә татар әҙәби теленең лексик, фонетик, грамматик нормалары формалашты. Был эште XIX быуат урталарында шағир Ғ. Ҡандалый башлаған ине. Яңы әҙә-

би телдең фонетик төҙөлөшөн һәм лексик составының нигеҙен урта диалекттың үҙенсәлектәре тәшкил итте, ә морфологик төҙөлөшө мишәр теленә яҡын ине[1]. Уның төп стилдәре — әҙәби, публицистик йәки ижтимағи-политик, ғилми, рәсми йәки кәнсәләр (эш ҡағыҙҙары) һәм эпистоляр стилдәр камиллаштырылды[2].

Татар әҙәби телен барлыҡҡа килтереүҙә татар ғалимдары араһында беренселәрҙән булып тел өлкәһендә киҫкен үҙгәрештәр индереү кәрәклеген аңлаған мәғрифәтсе, демократ Ҡәюм Насыри мөһим урын тотто. Был тел артабан үҙҙәренең ижадын халыҡ тормошо менән бәйләгән, әҙәбиәттә реалистик башланғысты нығытҡан революцион демократ яҙыусылар Ғ. Туҡай, Ғ. Ҡамал, М. Ғафури, Ғ. Ҡолмөхәмәтов, Ф. Әмирхан, Ғ. Ибраһимов, М. Мөхәммәтов һ. б. ижадында үҫтерелде һәм камиллаштырылды.

Әҙәби телдең халыҡсан нигеҙен пропагандалауҙа социал-демократик матбуғат, бигерәк тә 1907 йылдың ғинуарында Ырымбурҙа РСДРП-ның Өфө комитеты ағзаһы Хөсәйен Ямашевтың рухи етәкселегендә барлыҡҡа килгән «Урал» газетаһы, ҙур урын тотто. Ул татар һәм башҡорт халыҡтарының революцион хәрәкәте тарихында татар телендә сыҡҡан беренсе социал-демократик газета булды.

Татар милли әҙәби теленең формалашыуында ул ваҡытта мөһим экономика һәм мәҙәниәт үҙәге булған Ҡазан ифрат ҙур урын тотто. Унда тиҫтәләрсә промышленность предприятиелары, башлыса, татар сауҙагәрҙәре һәм капиталистары иҫәбенә тотолған 15-кә яҡын мәҙрәсә иҫәпләнә ине. Ул китап баҫыу үҙәге лә булды: 1900 йылда Ҡазанда 15 типография бар ине. 1905 йылға уларҙың һаны 20-нән ашты, ә 1916 йыл башына 24-кә етте. Бында татар телендә сыҡҡан китаптарҙың 75—85 проценты баҫылды[3]. Ҡазанда шулай уҡ 10-дан артыҡ татар газетаһы һәм журналы сыҡты.

Башҡорт теленең бөтә фонетик үҙенсәлектәрен сағылдырмаһа ла, XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында ғәрәп алфавитына нигеҙләнгән татар яҙмаһы, үҙ ваҡытында төрки яҙмаһы кеүек үк, бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ башҡорт интеллигенцияһы араһына килеп инде. Төҙөлөшө менән иҫке татар әҙәби теле башҡорт теленә суфый яҙыусыларының XIX быуаттың беренсе яртыһында индергән ғәрәпләштерелгән «төрки»йенә ҡарағанда яҡын ине. Шуның өҫтәүенә, башҡорттоң үҙ яҙмаһын һәм милли әҙәби телен барлыҡҡа килтереүгә ынтылыш булһа ла, XX быуат башына хәҙерге башҡорт яҙма әҙәби теле формалашып бөтмәгәйне әле.

XX быуат башындағы башҡорт яҙма әҙәбиәте тематикаһында һәм проблематикаһында элеккегә ҡарағанда милли һыҙаттар күберәк төҫмөрләнә башланы. Унда беренсе планға халыҡтың артабанғы яҙмышы, ерһеҙ ҡалыу арҡаһында килеп тыуған эконо-

---

[1] Современный татарский литературный язык: Лексикология, фонетика, морфология. М., 1969. 6-сы бит.

[2] Хаков В. Х. Татар милли әдәби теленең барлыкка килүе һәм үсеше. Казан, 1972. 110—215-се биттәр.

[3] Каримуллин А. Г. Татарская книга начала XX века. Казань, 1974. 22-се бит.

мик кыйынлыҡтар тураһындағы мәсьәләләр тора. XX быуат башында башҡорт яҙыусыларының реаль ысынбарлыҡты художестволы үҙләштереүе башҡорт прозаһының тыуыуына һәм тәүге драма әҫәрҙәренең күренә башлауына килтерҙе. Уларҙа рус классик һәм татар әҙәбиәттәренең традицияһы ғына түгел, ә милли фольклорҙың йоғонтолары ла асыҡ кәүҙәләнде.

### 1. *Хәҙерге башҡорт яҙыуын булдырыуға тәүге ынтылыштар*

XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында рус ғалимдары, башҡорт милли интеллигенцияһы араһында рус графикаһы нигеҙендә башҡорт яҙыуын булдырыуға ынтылыш көсәйҙе. Рус алфавиты ярҙамында халыҡ ижадының һөйләү өлгөләре яҙып алынды (Р. Г. Игнатьев, М. В. Лоссиевский, А. Г. Бессонов, С. Р. Рыбаков яҙмалары), башҡорт әлифбалары яҙылды. Улар тарафынан тәҡдим ителгән рус хәрефтәрен бер аҙ үҙгәртеп төҙөлгән башҡорт алфавиты ғәрәп яҙыуынан күп яҡтары менән өҫтөн тора ине; иң әһәмиәтлеһе — ул башҡорт халыҡ һөйләү теленең үҙенә генә хас фонетик үҙенсәлектәрен (сингармонизм законын, дифтонгыларҙы биреү юлын һ. б.) яҙыуҙа сағылдырыу мөмкинлеген бирә ине.

Башҡорттар өсөн тәүге әлифба 1892 йылда автор исемен бирмәйенсә Ырымбурҙа баҫылды, ә 1898 йылда икенсе баҫмаһы сыҡты[4]. Уның нигеҙендә Ырымбур башҡорттарының теле ята ине. Әлифбала башҡорт алфавитына 39 рус график тамғаһы тәҡдим ителеп, уларҙың бер өлөшө үҙенсәлекле башҡорт өндәрен биреү өсөн алынғайны. Әммә әлифбала һәр бер парлы өн *(ҙ — з, ғ — г, ҡ — к, ҫ — с)* бер хәреф — *з, г, к, с* менән бирелгәйне.

XIX быуат аҙағында, рус алфавитына өҫтәп бирелгән тамғаларҙы индереп, тәүге русса-башҡортса һәм башҡортса-русса һүҙлектәр төҙөлдө. Һүҙлектәрҙең авторы башҡорт лексикографияһының пионеры В. В. Ҡатаринский ине.

Уларҙың береһе, «Краткий русско-башкирский словарь» (Ырымбур, 1893, автор исеме күрһәтелмәгән) тип аталғаны, 2500-гә яҡын һүҙҙе үҙ эсенә алған. Һүҙҙәрҙең ҡайһылары мәғәнә билдәләренә, ҡайһылары грамматик билдәһенә ҡарап төркөмләп бирелгән[5]. Был һүҙлектең нигеҙен хәҙерге ваҡытта башҡорт теленең эйекһаҡмар һөйләшенә ингән Ырымбур башҡорттарының йәнле һөйләү теле тәшкил итә.

Икенсе башҡортса-русса һүҙлек (Ырымбур, 1899, тышында 1900) алфавит тәртибендә төҙөлгән һәм тәүгеһенә ҡарағанда тулыраҡ. Унда башҡорт теленең көнсығыш диалектының *(аҡылды, ауырҙыҡ, аяҡты* һ. б.) һәм көньяҡ диалектының *(анһатлыҡ, ҡаҙаннаш, көннә- аныҡла-* һ. б.) һүҙ һәм форма яһаусы ялғауҙары

---

[4] Букварь для башкир. Оренбург, 1892, 1898. Проф. Ж. Ғ. Киекбаев ваҡытында был әлифбаның В. В. Ҡатаринскийҙыҡы булыу мөмкинлеген әйткәйне.

[5] Гарипов Т. М. Изучение башкирского языка в дореволюционный период // Вопросы башкирской филологии. М., 1959. 38-се бит.

сағылыш тапҡан[6]. В. В. Катаринскийға һүҙлек төҙөүҙә Сермән рус-башҡорт мәктәбенең уҡытыусыһы Мөхәммәт-Ғәлим Ҡыуатов актив ярҙам иткән.

В. В. Катаринский һүҙлектәренең ҡиммәте шунда: улар башҡорт халҡының йәнле һөйләү теленә нигеҙләнгән. Һүҙлектәрҙә ғәрәп-фарсы һүҙҙәре бик аҙ сағылыш таба, башҡорттарҙың һөйләү телендә йыш ҡулланылғандары ғына индерелә.

1907 йылда Ҡазанда А. Г. Бессонов (1848—1918) авторлығында «Букварь для башкир» баҫыла[7]. А. Г. Бессоновтың башҡорт тел ғилеме тарихында күрһәткән хеҙмәте бигерәк тә ҙур. Ул башҡорт халыҡ әкиәттәрен[8] тырышып йыйған, уның исеме менән башҡорт диалектологияһының тыуыуы бәйләнгән[9].

А. Г. Бессонов рус графикаһынан алынған хәрефтәрҙән 41 хәрефтән торған башҡорт алфавитын тәҡдим иткән. Һүҙлегенә материалды төньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының һөйләү теленән алған[10]. Үҙенең алфавитын ул башҡорт халыҡ әкиәттәрен яҙып алғанда ҡулланған[11].

XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында башҡорт диалекттарын Ҡазан университетының профессоры һәм актив эшмәкәре Н. Ф. Катанов (1862—1922) өйрәнгән. Ул Өфө губернаһының Бәләбәй һәм Минзәлә өйәҙҙәренә ике тапҡыр диалектологик тикшеренеүҙәр менән барып сыҡҡан[12]. Хәҙерге башҡорт лингвистикаһына уның «Азбука для башкирского языка» тигән хеҙмәте лә билдәле булды[13]. Уның алфавиты рус алфавитының 33 хәре-

---

[6] Ентекләп ҡарағыҙ: Ишбердин Э. Ф. Рукописные и печатные словари XVIII—XIX вв. как источник изучения истории башкирского языка // Письменные памятники Башкирии: (историко-филологические исследования). Өфө, 1982. 77—80-се биттәр.

[7] Бессонов А. Г. Букварь для башкир. Казань, 1907. Был хеҙмәт А. Б. инициалдары менән сыҡҡан.

[8] Башкирские народные сказки / А. Г. Бессонов яҙмалары. Өфө, 1941 (инеште редактор Н. К. Дмитриев яҙған).

[9] Бессонов А. Г. О говорах казанского татарского наречия и об отношении его к ближайшим к нему наречиям и языкам // Журнал Министерства народного просвещения. Т. CCXVI. 2-се бүлек. СПб., 1881. 220—242-се биттәр.

[10] Бессонов А. Г. Первая после букваря книжка для чтения и практические первоначальные уроки для северо-восточных башкир. Казань, 1906; шул уҡ: Первая после букваря книжка для чтения и практические первоначальные уроки для юго-восточных башкир. Казань, 1908.

[11] Муратов С. Н. Башкирская сказка в записи А. Г. Бессонова из рукописного собрания Института востоковедения АН СССР // История, культура, языки народов Востока. М., 1970. 178—189-сы биттәр.

[12] Катанов Н. Ф. Отчет о поездке, совершенной с 1 апреля 1897 года по 20 августа того же года в Белебеевский и Мензелинский уезды Уфимской губернии // Уч. записки Казанского университета. VII китап, 1898; шул уҡ: Отчет о поездке, совершенной с 20 мая по 20 августа 1898 года в Белебеевский уезд Уфимской губернии // Шунда уҡ. VIII китап, 1899.

[13] Ҡулъяҙма Татарстан Республикаһының үҙәк архивында һаҡлана. Ф. 969, оп. 1, д. 26. Ул Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Р. Х. Халиҡова тарафынан табылды. Был табыш тураһында ентеклерәк игеп ҡарағыҙ: Халиҡова Р. Х., Шәкүров Р. З. Яҙма телебеҙ ҡомартҡыһы // Ағиҙел. 1982. № 5; шул уҡ: Из научного наследия Н. Ф. Катанова // Советская тюркология. 1983. № 3.

фенән төҙөлгән. Башҡорттоң үҙенсәлекле өндәренә ул өҫтән нөктәләр ҡуйған. Н. Ф.Ҡатановтың алфавитын «Евангелие»ның («Инжил»дың) башҡортсаға тәржемә ителгән тексы менән сағыштырыу (ул 1902 йылда Ҡазанда үҙгәреш индерелгән рус алфавитында баҫылған) [14] уларҙың бер-береһенә оҡшашлығын күрһәтте.

«Инжил»дың тәржемә ителгән тексында башҡорт теленең ике төп диалектында көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарында киң таралған фонетик, грамматик үҙенсәлектәр, синтаксик конструкциялар сағылған [15]. Текста хәҙерге башҡорт әҙәби теленә хас булмаған башҡа грамматик форма һәм һүҙҙәр ҙә осрай. Дөйөм алғанда, тәржемәнең теле — дөйөм халыҡ теле. Тәржемәсе, З. Ғ. Ураҡсин күрһәтеүенсә, «дөйөм башҡорт халыҡ һөйләү теленең торошон, унда теге йәки был формаларҙың, һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙең таралыуын шаҡтай асыҡ белгән» [16].

М. Өмөтбаевтан ҡала башҡорттар араһынан башҡорт телен өйрәнеүселәрҙең береһе булып филолог-ғалим һәм профессияһы буйынса врач Мстислав Александрович (Мөхәммәтхан Сәхипгәрәй улы) Ҡулаев (1873—1958) тора. Ул башҡорттарҙы рус һәм уның аша Европа мәҙәниәтенә ылыҡтырыуҙа мәғарифтың үҫеше ҙур икәнен әйткән. «Илебеҙҙең төп культураһы, — тип яҙҙы ул, — рус телендә тыуа һәм тормошҡа аша: был телдә закондар сыға, үҙәк баҫмалар баҫыла, ғилми системалар эшкәртелә һ. б. Шуға күрә әҙселек милләттәр, культура тормошона аяҡ баҫып, алға тик рус культураһы ҡаҙаныштарын файҙаланып ҡына бара ала» [17].

Үҫәргән башҡорттарынан сыҡҡан М. А. Ҡулаев Ҡазан университетында медицина буйынса белем алған. Башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу унда профессор Н. Ф. Ҡатанов йоғонтоһонда университетта уҡығанда тыуған. 1899—1900 йылдарҙа ул Ҡазан университетының Археология, тарих, этнография йәмғиәтенең экспедицияһында ҡатнаша. Ҡулаев Верхнеуральск өйәҙенең Ҡатай, Тамъян-Түңгәүер волостарында, Орск өйәҙенең Ҡарағай Ҡыпсаҡ, 2-се Бөрйән волостарында, Стәрлетамаҡ өйәҙенең Архангель волосында була, башҡорт әкиәттәрен, йырҙарын, мәҡәлдәрен, тарихи хикәйәләрен йыя һәм рус теленә тәржемә итә.

Мәғлүмәтле кеше булараҡ, М. А. Ҡулаев ғәрәп-башҡорт алфавитын латин алфавитына түгел, рус алфавитына күсереү кәрәклеген яҡлап сыҡты. Башҡорт теле буйынса уның беренсе китабы 1912 йылда Ҡазанда «Башҡорттар өсөн өндәрҙең әйтелеш нигеҙҙәре һәм әлифба» тигән исем менән рус телендә сыҡты. Бында ул, рус алфавитына нигеҙләнеп, 34 хәреф бирә [18]. 1919 йылда М. А.

---

[14] «Инжил» («Евангелие») башҡорт телендә. Ҡазан, 1902. 314-се бит.

[15] Ентекләп ҡарағыҙ: Ураксин З. Г. «Инжил» как источник изучения истории башкирского языка // Археография и лингвистическая текстология Южного Урала. Уфа, 1977. 98—103-сө биттәр.

[16] Ураксин З. Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 99-сы бит.

[17] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 20, ед. хр. 28. 15-се бит.

[18] Кулаев М. А. Основы звукопроизношения и азбука для башкир. Казань, 1912. 12-се бит.

Ҡулаев стеклографик юл менән башҡорт телендә «Әлепей»ҙе сығара, башҡорт һөйләү телмәрендә даими өн рәүешендә ҡулланылмаған j (дж) өнөн алып ташлап һәм башҡа ҡайһы берҙәренең һыҙылышын башҡасараҡ биреп, бер аҙ үҙгәреш индерә [19]. Әммә уның һуңғы алфавиты ла (1928 йыл) барыбер 34 хәрефтән тора [20].

М. А. Ҡулаевтың тел ғилеме өҫтөндәге тикшеренеүҙәре [21] хәҙер эйек-һаҡмар һөйләшенә ингән туған үҫәргән башҡорттары теле материалына нигеҙләнә. Күрһәтелгән хеҙмәттәрендә ул был һөйләштең Һаҡмар зонаһының лексик, фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәрен сағылдыра: *ҡумбыҙ* — әҙәбисә ҡумыҙ, *тауларҙың исемнәре*//тауҙарҙың исемдәре, *эҫҫе*//эҫе (Основы.., 14—17-се биттәр); *атам миңә итек апҡайтты*//атайым миңә итек алып ҡайтты, *кешенен*//кешенең, *тештәй*//тешләй һ. б. (Әлепей, 10, 19-сы биттәр.)

М. А. Ҡулаевтың тел ғилеме өлкәһендәге эшмәкәрлегенең төп әһәмиәте тәүгеләрҙән булып орфоэпия мәсьәләләрен күтәреп сығыуында тора. Әлифбаһын төҙөгәндә ул беренсе нәүбәттә иғтибарға хәрефтәрҙең уҡыу һәм яҙыуға ҡағылышлы практик үҙенсәлектәрен ала. Ул шулай уҡ башҡорттарға рус телен өйрәнгәндә осрай торған һәм, киреһенсә, рустарға башҡорт телен өйрәнгәндә осрарға мөмкин булған ҡыйынлыҡтарҙы ла күрһәтә. Уның фекеренсә, башҡорттар 11 рус өнө (о, э, ы; е, ё, ю, я; в, ц, ч, щ), ә рустар 12 башҡорт фонемаһын (е, ө, ү, ы, ә; ғ, ҙ, ҡ, ң, ҫ, w, һ) әйтеүҙә ҡыйынлыҡҡа осрай.

Шулай итеп, XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында уҡ башҡорт яҙыуы өсөн ғәрәп-башҡорт алфавитына алмашҡа рус алфавиты тәҡдим ителә. Рус алфавиты нигеҙендә яҙылған башҡорт текстары хәҙерге башҡорт яҙыуын булдырыуҙа тәүге тәжрибәләрҙең береһе булды. Әммә башҡорт халҡына рус алфавитын ҡабул итеү өсөн объектив политик шарттар булмау сәбәпле был осорҙа яһалған тырышлыҡтар тәүге тәжрибә рәүешендә генә тороп ҡалды. Был тик совет шарттарында ғына тормошҡа аша.

### *2. XX быуат башындағы башҡорт поэзияһының теле*

XX быуат башында, бигерәк тә 1905—1907 йылдарҙа, буржуаз-демократик революция осоронда, М. Ғафури (1880—1934), Афзал Таһиров (1890—1937), Дауыт Юлтый (1893—1938), Шәйхзада Бабич (1895—1919) кеүек яҙыусылар донъяға сыҡты. Улар яңы шарттарҙа М. Өмөтбаев менән М. Аҡмулланың милли-поэтик тра-

[19] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 3, оп. 20, ед. хр. 22.

[20] Шунда уҡ. Ед. хр. 23. 5-се бит.

[21] М. А. Ҡулаевтың ғилми мираҫы тураһында ҡарағыҙ: Ураксин З. Г., Шингареева С. М. Обзор личного фонда врача и ученого-филолога М. А. Кулаева // Археография и лингвистическая текстология Южного Урала. Уфа, 1977. 115—118-се биттәр.

дицияларын дауам итте һәм артабан башҡорт совет әҙәбиәтен башлап ебәреүселәр булды [22]. Был осорҙа, бер яҡтан, татар демократик әҙәбиәте һәм теле, икенсе яҡтан, башҡорт фольклоры һәм теле йоғонтоһонда татар матбуғат телендә башҡорт поэзияһы һәм прозаһы барлыҡҡа килде.

XX быуат башында Башҡортостанда ҡулланылған татар матбуғат теле татар һәм башҡорт халыҡ һөйләү телдәренең байлыҡтарын традицион яҙма тел элементтары менән яҡынайтты. Әҙәби тел торған һайын халыҡсанырах төҫ ала барҙы. Яңылыҡ телдең бөтә яғына ла — лексик, фонетик, грамматик һәм стилистик йәһәтенә ҡағылды. Шулай ҙа XX быуат башындағы башҡорт поэзияһында ғәрәп-фарсы лексикаһын ҡулланыу туҡталманы әле. Улар, мәҫәлән, М. Ғафуриҙың тәүге шиғырҙарында йыш ҡулланыла: *хөрриәт, ихтийар, золом, мәғариф, залим, мәзлум, әсир, ислах* (реформа), *истиҡбал* (киләсәк), *ғариб* (сит), *жәһаләт* (наҙанлыҡ), *иттифаҡ* (берҙәм, союз), *пәракәндә* (тарҡалыш), *фетнә* (баш күтәреү), *мәтиғ* (буйһоноу), *истибдад* (деспотизм), *низаг* (ғауға), *фирҡә* (партия), *тәҡдир* (яҙмыш), *хәҡарат* (хурлыҡ, бысраҡлыҡ), *солох* (килешеү), *сәғадәт* (бәхет) һ. б. [23].

Ғәрәп һәм фарсы лексик элементтары XX быуат башы шағирҙарының башланғыс ижадына хас. Улар, нигеҙҙә, ижтимағи-политик өлкәгә ҡайтып ҡала. Артабан уларҙың һаны ҡырҡа кәмей бара.

Улар урынына әҙәби телгә татар һәм башҡорт халыҡ һөйләү телендәге һүҙҙәр һәм әйтемдәр йәлеп ителә. Һүҙлек составын тулыландырыу сит тел элементтарын үҙләштереү иҫәбенә лә тормошҡа аша. Рус теле аша үҙләштереү дауам итә.

Һүҙлек составын тулыландырыу бигерәк тә татар һәм башҡорт телдәре материалы нигеҙендә һүҙ яһау юлы менән барҙы. Лексиканың был өлкәһенә *-лыҡ//-лек, -ма//-мә, -ыш//-еш, -ам//-әм, -ым//-ем, -м* аффикстары ярҙамында яһалған абстракт мәғәнәле һүҙҙәр инә: *шадлыҡ, рәхәтлек, ҡоллоҡ, өйөрмә, тартылыш, урам, алҡыш* һ. б.

Төрки китап лексикаһынан ҡайһы бер һүҙҙәр традицион фонетик форманы һаҡлай: *ағыр* (ауыр), *туғры* (туры), *йығла* (ила), *үгрән-* (өйрән-). *Ошбу, бән* алмаштары сағыштырмаса йыш ҡулланыла. Ҡайһы ваҡыт улар хәҙерге форма менән параллель рәүештә килгән.

Дәрдемезгә *ошбу* көндә булды чара,
Залимларның *бу* көн булды йөзө ҡара.
(*М. Ғафури*)

Лексика өлкәһендә әйтеп үтелгән шағирҙарҙың башланғыс ижадына хас булған төрөк йоғонтоһо ла күренә: *уйҡу* (йоҡо),

---

[22] Башҡорт әҙәбиәте. XX быуат башы. Беренсе китап. Поэзия. Өфө, 1983.

[23] Миҫалдар М. Ғафуриҙың түбәндәге китаптарынан килтерелде: Йәш ғүмерем. Ҡазан, 1906; М. Ғафури шиғырлары. Ҡазан, 1909; Милләт мөхәббәте. Өфө, 1911; Әмсәл. Ҡазан, 1913; Моң вә зар. Өфө, 1914; Ҡыҙыл байраҡ. Өфө, 1917; Янған йөрәк. 1918.

*бөйлә* (шулай), *кустәрмәк* (күрһәтеү), *кебе* (кеүек), *нә* (кире ҡағыу кисәксәһе), *нитә* (һымаҡ, кеүек), *ничүн* (ни өсөн), *вар* (бар), *вармаҡ* (барыу), *йарын* (иртәгә) һ. б.

Әммә лексиканың китап ҡатламы элекке осор менән сағыштырғанда артыҡ күп түгел. XX быуат башы поэзияһының һүҙлек составы халыҡҡа сит һәм аңлайышһыҙ һүҙҙәрҙән актив таҙара башлай. Әҙәби телдә дөйөм халыҡ телендә ҡулланылған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм фразеологик әйтемдәр киң ҡулланыла. Поэзия теленең башҡорт һөйләү теленә яйлап яҡынайыуы, бөтәһенән элек, революцион ваҡиғалар, башҡорт әҙәбиәтендә тәнҡит реализмының үҫеүе менән бәйләнгән.

XX быуат башында башҡорт шағирҙары, нигеҙҙә, татар матбуғат телендә яҙһалар ҙа, уларҙың поэзияһында башҡорт халҡының тормошо, яҙмышы һәм рухы һүрәтләнде. Был үҙ нәүбәтендә башҡорт топонимик һәм этнографик терминдарын, башҡорт һөйләү телендәге ҡайһы бер һүҙ, һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланыуға алып килде. М. Ғафури әҫәрҙәрендә, мәҫәлән, татар һәм башҡорт телдәре өсөн дөйөм булған һүҙҙәр менән бер рәттән тик башҡорт теленә генә хас булған һүҙҙәр ҙә осрай: *чәчкә* (хәҙерге башҡорт телендә — сәскә, татар телендә — чәчәк), *икмәк* (тат. — ипи), *дағы* (башҡ. — тағы, тат. — тагын), *узғарыу* (башҡ. — уҙғарыу, тат. — уздыру), *тымыҡ* (тат. — тымызык), *мөйөш* (тат. — почмак), *башҡа етеү* (тат. — башка җитү), *тап килтереү* (тат. — очрату), *йәйләү, тустаған, сынайыҡ* (баш. — һынайыҡ, тат. — сыныйк) һ. б.

XX быуат башында башҡорт тематикаһы Сафуан Яҡшығолов (1871—1931), Хәбибулла Ғәбитов (1886—1939), Фазыл Туйкин (1888—1938) ижадының нигеҙен тәшкил итә. Уларҙың әҫәрҙәренең телендә башҡорт халҡының һөйләү теленә яҡынайыу тенденцияһы асыҡ күренеп тора. Был тенденцияның көсәйеүендә башҡорт яҙыусыларының милли фольклор әҫәрҙәренә ижади мөрәжәғәт итеүе мөһим әһәмиәт тотто[24].

Бөтә тауыштан беренсе тапҡыр башҡорттар исеменән һүҙ алып барған С. Яҡшығоловтың ижады башҡорт халҡының ул замандағы реаль тормошо менән тығыҙ бәйләнгән. Мәғрифәтсе демократ булараҡ, ул үҙенең шиғырҙарында башҡорт ерҙәрен тартып алыуға ҡаршы сыҡты, үҙ халҡын мәғарифҡа өндәне, хәйерселекте фән һәм техникаға эйә булыу юлы менән еңеп сығырға саҡырҙы.

Ялсығолов поэзияһының теле башҡа яҙыусыларҙың теленән ныҡ айырыла. Унда тик башҡорт һөйләү теле менән бәйләнгән айырым әйтемдәр, лексик элементтар ҙур урын ала. Үҙенең «Мөғәллим Солтангилде әфәнденең мәрҫиәсе» (Ҡазан, 1908), «Башҡорт хәлләре» (Стәрлетамаҡ, 1911), «Дим буйы» (Ҡазан, 1912), «Күңел ялҡынлары» (Өфө, 1916) тигән поэтик йыйынтыҡтарында Яҡшығолов туған теленең байлығын оҫта файҙаланған «Боронғо

---

[24] Ахмадиев В. И. Башкирская поэзия начала XX века: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Уфа, 1971. 8-се бит.

башҡорт сәхрәсе» шиғыры, мәҫәлән, оригиналда шулай яңғырай:

Ҡайта торған иде гөрләб,
Өйөр-өйөр йылҡылар.
Тезелешеб тау буйында
Һәм чабышыб таутүбән.

Тәмле саф ҡымыз жейешеб,
Жыйылышыб тирмәгә.
Ултыра торған иделәр
Жырлашып ҡурай илән [25].

Был өҙөктә түбәндәге үҙенсәлекле башҡорт теле элементтары ҡулланылған: *өйөр-өйөр йылҡылар, ҡымыз, тирмә, ҡурай.*

Башҡа шиғырҙарынан миҫалдар: *күчмәли йөргән заман; аппаҡ тирмәләр; арҡа* (тау арҡаһы); *жәйләб йөрөү* (йәйләүҙә йәшәү); *бейә бәйләү; ҡурай илә ҡушлаб көйләү; ҡороға ватма башыңны; желиләб күб ҡолонлар бәйләгәнләр; боронғо киңлек; аҡма ерләр бил бауырындан үлән; ҡулға алыб ҡарчыға йәки лачын, йанына артыб садаҡ һәм жәйәсен; атҡан аппаҡ чәчкәләр муйыл ағачы һәм балан; ҡош-ҡорт, буз турғай; гөжләшә бал ҡортлары; жилән; йаҡа* (күкрәксә); *итәк; уҡа; көрәгә; узаман; бишмәт, чағыл*; *баҡан* (ҡолға); *бейә ағытыу; билге тибеү* һ. б.

Х. Ғәбитов, Ш. Әминев, Ф. Туйкин кеүек шағирҙар ҙа үҙ ижадтарында шулай уҡ башҡорт фольклорының бай традицияларына таяныпэш иткәндәр. Миҫалға Х. Ғәбитов әҫәрҙәренән өлгө килтерәбеҙ:

Астымдағы менгән күк толпарым
Айаҡлары тайып сөрөндө.
Күк толпарға ҡарап уйлап торсам,
Әжәл генәм йаҡын күренде [26].

Синтез бигерәк тә, бер яҡтан, башҡорт сәсәндәренең һәйбәт традицияларын, икенсе яҡтан, Көнсығыштың классик шағирҙарының ижадын дауам иткән Ш. Әминевтең ижадына хас. Уның әҫәрҙәре беҙгә яҙма хәлдә һәм телдә һөйләнгән формала килеп етте [27]. Китап теле элементтары күпмелер кимәлдә тәүге ҡулъяҙма күсермәләрҙә һаҡланған *(-дин, -мыш* аффикслы формалар; *бән* (мин), *туғдым, туғры, ди-, ошбу, илән берлә* һ. б.); һуңғы осор күсермәләрҙең тексы башҡорт һәм татар телдәренең йоғонтоһона бирелгән, унда диалектизмдар осрай *(жәй, жау, жәйелеү, көйҙәү, ҡашында* һ. б.); русизмдар ҙа бар *(дисәтинә, минауат, сельскиләр, распискалар, вуле, вулыс, бисер* һ. б.). Телдә йәшәгән поэзияһы саф башҡорт телендә һаҡланған. Ш. Әминевтең ҡайһы бер шиғыр-

[25] Яҡшығолов С. Башҡорт хәлләре. Стәрлетамаҡ, 1911.
[26] Ғәбитов Х. Башҡорт моңлары. Ырымбур, 1918.
[27] Ш. Әминевтең поэтик мираҫы тураһында ҡарағыҙ: Хөсәйенов Ғ. Шафиҡ Әминев әҫәрҙәрен текстологик барлау // Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре. Өфө, 1979. 29—55-се биттәр.

ҙары (мәсәлән, «Урал» циклы, «Башҡорт бабаларының тарихы») башҡорт ҡобайырын хәтерләтә. Шағир шул уҡ ваҡытта Көнсығыш классиктарының поэтик традицияларына оҫта таяна. Был уның һүрәтләү сараларын (эпитеттарҙы, метафора, сағыштырыуҙарҙы) һәм строфа системаһын (а—а—а—б; а—а—б—а; а—а—б—б һ. б.) ҡулланғанда күренә. Бынан тыш, шағир йыш ҡына «имде» рәдифен ҡуллана.

XX быуат башы башҡорт поэзияһы телендә традицион тел сараларынан хәҙергегә яйлап күсеү грамматик төҙөлөштә лә бара. Үҙҙәренең функциональ-семантик сиктәрен дөйөм башҡорт һәм татар телдәрендә ҡулланылған сифат, рәүеш, ярҙамсы һүҙҙәр һ. б. кеүек һүҙ төркөмдәре лә киңәйтә. Хәҙерге килеш формаларының активлашыуы күренә. Төбәү килештә *-а//-ә* формаһы урынына *-ға//-гә, -ҡа//-кә* формаһын *(арғымаҡҡа, арысланға), -дын//-дин* урынына *-дан//-дән, -тан//-тән* аффикстарын *(надандардан, кешеләрдән)* ҡулланыу арта. Килеш формаларының традицион варианты эйәлек категорияһында ла ҡыҫырыҡлап сығарыла: *-ыйа* урынына *-ын+а//-ен+ә (уғлына, килененә)* — төбәү килештә; *-и+дә* урынына *-ын+да//-ен+дә (ҡулларында, түрләрендә)* — урын-ваҡыт килештә һ. б.

Ҡылым системаһында яйлап ғәрәп-фарсы исемдәренә ҡушылған төрки ярҙамсы ҡылымы, сифат ҡылым һәм хәбәр һөйкәлешенең *-мыш* аффиксլы формаһы, бойороҡ һөйкәлешенең *-ғыл, -ың,* шарт һөйкәлешенең *-ыр ирсә,* исем ҡылымдың *-маҡ* аффикстары ҡулланылыштан сыға. Был осор башҡорт поэзияһы телендә *-а, -ды, -ған, -ыр, -а иде, -ған иде* аффикстары, хәбәр һөйкәлешендә *-ысаҡ,* шарт һөйкәлешендә *-са//-сә,* хәл ҡылымда *-ыб, -ғач, -ғанчы,* сифат ҡылымда *-ған,* инфинитивта *-ырға//-ергә* формалары, бойороҡ һөйкәлешендә аффиксһыҙ ҡулланылыш активлаша. Бынан тыш, ҡылым формаларында мәғәнәүи үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, хәҙерге замандың *-ыр* күрһәткесе киләсәк заман ҡылым аффиксы мәғәнәһендә ҡулланыла башлай.

Рәүештәрҙә махсус аффикстар *(-лата, -ын, -лай, -ча, -дай, -лаб)* һәм килеш формалары ярҙамында яһалған яңы һүҙҙәр арта: *күрәләтә, тирәләй, ҡышын-жәйен, бергәләб, искечә, боронғодай, йыраҡтан, беренчедән, иртәгә, башта* һ. б.

*Өчөн, сәбәпле, хаҡында, тарафындан, ҡаршы, башҡа, бирле* һ. б. бәйләүестәр киң урын ала бара.

*Нитәки, зирәки, гәр, тәки, вә* кеүек боронғо теркәүестәр ҡулланылыштан төшөп ҡала; *да//дә, та//тә, һәм, тағын, йәнә, тик, бары* кеүек яңы теркәүестәр әҙәби телгә күпләп инә һәм *ғына//генә, тик, фәҡәт, нәҡ, -мы, -мыни, ә, әллә, -дыр, да//дә, уҡ//ук, ла//лә бит* киҫәксәләре киң тарала.

Синтаксик ҡоролошта ла был осор башҡорт поэзияһы телендә артабан камиллашыу процесы бара, архаик конструкциялар ҡыҫырыҡлап сығарыла, яңы, тормошсандары нығына.

Түбәндәге типтағы һүҙбәйләнештәр киң тарала:

а) *-лы//-ле* аффикслы сифаттарға исем ҡушып яһалған һүҙбәйләнештәр: *шадлыҡлы донйа;*

б) *-ған//-гән* аффикслы сифат ҡылымға исем ҡушып яһалған һүҙбәйләнештәр: *туңған боз;*

в) *-ға//-гә* төбәү килеш ялғауын ҡабул иткән исемгә ҡылым формаһын ҡушып яһалған һүҙбәйләнештәр: *мәғрифәткә бағлаңыз бил;*

г) хәбәре *-ды//-де* ялғаулы үткән заман ҡылымы менән бирелгән һөйләм-һүҙбәйләнештәр: *бөтөн ҡара көч андан жиңелде* һ. б.

Иҫке ҡылым формалары менән яһалған һүҙбәйләнештәр кәмей:

а) *-ыб//-б* аффикслы хәл ҡылым формаһындағы хәбәргә *-маҡ* аффикслы инфинитив формаһын ҡушып яһалған һүҙбәйләнештәр: *ҡараб йатмаҡ;*

б) *-мыш* аффикслы сифат ҡылым формаһы ҡушып яһалған һүҙбәйләнештәр: *кейемдән мәхрүм улмыш йаланғач;*

в) *-ы+ны* билдәле төшөм килеш формаһындағы бойондороҡло тултырыусы менән яһалған ҡылым һүҙбәйләнештәр: *батырған тырнағыны йырткыч залим;*

г) *-ыр//-р, -мас//-мәс* үткән заман ҡылымы менән бирелгән хәбәр: *нур чығар.*

Һөйләмдәр төҙөгәндә *-ған, -ачаҡ, (-а, -ы)+р* формалы сифат ҡылым яһаған киҫәктәр ингән конструкциялар активлаша.

Поэзия телендә *-мыш* формалы сифат ҡылым, *-маҡ* аффикслы исем ҡылым яһаған конструкциялар яйлап бөтә бара.

Ҡушма һөйләмдәрҙә хәбәре шарт ҡылым, *-ған//-гән* аффикслы сифат ҡылым, *-ғач//-гәч, -ыб//-б, -ғанчы//-гәнче* аффикслы хәл ҡылым менән килгән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр тарала; *-мы//-ме, -мыны//-мене* һорау киҫәксәләре, *икән, йуҡса, йәғни бигерәк тә, әйтерсең* һымаҡ һүҙҙәр менән бәйләнеп килгән теҙмә ҡушма һөйләмдәр киңерәк урын ала. Теҙмә теркәүестәр араһында *һәм* теркәүесе ныҡлы урын ала, *да//дә, та//тә* теркәүестәре тарала башлай.

XX быуат башы башҡорт шағирҙары араһында башҡорт халыҡ һөйләү телен әҙәби тел итеүгә тәүге ынтылыштар яһалды. Был йәһәттән Шәйхзада Бабичтың ижады үҙенсәлекле. Ул 1916 йылда «Шура» журналы редакцияһына үҙенең башҡорт телендә яҙылған һәм башҡорт милли рухы менән һуғарылған «Ҡөтәм» исемле шиғырын килтерә. Түбәндә унан бер өҙөк бирәбеҙ:

Йөргән саҡда башҡорт туғайларын,
Жаным әллә ҡайда жилкенә,
Ишеткәндә моңло ҡурайларын,
Йөрәгемә моңлар бөркөлә...
Ишеткәндәй булам әллә ҡайдан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырларын;
Өмөт ҡайнап, ташһын күкрәгемдән,
Ҡөтәм тиҙҙән аҡ көн килгәнен [28].

---

[28] Әдәби йардам мәжмуғасы. Ҡазан, 1922. 1-се китап.

### *3. Башҡорт прозаһының һәм драматургияһының теле*

XX быуат башында башҡорт халҡының культура үҫешендә иң яҡшы һыҙаттарҙың береһе булып рус классик һәм татар демократик әҙәбиәттәренең йоғонтоһонда башҡорт сәсмә прозаһының тыуыуы һәм тәүге драма әҫәрҙәренең күренә башлауы торҙо. Был осорҙа Р. Фәхретдинов, М. Ғафури, З. Һаҙи, Х. Сәғҙи, З. Өммәти, Ә. Иҫәнбирҙин, В. Солтанов, Ҡ. Туйкин, Ф. Вәлиев, А. Таһиров, Ә. Таңғатаров, Ғ. Рафиҡи, Ғ. Ғүмәрский, Ф. Туйкин, Бәхтиәр Бәхтегәрәй улы, Ғ. Ниязбаев һәм башҡаларҙың башҡорт халҡының тормошон сағылдырған, үҙҙәренең милли үҙенсәлеге менән айырылып торған хикәйә, повестары һәм драмалары донъя күрҙе [29]. Р. Фәхретдиновтың «Әсмә йәки ғәмәл вә жаза» повесы, мәҫәлән, шулай башлана: «Хикәйәмез башҡорт сәхрәләрендә вә башҡордлар мәғишәт итмәкдә улан шәһәрләргә улдығы өчүн, башҡордлар хаҡында бер ике жөмлә улсун, йазмаҡ монасиб улур» [30]. «Сәлимә йәки ғиффәт» тигән икенсе хикәйәһендә лә яҙыусы башҡорттар тураһында яҙа: «имде бу көндә башҡордлар замана вә тәбиғәт көчләүенә күрә күчмәлекне ташлаб, ауылларда тереклек идәргә башламышлар, жәйләүләрне ҡалдуруб, иген кәсебләренә йәбешмешләрдер» [31].

XX быуат башы башҡорт прозаһы һәм драматургияһының теле, башлыса, татар матбуғаты теле нигеҙендә үҫте. 1903 йылда Варшава газетаһы «Slowbl»дың махсус корреспонденты И. А. Урсын үҙенең «Боронғо Башҡортостанда» тигән очеркында: «Башҡорт прозаик яҙыусылары араһында Ризаэтдин Фәхретдинов иң яҡшыларҙан һанала. Уның яҙмалары — башҡорт һәм татарҙарҙың төрлө хөрәфәттәренә ҡаршы сағыу сатира. Ул европаса мәғрифәт-

---

[29] Ентекләп ҡарағыҙ: Башҡорт әҙәбиәте: XX быуат башы: Проза, драматургия. Өфө, 1984. Икенсе китап. Был параграфта миҫалдар түбәндәге сығанаҡтарҙан алынды: Риза Фәхретдинов. «Әсмә йәки ғәмәл вә жаза», «Сәлимә йәки ғиффәт» // Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Ф. 7, оп. 1, ед. хр. 11. 114—229-сы биттәр; Мәжит Ғафури. Арыш башағы // Шура. 1912. № 8; Хайуандар арасында // Шура, 1912. № 16; Салдат хатыны Хәмидә. Өфө: Шәреҡ матбағасы, 1917; Закир Хади. Жиһанша хәзрәт. Казан, 1908; Зия Өммәти. Аталарға — ғибрәт, йәшләргә — дәрес. Стәрлетамаҡ, 1910; Әхкәм Исәнбердин. Үкенечле сөйөшү, яхуд Мансур илә Ғәлиә. Стәрлетамаҡ, 1911; Ҡәбир Туйкин. Яман юлдаш. Ҡазан, 1912; Фәйзи Вәлиев. Урал буйлары // Тормош. 1914. 16 июль; Фәйзи хикәйәләре. Казан, 1918; Афзал Таһиров. Мазлумалар. Ырымбур, 1912 / Ә. Мөхөтдин псевдонимы аҫтында; Ә. Таңғатаров. Ходаяр хан бакчасындағы хыялым // Шура. 1911. № 22; Тауларға ҡарағанда // Шура. 1912. № 7; Әдәбиәт кисәкләре // Тормош. 1914. 21 ноябрь; Ғәли Рафиҡи. Ыссыҡ-Күл (Сәйәхәт хәтирәләрендән) // Аң. 1913. № 4; Алатау буйларында // Аң. 1913. № 12; Йәш йөрәкнең ашҡыныуы // Аң. 1915. № 8; Тыуған илен сағынған // Аҡ юл. 1915. № 17; Ғиләж Ғүмәрский. Суғышта. Өфө: «Иршат» нәшриәте, 1917; Фазыл Туйкин. Ватан каһарманлары. Ҡазан, 1912; Бәхтиәр Бәхтегәрәй уғлы. Ер сатыу. Ырымбур, 1915; Ғәбделрәүф Ниязбаев. Көчлеләр һәм көчсезләр (Брадәрән Ғәлимовлар) // Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы.

[30] Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенең архивы. Р. Фәхретдиновтың шәхси фонды. Ф. 7, оп. 1, ед. хр. 11. 152-се бит.

[31] Ш у н д а  у ҡ. 146-сы бит.

те яҡлай. Әммә уның яҙмаларының теле башҡортсаға ҡарағанда нығыраҡ татарсаға тарта»[32].

Был осорҙа татар әҙәби теле төрки теле, ғәрәп, фарсы телдәре элементтары менән байытылған һүҙ яһаусы, лексик, фразеологик сараларға һәм синтаксик конструкцияларға бай була. Сығанаҡтарҙан күренеүенсә, был тел Башҡортостан шарттарында барған һайын башҡорт теле йоғонтоһона бирелә. XX быуат башы башҡорт прозаһы һәм драматургияһының тел үҙенсәлектәрен башҡорт әҙәби теле тарихы күҙлегенән байҡап, түбәндәгеләрҙе әйтергә мөмкин.

1. Был осорҙа ҙур үҙгәрештәр бигерәк тә әҙәби телдең һүҙлек составында күренә. Ғәрәп һәм фарсы телдәре үҙләштереү сығанағы булыу яғынан әһәмиәтен юғалта. М. Ғафури, Р. Фәхретдинов, З. Һаҙи, Ғ. Рафиҡи әҫәрҙәрендә элек ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре сағыштырмаса күп ҡулланылһа, хәҙер инде А. Таһиров, З. Өммәти, Ф. Вәлиев хикәйә һәм повестарында улар бөтөнләй аҙ осрай. XX быуат башында һүҙлек составын тулыландырыуҙың башҡа юлы — йәнле һөйләү телендәге һүҙ һәм әйтемдәрҙең китапҡа инеү процесы активлаша. Башҡорт яҙыусылары, татар әҙәби телен файҙаланып, әҫәрҙәренең телен ҡыйыу рәүештә башҡорт һөйләү теленә яҡынлаштырҙылар. Быны түбәндәге башҡорт һөйләү теленә хас һүҙ һәм әйтемдәрҙең ҡулланылышы күрһәтә: *жәйләү, ҡурай уйнамаҡ, көйләмәк, ҡымыз, күн эшләмәк, тире иләмәк, ау ауламаҡ* (диал.), *тотош* (Р. Фәхретдинов); *ҡала, икмәк, мөйөш* (М. Ғафури); *йәптәшлек* (диал. тырышлыҡ, түҙемлек), *күтәрелеп бәрелеү, иң атаҡлы* (З. Һаҙи); *сыйыҡ* (диал.), *мәрәй, тирмә, торон, аңҡау* (диал. аңра), *аларыу, нәнә* (диал. авторҙың үҙе үк күрһәтеүенсә), *атағ* (диал. атау, исем), *эргә* (диал. йәшәгән урын), *яға* (диал. ҡултыҡ), *жылышыу* (диал.), *мының* (диал.) (Ф. Вәлиев); *бутал* (З. Өммәти); *уйға ырғытыу* (диал. уйға ҡалдырыу) (Ә. Таңғатаров); *илдән-йорттан ойат, чауҡалыҡ, йатыу* (һыуҙа), *өйәнке, тау итәге* (Ғ. Рафиҡи) һ. б.

Башҡорт көндәлек һөйләү лексикаһы персонаждар араһындағы ғәҙәти һөйләшеүҙе бирер өсөн бигерәк тә драматургияла киң ҡулланыла. Бәхтиәр Бәхтегәрәй улы «Ер һатыу» пьесаһында, мәҫәлән, аңлы рәүештә түбәндәге башҡорт ябай һөйләү теле элементтарын ҡуллана:

*Эткол илә Этҡусдының хатынлары, кейенеб, ҡалай тәңкәләр, киң-киң тастамалдар, уҡалар тотҡан жиләндәр кейеб. ҡунаҡ көтәләр. Башлаб старшина берлән Эткол, Этҡусды керәләр, аннан соң берәм-берәм башҡа ҡунаҡлар керәләр.*

— *Иҫәнме? Һаумы?*

— *Иҫәнме-һаумы?*

— *Иҫән генә тораһығыҙмы?*

— *Һау ғына торошаһығыҙмы?*

— *Нихәл, шәбмеһеңеҙ?*

---

[32] Цитата Ә. И. Харисовтың күрһәтелгән хеҙмәтенән алынды. Русса баҫмаһы. 277-се бит.

— *Һаумы-иҫәнме?*

Тағы ла миҫал: *Ҡара, мулла ағайың йәтеш төшерәме әллә? Һа, һа, һатышта, ҡыҙлар эсдә, мин — тышда; Ғәли татар берлән Сыдур икәүе дә һәйбәтләб кенә Йәмәт мулла алдына килеб улғыралар; ул бит йомард булса да аҡчалата бирмәй; тирә-йағында өйрөләб йөрөйләр* һ. б.

II Графика һәм фонология өлкәһендә түбәндәгеләр күҙгә ташлана:

1. XX быуат башҡорт прозаһының телендә, шул иҫәптән башҡорт теленең әй, арғаяш, һалйот, ҡыҙыл, эйек-һаҡмар һөйләштәрендә лә [33], 3-сө зат алмашы килеш менән үҙгәргәндә, эҙмә-эҙ рәүештә хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге *у* урынына һүҙ башында *а* килә: *аны, анан, аңа, анда.* Мәҫәлән: *аның туғрысында бик зур фаразларға төшөб аны әллә ниндәй бәхетле ҡыз идеб ҡалдырмаҡчылар иде* (З. Өммәти); *...аңа ҡаршы килә идем* (А. Таһиров); *аларға эйәреб, минем күңелем дә шайара* (Ә. Таңғатаров) һ. б.

2. Күп әҫәрҙәр өсөн һүҙ башында *ж* ҡулланыу хас: *Жайыҡ* (хәҙерге Урал йылғаһы), *жуатыу, жыйыу, жылмайыу, жыртыҡ* (А. Таһиров); *жылҡылдау, жылҡы, жау, жейеү, жышайыу, жылымса жилләр, жил жыуылдай* (Ф. Вәлиев); *жә, күрше, нишлийбез?* (М. Ғафури) һ. б.

Башҡорт теле өсөн *ж* ҡулланыу диалекталь күренеш һанала. Ул күберәк көнсығыш диалекттың айырым һөйләштәренә хас [34].

3. Тикшерелгән осорға ҡараған әҙәби текстарҙа, башҡорт теленең көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарына ингән бөтә һөйләштәрҙәге кеүек үк [35], *был* алмашында *б* урынына талғын (сонор) *м* өнөн ҡулланыу бар: *мына, үткән йыл ҡарышдың, үсмәдең* (М. Ғафури); *нишләтәсең инде мыны?* (Ғ. Ниязбаев); *менә, энеләрем, без мында эшне бөтөрдөк инде* (Б. Бәхтегәрәй улы) һ. б.

4. Башҡорт теленең ҡайһы бер һөйләштәрендәге кеүек, текстарҙа һүҙ башында һәм уртаһында *т* хәрефенең ҡайһы берҙә яңғырау *д*-ға күсеүе осрай: *йеде* (З. Өммәти); *йәшлек дулҡынлары* (Ә. Исәнбирҙин), *шадлыҡ* (Ә. Таңғатаров).

5. Ваҡыты-ваҡыты менән һүҙ уртаһындағы *п* хәрефе *ф*-ка күсә: *туфраҡ* (З. Һаҙи); *йафраҡ* (З. Өммәти) һ. б.

III. Үҙгәрештәр телдең башҡа өлкәләрендә лә, мәҫәлән, морфологик һәм синтаксик йәһәттән дә, ҙур ғына. Морфологияла текстка башҡорт һәм татар йәнле һөйләшенән алынған яңы формаларҙы ҡулланыу типик күренешкә әйләнде. Проза һәм драматургия телен башҡорт теленең диалекттары менән сағыштырып анализлау шуны күрһәтә:

1. Исем яһаусы форманттар араһында, хәҙерге башҡорт әҙәби

---

[33] Ҡарағыҙ: Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка в сравнительно-историческом освещении. М., 1976. 27-се бит.

[34] Ентеклерәк ҡарағыҙ: Максютова Н. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 40—42-се биттәр.

[35] Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М., 1979. 40-сы бит; Максютова Н. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 33-сө бит.

телендәге **кеүек**, *-лыҡ* аффиксы иң продуктив аффиксҡа әйләнә: *байлыҡ, тырышлыҡ, иркәлек* (Р. Фәхретдинов); *шатлыҡ, киңлек, наданлыҡ* (З. Өммәти); *ҡараңғылыҡ, матурлыҡ* (Ә. Исәнбирҙин); *дошманлыҡ, мәңгелек* (Ә. Таңғатаров) һ. б.

2. Башҡорт теленең көньяҡ диалекты һөйләштәрендә киң ҡулланылған *-ма//-мә (шаҡарма, саҡма* һ. б.)[36] аффиксының уғыҙ варианты XX быуат башы башҡорт прозаһы телендә лә ҡулланыла: *сандуғачларның сайрамасы, чиңерткәләрнең сикереб-сикереб уйнамасы; Жайыҡ суының аҡмасы; кәкүкләрнең ҡычҡырмасы* (Ә. Исәнбирҙин) һ. б.

3. Әҙәби текстарҙа ҡулланылған *-уыҡ//-үек* аффиксы көньяҡ диалекттың урта һәм көньяҡ-көнсығыш һөйләштәре өсөн хас[37]: *йәш ҡызлар күргән ваҡытында үзене ҡалтырауыҡ ала иде* (З. Һаҙи).

4. Әсәрҙә иң актив ҡулланылған зат һәм күрһәтеү алмаштары *(мына, алар, аңа, аны, аның)* башҡорт теленең диалекттарында ла актив ҡулланыла. Миҫалдар: *Мына минем Ғабдрахманым мында торғанда сап-сау көйөнчә сыуға китеб үлде* (М. Ғафури): *алар аны бик йахшы беләләр, теләсәң, кем икәнен анда сөйләб бирерләр* (Ғ. Ниязбаев); *аның йазмышы да бәхетсезләрчә иде* (Ғ. Рафиҡи) һ. б.

5. Сифаттар бөтәһенән элек аффиксһыҙ килә: *бейек, ҡара, күркәм* (З. Өммәти); *гүзәл, йыуаш, мөләйем, ал, йәшел* (Ә. Исәнбирҙин); һүҙ яһаусы форманттар араһында иң продуктив аффикс булып *-лы//-ле* аффиксы тора: *ҡарлы йағмур, йалтырауҡлы нәрсә* (З. Өммәти); *нурлы йөз* (Ә. Исәнбирҙин).

6. Тикшерелгән осор башҡорт прозаһының телендә хәҙерге башҡорт әҙәби теленә хас булған редупликацияның төрлө төрҙәре киң таралған:

а) һүҙ формаларының тулы редупликацияһы: *бейек-бейек тирәкләр* (З. Өммәти); *өйөр-өйөр жылҡы көтөүләре* (Ф. Вәлиев); *төрлө-төрлө, ваҡ-ваҡ* (Ә. Таңғатаров); *ваҡыт-ваҡыт, төркөм-төркөм, көтөү-көтөү* (Ғ. Рафиҡи);

б) һүҙ аффикстарының тулы редупликацияһы: *шатлана-шатлана, боролоб-боролоб* (Ә. Исәнбирҙин); *ҡарай-ҡарай, интегеб-интегеб, йамай-йамай* (В. Солтанов); *көлөшә-көлөшә, ашыға-ашыға* (А. Таһиров);

в) һүҙҙең баш өлөшөн генә, *-б-* йәки *-м-* структур морфемаһын ҡушып ҡабатлау: *йәм-йәшел ужымлар, тыб-тын урман* (З. Өммәти); *ҡыб-ҡызыл* (В. Солтанов);

г) оҡшатыу һүҙҙәренең тулы редупликацияһы: *шатыр-шотор* (З. Өммәти); *шаҡ-шаҡ, туҡ-туҡ* (В. Солтанов), *лығыр-лығыр* (Ф. Вәлиев);

д) ике үҙ аллы нигеҙҙән яһалған парлы исемдәр: *ара-тирә, тирә-йаҡ, алыш-биреш, алдым-бирҙем* (З. Өммәти); *баш-айаҡ* (Ә. Исәнбирҙин); *мал-тыуар* (К. Туйкин);

---

[36] Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 52-се бит.
[37] Шунда уҡ. 115-се бит.

е) парлы сифат һәм рәүештәр: *ишекле-төрле* (В. Солтанов); *ҡарлы-йамғырлы* (З. Өммәти); *аллы-гөллө, эселе-суыҡлы* (А. Таһиров) һ. б.

7. Исемдәрҙе килеш менән үҙгәрткәндә, *-а//-ә* һәм *-ға//-гә* аффикслы төбәү килеште, *-дын//-дин* һәм *-дан//-дән* аффикслы сығанаҡ килеште ҡулланыуҙағы төрлөлөк юғала: тәүге форманттар, йәғни китап варианттары, әҙәби ҡулланылыштан төшөп ҡала. Был осорҙа башҡорт һәм татар телдәренә хас килеш ялғауҙарының активлашыуы күренә. Традицион килеш формаларынан *-ы+ны, -е+не* өсөнсө зат эйәлек аффиксы ҡабул иткән төшөм килеш күрһәткесле форма сағылыш таба әле: *китабыны, ике ҡулыны, ҡайтыуыны, уйлағаныны* (Ә. Иҫәнбирҙин); *йегет башыны түбән салды* (Ә. Таңғатаров).

8. Ҡылымдарҙа һәм ҡылым менән килгән һүҙҙәрҙә традицион формалар әле ҡулланыла. Текстарҙа инфинивтың *-маҡ//-мәк* аффиксы менән килгән уғыҙ формаһы бигерәк тә йыш осрай: *ҡымыз эчмәк вә сәйәхәт итмәк* (Р. Фахретдинов). Ул йыш ҡына төбәү һәм урын-ваҡыт килеш аффикстары *-мағa//-мәгә, -маҡда//-мәкдә* менән ҡулланыла. Был форманы, мәҫәлән, Р. Фәхретдинов йыш ҡуллана: *уҡымаға, күңел бозмаға, Әсмә йанына китмәгә мөмкин дәгел иде, вармаҡда* һ. б.

Инфинитив мәғәнәһен биргән *-маҡ//-мәк, -мағa//-мәгә* кеүек формаларҙың башҡорт теле һөйләштәренә хас булыуын әйтеп үтергә кәрәк[38].

Бынан тыш, тикшерелгән әҙәби текстарҙа үткән замандың билдәле бер ваҡытында тамамланған дауамлы хәрәкәтте белдергән *иде* ярҙамсы ҡылымы менән урын-ваҡыт килештәге инфинитив төркөмө актив ҡулланыла: *башҡорд лисаныны үгрәнмәкдә иде* (Р. Фәхретдинов); *күңелләргә шадлыҡ бирмәкдә иде* (Ә. Иҫәнбирҙин).

Үткән заман сифат ҡылымдың *-мыш//-меш* һәм исем ҡылымдың *-дыҡ//-дек* аффикслы китап теле формалары ла актив ҡулланыла: *күзе илә күрмеш вә ишетмеш әкбәре* (Р. Фәхретдинов); *йар өстөнә үстерелмеш баҡчалар* (Ә. Иҫәнбирҙин); *ул хатын-ҡызының төрлө төсдә, төрлө тәбиғәтдә булдығыны күреб белгән иде* (З. Һаҙи) һ. б.

Үткән заман сифат ҡылымдың *-мыш//-меш* аффикслы формаһы башҡорт теленең һөйләштәрендә йыш ҡына ҡулланыла[39].

Әҙәби текстарҙа башҡа традицион ҡылым формалары ла осрай. Мәҫәлән, үткән замандың *-мыш иде//-меш иде* тибындағы уғыҙ ҡушма формаһы: *анлар тормошона ғашиҡ улмыш иде; иртә бынлар хаҡында әйделмеш кебе иде* (З. Өммәти); *бер-беренә мөхәббәт идмешләр иде* (Р. Фәхретдинов) һ. б. Әммә был күрһәткестәр, дөйөм алғанда, XX быуат башында ижад иткән Р. Фәхретдинов, З. Һаҙи, Х. Сәғҙи, З. Өммәти, Ә. Иҫәнбирҙин кеүек өл-

---

[38] Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 140—142-се биттәр; Максютова Н. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 140, 236-237-се биттәр.

[39] Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 142-се бит.

кән быуын яҙыусылары ижадына хас ине. Һуңғы быуын яҙыусыларының һәм драматургтарының әҫәрҙәрендә ҡылымдың башҡорт һәм татар телдәренә хас булған затлы һәм затһыҙ формалары күпләп бирелә башлай. Уларға түбәндәгеләр ҡарай:

а) хәҙерге замандың *-а//-ә, й* формалары;

б) билдәле үткән замандың *-ды//-де* формалары;

в) билдәһеҙ үткән замандың *-ған//-гән* формалары;

г) тамамланмаған үткән замандың *-а//-ә иде* формалары;

д) үткән киләсәк замандың *-ыр//-ер иде* формалары;

е) билдәле киләсәк замандың *-ачаҡ//-әчәк* формалары;

ж) хәҙерге заман сифат ҡылымдың *-а//-ә торған* формалары;

з) үткән заман сифат ҡылымдың *-ған//-гән, -ҡан//-кән, маған//-мәгән* формалары;

и) хәл ҡылымдың *-ыб//-еб, -ғач//-гәч* формалары һ. б.

Миҫалдар: *һәр ҡайысы үз урынларына йаталар: йаз йегде* (А. Таһиров); *ҡояш байыды, һәр кем эшдән туҡтала, йата, йоҡлай; ул мине шундуҡ ҡунаҡ итергә өйөнә алыб китте; хыйал диңгезенә чумған иде; уҡыған китабын ҡочаҡлаб жылый иде; шул чаҡларда ул мине лә күргеләгән икән; төнгө сәгәт икеләрдә атлар киләчәк иде; тулған айның аҡсыл нурларына күмелгән тыныч ҡына йаҡты жәйге төн иде* (Ғ. Рафиҡи); *таулар ишелеб, ташлары берлә басдырур кебе тойола* (Ә. Таңғатаров); *мин ни хәлдәр идәрмен; әле шундай шадлыҡлар булғач, ҡартайыб торорға йараймы суң?* (Ғ. Ғүмәрский); *аҡчаны һанай башладым; ҡайсысын ордым, ҡайсысын һуҡдым* (Б. Бәхтегәрәй улы) һ. б.

9. Әҙәби текстарҙағы ярҙамсы һүҙҙәр араһында *кебе, берлә/берлән, белә/белән* бәйләүестәре киң ҡулланылған. Уларҙың ҡайһы берҙәре хәҙерге көндә башҡорт һөйләштәрендә лә йәшәп килә[40]. XX быуат башы башҡорт прозаһының телендә *да//дә, бик, иң* көсәйтеү һәм йыйыу киҫәксәләре бик йыш ҡулланыла.

Синтаксиста шулай уҡ халыҡ һөйләү теленә тартылыу һиҙелә. Башҡорт прозаһының телендә хәбәрҙең иң киң таралғаны булып, хәҙерге башҡорт һәм татар әҙәби телдәрендәге һымаҡ, ҡылым менән килгән хәбәр тора. Ул ябай, ҡушма һәм ҡатнаш булырға мөмкин. Ҡатнаш хәбәр йыш ҡына *иде* ярҙамсы ҡылымы менән яһала һәм үткән замандың төрлө төҫмөрҙәрен бирә. Миҫалдар: *сүзләре телләрдә туҡтаусыз йөрөй иде* (М. Ғафури); *балалары көн дә аның ҡаршына чығалар иде* (А. Таһиров); *...ауыл гөж килеб тора иде* (М. Ғафури); *мәңге төн дауам иткән шикелле итеб күрсәтә иде* (Ғ. Рафиҡи) һ. б.

Тикшерелгән осорҙа эйәһеҙ һөйләмдәрҙе ҡулланыу активлаша, хәбәре *-ыб//-б, -ғач//-гәч* аффикслы хәл ҡылым һәм *-ған//-гән* аффикслы сифат ҡылым менән килгән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр нығына һәм хәҙерге төҫ ала. Шартлы һәм теркәүесһеҙ аналитик эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр менән бер рәттән теркәүесле аналитик эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр ҙә таралыш ала. Хәбәрҙәре

---

[40] Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 72-се бит; Максютова Н. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 60, 280-се биттәр.

үткән һәм хәҙерге заман формаһында бирелгән теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр шулай уҡ актив ҡулланыла.

Шулай итеп, килтерелгән миҫалдар XX быуат башында башҡорт яҙыусыларының үҙ туған телен әҙәби тел сифатында ҡулланырға тырышыуҙары көсәйеүен күрһәтә. Был ынтылыш бигерәк тә 1910 йыл «Шура» журналы ойошторған «Тел ярышы» барған ваҡытта күренде: айырым башҡорт яҙыусылары бында үҙ туған телендә яҙылған мәҡәлә, әҙәби әҫәрҙәр һәм фольклор материалдары ебәргәйне. Улар башҡорт телен әҙәби тел сифатында ҡулланыу буйынса тәүге практик аҙым яһаны. Был яҡтан Ғарифулла Ҡейековтың сығышы ҡыҙыҡлы: ул әҫәрен был ваҡытта дөйөм ҡабул ителгән татар теле орфографияһында яҙһа ла, уның телен «тас башҡортса ғына» яҙылған әҫәр тип һанай [41].

XX быуат башында башҡорттар араһында үҙенең баҫма органын булдырыуға тәүге ынтылыштар булып үтте. Мәҫәлән, 1908 йыл «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең башҡорт шәкерттәре һәм башҡорт интеллигенцияһының айырым вәкилдәре тарафынан «Тыу» («Байраҡ») журналының ҡулъяҙмаһы әҙерләнә һәм баҫтырыр өсөн «Шәреҡ» нәшриәтенә тапшырыла [42]. Әммә был ынтылыш татар буржуаз нәшерҙәренең ҡаршылығына осрай. Башҡорттарҙың үҙ милли әҙәби телен булдырыу мәсьәләһе тик совет осоронда ғына күтәрелә һәм тормошҡа ашырыла алды.

* * *

Шулай итеп, был бүлектә тикшерелгән башҡорт әҙәби теле тарихы, лингвистик принциптан сығып, өс бәләкәй осорға бүленде:
а) XIX быуаттың беренсе яртыһы;
б) XIX быуаттың икенсе яртыһы;
в) XX быуат башы.

XIX быуаттың беренсе яртыһында Урал — Волга буйы төрки әҙәби теленең башҡорт халыҡ һөйләү теле һәм фольклор теле менән үҙ-ара тәьҫир итешеү процесы һиҙелерлек күҙгә салына башлай. Ул үҙенең сағылышын Т. Ялсығолов, Ә. Ҡарғалы, Һ. Салихов, Ш. Зәки, М. Ҡотош-Ҡыпсаҡи, Ғ. Соҡорой кеүек әҙиптәр йөҙөндә суфыйсылыҡ әҙәбиәте әҫәрҙәрендә тапты. Суфыйсылыҡ поэзияһы текстарында традицион тел саралары менән бер рәттән йәнле һөйләү теле саралары ла ҡулланыла башлай. Был ҡомартҡылар теленең грамматик төҙөлөшөнә лә, лексик составына ла ҡағыла. Шағирҙар һәм текстарҙы күсереүселәр һәр ваҡыт әҙмәэҙ төрки теленең традицияларын һаҡламай, сөнки улар, дөйөм алғанда, әҙәби тел нормаларын һаҡлаһа ла, яҙыуҙа туған теленең ҡайһы бер фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәрен сағылдырмай ҡала алмай.

---

[41] «Шура»ның тел ярышы. Ырымбур, 1910. 97-се бит.

[42] Ахмадиев В. И. Башкирская поэзия начала XX века. Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Уфа, 1971. 8-се бит.

Халыҡ һөйләү телендә йәшәгән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр тарихи-документаль һәм эпистоляр текстарҙа ла актив ҡулланылды. Уларҙа рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә йыш осрай. Әммә яҙма әҙәби традиция, ғәрәп, фарсы һүҙҙәре һәм изафеттары был осор дини әҙәбиәт текстарында күпселекте тәшкил итә.

XIX быуаттың икенсе яртыһында мәғрифәтселек әҙәбиәте үҫә. Лингвистик күҙлектән ҡарағанда мәғрифәтселек әҙәбиәте текстары ул замандың башҡа ҡомартҡыларынан ҡырҡа айырыла. Уларҙа башҡорт теленең үҙ элементтары арта, әҙәби телдең яңы формалары булараҡ, публицистик һәм ғилми стилдәр ҡалыплаша. Был беренсе нәүбәттә М. Аҡмулла һәм М. Өмөтбаев әҫәрҙәренә ҡағыла.

XX быуаттың башындағы әҙәби текстар тел яғынан шаҡтай ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы. Ҡайһы бер текстарҙа халыҡ һөйләү теле лексик, фонетик, грамматик, структур һәм стилистик йәһәттән традицион әҙәби тел менән тығыҙ бәйләнеп килә. Был ҡулъяҙма текстарҙа күренә. Башҡорт шәжәрәләренең, тәуарихтарының, С. Яҡшығолов, Х. Ғәбитов, Ш. Әминев, Б. Бәхтегәрәй улы, Ғ. Ҡейеков кеүек ҡайһы бер башҡорт шағирҙары, яҙыусылары һәм драматургтарының теле башҡорт халҡының һөйләү теленә яҡынайыу тенденцияһын тотто. Шуға күрә XIX быуат аҙағында — XX быуат башында рус графикаһы нигеҙендә хәҙерге башҡорт яҙыуын төҙөүгә тәүге тырышлыҡтар (рус ғалимдары А. Бессонов, Н. Ҡатанов һәм башҡорт ғалимы М. Ҡулаев төҙөгән әлифбалар, В. Ҡатаринский менән М. Ғ. Ҡыуатов төҙөгән һүҙлектәр, уҡыу китаптары, христиан миссионерҙарының тәржемә ителгән дини китаптары) тәбиғи күренеш ине.

Был осорҙоң башҡа әҙәби текстары, бигерәк тә баҫма текстарҙың күбеһе, бер яҡтан, әле тулыһынса традицион төрки йоғонтоһонан арынып бөтмәгән булһа, икенсе яҡтан, Башҡортостан шарттарында һәр ваҡыт башҡорт теле йоғонтоһо аҫтында булған татар матбуғат телендә яҙылған.

1905—1907 йылдарҙағы революциянан һуң татарса китап баҫыу һәм нәшриәт эшенең үҫеүе күп осраҡта иҫке татар әҙәби телен нығытыуға булышлыҡ итте. Башҡорт шағирҙары һәм яҙыусылары үҙҙәренең әҫәрҙәрен ошо телдә баҫтырып сығарҙы. Ләкин ул осор башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәренең теле башҡорт халыҡ һөйләү теленә яҡынлығы менән айырыла. Татар матбуғат теле Башҡортостан шарттарында, татар теленән башҡа, башҡорт һәм рус телдәре йоғонтоһон да актив кисерә.

Шуның менән уның лексик һәм грамматик төҙөлөшөндә үҙенсәлекле локаль һыҙаттар барлыҡҡа килә. Быға миҫал булып башҡорт һәм татар шағиры М. Ғафури менән татар шағиры Ғ. Туҡайҙың бер-береһенән теле, бигерәк тә лексикаһы, яғынан айырылған әҫәрҙәре тора ала. Ике яҙыусы ла рәсми татар телендә ижад итһәләр ҙә, М. Ғафури, Ғ. Туҡайҙан айырмалы рәүештә, башҡорт халҡының тормошо һәм көнкүреше менән туранан-тура бәйләнгән лексик һәм фразеологик элементтарҙы иркен ҡуллана. Был ике шағирҙың ижады ике туғандаш телдең үҙ-ара тәьҫир

итешеүенә асыҡ миҫал булып тора. Был хәл башҡорт әҙәби теле тарихын ғына түгел, татар әҙәби теле тарихын тикшергән хеҙмәттәрҙә лә иҫәпкә алынырға тейеш.

Шулай итеп, XIX быуат һәм XX быуат башы башҡорт әҙәби теле үҙенең функцияһын башҡарып ҡына ҡалмаған, ә халыҡ һөйләү теле һәм фольклор теле менән үҙ-ара аралашып, йоғонто яһашып, артабан үҫкән. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙен тәшкил иткән башҡорт теле тәүҙә — «төрки», ә аҙаҡ килеп, XIX быуат аҙағында — XX быуаттың тәүге ун йыллыҡтарында, татар матбуғат теле менән үҙ-ара йоғонто яһаша һәм шул процестың нәтиҗәһе рәүешендә әҙәби тел кимәленә күтәрелә.

## III бүлек

# СОВЕТ ОСОРО — БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ҮҪЕШЕНДӘГЕ ЯҢЫ ЭТАП

*Беренсе глава*

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ СЫҒАНАҠТАРЫ

Совет власының тәүге көндәренән үк, бигерәк тә 1919 йылда Башҡорт Автономиялы Республикаһы төҙөлгәс, Башҡортостанда дөйөм халыҡ һөйләү теленә нигеҙләнгән әҙәби тел булдырыу өсөн ҙур әҙерлек эштәре башланды. Был эш ҡатмарлы ла, ауыр ҙа, яуаплы ла ине, сөнки бөтөнләй яңы нигеҙҙә алфавит, орфография төҙөргә, фонетик, грамматик һәм лексик нормаларҙы билдәләргә кәрәк ине.

Шулай ҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теле бөтөнләй буш ерлектә барлыҡҡа килмәне. Билдәле булыуынса, XX быуатҡа тиклем башҡорттар өсөн яҙма тел вазифаһын иҫке төрки теленең (уны күберәк «төрки» тип йөрөттөләр) Урал — Волга буйы варианты үтәне. Дөрөҫөн әйткәндә, Урал — Волга буйы төркийен «яҙма тел» тип атау дөрөҫ тә түгел, сөнки был термин күберәк тарихтың билдәле бер дәүерендә халыҡтың яҙмаға булған мохтажлығын ваҡытлыса ҡәнәғәтләндерә торған сит телгә ҡарата ҡулланыла[1]. Урал — Волга буйы төркийенә килһәк, уның лексик һәм грамматик ҡоролошо, бигерәк тә өндәр составы, дөйөм төрки традицияларын һаҡлауы һәм бөтә әҙәби телдәрҙең дә консерватив булыуы сәбәпле, халыҡ йәнле һөйләү теленән бер аҙ айырылһа ла, дөйөм төрки нигеҙҙә барлыҡҡа килгән башҡорт теленең төп һүҙлек фондын, грамматик ҡоролошоноң күпселек үҙенсәлектәрен яҡшы сағылдырҙы, ә иң әһәмиәтлеһе — был тел киң халыҡ массалары өсөн аңлайышлы ине: «төрки» телендә хат һәм эш ҡағыҙҙары яҙылды, ырыу һәм ҡәбилә тормошондағы тарихи ваҡиғаларҙы сағылдырған шәжәрәләр төҙөлдө, әҙәби һәм публицистик әҫәрҙәр ижад ителде, — бер һүҙ менән әйткәндә, ул башҡорт халҡының культура һәм социаль тормошондағы яҙмаға булған ихтыяждарҙы заманына ярашлы рәүештә тулыһынса ҡәнәғәтләндерҙе. Шуға күрә беҙ Урал — Волга буйы төркийен хаҡлы рәүештә Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт яҙма әҙәби теле тип атай алабыҙ.

[1] Ефимов А. И. История русского литературного языка. М., 1961. 9-сы бит.

Урал — Волга буйы төркийенән башҡа, күп кенә функциональ саралары шымартылған һәм нормаларға яҡынлаштырылған, лексик һәм грамматик ҡоролоштары диалекттарҙан юғарыраҡ торған халыҡ ижады әҫәрҙәренең теле йәшәп килде. Поэтик халыҡ ижады әҫәрҙәренең теле, бөтә халыҡ өсөн аңлайышлы булыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер сәбәптәр (бигерәк тә яҙмаһының булмауы, ҡулланыу сфераһының тарлығы, стиль йәһәтенән айырымланмауы) нигеҙендә әҙәби тел юғарылығына күтәрелә алмай. Ләкин фольклор теле әҙәби тел ойошҡан осорҙа уның сығанағы булараҡ ҙур урын алды.

Урал — Волга буйы төркийе һәм фольклор теленән башҡа, территориаль диалекттары һәм һөйләштәре менән айырымланған дөйөм башҡорт һөйләү теле бар. Ерле һөйләштәр бер-береһенән һүҙ, өн һәм грамматик үҙенсәлектәре менән айырылһалар ҙа, уларҙың һүҙлек составында, фонетикаһында һәм грамматикаһында дөйөм яҡтар күберәк. Бындай дөйөмлөктәр һөйләштәрҙе берләштерә, төрлө диалектҡа ҡараған кешеләрҙең бер-береһе менән иркен аралашыуына мөмкинлек бирә. Ерле һөйләштәрҙәге дөйөм яҡтарҙың иң ҙур өлөшө хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙендә ята.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теле төп өс сығанаҡ нигеҙендә формалашты:

1) Урал — Волга буйы төркийе;
2) поэтик халыҡ ижады әҫәрҙәренең теле;
3) дөйөм халыҡ йәнле һөйләү теле.

Үҙенең артабан үҫеү һәм юлға һалыныу процесында башҡорт әҙәби теле бай тарихы һәм күп быуатлы традициялары булған рус әҙәби теленең ыңғай тәьҫирен кисерҙе, уның йоғонтоһо нигеҙендә яңы саралар менән байыҡты. Рус һәм башҡорт телдәре мөнәсәбәтенең оҙайлы тарихы бар, һәм унда ике төп этапты билдәләп була. Беренсе этап башҡорт халҡы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған тарихи ваҡиғанан — XVI быуатта Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуынан башлана. Оҙаҡ йылдар буйына бергә йәшәү һөҙөмтәһендә башҡорт теленә рус теленең йоғонтоһо, бигерәк тә лексик үҙләштереүҙәрҙең күләме, арта. Икенсе этап Октябрь революцияһының еңеүенән һуң башлана. Рус теле, СССР халыҡтарының милләт-ара аралашыу теленә әүерелеп, башҡорт әҙәби теленең бөтә кимәлдәренә лә, жанр-стиль төрҙәренә лә йоғонто яһай.

### *1. Урал — Волга буйы төркийе һәм уның хәҙерге башҡорт әҙәби теленә мөнәсәбәте*

XX быуатҡа тиклем башҡорт халҡы өсөн әҙәби тел булып хеҙмәт иткән Урал — Волга буйы төркийенең нигеҙҙәре боронғо уйғыр яҙма теленә барып тоташа. Күп быуаттар буйына төрлө төрки халыҡтары өсөн әҙәби тел булып хеҙмәт итеүе осоронда ул йәнле

төрки телдәре һәм диалекттары йоғонтоһонда үҙгәрештәр кисерә, уның региональ төрҙәре һәм варианттары барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, уғыҙ һәм ҡыпсаҡ телдәренең тәьҫирендә уның фонетикаһына ла, грамматикаһына ла, лексикаһына ла уғыҙ-ҡыпсаҡ элементтары үтеп инә.

Ҡ. З. Әхмәров башҡорт әҙәби теленең үҫеүенә һәм формалашыуына бағышланған бер мәҡәләһендә былай тип яҙҙы: «Икенсе яҡтан, «төрки» тел күп кенә халыҡтар тарафынан ҡулланылған дөйөм әҙәби тел булһа ла, ул бөтә ерҙә лә бер төрлө булмаған: ниндәй халыҡ тарафынан ҡулланылһа, уға шул халыҡтың теле тәьҫир итмәй ҡалмаған. Беҙҙә ҡулланылған «төрки» — ул шул дөйөм әҙәби телдең өлкә варианты. Сөнки шул телдәге яҙма ҡомартҡыларҙы тикшергәндә, уның лексик составына, грамматик төҙөлөшөнә генә түгел, хатта айырым осраҡтарҙа уның фонетик системаһына ла башҡорт теленең йоғонтоһо күҙгә асыҡ бәреләү»[2].

Урал — Волга буйҙарында йәшәгән төрки халыҡтары өсөн болғар, башҡорт һәм татар телдәренең йоғонтоһо нигеҙендә иҫке төрки теленең бер варианты — Урал — Волга буйы төркийе барлыҡҡа килә. Билдәле, оҙайлы йәшәү һәм төрлө халыҡтарҙы хеҙмәтләндереү осоронда ул үҙгәрештәр кисереп тора: бер үк грамматик мәғәнәләрҙе биреү өсөн вариантлы грамматик формаларҙың ҡулланылыуы күҙәтелә (сифат ҡылымдарҙың *-ған//-гән* һәм *-мыш//-меш* ялғауҙары менән яһалыуы, сығанаҡ килеш өсөн *-дан//-дән* һәм *-дин* ялғауҙарының ҡулланылыуы, бойороҡ ҡылымдарҙың ялғауһыҙ һәм *-ғыл//-гел* ялғауҙары менән яһалыуы һ. б.); ҡайһы бер грамматик күрһәткестәр, һирәгәйгәндән-һирәгәйә барып, пассив запасҡа күсә, юғала, икенсе төрлө күрһәткестәр менән алмашына; уның лексик составы ла һәр ваҡыт бер төрлө булмай.

Урал — Волга буйы төркийе фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәре менән хәҙерге башҡорт йәнле һөйләү теленән бер аҙ айырылған. Был региональ төрки телендәге яҙма ҡомартҡылар ғәрәп яҙыуында башҡарылған, һәм башҡорт теленең специфик *һ, ҫ, ҙ* өндәрен биреү өсөн махсус тамғалар булһа ла (һ - ه, ҫ - ث, ҙ - ذ һәм ظ), улар тик ғәрәп һүҙҙәрендә генә ҡулланылғандар, ә төп төрки һүҙҙәрендә *һ* ~ *ҫ* өндәре *с* аша (*һандыҡ* урынына *сандуҡ*, *һигеҙ* урынына *секиз*, *иҫке* урынына *иске*, *һайыҫҡан* урынына *сайысҡан*), *ҙ* өнө *з* йәки *д* аша (*беҙ* урынына *без*, *яңғыҙ* урынына *ялғуз*, *яҙыҡ* урынына *язуҡ*; *ҡоҙоҡ* урынына *ҡудуҡ*, *иҙел* урынына *идел*, *ҡоҙа* урынына *ҡуда*) бирелгәндәр. Халыҡ йәнле һөйләү телендәге башҡа ҡайһы бер өндәр ҙә Башҡортостан ерлегендә барлыҡҡа килгән Урал — Волга буйы төрки телендәге ҡомартҡыларҙа сағылыш алмаған: *с* ~ *ч* (*саҡрым* урынына *чаҡрым*, *соҡор* урынына *чоҡор*, *тимерсе* урынына

---

[2] Ҡасим Әхмәр. Башҡорт әҙәби теленең формалашыу һәм үҫеү юлдары // Әҙәби Башҡортостан. 1957, № 4. 69-сы бит.

*тимерче, кис* урынына *кич), ғ(г) — у(ү), ғ(г) — й (ауыр* урынына *ағыр, һыуыҡ* урынына *суғуҡ, һыйыр* урынына *сығыр, төймә* урынына *түгмә)* һ. б. Бындай күренештәрҙе әҙәби телдең консервативлығы һәм традицияға тоғро булыуы, йәғни йәнле һөйләү телендәге өҙлөкһөҙ барған үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алмайынса, элеккесә ҡуллана барыуы менән аңлатырға мөмкин. Ләкин башҡорт йәнле һөйләү теле үҙенең йәшәү осоронда Урал — Волга буйы төркийенән һәр ваҡыт ошо кимәлдә айырылмауы ла мөмкин. Боронғораҡ ваҡытта һөйләү теле, бигерәк тә уның ҡайһы бер диалекттары һәм һөйләштәре, иҫке төрки теленә яҡын да булғандыр. Башҡорт йәнле һөйләү телендә бик боронғо осорҙарҙа яҙып ҡалдырылған ҡомартҡылар булмау сәбәпле, беҙ бөгөн, әйтәйек, XIII йәки XV быуаттарҙа башҡорт теле фонетикаһының, грамматикаһының нисек булғанын асыҡ ҡына белә алмайбыҙ. Шулай ҙа һуңғараҡ, XVIII—XIX быуаттарҙа йәнле һөйләү теле нигеҙендә төҙөлгән башҡорт яҙма ҡомартҡыларын тикшереү нигеҙендә ул ваҡытта күп кенә һүҙҙәрҙең хәҙергегә ҡарағанда бөтөнләй икенсе төрлө яңғырағанлығын әйтә алабыҙ. Мәҫәлән, XVIII быуаттың аҙаҡтарында Миңдеяр Биксурин йәки Петр Учадамцевтың башҡорт ҡулъяҙма һүҙлектәрендә [3] хәҙерге башҡорт теле менән сағыштырғанда бындай үҙенсәлектәр бар:

1) *с* һәм *ч* өндәренең параллель ҡулланыуы *(сач ~ чәч, балсыҡ ~ балчыҡ, себен ~ чебен, сасарға ~ сачарға);*

2) *ғ(г)* һәм *й, ғ(г)* һәм *у(ү)* өндәренең параллель ҡулланылыуы *(сығыр ~ сыйыр, мөгөш ~ мөйөш; ағыз ~ ауыз, шуғлә ~ шәүлә);*

3) бер генә һүҙҙә лә хәҙерге башҡорт теленә хас *ҙ, һ, ҫ* өндәренең сағылмаған булыуы *(оҙан* урынына *озан, ҙур* урынына *зур, ҡуҙ* урынына *ҡуз, дуңғыҙ* урынына *дуңғуз; һеңле* урынына *сеңел, һөймәк* урынына *сөймәк, аҫау ат* урынына *асау ат, киҫмәк* урынына *кисмәк)* һ. б. [4].

Бындай өлгөләр дөйөм башҡорт телендәге специфик өндәрҙең, шулай уҡ ҡайһы бер өндәрҙең тарихи үҙгәреүе һәм сиратлашыуы һуңыраҡ осорҙа — сама менән XVI—XVII быуаттарҙа — барлыҡҡа килеүен иҫбатлай, сөнки хатта XVIII быуаттың аҙаҡтарында ла уларҙың ҡулланылышы бер төрлө булмаған. Быларҙан сығып, беҙ ҡасандыр башҡорт йәнле һөйләү телендәге дөйөм төрки элементтар хәҙергегә ҡарағанда Урал — Волга буйы төркийенә яҡыныраҡ булыуын фараз итә алабыҙ. Һуңыраҡ башҡорт йәнле һөйләү телендә төрлө тарихи үҙгәрештәр, ырыу-ҡәбилә телдәре һәм ерле һөйләштәрҙең аралашыуы, күрше йәшәгән ҡәрҙәш һәм ҡәрҙәш булмаған телдәрҙең йоғонтоһо нигеҙендә фонетик, морфологик, лексик-семантик үҙгәрештәр була, ләкин улар тотороҡло

---

[3] Россия Фәндәр академияһының архивы. Ф. 94, оп. 2, ед. хр. 18. Шунда уҡ. Ф. 94, оп. 2, ед. хр. 103а.

[4] Был һүҙлектәр тураһында ҡара: Ишбердин Э. Ф. Рукописные и печатные словари XVIII—XIX веков как источник изучения истории башкирского языка // Письменные памятники Башкирии. Уфа, 1982. 69—81-се биттәр.

Урал — Волга буйы төрки телендә бөтөнләй сағылмай йәки өлөшләтә генә сағылыш таба.

Урал — Волга буйы төркийенең башҡорт теленә булған йоғонтоһо халыҡ һөйләү теленең һүҙлек составындағы ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә бигерәк тә асыҡ күренә. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренең күпселеге дөйөм халыҡ йәнле һөйләү теленә яҙма төрки теле аша килеп инә, шунан һуң ғына уның айырып алынмаçлыҡ өлөшөнә әүереләл. Билдәле булыуынса, башҡорт халҡының ғәрәптәр менән туранан-тура, ҡыҙыу һәм йәнле аралашыуы булмай. Ғәрәп һүҙҙәре һәм формалары дөйөм халыҡ теленә ғәрәп телендә яҙылған әҙәбиәт аша ла күпләп килеп инә алмай, сөнки киң халыҡ ҡатламы ғәрәп телен белмәй, ғәрәпсә башлыса белемле дин әһелдәре генә уҡый-яҙа ала. Шул уҡ ваҡытта Урал — Волга буйы төркийендә яҙылған китаптарҙы уҡыу халыҡ араһында киң таралған була. Башҡорттар Ҡол Ғәли, Ғ. Болғари, Ә. Йәсәүи һәм башҡаларҙың әçәрҙәре менән яҡшы таныш була. Ислам дине лә башҡорттар араһында башлыса төрки телендә яҙылған әҙәбиәт аша тарала. Урал — Волга буйы төрки телендә яҙылған ҡулъяҙма һәм иçке баçма текстар, бигерәк тә уларҙың дини йөкмәткелеләре, ғәрәп һүҙҙәре менән сыбарланған була. Урал — Волга буйы төркийендә ғәрәп һүҙҙәре тышҡы формалары һәм мәғәнәләре яғынан бик көслө үҙгәрешкә бирелмәй. Төрки телендәге әҙәбиәттән йәнле халыҡ һөйләү теленә килеп ингәс һәм унда киң таралыш алғас, ғәрәп һүҙҙәре башҡорт теленең фонетик-морфологик ҡоролошона яраҡлаша башлай һәм мөһим үҙгәрештәр кисерә.

Ғәрәп телендәге *дж* өнө күпселек башҡорт һөйләштәрендә һүҙ башында *й* өнөнә, ә һүҙ уртаһында һәм аҙағында *ж* өнөнә күсә: *джинс — енес, джиһаз — йыһаз, джәбр — йәбер; иджад — ижад, һөджүм — һөжүм, тәджрибә — тәжрибә*; *д* өнө ике һуҙынҡы араһында һәм һуҙынҡы менән *й, у(ү), р* өндәренән һуң *ҙ* өнөнә күсә, башҡа позицияларҙа һаҡлана: *әдиб — әҙип, ғәдл — ғәҙел, ғадәт — ғәҙәт, ҡөдрәт — ҡөҙрәт; б* өнө һүҙ аҙағында һаңғыраулана һәм *п* өнөнә күсә: *китаб — китап, мәктүб — мәктәп, әдәб — әҙәп;* һүҙ аҙағында йәнәш тартынҡылар килһә, улар араһында һуҙынҡылар ҡуйыла, йәғни эпентеза күренеше күҙәтелә: *халҡ — халыҡ, рәсм — рәсем, зиһн — зиһен, бәхт — бәхет* һ. б.

Күп кенә ғәрәп һүҙҙәрен хәҙерге башҡорт әҙәби теле туранан-тура Урал — Волга буйы төркийенән үҙләштергән, ә һуңғараҡ улар, беренсе төркөмгә ҡарағанда аҙыраҡ кимәлдә булһа ла, йәнле һөйләү телендә таралып китә. Ләкин улар бөгөнгө көндә лә һөйләү телендә бик актив ҡулланылмай. Бындай һүҙҙәргә *сәнғәт, йәмғиәт, ижад, тасуири, нәтижә, мөрәжәғәт, мәғлүмәт, нәүбәт, сифат, тәҡдим, тәьçир, хөкүмәт, хәрәкәт, хәҡиҡәт, милек* һымаҡ ғәрәп һүҙҙәрен индерергә мөмкин. Башҡорт әҙәби теле лексикаһының күсә килеүе тураһында Ә. Ә. Юлдашев былай тип яҙҙы: «Башҡорт әҙәби теле үҙенең баштағы формалашыу осоронда элекке яҙма традицияла тупланған һәм хатта башҡорт халҡының белемле ҡатламының да актив запасына инмәгән ҙур лексик ҡат-

лам менән киң файҙаланды. 20-се һәм 30-сы йылдарҙа лексиканың ижтимағи-политик, фәнни-техник һәм башҡа терминдар менән байыҡтырыуҙа был иҫ киткес ҙур мираҫ иң ҡеүәтле сығанаҡтарҙың береһе булды. Башҡа һүҙ разрядтары ла был осорҙа ошо сығанаҡтан һис сикләүһеҙ файҙаланды»[5]. Үрҙә күрһәтелгәнсә, уларҙың күп кенә өлөшө әҙәби тел аша дөйөм халыҡ байлығына әүерелде. Ләкин әҙәби тел формалашыуының тәүге осоронда ҡулланып йөрөтөлгән ғәрәп һүҙҙәренең билдәле бер өлөшө әҙәби телдә нығынманы, йәнле һөйләү теле быңдай һүҙҙәрҙе ҡабул итмәне. Ҡайһы бер осраҡта ғәрәп һүҙҙәре менән саманан тыш мауығыу терминдар яһауҙа мәрәкәле хәлдәргә лә килтерҙе. Мәҫәлән, Н. К. Дмитриев гетерофемияға ошондай бер миҫал килтерә: «*Истилах* «һәләкәт эҙләү» тигән һүҙ, — тип яҙҙы ул, — башҡортса *потребителдәр кооперацияһы* тигән мәғәнәлә ҡулланылды(!); бынан барлыҡҡа килгән *мөстихләк һатып алыусы, потребителдәр кооперацияһының ағзаһы* тигәнде белдерә. Күрәһең, был рус теленән тәржемә ителгән термин, шуның менән бергә тәржемәсе өсөн *истребитель* һәм *потребитель* тигән рус һүҙҙәре араһындағы айырма бик үк асыҡ булмаған»[6].

Әҙәби тел лексикаһы урындағы һөйләштәрҙән килеп ингән, рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр, интернационализмдар менән байыҡҡан һайын, быңдай һүҙҙәр әҙәби телдә ҡулланыуҙан сыға барҙы. 30-сы йылдарҙың аҙағында был процесс бигерәк тә көсәйҙе. Һөҙөмтәлә ғәрәп теленән үҙләштерелгән күп кенә һүҙҙәр һәм терминдар төп башҡорт һүҙҙәре, рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр йәки рус теле аша ҡабул ителгән интернационализмдар менән алмаштырылды. Миҫал итеп түбәндәге һүҙҙәрҙе килтерергә була: *ғәреп* урынына *көнбайыш, шәреҡ* урынына *көнсығыш, шәкел* урынына *форма, хисәйәт* урынына *үҙсәнлек, лөғәт* урынына *һүҙ* йәки *һүҙлек, сәйәсәт* урынына *политика, һәндәсә* урынына *геометрия, фирҡә* урынына *партия, йөмһөриәт* урынына *республика* һ. б.

Үрҙә әйтелгәндәр ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр өлкәһендә Урал — Волга буйы төркиенең хәҙерге башҡорт әҙәби теленә ике төрлө йоғонто яһауын билдәләргә мөмкинлек бирә:

1) туранан-тура йоғонто, йәғни ғәрәп һүҙҙәре төрки теленән мәғәнә һәм төҙөлөштәре үҙгәрмәйенсә әҙәби телгә килеп инәләр;

2) ситләтелгән йоғонто, йәғни ғәрәп һүҙҙәре иң тәүҙә йәнле һөйләү теленә ҡабул ителә, ә уның аша әҙәби телгә килеп инә.

Икенсе осраҡта һөйләү теленең үҙсәнлектәренән сығып, быңдай һүҙҙәр мәғәнә һәм төҙөлөш йәһәтенән үҙгәрештәр кисерә.

Фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр менән эш икенсе төрләрәк тора. Фарсы һүҙҙәренең күп кенә өлөшө йәнле һөйләү теленә башҡорттарҙың иран телле халыҡтар йәки башҡа төрки халыҡтары менән йәнле аралашыуы һөҙөмтәһендә килеп инә; бы-

---

[5] Юлдашев А. А. Башкирский язык // Закономерности развития литературных языков СССР в советскую эпоху. М., 1969. 139-сы бит.

[6] Дмитриев Н. К. Строй тюркских языков. М., 1962. 201-се бит.

нан тыш, улар хәҙер башҡорттар таралған территорияла боронғо осорҙа йәшәгән иран телле халыҡтарҙан субстрат һүҙҙәр рәүешендә тороп ҡалған булыуы мөмкин. Был ике төрлө килеп ингән һүҙҙәрҙе айырып тормайынса, фарсы теленән үҙләштерелгән лексикаға түбәндәге берәмектәрҙе ҡаратырға була: *ҡыяр, сөгөлдөр, ҡамыр, баҡта, сәкән, кеҫә, тәҙрә, таҡта, сыраҡ, һеркә, елем, быяла, шешә, бол* (аҡса, байлыҡ, юл кәрәк-яраҡтары мәғәнәһендә), *тур* (тоҙаҡ), *сарыҡ, сүмес, һике, һабын, сым, йәтим, еҙнә, еңгә, һөлөк, таҫтамал* һ. б. Быныӊ һымаҡ фарсы һүҙҙәре хәҙерге башҡорт әҙәби теленә Урал — Волга буйы төркийенән түгел, ә башҡорт халҡыныӊ йәнле һөйләү теленән килеп ингән.

Башҡортостанда фарсы телендә яҙылған йәки фарсы теленән Урал — Волга буйы төркийенә тәржемә ителгән әҙәбиәт киӊ генә таралған була. Был турала, мәҫәлән, Россия Фәндәр академияһы Башҡортостан ғилми үҙәгенеӊ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторған археографик экспедициялар яҡшы мәғлүмәт бирә: ғәрәп һәм төрки телдәрендә башҡарылған ҡулъяҙма һәм иҫке баҫма китаптар менән бергә фарсы телендәге йәки фарсы теленән тәржемә ителгән текстар ҙа күп кенә осрай. Башҡорт һәм татар халыҡтары араһында фарсы әҙәбиәтенеӊ таралыуы Урал — Волга буйы төркийенә лә йоғонто яһамай ҡалмаған. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле ойошҡан осорҙа бындай фарсы элементтары уға органик рәүештә килеп инә, ә һуӊынан дөйөм халыҡ теленә күсә. Урал — Волга буйы төрки теленән хәҙерге башҡорт әҙәби теленә *һорнай* (музыкаль инструмент), *дәрүиш, остаз, шәкерт, яран, сәмреғош, тауис, януар, бәрәбәр, зәһәр, миһырбан, рәүеш, йәдкәр, йәкшәмбе, дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, йома, шәмбе, тәхет, таж* һымаҡ фарсы һүҙҙәре килеп ингән.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ғәрәп, фарсы, төп башҡорт һүҙҙәренән фарсы грамматик саралары менән яһалған берәмектәр осрай. Улар Урал — Волга буйы төрки теленеӊ йоғонтоһо аша барлыҡҡа килгән. Миҫалға фарсы күрһәткесле түбәндәге һүҙҙәрҙе килтерергә була: кире мәғәнә яһаусы *би-* префикслы *(бимаза, бинахаҡ, битараф, бихәбәр, бисара)*; шулай уҡ кире мәғәнә яһаусы *на-* префикслы *(нахаҡ, насар, нәмәрхәм)*; эйә булыу мәғәнәһен яһаусы *-кәр//-гәр* аффикслы *(хеҙмәткәр, хәйләкәр, фиҙакәр, һәүәҫкәр, сауҙагәр, эшмәкәр)*; *хана* (фарсыса *ханә* — йорт) элементлы *(китапхана, ашхана, сәйхана, ятаҡхана, ғибәҙәтхана)*; *йан, йән* (фарсыса *джан)* элементлы *(Фазылйан, Ғәлимйән, Тимерйән, Йәнбирҙе, Йәноҙаҡ)*; *хужа, ғужа* (фарсыса *ходжа)* элементлы *(Хужабирган, Хужахмәт, Иҙелғужа, Алтынғужа)*; *яр, йәр* (фарсыса *яр)* элементлы *(Муллаяр, Данияр, Бәхтийәр, Шәмсийәр, Ярмөхәммәт, Ярғужа)*; *гөл* (фарсыса ла *гөл)* элементлы *(Гөлнур, Гөлниса, Гөлкәй, Гөлдәр, Айгөл, Миӊлегөл, Гөлйөҙөм)* һ. б

Урал — Волга буйы төрки теленеӊ хәҙерге башҡорт әҙәби теленә йоғонтоһо туранан-тура үҙләштереүҙәрҙә генә түгел, ә ҡайһы бер тел ҡалыптарыныӊ килеп инеүендә лә сағыла. Билдәле булыуынса, төрки телдәре өсөн исемдәрҙән *-ла//-лә, -лан//-лән* аффикстары ярҙамында синтетик юл менән ҡылым яһалыу күренс-

ше хас: *таш — таш-ла, йыр — йыр-ла, бәй — бәй-лә, кер — кер-лән, өй — өй-лән* һ. б. Урал — Волга буйы төрки телендә ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәр өсөн аналитик юл менән ҡылым яһалыу күренеше өҫтөнлөк алған. «Ғәрәп масдарҙарын һәм сифат ҡылымдарын, шулай уҡ фарсы исемдәрен ҡылым класына күсереүҙә төрлө телдәр системаһы өсөн типологик һыҙат тип танылған аналитик юл менән ҡылым яһау юлы иң яҡшы сара булып сыҡты, — тип яҙҙы Г. Ф. Благова, — был сара урта быуат төрки әҙәби телдәрендә — сығатай, мәмлүк-ҡыпсаҡ, Урта Азия, Волга буйы төркиҙәрендә — киң таралыш алды. Сығатай теленә аналитик юл менән ҡылым яһауҙы индереү өсөн... фарсы (ихтимал, тажик) теле өсөн хас булған «исем нигеҙе (исем һүҙбәйләнеше) — *кәрдән* 'ҡылыу' ҡылымы» һәм «исем нигеҙе — *шодән* 'булыу' ҡылымы» тибындағы конструкцияларҙы калька итеп алыу туранан-тура стимул булып хеҙмәт итте»[7]. Ошо уҡ күренеш Урал — Волга буйы төрки телендә лә тулы сағылыш тапты. «Юрматы ырыуының шәжәрәһе»ндә[8] ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәр ярҙамында синтетик юл менән бер генә ҡылым да яһалмаған, тулыһынса аналитик юл хөкөм һөрә: *бәйдә бул-, һәләк бул-, ғәйеп бул-, хөсөд бул-, ғиш-ғишрәт бул-, мәғлүм ҡыл-, тәслим ҡыл-* һ. б. Ҡылым яһауҙа *ҡыл-, бул-, ир-, күр-, бир-, һөр-* һәм башҡа шуның һымаҡ һүҙҙәр ярҙамсы ҡылымдар сифатында сығыш яһай.

Фарсы һүҙҙәренең төп өлөшө дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телендә булғанлыҡтан, улар өсөн хәҙерге башҡорт әҙәби телендә синтетик юл менән ҡылым яһау хас: *шәкәр — шәкәр-лә, баһа — баһа-ла, наҙ — наҙ-ла, һабын — һабын-ла* һ. б. Ә яҙма әҙәбиәттән килеп ингән һәм йәнле һөйләү телендә актив ҡулланылмаған фарсы һүҙҙәренән ҡылымдар башлыса аналитик юл менән яһала: *намаҙ ҡылыу, йыназа ҡылыу* (йәки *уҡыу*), *ураҙа тотоу, зыян итеү* һ. б. Башҡорт әҙәби телендә күберәк яҙма әҙәбиәт аша килеп ингән ғәрәп һүҙҙәре өсөн аналитик юл менән ҡылым яһау хас: *тәржемә итеү, сәфәр ҡылыу* (йәки *итеү*), *ижад итеү, енәйәт итеү* (йәки *ҡылыу*), *иғлан итеү, ҡарар итеү, ғишыҡ тотоу* һ. б. Бындай аналитик формаларҙы беҙ башҡорт әҙәби теленә тик Урал — Волга буйы төрки теленән килеп ингән тип ап-асыҡ әйтә алабыҙ. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк йәнле халыҡ һөйләү теле тарафынан ҡабул ителгән һәм дөйөм халыҡ теле һүҙлек составының айырып алғыһыҙ өлөшөнә әүерелгән ғәрәп һүҙҙәре өсөн *-ла//-лә, -лан//-лән* ялғауҙары ярҙамында синтетик юл менән ҡылым яһалыу хас: *сихыр-ла, шөғөл-лән-, рух-лан-, ғәйрәт-лән-, кәйеф-лән-* һ. б.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән синтетик юл менән ҡылым яһалыуға ынтылыш тенденцияһы асыҡ

---

[7] Благова Г. Ф. Взаимодействие языковых уровней (арабо-персидские лексические заимствования и аналитическое словообразование в чагатайском языке) // Советская тюркология. 1983, № 4. 22—23-сө биттәр.

[8] Башкирские шежере. Уфа, 1960. 27—31-се биттәр.

күҙәтелә, һәм был ғәрәп-фарсы һүҙҙәренең дөйөм халыҡ теле тарафынан тулыраҡ үҙләштерелеүен белдерә. Ошо нигеҙҙә ғәрәп һәм фарсы телдәренән килеп ингән һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәренән ҡылымдар ике төрлө — аналитик юл менән дә, синтетик юл менән дә яһала: *фараз итеү — фаразлау, тәбрик итеү — тәбрикләү, тасуир итеү — тасуирлау, сабыр итеү* (булыу) — *сабырланыу, сәләмәт булыу — сәләмәтләнеү, кәсеп итеү — кәсепләнеү, инҡар итеү — инҡарлау* һ. б. Ҡылымдарҙың был ике төрлө яһалыу юлы һуңғы ваҡытта стилистик биҙәк ала бара: әгәр аналитик формалар китап теле өсөн хас булһа, синтетик формалар йәнле һөйләү теленә тартым ала.

Дөйөм төрки сығанаҡлы *ҡыл-* ярҙамсы ҡылымы хәҙерге башҡорт әҙәби теленең актив һүҙлек запасына ҡарамай, ул тик айырым ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән генә ҡулланылып йөрөй, һәм быңдай ҡушма ҡылымдар жанр-стиль биҙәктәре ала: *никах ҡылыу, намаҙ ҡылыу, енәйәт ҡылыу, зыян ҡылыу, сәфәр ҡылыу, мәшәҡәт ҡылыу* һ. б. Был күренеш һис һүҙһеҙ Урал — Волга буйы төрки теленең йоғонтоһон сағылдыра. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә *ҡылыу* урынына *итеү* ярҙамсы ҡылымы ҡулланыла.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең формалашыуында Урал — Волга буйы төрки теле төрлө синтаксик конструкцияларҙы яһауҙа иң әһәмиәтле сығанаҡ булды. Дөйөм башҡорт һөйләү теле лә, халыҡ ижады әҫәрҙәренең теле лә синтаксик яҡтан хәҙерге башҡорт яҙма әҙәби теленән көслө генә айырыла. «Башҡорт һөйләү теле өсөн хас булмаған революцияға тиклемге үҫеш осороноң күп кенә һыҙаттарын һеңдергән яҙма әҙәби телдең синтаксисы 20—30-сы йылдарҙа ысын халыҡсанлыҡ нигеҙендә яңырған ваҡытта ла көнкүреш-һөйләү теле синтаксисының бөтә төрҙәренән дә шаҡтай айырылған», — тип яҙҙы был турала Ә. Ә. Юлдашев[9]. Яҙма әҙәби телдең синтаксисы халыҡ йәнле һөйләү теленән һәм халыҡ ижады әҫәрҙәренең теленән иң алда үҙенең төҙөлөш үҙенсәлектәре менән айырылды. Халыҡ йәнле һөйләү теленең синтаксисы яҙма әҙәби телдең синтаксисынан түбәндәге төп һыҙаттары менән айырыла:

1) төрлө типтағы ябай һөйләмдәрҙең киңерәк ҡулланылыуы;
2) һөйләмдәрҙә һүҙҙәрҙең ирекләрәк тәртиптә булыуы;
3) парцелляцияның (айырым һөйләм киҫәктәрен һөйләмдәрҙән ситкә сығарыу) киң таралыуы;
4) *да//дә, та//тә, ҙа//ҙә, ла//лә* теркәүестәренән башҡа, теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең, башлыса, теркәүесһеҙ төрҙәренең ҡулланылыуы;
5) баш һөйләмгә күберәк ҡылым төркөмсәләренең аффикстары менән эйәреп килеүсе синтетик типтағы эйәрсән һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең ҡулланылыуы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге теҙеүсе һәм эйәртеүсе тер-

---

[9] Грамматика современного башкирского литературного языка. М., 1981. 359—360-сы биттәр.

кәүестәрҙең иң ҙур өлөшө — килеп сығышы яғынан ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре, һәм был үҙе генә лә күп кенә синтаксик конструкцияларҙың Урал — Волга буйы төрки теленән күсә килгәнлеген күрһәтә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең яҙма төрөнә ҡараһалар ҙа, уларҙың күбеһе хәҙерге дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телендә киң таралыш алды. Урал — Волга буйы төрки теле аша ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән теркәүестәргә түбәндәгеләр ҡарай:

*һәм* (фарсыса *һәм)* — йыйыу теркәүесе: *Аҡрын ғына ишек асылды, һәм кабинетҡа ҡыйыр-ҡыймаç ҡына бер малай килеп инде* (С. Агиш);

*ләкин* (ғәрәпсә *ләкин, ликән)* — ҡаршы ҡуйыу теркәүесе: *Мин иптәштәрем менән һөйләшеп ҡараным, ләкин улар төплө кәңәш бирә алманылар* (Ә. Вәли);

*фәҡәт* (фарсыса *фәҡәт)* — ҡаршы ҡуйыу теркәүесе: *Уның атай, минең әсәй үлгән, ҡайғылар бер, фәҡәт төç башҡа* (Х. Ҡәрим);

*әллә* (ғәрәпсә *әллә)* — бүлеү һәм һанап китеү теркәүесе: *Әллә диңгеҙ балығы беҙҙе ят итте, әллә үҙебеҙ бында ҡармаҡ һала белмәнек* (Ф. Исәнғолов);

*әммә* (ғәрәпсә *әммә)* — ҡаршы ҡуйыу теркәүесе: *Асыуы сырайына сыҡты, әммә бер нәмә лә әйтә алманы* (С. Агиш);

*мәгәр* (фарсыса *мәгәр)* — ҡаршы ҡуйыу теркәүесе: *«Ярар, был юлы һинеке еңде, — тигән айыу, — мәгәр бынан былай урманда минең юлға тап киләһе булма»* (Әкиәттән);

*әгәр* (фарсыса *әгәр)* — шартты белдереүсе эйәртеүсе теркәүес: *Әгәр шатлыҡ, бәхет килһә, әҙерһегеҙ бүлергә һеҙ, әгәр ғәмһеҙ ваҡыт килһә, әҙер минән көлөргә һеҙ* (Ғ. Туҡай);

*йә* (фарсыса *йа), йә — йә* (фарсыса *йа — йа)* — бүлеү һәм һанап китеү теркәүесе: *Бындай эçелә һыуҙан сыҡҡы килмәй, ҡолас ташлап йөҙгө килә, йә һыу эсендә тик ятҡы килә* (Ж. Киекбаев); *Йә бик ҡаты һыуыҡтар башланып китә, йә аҙналар буйы күҙ асҡыһыҙ бурандар ҡотора, йә күпләп ҡар яуа* («Сов. Башҡортостаны»);

*йәки* (фарсыса *йа ки)* — бүлеү һәм һанап китеү теркәүесе: *Ҡонторға барып, наряд ҡағыҙҙарын йәки складтан баҡыр сымдарын, ниндәйҙер ҡулса, вал киçәктәрен алып килеү йомоштарын Степан Иваныч, ни өсөндөр, бары Нурйән өçтөнә йөкләтә ине* (С. Кулибай);

*бәлки* (фарсыса *бәлки)* — бүлеү-билдәләү, бүлеү-һанау, ҡаршы ҡуйыу, аныҡлау мәғәнәләрен биреүсе күп мәғәнәле теркәүес: *Һеҙ беҙгә бурыслы түгел, бәлки беҙ һеҙгә бурыслы* (С. Ҡудаш); *Хәҙер инде Рәмиҙең был йырында моң, һағыш юҡ, бәлки шатлыҡлы ноталар яңғырай ине* (Х. Мохтар);

*сөнки* (фарсыса *чүнки)* — сәбәпте белдереүсе эйәртеүсе теркәүес: *Хәҙер инде Зорге тыныслап йоҡоға китә, сөнки әле генә булған һөйләшеүҙән радиограмманың тулыһынса Мәскәүгә тапшырылыуын белә* (Сов. Башҡ.);

*йәғни* (ғәрәпсә *йәғни)* — аныҡлау теркәүесе: *Был манифестың үҙе тотошлай мосолман телендә, йәғни төркисә күсерелеп баҫтырылғайны* (Һ. Дәүләтшина);

*әле* (ғәрәпсә *әле)* — бүлеү һәм һанап китеү теркәүесе: *Әле Афзал Таһиров балалар йорто йә район вәкилен ҡабул итә, әле улар артынса артистар ҙа, яҙыусылар ҙа килеп етә* (С. Кулибай);

*хатта* (ғәрәпсә *хатта)* — аныҡлау теркәүесе: *Рәшит ҡорҙаш, һинең менән осрашҡан һайын, күңелем ҡыуана, хатта һүҙгә һаранлығың да һәйбәт кеше булыуың хаҡында һөйләп торған күсек* (Н. Мусин);

*гүйә* (фарсыса *гүйә)* — оҡшатыу теркәүесе: *Талдар таҡмаҡ әйтте, гүйә көнбағыш бейеп торҙо баҫҡан ерендә* (Р. Ниғмәти).

Хәҙерге көндә был теркәүестәрҙең күп өлөшө дөйөм халыҡ йәнле һөйләү теленең байлығына әүерелде, ләкин уларҙың ҡайһы берҙәре *(һәм, ләкин, сөнки, йәғни* һ. б.) бөгөн дә, башлыса, яҙма әҙәби телдә ҡулланыла. Ә *гүйә* теркәүесе тик поэтик стилгә генә ҡарай.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең барлыҡҡа килгән осоронда ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән теркәүестәрҙең һаны һәм ҡулланылышы байтаҡ киңерәк ине, уларҙың ҡайһы берҙәре хәҙер пассив һүҙлек запасына күсте. Уларға, мәҫәлән, *ки, вә, гәрсә, халбуки* һәм башҡа теркәүестәр, шулай уҡ *вә һәм, вә ләкин, йәғни мәҫәлән, гүйә ки, вә һәм ләкин* һымаҡ Урал — Волга буйы төрки теленә хас ҡушма һәм тарҡау теркәүестәр ҡарай.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең ойошоу һәм йәшәүенең тәүге осоронда (20—30-сы йылдарҙа) уның Урал — Волга буйы төрки теле менән төҙөлөшө яғынан уртаҡлығы хәҙергегә ҡарағанда ҙурыраҡ була. Әҙәби телдең үҫеү һәм демократлашыу барышында күп кенә иҫке төрки элементтары юғалыуға дусар ителә, һәм был процесс ике йүнәлештә бара:

1) әҙәби телдең халыҡ йәнле һөйләү теле менән нығыраҡ яҡынлашыуы һәм әҙәби телгә дөйөм халыҡ телендә киң таралған һүҙҙәрҙе, формаларҙы, конструкцияларҙы ҡабул итеү юлынан;

2) халыҡ һөйләү теленә хас булмаған, әҙәби телгә инеп тә, ваҡыт һәм практика һынауҙарын кисерә алмаған, әҙәби тел ҡоролошона органик рәүештә инә алмаған, халыҡ массалары тарафынан ҡабул ителмәгән фонетик-морфологик элементтарҙан, синтаксик конструкцияларҙан, лексик берәмектәрҙән ҡотолоу юлы менән.

Урал — Волга буйы төрки теле хәҙерге башҡорт әҙәби теле өсөн ҡоролош яғынан ғына түгел, ә стиль үҙенсәлектәре йәһәтенән дә сығанаҡ булды. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең үҫешә барған осоронда, матур әҙәбиәт стиленән башҡа, уның бөтә стиль айырымлыҡтары һәм үҙенсәлектәре лә Урал — Волга буйы төркиенән күсте, тип әйтһәк тә, хата булмаҫ. Тик артабанғы үҫеү юлында ғына башҡорт әҙәби теленең стилдәре яңыра, рус әҙәби теленең, шулай уҡ башҡа туғандаш әҙәби телдәрҙең стиль үҙенсәлектәре йоғонтоһонда тәрән сифат үҙгәрештәре кисерә.

## 2. *Башҡорт халыҡ ижадының хәҙерге әҙәби телгә мөнәсәбәте*

Октябрь революцияһына тиклем Башҡортостанда матур әҙәбиәт стиленең төрҙәре тәрән, киң һәм бөтә яҡлап үҫешә алманы. Бынан тыш, үрҙә әйтелгәнсә, «боронғо болғар нигеҙендә барлыҡҡа килгән башҡорт-татар халыҡтарының дөйөм мираҫы» [10] булған Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-йи Йософ»онан (XIII быуат) алып XIX быуаттың икенсе яртыһында ижад ителгән Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев менән Ғәли Соҡорой ижадына тиклемге бөтә әҫәрҙәр ҙә Урал — Волга буйы төрки телендә яҙылған. Ә Сафуан Яҡшығолов, Мәжит Ғафури, Зәкир Һаҙи, Шәйхзада Бабич һымаҡ яҙыусыларҙың XX быуатта революцияға тиклем ижад ителгән әҫәрҙәре, ҡайһы телдә яҙылыуҙарына ҡарамаҫтан, төрки традицияларынан тулыһынса ҡотолоп бөтмәгән, яҙма телдең башҡорт һөйләү теленә иң яҡын һәм демократлашҡан формаһы булған, XIX—XX быуаттарҙың сигенән алып 20-се йылдарға тиклем бөтә башҡорт матбуғатын хеҙмәтләндереүсе иҫке татар әҙәби телендә баҫтырып сығарылған. «Октябрь революцияһына тиклем сығарылған башҡорт телендәге матбуғат продукцияһынан тик XIX быуат урталарында башҡорт дворянствоһының йәмғиәт эшмәкәрҙәре М. Биксурин, М. Ҡыуатов, М. Өмөтбаев тарафынан төҙөлгән ҡайһы бер дәреслектәр һәм дәрес әсбаптәре генә, шулай уҡ А. Г. Бессонов, В. В. Катаринский һәм башҡаларҙың башҡорт телен өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәрендә текстар һәм лексик материалдар ғына «төрки» теленең йоғонтоһонан азат. Был төрҙәге әҙәбиәт, тел күҙлегенән ҡарағанда, теге йәки был башҡорт диалектына йә һөйләшенә яҡын тора», — тип яҙҙы Ә. Ә. Юлдашев [11].

Башҡорт халҡының донъяға рухи һәм материаль ҡарашын сағылдырыусы, ысынбарлыҡты танып белеү һәм тасуири дөйөмләштереп һүрәтләүсе традицион әҙәбиәте булып халыҡ ижады әҫәрҙәре һаналды. Башҡорт фольклоры форма һәм жанр төрҙәренең байлығы менән айырылып тора, улар араһында тематикалары менән күп төрлө төркөмдәргә бүленгән ҡобайыр, героик поэмалар һәм тарихи хикәйәләр, йырҙар, таҡмаҡтар, сеңләүҙәр, бәйеттәр, әкиәттәр, мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар, легендалар һәм риүәйәттәр һымаҡ жанрҙарҙы айырырға мөмкин.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙҙәре Октябрь революцияһына тиклем күп йылдар элек барлыҡҡа килде, һәм ул билдәле бер кимәлдә поэтик халыҡ ижады әҫәрҙәренең телендә сағылыш тапты. Формаһы яғынан тотороҡло булараҡ, поэтик фольклор әҫәрҙәре һөйләүсе оҫталар, йырсы-ҡурайсылар тарафынан бик ныҡ үҙгәрешкә бирелмәйенсә тапшырылалар, ләкин тарихи йәшәү осоронда ул шымартыла бара, тел саралары дөйөмләшә һәм байыға

---

[10] История башкирской литературы в 5-и томах: План-проспект. Уфа, 1979. 9-сы бит.

[11] Юлдашев А. А. Характеристика башкирского языка дореволюционного периода // Закономерности развития литературных языков народов СССР в советскую эпоху. М., 1969. 113-сө бит.

барып, башта диалект-ара, һуңынанырак диалекттарҙан юғары тәҫ ала: башҡорт халҡының күпселегенә аңлайышлы булмаған тар локаль лексик берәмектәр, фонетик һәм грамматик формалар юғалып, киң таралған һәм аңлайышлылары менән алмашына. Һөҙөмтәлә ул ваҡытта ырыу-ҡәбилә үҙенсәлектәре буйынса айырылған төрлө башҡорт диалекттарында һөйләшкән кешеләр өсөн аңлайышлы, диалекттарҙан юғары торған поэтик фольклор әҫәрҙәренең теле барлыҡҡа килә. Халыҡ ижадындағы эпик формалағы әҫәрҙәрҙең теленә килгәндә, улар бөгөнгө көндә лә үҙҙәренең диалект һыҙаттарын һаҡлай, сөнки һәр бер һөйләүсе әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙ телмәренең мөмкинлектәренән сығып тапшыра — уға поэтик әҫәрҙәрҙәге кеүек, әҫәрҙең тотороҡло формаһы ҡамасауламай, төрлө һүрәтләү сараларын иркен һайлап алырға форсат бирә. Шуға күрә лә халыҡ ижады әҫәрҙәренең эшкәртелгән булыуы, диалекттарҙан юғары тороуы тураһында һүҙ барғанда, иң алда поэтик халыҡ ижады әҫәрҙәренең йәки һөйләм төҙөлөштәре формалары тарафынан сикләнгән һәм һөйләүсегә тел сараларын һайлап алырға мөмкинлек бирмәгән мәҡәл, әйтем, йомаҡ һымаҡ жанрҙарҙың тотороҡло теле күҙ уңында тотола. Тел саралары сикләнгән булыуы ғына фольклор әҫәрҙәренең фонетик-морфологик төҙөлөшөн, билдәле бер кимәлдә лексик составын эшкәртеүгә һәм шымартыуға юл ҡуя. Телдән телгә, ауыҙҙан ауыҙға күсеп йөрөп, бындай әҫәрҙәрҙең теле ырыу һәм ҡәбилә эсендәге сикләнеүҙәрҙән ҡотола, бөтә башҡорт халҡының байлығына әүерелә. Үҙенең йәшәү осоронда тотороҡло формалағы халыҡ ижады әҫәрҙәренең телендәге айырым аймаҡ, ара һәм ырыу кешеләренә генә аңлайышлы үҙенсәлектәр юғала, киң таралыш алған формалар, конструкциялар һәм һүҙҙәр менән алмашына, улар поэтик халыҡ ижады әҫәрҙәренә генә хас дөйөм күренеш булып нығыналар. Был унификацияланған тел саралары бөтә башҡорт диалекттары өсөн дә аңлайышлы була. Ләкин тотороҡло шиғыр формаһы һәр ваҡытта ла бер форманы икенсе форма менән йәки бер һүҙҙе икенсе һүҙ менән алмаштырырға мөмкинлек бирмәй. Шуға күрә лә поэтик халыҡ ижады әҫәрҙәрендә ритм, рифма һәм шиғри юлдағы ижек һандарын һаҡлау маҡсатында, хәҙерге күҙлектән ҡарағанда, айырым диалектизмдар ҙа ҡала. Миҫал өсөн «Урал батыр» ҡобайырынан өлгө килтерергә мөмкин:

Тамырҙарын аҡтарғас,
*Ботағыны* ботағас, —
*Балғаң* булған ташындай,
Ҡошҡа сөйөр шоңҡарҙай,
Балыҡ тотор суртандай,
Ҡан һурыусы һөлөктәй,
Йәнлек аулар *көсөктәй*, —
Һуҡҡың булған түгелме? [12]

---

[12] Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өфө, 1972. Беренсе китап. 40—41-се биттәр.

Килтерелгән өҙөктә өс диалектизм бар: *ботағын* урынына *ботағыны, сүкеш* урынына *балға, эт* урынына *көсөк*. Уларҙы киңерәк таралған формалар йәки һүҙҙәр менән алмаштырһаң, шиғырҙың силлабо-тоник төҙөлөшө һәм ритмикаһы боҙола: *ботағыны ботағас — ботағын ботағас; йәнлек аулар көсөктәй — йәнлек аулар эттәй* (юлда ете ижек урынына алты ижек була); *балғаң булған ташыңдай — сүкешең булған ташыңдай* (ете ижек урынына һигеҙ ижек була).

Кайһы ваҡыт шиғри әҫәрҙәрҙең текстында башҡа диалекттарҙа осрамаған, тик айырым регионға ғына хас күренештәрҙең йәки предметтарҙың диалект атамалары һаҡлана, сөнки уларҙы алмаштырыу өсөн тейешле һүҙ берәмеге булмай. Мәҫәлән, Силәбе һәм Курган өлкәләрендә башҡа территорияларҙа осрамай торған төрлө һыу һәм һаҙ ҡоштарына бай күлдәр һәм һаҙлыҡтар күп. Бындай ҡоштарҙың атамалары башҡа диалекттарҙа булмауы мөмкин. Ошо нигеҙҙә арғаяш һәм һалйот һөйләштәре нигеҙендә барлыҡҡа килгән поэтик әҫәрҙәрҙә, улар башҡа урындарҙа башҡарылһалар ҙа, бындай диалект атамалар һаҡлана:

*Урҙан* менән *буған* өйрәк
Сәләй ирҙең ашар аҙығы;
Ҡасҡын ғына булдым, хилаф ҡылдым,
Баймырҙаға булһын яҙығы.
Өйәлге күлдең ай ҡамышы,
Ҡашҡалаҡ та *соҡсоҡ* тауышы;
Өйәлгелә берәү ҡурай тарта —
Сәләй генә ҡасҡын һағышы.
*Сыпҡай* ғына өйрәк ай алдырмаҫ,
Һунар танһыҡтарын ҡандырмаҫ;
Сәләй генә ише ҡасҡын һирәк:
Йөрөгән ерҙән эҙен ҡалдырмаҫ [13].

Диалекталь үҙенсәлектәрҙең һаҡланыуы шулай уҡ рифманы һаҡлау маҡсатына бәйле булырға мөмкин. Бындай осраҡтарға, ғәҙәттә, диалекталь форма йәки һүҙ дөйөм башҡорт формаһы йәки һүҙе менән рифмалаша, һәм диалектизмды үҙгәртеү рифманың юғалыуына килтерә ала:

Елбер генә елбер ай итәлер
Күк үләнкәйҙәрҙең *шәүҙәһе*.
Мине генә иҫенә ай төшөрөп,
Йөрөй микән ҡоро кәүҙәһе [14].

Был өҙөктә *шәүҙә* һүҙе *кәүҙә* һүҙе менән рифмалаша, уларҙың беренсеһе — көнсығыш диалектҡа ҡараған һүҙ (әҙәби телдә *шәүлә*), ә икенсеһе — дөйөм башҡорт һүҙе (ике диалектта ла *кәүҙә*).

---

[13] Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. Өфө, 1974. Беренсе китап. 123-сө бит.
[14] Шунда уҡ. 259-сы бит.

Һыу алырға барҙым *күлмәккә,*
Ҡарап торҙом йөҙгән *үрҙәккә.*
Берәй хәйлә табып, буйың күрһәм,
Ял була ла янған йөрәккә [15].

Бында төбәү килештә тороусы көнсығыш диалектына ҡараған *күлмәк* (әҙәби телдә *күл*), *үрҙәк* (әҙәби телдә *өйрәк*) дөйөм башҡорт телендәге *йөрәк* һүҙе менән рифмалаша.

Башҡорт халыҡ ижадында иң үҙенсәлекле жанрҙарҙың береһе — ил, халыҡ, азатлыҡ, халыҡтың донъяға ҡарашы һәм әхләҡ принциптары тураһында һөйләүсе, үҙенә генә хас тел һәм һүрәтләү саралары эйә булған ҡобайыр.

Ҡобайырҙарҙың барлыҡҡа килеүе ырыу-ҡәбилә ҡоролошо замандарынан башлана (XIII—XIV быуаттар), уларҙың сәскә атҡан ваҡыты феодализмдың барлыҡҡа килеү һәм үҫеү дәүеренә тап килә (XV—XIX быуаттар). Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәр башланыуға (XIX быуаттың аҙағы) поэтик эпостың был традицион жанры яңы талаптарға яуап бирмәй башлай, һәм ул яйлап һүнә барыуға дусар ителә, ә уны заман үҙәгендә торған мәсьәләләргә тулыраҡ яуап биреүсе, һығылмалы йыр жанры алмаштыра.

Ҡобайырҙарҙы ижад итеүселәр булып үҙ эпохаһының иң киҫкен ҡаршылыҡтарын ауыҙ-тел әҙәбиәтендә сағылдырыусы халыҡ таланттары — сәсәндәр сығыш яһай. Ләкин ҡобайырҙар шәхси ижад булараҡ барлыҡҡа килһәләр ҙә, артабан телдән телгә, быуындан быуынға тапшырылып, йөкмәткеләре һәм формалары яғынан мөһим үҙгәрештәр кисерә, тел саралары эшкәртелә һәм шымартыла. Ошо нигеҙҙә беҙҙең заманға килеп еткән ҡобайырҙар ысын-ысыны менән халыҡ ижадының иң әһәмиәтле өлгөләренә индерелә. Халыҡ тарафынан эшкәртелеү һөҙөмтәһендә, бер үк ҡобайырҙың тиҫтәләгән варианттары барлыҡҡа килә.

Тел йәһәтенән ҡобайырҙар дөйөм башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәренә бик яҡын тора, ләкин унан айырмалы рәүештә, бында, бигерәк тә уның лексикаһында һәм фонетикаһында, билдәле кимәлдә грамматикаһында ла, һөйләү телмәрендәге кеүек, диалект һыҙаттар юҡ, тип әйтерлек. Ҡобайырҙарҙың синтаксик төҙөлөштәре лә бик үҙенсәлекле: улар айырымланған хәл әйтемле, төрлө типтағы эйәртеүле һәм теҙмә ҡушма һөйләмле, теҙемле ҙур-ҙур өлөштәрҙән торалар. Мәҫәлән, «Урал батыр» ҡобайырында Урал, бөтә йәнле заттарҙы саҡырып, тереклекте мәңге йәшәтеү өсөн, үлем тигән нәмәне бөтөрөргә тәҡдим яһағас, уға Ҡоҙғон ҡаршы сыға. Ҡоҙғондоң бөтә телмәре бер бөтөн һөйләм-теҙемдән тора:

Ҡарт булһам да, был эштән
Мин бер үҙем баш тартам,

---

[15] Шунда уҡ. 285-се бит.

Тағы өçтәп шуны әйтәм:
Көсө еткән көсһөҙгә
Һис һунарлыҡ ҡылмаһа;
Әсәнән тыуған берәү ҙә
Был донъяла үлмәһә;
Ер уттары, ағастар
Заңына буйһонмаһа;
Үҙ миҙгеле еткәндә,
Көҙгө ҡырау төшкәндә,
Йәшеллек һис бөтмәһә, —
Унан беҙгә ни файҙа?..[16]

Ҡобайырҙарҙың һәм йырҙарҙың тексында, ҡағиҙә булараҡ, ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре бик һирәк осрай, шулай уҡ ғәрәп һәм фарсы сығышлы ярҙамсы һүҙҙәр ҙә ҡулланылмай, шуға күрә һүҙҙәр һәм һөйләм өлөштәре үҙ-ара, йәнле һөйләү телмәрендәге кеүек, йәки интонация, йәки төрки сығышлы теркәүестәр, йәки төрлө ҡылым формалары менән бәйләнәләр.

Бынан тыш, боронғо йырҙарҙың һәм ҡобайырҙарҙың телендә хәҙерге башҡорт әҙәби теле өсөн хас булмаған иçкергән формалар һәм лексик берәмектәр осрай. Миçалға түбәндәге һүҙҙәрҙе килтерергә мөмкин: *атан* — бестерелгән дөйә (боронғо төрки телендә *атан), дик* — һымаҡ, кеүек, төçлө *(тег, дег), киҙәк* — сират *(кезик), кик* — дошманлыҡ, нәфрәт, уçаллыҡ *(кек), көң* — ҡол ҡатын, хеҙмәтсе ҡатын *(күң), күлек* — артмаҡ аçа торған хайуан *(көлүк, күлүк), ҡары* — ҡарт *(ҡары), өтрөк* — ялған, алдаҡ *(үтрүк), сай* — ҡоро йылға үҙәне *(сай), ут* — үлән *(от), ярлыҡ* — приказ, фарман *(ярлығ), яса* — зыян, зарар *(яс), тағ* — тау *(тағ), ҡомар* — теләк, нәфсе; өгөт, нәсихәт *(ҡумару), алып* — батыр, герой *(алп), батман* — үлсәү берәмеге *(батман), бағ* — баҡса *(бағ), көçә* — телә *(күсә)* һ. б. Күренеүенсә, был боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларының телендә осраған һүҙҙәрҙең күп өлөшө хәҙерге башҡорт әҙәби телендә үҙләштерелгән һүҙҙәр йәки яңы төп төрки һүҙҙәре менән алмашынған. Поэтик фольклор әçәрҙәренең телендә ошондай иçкергән һүҙҙәрҙең һаҡланыуы уларҙың бик боронғо осорҙа барлыҡҡа килгәнлеге тураһында һөйләй. Ҡайһы бер әçәрҙәрҙең мотивы бик күп төрки халыҡтарында осрай, ә был факт уларҙың дөйөм төрки осорҙа уҡ барлыҡҡа килеүен белдерә. М. Сәғитов башҡорт эпик әçәре «Алпамыша»ны анализлағанда, былай тип яҙҙы: «Алпамыша» (башҡорттан башҡа халыҡтарҙа — «Алпамыш») төрки халыҡтарҙың татар-монгол яуҙарына ҡәҙәр берҙәм булып йәшәгән ана шул Дала Ҡыпсаҡ дәүләте (XI—XIII быуаттарҙағы дәүләт — Дешти Ҡыпсаҡ — Э. И.) осорона ҡарай, тип әйтергә мөмкин. Әйтәйек, «Алпамыша»ның алтай милли версияһында ваҡиғаларҙың Алтай тауында, әзербайжан, шулай уҡ төрөк версияларында Кавказда, үзбәк, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ версияларында Ҡуңғрат-Байсунда барыуы, башҡорт

[16] Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өфө, 1972. Беренсе китап. 42-се бит.

версияларында Уралда барған тип һүрәтләнеүе, һәр халыҡтың конкрет тормош-көнкүреш үҙенсәлектәрен сағылдырыуы, — ана шул ерләшеүҙең бер күренеше ул»[17]. Боронғо грамматик, фонетик һәм лексик һыҙаттарҙың һаҡланыуына поэтик әҫәрҙең тоторoҡло шиғыр формаһы ла булышлыҡ итә, сөнки халыҡ ижадының прозаик әҫәрҙәрендә, мәҫәлән, әкиәттәрҙә, ономастик (яңғыҙлыҡ) исемдәрҙе иҫәпләмәгәндә, архаизмдар юҡ тип әйтерлек.

Әҙәби телдең йәшәп килгән яҙма формаһы фольклор әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәренә лә йоғонто яһай. Быны бигерәк тә ҡасандыр ауыҙ-тел формаһында йөрөгән ҡайһы бер эпик әҫәрҙәрҙең бөгөнгө көндә яҙмала һаҡланған формалары асыҡ күрһәтә. Бындай әҫәргә, мәҫәлән, башҡорт халҡының ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәрен сағылдырыусы «Ҡусәк бей» поэмаһы ҡарай. Был поэманың үҙенсәлектәре хаҡында Ә. Ә. Ҡирәев былай тип яҙҙы: «Шуныһы характерлы: был әҫәр күпселектә яҙма хәлендә йәшәй. Уның варианттары ла бер-береһенән күп айырылмайҙар, хатта күп ваҡыт һүҙмә-һүҙ тура киләләр. Тимәк, «Ҡусәк бей» һөйләү материалы булыуҙан бигерәк яҙыу материалы, йәғни күсермә булып таралған әҫәргә оҡшай. Тимәк, уның йәшәйеше грамоталылыҡҡа бәйләнгән. Ә башҡорттар араһында грамоталылыҡ башта Көнсығыш мәҙәниәте ерлегендә (мәҙрәсәләр аша) килеп ингәнлектән, бындай әҫәрҙәр шулай уҡ Көнсығыш классик поэзияһының традицияларын сағылдыралар. «Ҡусәк бей» өлгөһөндә быны асыҡ күрергә мөмкин. Ләкин шуны һис оноторға ярамай: ҡулдан ҡулға яҙма рәүештә күсеп килеүенә ҡарамаҫтан, һәм күптәнге яҙма ҡомартҡы булыуы арҡаһында Көнсығыш классик поэзияһы өсөн хас булған күренештәрҙе сағылдырыуына ҡарамаҫтан, «Ҡусәк бей» әҫәрен башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ерлегенән айырып алыуы мөмкин түгел. Уны башҡорт халыҡ ижадының эпик традицияларын үҙенсәлекле йүнәлештә дауам иттерә һәм үҫтерә торған әҫәр тип ҡабул итергә кәрәк»[18].

Поэманы шиғыр формаһына классик Көнсығыш поэзияһы менән яҡшы таныш кеше һалған булырға тейеш. Поэма беренсе, икенсе һәм дүртенсе юлдарҙың рифмалашыуына һәм һәр юлдың ун берәр ижектән булыуына ҡоролған робағи формаһындағы дүрт юллы шиғырҙарҙан тора:

Ҡашына арыҫландың килде батыр,
Үлгәнлеген аныҡлап белде батыр;
Быға инде билге һалайым, тип,
Арыҫландың шунда телен телде батыр[19].

«Ҡусәк бей» поэмаһының тел үҙенсәлектәре төрки яҙма традицияһының көслө йоғонтоһонда булыуы менән айырыла. Был

---

[17] Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өфө, 1973. Икенсе китап. 6-сы бит.

[18] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961. 346-сы бит.

[19] Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өфө, 1973. Икенсе китап. 304-се бит.

йоғонто иң тәүҙә айырым шиғыр юлдарының халыҡ һөйләү теленә хас булмаған ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән сыбарланыуында күренә:

Бер-бер *әҙәм донъяны* ҡыуа икән,
*Тағәт* менән *ғибәҙәтте* ҡуя икән,
Алдап йөрөп, *сихырлап бисарины,*
*Ахырында иманын* юя икән [20].

Урал — Волга буйы төркийенең йоғонтоһо шулай уҡ һөйләмдәрҙең синтаксик ҡоролошонда *(Ҡарағайлы ҡара урман, төрлө сәхрә, Ағиҙелдең буйы булған мәканәте), ҡылыу* ярҙамсы ҡылымы менән килгән конструкцияларҙың күплегендә *(сауыҡ ҡылыу* — етәкләү, *тигеҙ ҡылыу* — тигеҙләү, *урлыҡ ҡылыу* — урлау, *яҡын ҡылыу* — яҡынлатыу һ. б.), *-маҡ//-мәк* аффиксле инфинитивтың актив ҡулланылыуында *(Бере алмаҡ, бере бармаҡ һүҙ ҡуйышып, илай-илай айырылышып китешкәндәр),* дөйөм башҡорт теленә хас *-ған//-гән* ялғаулы сифат ҡылымдар менән бергә иҫке *-мыш//-меш* ялғаулы формаларҙың йөрөүе *(Мәсем хандың ебәрмеш хат-хәбәрен ҡулы менән Бабсаҡҡа биргән икән)* һ. б.

Лексик йәһәттән «Күсәк бей» — сит телдәрҙән үҙләштерелгән, дөйөм төрки һәм төп башҡорт һүҙҙәренең ҡушылмалары менән сыбарланған ҡатмарлы әҫәр. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән, үрҙә әйтелгәнсә, ғәрәп һәм фарсы элементтары күҙгә ташланып тора. Уларҙың күбеһе хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составынан ҡыҫырыҡлап сығарылған, дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәрендә лә иң пассив ҡулланылған һүҙҙәргә ҡарай (ғәрәп һүҙҙәре: *мәканәт* — биләмә, *хаин* — хыянатсы, *фирҡә* — төркөм, партия, *табиғ* — бойондороҡлолоҡ, баш эйеүсәнлек, *шәрик* — иптәш, дуҫ, *мөкәфәт* — бүләк, хаҡ, *залим* — яуыз; фарсы һүҙҙәре: *бихисап* — хисапһыҙ, һанһыҙ, *зурлыҡ* — йәбер, *пәйҙә* — күренеү, килеп сығыу, *гуаһлыҡ* — факт, *бикәр* — бушҡа, юҡҡа, *яр* — дуҫ һ. б.).

Әҫәрҙәге үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә шулай уҡ ҡаҙаҡ теленең йоғонтоһо һиҙелә: *таңдау* — һайлау, *сайман* — ҡорал, кәрәк-яраҡ, *талай* — бер килке, күп кенә, *әкә* — ағай, *мыҡты* — ныҡ, көслө, *ҡарағым* — күҙ ҡарам (иркәләп һөйләшеү) һ. б. Ҡаҙаҡ теленән килеп ингән грамматик формалар ҙа осрай: мәҫәлән, III заттағы хәҙерге замандың берлек формаһы *(Мин үлһәм, һиңә шәрик булады, хоҙай ҡушһа, дәүләтең мул булады)* йәки III заттағы күптән үткән замандың берлек формаһы *(Борон бер Мәсем атлы хан булыпты, үҙе аҡыллы данышмән йән булыпты).*

«Күсәк бей» поэмаһының һүҙлек составында, бик күп һанда булмаһа ла, рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә осрап ҡуя: *(Күк повозка көймәгә тройкалап ҡанатлы ҡара юрға екмәк булған; Ҡарағөлөмбәт хисапһыҙ батыр булған, бер уғын биш пар үгеҙ тартыр булған).*

---

[20] Шунда уҡ. 310-сы бит.

Бындай үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән тыш, әҫәрҙә халыҡ һөйләү телмәренә хас лексик берәмектәр ҙә йыш осрай (*осҡалаҡ* — еңел аҡыллы, *урлыҡ* — бурлыҡ, *ҡолай-ҡолай* — йығыла-йығыла, *һуҡҡы* — күҫәк, *ҡашына* — янына, эргәһенә, *берсәк-һәрсәк* — һирәк-мирәк, берәм-һәрәм, *апар* — алып бар һ. б.). Әҫәрҙең теле өсөн урыны-урыны менән шулай уҡ ябай һөйләү телмәрендә генә осрай торған синтаксик ҡоролоштар ҙа хас:

Шул һүҙҙе әйткәс, Күсәк батыр баҡыра, ти:
— Ҡарағөлөмбәт, ҡайҙаһың?! — тип аҡыра, ти, —
Ҡыҙҙы алып, яныма сапсан кил! — тип,
Күкрәгән күктәй булып, саҡыра, ти [21].

Шулай итеп, «Күсәк бей» поэмаһының тел үҙенсәлектәре иҫке төрки, дөйөм халыҡ һәм фольклор телдәренең ҡыҙыҡлы ҡушылмаһынан тора.

Тел үҙенсәлектәре буйынса (ләкин һис кенә лә жанр йәһәтенән түгел!) «Күсәк бей» поэмаһына халыҡ ижадының башҡа жанрҙарынан байтаҡ һуң барлыҡҡа килгән һәм башҡорт-татар халыҡтары фольклорының үҙенә бер төрлө жанры — бәйеттәр бик яҡын тора.

Бәйеттәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһында Ә. И. Харисов түбәндәгеләрҙе яҙҙы: «Беренсе бәйеттәр XVII—XVIII быуаттарҙа, Башҡортостанда мәҙрәсәләр асылып, «төрки»сә яҙылған ҡулъяҙма китаптар киң генә тарала башлағас ҡына барлыҡҡа килә башланы. Бәйеттәр ошондай китаптарҙың туранан-тура йоғонтоһо нигеҙендә донъя күрҙе. Шулай итеп, ауыҙ-тел ижадының башҡа жанрҙары, мәҫәлән, йырҙар туранан-тура халыҡ араһында ижад ителһә, бәйет менән (уның тәүге осоронда) халыҡ араһында китап культураһы торҙо. Бәйеттәрҙең тәүге авторҙары — белемле кешеләр, шәкерттәр һәм уҡытыусылар, был турала бәйеттәрҙең шиғыр төҙөлөшө лә, китап стиле лә, ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған лексикаһы ла асыҡ күрһәтеп тора. Бәйеттәрҙең традицион китапса башланыуы, уларҙы үҙенә бер төрлө «шәкерт» интонацияһы менән башҡарыу (уҡыу) ҙа ошо турала һөйләй» [22].

Әгәр бәйеттәрҙең беренсе авторҙары булып «төрки» телен яҡшы белеүсе, Көнсығыш поэзияһының традициялары менән таныш белемле кешеләр сығыш яһаһа, бәйеттәрҙең фольклор жанры булараҡ формалашыуында һәм үҫеүендә халыҡ төп ролде башҡарған. Китап теле йоғонтоһонда ижад ителгән тәүге бәйеттәрҙә уларҙың йөкмәткеһен аңлауҙы шаҡтай ауырлаштырған ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре, төрлө әйтемдәр менән ҡатмарлаштырылған һөйләмдәр бик күп:

Шунан артыҡ *һөнәр* ҙә юҡ, *мәғрифәт* юҡ,
Эсе тамам *фасиҡ* хәйлә, *золом* тулыҡ;

[21] Шунда уҡ. 318-се бит.
[22] Харисов А. И. Литературное наследие башкирского народа (XVIII—XIX века). Уфа, 1973. 145-се бит.

*Мәғрифәткә хилаф* тороп, күҙе тоноп,
Һәр кешегә лә ғәйепләп һөйләр имде[23].

Артабан халыҡ йәнле һөйләү телмәренең йоғонтоһо нигеҙендә бәйеттәрҙең телендә аңлайышһыҙ ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре, китап стиленең йоғонтоһо кәмей, уларҙа халыҡ ижады әҫәрҙәре өсөн хас булған традицион формалар өҫтөнлөк ала башлай, хатта дөйөм халыҡ телмәрендәге рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә осраштыра:

Ҡаты *задание* биргәс тә,
*Кулак* күҙен ҡан баҫты;
Бар игенен ергә күмеп,
Юҡ, тип, илап алдашты.
Ҡаты *задание* һалабыҙ,
Йәшерһәләр, табабыҙ;
Добровольно бирмәһәләр,
Шытырлатып алабыҙ[24].

Тел үҙенсәлектәре йәһәтенән, бигерәк тә дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телмәренә хас лексикаһы менән бәйеттәр башҡорт халҡының йыр жанрына яҡынлаша. Йырға улар формаль күрһәткестәре буйынса ла яҡынлаша башлай: дүрт шиғри юл ике өлөшкә бүленеп, уларҙың тәүгеһе сюжет менән тығыҙ бәйләнештә булмай:

Еләк йыйған сағымда,
Еләктәрем түгелде.
Алтмыш ике партизан
Бында ергә күмелде.
Бейек тауҙың башына
Ҡыҙыл флаг ҡаҡҡандар.
Алтмыш ике партизанды
Аҡ бандалар атҡандар[25].

Күп быуатлы халыҡ аҡылын, уның тәрән фекерләүен, тел үткерлеген һәм йорлоғон һаҡлап ҡалдырған, тел саралары эшкәртелгән һәм шымартылған халыҡ ижады әҫәрҙәренә мәҡәлдәр һәм әйтемдәр ҙә ҡарай. Бөгөнгө көндә, ареаль яҡтан таралыуҙарына ҡарап, дөйөм телгә һәм диалекттарға ҡараған мәҡәл һәм әйтемдәрҙе айырырға мөмкин. Дөйөм тел йәки диалект-ара мәҡәл һәм әйтемдәрҙең территория-ырыу сиктәре юҡ, һәм улар, төрлө-төрлө диалекттарҙа һәм һөйләштәрҙә ҡулланылып йөрөү һөҙөмтәһендә тел яғынан эшкәртелеп һәм шымарып, диалекттарҙан юғары

---

[23] Башҡорт халыҡ ижады: Бәйеттәр. Өфө, 1978. 268-се бит.
[24] Башҡорт халыҡ ижады: Бәйеттәр, йырҙар, таҡмаҡтар. Өфө, 1981. 61-се бит.
[25] Шунда уҡ. 57-се бит.

торған тел үҙенсәлектәренә эйә булғандар. Бындай мәҡәл һәм әйтемдәрҙең, ҡағиҙә булараҡ, башҡа төрки телдәрендә лә параллель формалары бар. Был күп кенә мәҡәл һәм әйтемдәрҙең бик боронғо замандарҙа барлыҡҡа килгәнлеген асыҡ күрһәтеп тора.

Айырым диалекттарға ғына хас мәҡәл һәм әйтемдәр билдәле бер урындағы йәки ырыу-ҡәбилә йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре йәки хужалыҡ һәм көнкүреш үҙенсәлектәре менән бәйләнгән. Уларҙың составында фонетик-морфологик һәм лексик диалектизмдар сағылыш таба: *Сабатаға сәждә ҡылма (сәждә ҡылыу* — табыныу, баш эйеү); *Таҙы бөтһә лә, маҙы бөтмәй (маҙ* — эҙ); *Бөхиллек йоп түгел, етмеш һөнәр күп түгел (бөхиллек* — һаранлыҡ, *йоп түгел* — ыңғай түгел, яҡшы түгел) [26]; *Бер яғыңа әйләңкәсә, бер яғын эт ашай* (урта һөйләш); *çынып китçәң дә, çыр бирмә* (дим һөйләше) [27] һ. б.

Мәҡәл һәм әйтемдәрҙең өлөштәренә тотороҡлолоҡ хас, был тотороҡлолоҡҡа эске ритмика, рифма, аллитерация, ассонанс булышлыҡ итә. Мәҡәл һәм әйтемдәрҙәге рифмалыҡ һуңғы һүҙ менән генә сикләнмәй, эске рифмалыҡ та була, йәки бер өлөш тулыһынса икенсе өлөш менән рифмалаша: *Тырышҡан табыр — ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр; Ҡөсөң барҙа эшлә — тешең барҙа тешлә* һ. б. Ғәҙәттә, ритмикалы, асыҡ рифмалы, әйтергә ҡулайлы мәҡәл һәм әйтемдәр киңерәк таралыш ала, тел йәһәтенән улар нығыраҡ шымартылған була, һәм был күренеш әҫәрҙең тотороҡло формаһы, һүрәтләү сараларының сикләнгән булыуы диалекттан юғары булыуға ярҙам итә тигән фекерҙе тағы ла бер тапҡыр раҫлай.

Поэтик фольклор әҫәрҙәрендәге һүҙҙәрҙең һәм грамматик формаларҙың дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәренә ныҡ яҡын тороуы, беренсел диалект айырмалыҡтарҙың юғалыуы, фольклор теленең диалекттарҙан юғары тороуы айырым башҡорт лингвистарын фольклор телен әҙәби телдең ауыҙ-тел формаһы тип ҡарауына килтерҙе. Уларҙың фекеренсә, сәсәндәр һәм йырсылар тарафынан эшкәртелгән әҙәби телдең был формаһы бик боронғо осорҙа уҡ барлыҡҡа килгән. Был хаҡта Ж. Ғ. Ҡиекбаев түбәндәгеләрҙе яҙҙы: «Сеңләүҙәрҙең, классик халыҡ йырҙарының, героик эпостарҙың, легендаларҙың, әйтештәрҙең һәм башҡа фольклор жанрҙарының телен, һис шикһеҙ, һүҙ оҫталары сәсәндәр, йырсы ҡурайсылар тарафынан быуаттар буйына эшкәртелгән башҡорт әҙәби теле тип ҡарарға кәрәк» [28]. Был фекерҙе В. Ш. Псәнчин дә ҡеүәтләй: «Башҡорт йәмғиәтендә борондан уҡ сәсәнлек ныҡ үҫешкән була. Ҙур халыҡ байрамы булған йыйындарҙа сәсәндәр данлы ваҡиғаларға, тыуған яҡтарға, халыҡ батырҙарының батырлыҡтарына бағышланған ҡобайырҙар ижад иткәндәр. Шулай итеп, сәсәндәр башҡорт халыҡ поэзияһы стилен быуаттар

[26] Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка. М., 1976. 157, 210-сы биттәр.

[27] Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М., 1979. 96, 167, 243-сө биттәр.

[28] Киекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө, 1966. 24-се бит.

буйына эшкәрткәндәр. Шунда уҡ күп башҡорт диалекттарының үҙенсәлектәрен үҙләштергәндәр. XVIII—XIX быуаттарҙа башҡорт йәмғиәтендә бөтә Башҡортостан яугирҙары ҡатнашҡан, заманындағы тарихи походтар тураһында һөйләүсе классик халыҡ йырҙары киң үҫешкән була. Улар, коллектив байлыҡ булараҡ, бөтә крайҙа таралыш ала. Бөтә был факттар башҡорттарҙың Октябрь социалистик революцияһына тиклем һөйләү, көнкүреш теленән үҙенең эшкәртелгәнлеге менән айырылған дөйөм әҙәби теле булыуын күрһәтә» [29].

Башҡорт халыҡ ижадындағы төрлө жанрға ҡараған поэтик әҫәрҙәрҙең тел үҙенсәлеген тикшереү түбәндәге һығымталарҙы яһарға мөмкинлек бирҙе. Күп быуаттар буйына йәшәү һөҙөмтәһендә фольклор әҫәрҙәренең теле халыҡ тарафынан эшкәртелеүенә, уларҙа күҙгә ташланып торған диалект һыҙаттарҙың булмауына бер ниндәй ҙә шик юҡ. Халыҡ ижады әҫәрҙәренең эшкәртелгән булыуы телдең бөтә кимәлендә лә асыҡ сағылыш таба: фонетикала — диалект һыҙаттарҙың унификацияланыуында, шул уҡ ваҡытта дөйөм башҡорт теленә хас булған өндәрҙең һаҡланыуында; грамматикала — һирәк осрай торған морфологик варианттарҙың ҡыҫырыҡланып сығарылыуында, һүҙ яһаусы, форма яһаусы, һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың дөйөмләшеүендә, поэтик әҫәрҙең шиғыр формаһы билдәле бер кимәлдә шартлылыҡ талап итһә лә, һүҙҙәр араһындағы бәйләнештең, синтаксик конструкцияларҙың дөйөм халыҡ телендәге нормаларға яҡынлашыуында; лексикала — тар локаль диалектизмдарҙың юҡлығында, бөтә халыҡҡа ла аңлайышлы дөйөм башҡорт теленең төп һүҙлек фонды сағылыуында, башҡорт халыҡ теленә ҡабул ителмәгән, ләкин Урал — Волга буйы төрки телендә яҙылған текстарға хас үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең булмауында. Тик фольклор теленең эшкәртелгән һәм шымартылған булыуы, билдәле бер нормаға яҡын тороуы уны әҙәби тел итеп ҡарарға тулы мөмкинлек бирмәй. Фольклор теле әҙәби телгә булған күп кенә дөйөм талаптарға яуап бирмәй. Билдәле булыуынса, әҙәби телдең ике: яҙма һәм ауыҙ-тел формалары йәшәй. Уларҙың иң әһәмиәтлеһе — яҙма форма, сөнки ауыҙ-тел формаһы тик яҙма әҙәби тел нигеҙендә генә барлыҡҡа килә, йәғни ул икенсел күренеш. Етмәһә, телдең нормаһы тик яҙыуҙа ғына нығынырға, оҙаҡ йылдар буйына һаҡланырға мөмкин. Халыҡ ижады әҫәрҙәренең теленә килгәндә, уларҙың барлыҡҡа килеүендә яҙыу туранан-тура ҡатнашмай, яҙмаһыҙ барлыҡҡа килә, бөгөнгә көнгә тиклем беҙгә улар ҡабат-ҡабат һөйләү нигеҙендә килеп еткән, етмәһә, шымартылған, эшкәртелгән һәм бер ни тиклем нормаға һалынған тел үҙенсәлектәре фольклор әҫәрҙәренең бөтә төрҙәренә лә түгел, ә уның тик поэтик формаларына ғына хас, эпик формалары бөгөнгө көндә лә диалект телмәрендә башҡарыла. Беҙ әҙәби телдең ауыҙ-тел формаһы тураһында һүҙ алып барғанда,

[29] Псянчин В. Ш. История формирования башкирского литературного письменного языка: Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Казань, 1965. 23—24-се биттәр.

иң алда туранан-тура аралашыу, йәнле һөйләшеү телмәренең үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотабыҙ, ә поэтик фольклор телен һөйләшеү теле тип әйтеп булмай: унда һәр бер поэтик формаға хас шартлылыҡ бар. Әҙәби телдең яҙма формаһы ла, ауыҙ-тел формаһы ла бер-береһенән тел саралары менән айырылған стилдәрҙән тора, ә поэтик фольклор телендә бындай стиль айырымлыҡтары юҡ, унда тик жанр үҙенсәлектәренә ҡараған ҡайһы бер айырмалыҡтар ғына күҙәтелә. Ә иң мөһиме — теләһә ниндәй әҙәби әҫәрҙең теле тик йәшәп килгән әҙәби телдең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен генә сағылдыра ала; әҙәби әҫәрҙәр, хатта уның айырым жанр төрҙәре лә, әҙәби телдең бөтә байлығын, бөтә төрҙәрен сағылдыра алмай. Әйтелгәндәр әҙәби тел менән әҙәби әҫәрҙең телен бер үк нәмә тип ҡарауҙың хата икәнлеген күрһәтә. Ошо нигеҙҙә беҙ поэтик фольклор әҫәрҙәренең телен әҙәби тел сифатында ҡарай алмайбыҙ (бында яҙыуһыҙ әҙәби тел булырға мөмкинме, тигән һорау ҙа килеп тыуа), фольклор теле, беҙҙең ҡарамаҡҡа, әҙәби телдең башланғысы, уның әһәмиәтле сығанағы ғына булып тора.

Башҡорт халыҡ ижады үҙенең оҙайлы йәшәү осоронда өҙлөкһөҙ байыға һәм үҫә барып, милли матур әҙәбиәттең формалашыуы һәм артабан үҫеүе өсөн ҡиммәтле сығанаҡ һәм аҙыҡландырыусы нигеҙ булды. «XIII быуат шағирҙары Ҡол Ғәли, Сәйф Сараиҙан һуңыраҡ осорҙағы Салауат Юлаевтан башлап Хәсән Туфан һәм Сибғәт Хәким, Мостай Кәрим һәм Зәйнәб Биишева осорона хәтлемге әҙәбиәт тарихында теләгән бер башҡорт һәм татар шағирын, яҙыусыһын алып ҡараһаҡ, әҙәбиәт тарихының теләгән бер осоронда теләгән бер жанрына мөрәжәғәт итһәк тә, беҙ унда халыҡ ижады традицияларын, мотивтарын, образдарын, тел биҙәктәрен күрербеҙ. Фольклор әҙәбиәт өсөн уның һәр бер осоронда ла ижад шишмәһе булып йәшәп килде», — тип яҙҙы С. Ә. Галин фольклор менән әҙәбиәттең үҙ-ара бәйләнеше тураһында [30].

Халыҡ ижадының ныҡлы ерлегендә барлыҡҡа килгән башҡорт әҙәбиәте, уның иң яҡшы традицияларын, образдарын, тематикаһын, һүрәтләү алымдарын, ә кәрәк ваҡытта сюжеттарын да дауам итеп, яңы шарттар өсөн билдәле кимәлдә әҙерләнгән бай тел сараларын да файҙаланмай ҡалманы.

### *3. Дөйөм башҡорт һөйләү телмәре һәм уның хәҙерге әҙәби телгә мөнәсәбәте*

Октябрь социалистик революцияһына тиклем башҡорт халҡының аралашыуға булған ихтыяждарын бер үк ваҡытта ике тел башҡарҙы: яҙма аралашыу ихтыяждарын төрки теленең Урал — Волга буйы варианты (XX быуатҡа тиклем) һәм төрки элементтарынан таҙарынып бөтмәгән иҫке татар әҙәби теле (XX быуат-

---

[30] Галин С. Ә. Фольклор һәм әҙәбиәт бәйләнештәрен өйрәнеүгә ҡарата // Башҡорт филологияһы. Пермь; Стәрлетамаҡ, 1975. Икенсе китап. 6-сы бит.

тың башынан алып икенсе сирегенә тиклем), ә һөйләү ихтыяждарын дөйөм халыҡ йәнле һөйләү теле хеҙмәтләндерҙе. Был ике төр тел фонетик һәм грамматик төҙөлөштәре, лексик составтары яғынан бер-береһенән шаҡтай ғына айырылалар ине. Ләкин был айырмалыҡты ҡапма-ҡаршы, антагонистик күренеш тип ҡарарға ярамай: төрки өлөшөндә был ике телдең грамматик төҙөлөшөндә лә, төп һүҙлек фондында ла дөйөм яҡтар күп булды, шуға күрә лә улар үҙ-ара тығыҙ мөнәсәбәткә инеп, бер-береһенә йоғонто яһанылар.

Әгәр феодаль осорға тиклемге һәм феодаль осорҙағы дөйөм башҡорт һөйләү теле үҙенең ырыу-ҡәбилә диалекттары менән айырылып торһа, хәҙерге дөйөм халыҡ телендә, ырыу-ҡәбиләләрҙең, ара-аймаҡтарҙың хәрәкәте һәм ойошоуы, йәғни уларҙың ҡушылыуы һәм айырылыуы нигеҙендә барлыҡҡа килгән территориаль диалекттар бар. Был турала башҡорт диалектологтарының тикшеренеүҙәре аныҡ мәғлүмәт бирә. Мәҫәлән, көнсығыш диалектҡа ҡараған әй һөйләшендә әйле, түбәләҫ, тырнаҡлы, мырҙалар, дыуан, ҡошсо, һарт ырыуҙарының һәм аймаҡтарының башҡорттары инә[31]; көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләшенә бөрйән, үҫәргән, түңгәүер, ҡыпсаҡ һәм башҡа ырыуҙарҙың башҡорттары инә[32]. Бер үк ырыуҙағы башҡорттар ҡайһы бер осраҡта төрлө һөйләшкә йәки диалектҡа ҡарарға мөмкин: бөрйәндәр, мәҫәлән, көнсығыш диалекттың ҡыҙыл һөйләшенә, көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләшенә, ә ҡатайҙар көнсығыш диалекттың арғаяш һәм миәс һөйләштәренә һәм көньяҡ диалекттың урта һөйләшенә ҡарайҙар.

Дөйөм халыҡ һөйләү теле, ғәҙәттә, халыҡтың формалашҡан осоронда барлыҡҡа килә. Башҡорттар халыҡ булып XV—XVI быуаттарҙа уҡ ойошоп бөткән, тип ҡарарға кәрәк, сөнки 1557 йылда бер нисә башҡорт ырыуы, берҙәм халыҡтың вәкиле булараҡ, үҙ теләктәре менән Рус дәүләтенә ҡушылды, һәм был күренеш договор формаһында юридик нигеҙ алды. Был тарихи акт күп кенә башҡорт шәжәрәләрендә лә сағылыш тапты. Мәҫәлән, уларҙың береһендә былай тип әйтелә: *«Башҡорт исемләнмеш дүрт руғдан, үсәргән, ҡыбчаҡ, тамъян, бүржән, мәзкүр илдә булмыш жөмлә халайыҡларымыз бер иттифаҡта мәрхәмәт әмерүндән рөхсәт әмер сорадуҡ...»*[33] [Башҡорт тип исемләнгән дүрт ырыуҙан — үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамъян, бөрйән — урҙә телгә алынған илдә йәшәгән бөтә халыҡтарыбыҙ бергә берләшеп, мәрхәмәтле (батшанан) юғары бойороҡ һораныҡ...].

Башҡорттарҙың халыҡ булып ойошоу процесы байтаҡ борондғораҡ осорҙа башланған булырға тейеш, һәр хәлдә, ғәрәп сәйәхәтсеһе Әхмәт ибн-Фадлан үҙенең юлъяҙмаларында (921—922 йылдар) башҡорттарҙы төркисә һөйләшеүсе халыҡтар иҫәбенә ин-

---

[31] Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка. М., 1976. 22-се бит.

[32] Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М., 1979. 22-се бит.

[33] Башкирские шежере. Уфа, 1960. 89—90-сы биттәр.

дерә[34]. Ә Мәхмүт Ҡашғари үҙенең күренекле «Диуан әл-лөғәт әт-төрк» китабында (1072—1074 йылдар) башҡорттарҙы теле яғынан ҡыпсаҡтарға яҡын төрки халҡы тип иҫәпләй[35].

Совет осоронда хәҙерге башҡорт әҙәби теле барлыҡҡа килгән ваҡытта уның төп сығанаҡтарының береһе булып территориаль диалекттарҙан торған дөйөм халыҡ йәнле һөйләү теле торҙо. Шул сәбәпле Совет власының тәүге йылдарынан уҡ, бигерәк тә 1919 йылда Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлгәс, төрлө регионда йәшәгән башҡорттарҙың ерле һөйләштәрен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелде. Шул маҡсатта күп райондарға лингвистик һәм лингвистик-этнографик экспедициялар ойошторолдо. Был ваҡытта башҡорт диалекттарын өйрәнеүҙә телселәр, тарихсылар, яҙыусылар, уҡытыусылар актив ҡатнашты. Башланғыс осорҙа бөтә был эш менән күренекле совет тюркологы, башҡорт теленең тәүге ғилми грамматикаһының авторы Н. К. Дмитриев етәкселек итте. 20—30-сы йылдарҙа башҡорт һөйләү теленең диалект үҙенсәлектәрен асыҡлау һәм тикшереү иң алда практик маҡсатта — хәҙерге башҡорт әҙәби теленең фонетик һәм грамматик сараларын, һүҙлек составын нормалаштырыу өсөн алып барылды. Тик 50-се йылдарҙа ғына диалектология фәне башҡорт телен теоретик яҡтан өйрәнеүҙең үҙ аллы бүлегенә әүерелде.

Башҡорт теленең ерле һөйләштәре үҙҙәренә генә хас фонетик, морфологик, лексик билдәләре менән айырылып торалар; ҡайһы бер һөйләштәр башҡа һөйләштәрҙән шулай уҡ синтаксик яҡтан да айырыла.

Башҡорт ерле һөйләштәрен алтмыш йылдан артыҡ ваҡыт өйрәнеү осоронда уларҙы төрлөсә төркөмләү булды. Беҙҙең көндәрҙә лә, аҡрынлап уларҙы төркөмләү принциптары һәм төҙөк тикшереү системаһы юлға һалынһа ла, башҡорт һөйләштәрен бер төрлө төркөмләү юҡ әле.

20—30-сы йылдарҙа башҡорт телендә алты диалект айырыла: ҡыуаҡан, юрматы, әйле, һалйот, табын, дим[36], — ләкин был диалекттарҙы тулыһынса һүрәтләү ҙә, улар араһында асыҡ сиктәрҙе билдәләү ҙә булманы. Шуның арҡаһында башҡорттар йәшәгән ҡайһы бер территориялар был классификацияға инмәй ҙә ҡалды. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле формалашҡан һәм нормаға һалынған осорҙа терәк диалекттар булып ҡыуаҡан һәм юрматы диалекттары сығыш яһаны. Йыш ҡына ҡыуаҡан диалекты хәҙерге бөтә көнсығыш диалект, ә юрматы диалекты — бөтә көньяҡ диалект урынына ла йөрөтөлә ине. Ҡыуаҡан, әйле, һалйот диалекттары хәҙерге көнсығыш диалектҡа, юрматы, табын, дим диалекттары хәҙерге көньяҡ диалектҡа тап килә.

---

[34] Ковалевский А. П. Книга Ахмеда ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг. Харьков, 1956. 83-сө бит.

[35] Махмуд Ҡошғарий. Туркий сузлар девони (Девону луғотит турк) / Перевод С. Муталлибова. Ташкент, 1960—1963. Т. I—III. 65—66-сы биттәр.

[36] Дәүләтшин Ғ. Башҡорт дәүләт педагогия институтының ситтән тороп уҡыусылары өсөн башҡорт теленән дәреслек. Өфө, 1935.

50-се йылдарҙа башҡорт диалектологы Т. Ғ. Баишев башҡорт телен өс диалектҡа бүлә: көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш, — ә был диалекттарҙы үҙ нәүбәтендә алты һөйләшкә бүлә. Т. Ғ. Баишевтың классификацияһы фонетик принципҡа ҡоролған, шуға күрә лә һөйләштәрҙе ул өндәр исеме менән атай: *һ-ç* һөйләше, *ç* һөйләше, *һ* һөйләше, *ҙ-ç* һөйләше, *с* һөйләше һәм *п-т* һөйләше[37]. Т. Ғ. Баишев диалекттарҙы бик нигеҙле, тулы һәм ентекле итеп тасуирлап сыҡты, уларҙың әҙәби телгә булған мөнәсәбәттәрен асыҡланы, шулай ҙа уның был әһәмиәтле хеҙмәтендә һөйләштәр системаһы тулыһынса һәм эҙмә-эҙ сағылманы. Мәçәлән, бер үк *һ-ç* һөйләше территория яғынан ике — көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарға ҡарай; бер үк территорияны халыҡ һөйләү телмәренең өс сифаттары буйынса бер юлы ике һөйләшкә индереп була (мәçәлән, хәҙерге урта һөйләште *һ-ç* һәм *п-т* һөйләштәренә); иң ҙур *һ-ç* һөйләшендә бер һөйләш өсөн артыҡ күп фонетик, грамматик һәм лексик айырымлыҡтар бар.

50-се йылдарҙың аҙағында Ж. Ғ. Ҡиекбаев башҡорт диалекттарын бөтөнләй яңыса төркөмләне. Ул, башҡорт телендә ике диалект бар, тип тапты: көнсығыш һәм көньяҡ диалекттар. Һәр диалектты ул һөйләштәргә бүлде: көнсығыш диалектты әй-йүрүҙән, ҡыҙыл-һаҡмар, арғаяш, һәнәр-ҡараболаҡ, ә көньяҡ диалектты эйек, юшатыр, урта, дим-ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәренә[38]. Т. Ғ. Баишев тарафынан айырылған көнбайыш диалектты, ул территорияла йәшәгән башҡорттарҙың теле татарлашҡан тип һанап, башҡорт диалекттары системаһына индермәне.

Хәҙерге башҡорт диалектологияһында Ж. Ғ. Ҡиекбаевтың бер аҙ үҙгәртелгән классификацияһы йөрөй. Мәçәлән, Н. Х. Ишбулатов көнсығыш диалектты ҡыҙыл, әй-миәс, арғаяш, һалйот, ә көньяҡ диалектты эйек-һаҡмар, урта, дим-ҡариҙел һәм аралыҡ төньяҡ-көнбайыш һөйләштәренә бүлә[39]; махсус рәүештә көнсығыш диалектты өйрәнеүсе Н. Х. Мәҡсүтова һәм көньяҡ диалектты өйрәнеүсе С. Ф. Миржанова, көнсығыш диалектта әй, арғаяш, һалйот, миәс, ҡыҙыл[40], ә көньяҡ диалектта эйек-һаҡмар, урта, дим һөйләштәре[41] бар, тип ҡарайҙар. Ә был һанап үтелгән һөйләштәр тағы ла вағыраҡ берәмектәргә — һөйләшсәләргә бүленәләр. Көнбайыш диалект тураһында башҡорт телселәре араһында берҙәмлек юҡ: был регион диалектологик хеҙмәттәрҙә төньяҡ-көнбайыш һөйләш йәки төньяҡ-көнбайыш һөйләштәр төркөмө тип йөрөтөлә.

Башҡорт телендәге һөйләштәрҙең фонетик, морфологик, лексик-семантик үҙенсәлектәре төрлө булғанлыҡтан һәм бер-береһенән

---

[37] Баишев Т. Г. Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. М., 1955.

[38] Киекбаев Дж. Г. Башкирские диалекты и краткое введение в их историю // Уч. зап. Башкирского госуниверситета: серия филологическая. Уфа, 1958. № 2.

[39] Ишбулатов Н. Х. Башҡорт диалектологияһы. Өфө, 1980. 8—9-сы биттәр.

[40] Максютова Н. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 13—14-се биттәр.

[41] Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 15-се бит.

нығ ҡына айырылғанлыҡтан, башланғыс осорҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нормаларын юлға һалыу ҙур ғына ҡыйынлыҡтарға осраны.

Революциянан һуңғы тәүге йылдарҙа башҡорт яҙма әҙәби теле тип ҡыуаҡан (хәҙерге көнсығыш) диалекты ҡабул ителде, һәм ул осорҙа матбуғат продукцияһы ошо диалектта сығарылды. Ләкин уның локаль (айырым урындар өсөн генә хас) лексикаһы, үҙенә бер төрлө фонетикаһы һәм грамматикаһы башҡа һөйләштәргә ҡараған кешеләр өсөн тулыһынса аңлашылып бөтмәй ине. Бынан башҡа, үрҙә әйтелгәнсә, башҡорт теленең халыҡ ижады әҫәрҙәренең телендә сағылыш тапҡан, үҙ эсенә күпселек һөйләштәр өсөн уртаҡ булған үҙенсәлектәрҙе алған һәм диалекттарҙан юғары торған формаһы бар ине. Шуға күрә лә хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙенә дөйөм башҡорт теленең төп һыҙаттарын сағылдырған ҡыуаҡан һәм юрматы (хәҙерге көньяҡ) диалекттары һалынды.

Хәҙерге башҡорт яҙма әҙәби теленә дөйөм башҡорт һөйләү теленең төп фонетик, грамматик, лексик үҙенсәлектәрен һайлап алыу халыҡ ижады әҫәрҙәренең телендәге быуаттар буйына барған традицияға ҡаршы килмәне.

Иң алда хәҙерге башҡорт әҙәби теленә, дөйөм халыҡ һөйләү теленән башҡа, төрки телдәре менән сағыштырғанда үҙенсәлекле, уны айырып торған өндәр, грамматик формалар, һүҙҙәр алынды. Мәҫәлән, башҡорт телен башҡа төрки телдәренән айырып торған иң үҙенсәлекле фонологик билдә булып уның фонетик системаһында *һ, ҫ, ҙ* өндәренең булыуы һанала. Был өндәр бөтә башҡорт һөйләштәрендә бер тигеҙ сағылмаһа ла (дим һәм төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрендә *һ* өнөнөң булмауы, һалйот һөйләшендә *ҫ* өнөнөң булмауы һ. б.), улар хәҙерге башҡорт теленең тулы мәғәнәле өндәре булып йөрөйҙәр. Ошо уҡ нигеҙҙә әҙәби телгә көньяҡ диалекттағы дүрт вариантлы күплек ялғауҙары урынына *(-лар//-лəр, -нар//-нəр)* көнсығыш диалекттағы һигеҙ вариантлы ялғау ҡабул ителде *(-тар//-тəр, -дар//-дəр, -ҙар//-ҙəр, -лар//-лəр)*. Әгәр башҡорт диалекттарында бер үк һүҙҙең ике һәм унан да артыҡ варианты булһа, күп осраҡта әҙәби телгә үҙенсәлекле һүҙ ҡабул ителгән. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге *әсәй* һүҙе бик бәләкәй территорияла — республиканың көньяҡ һәм урта өлөшөндә генә таралған, ә күберәк ерҙә уның урынына *инәй, әнәй, анай, әней* һүҙҙәре йөрөй. *Ҡомаҡ* һүҙе көньяҡ диалекттағы эйек-һаҡмар һөйләшенең сикләнгән бер өлөшөндә генә ҡулланыла, ә башҡа ерҙәрҙә уның урынына рус теленән үҙләштерелгән *керисә, кырнис, кәрнис* йәки төп башҡорт һүҙҙәре *оло (ҙур, дәү) сысҡан, игәүғойроҡ* һүҙҙәре йөрөй, шуға ҡарамаҫтан, башҡорт әҙәби теленә үҙенсәлекле *ҡомаҡ* һүҙе алынған. Әҙәби телдә үҙенсәлекле һүҙҙәрҙең таралыуын түбәндәге миҫалдар асыҡ күрһәтә: диал. *мөйөш, мөгөш. босмаҡ* (әҙ. *мөйөш)*; диал. *тоҡ, ҡапсыҡ* (әҙ *тоҡ)*; диал. *гөбөргәйел, ташбаҡа, гөбөрлө баҡа* (әҙ. *гөбөргәйел)*; диал. *тәлмәрйен, баҡа, тарбағай, әрмәнде* (әҙ. *тәлмәрйен)*; диал. *муйыл, шоморт* (әҙ. *муйыл)*; диал. *күбә, сүмәлә* (әҙ. *күбә)* һ. б.

Диалекттарҙан әҙәби телгә һүҙ һәм формалар һайлап алыуҙың иң әһәмиәтле принциптарының береһе булып һүҙҙәрҙең һәм формаларҙың киң таралыуы тора. Мәҫәлән, түбәндә таралыуҙары буйынса кәмей барыу тәртибендә башҡорт һөйләү телендә осраған вариантлы һүҙҙәр килтерелә (фонетик варианттар иҫәпкә алынманы): *ҡурай еләге, торна еләге, әберсә, өмөжө, айыу еләге, ағас еләге* (әҙәби телдә *ҡурай еләге); һуйыр, ҡыр тауығы, һыуһар* (әҙ. *һуйыр); туҡал, мүкләк, моғолой* (әҙ. *туҡал); һоҫҡо, ҡуҙһалғыс, шабала* (әҙ. *һоҫҡо); йәмкә, ҡыҫҡыс, сипсы* (әҙ. *йәмкә); ҡылған, әбәләй, әбейсәс* (әҙ. *ҡылған); талпан, һалъя, ҡыр бете* (әҙ. *талпан); киҙеү, сират, эндәт* (әҙ. *киҙеү); ағуна, ҡыр тауығы, көртлөк* (әҙ. *ағуна); балтыр, сираҡ, бурбай, һумит, сандыр* (әҙ. *балтыр); умырзая, әтмәкән* (әҙ. *умырзая); сусҡа, дуңғыҙ* (әҙ. *сусҡа)* һ. б. Миҫалдарҙан күренеүенсә, әҙәби телгә иң киң таралған һүҙҙәр ҡабул ителгән.

Киң таралыу принцибы шулай уҡ грамматик формаларҙы нормалаштырғанда ла һаҡлана. Урал — Волга буйы төрки телендә бойороҡ ҡылымдарҙың күплек формаһы *-(ы)ңыз/-(е)ңез* йәки *-(ы)ңлар/-(е)ңләр* аффикстары ярҙамында, башҡорт һөйләштәренең күбеһендә *-(ы)ғыҙ/-(е)геҙ* аффиксы менән, көнсығыш диалекттың әй, арғаяш, һалйот һөйләштәрендә *-(ы)ң/-(е)ң* аффикстары ярҙамында яһала; хәҙерге башҡорт әҙәби телендә киңерәк таралған *-(ы)ғыҙ/-(е)геҙ* ялғауҙары ҡулланыла. Башҡорт һөйләштәрендә бойороҡ ҡылымдың берлек формаһы *-ҡыр//-кер, -дыр//-дер, -ҡыҙ//-кеҙ, -ғыҙ//-геҙ* аффикстары ярҙамында яһала: *ятҡыр, еткер, кейҙер; ятҡыҙ, еткеҙ, кейгеҙ.* Киң таралған форма булараҡ, әҙәби телгә *-ҡыр//-кер* формаһы ҡабул ителгән. Һөйләштәрҙә инфинитив *-маҡ//-мәк, -мағa//-мәгә, -(ы)рға//-(е)ргә, -(ы)уға//-(е)үгә, -ма//мә, -ғалы-//гәле* ялғауҙары менән яһала *(ҡунмаҡ, күрмәк; ҡунмаға, күрмәгә; ҡунырға, күрергә; ҡуныуға, күреүгә; ҡунма, күрмә; ҡунғалы, күргәле)*, һөйләштәрҙә киң таралғанлыҡтан, әҙәби телдә *-(ы)рға//-(е)ргә* ялғауы йөрөй; һирәкләп (бигерәк тә ныҡынған һүҙбәйләнештәрҙә) *-маҡ//-мәк* ялғауы ла осрай.

Әҙәби телгә әйтергә тейешле фекерҙе аңлауҙы ауырлаштырған, лексик-грамматик омонимдар, синонимдар тыуҙырған диалект күренештәре алынырға тейеш түгел. Ҡайһы бер һөйләштәрҙә өндәрҙең үҙгәреүе һәм сиратлашыуы нигеҙендә төрлө лексик һәм грамматик мәғәнәләге һүҙҙәрҙең яңғырашы йәки яҙылышы тап килергә мөмкин, һәм улар әҙәби тел нормаһы итеп ҡабул ителә алмай. Мәҫәлән, көнсығыш диалекттың арғаяш һөйләшендә ике һуҙынҡы араһында *ҫ* өнөнөң яңғырауланыуы һәм шул уҡ позицияла *ҙ* өнөнөң һаҡланыуы нигеҙендә күп һандағы омонимдар барлыҡҡа килә: *иҙән* (әҙәби телдә *иҫән* һәм *иҙән), әҙе* (әҙәби телдә *әҫе* һәм *әҙе), ҡыҙыҡ* (әҙәби телдә *ҡыҫыҡ* һәм *ҡыҙыҡ), боҙоп* (әҙәби телдә *боҫоп* һәм *боҙоп)* һ. б. Көньяҡ диалекттың урта һөйләшендә *м, н, ң, л* өндәренән һуң әҙәби телдәге *д, ғ, г* өндәре урынына *т, ҡ, к* өндәре ҡулланыу нигеҙендә шулай уҡ күп кенә омонимдар барлыҡҡа килә: *ялҡау* (әҙәби телдә *ялғау* һәм *ялҡау), алҡа* (әҙәби телдә *алға* һәм *алҡа), елкә* (әҙәби телдә *елгә*

һәм *елкә), ҡалҡан* (әҙәби телдә *ҡалған* һәм *ҡалҡан)* һ. б. Көнсығыш диалекттың әй һөйләшендә төп һәм ҡайтым йүнәлешендәге ҡылымдар *-ыш//-еш, -ош//-өш, -ш* ялғауҙары менән яһала, ә әҙәби телдә, билдәле булыуынса, улар уртаҡлыҡ йүнәлеше яһай: һөйләштә *йыуыша* — әҙәби телдә *йыуына,* һөйләштә *һуғыша* — әҙәби телдә *һуға,* һөйләштә *һөҙөшә* — әҙәби телдә *һөҙә* һ. б. Күп кенә һөйләштәрҙә исемдәрҙең төп килеш формаһы башҡа килештәр мәғәнәһендә ҡулланыла[42], ә әҙәби телдә бындай күренештәрҙең булыуы мөмкин түгел, сөнки улар аралашыуҙа буталсыҡтар тыуҙырырға мөмкин.

Шуның менән бергә ҡайһы ваҡыт һөйләү телендә киң таралыш алған күренештәрҙең дә әҙәби телгә алынмауы мөмкин. Мәҫәлән, бөтә диалекттарҙа һәм һөйләштәрҙә лә III зат алмашы берлектә лә, күплектә лә *а* өнөнән башлана:

| Килештәр | Берлектә | Күплектә |
|---|---|---|
| Төп | ул (ал) | алар |
| Эйәлек | аның | аларҙың, аларның |
| Төбәү | аңа, аға, аныңа, анына | аларға |
| Төшөм | аны | аларҙы, аларны |
| Урын-ваҡыт | анда, анта | аларҙа |
| Сығанаҡ | анан | аларҙан |

Әҙәби телдә был формаларҙың бетәһе лә *у* өнөнән башлана. Күпселек һөйләштәрҙә *бул-, кил-* һәм башҡа ҡайһы бер ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһында *л* өнө төшөп ҡала *(бумай, кимәй; буманы, кимәне),* ә әҙәби телдә һаҡлана. Бындай осраҡтарҙа башҡорт әҙәби теле һүҙҙең тәүге формаһынан сығып эш итә, йәғни, уның орфографияһы ла, орфоэпияһы ла фонетик принципҡа ҡоролоуға ҡарамаҫтан, морфологик принциптан сығып эш итә.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙҙәре формалашыу менән (сама менән 40-сы йылдарҙан башлап) уға диалектизмдарҙың килеп инеүе бик ныҡ кәмей. Ләкин үҙенең үҫеш юлында әҙәби тел диалекттар иҫәбенә байый барыуын туҡтатмай, тик диалекталь һүҙҙәрҙең һәм формаларҙың уға килеп инеү юлдары һәм ысулдары үҙгәрә. Беренсенән, әҙәби телдә эквиваленттары булмаған осраҡта бик тар территорияла таралған диалектизмдар ҙа ҡабул ителә башлай. Был күренеш башлыса шул диалектта һөйләшкән халыҡ йәшәгән тәбиғәт һәм хужалыҡ үҙенсәлектәре менән бәйләнгән була. Мәҫәлән, урмансылыҡ һәм солоҡсолоҡ үҫешкән урман райондарында йәшәүселәрҙең теленән урман хужалығына һәм солоҡсолоҡҡа бәйле һүҙҙәр килеп инә *(ҡурыс, һөйән, эләгет, шур, әрҙәнә, кәшмәк, ҡыуғын, ҡыуғынсы, ҡапҡаҡ, тағара, кирәм* һ. б.); ялан һәм урманлы яландарҙа йәшәүселәрҙең теленән иген-

[42] Был турала ҡарағыҙ: Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка. М., 1976. 47, 108—110, 188, 226, 267-се биттәр.

селек һәм малсылыҡҡа бәйле һүҙҙәр ҡабул итеlә (*асыуат, ҡамыл, көшөл, һараяҡ, сәңгәр, ирәмек, әтәмбәй, һәүерек, дүнән, ҡонан* һ. б). Хәҙерге башҡорт әҙәби теленә һыу һәм һаҙлыҡ ҡоштары атамаларының күп кенә өлөшө территорияһы тәбиғи һыу ятҡылыҡтарына һәм һаҙлыҡтарға бай арғаяш, һалйот, ҡыҙыл һөйләштәренән килеп ингән (*урҙан, ҡауҙы, һаралйын, зырҡыуыт, ҡурпысыҡ, күгәл, ҡашыҡморон, аласабыр, боған, көйөлдө, ҡылғойроҡ, ҡорохтан, ҡуҡый* һ. б.). Икенсенән, диалекталь синонимдар йәки һүҙҙәрҙең фонетик варианттары, әҙәби телдә электән йөрөгән һүҙҙәргә синоним булараҡ килеп инәләр йәки яңы мәғәнә ала башлайҙар. Мәҫәлән, диалекттарҙа *тәлмәрйен* һәм *әрмәнде* һүҙҙәренең мәғәнәләре бер үк, ә әҙәби телдә айырыла — *тәлмәрйен* «лягушка», *әрмәнде* «жаба». Түбәндәге һүҙҙәрҙең дә мәғәнәләре әҙәби телдә айырылған: диалекттарҙа *ялтыр, йылтыр* «блестящий» — әҙәби телдә *ялтыр* «блеск, лоск», *йылтыр* «блестящий»; *сөйәл, һөйәл* «бородавка» — *сөйәл* «бородавка», *һөйәл* «мозоль», *өкө, ябалаҡ* «сова» — *өкө* «филин», *ябалаҡ* «сова», *болан, мышы* «лось» — *болан* «олень», *мышы* «лось», *сүкеш, балға* «молоток» — *сүкеш* «молоток», *балға* «кувалда», *мендәр, яҫтыҡ* «подушка» — *мендәр* «подушка», *яҫтыҡ* «большая подушка, перина» һ. б.

Әгәр хәҙерге башҡорт әҙәби теленең формалашыу һәм үҫеүенең башланғыс осоронда уға, башлыса, ҡыуаҡан һәм юрматы башҡорттарының телендәге фонетик, грамматик билдәләр һәм һүҙҙәр килеп инһә, ә һуңғараҡ уларға урта, ҡыҙыл, әй, дим һөйләштәре лә ҡушылһа, бөгөнгө көндә әҙәби телгә йоғонто яһаусы һөйләштәр тағы ла киңәйә төштө. Һуңғы йылдарҙа әҙәби телгә төньяҡ-көнбайыш һөйләштәренең йоғонтоһо көсәйгәне күҙгә ташлана. Мәҫәлән, был һөйләштәрҙең йоғонтоһонда ғәрәп-фарсы телдәренән килеп ингән кеше исемдәрендә *д* өнөнөң *ҙ* өнөнә күсеү процесы киңәйҙе (*Мөдәрис — Мөҙәрис, Садиҡ — Саҙиҡ, Рәдиф — Рәҙиф, Идрис — Иҙрис, Әхмәди — Әхмәҙи, Ғибадулла — Ғибаҙулла, Ҡадир — Ҡаҙир, Хәмидулла — Хәмиҙулла* һ. б.).

Бөгөнгө көндә хәҙерге башҡорт әҙәби теленең фонетик һәм грамматик төҙөлөштәре юлға һалынды, уның ныҡлы нормалаштырылған орфографияһы һәм орфоэпияһы бар. Ләкин уның лексикаһы урындағы һөйләштәр, рус һәм башҡа телдәр йоғонтоһонда байығыуын дауам итә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле ҡайһы бер семантик төркөмдәргә ҡараған предметтарҙы, күренештәрҙе, эшхәрәкәтте, билдәләрҙе атау яғынан ҡыйынлыҡтар кисерә. «Башҡортостандың ҡыҙыл китабы»на (Өфө, 1984) индерелгән ҡош, хайуан, балыҡ, бөжәктәр, үҫемлектәр атамаһын тәржемә иткәндә, быңдай ҡыйынлыҡтар күҙгә бигерәк тә асыҡ ташланды. Дөйөм халыҡ телендәге күп кенә лексик төркөмдәр ошоға тиклем етерлек дәрәжәлә өйрәнелмәйенсә һәм эшкәртелмәйенсә килә. Уларға, мәҫәлән, үҫемлектәр, бөжәктәр, бәшмәктәр, балыҡтар, ылымыҡ һәм мүктәр, таш һәм минералдар, үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһындағы ауырыуҙар атамаһы һымаҡ күп кенә лексик-семантик төркөмсәләр ҡарай.

Дөйөм халыҡ һөйләү теле нигеҙендә үҫешеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теле, фонетик, грамматик, лексик-семантик нормалары юлға һалынғандан һуң, һөйләү теленең ерле һөйләш айырымлыҡтарына йоғонто яһай башланы. Дөйөм белем биреүсе мәктәптәр һәм махсус уҡыу йорттары, фәнни һәм матур әҙәбиәт, ваҡытлы матбуғат, театр, радио һәм телевидение аша әҙәби телдең йоғонтоһо һөҙөмтәһендә диалекталь айырмалыҡтар аҡрынлап бөтә бара. Әгәр йәшәүенең тәүге осоронда әҙәби тел тик яҙма формала ғына булһа, ә йәнле аралашыу өсөн ерле һөйләштәр сығыш яһаһа, әҙәби нормалар нығынып, киң таралыш алғандан һуң, әҙәби телдең һөйләү формаһы барлыҡҡа килә. Белем һәм мәҙәниәт үҫешкән һайын, башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһы массалар араһында тағы ла киңерәк таралыш ала.

Шулай итеп, дөйөм халыҡ һөйләү теле хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙендә ята; әҙәби тел нормаларының күбеһе халыҡ һөйләү теленең үҙенсәлектәренән сығып ҡоролған. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең иң әһәмиәтле үҙсәнлектәре дөйөм халыҡ теленең үҙсәнлектәренә тап килгәнлектән, халыҡ араһында уны өйрәнеү һәм ҡулланыу әллә ни ҙур ауырлыҡтар тыуҙырмай. Башҡорт әҙәби теле нигеҙендәге дөйөм грамоталылыҡ үҙ нәүбәтендә һөйләү телмәренә, бигерәк тә уның диалект айырымлыҡтарына, көслө йоғонто яһай. Дөйөм аралашыу процесында ерле һөйләштәрҙәге күҙгә ташланып торған айырмалыҡтар бөтөүгә табан бара. Ерле һөйләштәрҙең иң үҙенсәлекле яҡтары тик тар көнкүреш өлкәһендәге аралашыуҙа ғына сағылыш ала.

*Икенсе глава*

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ЯҘЫУЫ, ОРФОГРАФИЯҺЫ ҺӘМ ОРФОЭПИЯҺЫ ТАРИХЫНАН

XX быуаттың башынан уҡ Урал — Волга буйы төрки телен әле уның йоғонтоһонан сығып бөтмәгән, ғәрәп һәм фарсы элементтары менән сыбарланған, ҡатмарлы һәм яһалма конструкцияларҙан торған татар әҙәби теле алмаштыра, һәм Совет власының тәүге йылдарында ла Башҡортостандағы бөтә матбуғат продукцияһы ошо телдә сығарыла. Ләкин халыҡтың яҙыуға булған мохтажлыҡтарын (бигерәк тә ҡулъяҙма әҙәбиәттә) һаман да элеккесә Урал — Волга буйы төрки теле башҡарып йөрөнө.

1921 йылда Бөтә Башҡортостан конференцияһы мәктәп, суд һәм административ органдарҙың эшен Башҡортостанда йәшәгән һәр милләттең туған теленә күсереү мәсьәләһен ҡуя. Шул уҡ йылда Бөтә Башҡортостан Советтарының II съезы Башҡортостан хөкүмәтенә башҡорт телен тормошҡа ашырыу буйынса практик саралар күреүҙе йөкмәтә.

1924 йылдың август айынан башлап РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты һәм Башҡортостан ревкомы органы булған «Башҡортостан» газетаһы башҡорт телендә сыға башлай. Бынан һуң башҡа газета һәм журналдар ҙа башҡорт телендә айырым

мәҡәләләр урынлаштыра башлайҙар. Ләкин был осорҙа башҡорт әҙәби теленең орфографик нигеҙҙәре әле эшләнмәгән була. Был хаҡта башҡорт орфографияһы буйынса баҫылып сыҡҡан күп һандағы төрлө ҡараштарҙы сағылдырған мәҡәләләр асыҡ һөйләй[1]. Ошо уҡ осорҙа Башҡортостанда мәҙәниәт, әҙәбиәт, мәғрифәт көслө үҫеш ала. Мәҫәлән, 1923—1927 йылдарҙа ғына башҡорт телендә 34 дәреслек сыға, яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың күп һандағы әҫәрҙәре донъя күрә.

Башҡорт дөйөм һөйләү телендәге диалекттар системаһы ҡатмарлы булыу сәбәпле, әҙәби телдең нигеҙҙәре тураһындағы мәсьәлә килеп тыуа. Үрҙә әйтелгәнсә, был йылдарҙа башҡорт телендә алты диалект айырып йөрөтөлә: ҡыуаҡан, юрматы, әйле, һалйот, дим, табын. Башҡорт әҙәби теленең нигеҙҙәре тураһында фекер алышҡанда, әҙәби телдең нигеҙе итеп 1) юрматы диалектын, 2) ҡыуаҡан диалектын, 3) ҡыуаҡан һәм юрматы диалекттарының төп үҙенсәлектәрен алырға тигән өс йүнәлеш асыҡлана. Әҙәби телдең тәүге йәшәү осоронда уның нигеҙе итеп ҡыуаҡан диалекты алына. 1924 йылдың ноябрь айында Башҡорт халыҡ мәғариф комиссариаты эргәһендәге Ғилми мәркәз был мәсьәлә буйынса махсус йыйылыш үткәрә. Унда, башлыса, ҡыуаҡан һәм юрматы диалекттары вәкилдәре араһында бәхәс бара. Рәсми рәүештә әҙәби тел итеп дүрт бөгөлөшлө, һигеҙ вариантлы күплек ялғауҙары менән килеүсе ҡыуаҡан диалекты алынһа ла, ҡайһы бер яҙыусылар татар телендә ижад итеүен дауам иттеләр (М. Ғафури һ. б.), икенселәре ҡыуаҡан диалектында (А. Таһиров, Ғ. Вилданов һ. б.), өсөнсөләре юрматы диалектында (Д. Юлтый һ. б.) яҙҙылар, ул ваҡыттағы матбуғат биттәрендә лә уларҙың әҫәрҙәре ошо өс формала баҫылып сыҡты. 1924 йылда, әҙәби тел һүҙлегенең өлгөһө булараҡ, Н. Таһировтың «Башҡорт лөғәте» («Башҡорт һүҙлеге») сығарыла, ундағы бөтә һүҙҙәр ҙә, формалар ҙа ҡыуаҡан диалекттарындағыса бирелгән. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең фонетик, грамматик, лексик нормалары үҫә барыу осоронда ғына башҡорт теленең башҡа һөйләштәрендәге материалдар иҫәпкә алына башланы.

### *1. Башҡорт әҙәби теле яҙыуының үҫеше*

Октябрь революцияһына тиклем күпселек төрки халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, ғәрәп яҙыуын файҙаланғандар. XX быуаттың башына башҡорт һәм татар халыҡтарын хеҙмәтләндергән ғәрәп яҙыуының өс төрө барлыҡҡа килә: иҫке яҙыу (иҫке имлә), урта яҙыу (урта имлә), яңы яҙыу (яңы имлә).

Башҡорттар X—XI быуаттан алып XX быуаттың аҙағынаса ҡулланған иҫке ғәрәп яҙыуы ғәрәптәр үҙҙәре файҙаланған алфавиттан айырылмай тип әйтерлек ине. Был алфавитҡа нигеҙләнгән яҙыу — ярым консонант яҙыу; әгәр һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә йоғонто

[1] Яңы юл. 1924. № 1. 28—30-сы биттәр; Белем. 1924. № 1—2. 42—45-се биттәр; Башҡорт теле имләһе. Өфө, 1925. 27-се бит; Белем. 1928. № 5—6, 43—45-се биттәр һ. б.

яһамаһа, һуҙынҡы өндәрҙе белдереүсе хәрефтәр яҙылманы. Етмәһә, һуҙынҡы өндәрҙе белдереүсе хәрефтәрҙең дә һаны өсәү генә ине: *а, ә* өндәре, ҡайһы осраҡта *и* өсөн дә, ا (әлиф), *у, ү, о, ө* өндәре өсөн و (уау), и, е(э), ы өндәре өсөн ی (йа)

Был яҙыуҙа ғәрәп телендәге ҡаты өндәрҙе белдереүсе, ә башҡорт теле өсөн артыҡ хәрефтәр ҙә бар ине (ط, ظ, ص, ض).

Ҡайһы бер өндәрҙең тамғаһы булараҡ фарсы яҙыуындағы хәрефтәр ҙә алынды (ч - چ, г - گ).

Урта яҙыуҙың алфавиты иҫке яҙыуҙыҡынан бик аҙ айырыла ине. Был яҙыуҙа, ул шундай уҡ ярым консонант булһа ла, һуҙынҡы өндәрҙе тамғалаусы хәрефтәрҙең һаны бишкә етте:

و - у, ү; ۉ - о, ө; ا - а; ە - ә; ی - и, е(э), ы

Яңы яҙыуҙың алфавитында һәр бер өн өсөн айырым тамға булды, тик был алфавит башҡорт һәм татар телдәре өсөн уртаҡ булғанлыҡтан, унда башҡорт теле өсөн хас булған *ҫ, ҙ* өндәренең тамғалары юҡ ине. Был алфавитта ҡатмарлы өҫтәлмә тамғаларҙың күп булыуы яҙыу процесын ауырлаштыра ине, шуға күрә лә ул киң таралыш алманы.

Октябрь революцияһынан һуң Башҡортостан халыҡ мәғарифы комиссариаты эргәһендәге Ғилми мәркәздең ҡушыуы буйынса яҙыусы Сәғит Рәмиев башҡорт әҙәби теле өсөн яңы алфавит төҙөнө; унда бөтәһе 33 хәреф булып, шуларҙың 27-һе тартынҡылар өсөн, 6-һы һуҙынҡылар өсөн ине. Был алфавит 1923 йылдың декабрендә орфография комиссияһы тарафынан ҡаралып, 1924 йылдың ғинуар айында Башҡортостандың яуаплы работниктары йыйылышында раҫланды һәм «Яңы юл» журналында баҫтырып сығарылды [2]. Был алфавит, үҙенең йәшәү осоронда бер нисә тапҡыр төҙәтелә барып, латин алфавиты менән алмаштырылғанға тиклем башҡорт яҙма әҙәби теленең ихтыяждарын тулыһынса үтәп килде.

Ғәрәп алфавиты оҙаҡ йылдар буйына башҡорт яҙма әҙәби теленең мәнфәғәттәрен үтәп килһә лә, унда етешһеҙлектәр ҙә күп кенә булды; уларға түбәндәгеләрҙе килтерергә була:

1) башҡорт теле фонетикаһының үҙенсәлектәрен тулыһынса сағылдырмауы;

2) һүҙҙәге урындарына ҡарап, бер үк хәрефтең төрлөсә яҙылыуы;

3) рус һәм Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һәм терминдарҙы транслитерациялауҙың (ғәрәп хәрефтәре менән биреүҙең) ауыр булыуы, шул арҡала уларҙың яҙылышы һәм яңғырашы боҙолоуы;

[2] Яңы юл. 1924. № 1 (9). 28—30-сы биттәр.

4) баш хәрефтәрҙең булмауы һәм бер үк өндө һүҙҙәге урындарына ҡарап төрлөсә тамғалау һ. б.

Башҡорт әҙәби теле өсөн яңы ғәрәп алфавитының нигеҙҙәрен төҙөгән осорҙа уҡ Башҡортостанда латин яҙмаһына күсеү буйынса әҙерлек эштәре башланды. 1927 йылдың июль айында уҡ Ғилми мәркәз был мәсьәлә буйынса махсус ултырыш үткәрҙе, унда латин алфавитына күсеү кәрәклеге танылды һәм уны тормошҡа ашырыу өсөн түбәндәге сараларҙы күрергә тәҡдим ителде: латин шрифтында әлифба баҫтырып сығарырға; латинлашыу идеяһын таратыу маҡсатында Ғилми мәркәз эргәһендә ваҡытлы өлкә комитеты төҙөргә; мәктәптәрҙә латин хәрефтәрен өйрәнеү түңәрәктәрен ойоштороорға; өлкә газеталарында латин хәрефтәренә өйрәтеү мөйөштәре асырға һәм латин яҙмаһында лозунгылар баҫтырырға [3]. Өлкә ваҡытлы яңәлиф комитетына С. Сөнчәләй, Ғ. Шөнәси, Ә. Хәбәри, С. Рәмиев, Ғ. Алпаровтар һайландылар.

Яңәлиф буйынса Ваҡытлы өлкә комитеты башҡорт теленең латин графикаһына нигеҙләнгән беренсе алфавитын төҙөй, һәм ул 1924 йылдың октябрь айында уның ултырышында раҫлана. Был латин алфавиты бөтәһе 34 хәрефтән тороп, шуларҙың 24-е тартынҡылар, 10-ы һуҙынҡылар ине.

Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советының 1924 йылдың 6 октябрендәге ҡарары буйынса Ваҡытлы өлкә комитеты урынына Башҡортостан яңәлиф комитеты ойошторола һәм уның беренсе ултырышы 1925 йылдың февралендә үткәрелә. Унда латин алфавитын пропагандалау мәсьәләләре ҡарала һәм яңәлиф буйынса Ваҡытлы өлкә комитеты төҙөгән беренсе алфавитын яңынан ҡарап сығыу өсөн Ғилми мәркәз эргәһендә комиссия ойошторола. Был комиссия яңы алфавит төҙөүҙең төп принциптарын билдәләй:

1) һәр бер өн айырым хәрефтәр менән билдәләнергә тейеш;

2) бер хәреф ике өндө белдерергә тейеш түгел;

3) ҡушма хәрефтәр алынырға тейеш түгел;

4) алфавит өсөн латин хәрефтәре етмәгән осраҡта латин яҙмаһы менән файҙаланған башҡа төрки халыҡтарының алфавитынан алырға, ул да етмәһә, латин алфавиты нигеҙендә яңы хәрефтәр яһарға;

5) хәрефтәр һанын күбәйтмәү маҡсатында баш хәрефтәрҙе ҡулланмаҫҡа.

Комиссияның был тәҡдимдәрен Яңы алфавит буйынса Башҡортостан үҙәк комитеты 1925 йылдың 20 мартында үткәрелгән ултырышында раҫлай. Ошо принциптар нигеҙендә 36 хәрефтән торған яңы алфавит төҙөлә һәм бер аҙ үҙгәрештәр менән «Башҡорт аймағы» журналында баҫтырып сығарыла [4].

Башҡорт яҙыуын латинлаштырыу буйынса эш I тюркологик съезға әҙерләнеү һәм уны 1926 йылдың февраль айында Баку ҡалаһында үткәреү осоронда тағы ла көсәйә төштө. Съезға бөтә төрки телле республикаларҙан һәм өлкәләрҙән, шул иҫәптән Баш-

[3] Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы. Ф. Р798. № 1275.

[4] Башҡорт аймағы. 1926. № 2. 1—8-се биттәр.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Aa | Bʙ | Cc | Çç | Dd | Đđ | Ee | Ff |
| а | б | ч | җ | д | ҙ | е | ф |
| Əə | Gg | Ƣƣ | Hh | Ii | Jj | Kk | Qq |
| ә | г | ғ | һ | и | й | к | ҡ |
| Ll | Mm | Nn | Ꞑꞑ | Oo | Ɵɵ | Pp | Rr |
| л | м | н | ң | о | ө | п | р |
| Ss | Şş | Tt | Ѣѣ | Uu | Vv | Xx | Yy |
| с | ш | т | ҫ | у | в | х | ү |
| Zz | Ƶƶ | Ьь | Ьj ьj | ’ | | | |
| з | ж | ы | ый | апостроф | | | |

ҡортостандан да, вәкилдәр йыйылды. Башҡа тюркологик проблемалар менән бергә съездың көн тәртибендә алфавит һәм орфографияға ҡағылышлы мәсьәләләр ҙә бар ине. Ҡаты һәм ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң I тюркологик конференция был проблема буйынса түбәндәге ҡарарҙарға килде: съезд, яңы алфавит төрки телдәренең үҙенсәлектәренә һәр яҡлап та яуап бирә, тип билдәләй һәм, латин алфавитына күсеүҙе милли республикаларҙың һәм өлкәләрҙең эске эше, тип һанай. Латин алфавитына күсеү буйынса 1924 йылдан алып бөтә учреждениеларҙа ла мәжбүри рәүештә латин алфавитын индереүсе Әзербайжан ССР-ының тәжрибәһен файҙаланырға тәҡдим ителә. СССР Үҙәк Башҡарма Комитетының 1927 йылдың 11 майындағы ҡарарына ярашлы рәүештә, Яңы алфавит буйынса Бөтә Союз Үҙәк Комитеты булдырыла. Үҙәк Комитет составына Бөтә төрки телле республикаларҙан һәм өлкәләрҙән тип әйтерлек, шул иҫәптән Башҡортостандан да, вәкилдәр индерелде.

Яңы алфавит буйынса Бөтә Союз Үҙәк Комитетының 1927 йылғы июнь айында үткәрелгән ултырышында төрки телдәре өсөн алфавитты унификациялау мәсьәләһен ҡарау планлаштырыла, һәм ул бөтә төрки телле республикаларға һәм өлкәләргә яңы ал-

фавиттың проектын ебәреүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Ошо айҡанлы Яңы алфавит буйынса Башҡортостан комитеты тарафынан ҡабул ителгән һәм 1927 йылда «Башҡорт аймағы» журналында баҫылған латин графикаһы нигеҙендә эшләнгән алфавитты яңынан ҡарап сыға, уға өҫтәлмәләр индерә: әгәр тәүге вариантта ҡ, ғ өндәре өсөн бер тамға булһа, хәҙер һәр өн өсөн айырым тамғалар ҡабул ителә ( q , ƣ ) ; башҡа төрки телле республикаларҙағы латин алфавиттарының үҙенсәлектәре иҫәпкә алына һәм күп кенә хәрефтәрҙең һыҙылышына үҙгәрештәр индерелә.

1927 йылдың июнь айында Яңы алфавит буйынса Бөтә Союз Үҙәк Комитетының пленумы үткәрелә, унда төрлө республикаларҙан һәм өлкәләрҙән килгән яңы алфавиттың 16 проекты ҡарала, улар нигеҙендә ҙур һәм бәләкәй хәрефтәре төрлөсә яҙылған һәм 33 хәрефтән торған берләштерелгән төрки алфавиты төҙөлә һәм раҫлана [5].

*Берләштерелгән төрки алфавиты*

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Aa<br>а | Bb<br>б | Cc<br>ч | Çç<br>ж | Dd<br>д | Ee<br>е | Əə<br>ә |
| Ff<br>ф | Gg<br>г | Ƣƣ<br>ғ | Hh<br>һ | Ii<br>и | Jj<br>й | Kk<br>к |
| Ll<br>л | Mm<br>м | Nn<br>н | Ꞑꞑ<br>ң | Oo<br>о | Ɵɵ<br>ө | Pp<br>п |
| Qq<br>ҡ | Rr<br>р | Ss<br>с | Şş<br>ш | Tt<br>т | Uu<br>у | Vv<br>в |
| Xx<br>х | Yy<br>ү | Zz<br>з | Ƶƶ<br>ж | Ьь<br>ы | | |

[5] Стенографический отчет первого пленума Всесоюзного центрального комитета нового тюркского алфавита. М., 1927. 107—151, 159—167-се биттәр.

Берләштерелгән төрки алфавиты нигеҙендә яңы башҡорт алфавиты төҙөлә, унда берләштерелгән төрки алфавитындағы хәрефтәр үҙгәртелмәй, тик специфик башҡорт өндәре өсөн яңы тамғалар алына — ƀ (ҫ), Đ, đ (ҙ), ьj (ый).

Яңы алфавит буйынса Мәскәү комитеты төҙөгән һәм РСФСР Мәғариф халыҡ комиссариатының кәңәшмәһендә раҫланған план буйынса яңы латин алфавитына күсеүҙе 1945 йылға тамамлау билдәләнә[6]. Ләкин бөтә милли республикаларҙа һәм өлкәләрҙә латин алфавитына күсеү хәрәкәте көсәйә барғанлыҡтан, был планға төҙәтмәләр индерелә. 1928 йылдың 7 июлендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты үҙенең ҡарары менән яңы алфавитты рәсми дәүләт алфавиты тип иғлан итә һәм Башҡортостанда яңы алфавитҡа күсеүҙең биш йыллыҡ планын ҡабул итә. Уның буйынса яңы алфавитҡа күсеү 1932 йылда тамамланырға тейеш була. Артабан яңы алфавитҡа күсеү хәрәкәтенең киң ҡолас алыуын күҙ уңында тотоп, Башҡортостан хөкүмәте яңы яҙыуға күсеүҙе 1930 йылда тамамлау тураһында ҡарар ҡабул итә. Был ҡарар Башҡортостан Советының VII съезында раҫлана. Матбуғатта ғәрәп яҙыуының интенсив ҡыҫырыҡлап сығарыла барыуын түбәндәге факттар бик асыҡ күрһәтә: әгәр 1928 йылда ғәрәп алфавитында 114 китап, ә латин алфавитында ни бары 18 китап сығарылһа, 1931 йылда латин алфавитында 119 китап сығарыла; 1932 йылдан башлап ғәрәп яҙыуында китап сығарыу бөтөнләй туҡтатыла[7].

Латинлашҡан яҙыуға күсеү культура төҙөлөшөндә ҙур уңыштарға ирешеүгә булышлыҡ итте: халыҡтың дөйөм белем кимәле бик ныҡ үҫте, дөйөм башланғыс белем биреү тормошҡа ашырылды, мәктәптәрҙә грамотаға өйрәнеү процесы еңеллäште; башҡорт яҙыусылары ижад иткән, шулай уҡ рус һәм сит телдәрҙән тәржемә ителгән китаптарҙың һаны артты. Латин яҙыуына күсеү халыҡ массаларын донъяға киң фәнни ҡараш тотҡарлаусы дини әҙәбиәттән ҡотҡарҙы, сөнки дини әҙәбиәт тә ғәрәп яҙыуында сығарыла ине.

Башҡорт яҙыуын латинлаштырыу үҙ заманында прогрессив күренеш булһа ла, ваҡыт үтеү менән, латин алфавитының етешһеҙлектәре бер-бер артлы асыла барҙы — ул башҡорт яҙма әҙәби теленең көндән-көн үҫә барған талаптарына яуап бирмәй башланы. Ул шулай уҡ полиграфик-матбуғат йыһаздарын (линотиптар, шрифтар, баҫыу машиналары һ. б.) әҙерләүҙе үҙәкләштереүгә ауырлыҡтар килтерҙе.

Латин алфавитында кәрәкле хәрефтәрҙең етешмәүе асыҡ һиҙелә, шуның сәбәпле рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һәм интернационализмдарҙы дөрөҫ итеп яҙыуға мөмкинлек булмай. Был

---

[6] Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы. Ф. Р798. № 1505.

[7] Исхаков Ф. Введение нового алфавита в Башкирии // Алфавит Октября. М.; Л., 1934. 48-се бит.

алфавитта, мәҫәлән, рус телендәге *ц, щ, е, ю, я* хәрефтәрен береү өсөн тамғалар булмай. Ошо нигеҙҙә һүҙҙәрҙе боҙоп яҙыу күҙәтелә, ә был үҙ нәүбәтендә дөрөҫ итеп һөйләүгә кире йоғонто яһай. Мәҫәлән, рус теленән үҙләштерелгән *милиция, плащ, учет, пуля, Галя* һүҙҙәре латин хәрефтәре менән militsiə, plasc, ucot, pulə, Galə (милитсиә, плашч, учот, пулә, Галә) рәүешендә яҙыла. Бынан башҡа, рус һәм латин алфавиттарында төрлө өндәр өсөн бер төрлө хәрефтәрҙең йөрөтөлөүе буталсыҡ индерә, рус телен үҙләштереүҙе ауырлаштыра: мәҫәлән, рус алфавитындағы *п, т, д, в* хәрефтәренең формалары латин алфавитындағы *н, м, г, б* хәрефтәренең һыҙылыуына тап килә. Ошондай сәбәптәр арҡаһында, латин алфавиты башҡорт яҙмаһының мәнфәғәттәренә яуап бирмәй башлай, һәм унификацияланған рус алфавитына күсеү кәрәклеге тыуа.

Октябрь революцияһына тиклем күп йылдар элек үк төрки халыҡтары өсөн рус графикаһы нигеҙендә алфавит төҙөүгә ынтылыштар була. Мәҫәлән, XIX быуаттың урталарында уҡ әзербайжан яҙыусыһы Мирза Фатали Ахундов тәҡдим иткән дүрт алфавит проектының береһе рус графикаһына нигеҙләнгән була [8]. Н. И. Ильминский был турала махсус китап яҙып сығара [9]. 1907 йылда А. Бессонов «Букварь для башкир» исемле китабын яҙа һәм унда, рус графикаһын файҙаланып, 41 хәрефтән торған башҡорт алфавитын бирә [10]. 1908 йылда В. Ҡаторинский шулай уҡ башҡорттар өсөн әлифба сығара һәм унда рус алфавитына башҡорт өндәрен белдереүсе махсус тамғалар индерә: ө – ӧ, ә – ӓ, ү – ӱ, ң – н h. б. [11].

Рус графикаһы нигеҙендә башҡорт алфавитын төҙөүгә М. Н. Ҡулаев бик күп көс һала. Ул башҡорт өндәренең үҙенсәлектәрен ғәрәп алфавиты нигеҙендә биреп бөтөп булмағанлыҡты, ғәрәп алфавиты нигеҙендә уҡырға һәм яҙырға өйрәнеүҙең ауырлығын, ә бының киң һәм тулы белем алыуға тоткарлыҡ яһауын тәрән аңлай. М. Н. Ҡулаев үҙенең алфавитын һәм уға аңлатмаларҙы ике тапҡыр баҫтырып сығара [12].

Шундай ынтылыштарға ҡарамаҫтан, Октябрь революцияһына тиклем был мәсьәлә хәл ителмәйенсә ҡала: батша хөкүмәте халыҡтарҙың белем алыуына булышлыҡ итеү генә түгел, уны сикләргә тырыша.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле рус графикаһына күскән осорҙа революцияға тиклемге был ынтылыштар иҫәпкә алына.

Рус алфавитына күсеү мәсьәләһе ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында ике тапҡыр ҡарала һәм уның ҡарарҙары ниге-

---

[8] Әхмәров Ҡ. З. Башҡорт яҙыуы тарихынан. Өфө, 1972. 56-сы бит.

[9] Ильминский Н. И. О применении русского алфавита к инородческим языкам. Казань, 1883.

[10] Бессонов А. Букварь для башкир. Оренбург, 1902.

[11] Ҡаторинский В. Букварь для башкир. Оренбург, 1908.

[12] Кулаев М. Н. Основы звукопроизношения и азбука для башкир. Казань, 1912; шул уҡ: Алепей. Ҡазань, 1919.

ҙендә башҡорт теленең яңы алфавиты һәм орфографияһының проектын төҙөү өсөн комиссия билдәләнә.

Рус алфавитына күсеү халыҡ массалары тарафынан бик хуплап ҡаршы алынды. Республиканың төрлө райондарында йыйылыштар үткәрелә, һәм Башҡорт АССР-ының Верховный Советына уларҙың теләктәшлек белдергән ҡарарҙары ебәрелә.

1939 йылдың 20 декабрендә БАССР Верховный Советы латин алфавитынан рус алфавитына күсеүҙе һәм был яңы алфавитҡа нигеҙләнгән орфографияны раҫлау тураһында указ сығара. Был указда рус алфавитына нигеҙләнгән яҙмаға күсеүҙе 1940 һәм 1941 йылдар эсендә тамамлау ҡарала. Яңы алфавит һәм орфография айырым китап итеп баҫтырылып сығарыла [13].

Яңы алфавитты төҙөгән саҡта ике мәсьәлә ауырлыҡтар һәм бәхәстәр тыуҙыра: *й* өнө менән килгән һуҙынҡыларҙы һәм башҡорт теленә генә хас өндәрҙең тамғаларын билдәләү.

*Й* өнө менән килгән һуҙынҡылар өсөн рус телендә булған *е, ё, ю, я* хәрефтәрен алырға тәҡдим ителә: *йы, йе* өсөн *е, йа, йә* өсөн *я, йо, йө* өсөн *ё, йу, йү* өсөн *ю.* Һуҙынҡыларҙың алғы рәт (нәҙек) икәнлеген билдәләү өсөн *ь* (йомшаҡлыҡ билдәһен) файҙаланыу тәҡдим ителә. Был алфавит буйынса, *йыл* һүҙен *ел, ел* һүҙен *ель* тип; *яй* һүҙен *яй, йәй* һүҙен *яйь* тип; *йом* һүҙен *ём, йөн* һүҙен *ёнь* тип яҙырға кәрәк була. Махсус башҡорт өндәре өсөн революцияға тиклемге баҫмаларҙа булған төрлө хәрефтәрҙе файҙаланыу тураһында тәҡдимдәр була [14]. Күпселек тауыш менән бөгөнгө көндә ҡулланылып йөрөтөлгән хәрефтәр ҡабул ителә: *ә, ү, ө, һ, ҙ, ҫ, ң, ғ, ҡ.*

1940 йылдың декабрь айында Башҡорт теленең яңы проблемалары буйынса ғилми конференция ойошторола. Унда хәҙерге башҡорт әҙәби теленең рус графикаһына ҡоролған алфавиты һәм орфографияһының ғилми нигеҙҙәре тураһында күренекле совет тюркологы Н. К. Дмитриев сығыш яһай. Конференция, яңы алфавит башҡорт теленең үҙенсәлектәренә яуап бирә, тип билдәләй, шул уҡ ваҡытта Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумына уға бер ни тиклем үҙгәрештәр индереүҙе тәҡдим итеп мөрәжәғәт яһай — был үҙгәрештәр башлыса *й* өнө менән килгән һуҙынҡыларға ҡағылышлы була.

М. Ғафури исемендәге Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты конференцияның ҡарары нигеҙендә *й* өнө менән килеүсе һуҙынҡыларҙы биреү проектын эшләй һәм СССР Фәндәр академияһының Тел һәм яҙыу институтына ебәрә. Институт проектты раҫламай, сөнки рус телендәге *й* өнө менән килеүсе һуҙынҡылар, башҡорт теленең *йә, йо, йө, йү* ҡушылмаларын билдәләгәндә, рус телендә булмаған яңы мәғәнә алалар. СССР Фәндәр академияһының Тел һәм яҙыу институты СССР халыҡтарының алфавитын төҙөгәндә нигеҙ итеп алыу өсөн тәҡдимдәрен ебәрә. Улар түбәндәгеләрҙе эсенә ала:

---

[13] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1940.

[14] Был турала ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡара: Әхмәров Ҡ. З. Башҡорт яҙыуы тарихынан. Өфө, 1972. 84-се бит.

1) рус алфавитындағы рус хәрефтәре мәғәнәләрен үҙгәртмәй ҡулланылырға тейеш;

2) рус графикаһына нигеҙләнгән алфавит телдең фонетик үҙенсәлектәренән сығып төҙөлөргә тейеш, һәр бер специфик өн өсөн айырым хәрефтәр алынырға тейеш;

3) СССР халыҡтарының рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавиттары унификацияланған (бер төрлөлөккә килтерелгән) булырға тейеш.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең эшкәртелгән һәм өҫтәлмәләр индерелгән алфавиты менән орфографияһы Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы тарафынан 1941 йылдың 15 ноябрендә раҫлана, ә һуңғараҡ баҫтырып сығарыла [15].

1950 йылда башҡорт алфавитына үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә *ё* хәрефе индерелә, бынан тыш ҡушма һүҙҙәрҙең, ҡайһы бер ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышына ҡағылған өҫтәлмәләр индерелә. Бөтә был төҙәтмәләр БАССР Верховный Советы Президиумы тарафынан 1950 йылдың 23 ноябрендә раҫлана. Яңы алфавит һәм орфография ҡағиҙәләренең йыйылмаһы матбуғатта сыға [16].

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең алфавиты 42 хәрефтән тороп, шуларҙың 9-ы махсус башҡорт өндәренең тамғаһы *(ө, ү, ә, ғ, ҙ, ҡ, ң, ҫ, һ)*, ә ҡалғандары рус алфавиты менән уртаҡ.

СССР Фәндәр академияһының Тел һәм яҙыу институты тарафынан үҙ ваҡытында СССР халыҡтарының алфавитын төҙөү өсөн биргән тәҡдимдәре тулыһынса үтәлеп бөтмәү арҡаһында, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең алфавитында һаман да ҡайһы бер етешһеҙлектәр бар. Был тәҡдимдәр буйынса, башҡорт телендәге һәр өн өсөн махсус хәрефтәр алынырға тейеш ине, ләкин башҡорт телендәге *ауыл, теүәл, ваҡыт, вәғәҙә* һымаҡ һүҙҙәрҙәге *y̆(ӱ)* йәки *y̆ay̆* тартынҡылары өсөн махсус хәрефтәр юҡ: һүҙ башында улар *в*, ә һүҙ уртаһында һәм аҙағында *у, ү* хәрефтәре менән билдәләнә; шулай уҡ *әбей, бабай, таба, арба* һымаҡ һүҙҙәрҙәге ике ирен менән яһалған ышҡыулы өн өсөн айырым билдә юҡ (ул үҙенән ныҡ ҡына айырылған шартлаулы *б* өнөнөң тамғаһы менән билдәләнеп йөрөтөлә). Яңы алфавитта шулай уҡ сифаттары менән киҫкен айырылған рус һәм башҡорт өндәре өсөн бер төрлө хәрефтәр ҡулланыла: киңерәк әйтелешле рус урта рәт һуҙынҡыһын белдергән *о* хәрефе унан тарыраҡ һәм сифаты менән айырылған башҡорт өнөнөң дә тамғаһы булып йөрөй (сағыштырығыҙ: русса *он* «ул», *кол* «һайғау», *тот* «анау, теге», һәм башҡортса *он* «мука», *ҡол* «раб», *тот* «лови»); бер төрлө *г* хәрефе менән тамғаланған өн рус телендә шартлаулы, башҡорт телендә фрикатив (ышҡыулы) өндәрҙе белдерә (сағыштырығыҙ: русса *густой* «йыш, ҡуйы», *богатый* «бай» һәм башҡортса *гөл* «цветок», *түгел* «не»); бер төрлө *и* хәрефе менән тамғаланған рус һәм башҡорт өндәре лә сифат-

[15] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1942.
[16] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1951.

тары менән айырыла (сағыштырығыҙ: русса *ил* «мәте», *бил* «һуҡты» һәм башҡортса *ил* «страна», *бил* «поясница»); *ю* хәрефе рус телендә *й* һәм *у* өндәренең ҡушылмаһын һәм йомшаҡ тартынҡыларҙан һуң *у* өнөн белдерә: *юла* [йула], *играю* [играйу], ләкин *сюда* [с'уда], *люблю* [л'убл'у], ә башҡорт телендә тик *й* һәм *у* өндәренең ҡушылмаһын ғына белдерә: *юл* [йул], *Аҡъюлов* [Аҡйулоф] һ. б. Рус телендә бер төрлө тамғаланып йөрөтөлгән хәрефтәр һүҙҙәрҙең мәғәнәһен айырыусы үҙ аллы фонемалар ҙа булып йөрөйҙәр: *угол* [угъл] «мөйөш» һәм *уголь* [угъл'] «күмер», *брат* [брат] «ағай» һәм *брать* [брат'] «алырға» һ. б.; башҡорт телендә бындай хәрефтәр ике фонеманы белдермәй.

Рус һәм башҡорт алфавиттарында хәрефтәрҙең төрлө сифаттағы өндәрҙең атамалары булып йөрөүе, билдәле, бер ни тиклем ауырлыҡтар тыуҙыра. Мәҫәлән, башҡорт телендәге фрикатив *г* йоғонтоһонда башҡортса һөйләшкән кешеләр рус телендәге *г* өнөн башҡортсаға оҡшатып әйтәләр, йыш ҡына йомшаҡ һәм ҡаты тартынҡыларҙы айырмайҙар. Шуға күрә русса яҡшы белгән ҡайһы бер башҡорт кешеһенең телмәрендә лә, рус кешеһенең телмәренә ҡарағанда, айырмалар була. Был айырмалыҡтарҙы акцент тип йөрөтәләр. Туған тел менән сит тел өндәренең араһында айырма ни тиклем ҙур булһа, акцент та шул тиклем көслөрәк була.

Бынан тыш, бөтә специфик башҡорт өндәре өсөн дә хәрефтәрҙең булмауы, яҙмала бер үк хәрефтәрҙең төрлө өндәрҙе белдереүе яҙыуҙың әйтелешкә йоғонто яһауын тыуҙыра. Мәҫәлән, яҙылған тексты уҡыған саҡта, күптәр *уаҡыт, үәғәҙә, Уафа, Үәсилә* тип түгел, ә яҙылғанса *ваҡыт, вәғәҙә, Вафа, Вәсилә* тип уҡый; ***төбө, ҡабырғаһы, торба*** һымаҡ һүҙҙәрҙе шартлаулы *б* өнөн әйтеп уҡыйҙар.

Заманында Тел һәм яҙыу институты тәҡдим иткән төрки телдәренең алфавиттарын унификациялау ҙа тормошҡа тулыһынса ашырылмай ҡалды. Йыш ҡына хәҙерге төрки телдәрендә бер төрлө әйтелә торған өндәр төрлө тамғалар менән йөрөтөлә

ҡ, ķ, къ, к; ң, нˇ, нг, н; ө, ö, оь; ә, ä һ.б.

йәки бер үк тамға төрлө төрки телдәрендә төрлө өндәрҙе белдерә (мәҫәлән, башҡорт телендә *ҫ* хәрефе теш араһы спирантын тамғалаһа, сыуаш телендә йомшаҡ *с* өнөнөң билдәһе булып йөрөй). Төрки телдәре араһындағы бындай төрлөлөк текстарҙы дөрөҫ итеп уҡырға һәм аңларға ҡамасаулыҡ итә, баҫыу машинкаларын һәм ҡорамалдарын үҙәкләштереп әҙерләүҙе ауырлаштыра. Төрки телдәрҙең алфавиттарын унификациялауға булған ынтылыштар ваҡыты-ваҡыты менән проблема булараҡ күтәрелеп торһа ла, ошоға тиклем һиҙелерлек һөҙөмтәләр бирмәй килә.

Үрҙә күрһәтелгән ҡайһы бер етешһеҙлектәргә ҡарамаҫтан, рус теле графикаһы нигеҙендә эшләнгән хәҙерге башҡорт теленең алфавиты быға тиклем булған алфавиттарҙың иң уңышлыһы, тип танырға була. Был алфавитҡа ҡоролған яҙыу аша беҙ teləhə ниндәй телдәге һүҙҙәрҙе, артыҡ нык боҙмайынса, яҙа алабыҙ. Һәр

хәлдә Башҡортостанда белем һәм мәҙәниәттең бөгөнгө кимәлгә күтәрелеүендә беҙҙең бөгөнгө яҙыуыбыҙҙың да өлөшө бик ҙур.

### 2. *Хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфографияһының үҫеш тарихы*

Ғәрәп алфавитына нигеҙләнгән башҡорт яҙыуы йәшәгән осорҙа йәнле һөйләү телмәренә ҡоролған әҙәби телдең тулы һәм фәнни яҡтан нигеҙләнгән орфографияһы булманы, тип әйтһәк тә, хата булмаҫ.

1923 йылда Ғилми мәркәз эргәһендәге орфография комиссияһы ҡушыуы буйынса яҙыусы Сәғит Рәмиев тарафынан төҙөлгән Октябрь революцияһынан һуңғы ғәрәп графикаһындағы әҙәби телдең беренсе орфографияһы («Хәреф вә имлә лаихәһе») ике бүлектән тора ине. Беренсе бүлектә ғәрәп яҙыуының үҙенсәлектәрен сағылдырған дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре бирелә. Ғәрәп алфавитында ҡалынлыҡ һәм нәҙеклек буйынса пар булған *у-ү, а-ә, ы-е* өндәре берәр генә хәреф булғанлыҡтан (و - у,ү ; ۆ - о,ө ; ى - ы, и), уларҙы яҙыуҙа айырыу өсөн, ҡалын һуҙынҡылы һүҙҙәр алдынан махсус һыҙыҡса ([1]) ҡуйыла. Әгәр һүҙ составында *а, ҡ, ғ* хәрефтәре булһа, улар ҡуйылмай, сөнки был хәрефтәр булған һүҙҙәрҙә нәҙек (алғы рәт) һуҙынҡылар ҡулланылмай. Был тамға үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә ҡуйыла. Һүҙ башында һуҙынҡыны белдергән хәрефтәр хәмзә менән яҙыла (ئا - а, ئە - ә, ئو - у,ү ; ئۆ - о,ө ; ئي - и ; ئ - ы, е). Рус теленән һәм Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә *ҡ, ғ* хәрефтәре ҡулланылмай. Революцияға тиклемге орфографияларҙан айырмалы рәүештә, етенсе параграфта һүҙҙәрҙеге бөтә һуҙынҡыларҙың да яҙылыу тейешлеге ҡарала. Икенсе бүлектә биш параграфтан торған орфографияға ҡағылышлы ҡағиҙәләр бирелә:

1) телдең төп үҙ һүҙҙәре лә, сит телдәрҙән килеп ингән һүҙҙәр ҙә фонетик принцип нигеҙендә, йәғни нисек ишетелһә, шулай яҙылырға тейештәр;

2) һүҙҙәге хәрефтәр ҡушып яҙылырға тейеш (ғәрәп алфавитындағы башҡа хәрефтәргә ҡушылмай торған

ا - а, ە - ә, و - у,ү, ۆ - о,ө, ۋ - в, ر - р, ز - з, ژ - ж, د - д, ذ - ҙ

хәрефтәренән тыш);

3) *-дан//-дән, -ҙың//-ҙең, -ның//-нең, -ы//-е, -ҡа//-кә, -ға//-гә, -ны//-не, -да//-дә, -ла//-лә, -ҡан//-кән, -ған//-гән, -дар//-дәр, -лар//*

*ләр, -һа//-һә, -са//-сә, -ҡай//-кәй, -ҡылт//-келт, -ғылт//-гелт* һымаҡ ялғауҙар ҡушып яҙылырға тейеш;

4) *вә, һәм, йәнә, дәхи, тағы, белән, менән (ман), генә, ғына* һүҙҙәренең һәм *ҙа-ҙә, та-тә, ла-лә* теркәүестәренең айырым яҙылыуы;

5) «төрки» цифрҙар ( ۱, ۲, ۳, ۴. ۵. ۶, ۷, ۸, ۹ ) урынына ғәрәп цифрҙары (1, 2, 3, 4...) ҡулланыу.

Был проект орфография комиссияһы тарафынан ҡарап сығыла һәм 1924 йылдың ғинуар айында Башҡортостан яуаплы эшселәренең йыйылышына ҡуйыла. Йыйылыш беренсе бүлектең етенсе параграфына үҙгәреш индерә (һүҙҙең мәғәнәһенә зарар килмәҫлек урындарҙа *ы, е* хәрефтәрен төрөшөп ҡалдырырға мөмкин) һәм проектты раҫлай. Ул шул уҡ йылда баҫтырып сығарыла [17].

Ошо уҡ йылда «Белем» журналында Ғ. Вилдановтың утыҙ параграфтан торған башҡорт орфографияһы һәм орфоэпияһы тураһындағы мәҡәләһе баҫыла [18]. Күп кенә ыңғай яҡтары менән бергә Ғ. Вилданов тәҡдим иткән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрендә аңлайышһыҙ һәм буталсыҡ урындар ҙа бар. Мәҫәлән, дүртенсе параграфта ике *л* йәнәш килһә, уларҙың береһе *д*-ға күсеүе тураһында әйтелә *(мулла-мулда, сәллә-сәлдә)*, ләкин был ҡағиҙәнең бөтә һүҙҙәргә лә таралмауын әйтмәй *(илле, алла, милләт* һүҙҙәрен *илде, алда, милдәт* тип яҙып булмай); егерменсе параграфта дөйөм төрки һүҙҙәрендә *б* өнөнөң *м* өнөнә күсеүе тураһында әйтелә *(борон* урынына *морон, боҙ* урынына *моҙ)*, ләкин был ҡағиҙәнең таралыу сиге лә билдәләнмәй.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән яҙыуҙағы орфографияһы ҡағиҙәләренең яҡшы эшләнмәүе бер үк һүҙҙәрҙең төрлөсә яҙып йөрөтөлөүенә килтерә. Быға шулай уҡ башҡорт теленең ерле һөйләштәрендә фонетик һәм грамматик формаларҙың күплеге лә булышлыҡ итә. Миҫал өсөн һүҙҙәрҙә *с, ҫ, һ,* өндәренең төрлөсә ҡулланылыуын, морфологик варианттарҙың күплеген *(килергә ~ килмәк ~ килмәгә ~ килмәккә ~ килмә; күрһәт ~ күргәҙ ~ күргәт; барығыҙ ~ барың* һ. б.) килтереү ҙә етә. Был ваҡытта башҡорт теле диалекттары яҡшылап өйрәнелмәгән ине, шул сәбәпле әҙәби телдең берҙәм нормаларын булдырыу ҙур ауырлыҡтар тыуҙырҙы.

20-се йылдарҙа башҡорт әҙәби теленең орфографияһын яҡшыртыу буйынса даими эш алып барылды. 1924 йылда орфографияның яңы проекты төҙөлә, Ғилми мәркәз эргәһендәге орфография комиссияһы тарафынан раҫлана һәм баҫып сығарыла [19]. 1925 йылда әҙәби телдең яңы орфографияһы сыға [20].

---

[17] Яңы юл. 1924. № 1 (9). 28—30-сы биттәр.

[18] Вилданов Ғ. Башҡорт шиүәһендә яҙыу, һөйләшеү өсөн белергә тейешле булған төп ҡағиҙәләр // Белем. 1924. № 1—2. 42—45-се биттәр.

[19] Башҡорт яҙыу ҡоралы. Өфө, 1924.

[20] Башҡорт теле имләһе. Өфө, 1925.

20-се йылдарҙың уртаһында латин алфавитына күсеү хәрәкәте көсәйә, ваҡытлы матбуғат биттәрендә латин графикаһына нигеҙләнеп баҫылған айырым мәҡәләләр күренә башлай. Былардан сығып, 1926—1930 йылдарҙа башҡорт әҙәби телендәге яҙыуҙы ике алфавит: ғәрәп һәм латин алфавиттарына нигеҙләнгән алфавиттар хеҙмәтләндерҙе, тип әйтергә була. Был күренеште иҫәпкә алып, 1927 йылдың декабрендә яңы алфавит һәм орфография буйынса Өфөлә үткәрелгән конференция ғәрәп графикаһы нигеҙендәге орфографияны латин графикаһына нигеҙләнгән яҙыу ҡағиҙәләренә буйһондороу тураһында ҡарар ҡабул итә. 1928/29 уҡыу йылына ғәрәп яҙыуында дәреслектәр сығарыу өсөн, башҡорт әҙәби теленең ваҡытлы орфографияһы төҙөлә. Ул Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссариаты тарафынан саҡырылған телселәрҙең йыйылышында ҡарала һәм ҡабул ителә, ә 1928 йылдың 12 апрелендә Башҡортостан хөкүмәте уны раҫлай һәм матбуғатта баҫтырып сығара[21]. Был ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән яҙыуҙың тәүге тапҡыр Башҡортостан хөкүмәте тарафынан раҫланған һуңғы орфографияһы булды.

Башҡорт теленең төп үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлгән был орфография ошоға тиклем төҙөлгән орфографияларҙың иң яҡшыһы ине. Унда бөтә һүҙҙәрҙең дә фонетик принцип нигеҙендә яҙылыуы (§ 1), күпселек һөйләштәр өсөн хас булған сингармонизм законын иҫәпкә алыу (§ 2) күҙ уңында тотолдо; беренсе тапҡыр *h*, *ç* өндәренең ҡайҙа нисек яҙылырға тейеш булыуына асыҡлыҡ индерелде: һүҙ һәм ялғауҙар башында *h*, ҡалған осраҡта *ç* яҙыла (§ 15, 17) һ. б.

Латин графикалы яҙыуҙың башланғыс йәшәү осоронда, алдан ҡаралғанса, был орфография уның ихтыяждарын да башҡара, ләкин яҙмаҙың латинлашыуы тамамланғас, иҫке орфография уның үҙсәнлектәренә яуап бирмәй башлай. 1930 йылда башҡорт әҙәби теленең яңы орфографияһы эшләнә, ул Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының Президиумы тарафынан раҫлана[22].

Ете бүлектән торған был орфографияла латин алфавиты менән бергә, башлыса, фонетик принципҡа ҡоролған башҡорт дөрөҫ яҙыуының ҡағиҙәләре бирелә. Үҙләштерелгән һүҙҙәр мөмкин тиклем нигеҙ телдәгегә яҡыныраҡ итеп яҙылырға тейеш була, тик хәрефтәр етмәгәндә генә, латин графикаһының мөмкинлектәренән сығып яҙырға тәҡдим ителә. Латин графикаһында булмаған теге йәки был хәрефтең нисек бирелергә тейешлеге күрһәтелә. Мәҫәлән, рус телендәге *а* хәрефе *a* йәки *ə* аша, *е* — *u* йәки *je*, *я* — *ja* йәки *jə*, *в* — *v* йәки *f*, *о* — *ь*, *u*, *a*, *ө* хәрефтәре, *ц* — *s* йәки *ts* аша бирелергә тейеш була.

Был орфографияның байтаҡ ыңғай яҡтары булып, ул башҡорт теленә хас күп кенә үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алһа ла, етешһеҙ яҡтары ла юҡ түгел ине. Бер үк рус хәрефтәрен төрлө хәреф аша биреү бер үк һүҙҙәрҙең төрлөсә яҙылыуына, уларҙың ныҡ

---

[21] Белем. 1928. № 5—6. 43—45-се биттәр.
[22] Башҡорт теле имләһе. Өфө, 1930.

боҙолоуына килтерә. Бының һымаҡ етешһеҙлектәр яңы орфографияны практик рәүештә ҡуллана башлағас та һиҙелә башлай. Орфографияның төрлө бәхәсле мәсьәләләрен хәл итеү өсөн, 1933 йылдың май айында Өфөлә ҡала конференцияһы саҡырыла. Төрлө тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, яңы орфография төҙөлә һәм баҫтырып сығарыла[23]. Был орфография буйынса, рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә *o* һәм *e* хәрефтәренең яҙылышы һаҡлана *bufit* урынына *bufet*, *səvit* урынына *sovet*, *matur* урынына *motor*, *bilit* урынына *bilet* һ. б.), йәғни русса яҙылыштарына яҡынлаштырыла. Ялғауҙарҙағы һуҙынҡыларҙың яҙылышына асыҡлыҡ индерелә—улар һүҙҙәге һуңғы ижектең үҙенсәлегенән сығып билдәләнә: әгәр һуңғы ижектә ҡалын һуҙынҡы килһә, ялғауҙа ҡалын һуҙынҡы яҙыла (*metall—metaldь*, *proletariat—proletariatь*, *antenna—antennala*), әгәр аҙаҡҡы ижектә нәҙек һуҙынҡы килһә, ялғауҙа ла нәҙек яҙыла (*natsalnik—natsalniklə*, *velosiped—velosipeden*, *aktiv—aktive*). Өс төрлө ябыҡ ижек был дөйөм ҡағиҙәгә буйһонмай: аҙағы бер нисә тартынҡыға, *-ep* хәрефтәренә бөтһә, *e* хәрефе алдынан *ts*, *s*, *ts*, *z*, *z* хәрефтәре килһә һәм ижектәр ябыҡ булһа, ялғауҙар ҡалын яҙыла (*agent—agentь*, *Inzener—inzenerь*, *tsex—tsextar*, *tsex—tsextь*).

1934 йылда орфографияға индерелгән үҙгәрештәр күп һүҙҙәрҙең — бигерәк тә ҡушма һүҙҙәрҙең, рус һәм Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең — яҙылышын юлға һалһа ла, унда грамоталылыҡты киң йәйелдереүгә ҡамасаулай торған етешһеҙлектәр ҙә күп кенә була. 1935—1937 йылдарҙа ваҡытлы матбуғат биттәрендә башҡорт әҙәби теленең орфографияһы тураһында дискуссия булып үтә. Был дискуссияла киң халыҡ ҡатламы ҡатнаша. Унда үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең, ҡушма һүҙҙәрҙең, ялғауҙарҙың, баш хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышы һымаҡ башҡорт орфографияһының бәхәсле мәсьәләләре күтәрелә. Матбуғатта әйтелгән фекерҙәр иҫәпкә алынып, 1938 йылда башҡорт әҙәби теле орфографияһының яңы проекты төҙөлә[24]. Ул телселәр, матбуғат эшселәре, уҡытыусылар ҡатнашлығындағы йыйылышта тикшерелә, бер аҙ үҙгәрештәр индерелеп, 1939 йылда Башҡортостан Верховный Советы Президиумы тарафынан раҫлана һәм матбуғатта сығарыла[25].

Был латин графикаһына нигеҙләнгән башҡорт яҙма әҙәби теленең һуңғы орфографияһы булды.

Алдағы орфографиялар менән сағыштырғанда, уға түбәндәге үҙгәрештәр индерелде: рус һүҙҙәрендә һүҙ башындағы *e* хәрефе *йе* хәрефтәренең ҡушылмаһы менән бирелә (*Jəgyr* урынына *Jegor*, *Jəfim* урынына *Jefim*): рус һүҙҙәрендәге *ч* өнө бөтә урында ла һаҡлана (иҫке орфографияла *nasalnik*, *posta*, *usastka*, яңыла — natşalnik, poşta, utsastka); рус һүҙҙәрендәге *щ* хә-

[23] Башҡорт теле орфографияһы. Өфө, 1934.
[24] Башҡорт әҙәби теленең орфографияһы (яңы проект). Өфө, 1938.
[25] Башҡорт теле орфографияһы. Өфө, 1939.

рефе şţş аша бирелә (şţşors, pomeşţşik); *в* хәрефе бөтә урында ла *v* аша бирелә (элекке орфографияла—*vagun*, *jəvrəj*, ләкин: *safxuz*, *aktif*, яңыла—*vagun*, *jevrej*, *sovxoz*, *aktiv*); иҫке орфографияла ялғауҙағы өндәрҙең яҙылышы һуңғы иҗектәге һуҙынҡыға ҡарап яҙылһа, яңы орфографияла һүҙҙәге һуңғы тартынҡының ҡатылығына-йомшаҡлығына ҡарап йөрөтөлә (*nəsəlnikte* урынына *natsalniktь*, *marksistər* урынына *marksistar*, *tarixe* урынына *tarixь*); элекке орфография буйынса учреждение һәм предприятиеларҙың исемдәре ҙур хәрефтән яҙылһа (*SSSR Uerxovnьj Sovetь*, *Abzan Avьл Sovete*), яңы орфографияла өлкә һәм союз әһәмиәтендәгеләре ҙур хәрефтән, ә ҡалғандарының тик тәүге хәрефтәре генә баш хәрефтән яҙыла (*SSSR Uerxovnьj Sovetь*, *Abzan avьl sovetь*). Бынан башҡа, ҡушма һүҙҙәрҙең, бәйләүестәрҙең, киҫәксәләрҙең яҙылышына төҙәтмәләр индерелә.

Рус алфавитына күсеү уңайы менән башҡорт әҙәби теленең яңы орфографияһы төҙөлә һәм 1939 йылда Башҡорт АССР-ы Верховный Советы тарафынан раҫланып, матбуғатта сығарыла[26]. Уның биш бүлегендә башҡорт орфографияһының төп ҡағиҙәләре — һуҙынҡыларҙың, айырым һүҙҙәрҙең һәм аффикстарҙың, баш хәрефтәрҙең дөрөҫ яҙылышына ҡағылышлы мәсьәләләр ҡарала. Шулай ҙа был орфографияла дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренең бөтәһе лә хәл ителмәй әле. 1940 йылдың декабрендә Өфөлә башҡорт теленең төп проблемалары буйынса конференция үткәрелеп, унда яҙма әҙәби телдең орфографияһы мәсьәләләре лә ҡарала.

Яңы орфографияны ҡулланыу уның етешһеҙлектәрен асыҡлай. 1940 йылда орфография ҡағиҙәләре яңынан ҡарала, уның айырым параграфтарына төҙәтмәләр индерелә. Әйтәйек, *-ий*, *-ый*, *-ей* өндәренә бөткән һүҙҙәрҙе яҙыу унификациялана (*бериллийҙы*, *Горькийҙан*, *Андрейҙың*, *Андрейға*); *хыянат*, *хыял*, *ихтыяж* һымаҡ һүҙҙәрҙә элекке *и* урынына *ы* яҙыу ҡарала; *сифат*, *сираҡ*, *синыф* тибындағы һүҙҙәрҙә беренсе иҗектәге *-ый* урынына *и* яҙыла. Элекке орфографияла *-нк*, *-нг*, *-ск* хәрефтәренә бөткән һүҙҙәр эйәлек категорияһы ялғауҙары алдынан *ы*, *и* һуҙынҡылары менән (*танкыһы*, *шлангыһы*), ә күплек ялғауҙары алдынан уларһыҙ ҡулланыла ине (*танктар*, *шлангтар*), ә хәҙер уларҙың яҙылыштары бер төргә килтерелә; бөтә осраҡта ла *ы*, *и* һуҙынҡылары яҙыла (*танкылар*, *шлангылар*, *Новосибирскиға* һ. б.). Бынан башҡа, яңы орфографияла тарҡау яңғыҙлыҡ исемдәрҙең, ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы ҡарала. Ялғауҙарҙың яҙылышы һүҙҙең һуңғы өнө буйынса түгел, ә 1934 йылдағы орфографиялағы кеүек, һуңғы иҗегендәге һуҙынҡының сифатына ҡарап яҙыу ҡабул ителә. Был орфография Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссариаты тарафынан саҡырылған телселәрҙең һәм матбуғат эшмәкәрҙәренең кәңәшмәһендә ҡарала, 1941 йыл-

---

[26] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1940.

дың 15 ноябрендә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы тарафынан раҫлана һәм баҫып сығарыла [27].

Ҡайһы ғына әҙәби телдең орфографияһын алһаң да, унда фонетик-морфологик һәм синтаксик үҙенсәлектәрҙең бөтә нескәлектәре менән тулыһынса сағылышын табып булмай, шуға күрә башлыса фонетик принципҡа нигеҙләнгән орфографияларҙа ла унан ситкә тайпылыштар күҙәтелә. Башҡорт яҙма әҙәби теленең орфографияһында ла бындай үҙенсәлектәр бар, уларҙы махсус эшләнгән дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләре иҫәпкә алырға тейеш.

1957—1958 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» газетаһының биттәрендә башҡорт әҙәби теленең орфографияһы тураһында дискуссия асыла, киң халыҡ массалары, бигерәк тә ғалимдар, матбуғат эшмәкәрҙәре һәм уҡытыусылар, үҙҙәренең тәҡдимдәре менән сығыш яһайҙар. Дискуссия башҡорт орфографияһында өйрәнелергә һәм төҙәтелергә тейешле күп кенә мәсьәләләрҙең булыуын асыҡланы. Матбуғатта сығыш яһаусыларҙың иң әһәмиәтле тәҡдимдәрен түбәндәгесә төркөмләргә мөмкин:

1) башҡорт телендәге һәр фонеманың үҙ тамғаһы булырға тейеш (был бигерәк тә *о, ы, е* һуҙынҡыларына, *ў. ү̆ (уау)* тартынҡыһына һәм ике өндө белдереүсе *я, е, ю* хәрефтәренә ҡарыла);

2) аффикстар йәшәп килгән орфографиялағы кеүек һуңғы ижектең һуҙынҡыһы буйынса түгел, ә аҙаҡҡы өндөң сифаты буйынса яҙылырға тейеш (*тарихе* урынына *тарихы, химиктәр* урынына *химиктар, кафегә* урынына *кафеға, котлеттең* урынына *котлеттың* һ. б.);

3) ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең яҙылыштарына асыҡлыҡ индерергә кәрәк (*мөдир* йәки *мөҙир, мәғариф* йәки *мәғариф, Әүхәди* йәки *Әүхәҙи, Абдулла* йәки *Ғабдулла* йәки *Аптулла* йәки *Ғаптулла, Нуреддин* йәки *Нуретдин* йәки *Нурыттин* һ. б.);

4) ҡушма һүҙҙәрҙең йәки лексикализацияланған һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ яҙылышына асыҡлыҡ индерергә кәрәк: *ҡот осҡос* йәки *ҡотосҡос, тәү тормош* йәки *тәүтормош, кем уҙарҙан* йәки *кемуҙарҙан, биш йыллыҡ* йәки *бишйыллыҡ, үҙ аллы* йәки *үҙаллы* йәки *үҙ-аллы, Нарыштау* йәки *Нарыш-тау, Күсемташ* йәки *Күсем-таш, Ҡарағалпаҡ* йәки *Ҡараҡалпаҡ* йәки *Ҡара-ҡалпаҡ, ҡара көрән* йәки *ҡара-көрән, ҡыҙғылт һары* йәки *ҡыҙғылт-һары, аҡһыл күк* йәки *аҡһыл-күк* һ. б.

Был тәҡдимдәрҙе ентекләп өйрәнеү һәм хәҙерге башҡорт әҙәби теленең үҫеш тенденцияларын иҫәпкә алыу нигеҙендә СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында йәшәп килгән орфографияны бер ни тиклем үҙгәртеү проекты эшләнде, ул Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы тарафынан раҫланды һәм матбуғатта баҫ-

[27] Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1941.

тырып сығарылды[28]. Был үҙгәрештәр түбәндәгеләрҙе эсенә ала:

1) *йү* өндәрен ике хәреф менән билдәләргә (*йүгән, йүкә, йүн*), ә *йу* өндәренең ҡушылмаһын *ю* хәрефе менән билдәләүҙе үҙгәртмәйенсә ҡалдырырға (*юрған, юл, юшҡын*);

2) тамырҙары *р* өнөнән алда килгән баҫымһыҙ *о, ө, ы, е* һуҙынҡыларын яҙыуҙа сағылдырмаҫҡа (*бөҙрә, кәкре, тыҡрыҡ*), ләкин һуҙынҡылар яһалма һүҙҙәрҙә һаҡланһа, яҙылырға тейештәр (*бойор — бойороҡ, айыр — айырым*);

3) һүҙ *н* тартынҡыһына бөтөп, *-ғы//-ге, -ҡы//-ке* ялғауҙары ҡабул итһә, ассимиляция сәбәпле *н* өнө *ң* булып әйтелһә лә, *нғ, нг, нҡ, нк* өндәре яҙыла (*һуҙынҡы, тартынҡы, боронғо, бошонҡо*), *ңғ, ңг, ңҡ, ңк* тартынҡыларының ҡушылмаһы тамырға ҡараһа йәки күрһәтелгән аффикстар *ң* өнөнә бөткән һүҙҙәрҙән һуң килһә, *ң* хәрефе яҙыла (*еңгә, диңгеҙ, ҡараңғы, һуңғы, таңғы, өйәңке* һ. б.);

4) өлөштәренең мәғәнә һәм грамматик бәйләнештәре иҫәпкә алынып, ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылыу ҡағиҙәләре эшләнде;

5) йәшәп килгән орфографияла үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге ялғауҙарҙың һуҙынҡылары һуңғы ижектең һуҙынҡыһына ҡарап бирелә ине: һуңғы ижектә ҡалын һуҙынҡы килһә, ялғауҙарҙа ла ҡалын һуҙынҡы, нәҙек килһә, ялғауҙа ла нәҙек һуҙынҡы яҙыла ине (*кабинеттә, занятиелә, циркteң, магазине; тракторсы, комсомолда*); яңы орфографияла ялғауҙағы һуҙынҡының сифаты һуңғы өндөң сифатына ҡарап билдәләнә: әгәр һүҙҙең аҙағында ҡаты тартынҡы йәки ҡалын һуҙынҡы килһә — ҡалын һуҙынҡы, йомшаҡ тартынҡы килһә, нәҙек һуҙынҡы яҙыла (*кабинетта, циркты, тарихы, магазины; июль — июлдә, пристань — пристандә*); *е, ю, я*-ға бөткән һүҙҙәрҙә ҡалын һуҙынҡы яҙыла (*занятиела, менюла, кухнялар, премияны*).

Башҡорт орфографияһының ҡағиҙәләре башлыса фонетик принципҡа нигеҙләнгән, йәғни һүҙҙәр нисек ишетелһә, шулай яҙыла йәки реаль әйтелгән өндәр генә яҙыла. Мәҫәлән, *туп* һүҙенең аҙағында *п* өнө ишетелә һәм шул өндөң тамғаһы яҙыла; һүҙҙе үҙгәрткәндә (*тубы*), *б* өнө ишетелгәс, уның хәрефе яҙыла. Шулай ҙа башҡорт әҙәби теленең орфографияһында, башҡа телдәрҙең орфографияһындағы кеүек, төрлө принциптарҙың сағылышы күҙәтелә. Мәҫәлән, һүҙҙәр араһындағы үҙгәрештәр (*барыб алдым* ишетелһә лә, *барып алдым; һандығ аҫтында* ишетелһә лә, *һандыҡ аҫтында; килалманым* ишетелһә лә, *килә алманым*), ҡайһы бер ассимилятив күренештәр (*бороңғо* ишетелһә лә, *боронғо, көмбағыш* ишетелһә лә, *көнбағыш*) фонематик принципҡа нигеҙләнеп яҙыла. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ яҙылышында шулай уҡ тарихи-традицион йәки этимологик принцип та сағыла. Башҡорт телендә сифаттарҙан ҡылымдар яһалғанда, башҡа ялғауҙар менән бергә *-ай//-әй, -й* ялғауҙары ла ҡулланыла (*тәрән-әй-еү*,

---

[28] Биишев Ә. Орфографияға индерелгән өҫтәмә һәм төҙәтмәләр тураһында// Совет Башҡортостаны. 1981. 27 декабрь; Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1982.

*һағ-ай-йыу, ҡара-й-ыу)*, ләкин ҡайһы бер сифаттарҙа этимологик *-ғ-* өнөнөң ҡулланылыуы күҙәтелә (*һары — һар-ғ-ай-ыу, һай — һай-ығ-ай-ыу, оло — оло-ға-й-ыу*). Был һүҙҙәр боронғо башҡорт (дөйөм төрки) телендә ***һарығ (сарығ), һайығ (сайығ), олоғ*** (*улуғ*) формаһында йөрөгәндәр. Хәҙер был һүҙҙәр *һары, һай, оло* булып йөрөһәләр ҙә, уларҙан *һарайыу, һайайыу, олайыу* формаһындағы ҡылымдар яһалмай. Был төп принциптарҙан башҡа, башҡорт әҙәби телендә орфографияның график йәки символик, морфологик принциптары ла осрай.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле һаман да үҙенең үҫешен һәм байығыуын дауам иткәнгә күрә, уның орфографияһында хәл ителергә тейеш мәсьәләләр ҡала килә йәки яңынан тыуып тора. Уларға, мәҫәлән, түбәндәгеләрҙе индерергә мөмкин: һәр фонеманың үҙ тамғаһы булыуы (төп башҡорт *о* өнө, *у, ү* (*уау*) тартынҡылары, фрикатив ирен өнө *б* һ. б.); ҡушма һүҙҙәрҙең ҡушып, айырым йәки һыҙыҡ аша яҙылыуҙарын билдәләгән асыҡ критерийҙар; яңғыҙлыҡ исемдәрҙең яҙылышын унификациялау (*Миңлеяр — Миңдеяр — Миңнеяр, Әбдрәшит — Ғәбдрәшит — Әптрәшит, Фидай — Фиҙай* һ. б.); вариант һүҙҙәрҙең мәғәнә айырымлыҡтарын билдәләү һәм ҡулланыштарын юлға һалыу (*ағым — ағын — ағыш — аҡма, һатлыҡ — һатылма — һатма* һ. б.).

Әҙәби телдең орфографияһын нисек кенә камиллаштырғанда ла, унда аҙағына тиклем эшләнеп бөтмәгән проблемалар ҡала йәки яңынан барлыҡҡа килеп тора. Йәшәп килгән орфография яҙма әҙәби телдең хәҙерге талаптарына яуап бирәме — төп мәсьәлә шунда тора. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орофографияһы яҡшы уҡ эшләнгән, йәшәп килгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә нигеҙләнеп, үҙ фекеренде әҙәби телдең бөтә стилдәрендә лә аңлайышлы һәм грамоталы итеп яҙырға мөмкинлек бар.

Әҙәби телдең орфографияһында сағылмаған ҡайһы бер осраҡтарҙы орфоэпия ҡағиҙәләре ярҙамында ла юлға һалырға мөмкин.

### *3. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһы*

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле тамырҙары менән башҡорт диалекттарына барып тоташа, һәм уның дөрөҫ һөйләү нормалары дөйөм халыҡ һөйләү теленең ҡағиҙәләренә нигеҙләнгән. Һөйләү ҡағиҙәләре башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәренең йәшәү процесында тыуа һәм үҫешә. Был ҡағиҙәләр һәм нормалар бигерәк тә халыҡ ижады әҫәрҙәрен башҡарыусы һүҙ оҫталары — сәсәндәрҙең, йырсы-ҡурайсыларҙың, әкиәтселәрҙең телмәрҙәрендә асыҡ сағылыш таба. Уларҙың башҡарыуында дөйөм халыҡ эшкәрткән тел саралары тормошҡа ашырыла һәм киң ҡулланыу өсөн өлгә була.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең формалашыу һәм башланғыс йәшәү осоронда уның орфоэпияһы, орфографияһынан айырмалы рәүештә, кодификацияланмаған (нормаға һалынмаған) була, шуға күрә яҙма әҙәби тел һөйләү теленән ныҡ ҡына айырылған бу-

ла. Һөйләү формаһы сифатында киң халыҡ ҡатламы өсөн — ерле һөйләштәр, ә белемле кешеләр өсөн ерле һөйләштәр һәм Урал — Волга буйы төрки теле үҙенсәлектәрен дә эсенә алған, ғәрәп-фарсы элементтары менән сыбарланған телмәр йөрөй.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең практикала йыш ҡулланылыуы һәм халыҡ араһында киң таралыуы уның һөйләү формаһын барлыҡҡа килтереүгә мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Әҙәби телдең ерле һөйләштәргә йоғонтоһо көсәйгәндән-көсәйә бара, ләкин әҙәби телдең һөйләү формаһын кодификацияламайынса — уның нормаларын булдырмайынса, әҙәби һөйләү теленең йәшәүен күҙ алдына ла килтереп булмай. «Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләрен һаҡлау тураһында бик күп һүҙ булды. Был турала хатта махсус кәңәшмәләр ҙә йыйып ҡаранылар. Ләкин башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләре ни рәүешле, ул нимәләрҙән тора, уның сығанағы ҡайҙа барып тоташа, уның фәнни-теоретик нигеҙҙәре нисек — был турала бер кем бер нәмә әйтмәне һәм яҙып сыҡманы. Ә асылда, уҡыусыларҙан башҡорт теленең дөрөҫ әйтелешен талап итеүҙән элек, уларға шул дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләрен ентекләп өйрәнергә, төшөндөрөргә дәреслек кәрәк. Тик шунан һуң ғына, йәғни башҡорт дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләрен өйрәткәс кенә, ул ҡағиҙәләрҙе һаҡлап һөйләүҙе талап итергә мөмкин», — тип яҙҙы хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һөйләү нормаларын юлға һалыусы Ж. Ғ. Ҡиекбаев[29].

Башҡорт фонетикаһындағы позицион һәм комбинаторлы үҙгәрештәрҙе, ритмик төркөмдәрҙе, һүҙ, фраза, логик һәм эфматик баҫымдарҙы, башҡорт һөйләү телмәренең мелодикаһын ентекле өйрәнеп, уларҙы дөйөмләштереү нигеҙендә Ж. Ғ. Ҡиекбаев хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфоэпияһының төҙөк системаға ҡоролған ҡағиҙәләрен эшкәртте. Ж. Ғ. Ҡиекбаевтың хеҙмәтенә Н. Ҡ. Дмитриев бик ҙур баһа бирҙе. «Башҡорт телселәре араһында Ж. Ғ. Ҡиекбаевҡа тиклем башҡорт теленең орфоэпияһы тураһында тикшеренеүсе кеше булманы, һәм был өлкәлә авторҙы ысын-ысындан новатор тип иҫәпләргә кәрәк», — тип яҙҙы ул[30]. Бөгөнгө көнгә тиклем был китап хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһы буйынса берҙән-бер ҡулланма булып тора.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре, үрҙә әйтелеп үткәнсә, башлыса фонетик принципҡа нигеҙләнә, йәғни айырым алғанда һүҙҙәр һәм һүҙ формалары нисек ишетелһә, шулай яҙылалар: *халыҡ, ғәҙеллек, беҙҙең; балаға, ҡартҡа; һауанан, тауҙан, ҡулдан, таштан; күҙлут (<күҙле ут), олатай (<оло атай), ҡарағас (<ҡара ағас), быйыл (<был йыл), бөгөн (<был көн), беләҙек (<беләк йөҙөк); һаҡ ҡына, тиҙ генә* һ. б. Ләкин йәнле һөйләү процесында һүҙ сиктәрендә бергә әйтелеү һәм бер-береһенә йоғонто яһау нигеҙендә өндәрҙең төрлөсә үҙгәреүҙәре күҙәтелә (һаңғырауланыу, яңғырауланыу, ассимиляция, диссими-

[29] Ҡиекбаев Ж. Ғ. Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө, 1964. 3-сө бит.

[30] Күрһәтелгән хеҙмәт, 5-се бит.

ляция, элизия, аккомодация һ. б.). Мәҫәлән, *оло* һәм *урам* һүҙҙәре орфография ҡағиҙәһе буйынса айырым алғанда нисек ишетелһә, шул килеш үҙгәртелмәйенсә яҙыла: *оло урам*, — ләкин уларҙы һүҙбәйләнеш булараҡ бергә әйткәндә, ике һүҙ араһындағы һуҙынҡылар элизияға бирелә һәм бер өн һымаҡ әйтелә — *олурам*. Әйтелештә өндәрҙең үҙгәреүе түбәндәге миҫалдарҙа асыҡ күренә: *алма алдым* [*алмалдым*], *алып сыҡ* [*апсыҡ*], *ҡыр ҡаҙҙары* [*ҡырғаҙҙары*], *көслө кеше* [*көслөгеше*], *китап алдым* [*китавалдым*], *һаңғырау* [*һаңрау*] һ. б. Йәнле телмәр ағышындағы өндәрҙең бөтә үҙгәрештәрен дә орфографияла сағылдырып бөтөп булмай, сөнки уның ҡағиҙәләре үтә ҡатмарлашыр ине, ә был үҙ сиратында тиҙ һәм уңышлы итеп белем алыуға ҡамасаулар ине.

Бынан тыш, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфографияһында фонетик принциптан башҡа принциптар ҙа файҙаланыла. Ә уларҙа, — мәҫәлән, морфологик һәм тарихи-традицион принциптарҙа — һүҙҙәрҙең әйтелеше менән яҙылышы тап килмәй. Башҡорт теленә рус теленән йәки рус теле аша килеп ингән һүҙҙәр менән эш шулай тора: беҙ *клуб, штаб, образ, обоз, актив, объектив* тип яҙабыҙ, ләкин әйтелештә улар икенсе төрлө яңғырай [*клуп, штап, óбръс, абóс, актúф, абйиектúф*].

Бөгөн беҙ, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һөйләү төрө барлыҡҡа килде һәм ул көндән-көн ныҡына бара, тип ышаныслы рәүештә әйтә алабыҙ. Беҙҙең республикала йәшәгән, башҡортса белем алған һәм һөйләшкән кешеләрҙең төп өлөшө уға эйә. Ләкин хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһында ике бик әһәмиәтле моментты билдәләп үтергә кәрәк: беренсенән, әҙәби телдә йәнле һөйләү; икенсенән, әҙәби телдә яҙылған тексты уҡыу. Йәнле һөйләү процесында әҙәби телдең дөрөҫ һөйләү нормаларынан ситкә тайпылыш һирәк күҙәтелә, һәм был әҙәби телсә һөйләү ҡағиҙәләренең нигеҙендә дөйөм халыҡ һөйләү теленең үҙенсәлектәре ятҡанлығын күрһәтә. Ләкин тексты уҡыған ваҡытта дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре әйтелешкә бик ныҡ йоғонто яһай. Ғәҙәттә, тексты уҡыған кеше ирекһеҙҙән орофографияның әсире булып ҡала, ни рәүешле яҙылһа, шулай уҡырға тырыша. Был рәүешле уҡыу тора-бара һөйләү теленә лә йоғонто яһарға мөмкин. Орфографияның (яҙылыштың) әйтелешкә йоғонтоһо буйынса иң киң таралған күренештәрҙе әйтеп үтеү кәрәк булыр.

1. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең һәм фамилияларҙың аҙағындағы *в* өнө һаңғырауланып *ф* өнөнә әүерелә, һәм был, ғәҙәттә, дөрөҫ әйтелә: *массив* [*мас'йф*], *коллектив* [*калект'йф*], *детектив* [*детект'йф*] *Жуков* [*Жýкъф*], *Саттаров* [*Сатáръф*] һ. б. Ә был һүҙҙәр эйәлек ялғауҙары ҡабул иткән осраҡта, әҙәби телдең орфоэпик ҡағиҙәләре буйынса *ф* өнө әйтелергә тейеш булһа ла [*мас'ифы, калект'ифы, акт'ифы, детект'ифы, жукъфы, сатаръфы*], *в* өнө әйтеп йөрөтөлә: *массивы, коллективы, активы, детективы, жуковы, саттаровы*. Былай әйтеү хата, әлбиттә. Күрәһең, был күренеш рус теленең йоғонтоһо нигеҙендә барлыҡҡа килгән, сөнки рус телендә ике һуҙынҡы араһында һәм яңғырау өндәр алдынан

*в* өнө һаҡлана: *коллектив* [*калектиф*], ләкин *коллективный* [*калективный*], *коллективы* [*калективы*].

Шундай уҡ әйтелеш үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең аҙағында *д* өнө килгәндә лә күҙәтелә: [*суты, заводы, параты, атр'аты, пахотында. парахотының*] тип әйтә торған урынға яҙылғанса *суды, заводы. парады, отряды, походында, пароходында* тип әйтелә. Төп башҡорт һүҙҙәрендәге аҙаҡҡы *т* өнө бер ҡасан да *д* өнөнә күсмәй: *йорт — йорто, һөт — һөтө, ат — аты.* Шулай булғас, башҡа һүҙҙәрҙә лә был ҡағиҙә һаҡланырға тейеш: *сут — суты, пахот — пахоты, парахот — парахотында* һ. б.

3. Тексты уҡыған саҡта (йәнле аралашыуҙа түгел!), ғәҙәттә, йыш ҡына ике һүҙ араһындағы *ҡ ~ ғ, к ~ г* сиратлашыуҙары иҫәпкә алынмай: *йуғине, баҡырғаҙан, кәрәгине, ҡыргәзәһе* тип әйтә торған урынға яҙылғанса *юҡ ине, баҡыр ҡаҙан, кәрәк ине, ҡыр кәзәһе* тип әйтеү күҙәтелә.

4. Элизия күренеше лә иҫәпкә алынмай: *торалманым, тоҙәсе, ҡатәйтә, килдинде, ишегасыҡ* тип әйтә торған урынға яҙылғанса *тора алманым, тоҙо әсе, ҡаты әйтә, килде инде, ишеге асыҡ* тип әйтелә.

5. Ике һуҙынҡы араһында йәки *р, л, й, з, ҙ, ж, у, ү,* тартынҡылары һәм һуҙынҡылар араһында *б* өнөнөң ике ирен *в* тип әйтелеүе иҫәпкә алынмай. Шунлыҡтан *бавай, әвей, арва, эсвиз, һәувән* тип әйтеү урынына яҙылғанса *бабай, әбей, арба, эзбиз, һәубән* рәүешендә әйтелә.

6. Шул уҡ күренеш бер һүҙ *п* өнөнә бөтөп, икенсеһе һуҙынҡыға башланғанда ла күҙәтелә: *һатывалдым, кәсевитеү, китавуҡыным, төвөҫтөндә, алывөттө, һөрөвөттө* тип әйтә торған урынға *һатып алдым, кәсеп итеү, китап уҡыным, төп өҫтөндә, алып бөттө, һөрөп бөттө* тип өндәрҙе үҙгәртмәйенсә әйтеү күҙәтелә.

7. Ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һәм төп башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башында ике ирен өнө *у, ү* (*уау*) урынына ирен-теш өнө *в* уҡыла: *уаҡыт, уатан, үәғәҙә, үәсилә, уатыҡ, уаҡлау* тип әйтеү урынына *ваҡыт, ватан, вәғәҙә, Вәсилә, ватыҡ, ваҡлау* рәүешендә яҙылғанса әйтеү күҙәтелә.

8. Беренсеһе *а, ә* өндәренә бөтөп, икенсеһе *и* өнөнә башланған һүҙҙәр бергә әйтелһә, был өндәрҙең ҡушылмаһы *ай, әй* дифтонгоидтары рәүешендә әйтелергә тейеш, ләкин яҙылыштың йоғонтоһонда улар *ҡайтайныҡ, күрәйне, һөрәйне* урынына *ҡайта инек, күрә ине, һөрә ине* тип уҡыла.

Бындай осраҡтарҙы дауам итергә лә булыр ине.

Ҡайһы ваҡыт дөрөҫ һөйләү нормаларының орфография ҡағиҙәләренә лә йоғонто яһауы күҙәтелә. Мәҫәлән, *-ған* ялғауына бөткән билдәһеҙ үткән заман ҡылымдары *ине* ярҙамсы ҡылымы менән бергә килһә, ҡыҫҡарған (тартылған) формала әйтелә: *кил-*

*гән ине* [*килгәйне*], *барған ине* [*барғайны*]. Хәҙерге башҡорт теленең орфографияһында *барған ине* йәки *барғайны* тип яҙыуҙың икеһе лә хата һаналмай.

Ҡайһы бер осраҡта яҙылыш буйынса уҡыу бик киң таралыш ала, хатта дөйөм халыҡ һөйләү теленә йоғонто яһай башлай. Мәҫәлән, редукцияға бирелгән һуҙынҡылы *матурыраҡ, тарыраҡ, олоғайыу, яңылыш, айырым; ҡаршы, йомшаҡ, осрашыу, сәсрәтеү, томра, бөҙрә, сепрәк, япраҡ, тупраҡ* һымаҡ һүҙҙәр олораҡ йәштәге кешеләрҙең телмәрендә һәм Ж. Ғ. Киекбаевтың ҡулланмаһы буйынса[31] *матурраҡ, тарраҡ, олғайыу, яңлыш, айрым; ҡарышы, йомошаҡ, осорашыу, сәсерәтеү, томора, бөҙөрә, себерәк, япыраҡ, тупыраҡ* тип әйтелһә лә, орфографияның йоғонтоһо арҡаһында йышыраҡ яҙылғанса әйтеп йөрөтөлә. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренең йоғонтоһонда шулай уҡ *и* өнөнә бөткән яңғыҙлыҡ исемдәр хәҙерге башҡорт һөйләү телендә *Ғәлей, Үәлей, Хәйрей, Зәйней, Нәжмей, Сәйфей, Сәрбей, Бибей* тип түгел, ә яҙылғанса *Ғәли, Вәли, Хәйри, Зәйни, Нәжми, Сәйфи, Сәрби, Биби* тип әйтеү киңерәк таралған. Дөйөм халыҡ һөйләү теленең үҙенсәлегенә әүерелгән бындай үҙгәрештәр, беҙҙең фекеребеҙсә, яңы орфоэпик ҡағиҙәләрҙә иҫәпкә алынырға тейеш.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләре үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе әйтеүҙәге һуңғы үҙгәрештәрҙе лә сағылдырырға тейеш. XX быуаттың 30-сы йылдарына тиклем рус теленән һәм рус теле аша килеп ингән һүҙҙәр башҡорт теленең фонетик ҡоролошона яраҡлаштырып үҙләштерелде: *бочка — мискә, печь — мейес, смола — ыҫмала, самовар — самауыр, труба — торба, тарелка — тәрилкә, ярмарка — йәрминкә* һ. б. Был процесс рус алфавиты нигеҙендәге яҙыуға күскәнгә тиклем шулай барҙы. Рус графикаһына күсеп тә, рус теленән һәм уның аша килеп ингән һүҙҙәрҙе рус орфографик ҡағиҙәләре нигеҙендә яҙа башлау менән ҡапыл ғына ундай һүҙҙәрҙең әйтелеше үҙгәреп китмәне: *трактор, стакан, стена, танк, мотоцикл, класс* һымаҡ һүҙҙәр, яҙылыштарына ҡарамайынса, *тырактыр, ыстакан, эстинә, таныҡ, матасикел, кылас* тип әйтеп йөрөтөлдөләр. Ләкин хәҙерге башҡорт әҙәби телендә бындай үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе хәҙерге рус әҙәби теленең орфоэпик ҡағиҙәләре буйынса әйтеү киң таралыш алып бара. Хәҙер рус телен белгән кешеләрҙең телмәрендә *ручка, печенье, цех, совещание, кремль, грамматика, трансформатор, рашпиль* һымаҡ һүҙҙәрҙең *рушка* йәки *руска, бишинйә, сех, сауишшанийы, керимел, гыramматика, тыранысфарматыр, ырашпил* булып яңғырауҙарын ишетеү һәр кемде ғәжәпкә ҡалдырған булыр ине. Рус теленән һәм рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең рус орфоэпияһы ҡағиҙәләре буйынса әйтелеүенә башҡорт халҡында белемдең киң таралыуы, ике телдә лә яҡшы һөйләшә белеү, дөйөм телмәр культураһының үҫеүе ныҡ булышлыҡ итә. Нигеҙҙә хәҙерге башҡорт әҙәби теле өсөн элекке башҡорт теленә хас булмаған *ф, ц, ч, щ* һымаҡ өндәрҙе һәм башҡорт телендә осрамаған төрлө

---

[31] Киекбаев Ж. Ғ. Күрһәтелгән хеҙмәт. 37—38-се биттәр.

өндәрҙең ҡушылмаларын үҙләштереүгә булған тенденция ап-асыҡ күҙәтелә.

Алда әйтеп үтелгәнсә, рус һәм башҡорт телдәрендә бер-береһенә оҡшаш өндәрҙең әйтелешендә лә айырмалыҡтар бар. Башҡорт телендәге *егет, өгөт, бигерәк, гөл, гел* һымаҡ һүҙҙәрҙә *г* өнө фрикатив (ышҡылыу) өн булһа, рус телендәге *огород, зоология, огнемет, герой, гвардия* шикелле һүҙҙәрҙә *г* өнө — шартлаулы өн. Рус өндәрен үҙләштергәнгә тиклем ул башҡорт телендәге кеүек *ек* өнө итеп әйтелһә, хәҙер рус телен яҡшы белгән кешеләрҙең телмәрендә рус орфоэпияһындағы сифатын юғалтмай, йәғни шартлаулы өн итеп әйтелә.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһында төрлө сәбәптәр нигеҙендә дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләре үҙгәреп тора. Улар әҙәби телдең эшләнәсәк орфоэпияһында сағылдырылырға тейеш.

*Өсөнсө глава*

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ ЛЕКСИКАҺЫ, ФОНЕТИКАҺЫ ҺӘМ ГРАММАТИКАҺЫ

### *1. Лексиканың формалашыуы һәм үҫеүе*

Милләткә тиклемге һәм милләткә күсеү осоронда башҡорттар өсөн яҙма тел булған Урал — Волга буйы төрки теле һәм иҫке татар теле һүҙлек составы, грамматик ҡоролошо һәм бигерәк тә фонетикаһы менән башҡорт халҡының йәнле һөйләү теленән шаҡтай ныҡ айырылған. Уларҙың һүҙлек составы, нигеҙҙә, дөйөм төрки булһа ла, күп һандағы ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған, ә был, уғыҙ һәм уйғыр телдәренең фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәренә ҡушылып, халыҡ тарафынан Урал — Волга буйы төркийен аңлауҙы ҡыйынлаштырған. XX быуаттың 20-се йылдарында яңы формалашып килгән хәҙерге башҡорт әҙәби теленең лексикаһында Урал — Волга буйы төркийенең, татар әҙәби теленең традициялары әле көслө була.

Алда әйтеп үтелгәнсә, үҙенең башланғыс йәшәү осоронда хәҙерге башҡорт әҙәби теле бер диалектҡа — ҡыуаҡан (хәҙерге төркөмләү буйынса — көнсығыш) диалектына нигеҙләнгән була, шуға күрә ул дөйөм башҡорт һөйләү теленең бөтә лексик-грамматик байлыҡтарын сағылдыра алмаған.

20-се йылдарҙан башлап дөйөм башҡорт һөйләү телендәге диалекттар һәм һөйләштәр планлы рәүештә өйрәнелә башлай. Тәүге осорҙа был эш менән Н. К. Дмитриев етәкселек итә. 1925 йылдың аҙағынан уҡ башҡорт әҙәби теле ике диалекттың — ҡыуаҡан һәм юрматы (хәҙерге төркөмләү буйынса — көньяҡ) диалекттарының үҙенсәлектәренән файҙалана башлай, һәм был — ике терәк диалекттың һүҙлек байлыҡтарына тулыһынса таянырға мөмкинселек бирә. Айырым һүҙҙәрҙе хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составына ҡабул иткәндә, уларҙың диалекттарҙа киңерәк таралыуы йәки башҡа һөйләштәрҙә булмауы иҫәпкә алына.

Экономик, политик, ғилми-техник һәм культура өлкәләрендәге революцион үҙгәрештәр күп һандағы яңы төшөнсәләрҙең барлыҡҡа килеүенә сәбәп булды, һөҙөмтәлә уларҙы телдә сағылдырыу кәрәклеге тыуҙы. Был күренеш хәҙерге башҡорт әҙәби теленең үҫеүенә булышлыҡ итте, иң алда уның һүҙлек составы бик ныҡ үҙгәрҙе.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең тәүге йәшәгән йылдарында тәржемәселәр, яңы дәреслек төҙөүселәр, тел өлкәһенең башҡа мәсьәләләре буйынса эшләгән кешеләр ҙур ҡыйынлыҡ кисерҙеләр, сөнки башҡорт телендә революция тыуҙырған, йәмғиәт, фән һәм техника, мәҙәниәт үҫеше нигеҙендә барлыҡҡа килгән төшөнсәләрҙе атау өсөн кәрәкле терминдар һәм атамалар юҡ ине. «Яңы совет төшөнсәләренең күбеһе өсөн бер ниндәй ҙә, хатта ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр төрөндә лә, терминологик материал булманы», — тип яҙҙы һуңынанораҡ Н. К. Дмитриев [1]. Был шарттарҙа иң әһәмиәтле мәсьәләләрҙең береһе булып милли терминологияның нигеҙҙәрен булдырыу һәм юлға һалыу, башҡорт теленең төрлө өлкәгә ҡараған терминдарын булдырыу торҙо. Мәктәптәрҙә киң рәүештә туған телдә уҡытыу юлға һалынып, дәреслектәр сығарыла башлағас, башҡорт телендә фәнни, фәнни-популяр һәм публицистик әҙәбиәт сығарыу үҫешкәс, төрлө өлкәгә ҡараған терминологик һүҙлектәр сығарыу кәрәклеге тыуҙы. Был эш менән Халыҡ мәғарифы комиссариатының «Академик үҙәк» тип аталған бүлеге эргәһендә ойошторолған махсус комиссия етәкселек итте. Эшләүенең тәүге осоронда был комиссия башҡорт әҙәби теленең лексикаһын нормалаштырыу, сит телдән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе һәм диалектизмдарҙы ҡулланыуҙа булған хаталарҙы һәм етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса бик ҙур практик эш алып барҙы, үҙе сығарған принциптарға таянып эшләнгән терминдарҙы тикшерҙе һәм раҫланы. Газета һәм журнал биттәрендә әлдән-әле комиссия тарафынан раҫланған төрлө фән өлкәләренә, административ-етәкселек һәм канцелярия эштәренә ҡараған терминдарҙың исемлеге сығып торҙо. Мәҫәлән, 1922 йылда «Башҡортостан» газетаһының 129—131-се һандарында тәүге тапҡыр рәсми эш башҡарыу буйынса башҡортса терминдар баҫылып сыҡты. I һәм II баҫҡыс мәктәптәрендә уҡытыла торған физика, математика, география һәм башҡа предметтар буйынса терминдар эшләнде, улар даими рәүештә «Белем» журналында баҫылып сыға торҙо. Терминдар эшләп сығарғанда, ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе лә файҙаланып, башлыса, башҡорт теленең үҙ материалдарын нигеҙ итеп алыуға йүнәлеш тотолдо. Быны журналдың бер номерында баҫылып сыҡҡан физика өлкәһендәге терминдар асыҡ күрһәтә: *матдә* — вещество, материя, *хисәйәт* — свойство, *байҡау* — наблюдение, *ипкен* — инерция, *ҡайтылыусанлыҡ* — упругость, *йөрөш (хәрәкәт)* — движение, *сығыр* — блок, *теҙмә сығыр*—

[1] Дмитриев Н. К. Грамматическая терминология в учебниках родного языка. М., 1955. 5—6-сы биттәр.

полиспаст, *һәлмәклек үлсәүес* — ареометр, *тирбәлеү киңлеге* — амплитуда, *тирбәлгес* — маятник, *ҡаршылыҡ* — сопротивление, *нышытҡы* — конденсатор, *шауҡым* — индукция, *дерелдәткес, ҡалтыратҡыс* — вибратор, *тауыш йылдамлығы* — скорость звука, *шаңдау* — эхо, *һөрәннәгес* — рупор, *магнит уғы* — магнитная стрелка, *ҡурғыуыс* — предохранитель, *шәүлә* — изображение, *үткәргес* — проводник, *тәжрибә* — опыт [2] һ. б.

Бер үк ваҡытта лексик нормаларҙың һәм термин яһауҙың төп принциптарын булдырыу буйынса эш алып барылды. Был йүнәлештәге төп тенденциялар Х. Ғәбидовтың «Маңыҙҙар (терминдар) тикшереүҙә тотҡан юлыбыҙ» тигән мәҡәләһендә асыҡ сағылыш тапты [3]. Һуңынаныраҡ улар камиллаштырылып һәм дөйөмләштерелеп, «башҡорт лексикаһын яңы терминдар менән үҫтереүҙе һәм байытыуҙы башҡорт теленең үҙ ресурстарына, диалекттарына һәм өлөшләтә үҙләштерелгән лексикаһына йүнәлдерҙе» [4].

Ошоға ҡарамаҫтан, 20-се йылдарҙа башҡорт әҙәби теленең лексикаһында Урал — Волга буйы төркийенән мираҫ булып килгән ғәрәп һәм фарсы сығанаҡлы терминдар ҙур урын алып торҙо. Әҙәби телдең артабан үҫеше, башҡорт лексикаһының урындағы һөйләштәр һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр иҫәбенә байый барыу процесында улар аҡрынлап актив ҡулланыуҙан төшөп ҡала башланылар. Был күренеш бигерәк тә 30-сы йылдарҙың аҙағына ҡарай көсәйҙе. Һөҙөмтәлә күп кенә ғәрәп һәм фарсы сығышлы һүҙҙәр һәм терминдар төп башҡорт (дөйөм төрки), рус теленән йәки рус теле аша үҙләштерелгән интернациональ һүҙҙәр менән алмаштырылды. Уларға, мәҫәлән, түбәндәгеләр ҡарай: *ғәреп* урынына *көнбайыш, шәреҡ* урынына *көнсығыш, матдә* урынына *статья, маңыҙ* урынына *термин, сәйәсәт* урынына *политика, мөғәллим* урынына *уҡытыусы, сарыф* урынына *морфология, лөғәт* урынына *һүҙ* йәки *һүҙлек* һ. б. Ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән әҙәби телдә иң киң таралыш алғандары, башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәрендә нығынып, бөтә кешеләр өсөн аңлайышлы булғандары ғына ҡалды: *аң, дәүер, ихтыяж, китап, маҡсат, милләт, миҫал, мәктәп, мәҡәлә, тарих, тәнҡит, сәбәп, хәл, хәреф* һ. б.

Дөйөм халыҡ телендә киң таралған быңдай һүҙҙәрҙе хәҙерге әҙәби телдең һүҙлек составынан сығарып ташлау йәки башҡа һүҙҙәр менән алмаштырыу хата булыр ине.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теле киң халыҡ ҡатламы өсөн аңлайышһыҙ, башҡорт теленең фонетик-морфологик ҡоролошона ят булған һүҙҙәрҙән һәм терминдарҙан аҡрынлап ҡотола барҙы. Был процесс һүҙьяһалышта башҡорт теленең үҙ лексик һәм морфологик мөмкинселектәрен тулыраҡ асырға һәм файҙаланырға, башҡорт әҙәби телен интернациональ һүҙҙәр һәм тер-

---

[2] Белем. 1925. № 11—12.

[3] Ғәбидов Х. Маңыҙҙар (терминдар) тикшереүҙә тотҡан юлыбыҙ // Башҡорт аймағы. 1926. № 2.

[4] Юлдашев А. А. Күрһәтелгән хеҙмәт. 144-се бит.

миндар менән тулыландырырға булышлыҡ итте. Телде ғилми терминдар менән байытыуҙың төп сығанағы башҡорт теле, уның борон-борондан килгән һүҙлек байлығы булды.

Башҡорт теленең лексикаһын байытыуҙа, терминологияһын эшкәртеүҙә тәржемәселек эше лә ыңғай роль уйнаны. Ғилми, публицистик, художестволы әҙәбиәттәрҙе, дәреслектәрҙе рус теленән башҡорт теленә тәржемә иткәндә, үҙләштереү һәм калькалаштырыу нигеҙендә яңы һүҙҙәр һәм терминдар барлыҡҡа килде. Башҡа телдәрҙән, башлыса рус теленән, тәржемә иткән саҡта шундай һүҙҙәр осрай, уларҙың мәғәнәһен биреү өсөн төп башҡорт һүҙҙәре, элек үҙләштерелгән һүҙҙәр йәки калькалар булыу түгел, хатта башҡорт телендә уларҙың төшөнсәлек нигеҙҙәре лә булмай, — шул саҡта бындай һүҙҙәр үҙләштерелә йәки калька рәүешендә ҡабул ителә. Шуның өсөн калькаларҙың барлыҡҡа килеүенә бер ни тиклем субъективлыҡ та хас. Күрәһең, шул сәбәптән хәҙерге башҡорт әҙәби телендә бер ни тиклем һандағы нигеҙләнмәгән, урынһыҙ калькалар ҙа йөрөй. Улар бигерәк тә терминология өлкәһендә йыш осрай. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә бындай калькаларға түбәндәге һүҙҙәрҙе индерергә мөмкин: *йолон, йөлөн* тигән үҙ һүҙҙәре булыуға ҡарамаҫтан, рус телендәге *спинной мозг* һүҙенән калька: *арҡа мейеһе; туҙғаҡ, борҡолдаҡ, һаңрау бәшмәк* урынына *ямғыр бәшмәге* (<гриб-дождевик), *ҡанат* урынына *йөҙгөс* (<плавник); *ҡыҙылуңәс* урынына *аш юлы* (<пищевод) йөрөй. Бындай миҫалдарҙы күп тапҡыр арттырырға булыр ине.

Сит телдең һүҙҙәрен калькалағанда, ул калькалана торған объекттың дәлилләнгәнлеген тулыһынса һаҡларға мөмкин: русса *крылоногие* — башҡортса *ҡанатаяҡлылар, шилоклюв — беҙсуҡыш, одночлен — бербыуын, рукопись — ҡулъяҙма, корнеплод — тамыраҙыҡ, корненожка — тамыраяҡ, выпрямитель — турайтҡыс, самотек — үҙағыш, самоцель — үҙмаҡсат, осьминог — һигеҙаяҡ, щупальце — һәрмәүес, головоломка — башватҡыс, водорез — һыукиҫәр* һ. б. Ләкин хәҙерге башҡорт әҙәби телендә мәғәнәләре яҡынлаштырылған калькалар киңерәк таралған: русса *власоеды* — башҡортса *сәсҡырғыстар (ашағыстар* түгел), *шерстокрыл — тиреғанат (йөн* түгел), *саженец — үрсетмәлек (ултыртмалыҡ* түгел), *хрупкость — һыныусанлыҡ (муртлыҡ* түгел), *землеройка — ер тишкес (ҡаҙығыс* түгел), *жгутиковые — ҡамсылылар (жгут* һүҙенең тәржемәһе юҡлыҡтан) һ. б. Йыш ҡына калькалар яһағанда, тәржемәнән башҡа, калькаланған объекттың ҡайһы класҡа йәки төргә ҡарағанлығы күрһәтелә, сөнки унһыҙ һүҙҙең нимә аңлатҡанын белеүе ауыр: русса *медведка* — башҡортса *айыуғорт, глупыш — аңрағош, крапивница — кесерткән турғайы* һ. б. Ошоноң нигеҙендә, мәҫәлән, рус теленән калька итеп алынған бәшмәк атамаларында, нигеҙ телдә булмаһа ла, һәр ваҡыт *бәшмәк* һүҙе ҡулланыла: *свинушка — дуңғыҙ бәшмәге, рыжик — ерән бәшмәк, масленок — майлы бәшмәк, ежовик — керпе бәшмәге, подберезовик — ҡайын бәшмәге, подосиновик — уҫаҡ бәшмәге, скрипица — шағырлаҡ бәшмәк, горькуша — әсе бәшмәк, козляк — кәзә бәшмәге* һ. б.

Башҡорт телендә башҡа телдәрҙең йоғонтоһонда калька яһал-

ған осраҡта, ғәҙәттә, үҙ теленә хас булған һүҙбәйләнеш, ҡушма һүҙҙәр йәки аффиксация моделдәре алына (*белый гриб — аҡ бәшмәк, глазное яблоко — күҙ алмаһы, ледокол — боҙватҡыс, рукопись* — **ҡулъяҙма, отсталость — артталыҡ**, *определение — билдәләмә, частица — киҫәксә, щупальце — һәрмәүес, огородничество — баҡсасылыҡ* һ. б.). Шулай ҙа сит моделдәрҙең йоғонтоһонда ҡайһы ваҡыт башҡорт теленә хас булмаған өлөштәрҙән торған һүҙәр барлыҡҡа килергә мөмкин. Мәҫәлән, составында *үҙ-* **компоненты булған ҡушма һүҙҙәр башҡорт теле өсөн тәбиғи күренеш түгел, һәм уларҙың бөтәһе лә рус теленең йоғонтоһонда яһалған;** *үҙаң* — самосознание, *үҙағыш* — самотек, *үҙешмәкәр* — самодеятельный, *үҙидара* — самоуправление, *үҙкиммәт* — себестоимость, *үҙмаҡсат* — самоцель һ. б. Бындай калькаларҙың рус телендәге *само-, себе-* компоненттарын тәржемәләү нигеҙендә барлыҡҡа килгәнлеге ап-асыҡ күренеп тора. Улар башлыса Октябрь революцияһынан һуң ғына яһалғандар, сөнки боронғо төрки телендә яҙылған ҡомартҡыларҙа ла, Урал — Волга буйы төрки телендә лә, дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәрендә лә бындай һүҙҙәр осрамай.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ярым калькалар ҙа осрай: улар ярым тәржемәнән һәм ярым үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән тора. Ярым калькаларға түбәндәге һүҙҙәрҙе индерергә мөмкин: *тимер-бетон* (<железобетон), *радиоалғыс* (<радиоприемник), *ҡыҙыл армеец* (<красноармеец), *политсәғәт* (<политчас), *ярымшар* (<полушарие), *авиамәктәп* (<авиашкола) һ. б. — был һүҙҙәр *радио, бетон, армеец, полит-, шар, авиа-* тигән үҙләштерелгән өлөштәргә, *тимер, алғыс, ҡыҙыл, сәғәт, ярым, мәктәп* тәржемәләрен ҡушыуҙан яһалған. Элегерәк үҙләштерелгән һүҙҙәр төп башҡорт һүҙҙәре хоҡуғында калька яһауҙа ҡатнаша алалар: *үҙидара*<самоуправление (*идара* — фарсы һүҙе), *халыҡ-ара*<международный (*халыҡ* — ғәрәп һүҙе), *милекселек*<собственничество (*милек* — ғәрәп һүҙе, *-селек* — төп башҡорт ялғауы) һ. б.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә семантик калькалар ҙа киң генә таралған: улар сит телдәге һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһен уларға тап килгән төп башҡорт һүҙҙәренә күсереүҙән тора, йәғни бер телдәге һүҙҙең мәғәнә күсеше икенсе телдәге һүҙҙең мәғәнә күсешенә өлгө була. Мәҫәлән, *уның юлдашы* һәм *ер юлдашы* тигән һүҙбәйләнештәрҙә *юлдаш* һүҙенең икенсе мәғәнәһе рус телендәге *спутник* һүҙенең күсмә мәғәнәһенән яһалған. Рус теленең йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән семантик калькаларға *тамыр* (математик һәм лингвистик терминдар), *ҡурсаҡ* (бөжәктәр үҫешендәге осорҙоң бер формаһы), *бағана* (һүҙҙәрҙең йәки һандарҙың вертикаль теҙмәһе), *ағза* (берәй ойошмаға ҡараған кеше), *ағым* (йәмғиәт тормошондағы йүнәлеш) һымаҡ һүҙҙәр ҡарай. Семантик калькалар бигерәк тә терминология өлкәһендә киң таралған. Мәҫәлән, башҡорт тел белемендә генә *баҫым* — ударение, *өн* — звук, *хәбәр* — сказуемое, *алмаш* — местоимение, *дәрәжә* — степень, *һөйкәлеш* — наклонение, *киҫәксә* — частица, *ярашыу* — согласование, *аныҡлаусы* — определение, *тултырыусы* — дополнение, *хәл* — об-

стоятельство, *күсемлелек* — переходность, *күсемһеҙлек* — непереходность, *бәйләүес* — союз һымаҡ бик күп терминдар — рус теле йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән семантик калькалар.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле лексик нормаларының юлға һалыныу процесы, милли терминологияның нигеҙҙәрен булдырыу — ҡатмарлы, көсөргәнеш талап иткән күренеш, һәм ул һәр ваҡыт шыма ғына барманы: кәрәкле фәнни нигеҙҙәрҙең һәм методик әҙерлектең булмауы был эштә ҙур ғына ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Терминдар яһауҙа юғарыла күрһәтелгән принциптарҙы эҙмә-эҙле үтәү киҫкен пуристик тенденцияларға килтермәһә лә, ҡайһы ваҡыт ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән артыҡ мауығыу, шулай уҡ яңы төшөнсәне атау өсөн тик башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрен генә табырға тырышыу йәки сит телдәге һүҙҙе һәм терминды өлөшләтә тәржемә итеү һымаҡ ыңғай булмаған күренештәр ҙә күҙәтелде. 20-се йылдарҙағы матбуғат биттәрендә *комиссар, комиссариат* урынына *түрә, түрәлек; автомобиль* урынына *утарба; велосипед* урынына *типкарба* һымаҡ һүҙҙәрҙе ҡулланыу ҙа булды. Бындай һүҙҙәр «Башҡортса эш йөрөтөү өсөн ҡулланма һәм үрнәктәр» исемле китапта ла байтаҡ ине: *кандидат — эҙбаһар, агроном — ертаныр, землемер — ербесер, коммунист — уртаҡсы, консультация — аҡылдаш, курьер — ҡулъялғаш, пропаганда — ҡотортоу* һ. б.[5]. Ләкин бындай яһалма һәм уйҙырма һүҙҙәр халыҡ араһында танылыу һәм теләктәшлек тапманы, шуға күрә лә улар әҙәби телгә алынманы, тыуыу осоронда уҡ үлемгә дусар ителде.

1927 йылда хәҙерге башҡорт әҙәби теленең эш ҡағыҙҙарын башҡарыуға һәм йөрөтөүгә арналған беренсе терминологик һүҙлеге сыҡты, ә 30-сы йылдарҙа инде милли терминологияның үҫеүендә һәм юлға һалыныуында яңы бер этап асылды. Был йылдарҙа ун ике, шул иҫәптән математика, физика, медицина, химия, ботаника, тел белеме буйынса русса-башҡортса һәм башҡортса-русса терминологик һүҙлек төҙөлдө һәм баҫтырып сығарылды. Уларҙың күбеһе бәләкәй генә күләмдә булып, тик мәктәп дәреслектәренең материалына нигеҙләнеп кенә эшләнделәр. Терминдар ҡулланыуҙың реаль кәрәклеген иҫәпкә алмау, терминдар яһауҙа эҙмә-эҙлелектең булмауы, абстракт төшөнсәләрҙе атау өсөн артығынан тыш үҙләштерелгән һүҙҙәр менән мауығыу һымаҡ етешһеҙлектәр ҙә булды. Шуға ҡарамаҫтан, был һүҙлектәрҙә 50-се йылдарҙа сығарылған һүҙлектәр серияһында сағылыш алған башҡорт терминдарын эшләүҙең төп принциптары күренә башлағайны инде.

30-сы йылдарҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теле ауыл хужалығын коллективлаштырыуға, ауыр промышленностың, фән һәм белемдең үҫеүенә, илдәге ижтимағи-административ ҡоролоштоң үҙгәреүенә бәйле булған бик күп һандағы яңы һүҙҙәр һәм терминдар менән байыҡты. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составына инеп, унан йәнле һөйләү телмәренә күскән бындай һүҙҙәрҙең күбеһе рус һүҙҙәре йәки интернационализмдар ине: *автомобиль, комбайн, комбайнер, шофер, мотоцикл, трактор, колхоз, самолет,*

---

[5] Башҡортса эш йөрөтөү өсөн ҡулланма һәм үрнәктәр. Өфө, 1924.

*культура, комитет, процент, политика, профсоюз, район, райком* һ. б.

Был йылдарҙа рус теленән тәржемә итеү бик активлашты. Бигерәк тә рус теленән әҙәби әҫәрҙәрҙе тәржемә итеү нык артты. Башҡорт теленә рус классиктары А. С. Пушкин, М. Ю. Лермонтов, Н. В. Гоголь, И. С. Тургенев, Н. А. Некрасов, А. П. Чехов, Л. Н. Толстой, А. М. Горький һымаҡ яҙыусыларҙың әҫәрҙәре тәржемә ителде. Башҡорт китап уҡыусылары шулай уҡ рус теле аша тәржемә ителгән В. Шекспир. И Гете, В. Гюго, О. Бальзак, Г. Флобер, Д. Байрон, Д. Лондон, Ж. Верн, Э. Войнич, Ж.-Ж. Руссо кеүек бик күп сит ил яҙыусыларының да әҫәрҙәре менән танышты. Башҡортостанда 30-сы йылдарҙа тәржемәүи әҙәбиәттең көслө үҫешен түбәндәгесә аңлатырға була: грамоталылыҡты башҡорт телендә үҙләштергән халыҡ массаларының уҡыуға ихтыяжы бик ҙур булып, рус әҙәбиәте менән оригиналында йәки руссаға тәржемә ителгән сит ил әҙәбиәте менән танышыу өсөн русса белем базаһы етерлек түгел ине. Шуның өсөн дә уҡыуға булған ынтылыш башлыса башҡортса тәржемәләр аша ҡәнәғәтләндерелде. Был йылдарҙа шулай уҡ фән һәм техника, йәмғиәт һәм культураға ҡағылышлы әҙәбиәттең тәржемәләре арта. Былар бөтәһе лә хәҙерге башҡорт әҙәби телен яңы терминдар һәм һүҙҙәр менән артабан байытыуға булышлыҡ итә. Һүҙбәйләнештәрҙең лексикалашыуы, һүҙҙәрҙе ҡушыу һәм башҡорт теленең морфологик сараларын файҙаланыу рус терминдарының дөрөҫ эквиваленттарын табырға һәм яһарға мөмкинлек бирә: *независимость — бойондороҡһоҙлоҡ, управление — идаралыҡ, коллективизация—коллективлашыу, колхозлашыу, культурно-просветительская работа — культура-ағартыу эше, трудодень — хеҙмәт көнө, треугольник — өсмөйөш, окружность — түңәрәк әйләнәһе* һ. б. Ж. Ғ. Киекбаевтың билдәләүенсә, рус теле башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составын үҫтереүҙә ҙур этәргес көс алды, һүҙьяһалыш өлкәһендә унын бөтә потенциаль мөмкинлектәрен асты [6].

40-сы йылдарҙа, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы осоронда, хәҙерге башҡорт әҙәби теле рус теле аша хәрби терминологияға ҡараған тиҫтәләрсә яңы һүҙҙәр ҡабул итте: *бомбардировщик, истребитель, миномет, бронетранспортер, гвардеец, «катюша», гранатомет, огнемет, эскадрилья, траншея, снайпер, дот, дзот, амбразура* һ. б.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составын үҫтереүҙә һәм байытыуҙа башҡорт яҙыуының латин графикаһынан рус графикаһына күсеүе бик әһәмиәтле урын алды. Рус графикаһына күсеү рус теленән һәм рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе боҙмайынса дөрөҫ итеп бирергә мөмкинлек тыуҙырҙы. Рус графикаһына күсеү генә боронғо осорҙа башҡорт теленең ҡоролошона яраҡлаштырылып үҙләштерелгән һүҙҙәр менән яңы үҙләштерелгән, әле дөйөм халыҡ телендә нығынып бөтмәгән һүҙҙәрҙе айырып яҙыуға мөмкинлек бирҙе: *мейес, торба, арыш, бүрәнә, самауыр,*

---

[6] Киекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө, 1966. 148-се бит.

*сәйнүк, көршәк, ыҫмала* һ. б.; *цемент, меню, характер, механизация, синхрония, скафандр, тревога, электросварщик, компьютер, чертеж* һ. б. Шул уҡ ваҡытта башҡорт теленең махсус өндәре өсөн ҡабул ителгән хәрефтәр ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе лә ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә дөрөҫ бирергә булышлыҡ итә: *файҙа, ихтыяр, ҡағыҙә, фәҡәт, ғалим, иғлан, мөғжизә, тәхет, гөл, ожмах, хәрәкәт, ғәрип, сәйәхәт, выждан* һ. б.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа терминологик һүҙлектәр төҙөү буйынса эш яңынан башланды. Бер-бер артлы математика (1949), химия (1950), зоология (1952), ботаника (1952), география (1952), урман эше (1954), юриспруденция (1956), ауыл хужалығы (1961) буйынса русса-башҡортса, башҡортса-русса терминологик һүҙлектәр баҫылып сығып торҙо. Терминологик һүҙлектәр төҙөү буйынса бөтә был эштәр күп йылдар буйына лексиканы байытыу, нормалаштырыу һәм тәртипкә һалыу буйынса ғына түгел, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составын артабан үҫтереү юлындағы төп тенденцияларҙы билдәләүҙә лә бик ҙур әһәмиәткә эйә булды.

Фәнни-техник революция, донъялағы һәм беҙҙең илдәге халыҡтар араһындағы бәйләнештәрҙең көсәйеүе терминологияның үҫеүенә лә булышлыҡ итте, уның алдына яңы проблемалар ҡуйҙы, терминологияны артабан унификациялау мәсьәләһен талап итте. Был эш менән фәнни һәм практик йәһәттән етәкселек итеү өсөн 1954 йылда Башҡорт АССР-ы Верховный Советы эргәһендә фән, техника, культура, матбуғат өлкәһендәге алдынғы белгестәрҙән Терминологик комиссия булдырылды. Терминологик комиссияның положениеһында әйтелеүенсә, ул милли терминологияның хәҙерге торошо һәм үҫеш перспективалары буйынса тулы күҙәтеү алып барырға тейеш. Комиссия эшенең төп йөкмәткеһе булып йәшәп килгән терминдарҙы унификациялау һәм хәҙерге башҡорт әҙәби теленең яңы терминологияһын законлаштырыу тора. Был эштә, бер яҡтан, башҡорт теленең үҙ мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу булһа, икенсе яҡтан, беҙҙең илдәге милли телдәрҙең терминологияһынан минималь айырылырға тейеш. Һуңғы йылдарҙа терминологик комиссия ижтимағи-политик, фәнни-техник терминдарҙы эшләү, төрлө атамаларҙың һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышын тәртипкә һалыу өлкәһендә ҙур эштәр башҡарҙы. Төшөнсәләренә тулыһынса тап килмәгән терминдарға асыҡлыҡ индерелә; үҙләштерелгән терминдарҙың ҡайһы берҙәре яңынан ҡарала; башҡорт телендә эквиваленттары булған сит тел терминдары ҡулланыуҙан сығарыла. Фән һәм техниканың яңы тармаҡтары буйынса тәржемә һүҙлектәр төҙөү планлы рәүештә алып барыла.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле лексикаһының артабан байыуы һәм үҫеүе, башҡа халыҡтарҙың әҙәби теле кеүек үк, хәҙерге фәнни-техник прогресс менән тураһан-тура бәйләнгән. Бөгөнгө көндә һүҙлек составында иң йылдам үҫеүсе ҡатламдарҙан һаналған терминологик лексика хәҙерге әҙәби телдәрҙең лексик байығыуының төп сығанағына әүерелде. Ядро энергияһын, йыһан киңлектәрен үҙләштереү, физика һәм химия фәндәренең ныҡ үҫеүе, производствоны автоматлаштырыу һәм фән, техника, производство өл-

кәһендәге башҡа ҙур ҡаҙаныштар СССР халыҡтарының телдәрендә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, яҡшы сағылыш алды. Хәҙерге фән һәм техника тармаҡтарына ҡараған күп кенә яңы терминдар актив әйләнешкә инде. Мәҫәлән, һуңғы тиҫтә йылдарҙа ғына башҡорт телендә *атом реакторы, баллистик ракета, апогей, перигей, йөрөткөс ракета, ерҙең яһалма юлдашы, идара үҙәге, орбиталь станция, луноход, ядро энергияһы, телевидение, интервидение, изоморф берләшмәләр, капрон, нейлон, фенол, гербицид, ацетон, кибернетика, информация-хисаплау үҙәге, робот* һымаҡ һүҙҙәр киң ҡулланыла башланы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составын фәнни-техник революция тыуҙырған яңы һүҙҙәр менән байыҡтырыуҙа үҙләштереүҙәр — интернационализмдар һәм русизмдар — ҙур урын ала. Күптәнге традициялары булған өлкәләрҙәге терминдарға ҡарағанда фән һәм техниканың яңы тармаҡтарында сит телдән үҙләштерелгән терминдарҙың киҫкен күп булыуы интернациональ сығышлы терминологик лексиканы үҙләштереүҙең көсәйә барыуын асыҡ күрһәтә. Башҡорт терминологияһының үҫешенә рус әҙәби теленең йоғонтоһо ла артты: беренсенән, рус теле үҙе башҡа милли терминологияларҙы байытһа, икенсенән, рус теле аша интернациональ терминдарҙың төп өлөшө үҙләштерелә.

Башҡорт теле тарафынан терминдарҙы үҙләштереү юлдары ла үҙгәрҙе: әгәр элек улар башлыса һөйләү телмәре аша килеп инһә, хәҙер, совет осоронда, күберәк матбуғат, радио, телевидение аша үҙләштерелә. Белемдең киң үҫеше, халыҡтың дөйөм мәҙәниәте күтәрелеү һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең көсәйеүе телгә килеп ингән яңы терминдарҙың бөтә халыҡ байлығына әүерелеү процесын күпкә тиҙләтә.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә калькалаштырылған йәки үҙләштерелгән ҡушма һүҙҙәр, уларҙың ҡыҫҡартылған формалары һәм аббревиатуралары араһындағы мөнәсәбәттәр бик үҙенсәлекле сағылыш алды. Әйтергә кәрәк, ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр һәм аббревиатуралар төрки телдәре өсөн хас күренеш түгел, улар башҡорт әҙәби телендә рус теле йоғонтоһо нигеҙендә тик 20-се йылдарҙың урталарында ғына күренә башлайҙар. Ҡағиҙә булараҡ, ҡушма атамалар башҡорт теле тарафынан калька йәки ярым калька итеп, ә уларҙың ҡыҫҡартылған формалары һәм аббревиатуралары үҙләштерелеп ҡабул ителгәндәр: *юғары уҡыу йорто* <высшее учебное заведение, ләкин уның аббревиатураһы — *вуз; коллектив хужалыҡ*<коллективное хозяйство, ләкин уның ҡыҫҡартылған формаһы — *колхоз; коммунистик йәштәр союзы*<коммунистический союз молодежи, ләкин уның ҡыҫҡартылған формаһы — *комсомол* һ. б. Тик һирәк осраҡтарҙа ғына, бигерәк тә халыҡ-ара ойошмаларҙың һәм ҡайһы бер илдәрҙең атамалары өсөн тулы калькаларҙан һәм ярым калькаларҙан ҡыҫҡартыуҙар ҡулланыла: *Америка Ҡушма Штаттары*<Соединенные Штаты Америки, аббревиатураһы — АҠШ; *Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы*<Организация Объединенных Наций, аббревиатураһы — БМО. Ҡайһы ваҡыт ике варианттағы аббревиатуралар ҙа осрай: *Ҡы-*

*тай Халыҡ Республикаһы* < Китайская Народная республика, аббревиатураһы — ҠХР һәм КНР; *Башҡорт дәүләт университеты*<Башкирский государственный университет, аббревиатураһы— БДУ һәм БГУ. Калькаларҙан һәм ярым калькаларҙан, ғәҙәттә, ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр яһалмай, улар тик үҙләштерелә генә: тулы формалары *совет хужалығы, Министрҙар Советы, гараж мөдире, район финанс бүлеге* формаһында йөрөһәләр ҙә, ҡыҫҡартылған һүҙҙәр рус теленән *совхоз, Совмин, завгар, райфинотдел* рәүешендә үҙләштерелгәндәр. Тик һуңғы компоненты тулыһынса ҡулланылған ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәре ярым калька рәүешендә йөрөй: *политсәғәт*<политчас, *политбүлек*<политотдел, *фотоһүрәт*<фоторисунок, *радиоалғыс*<радиоприемник һ. б. Миҫалдарҙан күренеүенсә, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең һәм аббревиатураларҙың калькаланыуында йәки үҙләштерелеүендә тотороҡло законлыҡтар юҡ.

Ниндәй генә яңы һүҙҙе алып ҡараһаҡ та, ул ҡапыл ғына үҙенән-үҙе әҙәби телдең нормаһына әүерелеп китмәй. Теге йәки был һүҙҙең әҙәби тел нормаһына әүерелеүе өсөн, уның художестволы, публицистик, фәнни һәм башҡа әҙәбиәттәрҙә актив ҡулланылып йөрөүе, йәғни йәмғиәт тарафынан танылыуы, ҙур әһәмиәткә эйә. Мәҫәлән, элек бер кем өсөн дә билдәһеҙ булған *аҡһым* һүҙе 20-се йылдарҙа рус телендәге *белок* һүҙе нигеҙендә уйлап сығарыла, төрлө әҙәбиәттә ҡулланылып, йәмғиәт тарафынан ҡабул ителә һәм хәҙерге башҡорт әҙәби теле лексикаһының айырып алғыһыҙ берәмегенә әүерелә. 50-се йылдарға тиклем төрлө әҙәбиәттә бер үк ҡоштоң ике исеме — *беснәк* һәм *ҡарабаш турғай* — параллель йөрөй, уларҙың икенсеһе әҙәби телдә нығына, ә беренсеһе төшөп ҡала. Шул уҡ ваҡытта, норматив һүҙлектәргә индерелеп тә, күп йылдар буйына әҙәбиәттә ҡулланылмай килгән, йәмғиәт тарафынан танылмаған һәм әҙәби телдә эквиваленттары булған ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәбилеккә дәғүә итә алмайҙар. Уларға *тәнәкер* (амальгама), *улъя* (табыш), *арғылды* (таулы), *тәгәнә* (шик), *ҡулаҡта* (бығау) һымаҡ ҡайһы бер һүҙҙәрҙе индерергә мөмкин[7].

Бөгөнгө көндә хәҙерге башҡорт әҙәби теле тейеш дәрәжәлә үҫешкән, уның ныҡлы нормалашҡан фонетикаһы һәм грамматикаһы бар, тип әйтергә мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның һүҙлек составы тураһында быны әйтеп булмай. Дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телендәге күп кенә лексик төркөмдәр әҙәби йәһәттән эшкәртелмәгән һәм ҡабул ителмәгән көйөнсә ҡала килә. Был фекерҙе раҫлау маҡсатында, бер нисә миҫал килтерергә мөмкин. Башҡорт әҙәби теле өсөн норматив һаналған русса-башҡортса һүҙлектә Башҡортостан йылғалары һәм күлдәре өсөн ғәҙәти булған күп кенә балыҡтарҙың атамалары бөтөнләй баш һүҙ итеп алынмаған (*уклейка, гольян, голец, чехонь, подуст, быстрянка, подкаменщик* һ. б.), ә уларҙың атамалары — хатта бер нисә вариантта — дөйөм башҡорт һөйләү телендә киң таралыш алған (*күкәс, ялпаҡ сабаҡ, күкйөн, күкен; галъян, сыбар балыҡ, сырбалыҡ, сербалыҡ, сырантай,*

[7] Башкирско-русский словарь. М., 1958.

*сыраҡай; эт балығы, ҡорт балыҡ, лайла балыҡ; ҡылыс балыҡ, тигеҙ һырт; йәшел күкәс, ағын күкәсе, йылғыр сабаҡ* һ. б.). Ҡайһы бер балыҡ атамалары башҡорт теленә үҙ-ара абсолют синоним йәки фонетик варианттар булған бер нисә исем менән тәржемә ителгәндәр, ә әҙәби телдә бер үк мәғәнәлә (бигерәк тә улар предметтарҙы белдергәндә) төрлө һүҙҙәр йөрөргә тейеш түгел: голавль — *ажау, биртас, ҡушбаш;* ёрш — *этеш, шырт балыҡ;* жерех — *ағасаҡ, ағарсаҡ, ағасъяңаҡ* һ. б. Ғөмүмән алғанда, дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәрендәге бик күп лексик төркөмдәр, шул иҫәптән бөжәктәр, ваҡ хайуандар, емеш-еләк, бәшмәктәр, минералдар һәм тау тоҡомдары, күк есемдәренә ҡараған лексика, өйрәнелмәгән, эшкәртелмәгән һәм хәҙерге башҡорт әҙәби теле тарафынан етерлек дәрәжәлә үҙләштерелмәгән.

Дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәрендәге күп кенә лексик төркөмдәрҙең өйрәнелмәүе шулай уҡ «Башҡортса-русса һүҙлек»-тә лә (Мәскәү, 1958) асыҡ сағылыш таба. Быны бигерәк тә абсолют синонимдарҙың булыуы күрһәтә: *бәпембә, туҙғанаҡ, салмабаш* — одуванчик; *тәгәрлек, бибек* — чибис; *киндер, тарма* — конопля; *боҫ, быу, пар* — пар; *ябалаҡ, өкө ябалаҡ* — филин һ. б. Бынан тыш, ҡайһы бер һүҙҙәрҙең тәржемәләре һөйләү телмәрҙәрендәге мәғәнәләргә тап килмәй: *таҙғара* — орел-могильник (һөйләү телмәрендә — гриф), *ейән* — внук (һөйләү телмәрендә — дети выданной в сторону женщины по отношению к односельчанам), *ҡарағош* — стервятник (һөйләү телмәрендә — орел), *сабаҡ* — плотва (һөйләү телмәрендә — елец, ә плотва — *ҡыҙылгүҙ*) һ. б. Халыҡ һөйләү телмәрендә киң таралып та, әҙәби телдә эквиваленттары булмаған бик күп һүҙҙәр был һүҙлектә сағылыш алмаған.

Дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәренең диалект һүҙҙәре хәҙерге башҡорт әҙәби телен байыҡтырыуҙың төп сығанағы булып ҡала килә. Әҙәби телдә булмаған лексик берәмектәрҙе өйрәнеүҙә диалектологтарҙың хеҙмәте бик ҙур. Башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составын байытыуҙың икенсе бер әһәмиәтле сығанағы — хәҙерге рус әҙәби теле.

Башҡорт теленең ҡайһы бер лексик төркөмдәре эшкәртелмәгәнлектән, газета һәм журнал биттәрендә, телевидение һәм радио тапшырыуҙарында, шағир һәм яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә күп кенә һүҙҙәр төрлө мәғәнәлә йөрөй йәки ҡайһы бер һүҙҙәр етерлек дәрәжәлә ҡулланылмай ҡала килә. Шуға күрә хәҙерге башҡорт әҙәби теленең норматив һүҙлеген булдырыу — иң актуаль мәсьәләләрҙең береһе.

## *2. Башҡорт әҙәби теле фонетикаһының үҫеүе*

Октябрь революцияһына тиклем башҡорт халҡының яҙыуға булған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүсе һәм уның яҙма әҙәби теле булып йөрөүсе Урал — Волга буйы төркийенең дә, XIX быуаттың аҙағынан алып XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем матбуғат мәнфәғәттәрен хеҙмәтләндереүсе татар әҙәби теленең дә фонетик төҙөлөштәре дөйөм башҡорт

һөйләү телмәренең өндәр төҙөлөшөнә тулыһынса яуап бирмәй. Үҙенең фонетик үҙенсәлектәре буйынса башҡорт теле башҡа төрки телдәре араһында айырым бер урын алып тора. Был бигерәк тә дөйөм төрки *с, з, д, ч* өндәренең башҡорт телендә төрлөсә сағылыуында асыҡ күренә. Дөйөм төрки *ч* өнө башҡорт телендә эҙмә-эҙле рәүештә *с* өнөнә күскән: дөйөм төркисә — *ҡайчы, бычаҡ, чаҡ,* башҡортса — *ҡайсы, бысаҡ, саҡ.* Дөйөм төрки *з* өнө күпселек башҡорт һөйләштәрендә *ҙ* өнөнә күскән: дөйөм төркисә — *ҡаз, ҡызыл, ҡузғун,* башҡорт һөйләштәренең күбеһендә — *ҡаҙ, ҡыҙыл, ҡоҙғон.* Дөйөм төрки *д* өнө күп кенә тамыр һүҙҙәрҙә һәм аффикстарҙа шулай уҡ *ҙ* өнөнә күскән: дөйөм төркисә — *ҡудуҡ, юдруҡ, ҡайда,* башҡорт һөйләштәрендә — *ҡоҙоҡ, йоҙроҡ, ҡайҙа.* Дөйөм төрки *с* өнө, һүҙҙәге позицияларына ҡарап, *һ* йәки *ç* өндәренә күскән (һүҙ һәм ялғауҙар башында — *һ,* ҡалған осраҡта — *ç*): дөйөм төркисә — *чыҡыш, чыбыҡ, келсә, ҡысға,* башҡортса — *сығыш, сыбыҡ, килһә, ҡыçҡа.* Шулай итеп, башҡорт телендә дөйөм төрки *с* өнө урынына *һ, ç* өндәре, *з, д* өндәре урынына *ҙ* өнө, *ч* өнө урынына *с* өнө ҡулланыла. Ләкин был өндәр һан һәм позиция яғынан башҡорт һөйләштәрендә бер төрлө генә ҡулланылмай: дим һөйләшендә дөйөм төрки *с* өнө тулыһынса *ç* өнөнә күскән, был һөйләштә *һ* өнө юҡ (*çары, çаçыҡ, çикçән, çин, тиреç* һ. б.); арғаяш һөйләшендә дөйөм төрки *з* өнө аралаш *ҙ* өнө аша *ç* өнөнә күскән (*ҡаҙ* урынына *ҡаç, яҙ* урынына *яç, ҡыҙҙар* урынына *ҡыçтар*), ә *ҙ* өнө ике һуҙынҡы араһында (*ҡыҙыл, ҡыҙыҡ, ҡаҙы*) йәки *р, у, ү, й* өндәре менән һуҙынҡылар араһында (*ерҙән, һыуҙа, ҡайҙа*) ғына һаҡланған; һалйот һөйләшендә дөйөм төрки телендәге *з* өнө аралаш *ҙ* һәм *ç* өндәре аша *һ* өнөнә күскән (*ҡыҙ* урынына *ҡыһ, тоҙло* урынына *тоһто, быҙау* урынына *быһау*), *ҙ* өнө тик *р, у, ү, й* өндәре менән һуҙынҡылар араһында ғына ҡулланыла; төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрҙә дөйөм төрки телендәге *с* өнө бөтә позицияларҙа ла үҙгәрешкә бирелмәгән, йәғни һаҡланып ҡалған. Был өндәрҙең күсеш күләме һәм кимәле түбәндәге таблицаларҙа сағылдырылған.

**Дөйөм төрки с өнөнөң башҡорт һөйләштәрендәге сағылышы**

| Позиция | Төньяҡ-көнб. | Дим | Эйек-Һаҡмар | Ур а | Арғаяш | Һалйот | Әй | Ҡыҙыл | Әҙәби тел |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. Һүҙ башы | с | ç | һ—с | һ-ç-с | һ | һ | һ—ç | һ—с | һ |
| 2. Һүҙ һәм ижек аҙағы | с | ç | ç | ç | ç | һ | ç | һ—ç | ç |
| 3. Һуҙынҡылар араһы | с | ç | һ | ç | ҙ | һ—ҙ | ç | һ | ç |
| 4. Тартынҡыларҙан һуң ижек башы | с | ç | һ | һ—ç | һ | һ | һ—ç | һ—ç | һ |

**Дөйөм төрки *з* өнөнөң башҡорт һөйләштәрендә сағылышы**

| Позиция | Төньяҡ-көнб. | Дим | Эйек-Һаҡмар | Урта | Арғаяш | Һалйот | Әй | Ҡыҙыл | Әҙәби тел |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. Һуҙынҡылар араһы | ҙ—з | ҙ | ҙ—з | ҙ | ҙ | һ | ҙ | ҙ | ҙ |
| 2, Ижек һәм һүҙ аҙағы | ҙ—з | ҙ | ҙ | ҙ | ҫ | һ | ҙ | ҙ | ҙ |

Башҡорт телендә дөйөм төрки телендәге *о, ө, е* өндәре тарайып, *у, ү, и* өндәре биргән (*толы — тулы* «полный», *ол — ул* «он», *көз — күҙ* «глаз», *төз — түҙ* «терпи», *сен — һин* «ты», *бел — бил* «поясница») һәм, киреһенсә, *у, ү, и* өндәре киңәйеп, *о, ө, е* өндәре биргән (*ҡул — ҡол* «раб», *ҡудуҡ — ҡоҙоҡ* «колодец», *күз — көҙ* «осень», *түн — төн* «ночь», *бир — бер* «один», *ит — эт* «собака») һ. б.

Быларҙан башҡа, башҡорт һөйләштәрендә күп кенә өндәр берберенһенә тап килә йәки береһе икенсеһенә күсә:

*й~ж~з* (ер~жир~зир, мөрйә~мөржә);
*п~б~м* (пинжәк~бинжәк~минжәк, пер~бер, боҙ~моҙ);
*т~д* (тәрән~дәрән, тән~дән, түрт~дүрт);
*т~с* (тысҡан~сысҡан, төскөр~сөскөр);
*с~һ* (сөйәл~һөйәл, сүмес~һүмес, сарымсаҡ~һарымсаҡ);
*а~ы* (алйа~алйы, ныҡаш~ныҡыш, ҡарсаға~ҡарсыға);
*у~а* (шул~шал, һуң~һаң, алабуға~алабаға);
*ә~е* (йәйәү~ейәү, йәйән~ейән, кәҫәртке~кеҫәртке);
*у~о* (бутҡа~ботҡа, суҡы~соҡо, һураным~һораным);
*ө~ү* (бөгөн~бүген, көркә~күркә, сөрәгәй~сүрәгәй);
*ә~и* (кәбән~кибән, дегәнәк~дигәнәк, сәскә~сискә);
*е~ө* (кетеү~көтөү, тейә~төйә, эң~өң);
*ы~о* (быҙау~боҙау, тышау~тошау, ыңғай~оңғай);
*ы~у* (быйма~буйма, быяу~буяу, ямғыр~ямғур);

*дифтонг~монофтонг* (тыуған~туған, һыуған~һуған, өйрәк~үрҙәк, өйрә~үрә, һөйрә~һүрә);
*артҡы рәт~алғы рәт* (байрам~бәйрәм, янаш~йәнәш, аҡрын ~әкрен).

Дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәрендә бындай өн күсештәренең бик күп һәм төрлө булыуы хәҙерге башҡорт әҙәби теле формалашҡан осорҙа уның фонетик ҡоролошон нормалаштырыу өсөн ҙур ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Ошоноң арҡаһында хатта 30-сы йылдарҙағы әҙәбиәттә лә айырым һүҙҙәрҙең төрлөсә яҙылып йөрөтөлөүен күҙәтергә мөмкин ине. Хәҙерге әҙәби телдең фонетикаһы ныҡлап юлға һалынһын өсөн, бер ни тиклем ваҡыт талап итеүә ине.

Ҡыуаҡан (хәҙерге көнсығыш) диалекты әҙәби тел функцияһын үтәп йөрөгән осорҙа һүҙҙәрҙең фонетик ҡоролошо өсөн быңдай уҡ ауырлыҡтар булманы, сөнки ундағы фонетик төрлөлөктәр бөтә башҡорт һөйләштәре араһындағыға ҡарағанда байтаҡҡа аҙ ине, ләкин ҡыуаҡан диалекты күп кенә сәбәптәр арҡаһында әҙәби тел кимәленә күтәрелә алманы. Беренсенән, был диалект таралған территорияла башҡа диалекттарҙы ойоштороролоҡ һәм уларға йоғонто яһарлыҡ культура үҙәге юҡ ине (өлгө өсөн рус әҙәби теленең нормаларын булдырыуҙа Мәскәү ҡалаһы халҡының һөйләү телен килтерергә мөмкин). Икенсенән, күп кенә фонетик күрһәткестәре яғынан ҡыуаҡан диалекты юрматы (хәҙерге көньяҡ) диалектынан киҫкен генә айырыла. Өсөнсөнән, ҡыуаҡан диалектының үҙендә һүҙҙәрҙең фонетик ҡоролошонда байтаҡ айырмалыҡтар бар. Шуға күрә лә хәҙерге башҡорт әҙәби теленә иң киң таралған һәм күбеһенсә ике диалект өсөн дә уртаҡ булған фонетик күренештәр алынды. Бигерәк тә *һ* һәм *ҫ* өндәренең ҡулланылышына асыҡлыҡ индерелде, сөнки ике диалекттың да һөйләштәрендә был өндәр төрлөсә ҡулланыла. Һүҙ һәм ижек башында дөйөм төрки телендәге *с* урынына *һ*, ә ҡалған осраҡтарҙа *ҫ* алынды: *һарыҡ, һоло, һин, һикһән; торһон, күрһә, бурһыҡ; баҫыу, баҫҡыс, оҫҡон, төҫлө; алыҫ, килмәҫ, балаҫ, баҫ.*

Бик бәләкәй территорияла таралған йәки яҙма традицияла нығынмаған фонетик күренештәр әҙәби тел нормаһы булараҡ ҡабул ителмәнеләр. Ҡайһы бер башҡорт һөйләштәрендә (мәҫәлән, әй, арғаяш, һалйот һөйләштәрендә һәм дим һөйләшенең төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә) ҡайһы бер һүҙҙәрҙең башында һәм уртаһында *ж* өнө ҡулланыла: *жим* (әҙәби телдә *ем), жил (ел), жәй (йәй), жиләк (еләк), энже (ынйы), рәнжеү (рәнйеү), мөржә (мөрйә)* һ. б. Әҙәби телдә уның урынына *й* өнө йөрөй. Әҙәби телдең төп төрки һүҙҙәрендә *ж* өнөнөң норма итеп алынмауы төрлө яҡлап ҡарағанда ла дөрөҫ: беренсенән, был өн күпселек һөйләштәр өсөн хас күренеш түгел; икенсенән, *ж* өнө булған һөйләштәрҙә лә был өн сикләнгән һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла, күпселек һүҙҙәрҙә уның урынына *й* йөрөй; өсөнсөнән, башҡорт ерлегендәге Урал — Волга буйы төрки телендә яҙылған традицион ҡомартҡыларҙа ла башлыса *й өнө* ҡулланылған. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленә киң таралыш алған фонетик күренештәрҙең генә ҡабул ителеүе *т* өнөнөң таралыуында бигерәк асыҡ сағылыш таба. Башҡорт һөйләштәрендә һүҙ башындағы *т* өнө менән *д* өнөнөң сиратлашыуы күҙәтелә *(туғын — дуғын, тәрән — дәрән, тамға — дамға, тегәнәк — дегәнәк, тән — дән* һ. б.), ләкин, беренсенән, был күренештең таралышы сикләнгән, икенсенән, *т* өнөнә башланған һүҙҙәрҙең бөтәһе өсөн дә ул хас түгел *(ташла, тышҡы, төтөн* һымаҡ һүҙҙәрҙең *дашла, дышҡы, дөтөн* тигән формалары юҡ). Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә *д* өнөнән башланған төп төрки һүҙҙәре күп түгел: *даға, дала, дары, дауыл, дилбегә, диңгеҙ, дөгө, дөйә, дүрт, дым* һ. б. Ләкин был һүҙҙәрҙең башында *т* өнөнөң ҡулланылыуы башҡорт һөйләштәрендә киң таралмаған — ул көньяҡ диалекттың ҡариҙел һөйләше, урта һөйләштең инйәр һөйләшсәһе һәм көн-

сығыш диалекттағы ҡыҙыл һөйләшенең ҡыпсаҡ һөйләшсәһе өсөн генә хас. Һүҙ башында *п* өнөнөң таралышы ла сама менән ошондай территорияны ала, ә әҙәби телдең төп төрки лексикаһында һүҙ башында һәр ваҡыт *б* өнө генә йөрөй.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һүҙҙәрҙең өн төҙөлөшө диалект күренештәрен ҡабул итеүҙең төп принцибына — киң таралыш алыуына яҡшы яуап бирә.

Үҙләштерелгән фонемаларға, бигерәк тә рус теленән һәм рус теле аша Көнбайыш Европа телдәренән ингән формаларға килһәк, уларҙың хәҙерге башҡорт әҙәби телендә тулыһынса ҡулланылыуына башҡорт яҙыуының рус графикаһына күсеүе генә мөмкинлек бирҙе. Ғәрәп (1928 йылға тиклем) һәм латин (1939 йылға тиклем) графикалары рус хәрефтәрен дөрөҫ һәм тулы итеп транслитерацияларға мөмкинлек бирмәне, һәм шуға күрә лә үҙләштерелгән һүҙҙәр башҡорт фонетик законлылыҡтарына буйһондоролоп яҙып йөрөтөлдө (*militsijə, astranumijə, Lysə* һ. б.). Яҙыу рус графикаһына күсеү менән, яңы һәм халыҡ тарафынан тулыһынса ҡабул ителеп бөтмәгән үҙләштерелгән һүҙҙәр рус орфографияһының ҡағиҙәләре нигеҙендә яҙыла башланылар (*jaraplan — аэроплан, janaral — генерал, baraxut — пароход* һ. б.). Билдәле, был орфография башҡорт әҙәби теле өсөн яңы булған өндәрҙе һәм өн ҡушылмаларын шунда уҡ үҙләштереүгә килтерә алманы, әлбиттә. Тәүге осорҙа бындай һүҙҙәрҙе уҡыу һәм әйтеү башҡорт теленең фонетик ҡоролошона буйһондоролдо: *план — былан, патефон — батефон, штапель — ыштапил, флот — фылут, декабрь — дикәбер* һ. б. Рус өндәрен үҙләштереүгә фонемаларҙың варианттары һәм вариациялары булыуы ҙур ғына ҡамасаулыҡ яһаны. Уларға, мәҫәлән, түбәндәгеләрҙе индерергә мөмкин:

1) рус телендәге тартынҡы өндәрҙең ҡаты һәм йомшаҡ фонемаларға айырылыуы, ә башҡорт телендә уларҙың айырмаһы фонематик кимәлдә булмауы;

2) рус телендә һуҙынҡыларҙың сифат редукцияһы булыуы, ә башҡорт телендә сифат редукцияһының булмауы, тик һан редукцияһының ғына булыуы (русса *окно* [акно́], *подоконник* [пъдако́н'ик], *часы* [чиесы́], *отмыться* [атмы́цъ] һ. б.; башҡортса: *халыҡ — халҡы, күренеш — күренеш, япраҡ — япыраҡ* һ. б.);

3) орфографияһы башлыса морфологик принципҡа нигеҙләнгән рус телендә дөрөҫ яҙыу менән дөрөҫ әйтеү араһында ҙур ғына айырма күҙәтелә (*сделал* [зд'е́лъл], *счастливый* [ш'асл'и́вый], *дождик* [до́жык]), ә орфографияһы башлыса фонетик принципҡа нигеҙләнгән башҡорт телендә яҙыу менән дөрөҫ әйтеү араһында әллә ни ҙур айырма юҡ (*ишек — ишеге, ҡолаҡ — ҡолағына, китап — китабым* һ. б.).

Рус өндәрен һәм өн ҡушылмаларын тиҙ һәм дөрөҫ итеп үҙләштереүгә шулай уҡ башҡорт һәм рус телдәренең фонетик ҡоролошондағы айырмалыҡтар ҙа ауырлыҡ индерҙе. Мәҫәлән, башҡорт теленең фонетик ҡоролошо өсөн һүҙ башында һәм һүҙ аҙағында бер нисә тартынҡының бергә килеүе йәки һүҙ башында *р* һәм *л*

өндәренең килеүе хас түгел. Сит телдән үҙләштергәндә, бындай ҡоролошло һүҙҙәр башҡорт теленең фонетикаһына ярашлы рәүештә үҙгәртелгән: *труба — торба, бревно — бүрәнә, смола — ыҫмала* йәки *һумала, шляпа — эшләпә, клеть — келәт, рама — ырам, лавка — эләүкә, толк — толҡа* һ. б.

Рус алфавитына күсеү менән, башҡорт һәм рус телдәрендәге оҡшаш өндәр, сифаттары яғынан айырылыуҙарына ҡарамаҫтан, бер төрлө хәреф менән тамғалана башланылар. Әйтәйек, *г* хәрефе менән тамғаланған башҡорт өнө — телдең урта өлөшөндә яһалған фрикатив (ек) өнө *(теге, егет, геүләү)*, ә рус телендә — тел артында яһалған шартлаулы өн *(вагон, рагу, гудок, галстук)*. Шулай уҡ *ы, и, е, о, ж, ш* һәм башҡа хәрефтәр менән тамғаланып йөрөтөлгән өндәр ҙә башҡорт һәм рус телдәрендә сифаттары яғынан айырыла. Әйтәйек, рус телендә *ш* өнө һәр ваҡыт ҡаты булһа, башҡорт телендә, ниндәй һуҙынҡы менән килеүенә ҡарап, ҡаты һәм ярым йомшаҡ варианттарға айырыла (русса: *широкий* [шырóкий], *пойдешь* [пайд'óш], *мышь* [мыш]; башҡортса: *шалҡан, яҡшы, ҡаш* һәм *шеш, кеше, шәкәр*). Бындай күренештәр рус һәм интернациональ һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешенә йоғонто яһай: *шило* тип яҙылғас, [шы́лъ] урынына [ш'и́ло] тип уҡыла, *живёт* тип яҙылғас, [жыв'óт] урынына [ж'ивйóт] тип уҡыла, *жили* тип яҙылғас, [жы́л'и] урынына [ж'и́л'и] тип уҡыла һ. б.

Дөйөм белем кимәленең күтәрелеүе, телмәр культураһының үҫеүе рус халҡы менән даими аралашыу, төрлө жанрҙағы рус әҙәбиәтен уҡыу һәм үҙләштереү, рус әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләрен өйрәнеү нигеҙендә хәҙер беҙҙә рус фонетикаһын тулы күләмдә үҙләштереүгә булған тенденция күҙәтелә. Быға, һис һүҙһеҙ, рус теленең СССР халыҡтары өсөн милләт-ара аралашыу теленә әүерелеүе һәм һуңғы осорҙа киң рәүештә таралыш алған башҡорт-рус ике теллелеге лә булышлыҡ итә. Ҡасандыр башҡорт теле өсөн ят булған *в, ч, ц, щ* өндәрен, башҡорт һәм рус телдәрендә сифаттары менән айырылған *а, и, е, ы, э, г, ж, ш* һәм башҡа өндәрҙе, ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡыларҙы, башҡорт теленә хас булмаған өн ҡушылмаларын башҡорт халҡының белемле өлөшө дөрөҫ итеп әйтә белә. Рус әҙәби теленең дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәләренән тайпылыштарҙы башлыса оло йәштәге йәки яңы ғына рус телен үҙләштерә башлаған кешеләрҙең телмәрҙәрендә генә күҙәтеп була.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөйөм халыҡ һөйләү телмәрендәге өн ҡоролошона нигеҙләнгән һәм яҡшы нормалаштырылған төҙөк фонетикаһы бар; ул халыҡ телмәренән, башҡа ҡәрҙәш һәм ҡәрҙәш булмаған телдәрҙән алынған яңы фонемалар, фонема варианттары, яңы өн ҡушылмалары менән байыҡты — уларҙың бөтәһе лә хәҙер әҙәби телдең айырып алғыһыҙ бер өлөшөнә әүерелде.

## 3. *Әҙәби телдең грамматик төҙөлөшө һәм уның үҫеше*

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматик ҡоролошо ла дөйөм халыҡ һөйләү теленең бай саралары нигеҙендә формалашты һәм үҫеште. Халыҡ һөйләү теленең грамматик төҙөлөшө уның фонетикаһы менән лексикаһына ҡарағанда дөйөм яҡтары күберәк булыуы менән айырыла. Ләкин ҡайһы бер диалекттарҙа һәм һөйләштәрҙә үҙенсәлекле морфологик формалар ҙа бар, һәм улар шул үҙенсәлектәре менән башҡа диалекттарҙан һәм һөйләштәрҙән айырылалар. Уларҙың иң күҙгә ташланып торғандары, мәҫәлән, башҡорт теленең диалектологик атласына мәғлүмәттәр йыйыу өсөн эшләнгән һораулыҡта яҡшы сағылдырылған[8]. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре:

1) ҡәрҙәшлек терминдарында оҡшашлыҡты белдергән *-ҡас, -ҡай, -с* аффикстары: *атаҡас, атаҡай, атас* (әҙәби телдә *тас* йәки *нәҡ атаһы), ағаҡас, ағаҡай, ағас* (әҙәби телдә *тас* йәки *нәҡ ағаһы);*

2) күплектәге ҡылымдарҙың бойороҡ һөйкәлешен белдереүсе *-ың//-ең* аффиксы: *тороң* (әҙәби телдә *тороғоҙ), ултырың (ултырығыҙ), ашаң (ашағыҙ), эсең (эсегеҙ);*

3) бойороҡ ҡылымдарҙың берлек формаһын яһаусы *-ҡыҙ//-кеҙ, -ғыҙ//-геҙ//-гәҙ* аффикстары: *яҡҡыҙ* (әҙәби телдә *яҡҡыр), туйғыҙ (туйҙыр), күргәҙ (күрһәт), еткеҙ (еткер);*

4) *-мы//-ме* һорау ялғауҙарының зат ялғауҙарынан алда ҡулланылыуы: *барамығыҙ ~ барамыһыҙ ~ барамыһығыҙ* (әҙәби телдә *бараһығыҙмы?), алдымың ~ алдымыһың (алдыңмы?);*

5) исемдәрҙең төп килеш формалары башҡа килештәр урынына ҡулланылыуы: *Баймаҡ барам* (әҙәби телдә *Баймаҡҡа барам), көтөү йөрөйөм (көтөүҙә йөрөйөм)* һ. б.

Башҡорт һөйләштәрендә шулай уҡ синонимик йәки вариантлы грамматик күрһәткестәр ҙә күп кенә. Мәҫәлән, уларҙа инфинитив формалары *-ма//-мә, -маға//-мәгә, -маҡа//-мәкә, -маҡ//-мәк, -ғалы//-гәле, -ғаны//-гәне, -ҡаны//-кәне, -ыу//-еү, -лай//-ләй, -ыр//-ер, -ырға//-ергә, -а//-ә* аффикстары ярҙамында яһала[9]; 1-се заттағы өндәү ҡылымдарының күплек формаһы *-(а)йыҡ//-(ә)йек, -(а)йыҡтар//-(ә)йектәр, -(а)йығыҙ//-(ә)йегеҙ, -(а)йығыҙҙар//-(ә)йегеҙҙәр* аффикстары ярҙамында яһала: *барайыҡ, барайыҡтар, барайығыҙ, барайығыҙҙар* һ. б.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматик ҡоролошо дөйөм халыҡ һөйләү телмәренең ике терәк диалекты (көньяҡ һәм көнсығыш диалекттар) нигеҙендә формалашты. Мәҫәлән, әҙәби телдә көнсығыш диалекттың дүрт бөгөлөшлө һигеҙ вариантлы күплек

---

[8] Башҡорт теленең диалектологик атласы өсөн мәғлүмәт йыйыу программаһы. Өфө, 1973. 19—24-се биттәр.

[9] Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка. М., 1976. 58, 140—141, 197—198, 236—237, 277-се биттәр; Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М., 1979. 67, 140—141, 212-се биттәр; Ишбаев Қ. Г. Инфинитив в башкирском языке // Уч. пособие. Уфа, 1982.

ялғауҙары ҡулланыла: *-тар//-тәр, -дар//-дәр, -ҙар//-ҙәр, -лар//-ләр (китаптар, ауылдар, һыйырҙар, балалар; күптәр, күлдәр, күҙҙәр, кешеләр),* ә көньяҡ диалекттағы ике бөгөлөшлө дүрт вариантлы күплек ялғауҙары әҙәби телгә алынманы *(һарыҡлар, урманнар; күҙләр, көннәр).* Ҡайһы бер формаларҙың ялғауҙары әҙәби телгә көньяҡ диалекттан алынды: *күплек, таулы, ташла, һыула* (ә көнсығыш диалектта улар *күптек, тауҙы, ташта, һыуҙа* формаһында йөрөйҙәр). Әҙәби телдәге ҡайһы бер формалар башҡорт диалекттарында бөтөнләй осрамай. Уларға, мәҫәлән, *м, н, ң* өндәренән һуң килгән ҡайһы бер ялғауҙарҙы индерергә мөмкин; *һумлыҡ, көнлөк, моңло, тыңла, тәмле* (көнсығыш диалектта улар *һумдыҡ, көндөк, моңдо, тыңда, тәмде,* ә көньяҡ диалектта *һумныҡ, көннөк, моңно, тыңна, тәмне* формаһында йөрөйҙәр).

Башҡорт диалектологтарының фекеренсә, әҙәби тел грамматик ҡоролошо яғынан күберәк көньяҡ диалектҡа яҡын тора[10]. Факттар күрһәтеүенсә, ысынлап та, әҙәби телгә ҡабул ителгән *-ырға// -ергә* аффикслы инфинитив формалары, кесерәйтеүҙе һәм иркәләүҙе белдергән *-ҡас//-кәс, -ҡай//-кәй* аффикстары, *-мы//-ме* һорау аффиксы һәм уның зат ялғауҙарынан һуң килмәүе, *-һа//-һә* аффикслы шарт ҡылым, ҡылым яһаусы *-ла//-лә* аффиксы һәм башҡа бик күп күрһәткестәр көньяҡ диалектта киңерәк таралыш алған.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телмәренә фонетика һәм грамматика өлкәләренә ҡарағанда грамматик яҡтан мөнәсәбәте аҙыраҡ. Уның грамматикаһы күберәк Урал— Волга буйы төрки телендә сағылған боронғо традицияларға бәйләнгән. Етмәһә, Урал — Волга буйы төрки теле грамматикаһының күп кенә формалары халыҡ һөйләү телмәрендәге формаларға тап килә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленә башҡорт халҡының һөйләү телмәре өсөн бөтөнләй хас булмаған йәки унда бик аҙ таралыш алған формалар ғына алынмай ҡалды. Уларға, мәҫәлән, *-дуҡ// -дүк* ялғаулы исем ҡылымдар, *-мыш//-меш* ялғауҙары менән яһалған сифат ҡылымдар, *-ғыл//-гел* ялғаулы бойороҡ ҡылымдар, *-майын//-мәйен* ялғаулы рәүеш ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһы һымаҡ грамматик саралар алынманы, улар халыҡ телмәрендә киң таралған һәм күп һөйләштәр өсөн ғәҙәти булған *-ыу//-еү, -ған//-гән,* ҡылымдың башланғыс формалары *-майынса//-мәйенсә* формалары менән алмаштырылды. Урал — Волга буйы төрки теленең морфологияһы ла ҙур үҙгәрештәр кисерҙе, халыҡ һөйләү телмәрендәге законлылыҡтарға яҡынлаштырылды: сығанаҡ килеш ялғауҙары *-дан//-дән, -дин* урынына *-тан//-тән, -ҙан//-ҙән, -нан//-нән;* юҡлыҡ формаһы яһаусы *-маз//-мәз* урынына *-маҫ//-мәҫ;* исем яһаусы *-чы// -чи* урынына *-сы//-се* һәм башҡалар алынды.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең Урал — Волга буйы төрки теле менән бәйләнеше бигерәк тә синтаксис өлкәһендә асыҡ сағы-

---

[10] Максютова Н. Х. Күрһәтелгән хеҙмәт. 19-сы бит; Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 244-се бит; Ишбулатов Н. Х. Башҡорт диалектологияһы. Өфө, 1980. 11-се бит.

лыш ала (ҡарағыҙ: § 1, глава 1). Башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәрендәге һөйләмдәрҙә һүҙ тәртибе иреклерәк була. Быға асыҡ миҫал итеп түбәндәге өҙөктө килтерергә мөмкин: *Епте оҙаталар буйлыҒ өсөн, арҡаулығын әҙерләйҙәр. Урын ағасында һуғалар киндерҙе. Көрөҫкә теҙәһең бер бөртөгөнә берәр еп*[11]. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең синтаксисындағы нормаға ярашлы был өҙөк түбәндәгесә яңғырай: *Епте буйлыҡ өсөн оҙаталар, арҡаулығын әҙерләйҙәр. Киндерҙе урын ағасында һуғалар. Бер бөртөгөнә берәр еп итеп көрөҫкә теҙәһең.* Телдең һөйләү формаһы яҙма формаһынан һәр ваҡыт айырыла. Йәнле һөйләү телмәрендә яҙма телдә сағылдыра алмаҫлыҡ саралар һәм элементтар булырға мөмкин: мимика, ым, ишара, пауза, интонация, ситуация һәм көнкүреш контекстары һ. б. — былар бөтәһе лә һөйләм композицияһындағы ҡытыршылыҡтарҙы шымарта. Шуға күрә лә яҙма телдең синтаксисы яҡшыраҡ ойошторолған, төҙөк, уның төҙөлөш компоненттары нормаға һалынған.

Хәҙерге башҡорт яҙма әҙәби теленең грамматик һәм синтаксик ҡоролошона һуңғы үҫеш осоронда рус әҙәби теленең йоғонтоһо бик ҙур булды. Үҙләштерелгән һүҙҙәр менән бергә башҡорт теленә күп кенә рус телендәге күрһәткестәр килеп инде. Мәҫәлән, социаль коллективтың атамалары булған үҙләштермәләрҙә башҡорт теленә хас булмаған род категорияһы билдәләре айырыла: *ударник — ударница, комсомолец — комсомолка, отличник — отличница* һ. б. 40—50-се йылдарҙа рус телендәге инфинитивҡа төп башҡорт ярҙамсы ҡылымын ҡушып ҡушма ҡылым яһау хас ине: *агитировать итеү, страховать ит-, газировать ит-*. Бындай һүҙьяһалыш ҡалыбы башлап ғәрәп телендәге масдар һәм сифат ҡылымдарҙың йоғонтоһонда Урал — Волга буйы төрки телендә барлыҡҡа килгән[12], ә унан халыҡ йәнле һөйләү телмәренә күсеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теленә килеп ингән. Бындай ҡылымдар иң алда ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән яһалған: *тәбрик ит-, никах ҡыл-, бәлиғ бул-* һ. б. Хәҙерге әҙәби телдә бындай аналитик ҡоролоштарҙың дөйөм кәмеүе һәм исемдән ҡылым яһай торған *-ла//-лә, -лан//-лән* аффикстарының активлашыуы нигеҙендә (*тәбрик ит- — тәбрикләй-, никах ҡыл- — никахла-, бәлиғ бул- — бәлиғлән-*) рус теленән үҙләштерелгән аналитик формалар ҙа әкренләп юҡҡа сыға бара (*агитировать ит- — агитацияла-, страховать ит- — страховкала-, газировать ит- — газла-* һ. б.).

Рус әҙәби теле башҡорт әҙәби теленең грамматик сараларына йоғонто яһап, уның һүҙьяһалышын стимуллаштыра, активлаштыра, эске ресурстарын мобилизациялай, байыҡтыра. Мәҫәлән, рус әҙәби теленең йоғонтоһонда элек башҡорт телендә бөтөнләй булмаған рус телендәге тулы формалағы яһалма сифаттарҙың ҡыҫ-

[11] Миржанова С. Ф. Күрһәтелгән хеҙмәт. 254-се бит.

[12] Благова Г. Ф. Взаимодействие языковых уровней (арабо-персидские лексические заимствования и аналитическое словообразование в чагатайском языке) // Советская тюркология. 1983. № 4. 21—24-се биттәр.

ҡартылған формалары барлыҡҡа килде: *социальный — социаль, коммунальный — коммуналь, термальный — термаль (социаль заказ, коммуналь хужалыҡ, термаль һыуҙар)* йәки *социалистический — социалистик, терминологический — терминологик, фашистский — фашистик (социалистик йәмғиәт, терминологик һүҙлек, фашистик ҡоролош).* Яңы яһалған һүҙҙәр, рус һәм интернациональ һүҙҙәрҙең калькалары менән ҡулланыу нигеҙендә төп башҡорт телендәге *-лыҡ//-лек, -лы//-ле, -ма//-мә, -(ы)м//-(е)м, -сы//-се, -са// -сә, -ҡыс//-кес, -(ы)ш//-е)ш* һымаҡ аффикстарҙың ҡулланыу сфераһы ныҡ киңәйҙе: *әйеңкелек<наклонность, дөйөмлөк<общность, кәсерле<дробный, сортлы<сортовой, өҫҡорма<надстройка, үлсәм<мера, милексе<собственник, төшөнсә<понятие, киҫәксә< частица, һыуытҡыс<холодильник, ҡаҙаныш<достижение.* Рус әҙәби теленең йоғонтоһо нигеҙендә ҡайһы бер грамматик күрһәткестәр яңы өҫтәлмә мәғәнә ала башланы. Әгәр халыҡ һөйләү телмәрендә күплек ялғауы, күплек мәғәнәһенән башҡа, самалыҡты *(ун саҡрымдар барҙыр, илле йәштәр булыр),* иркәләү-кесерәйтеүҙе *(йөрәккәйҙәрем яна, эстәрем боша)* йәки бер төркөмгә ҡараған предметтарҙы *(кейемдәрен алып сығып китте, аштарын ашаным)* белдерһә, рус теле йоғонтоһонда биологик төрҙәрҙе, отрядтарҙы, семьяларҙы белдереүсе һүҙҙәр ҙә яһай: *власоеды — сәсҡырғыстар, позвоночные — умыртҡалылар, отряд журавлеобразные — торна һымаҡтар отряды, беспозвоночные — умыртҡаһыҙҙар* һ. б.

Башҡорт әҙәби теленә рус әҙәби теленең йоғонтоһо синтаксиста ла асыҡ сағыла. Уның йоғонтоһонда башҡорт телендә синонимик синтаксик саралар барлыҡҡа килә, улар һуңға табан стилистик яҡтан айырыла башлайҙар. Мәҫәлән, баш һөйләмгә сәбәп эйәрсән һөйләмдәрҙең төбәү килештәге сифат ҡылым менән бәйләнеп килеүе йәнле һөйләү телмәрендә киң таралһа *(Усаҡ яны- нан да, тәҙрәнән дә ҡыҙыулыҡ килгәнгә, өй шаҡтай эҫергәйне —* С. Агиш), *-ғанлыҡтан//-гәнлектән* ялғаулы үткән заман сифат ҡылым менән бәйләнеп килеүе китап теле өсөн хас *(Ғәбит ағай иртәнге сменала уҡытҡанлыҡтан, Юлай уны мәктәптә бөгөн күрә алмағайны* — З. Биишева). Бындай вариантлылыҡ башҡорт әҙәби телендәге күп кенә синтаксик конструкциялар өсөн хас.

Башҡорт әҙәби теленә рус теле синтаксисының йоғонтоһо бигерәк тә тура телмәрҙәрҙә һәм диалогтарҙа асыҡ сағыла. Мәҫәлән, башҡорт телендә, ғәҙәттә, автор һүҙе тура телмәрҙең ике яғында йәки аҙағында килә: *«Һин ошо ерҙә мине көтөп тор, дейеүҙең башына еткәс, килеп алырмын», — тип дейеү менән алышырға киткән* (Әкиәт.). Автор һүҙенең тура телмәрҙән алда тороуы йәки уның уртаһында килеүе башҡорт теленә рус теле йоғонтоһонда килеп ингән [13]: *Өй эсендәгеләрҙе йыуатыр өсөн ул былай тине: «Һуғыш барғанда, өйҙә ятып булмаҫ бит инде...»* (С. Агиш),

---

[13] Грамматика современного башкирского литературного языка. М., 1981. 486-сы бит.

*«Зарар юҡ, — тип уйлай Муса Гәрәев, — оҙаҡламай аңларға тейештәр. Быны беҙ, совет воиндары, аңлатып бирергә тейешбеҙ»* (Ғ. Әмири).

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматик һәм синтаксик ҡоролоштары дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телмәренә нигеҙләнеп, башҡа телдәр менән мөнәсәбәттәрҙә артабан үҫешкән. Грамматик һәм синтаксик сараларҙа бигерәк тә Урал — Волга буйы төрки теленең һәм рус әҙәби теленең йоғонтолары асыҡ сағылыш алған.

Әҙәби телдең фонетик, морфологик, синтаксик һәм лексик нормаларын билдәләүҙә, артабан үҫтереүҙә һәм стабилләштереүҙә уларҙың законлылыҡтарына төшөнөү һәм уларҙы махсус өйрәнеү ҙур әһәмиәткә эйә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле формалаша башлауының тәүге көндәренән үк уның нормаларын булдырыуҙа яҙыусылар, шағирҙар, телсе ғалимдар, журналистар, уҡытыусылар, матбуғат эшмәкәрҙәре бик актив ҡатнашты. Бер ниндәй ҙә грамматик форма, синтаксик ҡоролма, лексик берәмек, әгәр улар әҙәбиәттең төрлө жанрҙарында ҡулланылмаһа, йышылмаһа, һынау үтмәһә, үҙенән-үҙе әҙәби тел өсөн хас күренеш булып китмәй.

Был яҡтан яҙыусылар айырым бер урын алып тора, сөнки әҙәби тел башлыса әҙәби әҫәрҙәрҙең телендә сағылыш алып, әҙәбиәттә нығына һәм уның аша халыҡ араһында тарала. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙендә дөйөм халыҡ йәнле һөйләү телмәренең үҙенсәлектәре ятҡанлыҡтан, яҙыусылар халыҡ теленә, бигерәк тә уның иң юғары формаһына — халыҡ ижадына, мөрәжәғәт иттеләр. Уларҙың иғтибарында халыҡ ижады әҫәрҙәренең тышҡы, сюжет йәки жанр үҙенсәлектәре генә түгел, ә тел һәм һүрәтләү саралары ла булды. Был — иҫке яҙма традицияларҙың консерватив, кире яҡтарын еңеүгә табан ҙур аҙым булды. 20-се йылдарҙа ижад иткән башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары башҡорт әҙәби теленең орфографияһын, алфавитын булдырыуҙа, әҙәби телдең нормаларын эшләүҙә туранан-тура актив ҡатнаштылар, ә иң мөһиме — үҙҙәренең әҫәрҙәре менән яңы әҙәби телде пропагандаланылар. Әҙәби телдең яңы юлға һалына башлаған осоронда, әле уның нормалары яҡшылап эшләнмәгән осорҙа, яҙыусылар алдында яуаплы бурыс торҙо: халыҡ йәнле һөйләү телмәренең арсеналынан киң таралған, күпселек һөйләштәр өсөн уртаҡ һәм аңлайышлы булған сараларҙы табырға, тар урынсылыҡҡа бирелмәйенсә, заман талаптарына яуап биреүсе юғары художестволы әҙәбиәт ижад итергә кәрәк ине. Бигерәк тә әҙәби телдең лексик сараларын дөрөҫ билдәләү яуаплы эш булды, сөнки ул ваҡытта башҡорт һөйләү телмәренә нигеҙләнгән яңы әҙәби телдең лексик нормалары юҡ ине, ә уларҙы булдырыу, ғәҙәттә, оҙайлы ваҡыт талап итә. Ул осорҙа ижад иткән М. Ғафури, Д. Юлтый, А. Таһиров, И. Насыри, Т. Йәнәби, С. Ҡудаш, Ғ. Ғүмәр, Ғ. Хәйри, Ш. Хоҙайбирҙин һымаҡ яҙыусыларыбыҙ һәм шағирҙарыбыҙ үҙҙәренең әҫәрҙәре менән социалистик дәүерҙең яңы идеяларын ғына пропагандалап ҡалмайынса, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең яңы

сараларын башлап ебәреүселәр һәм таратыусылар ҙа булып сығыш яһанылар.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең саралары етерлек дәрәжәлә эшләнеп бөтмәүе ҡайһылыр кимәлдә 20-се йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә ҙур күләмле әҫәрҙәр булмауҙың бер сәбәбе ине. Был йылдарҙа прозала иң киң таралған жанрҙар булып нәҫер, ҡыҫҡа хикәйә, портрет-очерк, сатирик миниатюралар торҙо[14]. Башҡорт әҙәби теленең халыҡ йәнле һөйләү телмәренә нигеҙләнеүе яңы демократик әҙәбиәттең халыҡ ижады менән яҡынлашыу процесын көсәйтте. Был йылдарҙа ижад иткән күп кенә яҙыусылар (М. Ғафури, А. Таһиров, М. Буранғолов, Ф. Вәлиев һ. б.) халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйҙылар, уларҙы ентекле анализлап баҫтырып сығарҙылар, тел байлыҡтарынан файҙаланып, халыҡ ижады мотивтары буйынса әҫәрҙәр ижад иттеләр. 20-се йылдарҙың аҙағында — 30-сы йылдарҙың башында ижад ителгән беренсе ҙур сюжетлы әҫәрҙәргә (Ғ. Хәйриҙең «Боролош»о, А. Таһировтың «Һалдаттар»ы, Д. Юлтыйҙың «Ҡан» романының беренсе китабы) бер планлылыҡ, һөйләп сығыу, мемуарлыҡ, йәғни әҙәби телдең стилистик-һүрәтләү саралары эшләнеп етмәүе менән аңлатыла алырлыҡ етешһеҙлектәр, хас ине. Һәр бер әҙәби әҫәр, уның ниндәй генә етешһеҙлектәре булыуға ҡарамаҫтан, ҙур ижтимағи һәм мәҙәниәт ҡаҙанышы булды, ә әҙәби телдең нормаларын булдырыу һәм үҫтереү яғынан айырым формаларҙы, лексик сараларҙы нығытырға булышлыҡ итте.

Һәр бер киҫкен ижтимағи-социаль күренеш: ауыл хужалығын коллективлаштырыу, илде индустриялаштырыу, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илде һаҡлау, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, фәнни-техник революция әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылыш тапты, әҙәби телдең үҫешендә, бигерәк тә уның һүҙлек составын байытыуҙа, юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. Ғ. Сәләм, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, А. Ҡарнай, С. Агиш, Һ. Дәүләтшина, Ж. Ҡиекбаев, Ә. Вәли, М. Ҡәрим, З. Биишева, Я. Хамматов, Ф. Иҫәнғолов һәм башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәре хәҙерге башҡорт әҙәби телен үҫтереүгә һәм байытыуға ҙур өлөш индерҙе.

Шулай итеп, әҙәби телде нормалаштырыу, уны башҡорт диалекттары, үҙләштереүҙәр һәм калькалар иҫәбенә яңы саралар һәм кәрәкле лексика менән тулыландырыу күп жанрлы милли әҙәбиәттең үҫеше менән бергә барҙы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле, уның төрлө кимәлдәрен, ғөмүмән, башҡорт теленең үҙенсәлектәрен махсус өйрәнеүҙән тыш, бөгөнгө юғарылығына күтәрелә алмаған булыр ине. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең формалашыуы башланған осорҙа уҡ тел төҙөлөшөнөң практик мәсьәләләрен хәл итеүҙә Ғ. Ғаббасов, Х. Ғәбидов, В. Хангилдин, Ғ. Вилданов, Н. Таһиров, Ғ. Дәүләтшин һымаҡ башҡорт

---

[14] Вахитов А. Х. Закономерности формирования жанрово-стилевой системы башкирской советской прозы // Башкирская литература и литературный язык на современном этапе. Уфа, 1979. 55-се бит.

телселәре актив ҡатнашлыҡ итте. Шул уҡ ваҡытта улар башҡорт әҙәби теленең айырым актуаль мәсьәләләрен, орфографияһын, грамматикаһын, лексикаһын тикшерҙеләр, башҡорт теле буйынса беренсе дәреслектәр яҙҙылар.

Башҡортостанда тел төҙөлөшөнөң практик мәсьәләләрен хәл итеүҙә, башҡорт теленең фәнни нигеҙҙәрен өйрәнеүҙә, тел белеме буйынса милли кадрҙарҙы ойоштороуҙа һәм мобилизациялауҙа Н. Ҡ. Дмитриевтың ғилми эшмәкәрлеге ғәҙәттән тыш ҙур әһәмиәткә эйә. Ул башҡорт теленең материалдарын өйрәнеү нигеҙендә башҡорт тел белеменең теорияһына ғына түгел, ә бөтә совет тюркологияһына оло өлөш индерҙе. Башҡорт теленең төрлө проблемалары буйынса яҙылған күп һандағы ғилми хеҙмәттәрен дөйөмләштереп, ул үҙенең иң әһәмиәтле әҫәрҙәренең береһен — «Башҡорт теленең грамматикаһы»н (М.; Л., 1948) яҙҙы. Был китапта беренсе тапҡыр хәҙерге башҡорт әҙәби теленең тулы һәм фәнни яҡтан нигеҙләнгән грамматик ҡоролошо сағылыш тапты.

Башҡорт теле мәсьәләләрен һәр яҡлап — хәҙерге әҙәби телдең диалект нигеҙҙәрен һәм диалектологияны, фонетика, грамматика, лексика һәм фразеология мәсьәләләрен өйрәнеүҙә Ж. Ғ. Ҡиекбаевтың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ ҙур. Ул беренсе булараҡ хәҙерге башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ һөйләү нигеҙҙәрен булдырҙы.

Ҡ. З. Әхмәровтың да ғилми эшмәкәрлеге күп яҡлы һәм мул емешле булды: ул хәҙерге башҡорт әҙәби теленең синтаксик төҙөлөшөн, башҡорт яҙыуы тарихын, орфография һәм грамматик стилистика мәсьәләләрен өйрәнде һәм күп һандағы фәнни хеҙмәттәр яҙҙы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең синтаксисы һәм стилистикаһы мәсьәләләре Ғ. Ғ. Сәйетбатталов хеҙмәттәрендә тулы сағылыш алды.

Башҡорт әҙәби теленең айырым мәсьәләләре Ә. Ә. Юлдашев, Ә. И. Харисов, Ә. Ә. Мансуров, Б. С. Сәйәрғәлиев, Т. М. Ғарипов, З. Ғ. Ураҡсин, М. В. Зәйнуллин, В. Ш. Песәнчин, А. М. Аҙнабаев, М. Х. Әхтәмов һәм башҡа күп кенә телселәрҙең хеҙмәттәрендә ентекле өйрәнелде.

Башҡорт әҙәби теленең лексикаһын һәм грамматикаһын нормалаштырыуҙа Т. Ғ. Баишев, Н. Х. Ишбулатов, Н. Х. Мәксүтова, С. Ф. Миржанова һәм башҡа күп кенә башҡорт диалектологтары ҙур хеҙмәт күрһәтте.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленен ҡулланылыу сфераһы киңәйеүе терминологик, ике телле, аңлатма, лингвистик һүҙлектәрҙе төҙөү кәрәклеген тыуҙырҙы, һәм был эште башҡорт телселәре уңышлы башҡарып киләләр. Был һүҙлектәр, практик әһәмиәттәренән башҡа, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең һүҙлек составын байытыуҙа, лексик нормаларын камиллаштырыуҙа ҙур урын тоталар. Башҡорт әҙәби теленең берҙәм нормалары нығыуы һәм стабилләшеүе милли әҙәби телдең артабан үҫеүенә килтерҙе, уның функциональ стилдәре үҙ-ара мөнәсәбәттәрен нығытты; белем алыуҙың артабан үҫеүе, фән, мәҙәниәттең алға китеүе, мәктәп, мәҙәниәт-ағартыу учреждениелары, радио, телевидение, театр,

төрлө стилдәрҙә ижад ителгән әҙәбиәт аша әҙәби тел туған телдә аралашыуҙың бөтә төрҙәренә үтеп инә, территориаль диалекттарға һәм һөйләштәргә йоғонто яһап, әҙәби телдең дөйөм һөйләү формаһын барлыҡҡа килтереүгә булышлыҡ итә. Шул уҡ ваҡытта әҙәби тел дөйөм халыҡ һөйләү телмәре, башҡа ҡәрҙәш төрки телдәренең йоғонтоһо нигеҙендә байыға барыуын дауам итә. Һуңғы йылдарҙа башҡорт әҙәби теленә рус әҙәби теленең йоғонтоһо бик көсәйҙе; бер яҡтан, ул үҙе башҡорт әҙәби телен яңы фонемалар, синтаксик ҡоролош төрҙәре, һүҙҙәр менән байыҡтырыу сығанағы булһа, икенсе яҡтан, интернациональ үҙләштереүҙәрҙе ҡабул итеү өсөн ара тел булып сығыш яһай.

*Дүртенсе глава*

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ СТИЛДӘРЕНЕҢ ҮҪЕШЕ

Хәҙерге тел белемендә тел стилдәренә ҡараш бер төрлө түгел — был иң алда тел нормаһы тигән төшөнсәне нисек аңлауҙан тора. Әгәр тел нормаһы тип теләһә ниндәй дөрөҫ халыҡ һөйләү телмәре танылһа, стиль дөйөм халыҡ һөйләү телмәренең бер төрө тип аңлатыла; әгәр тел нормаһы тип дөрөҫ әҙәби телмәр танылһа, стиль әҙәби телдең бер төрө тип билдәләнә.

Хәҙерге үҫешкән милли телдәрҙә — улар иҫәбенә башҡорт теле лә инә — телдең ике төп тәшкиләт (функция) сфераһы айырыла: китап теле һәм нейтраль-һөйләү (йәки һөйләү) теле, — уларҙың һуңғыһына фамильяр-ябай һөйләү (йәки ябай һөйләү) телмәре ҡушыла. Уларҙың таралыу һәм йәшәү өлкәһе традиция буйынса билдәле бер төрлө ижтимағи ситуацияла нығынған. Китап стиле — официаль аралашыуҙы, нейтраль-һөйләү стиле — көндәлек хеҙмәт-көнкүреш аралашыуын, фамильяр-ябай һөйләү стиле яҡын көнкүреш аралашыуын хеҙмәтләндерә. Ниндәй аралашыу өлкәһендә ҡулланылыуына ҡарап, бер үк мәғәнәләге, ләкин төрлө стилистик биҙәкле һүҙҙәр ҡулланылырға мөмкин (*гүйә, төҫлө, һымаҡ, кеүек, шикелле; ҡатын, бисә, иптәш; туҡланыу, ашау, тамаҡ ашау; йәш түгеү, илау, балауыҙ һығыу* һ. б.).

Телдең китап, һөйләү һәм ябай һөйләү сфераларында ҡулланылған фонематик, лексик һәм грамматик сараларҙың араһында принципиаль айырма юҡ. Мәҫәлән, *баш, йылға, ҡарағай, атла-, күр-, ҡыҙыл, тәрән, мин, теге* һәм башҡа бик күп һүҙҙәр китап һәм һөйләү сфералары өсөн уртаҡ була. Шул уҡ ваҡытта һәр бер тәшкиләт сфераһы үҙенә генә хас ҡайһы бер фонетик һәм грамматик ҡоролошо һәм лексик составы менән айырылып та тора. Китап теленә бөтә сараларҙың да ныҡлы кодификацияланған (нормалаштырылған) булыуы хас. Уның айырым элементтары һөйләү телмәрендә ҡулланылмаҫҡа мөмкин. Мәҫәлән, хәл әйтемдәре менән ҡатмарланған синтаксик конструкциялар йәки *ләкин, сөнки, йәғни* һәм башҡа теркәүестәр менән килгән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр башлыса әҙәби телдең китап сфераһында ғына

ҡулланыла. Ә киреһенсә, әҙәби тел өсөн *сиҡ ҡына (саҡ ҡына* урынына), *белекис (бәләкәй* йәки *бәләкәс* урынына), *çоғон (һоғон* урынына), *тилиграм һуғыу (телеграмма тапшырыу* урынына), *тәгәрләт (тәгәрәт* урынына) һымаҡ күберәк һөйләү сфераһында ҡулланылған һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр хас түгел.

Әҙәби телгә ҡарата стилдәрҙең нейтраль булыуы стилдәр барлыҡҡа килеүенең һәм эшләнешенең милли үҙенсәлектәренә бәйле. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле реализмдың сәскә атҡан осоронда барлыҡҡа килгән; күп быуатлы йәнле телмәргә нигеҙләнгән яҙма традициялары булмағанлыҡтан һәм башлыса дөйөм халыҡ һөйләү телмәренә ҡоролғанлыҡтан, уның нейтраллеге ябай һөйләү телмәренә ҡарайыраҡ йүнәлтелгән. Шуға күрә лә ябай һөйләү телмәре менән башҡорт әҙәби теле араһында, әгәр диалект үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмағанда, әллә ниндәй ҙур айырма юҡ. Ә быва реализмдың башланғыс осоронда формалашҡан, боронғо яҙма традициялары бай булған рус әҙәби теленең, бигерәк тә классицизм осоронда уҡ ойошҡан француз әҙәби теленең нейтраллеге яҙма традицияларға нигеҙләнеп, ябай һөйләү формаһынан нығыраҡ алыҫлашҡан. Был яҡтан хәҙерге башҡорт әҙәби теле Урал — Волга буйы төрки теленең лексик-грамматик үҙенсәлектәрен нығыраҡ һеңдергән татар әҙәби теленән дә бер ни тиклем айырыла.

Башҡорт лингвистикаһында телселәр тел стиленә башлыса Ж. Ғ. Ҡиекбаевтың ҡарашына нигеҙләнәләр, ә уның фекеренсә, стилистиканың ике төрө айырыла: жанр стилистикаһы йәки жанрҙар стиле һәм грамматик стилистика. Ж. Ғ. Ҡиекбаев аңлауынса, жанр стилистикаһы йәки жанрҙар стиле «яҙма телдәрҙә, шул иҫәптән матур әҙәбиәттә лә, әҙәби телдең төрлө һүрәтләү сараларын файҙаланыуҙы өйрәнә», «грамматик стилистика конкрет бер телдең яҙыу һәм һөйләү телмәрендә, шул иҫәптән грамматик ҡағиҙәләре, закондары һәм лексик нормалары талап иткәнсә, уның грамматик формаларын, лексик берәмектәрен (һүҙҙәрен), телмәрҙең маҡсатына ҡарап, теге йәки был жанр стилендә дөрөҫ ҡулланыуҙы өйрәнә» [1]. Шулай итеп, ул жанр стилистикаһын әҙәби эслуб менән тиң ҡуйып ҡарай, ә әҙәби эслуб үҙ нәүбәтендә эстетик категория булараҡ стиль проблемаһы менән тығыҙ бәйләнгән.

### 1. *Башҡорт әҙәби теленең китап сфераһында ҡулланылыуы*

Һүҙлек составы яғынан да, фонетик һәм грамматик ҡоролошо яғынан да нормалаштырылған әҙәби тел стилдәр системаһынан тора. Әҙәби стилдәр тип тарихи ерлектә барлыҡҡа килгән берҙәм фонетик һәм грамматик ҡоролошло, ләкин йәшәү осоронда мах-

[1] Ҡиекбаев Жәлил. Башҡорт теленең стилдәре һәм стилистикаға ҡарата // Ағиҙел. 1966. № 8. 78—79-сы биттәр.

сус телмәр төҙөлөшөнә, билдәле бер телмәр саралары йыйылмаһына һәм уларҙы ҡулланыуҙың традицион нормаларына нигеҙләнеп барлыҡҡа килгән әҙәби телдең төрҙәренә әйтәләр. Әҙәби телдең стилдәре туранан-тура әҙәбиәт жанрҙарының төрҙәренә бәйләнгән, шуға күрә стилдәрҙе төркөмләү ни тиклем генә күп төрлө булһа ла, уларҙың нигеҙендә жанр принцибы ята.

Төрлө тарихи эпохаларҙа йәмғиәт һәм тел үҫешенә буйһоноп, стилдәрҙең дә үҙенсәлектәре һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәре үҙгәрә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең ҡайһы бер стилдәре бик борондан формалашҡан һәм күп быуаттар буйына йәшәп килә, ә икенселәре яңыраҡ барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән, башҡорт әҙәби телендә матур әҙәбиәт, официаль документ һәм эпистоляр стилдәр урта быуаттарҙа уҡ тыуып, үҙҙәренең үҫеш осоронда ҙур үҙгәрештәргә бирелгәндәр. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ижтимағи-публицистик стиль XIX быуаттың икенсе яртыһында ғына формалашҡан, тип әйтергә мөмкин, ә фәнни стиль совет осоронда ғына юлға һалынған. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, XIX быуатҡа тиклем, үрҙә күрһәтелгән боронғо ҡайһы бер стилдәрҙән башҡа, башҡорт ерлегендәге яҙма ҡомартҡыларҙа әҙәби стиль сиктәрен билдәләү бик ауыр. Мәҫәлән, Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған XVIII быуат урталарындағы тарихи һәм әҙәби ҡомартҡы һаналған хатындағы[2] стиль үҙенсәлектәренә килһәк, унда бер юлы матур әҙәбиәт, публицистик, эпистоляр стилдәрҙең айырымлыҡтарын билдәләргә мөмкин. Башҡорт шәжәрәләре лә хроникаль йылъяҙма, официаль документтар һәм матур әҙәбиәт стилдәренең йыйылмаһынан тора. Күп кенә элекке әҙәбиәт төрҙәренең бындай бер нисә стиль үҙенсәлектәре менән характерланыуын ҡайһы бер стилдәрҙең айырым берәмек булараҡ формалашып етмәүенән сығып аңлатып була.

Башҡорт әҙәби теленең китап сфераһындағы стилдәр системаһы бигерәк тә совет осоронда ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Был хәл, бер яҡтан, йәмғиәт тормошондағы ижтимағи-политик, культура, фәнни-техник һәм башҡа өлкәләрҙең үҫеше менән бәйле булһа, икенсе яҡтан, яңы шарттарҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теленең формалашыуына һәм артабан сәскә атыуына барып тоташа. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге стилдәрҙең үҫеүендә һәм байыуында функциональ стилдәр системаһы үҫешкән хәҙерге рус әҙәби теленең дә роле бик ҙур.

М а т у р  ә ҙ ә б и ә т  с т и л е. Матур әҙәбиәт стиле башҡа функциональ стилдәрҙән ныҡ айырыла. Әгәр башҡа стилдәрҙең бөтәһе лә ғәҙәттәге аралашыу бурысын үтәһә, матур әҙәбиәт стилендә тел фекерләү формаһы ғына булып түгел, ә художестволы һүрәтләү элементы булып та сығыш яһай. Матур әҙәбиәт стиле үҙенең стилистик саралары һәм мөмкинлектәре менән киң диапазонлы булыуы менән айырыла. Телдең әҙәби һәм әҙәби булма-

---

[2] Хусаинов Г. Б. Письмо Батырши императрице Елизавете Петровне как историко-литературный источник // Южноуральский археографический сборник. Уфа, 1973. Вып. 1. 122-се бит.

ған формалары (мәҫәлән, ерле һөйләштәр, жаргондар), дөйөм һәм шәхси айырымлыҡтары, башҡа бөтә стилдәрҙең алымдары матур әҙәбиәт стилендә ысынбарлыҡты образлы ҡабул итеү һәм һүрәтләү маҡсаттарында ҡулланыла.

Беҙҙә матур әҙәбиәт стиленең үҫеше һәм яңы кимәлгә күтәрелеүе Октябрь революцияһынан һуңғы яңы типтағы башҡорт әҙәбиәтенең барлыҡҡа килеүе менән тығыҙ бәйләнгән. Шул уҡ ваҡытта әҙәби телдең үҫешен тулыһы менән матур әҙәбиәттең үҫешенә туранан-тура бәйләп ҡарарға ярамай. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури — башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Ләкин, билдәле булыуынса, М. Ғафури әҫәрҙәре, башҡорт ерлегенә нигеҙләнһә лә, татар телендә ижад ителгән. Ошо арҡала Ғ. Ғ. Сәйетбатталовтың: «XIX быуаттың беренсе яртыһында А. С. Пушкин рус әҙәби телен нисек байыҡтырған һәм үҫтергән булһа, XX быуаттың тәүге яртыһында М. Ғафури башҡорт әҙәби телен формалаштырыуҙа һәм үҫтереүҙә шундай уҡ роль уйнаны, яңы тарихи шарттарҙа йәшәне һәм ижад итте»[3], — тигән һүҙҙәрен бик үк нигеҙле тип әйтеп булмай. Башҡорт һәм рус әҙәби телдәренең барлыҡҡа килеүе һәм үҫеүе төрлө эпохаларға тап килә, уларҙың сығанаҡтары һәм нигеҙҙәре бер төрлө түгел. Пушкинға тиклемге рус әҙәби теленең оҙайлы тарихы бар. Пушкинға тиклемге рус әҙәби теленең ниндәй юл үткәнен күҙ алдына килтереү өсөн боронғо рус яҙма әҙәби ҡомартҡыларын, Петр I осорондағы әҙәби телде, рус әҙәби теле тарихындағы М. В. Ломоносов, Г. Р. Державин, Д. И. Фонвизин, А. Н. Радищев, В. А. Жуковский, Н. М. Карамзин һымаҡ исемдәрҙе иҫкә төшөрөү ҙә етә. Н. А. Мещерскийҙың әйтеүенсә: «Пушкиндың төп тарихи әһәмиәте рус халыҡ һөйләү телен әҙәбиәттә нығытыуҙы тамамлауҙа тора»[4]. Бай милли традициялары булмаған хәҙерге башҡорт әҙәби теле барлыҡҡа килгән осорҙа, яңынан алфавиттар һәм орфография эшләнгән ваҡытта, әҙәби телдең лексик составы, фонетикаһы, грамматикаһы яңырған осорҙа башҡорт әҙәби теле тарихында айырым шәхестең Пушкин башҡарған ролдә булыуы ла мөмкин түгел ине. Етмәһә, М. Ғафуриҙың совет осорондағы ижады хәҙерге башҡорт әҙәби теленең әле нығынып бөтмәгән дәүеренә тап килә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле — коллектив ижад, ул бөтә яҙыусылар, телселәр, башҡа ғилми хеҙмәткәрҙәр, мәҙәниәт һәм мәғариф эшмәкәрҙәренең, — бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорт халҡының алдынғы вәкилдәренең ижад емеше.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге матур әҙәбиәт стиленең барлыҡҡа килеүе һәм тәүге үҫеш аҙымдары М. Ғафури, Д. Юлтый, А. Таһиров, Т. Йәнәби, С. Ҡудаш, Ғ. Ғүмәр, Б. Ишемғол, Ғ. Дәүләтшин, И. Насыри, Ғ. Хәйри һәм башҡа башҡорт яҙыусыларының исемдәре менән бәйле.

---

[3] Сәйетбатталов Ғ. Ғ. Башҡорт әҙәби телен үҫтереүҙә М. Ғафуриҙың роле // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1965. № 7—8. 13-сө бит.

[4] Мещерский Н. А. История русского литературного языка. Л., 1981. 193-сө бит.

Мәжит Ғафуриҙың хәҙерге башҡорт әҙәби теленең матур әҙәбиәт стилен формалаштырыуҙағы әһәмиәте — унының революциянан һуңғы ижадында Урал — Волга буйы төрки теленең консерватив традицияларынан ситләшеүендә, татар әҙәби теленең ыңғай яҡтарын файҙаланып, әҫәрҙәрҙең тел үҙенсәлеген башҡорт халҡының йәнле һөйләү телмәренә яҡынлаштырыуында, татар әҙәбиәтенең иң алдынғы үрнәктәре нигеҙендә милли йөкмәткеле әҫәрҙәр ижад итеүендә. М. Ғафури халыҡ йәнле һөйләү телмәрен ҙур иғтибар һәм ихтирам менән өйрәнеп, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйған, уларҙы тикшергән һәм матбуғатта баҫтырып сығарған. Ул үҙенең әҫәрҙәрендә халыҡ йырҙарын, мәҡәл һәм әйтемдәрен, башҡорт халыҡ юморын бик оҫта файҙаланған. Ә иң әһәмиәтлеһе — М. Ғафуриҙың әҫәрҙәре тел һәм стиль үҙенсәлектәре яғынан яңы темаларға, яңы идея йөкмәткеләренә, әҙәбиәт алдында торған шул замандың бурыстарына һәм талаптарына яҡшы яуап биргән.

Егерменсе йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә хикәйә, нәҫер, очерк һүрәтләүҙәре, мемуар характерындағы хикәйәләүҙәр, йәғни күләме яғынан ҙур булмаған әҫәрҙәр, өҫтөнлөк ала. Бындай хәлде башҡа сәбәптәр менән бер рәттән әҙәби тел сараларының эшләнеп етмәүе һәм матур әҙәбиәт стиленең яңы алымдары асыҡланмауы, юлға һалынмауы менән аңлатырға була. Ошо сәбәпле егерменсе йылдарҙың аҙағында һәм утыҙынсы йылдарҙың башында ижад ителгән әҫәрҙәр бер планлы булып, һүрәтләүҙән бигерәк һөйләп биреүгә ҡоролған. Октябрь революцияһына тиклем ижад ителгән әҫәрҙәргә лә ошондай уҡ һыҙат хас ине.

Матур әҙәбиәт стилен камиллаштырыуҙа һәм, дөйөм алғанда, башҡорт әҙәбиәтен артабан үҫтереүҙә егерменсе йылдарҙа ойошторолған «Яңы юл», «Белем», «Сәсән», «Яңылыҡ» һымаҡ ижтимағи-әҙәби журналдарҙың әһәмиәте ифрат ҙур булды. Был журналдарҙа ҡатнашып, башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары, шул иҫәптән йәштәр ҙә, үҙҙәренең ҡәләмдәрен оҫтарттылар, ә уларҙың әҫәрҙәре шунда уҡ массаларға барып етте. Был журналдарҙың биттәрендә эленән-эле рус һәм Европа яҙыусыларының әҫәрҙәре баҫылып сыға торҙо, ә был үҙ нәүбәтендә башҡорт әҙәбиәтенең үҫешенә һәм матур әҙәбиәт стиленең артабан камиллашыуына ыңғай йоғонто яһаны.

Утыҙынсы йылдарҙа инде башҡорт совет әҙәбиәте яңы үрҙәрҙе яулай, матур әҙәбиәт стиленең яңы алымдарына нигеҙ һалына. «Эҙләнеүҙәрҙең беренсе этабы, реализмды туплау этабы үткәс, йәш әҙәбиәттәрҙең тиҙләтелгән үҫеше бигерәк тә 30-сы йылдарҙа һиҙелерлек булды», — тип яҙҙы был осор тураһында күренекле совет әҙәбиәтсеһе Г. И. Ломидзе [5]. Был ҡаҙаныштар башҡорт әҙәбиәтенең «поэзия өлкәһендә Ғ. Сәләм, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, М. Хәй; прозала — Д. Юлтый, И. Насыри, А. Ҡарнай, С. Агиш, Һ. Дәүләтшина; драматургияла — Д. Юлтый, С. Мифтахов, Б. Бик-

[5] Ломидзе Г. И. Интернациональный пафос советской литературы. Л., 1967. 204-се бит.

бай әҫәрҙәрендә асыҡ сағылыш тапты»[6]. Утыҙынсы йылдарҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теленең, бигерәк тә уның фонетикаһы менән грамматикаһының, юлға һалыныуын да оноторға ярамай. «30-сы йылдарҙа уҡ элекке әҙәбиәт традицияларының ресурстары, башҡорт һөйләү теленең потенциаль мөмкинлектәре һ. б. иҫәбенә, башҡа төрки телдәрҙең үҫеше йүнәлешендә башҡорт грамматикаһының тейешле һүҙьяһалыш формаларына һәм теркәүес менән бәйләнгән синтаксик конструкцияларына байыҒыу юлын алды»[7]. Тап утыҙынсы йылдарҙа хәҙерге башҡорт әҙәби телендә элек продуктив булмаған күп кенә аффикстарҙың ҡулланылышы киңәйҙе йәки яңы ҡушма аффикстар барлыҡҡа килде (*-ма, -ым, -ыш, -лыҡ, -са, -сылыҡ, -ынты, -емтә* һ. б.); традицион Урал — Волга буйы төрки әҙәби телендә килгән һәм халыҡ һөйләү телмәрендәге һөйләм төҙөлөштәренә нигеҙләнеп, синтаксик нормалар билдәләнде, әҙәби телдең һүҙлек составы ла байтаҡҡа байыны.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә матур әҙәбиәт стиленең үҫешенә һәм байыуына рус әҙәбиәте лә ҙур йоғонто яһаны. Был йоғонто башҡорт әҙиптәренең шул ваҡыттағы рус яҙыусыларының, рус классиктарының мираҫтары менән танышыу нигеҙендә, шулай уҡ тәржемә әҫәрҙәр тәьҫирендә лә барҙы. Утыҙынсы-ҡырҡынсы йылдарҙа башҡорт телендә сығарылған китап продукцияһында тәржемә әҙәбиәт айырыуса әһәмиәтле урын биләне. Был осорҙа массалар башҡорт теле нигеҙендә белемгә эйә булып өлгөрһәләр ҙә, рус телендә грамоталылыҡ түбән ине әле. Ошо ар ҡала рус һәм донъя әҙәбиәтенең иң яҡшы өлгөләре менән танышыу башлыса тәржемәләр аша барҙы. Рус һәм донъя әҙәбиәтенең алдынғы өлгөләрен тәржемә итеү, бер яҡтан, әҙәби телде яңы саралар менән байыҡтырһа, икенсе яҡтан, башҡорт матур әҙәбиәтенең стиль-һүрәтләү алымдарын үҫтереүгә булышлыҡ итте. Был йылдарҙа башҡорт телендә А. С. Пушкиндың, М. Ю. Лермонтовтың, Н. А. Некрасовтың, В. В. Маяковскийҙың, Э. Багрицкийҙың шиғыр һәм поэмалары, Н. В. Гоголдең, М. Е. Салтыков-Щедриндың, Д. Н. Мамин-Сибиряктың, А. П. Чеховтың, А. М. Горькийҙың, М. А. Шолоховтың, Н. А. Островскийҙың, А. А. Фадеевтың, Д. А. Фурмановтың, И. Г. Эренбургтың әҫәрҙәре тәржемә ителә. Башҡорт яҙыусыларының рус һәм башҡа халыҡтар яҙыусылары менән туранан-тура йәнле бәйләнештәре лә көсәйҙе.

Башҡорт әҙәби теленең матур әҙәбиәт стилен артабан үҫтереүҙә Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ижад ителгән әҫәрҙәр ҙә асыҡ эҙ ҡалдырҙы. Был осорҙа бигерәк тә граждандлыҡ пафосы, патриотизм менән һуғарылған башҡорт поэзияһы ныҡлы үҫеш ала. Совет халҡының фронттағы һәм тылдағы батырлыҡтары — был йылдар поэзияһының төп темаһы. Һуғыш йылдарының лирика-

---

[6] Вахитов А. Х. Идейно-художественные достижения современной башкирской прозы // Башкирская литература и литературный язык на современном этапе. Уфа, 1970. 61-се бит.

[7] Юлдашев А. А. К характеристике современного башкирского литературного языка // Грамматика современного башкирского литературного языка. М., 1981. 12-се бит.

һында халыҡ поэтик ижадының алымдарын һәм формаларын файҙаланыу көсәйҙе, тик был егерменсе йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәте өсөн хас эйәреү түгел, ә поэзияның граждандлыҡ пафосын, эстетик йоғонтоһон арттырыу маҡсатында аңлы рәүештә халыҡ ижадына мөрәжәғәт итеү булды. Фольклор мотивтары, мәҫәлән, Р. Ниғмәтиҙең «Үлтер, улым, фашисты!», М. Кәримдең «Үлмәҫбай», Ғ. Ғүмәрҙең «Фәйзулла һалдат», М. Тажиҙың «Урал батыры» поэмалары, Х. Кәрим, Б. Бикбай, С. Ҡулибай, М. Харис, Н. Нәжми һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың әҫәрҙәре өсөн хас. Күп йылдар үткәс, үҙенең һуғыш йылдарында ижад иткән әҫәрҙәре тураһында М. Кәрим былай тип яҙҙы: «Минең һуғыш поэзиям — асылда, ярым фольклор поэзия. Һуғыш һәм фольклор! Был бәйләнеш тәжрибә етмәүҙән тыуманы. Мин уҡыусыларым, туғандарым менән тарих телендә һөйләшергә теләнем. Уларҙың иҫенә төшөргөм килде: һеҙ был донъяға бөгөн генә килмәгәнһегеҙ, һеҙ быуаттар буйына культура ижад иттегеҙ, һеҙ үҙегеҙҙе үҙегеҙ яһанығыҙ, һеҙ быуаттар буйына ҡоролған булмышығыҙҙы һаҡлайһығыҙ» [8].

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы башҡорт прозаһы хикәйәләр, портрет, көндәлек, юл яҙмалары һымаҡ бәләкәй жанрҙағы әҫәрҙәрҙең артыуы менән билдәләнә. Бының үҙ сәбәптәре бар: беренсенән, һуғыш йылдарындағы ваҡиғаларҙы тулыһынса күҙ алдына килтереү, дөйөмләштереү һәм ҙур күләмле әҫәрҙәр тыуҙырыу өсөн ваҡыт кәрәк (һуғыш тематикаһы башҡорт әҙәбиәтендә һуңғараҡ, ысынлап та, тейешле урынын тапты); икенсенән, әҙәби әҫәрҙәрҙең бәләкәй формалары фронттағы һәм тылдағы героик эпизодтарҙы, көндәлек тормошто оператив сағылдырырға ирек бирә; улар уҡыусыларға тиҙерәк барып етә, уларҙа дошманға ҡаршы нәфрәт, үҙ халҡының ҡаһарманлығына һоҡланыу тойғолары тәрбиәләй. Ҡесе күләмле әҫәрҙәр артыуының кире яҡтары ла күҙәтелә: был йылдарҙа матур әҙәбиәт стилендә документаллек, очеркизм, публицистика һыҙаттары өҫтөнлөк ала.

Матур әҙәбиәт стиленең сәскә атыуы һуғыштан һуңғы һәм хәҙерге осорҙарға тап килә. С. Агиштың «Нигеҙ» һәм Ә. Вәлиҙең «Беренсе аҙымдар» романдарының донъя күреүе башҡорт әҙәбиәте өсөн ҙур ваҡиғаға әүерелде. Был әҫәрҙәр матур әҙәбиәт стилен яңы алымдар һәм саралар менән байыҡтырҙы.

Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы башҡорт әҙәби теле тарихында һәм матур әҙәбиәт стиленең үҫешендә яңы бер этапты асып ебәрҙе. Башҡорт әҙәбиәтенең иң яҡшы традицияларын дауам итеп, рус романсыларының бай тәжрибәһен ентекле өйрәнеү нигеҙендә Һ. Дәүләтшина беҙҙең әҙәбиәттә беренсе булараҡ туған халыҡтың тарихындағы революцион ваҡиғаларҙы киң эпик планда оҫта итеп һүрәтләй алды. Роман менән танышҡан һәр кешене әҫәрҙең күп биҙәкле, һутлы, сағыу, ысын мәғәнәһендә халыҡсан теле таң ҡалдыра. «Барыһынан элек, Һәҙиә Дәүләтшина —

---

[8] Карим М. Богатство и заботы литературы // Вопросы литературы. 1974. № 8.

гүзәл тел оҫтаһы, — тип яҙҙы был хаҡта Баязит Бикбай. — Ул һүҙҙәрҙе туп кеүек уйната. Бай, ғәжәп һутлы тел. Яҙыусы китаптың һәр битендә тип әйтерлек халыҡ араһында булып та, әлегә әҙәбиәттә ҡулланылмай килгән яңы һүҙҙәрҙе ҡуллана, шуның арҡаһында уның образдары, һүрәтләгән ваҡиғалары ысын булып күҙ алдына баҫалар, һине ышандыралар» [9]. Үҙ әҫәрҙәренең теленә автор нисек ҡараған, ниндәй талаптар ҡуйған — былар Һәҙиә Дәүләтшинаның Башҡортостан яҙыусыларының II съезына әҙерләнгән, ләкин һөйләнмәй ҡалған сығышы тексында асыҡ сағыла: «Беҙгә халҡыбыҙҙың образлы һөйләү теленең бөтә байлыҡтарын мотлаҡ өйрәнергә кәрәк. Телде белмәй тороп, ошо телдә яҡшы әҙәбиәт тыуҙырып булмай...» [10].

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте үҙенең сәскә атыу осорон кисерә. Ул тематика киңлеге, идея йөкмәткеһенең тәрәнлеге, тормошҡа актив тәьҫир яһаусы көслө характерлы геройҙарҙы тыуҙырыуы, һүрәтләү һәм стиль алымдарының төрлөлөгө, тел сараларының байлығы менән айырылып тора. Башҡорт әҙәбиәте М. Кәрим, З. Биишева, Ә. Кирәй, Ф. Иҫәнғолов, Я. Хамматов, Д. Исламов, Ә. Бикчәнтәев, И. Абдуллин, Ә. Мирзаһитов, С. Ҡудаш, Б. Бикбай, Н. Нәжми, Ғ. Рамазанов, Х. Ғиләжев, Ш. Бикҡол, Р. Ғарипов, Р. Бикбаев һәм башҡа күп яҙыусыларҙың оҫта әҫәрҙәре менән байыҡты.

Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте яулаған юғарылыҡтарҙа әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт белеменең дә ҙур өлөшө бар. Ә. Харисов, Ә. Кирәев, Х. Зиннәтуллина, Ғ. Хөсәйенов, Ғ. Рамазанов, М. Ғәйнуллин, Ҡ. Әхмәтйәнов, С. Сафуанов, Ә. Вахитов, Р. Байымов, Р. Бикбаев һымаҡ тикшеренеүселәребеҙҙең хеҙмәттәрендә традиция һәм новаторлыҡ, әҙәби процесс, шәхси оҫталыҡ, әҙәбиәт бәйләнештәре, ваҡыт һәм герой, жанр, стиль һәм һүрәтләү саралары, әҙәбиәт тарихы һымаҡ әһәмиәтле проблемаларға ҙур урын бирелә. Улар тарафынан яҙыусыларҙың тормош һәм ижад юлына, айырым әҫәрҙәргә бағышланған тәрән йөкмәткеле тикшеренеүҙәр эшләнгән.

Матур әҙәбиәт стиле башҡа функциональ стилдәрҙән тел-һүрәтләү сараларының киң мөмкинлектәрен оҫта һәм тулы файҙаланыуы менән айырыла. Конкрет әҙәби әҫәрҙә был һүрәтләү сараларының ҡулланылыу кимәле һәм үҙенсәлектәре яҙыусының шәхси оҫталығы менән дә тығыҙ бәйләнештә була.

Матур әҙәбиәт стилендә, образлы һүрәтләү маҡсаттарынан сығып, телдең башҡа бөтә функциональ стилдәре лә ҡулланылырға мөмкин. Маҡсаттан сығып, бер әҙәби әҫәрҙә төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙең стиль алымдары файҙаланыла ала. Миҫал өсөн Ф. Иҫәнғоловтың «Арыш башағы» романында төрлө стиль үҙенсәлектәрен ҡулланыуҙы алырға мөмкин [11].

---

[9] Бикбай Б. Тере тауыш // Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр. Өфө, 1983. 107-се бит.

[10] Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр. 79—80-се биттәр.

[11] Иҫәнғолов Ф. Арыш башағы. Өфө, 1970 (йәйәләрҙәге бит һандары ошо китаптағыса бирелә).

### *Халыҡ йәнле һөйләү телмәренең стиль үҙенсәлектәре*

Бисә-сәсә түҙҙе-түҙҙе лә, ахыр килеп, тел сарларға керешге:

— Был бай һаман йорт нығыта ла йорт нығыта. Кәләш алырға уйламай ҙа. Олоғайып бара түгелме һуң?..

— Урыҫ араһында күп йөрөгәс, урыҫ фиғеле кереп бөткәндер, күрәһең, үҙенә...

— Эйе шул. Урыҫ байыһа — өй һала, башҡорт байыһа — бисә ала, тигәндәр бит боронғолар ҙа...

— Унда старостаның Гөлсәғүрәһе көрһөнә-көрһөнә һарғая...

— Ысын булһа, Ырымбур яғында аның мәрйә бисәһе бар имеш тә йәмәғәттең ҡәһәренән ҡурҡып, алып ҡайтмай тора имеш, тип һөйләйҙәр...

— Эй-й, мин дә ишеткәйнем. Әле мәрйәһе бер татар байының ҡыҙынан татарса өйрәнеп ята, ти. Шунан Аллаяр аны татар ҡыҙы тип алып ҡайтмаҡсы, ти... (14—15).

### *Халыҡ ижады стиленең үҙенсәлектәре*

Йырлайыҡ та йырҙың, һай, һәйбәтен,
Һөйләмәйек байҙарҙың ғәйбәтен...
Һөйләмәһәк уларҙың, һай, ғәйбәтен —
Әхирәттең беҙгә йәннәте... (16).

### *Башҡорт теленең диалект үҙенсәлектәре*

— Беҙ Ҡасим менән дуҫ булыштыҡ, еңкә. Быларҙы ул миңә урмантан яһап апҡайтҡан. Мин аңа ҡульяулыҡ сигеп бирәм. Бына был ҙур шәшке — Ҡасимҡа. Мыныһы — үҙемә... Мына был бәләкәстәре — бәләкәстәргә... Матурҡайҙар бит, еңкә? (110).

Был өҙөктә Сәлимәнең телмәрендәге *еңкә* (әҙәби телдә *еңгә*), *урмантан* (әҙәби телдә *урмандан*), *Ҡасимҡа* (әҙәби телдә *Ҡасимға*) формалары башҡорт теленең көньяҡ диалекты урта һөйләш (ҡатай башҡорттары) телендәге үҙенсәлектәрҙе сағылдыра. Бынан тыш, *апҡайтҡан, аңа, шәшке, мыныһы, мына* формалары һөйләү телмәре һәм диалекттар өсөн хас. Ғөмүмән алғанда, Фәрит Иҫәнғоловтың әҫәрҙәрендә геройҙарҙың телмәр үҙенсәлектәренә яҡшы иғтибар бирелә.

### *Иҫкергән телмәрҙең стиль үҙенсәлектәре*

— Ул ҡазаны мин көткәйнем. Хоҙай тәғәләне рәнйетә төштөң шул. Шайтан ҡотороғо менән кафыр фиғеле алып, әллә ниндәй ен арбаһы яһаның бит. Етмәһә, рамазан-шәриф айында Өфөгә барып, әллә ниндәй дәһри заттар менән ҡул бирешеп йөрөнөң. Хәйер бирһәң, бәлкем хаҡтәғәлә ярлыҡар ҙа ине. Ә һин урыҫтай булып, шәриғәтте онотоп, ураҙала өй һалдырырға керештең (170).

Был өҙөктә Ғайфулла мулланың телмәре әҙәби тел өсөн хас булмаған иҫкергән ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән сыбарланған: *хо-*

*ҙай тәғәлә, кафыр, фиғел, рамазан-шәриф* (ай исеме), *дәһри зат* (аллаһыҙ кеше), *хаҡтәғәлә* һ. б.

### *Тарихи-хроникаль стилдең үҙенсәлектәре*

Февраль революцияһынан һуң — 1917 йылдың икенсе яртыһында — башҡорт милли хәрәкәте айырыуса көсәйеп китте. Ырымбурҙа һәм Өфөлә Беренсе һәм Икенсе башҡорт съездары булып үтте. Уларҙа Башҡорт өлкә шураһы төҙөлдө. Съезда бары байҙар, муллалар, сауҙагәрҙәр генә ҡатнаша алды. Шура милли ерлектә үҙаллылыҡ талап итә ине. Уның барлыҡ талаптары бары мөлкәтле кешеләр күҙлегенән генә сығып төҙөлгәйне (142).

### *Эпистоляр стилдең үҙенсәлектәре*

«Ҡәҙерле атай, инәй, Шәрифулла туғаным! Минән һеҙгә бик күп һағынышлы сәләм. Үҙемдең иҫәнлекте белдереп, һеҙгә лә сәләмәтлек теләп ҡалам...» (158).

### *Публицистик стилдең үҙенсәлектәре*

«Әгәр һин аҡ бандаларҙан таланып, бөлөп ҡалған булһаң, әгәр граждандар һуғышы һинең хужалығыңа зыян килтергән булһа, әгәр һинең ҡатының һәм балаларың ас-яланғас, ауырыуҙар икән, байға һәм алпауытҡа барма, һин унан бер нәмә лә ала алмаҫһың... Һин коммунистарға-большевиктарға бар... Үҙегеҙҙең ауыл Советына бар, мин фәҡирмен, миңә ярҙам кәрәк, тип әйт. Улар һинең хәлеңде шунда уҡ аңлап алырҙар ҙа ярҙам итерҙәр... Аҡ бандалар тарафынан аяуһыҙ таланған башҡорттар, «Башкирпомощ»ҡа килегеҙ!..» (216).

Ошондай стиль күплеге һәм төрлөлөгө нигеҙендә әҙәби телде өйрәнеүселәрҙең ҡайһы берҙәре матур әҙәбиәт стилен функциональ стилдәр рәтенә индермәй. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, ошо үҙенсәлек — төрлө стилдәрҙең мөмкинлектәрен һәм алымдарын файҙаланыу — образлы һүрәтләү менән бергә матур әҙәбиәт стилен башҡа стилдәрҙән айырып тора. Матур әҙәбиәт стиленең төрлө стиль алымдарынан файҙаланыуы стилдәрҙе бутау түгел, сөнки һәр бер сара әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһенән сығып ҡулланыла һәм иң алда эстетик функция үтәй.

Матур әҙәбиәт стиленә тәрән метафоралыҡ, фонетиканан алып синтаксисҡа тиклем телдең бөтә кимәлдәре берәмектәренең дә образлылығы хас. Әҙәби әҫәрҙәрҙә образлылыҡты көсәйтеү өсөн, шулай уҡ әҫәрҙең эстетик тәьҫирен арттырыу маҡсатында синонимика, антонимика, күп мәғәнәлелек, фразеология һымаҡ телдең бай мөмкинлектәре тулыһынса файҙаланыла. Әҙәби әҫәрҙәрҙең телендә һүҙҙәрҙе киң, узуаль мәғәнәләрҙә түгел, ә тар, күберәк күсмә, окказиональ мәғәнәләрҙә ҡулланыуға иғтибар бирелә, һәм былар бөтәһе лә фекерҙең образлылығын арттыра. Быны түбән-

дәге бәләкәй генә миҫалда ла асыҡ күрергә була: *«...Мин ашҡыныып, ярһып, осоп килдем, балҡып, яныып килдем, бит һеҙгә бәхет алып килдем!..»* (М. Кәрим.) Һүҙҙәрҙең былдай мәғәнәләрен башҡа функциональ стилдәрҙә ҡулланыу ҙа мөмкин түгел.

Матур әҙәбиәт стилендә телмәр берәмектәрен тасуири-образлы конкретлаштырыу ҙур әһәмиәткә эйә. Билдәле булыуынса, айырым ҡулланғанда, һүҙҙәр төшөнсәне белдерә. Телмәрҙә ҡулланылғанда, ул үҙ эсенә күҙ алдына килтереүҙе лә ала, йәғни башҡа һүҙҙәр менән мөнәсәбәткә инеп, билдәле бер кимәлдә конкретлаша. Әҙәби әҫәр тексында ул, төшөнсә менән күҙ алдына килтереүҙән тыш, контекста һынлы күренеш тә тыуҙыра. Мәҫәлән, З. Биишева үҙенең «Кәмһетелгәндәр» романындағы бер өҙөктә ошондай конкретлаштырыуҙа, күп кенә алымдарҙы файҙаланып, йәйге төн образын тыуҙыра: *Төн. Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле, күҙҙең яуын алып йымылдап торған аяҙ күктә, алтын табаҡтай, тулған ай йөҙә. Таллыҡта һандуғастар сутылдаша. Күләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандуғас моңдарына мансып, ҡыуана-көлә өҙлөкһөҙ сылтырап аға ла аға. Ағастар, сәскәләр, хайуандар, хатта ҡоштар ҙа, йомшаҡ, еләҫ елдән һөйөлөп, көндөҙгө эҫенән ял итә. Иҫ киткес рәхәт, гүзәл яҙғы төн тышта.*

Эш-хәрәкәттең даимилығын белдергән ҡылым формалары, төрлө синонимдарҙы, сағыштырыуҙарҙы йәлеп итеү, хис-тойғоло һүҙҙәрҙе файҙаланыу — былар бөтәһе лә йәйге төндөң һынлы образын тыуҙырыуға буйһондоролған.

Матур әҙәбиәт стиленә ҡараған бер төр — поэзия үҙенең ҡоролошо һәм һүрәтләү саралары менән үҙенсәлекле урын алып тора, матур әҙәбиәт стиленә ҡараған бөтә башҡа әҫәрҙәрҙән айырыла. Был айырма иң алда шиғри әҫәрҙең үҙенсәлекле формаһы, ритмикаһы, рифмаһы, билдәле бер шиғри үлсәме булыуынан торһа, тағы ла уның инверсия, ҡабатлауҙар, антитеза, метафора, эпитет һымаҡ төрлө алымдарҙан киң файҙаланыуына бәйле. Үҙенең ошо ҡоролошо һәм төрлө үҙенсәлекле алымдарҙы ҡулланыу нигеҙендә поэзия образлылыҡтың һәм художестволы һүрәтләүҙең иң юғары формаһына эйә.

Совет власының тәүге йылдарында уҡ ғәрәп һәм тажик-иран әҙәбиәте аша үҙләштерелгән революцияға тиклемге хикмәт, ҡәдисә, ғәзәл, мәдхиә, мәрҫиә, нәсихәт, мәснәүи, робағи, ҡитға һымаҡ традицион жанрҙар аҡрынлап юҡҡа сыға барҙылар [12]. Поэзияның яңы революцион йөкмәткеһе яңы жанр формаларын талап итә ине. Быны ул ваҡыттағы әҙәбиәтселәр ҙә яҡшы аңлай ине. «Беҙҙең иҫке әҙәбиәтебеҙҙә лә һуңғы ҡабул ителгән бүлектәр һәр ҡайһыһы бар, тик исем, ыслуб, тасуир һәм рухтары ғына башҡа. Фәҡәт яңы ысулға, яңы ҡалыпҡа ғына һалырға, эшсе синыфтар идеологияһына ғына хеҙмәт иттерергә кәрәк. Уларҙы хәҙергесә риүәйә, лирика, драма төрҙәренә бүлергә; риүәйәне поэма, балла-

[12] Хөсәйенов Ғ. Башҡорт әҙәбиәтендә традицион жанрҙар системаһы // Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар системаһы. Өфө, 1980. 21-се бит.

да, идиллия, роман, хикәйә, мәҫәлгә; лириканы ода, көлөү, сатира, элегияларға бүлергә; драманы трагедия, комедия, хосуси драмаларға бүлеп кенә йөрөтөргә тейешбеҙ», — тип яҙҙы был турала С. Мирас [13]. Яңы формаларҙы эҙләү юлында шағирҙар иң алда халыҡ фекеренең бөтмәҫ даръяһы — поэтик фольклорға мөрәжәғәт иттеләр, үҙҙәренең ижадында йыр, ҡобайыр, бәйет формаларын файҙаландылар:

Нурҙы ҡояш сығып нурын һипте
Уралҡайҙың бейек осона,
Йәннәт елкәйҙәре еҫен бөрктө
Уралҡайҙың былбыл ҡошона...
...Урал егете, һеҙгә шаттыҡ бөгөн —
Ҡир хөрҙөккә сыҡты көнөгөҙ;
Нисә йөҙ йыл һеҙҙе томалаған
Үтте хәҙер ҡара төнөгөҙ [14].

Был өҙөктә халыҡ йырҙарының формаһына эйәреү ап-асыҡ күренеп тора.

Ярҙы башҡорт, ҡуҙғалсы,
Ғилемгә бер күҙ һалсы;
Наҙанлыҡтан ҡотолоп,
Белем тыуын ҡулға алсы,
Ҡулға алсы, ҡулға алсы...[15]

Был өҙөктә башҡорт халыҡ ижадындағы ҡобайыр жанрының алымдарын файҙаланыу һиҙелеп тора.

Совет осоронда поэтик әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе менән формаһында ла, ваҡиға һәм тойғоларҙы образлы һүрәтләүҙең алымдарында ла үҙгәрештәр булды.

Матур әҙәбиәт стиленең эпик һәм поэтик төрҙәрендәге ҡоролош һәм алымдар айырмаһына ҡарамаҫтан, уларҙың дөйөм яҡтары ла бик күп, ә иң мөһиме — икеһенең дә тел сараларын эстетик яҡтан файҙаланыуында. Прозалағы кеүек үк, поэтик әҫәрҙәргә хис-тойғоноң юғарылығы, динамизм, тел сараларының күп төрлөлөгөн ҡулланыу хас. Поэтик әҫәрҙәрҙә лә төрлө функциональ стилдәрҙең алымдары ҡулланылырға мөмкин.

### *Публицистик стиль үҙенсәлектәре*

Ләкин Ленин
　　　　күптән йәшәй ине
«Эшсе синыф» тигән һүҙҙәрҙә,
Подпольела, забастовкаларҙа,

[13] Мирас С. Башҡорт әҙәбиәте хаҡында // Белем. 1925. № 7—8. 36-сы бит.
[14] Белем. 1925. № 2.
[15] Яңы юл. 1926. № 1.

Стачкаларҙа,
лəкин телдəрҙə
Ошо исем,
тик йыл ярым үткəс,
Иң-иң тəүге тапҡыр алыныр,
«Таң»да ҡалҡҡан
яҡты йондоҙ булып
Мəңге һүнмəç өсөн ҡабыныр. (*Р. Ниғмəти.*)

*Халыҡ һөйләү телмəренең үҙенсəлектəре*

Монтер Морат йоп-йомшаҡ атлап ҡына
Йөрөп ята, ҡырын тейəп саҡ ҡына.
Тегендəрəк комбайнсы Баҙамша,
Ҡүҙ бəйлəп, көршəк ватырға маташа.
Халыҡ шуны ҡылып тора тамаша.
Ҡонюх Шəриф тоҡ эсендə юрғалай,
Бағанаға менеп бара бер малай,
Ə «кəнсə»лə счет һалыусы Мырҙабай,
Ҡəпəс болғап, ҡеүəт бирə: «Йə, давай!» (*М. Ҡəрим.*)

*Халыҡ ижады үҙенсəлектəре*

Һыуһағандың телəгəне
һыу була, ти.
Аҙашҡандың эҙлəгəне
юл була, ти.
Яу килгəндə, ялман һымаҡ
боçоп ятһа,
Ир-егеттең үлгəне тап
шул була, ти. (*Х. Ҡəрим.*)

Шулай итеп, башҡа бөтə функциональ стилдəр менəн сағыштырғанда, матур əҙəбиəт стилендəге һүрəтлəү сараларының мөмкинлектəре бик киң. Хəҙерге матур əҙəбиəт стилен лингвистик йəһəттəн һүрəтлəү өсөн, башҡорт теленең бөтə стилистик үҙенсəлектəрен һанап сығырға кəрəк булыр ине.

Ғ и л м и с т и л ь. Ғилми стилдең телмəр саралары логик бəйлəнештəрҙе кəүҙəлəндереүгə буйһонған, ə фекерҙең эҙмə-эҙлелеге проблеманың ҡоролошона бəйлəнгəн. Ғилми стиль, ҡағиҙə буларак, əйтелгəн уй-фекерҙең аныҡлығы һəм яҡшы эшкəртелгəн булыуы, төп фекерҙең ныҡ нигеҙлəнеүе, синтаксик конструкцияларҙың ҡатмарлылығы, тел сараларының билдəле бер кимəлдə ҡоро булыуы менəн айырылып тора. Хəҙерге ғилми стиль революцияға тиклемге ғилми стиль элементтарынан тамыры менəн айырыла: аңлайышһыҙ һүҙ йыйылмаһы урынына һөйлəмдəрҙең төҙөклөгөн, махсус ҡатмарлаштырылған фекер урынына аныҡ ойошторолған, бер төрлө генə аңлап була торған формулировкаларҙы, ҡулланылышы һəм төшөнсəлəге буйынса күп мəғəнəле һүҙҙəр урынына ғилми яҡтан эшкəртелгəн терминологияны ҡаршы ҡуя.

Егерменсе йылдарҙа уҡ матбуғатта күп һанлы ғилми мәҡәләләр һәм айырым хеҙмәттәр күренә башлай. Яңы фәнни фекерҙе таратыуҙа ваҡытлы матбуғаттың әһәмиәте бик ҙур була. Унда төрлө темаларға арналған фәнни һәм фәнни-популяр мәҡәләләр баҫылып сыға. Ғилми проблемаларҙың киңлеген күҙ алдына килтереү өсөн, егерменсе йылдарҙа «Белем» журналының биттәрендә баҫтырылған ҡайһы бер мәҡәләләрҙең исемдәрен һанап сығыу ҙа етә: «Ауыл хужалығында химия», «Астрономия һәм аның әһәмиәте», «Ауылды техникалаштырыу», «Тәбиғәт — матдә һәм көс», «РСФСР-ҙа хөкөм эше», «Тау байҙығы эштәү иректеге», «Иген ҡоротҡостары», «Ирекле хеҙмәт һәм һаулыҡ һаҡлау эштәре», «Башҡорт тарихының киҫәктәре», «Башҡорт әҙәбиәте хаҡында», «Башҡорт телен тарихса төпсөү» һ. б.

Башҡорт әҙәби теленең яңынан формалашыу процесын кисергән ғилми стилдәге иң ауыр мәсьәләләрҙең береһе булып терминологик фондтың етмәүе торҙо. Электән ҡулланылып килгән ғәрәп һәм фарсы сығышлы терминдарҙың күп өлөшө киң массалар өсөн аңлайышһыҙ була йәки яңы төшөнсәләргә тулыһынса тап килмәй. Ошоноң арҡаһында ҡайһы бер авторҙар был ауыр хәлдән рус телендәге терминдарҙы ҡулланыу нигеҙендә ҡотолмаҡ булдылар. Улар яҙған мәҡәләләрҙә ғәрәп графикаһындағы текст эсендә рус шрифтында бирелгән терминдар бик күп. Бындай терминдар ҡайһы ваҡыт тәржемә менән аңлатыла йәки шул көйөнсә бирелә: «Рустарҙа ахырғы хәрефтең ташланыуын, беҙҙә ташланмауын падеж юҡлыҡҡа сәбәп итеп күрһәтеү ҙә яңылыш. Рустарҙа һүҙҙәрҙең енес (род) менән үҙгәреүе атау төшөмдә (төп килештә — Э. И.) килгән һүҙҙәрҙең дә бер окончание менән үҙгәреүен теләй. Шуға рус теленең был айырмаһын имен[итель-ный] пад[ежы]ның формаһы тип кенә ҡарарға кәрәк»[16]. Икенсе бер төркөм авторҙар, ғәрәп һәм фарсы сығышлы терминдарҙы ҡулланып, иҫке тардицияға эйәреп яҙғандар: *«Иҡтисади* хәлебеҙ һәм хужалығыбыҙҙың күтәрелә барыуы ошо һуңғы йылдарҙа беҙҙең мәдәни тереклегебеҙгә тәьҫир итеп, беҙҙең араға бик күп төрлө ғилми һәм мәдәни мәсьәләләр килтереп тыуҙырҙы. Алар: һуңғы йылдарҙағы әлифбанан башлап, әҙәби тел, төп тел, шиүә мәсьәләләрелер. Шулар тураһында үҙ арабыҙҙа булған талаш-тартыштар, һис шикһеҙ, алар хәҙерге дәүерҙең талабы буйынса, хужалыҡ һәм иҡтисади шәраитебеҙ үҙгәреү менән, ғилми, мәдәни үҫергә ынтылыуыбыҙҙан килеп сыҡҡан нәтижәләрелер»[17].

Терминологик лексиканың етешмәүе белем өлкәлеренең бөтәһендә лә һиҙелә. Башлыса башҡорт ерлегендә генә терминдар яһауға ынтылыштар ҙа була. Ваҡыт-ваҡыт журнал биттәрендә уҡыусыларға йүнәлтелгән ярҙам һорау -мөрәжәғәттәре баҫыла. Бына уларҙың береһе: «Яңы юл» журналы уҡыусыларҙан үтенес.

---

[16] Алпаров Ғ. Беҙҙең телебеҙҙә падеж бармы, юҡмы? // Белем. 1925. № 3—4.

[17] Мирас С. Беҙҙә төп тел, шиүә мәсьәләһе // Белем. 1927. № 12.

Журнал идараһына ебәрһәләр ине. *«Ҡаты ҡышҡа ҡоноу кәрәк, буръяҡ һыуға тоноу кәрәк»* тигән мәҡәлдәге «ҡоноу»ҙы нисек тип төшөнөү кәрәк? Мәғәнәһе ни икән? Шулай уҡ: *истиғмал, тәьҫир, ғәйри тәбиғи, әһәмиәт, фажиғә, тәржемә хәл, мәсьүл, табиғи ваҡиға, махсус* тигән һүҙҙәр урынына саф үҙ һүҙҙәр генә юҡ микән? Булһа, шуңа әһәмиәт биреп, яҙып ебәреүселәр булһа, яҡшы булыр ине. *Икәй-тикәй, һанат, сәкән, кәрешкә, ҡорағы, арғыл, тарғылт, лыуайыр, талып ҡалыу, таңыҡһыу, һөрән, көлөк, саруа, тәпән, ырам, ырамды, өпе* тигән һүҙҙәрҙе нисек тип аңдау кәрәк? Был һүҙҙәр башҡорттар араһында һөйҙәшкәндә һөйҙәнә һәм хикәйә (ҡарһүҙ)-иртәгеләрҙә осрай. Мәғәнәләрен аныҡ белеп булмай. Шуларҙы белеүселәр мәғәнәһен ниндәй урында истиғмал ителгәнлектәрен миҫалдары менән «Яңы юл»[ға ебәрһендәр ине] [18].

Фәнни һәм башҡа терминдарҙы юлға һалыу буйынса күп кенә ынтылыштар булды (был турала III главаны ҡарағыҙ), ләкин башҡорт терминологияһының системаһында нығынһын өсөн улар шымарырға, йәғни ғилми һәм фәнни-популяр баҫмаларҙа, телмәрҙәрҙә йыш ҡулланылырға тейеш ине. Башҡорт теленең фәнни терминологияһы тик актив ҡулланыу процесында, күп һикәлтәле үҙгәрештәр кисереп, ваҡыт һынауын үтеп кенә формалашты һәм 50-се йылдарҙа ғына стабилләште.

Яңы типтағы ғилми стиль барлыҡҡа килгән осорҙоң башында ике ҡапма-ҡаршы күренеш күҙәтелде: бер яҡтан, ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән терминдар, ауыр аңлайышһыҙ әйтемдәр менән сыбарланған стилде һаҡларға тырышыу; икенсе яҡтан, ғилми стилдең алымдарын аңлы рәүештә ябайлаштырыу, йәнле халыҡ һөйләү телмәренең элементтарын индереү, махсус рәүештә булған фәнни терминдарҙы ҡулланмаҫҡа тырышыу, ҡулланғанда ла, уларҙы һөйләү формаһына яҡынлаштырыу. Миҫал өсөн түбәндәге ике өҙөктө килтерергә була: «Был ҡарар *шуралар жөмһөриәттәренең* тау эштәре *вә сәнғәте* алға китеүенә ҙур сәбәп буласаҡ, тау байҙығы эштәүҙә иркенселек биреү *шуралар жөмһөриәттәренең иҡтисади* юлда аттаған яңы *вә* ҙур аҙымдар алыр. Сөнки патша Россияһында был эшкә иркенселек юҡ ине. Шуның өсөн дә Россияның бик күп ерҙәре *иҡтисади* яҡтан тикшерелмәгән *вә* файҙаланылмай ятҡан һәм шуның арҡаһында Россияның тау эштәре *вә* был *сайәдә* дөйөм *иҡтисади* эштәре күп артҡа ла ҡалған» [19]. «Үҫемлек өсөн бик кәрәкле булған тағы ла бер нәмә бар. Әгәр ул ерҙә аҙ булһа, орлоҡ ябыҡ һәм ас була, ул *нәрһә* калийҙыр. Ул калий маддәһе (калийная соль, сернокислый калий) тоҙҙарҙа һәм көлдә барҙыр. Ерҙе ябай тиреҫ менән яңыртыу файҙалы булһа ла, аның көсө *кимаяуи* тоҙҙарға ҡарағанда бик аҙҙыр: мәҫәлән, *100 пот* тиреҫтә яртышар пот самаһы азот һәм калий, 9 ҡаҙаҡ самаһы ғына фосфор кислотаһы була» [20].

Башҡорт әҙәби теленең ғилми стилендә аҡрынлап уны башҡа

---

[18] Яңы юл. 1923. № 1. 43-сө бит.
[19] Яҡты юл. 1923. № 7—8. 13-сө бит.
[20] Белем. 1924. № 12. 41-се бит.

стилдәрҙән айыра торған, үҙенә генә хас алымдары һәм саралары барлыҡҡа килә башлай.

Хәҙерге ғилми стилдең абстрактлығы һәм фекер эҙмә-эҙлелегенән сыҡҡан иң үҙенсәлекле һыҙаттары булып дөйөмлөк һәм логик тәртип тора. Ғилми стилдең иң төп билдәләренән предикатив һәм терминологик мәғәнә тапҡырлығы, бер мәғәнәлелек, объективлыҡ, шулай уҡ һөйләмдәрҙең ҡоролоғо, сағыу образлылыҡтың булмауы, хис-тойғоноң йәшеренлеге һаналалар. Ҡонкрет ғилми хеҙмәттәрҙә йәки сығыштарҙа был үҙенсәлектәр, темаға, жанрға, формаға, ситуацияға йәки сығыштың маҡсатына, авторҙың шәхси һыҙаттарына ҡарап, төрлөсә сағылыш ала.

Ғилми стилдең үҙенсәлеге һәм төп билдәләре, уны башҡа стилдәр, мәҫәлән, матур әҙәбиәт стиле менән сағыштырғанда, бигерәк тә асыҡ сағыла. Әгәр ғилми стилдә метафоралар, дөйөм тел һыҙаты алып, элекке хис-тойғо биҙәктәрен юғалтһа (биологияла: *таж япрағы, һеркә һибелеү, таҡыялы үлән, күгәрсен күҙе, шайтан таяғы;* географияла: *йылға ҡултығы, тау мороно, шишмә тамағы, ҡалҡыу итәге* һ. б.), матур әҙәбиәт стилендә улар окказиональ күренеш булалар (*ярһыу уйҙар, осло ҡәләм, сәнскеле һүҙ, моңһоу тәбиғәт, төпһөҙ хыял* һ. б.) һәм образлылыҡты булдырыу функцияһын башҡаралар. Матур әҙәбиәт стилендә ғилми стилгә ҡарағанда ҡылымдарҙың ҡулланылыу йышлығы 2—3 тапҡырға юғарыраҡ, сөнки ҡылымдар ярҙамында образлы конкретлаштырыуға ирешеүе еңелерәк, ҡылымдарҙы киң ҡулланыу уҡыусының ваҡиғаны йәнле күҙ алдына килтереүенә нығыраҡ булышлыҡ итә. Әгәр матур әҙәбиәт стилендә ҡылым категорияларының бөтә мөмкинлектәре лә тулы файҙаланылһа, ғилми стилдә ҡайһы бер ҡылым формаларын ҡулланыу мөмкин дә түгел. Ғилми стилдең ситләтелгән дөйөм характерҙа булыуы ҡылымдарҙың эйәһеҙ йәки ваҡытҡа мөнәсәбәте булмаған формаларын йышыраҡ ҡулланыуға килтерә. Былар түбәндәге миҫалдарҙа асыҡ күренә: *Ошо маҡсатҡа ярашлы итеп, һүҙлектә үҫемлектәрҙең төҙөлөшөнә, тереклек итеү шарттарына, тереклек рәүешенә, шулай уҡ үҫемлек төрҙәренә һәм систематикаға ҡараған териндарҙы мөмкин тиклем тулыраҡ алырға тырышылды һәм, элекке баҫмаларҙан айырмалы рәүештә, күпселек үҫемлек исемдәренә фәнни аңлатмалар бирелде* (С. Йәнтүрин). *Совет әҙәбиәт ғилеме алдында торған бындай ҙур бурыстар, бығаса йәшәп килгән һәм күнегелгән алымдар эсендә генә ҡалмайынса, яңысараҡ, киңерәк тикшереү методтарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы һорай* (Ғ. Хөсәйенов). *Яңы осор поэзияға яңы талаптар ҡуйған* (Ғ. Ҡунафин). *Ғәзәл эволюцияһының барлыҡ этабында ла мөхәббәт тематикаһы уның асылын билдәләгән* (Ғ. Ҡунафин). *Текстология үҙ эшендә, күренеүенсә, палеография, герменевтика кеүек ярҙамсы фәндәргә ныҡ таяна* (Ғ. Хөсәйенов).

Башҡорт әҙәби теленең ғилми стиле күберәк ситләтелгән дөйөмлөк мәғәнәһенә эйә булыусы һәм айырым бер ваҡытҡа бәйләнеше булмаған III заттағы ҡылым формаларын йышыраҡ ҡуллана. Ә I заттағы ҡылым формалары, ҡағиҙә булараҡ, яҙылғандың объективлығын күрһәтеү йәки дөйөмләштереүҙе көсәйтеү

өсөн ҡулланыла: *һорауға яуап эҙләп, беҙ иң элек араға ҡыҫтырылған «ғибрәт һүҙҙәрен» ҡарайбыҙ... Хәҙер шуныһына иғтибар итәйек...* (Н. Зарипов). Ғилми стилгә дөйөмләштереүҙе көсәйтеүсе инфинитивлы һүҙбәйләнештәр ҙә хас: *әйтергә кәрәк, өҫтәргә ҡала, күрһәтергә кәрәк, тип аңларға ярамай, асыҡларға мөмкин* һ. б.

Ғилми стилдә шулай уҡ айырым фекерҙәрҙе һәм уларҙың өлөштәрен берләштереүсе инеш һүҙҙәр ҙә актив ҡулланыла: *Халыҡ поэзияһындағы оҙон йыр үлсәүенән килгән ритмика ла шиғырҙа һөйләү, мөрәжәғәт интонацияһына тартылыуы менән яңы оттенок ала, тимәк, шиғри форма ла яңы йөкмәткегә, яңы поэтик образға йәтешле эске бер яңырыш кисерә* (Ғ. Хөсәйенов). Бындай инеш һүҙҙәргә *мәҫәлән, йәғни, күренеүенсә, әйтәйек, шулай итеп, беҙҙең ҡарамаҡҡа* һымаҡ һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҡарай.

Ғилми стилдең иң сағыу һәм үҙенсәлекле билдәләренең береһе булып фекерҙең һыҙыҡ өҫтөнә алынған бәйләнешле һәм логикалы булыуын күрһәткән әҙер конструкцияларҙы йәки әйтемдәрҙе ҡулланыу тора: *юғарыла әйтелгәнсә..., шуны билдәләп үтәйек..., хәҙер түбәндәге мәсьәләгә күсәйек..., ...билдәләп үтергә мөмкин, тағы ла миҫал килтерергә була..., әле һөйләгәндәрҙең барыһы ла..., килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, был мәсьәләгә килһәк, һанап кителгәндәргә ҡарағанда..., билдәле булыуынса..., юл ыңғайында шуны билдәләп үтергә мөмкин..., икенсе төрлө әйткәндә..., ошо әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып..., хәҙер шуныһына иғтибар итәйек...* һ. б. Миҫалдар: *Ошо әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып, Аҡмулла әҫәрен текстологик яҡтан тикшереүҙең ҡайһы бер принциптарын билдәләргә мөмкин* (Ә. Вилданов). *Ошоларҙы иҫәпкә алһаң, һорау тыуа: Әхмәт Уразаев-Ҡормаши, ихтимал, тап бына беҙҙең Баһауи телгә алған фарсы телендәге «Буҙъегет» китабынан тәржемә иткәндер?* (Н. Зарипов). *Шуны ла билдәләп үтәйек: януар һәм ҡош-ҡорт атамаларынан исем яһалыу кешеләрҙең элек һәр хайуанға табыныуы... һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан* (Т. Ҡусимова). *Бөтәһен йыйып шуны әйтергә мөмкин: етмешенсе йылдарҙағы башҡорт прозаһы, бөтә совет әҙәби процесына хас үҫеш тенденциялары нигеҙендә күтәрелеш, яңырыш кисерә* (Ғ. Хөсәйенов). Ғилми стилгә тағы ла тикшеренеүҙең айырым өлөштәрен бәйләп тороусы айырым һөйләмдәрҙең дә ҡулланылышы хас: *Бер һүҙ аҫҡас, фекерҙе хәҙерге башҡорт повестарының жанр үҙенсәлектәре, яҙыусыларҙың был өлкәләге маһирлыҡтары һәм айырым кәмселектәре мәсьәләһенә лә ялғап китәйек* (Ғ. Хөсәйенов).

Ғилми стилдәге бер ни тиклем абстрактлыҡ һәм дөйөмлөк ундағы экспрессивлыҡты һәм эмоциональлекте тулыһынса юҡҡа сығармай. Теләһә ҡайһы телмәр, шул иҫәптән ғилми стилдәге телмәр ҙә, образлы, тәьҫирле булырға тейеш, сөнки башҡаса ул үҙенең төп маҡсатына — коммуникативлыҡҡа, дөрөҫ ҡабул ителеүлеккә, яҡшы аңлайышлы булыуына яуап бирмәйәсәк. Экспрессивлыҡ һәм эмоциональлектең булыуы, башлыса, автор шәхесенә, шулай уҡ фән тармағына һәм жанр үҙенсәлегенә бәйле. Мәҫәлән, полемик, дискуссион характерҙағы хеҙмәттәрҙең, шулай уҡ фән-

ни-популяр әҙәбиәттең төп теманан ситләшкән айырым өлөштәрс, гәҙәттә, хис-тойғоға мул була. Шулай ҙа ғилми стилдәге хис-тойғо, әйтәйек, матур әҙәбиәт стилендәге хис-тойғонан сифаты менән айырыла. Әгәр ғилми стилдә хис-тойғо эҙмә-эҙлелекте йәки иҫбатлауҙы көсәйтһә, матур әҙәбиәт стилендә һынлы образ тыуҙырыу өсөн хеҙмәт итә.

Ғилми телмәрҙәге экспрессивлыҡ һәм эмоционаллек шулай уҡ фән тармаҡтарының да үҙсәнлектәре менән бәйле: улар, әйтәйек, математика менән лингвистикаға ҡарағанда әҙәбиәт ғилеме менән тарих фәнендә күберәк һәм асығыраҡ сағыла.

Башҡорт әҙәби теленең ғилми стилдәре араһында иң юлға һалынған һәм үҫешкән төрө булып бай традициялы әҙәбиәт белеме һанала. Шул уҡ ваҡытта, фәндең башҡа төрҙәренән айырмалы рәүештә, әҙәбиәт белеме буйынса хеҙмәттәр башҡорт телендә ижад ителеп, күбеһенсә башҡортса баҫтырылып сығарылалар, сөнки улар башҡорт телендәге әҙәбиәткә арналып, белгестәргә һәм киң ҡатлам уҡыусыларға, шул иҫәптән буласаҡ яҙыусы һәм шағирҙарға ла, арнала. Бөгөнгө башҡорт әҙәби тәнҡите һәм әҙәбиәт белеме хәҙерге әҙәби процесҡа туранан-тура һәм бик актив йоғонто яһай. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте үҙенең яулаған уңыштары менән билдәле бер кимәлдә әҙәбиәтселәрҙең етди һәм тәрән ғилми тикшеренеүҙәренә лә бурыслы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә үҫешкән ғилми стиль төрҙәренең тағы ла береһе — лингвистика. Башҡорт телселәре башҡорт теленең төрлө проблемаларына арналған тәрән йөкмәткеле хеҙмәттәр яҙалар һәм рус телендә лә, башҡорт телендә лә баҫтырып сығаралар.

Фәндең башҡа тармаҡтарына ҡараған ғилми хеҙмәттәр башлыса рус телендә ижад итела һәм баҫтырып сығарыла. Был хәлде яҡшы аңларға була: башҡорт фәне — бөтә совет фәненең айырып алғыһыҙ бер өлөшө, һәм башҡорт телендә генә ғилми хеҙмәттәр тыуҙырыу уның башҡа республикалар, бөтә союз, донъя фәндәре менән бәйләнешен өҙөр ине, ә был үҙ нәүбәтендә, фәнни-техник прогрестан артта ҡалыуға килтерер ине. Күпселек фән тармаҡтары буйынса башҡорт телендә башлыса урында әһәмиәтле булған проблемаларға арналған фәнни-популяр китаптар һәм мәҡәләләр сығарыла.

П у б л и ц и с т и к а  с т и л е. Публицистика стиле үҙенең ҡатмарлы һәм тармаҡлы булыуы, стиль-ара күренештәрҙең төрлөлөгө менән айырылып тора. Публицистика стиленең политик-агитация (өндәмәләр, прокламациялар, төрлө саҡырыуҙар), политик-идеология (партия документтары), әҙәби публицистика (памфлеттар, очерктар, һүрәтләмәләр), газета стилдәре һымаҡ күп төрҙәре бар. Публицистик стилдең бындай төрҙәре жанр үҙенсәлектәре, айырым алымдарҙы ҡулланыуҙары буйынса тағы ла ваҡыраҡ төркөмдәргә бүленә.

Башҡорт әҙәби телендәге публицистика стиленең формалашыуы күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе М. Өмөтбаевтың эшмәкәрлеге менән бәйләнгән. Билдәле, уға тиклем дә айырым әҫәрҙәрҙә, документтарҙа был стилдең үҙенсәлектәре сағылыш алған. Бы-

ның асыҡ миҫалы булып XVIII быуаттағы ҡомартҡы — Батыршаның императрица Елизавета Петровна исеменә яҙылған хаты тора. Был хаттағы күп кенә юлдар публицистикаға хас булған патетика, хис-тойғо, зәһәр көләү, әсенеү һымаҡ алымдар менән һуғарылған. Шулай ҙа был тарихи һәм әҙәби ҡомартҡыны беҙ тулыһынса публицистик әҫәр тип ҡарай алмайбыҙ.

Публицистика элементтары Салауат Юлаевтың фармандарында, хаттарында, XIX быуатҡа ҡараған башҡа төр әҙәбиәттә лә — шәжәрәләрҙә йәки әҙәби әҫәрҙәрҙә булһынмы, хаттарҙа йәки официаль документтарҙа булһынмы — бер ни тиклем сағылыш алған. Ләкин үҙенең генә махсус саралары, алымдары, тел үҙенсәлектәре булған айырым әҙәби стиль рәүешендә ул тик XIX быуаттың икенсе яртыһында ғына формалаша алған.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең тыуыу осорона публицистика үҙенең, күп йыллыҡ булмаһа ла, юлға һалынған традициялары менән килде. Был традицияларҙың үҫешендә «Урал» газетаһының, «Ҡарсыға» һәм «Сүкеш» журналдарының әһәмиәте ҙур булды. Октябрь революцияһының тәүге йылдарында матбуғат эшенең, шул иҫәптән ваҡытлы матбуғаттың, киң үҫеше, радио һәм киноның алға китеүе нигеҙендә публицистика стиле яңы үрҙәр яуланы. Публицистика стиленең алғы планға сығыуына шулай уҡ замандың революцион һулышы; халыҡтың политик, экономик һәм социаль тормошондағы һынылышлы үҙгәрештәр; бөтә донъя күләмендә аһәң алған тәүге социалистик илдең тормошондағы әһәмиәтле ваҡиғалар — граждандар һуғышы, наҙанлыҡты бөтөрөү, илдең политик һәм хужалыҡ ҡоролошон үҙгәртеү, тәүге биш йыллыҡтар һымаҡ күренештәр нығ йоғонто яһаны.

Егерменсе йылдарҙа уҡ публицистика стилендәге газета-журнал жанрының бөтә төрҙәре лә тип әйтерлек киң таралыш алды. Массаларҙың белемгә булған тайпылышһыҙ ынтылышы, ижтимағи һәм хужалыҡ эштәрендә йәнле ҡатнашлығы ваҡытлы матбуғаттың информативлығын арттырыуға яңы талаптар тыуҙырҙы. Газета һәм журнал биттәрендә «Тәүге хәбәрҙәр», «Хәбәрҙәр босмағы», «Ваҡ-төйәктәр» һымаҡ исемдәр аҫтындағы рубрикаларҙа илдәге һәм донъялағы тормошто сағылдырған ҡыҫҡа информациялар урынлаштырыла. Бына шундай мөйөштәрҙең берәүһендә генә урынлаштырылған хәбәрҙәрҙең тематикаһы: «Һауала осоу нисек алға бара?», «7000 йыллыҡ ғибәдәтханә», «Һуҡырҙарға күҙ ултыртыу», «Почта күгәрсене», «2 ярым сәҡырымлыҡ поезд», «45 градуслыҡ температура», «Йәнлек аҫырау», «Америкала газета-журналдар», «Күпме автомобиль бар?» [21].

Егерменсе йылдарҙа уҡ публицистика стиленең һүрәтләмә, информация, репортаж, очерк һымаҡ жанрҙары яҡшы уҡ үҫеш алды. Уларҙа бөгөнгө публицистика өсөн дә хас булған массалыҡ, аңлайышлылыҡ, дөйөмлөк, документаллек, асыҡ маҡсатлылыҡ, тәьҫирлелек көсө, хис-тойғололоҡ һымаҡ һыҙаттар яҡшы сағылыш тапты.

---

[21] Яңы юл. 1923. № 5—6. 49—50-се биттәр.

Үҙенең тәьҫирлелек көсө, сағыштырыуҙарҙың тоғролоғо һәм образлылығы менән, аңлайышлы булыуы менән Д. Юлтыйҙың публицистик мәҡәләләре айырылып торҙо. Уларҙа автор йәмғиәттең алға булған ынтылышына аяҡ салыусы наҙанлыҡ, артталыҡ, дини йолалар, мещанлыҡ һымаҡ кире күренештәрҙе фаш итте. «Тарихи факт. Уны кире ҡағыу, көслө двигатель маховигына бармаҡ тығып туҡтатырға тырышыу менән бер дәрәжәлә көлкө булыр ине. Ләкин әле шул фактҡа кире йөҙҙәре менән тороусылар юҡ түгел. Беҙ үҙебеҙҙең хәҙерге ысынбарлығыбыҙҙа бындай күренештәрҙе бик йыш осратабыҙ», — тип яҙҙы ул үҙенең күп һандағы мәҡәләләренең береһендә [22].

Ул йылдарҙағы репортаждарға документаллек, ысынбарлыҡты йәнле һәм дөрөҫ итеп сағылдырыу хас булды. Миҫал итеп «Ҡыҙыл лагерҙа» тигән репортаждан өҙөк килтерергә мөмкин: *«— Йә, бик ҡыйын түгелме?» «— Бында тиһегеҙме?» «— Эйе!» «— Күрәһегеҙ бит. Бында бошонорға ваҡыт юҡ. Занятиенан ҡайтабыҙ. Политчас була. Кис менән театр, кино, уйын, көндөң үткәне беленмәй ҙә ҡала». «— Ашау нисек?» «— Бында ҡалалағы кеүек. Тәрилкә менән генә ашайбыҙ». «—Уҡыталармы?» «— Уҡыталар. Беҙ ауылда уҡыған юҡ ине. Бигерәк тә бында яңы әлеп менән уҡыу беҙҙе ҡыҙыҡһындыра». «— Нисек, яңы әлепте төшөнөп буламы?» «— Бик еңел. Тик бына китаптар ғына етешмәй. Китап күберәк булһа, ауылға ла алып китер инек». «— Кейем ҡалай?» «— Ауылдан кейеп килгән алам-һаламдарҙы өҫтән һалып аттыҡ та бына барыбыҙ ҙа бер төҫлө булдыҡ...» — Шулайтып беҙҙең күңелле әңгәмә барған ваҡытта звонок булды. Барыһы ла уҡ кеүек атылып рәткә теҙелделәр»* [23].

Егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа очерк жанры ла яҡшы уҡ үҫеш ала. Очерктарҙа ауыл тормошо, ауыл хужалығы, завод, фабрикаларҙағы хеҙмәт процесы яҡшы сағылдырыла. Йыш ҡына очерк жанрына яҙыусы һәм шағирҙар ҙа мөрәжәғәт итә. Был яҡтан Али Карнайҙың «Һине машина көтә, Мария!» тигән очеркы бик үҙенсәлекле. Очерктың башында уңышһыҙлыҡҡа тарыған Марияның кисерештәре һүрәтләнгәндә, минор тон өҫтөнлөк итһә, уның финалы мажор аккордта тамамлана: *«Ә тышта йәй, ҙур асыҡ тәҙрәнән күрше баҡсалағы сирень сәскәләре күренәләр. Аяҙ зәңгәр күктә йәй ҡояшының көмөш нурҙары уйнайҙар. Вокзал яғынан көслө паровоз тауыштары ишетеләләр. Йәйге шәһәр шаулай — шәһәр көлә, печатник ҡыҙ Мария ла йылмая, уның асыҡ аҡ йөҙөндә күңелле йәйҙең нурҙары уйнайҙар — шундай матур йылмайып эшләй ул... Көл әйҙә, Мария, гөрөлдәгеҙ машиналар, шаула шәһәр, шаула машиналар шәһәре!..»* [24] Очерк жанрының бөгөнгө ҡаҙанған бейеклектәренән сығып ҡарағанда, бәлки, ул йыл-

---

[22] Д. Юлтый. Тарих двигателе алдында // Белем. 1925. № 5. 28-се бит.
[23] Яңылыҡ. 1929. № 11—12. 13-сө бит.
[24] Карнай А. Машина көтә һине, Мария! // Яңылыҡ. 1929. № 11—12. 8—11-се биттәр.

дағы очерктарҙа үтә ябайлыҡ, бер планлылыҡ һымаҡ күп кенә етешһеҙлектәрҙе лә табырға мөмкин булыр ине, ләкин эҙләнеүҙәр осоро, публицистика стиленең яңы формалашып килгән ваҡыты өсөн улар заман талаптарына яуап бирә ине.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең публицистика стиле Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында артабан үҫеш ала. Күп кенә башҡорт яҙыусылары һуғышҡа китә. Республика һәм фронт матбуғатында совет халҡының һуғыш майҙанындағы һәм тылдағы ҡаһарманлығын сағылдырған очерктар, репортаждар, юл яҙмалары һәм портрет һүрәтләмәләре баҫылып сығып тора. Яҙыусыларҙың был осорҙа ижад иткән хикәйә һәм шиғырҙарында ла публицистика үҙенсәлектәре өҫтөнлөк ала. Бындай хикәйә һәм шиғырҙар үҙҙәренең документаль-фактик дөрөҫлөгө, дөйөмләштереүе һәм тасуири пропагандалауы менән уҡыусыларҙа совет патриотизмы, дошманға нәфрәт хистәре тәрбиәләне.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең бөгөнгө публицистикаһы яҡшы үҫешкән, тематика һәм жанр йәһәтенән күп планлы функциональ стилдәрҙең береһенә әүерелде. Телевидениеның алға китеүе публицистиканың функциональ мөмкинлектәрен киңәйтте: телевизион репортаждар, һүрәтләмәләр, очерктар, хәбәрҙәр, һуңғы яңылыҡтарҙы тапшырыу — публицистика стиленең юлға һалынған жанрҙарына яңы нескәлектәр өҫтәне. Бигерәк тә публицистика стиленең газета өлкәһе нык үҫеш алды. Хатта күп кенә тел белгестәре һәм әҙәбиәтселәр газета телмәрен айырым функциональ стиль итеп тә ҡарайҙар. Газета телмәренең иң төп функцияһы — информация биреү һәм пропаганда. Газетаның үҙенә генә хас жанрҙары барлыҡҡа килде: баш мәҡәлә, репортаж, интервью, информация һ. б. Тик һуңға табан ғына был жанрҙар радио, кино, телевидение өлкәләрендә сағылыш таба башланылар. Шулай ҙа газета өсөн генә хас булған үҙенсәлектәр һаман һаҡланып килә. Публицистика стиленең дөйөм жанрҙарынан һаналған очерк менән фельетон газетала үҙе бер төрлө сағылыш таба: газета очеркы, мәҫәлән, дөйөм әҙәби очерктан, газета фельетоны журнал фельетонынан ҡайһы бер алымдары һәм саралары менән айырыла. Бынан тыш, газета фән, техника, экономика һымаҡ тармаҡтарҙың төрлө өлкәләрен популярлаштыра, һәм ошо нигеҙҙә газета телендә фәнни-популяр йәки фәнни-публицистик стиль һымаҡ айырым бер төр барлыҡҡа килә.

Публицистика стиле ғилми һәм матур әҙәбиәт стилдәренең киҫешендә тора һымаҡ, һәм был бигерәк тә уның газета төрөндә асыҡ сағылыш таба. Ләкин был газета жанрҙарының бөтәһендә лә бер төрлө түгел: мәҫәлән, баш мәҡәләләр, теоретик, фәнни-популяр мәҡәләләр, күҙәтеүҙәр, рецензиялар күп яҡтары менән ғилми стилгә яҡын, ләкин уларҙа публицистик, хис-тойғо төҫмөрҙәре өҫтөнлөк ала; очерктар, һүрәтләмәләр, репортаждар, фельетондарҙың үҙенсәлектәре матур әҙәбиәт стиленә яҡын, тик уларҙа ла публицистик һыҙат өҫтөнлөк ала.

Газета телмәренең үҙенә генә хас лингвистик билдәләре бар, һәм улар газета телмәрен башҡа бөтә төр телмәрҙәрҙән айырып

торалар. Мәҫәлән, газетала тыуған һәм уның өсөн генә хас һүҙҙәр — «газетизмдар» бар: *йәйелдереү, ирешеү, ҡаҙаныш, ныҡышмалы, күрһәткес, илһамлы, маяҡ, хеҙмәткәр, башланғыс, игенсе, девиз, вахта, новатор* һ. б.

Публицистиканың, шул иҫәптән газета телмәренең дә, бер үҙенсәлеге булып һүҙҙәрҙе яңы, күсмә мәғәнәлә, яңы бәйләнештә ҡулланырға ынтылыу тора, һәм улар әкренләп бер ҡалыпҡа, штампҡа әүерелә. Мәҫәлән, *хеҙмәт* һүҙе менән яһалған күп кенә һүҙбәйләнештәр башлыса газета телмәренең үҙенсәлегенә әүерелде: *хеҙмәт вахтаһы, хеҙмәт илһамы, хеҙмәт абруйы, хеҙмәт климаты, хеҙмәт мәктәбе, хеҙмәт парады, хеҙмәт пафосы, хеҙмәт старты, хеҙмәт романтизмы, хеҙмәт поэзияһы, хеҙмәт рапорты, хеҙмәт аҙымы, хеҙмәт аҡһаҡалы, хеҙмәт йылъяҙмаһы, хеҙмәт үрҙәре, хеҙмәт почеркы* һ. б. Бындай ҡалыптарҙың ҡайһы берҙәре, газета биттәрендә тыуып, әҙәби телдең дөйөм үҙсәнлегенә лә әүерелеп китеүе мөмкин. Газетала табылған берәй уңышлы эпитет, образлы сағыштырыу, уңышлы күренгән фразеологик берәмек тиҙ генә таралып, газета клишеһына әүерелеп китә ала: *аҡ алтын* (мамыҡ), *ҡара алтын* (нефть), *төҙөлөш икмәге* (кирбес), *тимер айғыр* (трактор), *күк ыласыны* (летчик), *татлы тамыр* (сөгөлдөр) һ. б.

Газета публицистикаһының һүҙьяһалыш үҙенсәлектәрендә, бигерәк тә ҡайһы бер һүҙ яһаусы ялғауҙарҙың, киҫәксәләрҙең ҡулланылыуында, үҙенә генә хас билдәләр бар. Газета телмәрендә, мәҫәлән, түбәндәге аффикстар бик актив ҡулланыла: *-ыш//-еш (ҡаҙаныш, кәүҙәләнеш, көсөргәнеш), -лы//-ле (ныҡышмалы, илһамлы, һәләкәтле), -сы//-се (игенсе, ураҡсы, көрәшсе), -лыҡ//-лек (хеҙмәттәшлек, кәмселек, ҡатнашлыҡ), -сылыҡ//-селек (игенселек, именселек, күпселек), -ҡыс//-кес (күрһәткес, этәргес, башланғыс), -маҫ//-мәҫ (ҡаҡшамаҫ, һүнмәҫ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ)* һ. б.

Газета мәҡәләләренең исемдәре бик үҙенсәлекле. Уларға күҙгә ташланып тороу, ғәҙәти булмаған бәйләнеш, экспрессивлыҡ, рекламалыҡ хас, сөнки улар уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итеп, баҫтырылған материалды уҡырға саҡырып торорға тейештәр. Бына республика газетаһы «Совет Башҡортостаны»нан алынған мәҡәлә исемдәре: *«Һаумы, фестиваль!», «Яңы икмәккә — йәшел юл!», «Бөтәһенән элек — кадрҙар», «Башҡортостан БАМ-ы»* (Белорет — Шишмә тимер юлы төҙөлөшө хаҡында), *«Тынғыһыҙ эҙәрмәндәр», «Йөрәк ҡушыуы буйынса», «Яуапһыҙлыҡ бәләһе», «Ваҡыт талабы», «Һөт сифаты — ферма көҙгөһө», «Әйтер һүҙ бар», «Хәрәкәт — йәшәү сығанағы», «Йәйге көн йыл туйҙыра», «Икмәк — бөйөк ижад».*

Газета телмәрендә ғилми, ижтимағи-политик терминология, төрлө белем һәм профессия өлкәһенә ҡараған махсус һүҙҙәр, яңғыҙлыҡ исемдәр (фамилиялар, географик атамалар, учреждение һәм машина исемдәре) ҡулланыла, шулай уҡ төрлө ҡыҫҡартылған һүҙҙәр, аббревиатуралар киң таралған: *үҙешмәкәр, партия-хужалыҡ активы, Аҙыҡ-түлек программаһы, хәрби-политик союз, КТУ-10 арбаһы, ЖРБ-4 сапҡысы, КСК-100 агрегаты, ГВК-6 тырмаһы* һ. б. Бындай үҙенсәлек газетаның төп функцияһы — инфор-

мативлыҡҡа бәйле. Информативлыҡ йыш ҡына тел ҡоролоғона, ғәҙәти булмаған стиль алымдарына килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, түбәндәге һөйләмдәр башлыса газета биттәрендә генә йәшәй һәм осрай ала: *Алты көн эсендә сәхнә оҫталары дүрт меңдән артыҡ тамашасыны хеҙмәтләндерҙе. Был хеҙмәт еңеүе — партия, профсоюз, комсомол ойошмаларының, совет, хужалыҡ органдарының ҙур ойоштороу һәм масса-политик эше, социалистик ярышты киң йәйелдереү, район игенселәренең фиҙәкәр хеҙмәте һөҙөмтәһе. Күтәренке социалистик йөкләмәнең уңышлы үтәлеүендә беҙҙең дә өлөш булыуы күңелдәрҙә ғорурлыҡ тойғоһо уята.* Тик бындай ҡоро, яһалма ҡоролошло ҡатмарлы конструкцияларҙан торған, уңышһыҙ һүҙбәйләнештәр менән сыбарланған ҡайһы бер һөйләмдәрҙең башҡа стилдәргә, бигерәк тә һөйләү телмәренә үтеп инеүе — ҡыҙғаныс хәл.

Шуныһы ҡыҙыҡлы: газета стереотиптарының, штамптарының, клишеларының донъя күләмендә лә таралыу сиге юҡ һымаҡ — бер төрлө клишены иң ҙур илдәрҙәге миллионлаған тираж менән сыҡҡан газеталарҙан алып, иң бәләкәй, төпкөлдә ятҡан илдәрҙең тиражы бер-ике йөҙҙән дә артмаған газеталарында ла осратып була. Бындай стереотиптар, ғәҙәттә, бер телдәге газетанан икенсе телдәге газетаға калькалар рәүешендә күсә. Йыш ҡына ҡайһы бер телдәрҙә кәрәк һүҙҙәрҙе тәржемә итеүгә мөмкинлек булһа ла, уларҙың формаһында йәки йөкмәткеһендә милли үҙенсәлектәрҙе ҡалдырыу йәки әһәмиәтлелеген билдереү өсөн, оригиналь формалар алына. Рус телендә барлыҡҡа килгән *спутник, луноход, гласность, перестройка* һымаҡ һүҙҙәр, газеталарҙың еңел ҡулы аша үтеп, хәҙер донъя телдәренең күбеһендә яңғырай.

Шулай итеп, газета материалдарының ни тиклем күп төрлө булыуына ҡарамаҫтан, газета телмәренең үҙенә генә хас булған ҡоролош принциптарын, махсус стилистик алымдарын айырырға мөмкин.

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге публицистика стиленең башҡа төрҙәре лә ныҡ үҫеште. Хәҙер радиопублицистика, телепублицистика, кинопублицистика тигән махсус төшөнсәләр тулы хоҡуҡта ҡулланылалар, уларҙың бөтә публицистикаға хас дөйөм яҡтары менән бергә һәр береһенең үҙенә генә хас специфик алымдары ла бар.

Р ә с м и  э ш  с т и л е. Рәсми эш стиленең күп кенә жанр төрҙәре бар: кодекстар, уставтар, инструкциялар, договорҙар, приказдар, протоколдар, акттар, ғаризалар, таныҡлыҡтар, распискалар һ. б. Рәсми эш стилендәге жанр үҙенсәлектәре башҡа бөтә төр стилдәрҙекенә ҡарағанда ла үҙ-ара бер-береһенән ныҡ айырыла. Стиль-сара үҙенсәлектәре башлыса документтарҙың жанрына, тематикаһына, маҡсат-йүнәлешенә, төҙөлөшөнә бәйләнгән. Рәсми эш стилендә яҙылған һәр бер текст документ булып сығыш яһағанлыҡтан, уның төп үҙенсәлеге булып бер төрлө генә аңлауға йүнәлтелгән аныҡлығы тора. Шуға күрә лә рәсми эш стилендәге яҙыуҙарҙың алымдары күп йыллыҡ практика һөҙөмтәһендә стандартлашҡан; тотороҡло һүҙбәйләнештәр, бер үк терминдар-

ҙың ҡабатланыуы, теҙөлөш элементтарының билдәле бер урын алып тороуы һымаҡ ҡалыптар барлыҡҡа килгән.

Башҡорт әҙәби телендәге рәсми эш стиленең оҙайлы тарихы бар. Уның тамырҙары XVI быуатҡа — Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыу осорона китә: шул замандарҙан башлап Башҡортостандағы рәсми эш башҡарыуға рус теленең ул ваҡыттарҙа формалашып өлгөргән рәсми эш стиле йоғонто яһай башлай. Ындай документтарға Урал — Волга буйы төрки телендә яҙылған ғариза, прошение, акт, договор, суд документтары һымаҡ ҡағыҙҙарҙы индерергә мөмкин.

1921 йылда РКП(б)-ның IV Бөтә Башҡортостан конференцияһы мәктәп, суд һәм административ органдарҙың эшен күпселек милләттең туған теленә күсереү тураһында ҡарар ҡабул итә. Утыҙынсы йылдарға тиклем Башҡорт АССР-ында партия-совет органдарының, дәүләт учреждениеларының, йәмәғәт ойошмаларының эше башлыса башҡорт һәм рус телдәрендә алып барыла, шуға күрә ул ваҡытта башҡорт теленең функцияһы хәҙергегә ҡарағанда байтаҡҡа киң була. Заман шулай талап итә: ул ваҡытта дәүләт учреждениеларында һәм ойошмаларында эшләү өсөн рус телен яҡшы белгән милли кадрҙар етешмәй, шул уҡ ваҡытта башҡорт телендә белем нигеҙҙәренә эйә булыу процесы көслө барҙы.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең башланғыс йәшәү осоронда мәктәптәрҙе, партия-хужалыҡ органдарын, дәүләт учреждениеларын яңынан ҡороу, алфавит, графика, орфографияларҙы тәртипкә һалыу сәбәпле Башҡорт АССР-ы хөкүмәте тарафынан декреттар, ҡарарҙар, директивалар, күрһәтмәләр, рекомендациялар сығарып торолдо, уларҙың күбеһе ваҡытлы матбуғат биттәрендә («Башҡортостан» газетаһында йәки «Белем», «Яңы юл», «Сәсән», «Яңылыҡ» журналдарында) һәм айырым брошюра рәүешендә баҫылып сығып торҙо. Егерменсе-утыҙынсы йылдарҙағы рәсми эш стилендә Урал — Волга буйы төрки телендәге традициялар менән хәҙерге рус әҙәби теле йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән яңы саралар уңышлы мөнәсәбәткә инделәр.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең рәсми эш стиле үҙенең совет осорондағы үҫеш дәүерендә әллә ни ҙур үҙгәрештәр кисермәне, сөнки уның рус әҙәби теленә бәйле барлыҡҡа килгән бай ғына тарихы бар ине. Тик рәсми эш стилендә ҡулланылған терминология ғына ҡырҡа үҙгәрҙе (сағыштырығыҙ: *мәркәз — үҙәк, мөндәрәжә — йөкмәтке, мөхәррир — редактор, тәшкиләт — функция, йөмһөриәт — республика, мөәссәсә — учреждение, рәис — председатель* һ. б.). Рәсми эш стиленең экспрессив-эмоциональ йөкмәткеһендә лә бер аҙ үҙгәрештәр күҙәтелә: әгәр хәҙер эш ҡағыҙҙарының тел саралары һәм алымдары нейтраллеккә, хатта бер ни тиклем ҡоролоҡҡа ынтылһа, егерменсе йылдарҙа улар, күрәһең, замандың революцион пафосы йоғонтоһонда билдәле бер кимәлдә хис-тойғо биҙәгенә эйә булғандар. Миҫал өсөн Башҡортостан Ғилми мәркәзе эргәһендәге Яңы башҡорт (латин) алфавиты буйынса комиссия сығарған директиванан өҙөк килтерәбеҙ: *«Кисекмәй һәм тулы эрәүештә бойомға ашырылырға тейештәр. Бөтә халыҡ*

*комиссариаттарына! Ҡантон, йорт башҡармалары һәм бөтә хөкүмәт, кәпирәтиф хужалыҡ мөәссәсәләренә... Хеҙмәтсәндәр эш йөрөтөрлөк тиклем әлепсә әҙер булырға тейеш... Бөтә ыштамп, мисәттәрҙең дә башҡорт телендәге өлөшө, төп урынды алып, фәҡәт яңы әлеп менән яҙылған булырға тейештәр... Бөтә иғлан, афиша, плакат, ниндәй генә булмаһын лозунгы һәм башҡаларҙың һәр ҡайҫыһы ике телдә яҙылған булырға..., башҡортса-татарсаһы яңы әлептә яҙылған булып, төп урынды алырға тейеш. Бының киреһен эшләүселәр тураһында тейешле органдар ҡәтғи сара күрергә тейештәр...»* [25].

Отчеттар, ғәҙәттә, нейтраль тонда яҙыла: *«Башҡортостан Ғилми мәркәз эргәһендәге методический советтың эшләре (15 ноябрь — 1 декабрь). Ноябрь айында түбәндәге эштәр эшләнде: 1) кантондарҙа методический бюролар тәшкиләте хаҡында, 2) район-волостарҙа төҙөлгән мәктәптәр өсөн, 3) район конференцияларын үткәреү өсөн тәғлимәттәр төҙөлдө...»* [26].

Хәҙерге көндә дәүләт учреждениеларының һәм йәмғиәт органдарының эшендә башҡорт әҙәби теленен ҡулланылышы түбәндәгесә тора. Башҡорт ауылдарында ауыл Советтарының, колхоздарҙың, урындағы ойошмаларҙың һәм предприятиеларҙың эше, башлыса, башҡортса алып барыла. Ауыл Советтарының сессиялары, профсоюз йыйылыштары, лекциялар, әңгәмәләр һ. б., башлыса, башҡортса үткәрелә. Сессия, йыйылыш, ултырыш һәм башҡа йыйындарҙың протоколдары, ҡағиҙә буларак, башҡорт телендә яҙыла. Ләкин төп документация рус телендә алып барыла. Күпселеге башҡорттарҙан торған район масштабындағы бөтә йыйындар ҙа ике телдә — башҡорт һәм рус телдәрендә үткәрелә, ә сессия, пленум, конференция һәм йыйылыштарҙың ҡарарҙары русса төҙөлөп, район газеталарында башҡорт телендә лә баҫтырып сығарыла. Башҡортостан Республикаһы Верховный Советының сессияларында, профсоюз ойошмаһының өлкә конференцияларында башлыса рус теле ҡулланыла, тик айырым сығыштар ғына башҡорт телендә яһала. Документация тулыһынса рус телендә алып барыла, ләкин пленум, сессия һәм конференцияларҙың ҡарарҙары һәм улар тураһындағы отчеттар башҡорт һәм рус телдәрендә баҫтырып сығарыла. Башҡортостан Республикаһы Верховный Советының закондары башҡорт һәм рус телдәрендә баҫтырыла.

Россия хөкүмәте органдарының әһәмиәтле указдары, ҡарарҙары, директивалары һәм башҡа документтары республика матбуғатында башҡорт һәм рус телдәрендә баҫтырылып сығарыла.

Шулай итеп, республикала хәҙерге башҡорт әҙәби теленең рәсми эш стиле рус теле менән бер ҡатарҙан йөрөй, һәм уның төп үҙенсәлектәре һәм билдәләре рус әҙәби телендәгенән айырылмай.

Эш ҡағыҙҙарының күбеһе, башлыса, күрһәтмә биреү, бойороу характерында булғанлыҡтан, уларҙа инфинитив башҡа ҡылым

[25] Яңылыҡ. 1929. № 11—12. 1—2-се биттәр.
[26] Белем. 1924. № 12. 74-се бит.

формаларына ҡарағанда йышыраҡ ҡулланыла (*яҡшыртырға, талап итергә, көсәйтергә, ярҙам итергә, бөтөрөргә, ҡабул итергә, мәжбүр итергә* һ. б.), шулай уҡ тейешлекте белдереүсе махсус һүҙҙәр ҡулланыла (*мәжбүр, тейеш, яуаплы, кәрәк, хоҡуҡлы* һ. б.).

Ғәҙәттә, эш ҡағыҙҙарында документтар төҙөлгәнгә тиклем булған аргументация, иҫбат итеү, анализдар кәрәкмәй, тик регламентация, рекомендация, ҡарар, күрһәтмәләр генә бирелә. Ошоноң арҡаһында уларҙа I һәм II зат ҡылымдары, зат алмаштары ҡулланылмай, ә III зат ҡылымдары, башлыса, билдәһеҙ формаларҙа бирелә. Ошо уҡ сәбәптәр арҡаһында, ғәҙәттә, дөйөм күпселекте белдергән исемдәр ҡулланыла (*граждандар, хеҙмәтсәндәр, колхозсылар, эшселәр, һайлаусылар, ата-әсәләр, уҡыусылар, радио тыңлаусылар* һ. б. ).

Эш ҡағыҙҙарында стандартлаштырыу ҙур әһәмиәткә эйә, ул бер үк фактты төрлөсә аңлауға сик ҡуя, ваҡытты экономлай, ҡыҫҡалыҡҡа һәм асыҡлыҡҡа килтерә. Ошо сәбәпле эш ҡағыҙҙарының әҙер, алдан баҫтырып ҡуйылған формалары — протокол, ғариза, акт, расписка, доверенность, анкета һәм башҡа күп ҡағыҙҙарҙың бланкылары була.

## *2. Башҡорт әҙәби теленең һөйләү сфераһында ҡулланылыуы*

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙендә Урал — Волга буйы төрки теленең һәм поэтик фольклор элементтары ҡушылған йәнле һөйләү телмәренең үҙенсәлектәре һалынған. Һөйләү телмәре халыҡ аралашыуының мәңге үҙгәрмәй торған сараһы түгел. Ваҡыт үтеү менән, лингвистик һәм экстралингвистик (тел законлылыҡтарына ҡарамаған) факторҙарҙың йоғонтоһо нигеҙендә унда телдең бөтә кимәлдәренә лә ҡағылышлы тәрән сифат үҙгәрештәре була.

Һөйләү телмәрендәге төп билдәләрҙең береһе булып уның экстралингвистик үҙенсәлектәре тора. Экстралингвистик үҙенсәлектәр һөйләү телмәренең тәбиғилегендә һәм официаль булмауында яҡшы сағылыш таба: официаль сығыштарҙы иҫәпкә алмағанда, һөйләү процесына кеше, ғәҙәттә, алдан әҙерләнмәй, шуға күрә телмәрҙә бер ни тиклем автоматлыҡ күҙәтелә; унда эмоциональлек һәм баһалау яҡшы сағыла; телмәрҙә ым, ишара, мимика, ситуация контексы бик ҙур роль уйнай. Бөтә был билдәләр ҙә һөйләү телмәренең ҡоролошона һәм йәшәүенә ҙур йоғонто яһай.

Һөйләү телмәренең лингвистик үҙенсәлектәренә телмәрҙең бөтә кимәлдәрендә лә (фонетикала, лексикала, морфологияла һәм синтаксиста) бер ни тиклем сағылыш ала торған китап һүҙҙәренән ситләшеү, хатта ҡайһы ваҡыт әҙәби булмаған сараларҙы ҡулланыу инә; һөйләү телмәрендә, китап телмәре менән сағыштырғанда, һөйләм киҫәктәренең бәйләнеше иреклерәк була, конкрет мәғәнәләге һүҙҙәр ҡулланыла; китап телмәренә бик үк хас булмаған махсус аффикстар, киҫәксәләр, һүҙҙәрҙә өн төҙөлөшөнөң үҙгәреүе, эмфатик баҫым һымаҡ хис-тойғо һәм баһалау сара-

лары актив сығыш яһай; фразеологик берәмектәр, әйтемдәр, мәҡәлдәр шикелле әҙер окказиональ телмәр стандарттары йыш ҡулланыла. Һөйләү телмәрендә, ғәҙәттә, ҡатмарлы синтаксик конструкциялар, бигерәк тә күп төрлө эйәрсән һөйләмдәрҙән торған эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр йәки бер нисә хәл әйтемле һөйләмдәр, ҡулланылмай.

Булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа башҡорт йәнле һөйләү телмәренең фонетикаһы, морфологияһы һәм синтаксисы хәҙерге һөйләү телмәренән бик үк ныҡ айырылмаған. Ул ваҡыттағы диалектология буйынса яҙылған хеҙмәттәргә ҡарағанда, башҡорт теленең ерле һөйләштәр системаһында ла бик ҙур үҙгәрештәр юҡ. Ә бына лексик йәһәттән хәҙерге башҡорт йәнле һөйләү телмәре ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Иң алда һөйләү телмәре рус теленән йәки рус теле аша килеп ингән рус һәм интернациональ үҙләштереүҙәргә байыҡты. Фән һәм техника халыҡтың көнкүрешенә туранан-тура үтеп ингән фәнни-техник революция осоронда *телевидение, телевизор, автомат, антенна, экран, транзистор, электрон сәғәт, кер йыуғыс машина. холодильник, кухня комбайны, проигрыватель, трансформатор* һымаҡ бик күп һүҙҙәр йәнле һөйләү телмәренең айырып алғыһыҙ берәмектәренә әүерелде. Совет власы осоронда башҡорт һөйләү телмәренең һүҙлек составында күп һандағы лексик һәм семантик калькалар барлыҡҡа килде. Һуңғы йылдарҙа башҡорт теленең диалекттарында ла үҙгәрештәр һиҙелә: мәктәп, матбуғат, радио, телевидение аша хәҙерге башҡорт әҙәби теле һөйләү телмәренә йоғонто яһап, ундағы диалект айырмаларының юғала барыуына килтерә. Ҡайһы бер диалектта йәки һөйләштә аралашҡан кешенең телмәренән иң алда беренсел диалект билдәләре, йәғни ошо диалектты башҡа диалекттарҙан айырып торған иң үҙенсәлекле билдәләр юғала бара. Мәҫәлән, дим һөйләшенә ҡараған кешеләрҙең телмәренән башҡа һөйләштәрҙә һәм әҙәби телдә *һ* тап килгән һүҙ башындағы *ҫ* өнө әкренләп юғала бара, ләкин *ҫ* өнө һүҙҙең уртаһында һәм аҙағында һаҡлана. Шуға күрә диалект һыҙат булараҡ икенсел билдәләр беренсе планға сыға башлай: *һикһән* урынына *һикҫән, барһа* урынына *барҫа, күрһен* урынына *күрҫен, бурһыҡ* урынына *бурҫыҡ* һ. б. Һүҙ эсендә *ҫ* өнөнөң һаҡланыуына әҙәби телдә был позицияла *һ* өнөнөң дә, *ҫ* өнөнөң дә (ижек аҙағында *ҫ,* ижек башында *һ)* ҡулланылыуы йоғонто яһай. Бындай үҙгәрештәр, билдәле, башҡа башҡорт һөйләштәрендә лә күҙәтелә. Ошондай үҙгәрештәр барыуын иҫәпкә алып, башҡорт диалектологтары күберәк ошо ауылдан ситкә сығып йөрөмәгән оло йәштәге кешеләр менән эшләргә тырышалар, сөнки уларҙың телмәрендә диалект айырмалыҡтары яҡшы һаҡланған була.

Хәҙерге башҡорт йәнле һөйләү телмәренең төп үҙенсәлектәре нимәлә? Һөйләү телмәренең ниндәй саралары уны айырым функция сфераһына ҡаратырға мөмкинлек бирә?

Башҡорт йәнле һөйләү телмәренең һүҙлек составында күберәк телмәр өсөн хас булған һүҙҙәр, бигерәк тә конкрет йөкмәткеле көнкүреш лексикаһы ҡулланыла; шул уҡ ваҡытта абстракт

мәғәнәләге, китап теле өсөн ғәҙәти булған һүҙҙәр һирәк файҙаланыла. Мәҫәлән, китап теле өсөн ғәҙәти һаналған *һыныусанлыҡ, хеҙмәтләндереү, үрсетмәлек, урынлаштырыу, аҙыҡландырыу, түбәндәгеләр, ҡулъяҙма, тамамлау, саҡырылыш, милексе, дәлил, ғәҙәти* тибындағы һүҙҙәр һөйләү телмәрендә бөтөнләй ҡулланылмай йәки бик һирәк сығыш яһай, шул уҡ ваҡытта *ирештереү* (әҙәби телдә *үсекләү* формаһы йышыраҡ ҡулланыла), *иренеү* (ялҡауланыу), *дерелдәү* (ҡалтырау), *доноу* (сабыу, сабып сығып китеү), *ғишыҡ* (мөхәббәт), *бәлшәйеү* (ялпаҡланыу, һалыныу), *сир* (ауырыу), *ҡәҙимге* (ғәҙәттәге, ғәҙәти), *ҡабат* (яңынан), *кәксәйеү* (үпкәләү), *йәренгә* (киләһе йыл), *бупылдаҡ* (һөйләнсек), *быжғытыу* (әрләү, һүгеү) һымаҡ һүҙҙәр йыш ҡулланыла. Йәнле һөйләү телмәрендә терминдарҙың һәм әҙәби тел тарафынан үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең бер ни тиклеме сикле ҡулланыла, шул уҡ ваҡытта әҙәби тел ҡабул итмәгән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең (варваризмдарҙың) актив йөрөүе мөмкин: *ысталауай* йәки *столовая* (әҙәби телдә *ашхана), гостиница* (ҡунаҡхана), *келәшшә* (ҡыҫҡыс), *наскый* (ойокбаш), *әбизәтелнә* (һис һүҙһеҙ, мотлаҡ), *керисә, кырнис* йәки *кырниса* (ҡомаҡ), *ызначит* (тимәк) һ. б. Күп кенә үҙләштерелгән һүҙҙәр территория яғынан сикләнгән, йәғни диалектизмдарға барып тоташа: *буфка* (төймә), *өгөрсө* (ҡыяр), *маркуф* (кишер), *малина* (ҡурай еләге), *сипсы* (йәмкә), *шимешкә* (көнбағыш), *шәшке* (сынаяҡ), *әберкә* (балитәк), *быраурылка* (тыҡырыҡ), *керишә (ҡыйыҡ)* һ. б. Йәнле һөйләү телмәрендәге фразеологик берәмектәр, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр әҙәби телгә ҡарағанда күләме яғынан күберәк, ҡулланыштары активыраҡ. Һөйләү телмәрендә әҙәби тел өсөн дә хас булған дөйөм телдәге күп мәғәнәлелектән тыш (*морон* «нос, мыс», *ҡолаҡ* «ухо, залив», *тырнаҡ* «ноготь, кавычка» һ. б.), шәхси-окказиональ күп мәғәнәлелек тә киң таралған (*быҙау* «теленок; несмелый, бестолковый», *бутҡа* «каша; беспорядок, путаница», *таҡыр* «гладкий, укатанный; пустой, неумный» һ. б.). Һөйләү телмәренең синонимикаһы һәм антонимикаһы телмәр практикаһында ситуация йәки мәғәнә синонимдарының һәм антонимдарының йыш ҡулланылыуы менән айырылып тора. Мәҫәлән, *үҙ инәң бауырһаҡ, үгәй инә һарымһаҡ* тигән мәҡәлдә *бауырһаҡ* һәм *һарымһаҡ* һүҙҙәренең тура мәғәнәләре түгел, ә күсмә мәғәнәләре антонимик билдәләр ала: *бауырһаҡ* — тәмле, татлы, күңелгә ятышлы нәмә һәм *һарымһаҡ* — әсе, тәмһеҙ, күңелгә ятышһыҙ нәмә.

Йәнле һөйләү телмәрендә әҙәби телгә ҡарағанда т а б у (тыйыу) һәм уның һөҙөмтәһе булараҡ э в ф е м и з м д а р (әйтергә тыйылған һүҙ урынына йөрөгән яңы һүҙ) киңерәк таралған. Һүҙҙәрҙе әйтеүҙән тыйыуҙың сәбәптәре бик күп — уларҙың нигеҙендә дин һәм йола тыйыуҙары, тупаҫ яңғыраусы һүҙҙәрҙе йомшартырға тырышыу йәки сит кешенән ниндәйҙер сәбәп арҡаһында һүҙҙең тура мәғәнәһен йәшерергә теләү ятырға мөмкин. Мәҫәлән, элегерәк ғаиләлә ҡатыны йола буйынса иренә исеме менән өндәшмәгән — был әҙәпһеҙлек һаналған, шуға күрә уға *әй, һин, атаһы* йәки *фәләндең* (ғәҙәттә, оло улының исеме әйтелгән) *атаһы* тип

өндәшкән; диалекттарҙа *болан* йәки *мышы* һүҙҙәре урынына *ҡыр һыйыры* йәки *сәхәт* (<русса *сохатый*); *айыу* урынына *теге, хужа, тайышаяҡ; бүре* урынына *ҡасҡыр, дүрткүҙ* йәки *ҡарышҡыр; ҡуян* урынына *шеш ҡолаҡ, өтөк ҡойроҡ, тәкә* йәки *ҡыр тәкәһе* һүҙҙәрен ҡулланыу һунарсылар телмәренән ҡалған эвфемизмдар булырға тейеш. Йәнле һөйләү телмәрендә тупаҫ яңғыраған һүҙҙәрҙе йомшартыу маҡсатында ҡулланылған эвфемизмдар ҙа киң генә таралған. Уларға *бабаға ултыртыу, йөклө булыу, тышҡа сығыу* һымаҡ миҫалдарҙы килтерергә була. Ғөмүмән, телмәрҙә *һаңғырау* урынына *ҡолаҡҡа ҡаты, һуҡыр* урынына *күҙгә насар, ахмаҡ* урынына *аҡылға бер төрлө, урлау* урынына *һорамай алыу* тип, һүҙҙәрҙе йомшартып әйтергә тырышалар. Хәҙерге ваҡытта әҙәби телдә актив ҡулланылған фразеологизмдарҙың да ҡайһы берҙәре йәнле һөйләү телмәрендә барлыҡҡа килгән эвфемизмдар булырға тейеш, сөнки улар әҙәпһеҙ, тупаҫ яңғырай торған йәки кешегә ауыр тәьҫир итеүсе һүҙҙәрҙе алмаштырып киләләр: *үлеү* урынына *яҡты донъяны ҡалдырыу, донъянан китеү, мәңгелеккә китеү, гүр эйәһе булыу* һ. б.; *кәфен* урынына *гүр кейеме; алдау* урынына *кәкре ҡайынға терәү, төп башына ултыртыу, төпһөҙ кәмәгә ултыртыу* һ. б.; ҡатын кешегә ҡарата *быуаҙ* урынына *ауыр аяҡлы, буйында булыу* йәки *йөклө һ. б.* Әйтергә тейешле һүҙҙе башҡа һүҙҙәр менән алмаштырыу жаргон лексикала ла осрай: *рус кешеһе* урынына *ҡыл түбә, урлау* урынына *сиртеү, шылдырыу* йәки *айыу майы һөртөү* һ. б.

Йәнле һөйләү телмәрендә әҙәби телгә ҡарағанда э н а н т и о с е м и я ла (һүҙҙәрҙе ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә ҡулланыу) йышыраҡ осрай: *бик шәп* урынына *яман шәп* тип әйтеү йәки халыҡ араһында киң таралған баланы әрләгәндә *«бәхетле булғыры!», «бәхетең артҡыры!», «ҡотоң артҡыры!», «йәшәгере!» тип изге теләк* белдереү бер кемде лә ғәжәпләндермәй.

Һөйләү телмәрендәге һүҙьяһалышта ҡайһы бер ялғауҙарҙың ҡулланылышы әҙәби телдәгегә ҡарағанда киңерәк була: *имсәктәш, төҫтәш, яҡындаш, иптәш; шешмә, үсекмә, ҡалма* (ҡый-һай тулып ятҡанда әйтелә), *тыума* (бер туған), *күрмә* (күҙгә насар), *шаҡарма* (текмә), *һөйрәтмә* (һөйрәткес) һ. б. Йәнле һөйләү телмәрендә әҙәби тел өсөн хас булмаған йәки унда бик һирәк осрай торған ялғауҙар ҙа ҡулланыла: *һиҙем-тәл, ашам-тал, йөрөм-тәл; һылыу-ҡас, бауыр-ҡас, ямаҡ-ас, керпек-әс; тоҡор-сай, буре-сәй* (аралашып бармай торған кеше), *яғал-сай* (ала-сыбар) һ. б.

Йәнле һөйләү телмәренең синтаксисы ла бик үҙенсәлекле. Уға ситуация, ым, ишара, мимика менән нығытылған э л л и п с и с (телмәрҙә ҡайһы бер һүҙҙәрҙең төшөп ҡалыуы), ҡыҫҡалыҡ, йәнлелек, образлылыҡ һымаҡ күренештәр хас. Йәнле һөйләү телмәре өсөн ғәҙәти булған бер диалог килтерәйек: *«— Өйҙәләрме-е?» «— Әйҙүк!» «— Һай көнө-ө!..» «— Әйтмә лә!..» «— Йә, күрҙеңме?» «— Ъъ!» «— Нишләп?» «— Ебәреп өлгөргәндәр».* Был миҫалда ситуация шарттарынан билдәле булған күп нәмә уҡыусы өсөн аңлашылмай: ниндәй көн — һыуыҡмы, эҫеме, ҡарлымы, ямғырлымы; хужа кем йәки нимә тураһында һорай; кемде йәки ни-

мәне ҡайҙа ебәреп өлгөргәндәр һ. б. Ризалыҡты йәки ризаһыҙлыҡты белдергән, барлыҡты йәки юҡлыҡты аңлатыусы *эйе, юҡ, бар, әлбиттә* һымаҡ махсус һүҙҙәр башлыса һөйләү телмәрендә ҡулланыла. Йәнле һөйләү телмәрендә шулай уҡ парцелляция (һөйләм киҫәктәрен йәки өлөштәрен һөйләмдән тышҡа сығарыу) бик киң таралған: *1. Бирмәнем дә ҡуйҙым. Береһенә лә! 2. Әле сығып китте. Үсегеп. 3. Тарманы сәсмәһәң дә, үҙе үҫә. Ҡәртә-ҡура артында. Тиреҫлектә. 4. Бер ней ҙә сыҡманы. Ней тиклем тырышһам да!* Йәнле һөйләү телмәрендә ҡатмарлы, бигерәк тә әҙәби яҙма телмәр өсөн хас булған *ләкин, сөнки, һәм* теркәүестәре менән килгән һөйләмдәр ҡулланылмай.

Йәнле һөйләү телмәре хис-тойғо биҙәктәре, баһалау мәғәнәләренә бик бай була, етмәһә, улар әҙәби телдәгегә ҡарағанда башҡа саралар менән яһала. Ҡыҫҡаса был саралар түбәндәгеләр: 1) эфматик баҫым (*Нәмәләрен ташлап, ҡайтып киткән; Өҫтәлдә сәйе, шәкәре, майы...*); 2) тартынҡыларҙың ҡабатланыуы (*әссе, тәррән, ҙҙур, нныҡ*); 3) тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең сифаты үҙгәреүе (*ҡәһәр ҫуҡҡыры, жир жотҡоро, киәл бында, сиҡ ҡына*); 4) ҡабатлауҙарҙың төрҙәре (*тау-тау өйөмдәр, ғыж-ғыж килеү, күм-гүк*; 5) махсус аффикстар (*һаҡалтай, асатай, ҡараҡас, күҙгенәләре*); 6) киҫәксәләр (*шыр һыу, кил һәнә*); 7) төрлө оҡшатыу һүҙҙәре (*лөңк-лөңк итеү, сөбөр-сөбөр килеү, буп-буп ҡысҡырыу*); 8) төрлө ымлыҡтар (*инәкәйем, бынағайыш, атағатаҡ*); 9) интонация, мимика, ым, ишаралар һ. б.

Йәнле һөйләү телмәренә, яҙма телдән айырмалы рәүештә, интонация һәм темп төрлөлөгө лә хас. Телмәрҙең йылдамлығы редукцияға (һуҙынҡыларҙың ҡыҫҡарыуы, үҙгәреүе йәки төшөп ҡалыуы), эллипсисҡа, тартынҡыларҙың ассимиляцияһына (бер-береһенә оҡшауы) йәки диссимиляцияһына (береһенән-береһе әйтелеш буйынса алыҫлашыуы), өн һәм ижектәрҙең төшөп ҡалыуына килтерә: *алып кил* урынына *әпкил, ул килмәгән* урынына *у кимәгән, бәрҙесәк* урынына *бәрсәк, бара алманым* урынына *баралманым, ҡыр ҡаҙҙары осә* урынына *ҡырғаҙҙароса, Мөхәммәт* урынына *Мәмәт, Әбдрәшит* урынына *Әптерәй* йәки *Әптерәш, тоҡто алып сыҡ* урынына *тоҡтапсыҡ* һ. б.

Шулай итеп, күп кенә үҙенсәлектәре менән йәнле һөйләү телмәре нормалаштырылған хәҙерге башҡорт әҙәби теленә тап килмәй. Шуның менән бергә хәҙерге йәнле һөйләү телмәрендә әҙәби телдең көслө йоғонтоһо һәм уның һөҙөмтәләре бар. Дөйөм алғанда, был күренеште ыңғай хәл тип ҡарарға була. Ләкин ҡайһы ваҡыт айырым функциональ стилдәрҙең специфик саралары һәм алымдары йәнле һөйләү телмәренә күсерелә, һәм шул арҡала ул официаль, ҡоро телмәргә әйләнә, уның сағыу йәнле биҙәктәре юғала. Йәнле һөйләү телмәрендә: *«Был китапты мин һиңә һис кисекмәҫтән тапшырырмын»; «Һин, улым, мин ҡайтыуға түбәндәгеләрҙе эшләп ҡуй...»; «Һинең һүҙҙәреңдә сағылдырылған фекергә мин дә ҡушылам»; «Яҡын көндәрҙәге беҙҙең бурыс — бесән сабып, кәбәндәргә һалыу, ә ихатаға ҡыш та ҡайтарырға була»;*

*«Бар, ләкин яҡшы ғына уйла»* һымаҡ һөйләмдәрҙе ҡулланыу әсенеүле көләү генә тыуҙырырға мөмкин. Сығыштарҙа, докладтарҙа, лекцияларҙа, ә бигерәк тә йәнле һөйләшеүҙә рәсми, канцелярия һүҙҙәрен һәм һөйләмдәрен ҡулланыу булмаҫҡа тейеш, сөнки улар телмәрҙе йәнһеҙләндерә лә, йәмһеҙләндерә лә.

Үрҙә әйтелгәндәрҙе йомғаҡлап, хәҙерге башҡорт теленең китапта һәм йәнле телмәрҙә йәшәүен билдәләргә мөмкин. Уларҙың икеһендә лә үҙҙәренә генә хас билдәләр бар. Китап теле һәм йәнле һөйләү телмәре араһында асыҡ ҡына сик юҡ, һәм, уларҙың уртаҡ элементтары булһа ла, һәр береһенең үҙ ҡулланыу өлкәһе бар.

### 3. *Башҡорт әҙәби теленең ижтимағи функцияларының үҫеше*

Октябрь социалистик революцияһына тиклем башҡорт дөйөм халыҡ теле башҡорттарҙың ғаилә һәм йәмғиәт тормошондағы төрлө өлкәләрендә йәнле аралашыу сараһы сифатында ҡулланылған, башҡорт телендә шулай уҡ халыҡ фольклоры ижад ителгән һәм йәшәгән. Яҙма тел булып иҫке төрки теле йөрөгән, мәктәптәрҙә лә башҡорт теле билдәле бер кимәлдә телдән аралашыуҙа ҡулланылған, тип әйтергә мөмкин. 1914 йылда Өфө губернаһында 1578-гә тиклем ошондай башланғыс белем биреүсе мәктәптәр һаналған, бынан тыш тағы ла 1045 өйҙә грамотаға өйрәтеү пункттары булған, уларҙа уҡыусыларҙың дөйөм һаны 90934-кә тиклем еткән, ә был мәктәп йәшендәге балаларҙың 5,6 процентын тәшкил иткән [27].

Революцияға тиклем башҡорт теленең официаль эш сфераһында, матбуғатта, халыҡ белеме һымаҡ өлкәләрҙә сығыш яһауы өсөн, дөйөм алғанда, тел ситуацияһы уңайлы булмаған.

Башҡорт әҙәби теленең ижтимағи функциялары үҫешендә өс этап билдәләнә:

1) 20-се йылдар — башҡорт әҙәби телен тормошҡа индереүҙең башланғыс этабы;

2) 30—40-сы йылдар — әҙәби тел функцияһының киңәйеүе, структураһының камиллашыуы, рус теленең роле күтәрелеүе;

3) 50—80-се йылдар — башҡорт теле функцияһының тоторoҡло була башлауы, туған телде рухи культураның төрлө сфераларында файҙаланыуҙың тәрәнәйеүе, әҙәби телдең артабан камиллашыуы, милли-рус икетеллелектең дөйөм үҫеше.

20-се йылдарҙа Коммунистар партияһының Программаһы һәм хөкүмәт декреттары нигеҙендә тел төҙөлөшөнөң бөтә йүнәлештәрендә лә ҙур эш үткәрелде. Бөтә был ҡатмарлы мәсьәләләрҙе бер юлы, ҡыҫҡа срокта, ауыр экономик шарттарҙа һәм кадрҙарҙың етешмәүе ныҡ һиҙелгән саҡта хәл итергә кәрәк ине.

---

[27] Алибаев С. Р. Школы Башкирской АССР (прошлое, настоящее и пути дальнейшего развития). Уфа, 1966. 10—11-се биттәр; Мектебе Уфимской губернии. Статистический очерк 1912/13 года. Уфа, 1915. 34—35-се биттәр.

Башҡорт АССР-ының өлкә партия ойошмаһы, Халыҡ комиссарҙары Советы, Наркомпрос һәм уларҙың урындағы кантон һәм волость органдары был эш менән туранан-тура шөғөлләнде. 1922—1929 йылдарҙа БАССР-ҙың Халыҡ комиссарҙары Советы, башҡорт һәм башҡа телдәрҙең практик тормоштағы сфераһын һәм ҡулланыу тәртибен билдәләп, бер нисә декрет һәм ҡарарҙар ҡабул итте [28].

1922 йылдың 21 сентябрендәге инструкцияһында БАССР-ҙың Халыҡ комиссарҙары Советы республиканың учреждениеларында эш башҡарыуҙы рус һәм башҡорт телдәрендә алып барырға ҡушты. Техник сәбәптәр арҡаһында Наркомфин, Наркомздрав, Нарсвязь, ЦСУ һәм халыҡ комиссариаттарындағы финанс-һанау идаралыҡтарында ғына эштәрҙе рус телендә алып барыу маҡсатҡа ярашлы, тип табылды. Үҙәк волостарҙа төп телдә эш башҡарыу бер телдә һөйләшкән урындағы халыҡ 70 проценттан да кәм булмағанда рөхсәт ителде. Наркомпросҡа рус һәм башҡорт телдәрен белеүсе кадрҙар әҙерләү буйынса курстар аса башлау йөкмәтелде.

1923 йылдың 29 декабрендә РКП(б) Башҡортостан өлкә комитетының Президиумы, башҡорт телен ҡулланыу өлкәләрен конкрет күрһәтеп, ҡарар ҡабул итте; улар — матбуғат һәм нәшриәт, эш башҡарыу, 1-се һәм 2-се баҫҡыстағы мәктәптәр, педтехникумдар, театр сәнғәте ине [29].

1923 йылдың 18 һәм 27 февралендә БАССР Халыҡ комиссарҙары Советы «дәүләт, волость һәм ауыл масштабындағы шәхси-хоҡуҡ учреждениеларында» башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу тураһында ҡарар һәм инструкция ҡабул итте, унда, «учреждениеларҙа һәм судтарҙа эш башҡарыу, суд эше, судта һөйләү урындағы волость йәки ауыл халҡының күпселеге һөйләшкән дәүләт телендә (башҡорт йәки рус телдәрендә) алып барыла», тип әйтелә [30]. Шул уҡ ваҡытта әҙселектең мәнфәғәттәрен һәм хоҡуҡтарын тәьмин итеү кәрәклеге билдәләнә. 1924 йылдың 29 августында БашЦИК хөкүмәт ҡарарҙарын мәжбүри рәүештә ике телдә — башҡорт һәм рус телдәрендә — баҫтырып сығарыу тураһында ҡарар ҡабул итә [31].

Үҙәктә һәм урындарҙа партияның тел политикаһын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән төрлө комиссиялар, йәмғиәттәр һәм ойошмалар төҙөлә башлай. РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты Президиумы үҙенең 1922 йылдың 17 ноябрендәге ултырышында башҡорт телен бойомға ашырыу буйынса комиссия төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә [32]. Уның менән күренекле партия һәм дәүләт эшмәкәре Ш. А. Хоҙайбирҙин етәкселек итте. Ҡыҫҡа ғына

[28] Сборник документов по реализации башкирского языка. Уфа, 1930. 48—78-се биттәр; Образование БАССР // Сб. документов и материалов. Уфа, 1959. 708—715-се биттәр.

[29] Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы. Ф. 122, оп. 2, д. 7. 122—123-сө биттәр.

[30] Собрание узаконений и распоряжений Рабоче-Крестьянского правительства БАССР. 1923. № 2. 6-сы бит; № 4. 18-се бит.

ваҡыт эсендә комиссия учреждениеларҙа, официаль эш башҡарыуҙа, яҙышыуҙа һәм башҡа өлкәләрҙә башҡорт әҙәби телен индереү буйынса ҙур ойоштороу эше үткәрҙе.

Билдәле булыуынса, 1923—1924 йылдарға тиклем башҡорт мәктәптәрендә уҡытыу эше татар телендә алып барылды. Дәреслектәр, методик ҡулланмалар төҙөлөп, уҡытыусы кадрҙар әҙерләнгәс, аҡрынлап уҡытыу эшен башҡорт теленә күсереү эше башланды. 1927/28 уҡыу йылында мәктәптәрҙә үткәрелгән иҫәпкә алыу буйынса, дөйөм һаны 738 булған башҡорт мәктәптәренең 425-е (57,5%) башҡорт телендә, 22-һе (3%) башҡорт һәм рус телдәрендә, 291-е (39,5%) татар телендә эшләне [33].

Башҡорт телендәге әлифба тәүге тапҡыр 1924 йылда сыҡты [34], киләһе йылында башҡорт теле буйынса тәүге мәктәп дәреслеге баҫтырып сығарылды, шул уҡ йылда башҡорт телендә 13 мәктәп дәреслеге донъя күрҙе [35].

1924 йылда республика газеталары һәм журналдары башҡорт телендә сыға башланы. Тәүге ваҡытта уларҙың тиражы ҙур булмаһа ла, йылдан-йылға арта барҙы. Мәҫәлән, 1928 йылда «Башҡортостан» газетаһының тиражы 5,35 мең дана булһа, 1930 йылға 9,9 меңгә етте.

1919 йылда Башҡорт драма театры барлыҡҡа килде. 20-се йылдарҙың башында үҙҙәренең спектаклдәрен башҡорт телендә ҡуйыусы үҙешмәкәр театр коллективтары, һуңынан колхоз-совхоз һәм район-ара театрҙар ойошторолдо [36].

Шулай итеп, 20-се йылдарҙа йәмғиәт тормошоноң төрлө өлкәләрендә (мәктәптә уҡытыуҙа, ваҡытлы матбуғатта, эш башҡарыуҙа, китап сығарыуҙа, театрҙа һәм башҡа сфераларҙа) башҡорт әҙәби телен ҡулланыу индерелде. Әҙәби телдең ауыҙ-тел формаһы рәсми аралашыуҙа, йыйылыштарҙа, конференцияларҙа һәм башҡа өлкәләрҙә ҡулланыла башланы.

30-сы йылдар алдағы осорға ҡарағанда йәмғиәт тормошоноң төрлө өлкәләрендә башҡорт әҙәби теле бик киң ҡулланыла башлауы менән айырылып тора.

Башланғыс белем биреү башҡорт телендә башҡарылды, уҡытыу эштәре башҡорт телендә алып барылған ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙең һаны арта барҙы. 1940/41 уҡыу йылында уҡытыу эштәре башҡортса алып барылған төрлө типтағы мәктәптәрҙең һаны 876-ға етте.

---

[31] Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы. Ф. 394, оп. 5, д. 21. 138-се бит.

[32] Образование БАССР // Сб. документов и материалов. Уфа, 1959. 711-се бит.

[33] Амиров Х. Начальное образование и вопросы всеобщего обучения в Башкирии // Хозяйство Башкирии. 1929. № 8—9. 37-се бит.

[34] Башҡортостан. 1924. 7 март.

[35] Народное образование в РСФСР. М., 1970. 106-сы бит.

[36] Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы. Ф. 1352, оп. 1, ед. хр. 3. 23-сө бит.

Махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттарында башҡорт теле айырым предмет булараҡ уҡытыла башланы, ә педтехникумдарҙа уҡытыу теленә әүерелде. Мәҫәлән, 1934 йылда Башҡортостандағы 17 педтехникумдың 6-һында уҡытыу тулыһынса башҡортса алып барылды[37]. 1930 йылда Өфө педагогия институты асылды, унда башҡорт теле һәм әҙәбиәте айырым предмет итеп уҡытылды.

30-сы йылдарҙың башында башҡорт телендә район газеталары сығарыла башланы. Республика газеталарының һәм журналдарының тираждары артты. 40-сы йылдарҙың башында республикала башҡорт телендә бөтәһе 25 газета һәм 3 журнал сығарыла ине. 30-сы йылдарҙың уртаһында башҡорт телендә сығарылған китаптарҙың һаны 457-гә, ә дөйөм тиражы 1 млн 913 меңгә етте[38].

Шулай итеп, башҡорт әҙәби теле төрлө мәктәптәрҙә, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында үҙенең бөтә көсөндә милли уҡытыу теленә әүерелде, был телдә художестволы әҙәбиәт һәм уҡыу әсбәптәре генә түгел, фәнни-популяр әҙәбиәт, газета һәм журналдар ҙа баҫтырып сығарылды, ул сәхнә, уҡыу йорттарында махсус уҡытыу, төрлө учреждениеларҙа официаль эш алып барыу һәм эш ҡағыҙҙары теленә әүерелде.

Наҙанлыҡты бөтөрөүгә алып барылған ныҡышмалы эш һөҙөмтәһендә 1933 йылға 10-дан алып 50 йәшкә тиклемге башҡорттар араһында грамоталылыҡ 67,9% булды[39]. Ә был үҙ нәүбәтендә мәҙәниәт-ағартыу эшендә әҙәби телдең функцияһын киңәйтеүгә килтерҙе: китапханаларҙың, изба-читальняларҙың һаны артты, уларҙың китаптар фонды байыҡты, китап уҡыусыларҙың һәм башҡорт телендәге китаптарҙың һаны күбәйҙе. 1939 йылға бөтә культпросветучреждениеларҙың һаны БАССР буйынса 5484-кә тиклем, шул иҫәптән изба-читальняларҙың — 1245-кә, бөтә ведомстволарҙың китапханалары — 1865-кә етте[40].

30-сы йылдарҙың аҙағында Башҡорт опера һәм балет театры, Башҡорт дәүләт филармонияһы, Ҡурсаҡ театры асылды, улар үҙҙәренең репертуарына башҡорт телендәге әҫәрҙәрҙе лә индерҙе.

Социализмдың еңеүе һәм мәҙәниәт революцияһын уҙғарыу осоронда беҙҙең күп милләтле илебеҙҙә рус теле милләт-ара аралашыу теле булып формалашҡан осорҙа уны системалы рәүештә өйрәнеү һәм рус булмаған киң халыҡ массалары тарафынан үҙләштереү кәрәге тыуҙы. Башҡорт АССР-ында рус теле предмет булараҡ милли мәктәптәрҙә 1924 йылда уҡ индерелгәйне, ә унан һуңғы йылдарҙа рус телен өйрәнеү яҡшыра барҙы, уға һаман күберәк халыҡ эйә булды, ике теллелек үҫешә башланы.

50-80-се йылдарҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теленең үҫешендә Башҡортостанда тел төҙөлөшө кисергән үткән осорҙар һөҙөмтә-

---

[37] Мустафина Ф. Х. Расцвет народного образования в Башкирской АССР. Уфа, 1968. 27-се бит.

[38] Башҡортостан Үҙәк дәүләт архивы. Ф. 749, оп. 1, ед. хр. 3. 10, 14-се биттәр.

һе лә беленде. 60-сы йылдарҙың башына тиклем ваҡытлы матбуғат, китап сығарыу эше, радио, телевидение өлкәһендә, мәҙәниәт-ағартыу эшендә, шулай уҡ белем биреүҙә башҡорт әҙәби теленең ижтимағи функциялары өҙләкһеҙ киңәйә һәм күтәрелә барҙы. Артабан (70—80-се йылдарҙа) баҫып сығарылған китаптарҙың һаны стабилләште, башҡорт телендә сығыусы газета һәм журналдарҙың тиражы артты. Мәҫәлән, 1959 йылда «Совет Башҡортостаны» 23,2 мең тиражда сыҡһа, 1979 йылда 79,7 мең дана сыҡты; йәштәр газетаһы «Ленинсы» шуға ярашлы — 5,8 мең һәм 20,8 мең, «Башҡортостан пионеры» — 15 мең һәм 53,4 мең һ. б.

60—70-се йылдарҙа киң үҫеш алған радио, телевидение һәм кино туған телдә йоғонто яһауҙың әһәмиәтле сараһына әүерелде. Башҡорт радиотапшырыуҙары тәүлегенә уртаса 4 сәғәт ваҡыт алһа, шуның 60 проценты башҡорт әҙәби телендәге тапшырыуҙарға тап килә. Ҡайһы бер ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә урындағы радиостудиялар бар, улар ҙа башҡорт телендә радиотапшырыуҙар ойоштора. Башҡорт телевидениеһы студияһында бөтә тапшырыу программаһының 17—20 проценты башҡорт телендә алып барыла.

Исемдәренең һаны буйынса башҡорт телендә китаптарҙың иң күп сығарылышы 1960 йылда булды һәм 198 исем тәшкил итте, ә һуңғы йылдарҙа исемдәренең һаны буйынса китап сығарыу бер аҙ кәмене, шул уҡ ваҡытта китап продукцияһының дөйөм тиражы һәм айырым китаптарҙың тиражы үҫә. З. Биишева, Я. Хамматов, С. Агиш, М. Кәрим һымаҡ яҙыусыларҙың проза әҫәрҙәре тәүге тапҡыр 30 мең даналы тиражда сығарыла башланы.

60-сы йылдарҙың аҙағынан башлап мәктәптә белем биреү өлкәһендә башҡорт әҙәби теленең функцияһы кәмеү һәм бер кимәлгә килеү тенденцияһын кисерә. Был дөйөм демографик ситуация һәм ҡайһы бер мәктәптәрҙең рус телендә уҡытыуға күсеүе менән бәйле. Бындай мәктәптәрҙә туған тел һәм әҙәбиәт предмет булараҡ уҡытыла, ә тәбиғәт фәндәренең нигеҙе, ҡайһы ваҡыт ижтимағи фәндәр ҙә рус телендә алып барыла. Шул уҡ ваҡытта төрлө типтағы (башланғыс, һигеҙ йыллыҡ, урта) 630 мәктәптә уҡытыу эше башҡорт телендә алып барыла.

Үткән осорҙар менән сағыштырғанда, Башҡортостанда күп милләтлелек артыу сәбәпле, ҡала, район үҙәктәре һәм эшселәр поселоктарындағы учреждениеларҙа, предприятиеларҙа рәсми эш аралашыуы сфераһында башҡорт теленең ҡулланылышы кәмей төштө. Башҡа милләттәрҙең рус телен белеү кимәле күтәрелгәнлектән был сферала милләт-ара аралашыу сараһы булараҡ рус теленең функциялары киңәйҙе. Мәҫәлән, 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса, башҡорттарҙың 65,2 проценты рус телендә иркен аралаша ала.

---

39 Социалистическое строительство в Башкирии за 15 лет. М., 1934. 96-сы бит.

40 XX лет Башкирской автономной социалистической республике. Уфа, 1939. 155-се бит.

## ҠУШЫМТА

**Яҙма ҡомартҡылар өлгөләре**
**(Т. Сурина фоторепродукциялары)**

1. **Ҡол Ғәли. Ҡисса-йи Йософ.** Әҫәрҙең тәүге 3 бите. Ҡулъяҙма Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Шифры: № 33 — а 9. 1974 йылда Илеш районы Сеңрән ауылында Ғ. Б. Хөсәйенов тарафынан табылған.


هذا الكتاب يوسف عليه السلام
بسم الله الرحمن الرحيم



کونکلوم نکا عجم فهم سنکا شرح و بیرکل
غیبه الهام تنگری فیقا توفیق بیرکل
خاطریمکا سهو ملال ساچو بیرکل
صف عاجزه تنگری فیق تپیبن آخر و بیرکل
تنگری فیقا و بیرکل حکمت تیبا قایتمغه
یوسف سنکا چون احسن النس آیتمغه
یوسفه اوروزه تنکا کن احوال کلدوکینی
مصر الچیره اولوغ ملک ا والدوغینی
جهان اچره قمو یمش آیدی یوسف نبینی
قو قسیه اسحاق سنکا چن حبیبی
بندا نحصنکره حکمت تبا لکیچا سروا
یوسف سنکا چن احسن النس آچیب سروا
قصه لار ده حکمت لار ده کوررو کلو رسک
کتاب الچره بی شک آنینک مشهور رکی
حضرت یوسف تمام اوت بیر بیشمار آیه
ادیب یا پر لار بر عجیب دروش یوسف کورکا

فضلنک برله بنکا حکمت توفیقی بیرکیل
قدرتینک وارشه دلا سنک اولورایمیه
خاطریمکا رحمت ثنا سما چو بیرکل
کلمه صحیح دلیم فصیح قیلغیل ایمدی
عاقل قول لار خاطرنی باینیمغه
عقلیم صحیح دلیم نصیح قیلغیل ایمدی
قرر انتملار ریوشه شه قیلمده عشق
نظم برله ایدا ایبن آخطم ایمدی
اتاسی یعقوب نبی حق حبیبی
رب جلیل ابراهیم چقعار ایمدی
کل وریحان دور درسر جان [illegible]
هیره هش لار کا نفع دور آن نکلا ایمدی
اوحصا شمیدا جو نکلا منوط تلنو تاقه
اوشبو قصه دا بیر دوکی ظاهر ایمدی
یعقوب سنکا [illegible]
تاوقیلیق آتا بسنداکسولار ایمدی

تو عار کون تواون

2. **Ғәзәл Шәриф.** Ҡулъяҙма Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Шифры: № 54 — а 59. 1982 йылда Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Ҡарағужа ауылында И. Ғ. Ғәләүетдинов тарафынан табылған.





10 Заказ 446



3. **Йыл хисабы.** Ҡулъяҙма Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. 1977 йылда Баймаҡ районы Билал ауылында В. И. Әхмәҙиев менән И. Ғ. Ғәләүетдинов тарафынан табылған.



یخشی قدیمقلیغ بولور یل اورتاسنده
تونغفان اوغلان اشرملا نکو تملی ان لوم
بولور انکاسمه قیتغ بولور اول یل آخرینده
تونغفان اوغلان ساقینچ لیق اوزلقه ایمکا
ک لیک بولور قیوانغیلی بیلسم اول یل حیا بولیق
تورت یاردین چریک یغشقای خوراسانه
ایلکنده بولمای قیتغ بولماغا تونه ارار اسنده
اوروش کوب بولغای اول یل یغمور کوب یاغغا
اوچون لیقبولغای شهر اچینده اغریقلار
بکلوکلار قورت یلان کوب بولغای قیشی اورتا
بولغای اوچوم عم قورت قیشقاین یل باشنده
تونغفان اوغلان کو یاز کیک بولغای اوری
ایمکالیک بولور یل اورتاسنده تونغفان او
غلان ایلیک بولور یل آخرینده تونغفان
اوغلان ایچی بیس بولور اوغرلیق بولغا

باریعی
بعه

قیچان تتو شقات یلی کیلسم یمنس میو
فوران بولور توار قردین آتشلیق مارد
دیق اورتاسینده چیبلاو راول یل باشینه
تو غفان اوغلان ایردم لیک کوره کلیب بولغای
اوغلان آتماق لیق بولغای یل آخرینه تو
غقان اوغلان لیک کو تکولیک بولغای
قیچان اولوق یلی کیلسه تماقلار اوکوشی
آتلانغای لار توقرت یاردین جریکه لیکه بو
تغای خلایقلار تنکری تمی سقوقا بولغای اولوغ
لار بیکلر تالوج تینکای تیکم پرلاردا او
زد شن کوب بولغای قیش تیج بولغای آریم
بوغدای اورتاچا قلی بولغای نق روزه
توار کوب یاغماغ خلایق راسخ کوب یک
هستم لیق بولغای اولوم قیت قیچی بولور
قوزامق سیاکل کوب بولغای نعمه

اچچوزلیق




قیش سوقتی تارکیب یاغفای ینه شهر
خلقی کوچیلار کوزنای کوزنی ایتیق نی
قورونه جیکاب اول یل یاشنه تی غفا
اوغلان یق اتی بولمای قیچ یوزلیک بولمای
ینه کیشلوک ین دوست لیغ بولوبیل اوزتا
سنده تی غفان اوغلان یمشی نیت لیک
بولمای تقرا تا انا قوطلوغ بولغا
قاچان یلقی یلی کیلسا اول یل تاغ
فیلکان لیک بولوب چریک کوب بولوب ادروشی
تقی شی بولغی زنها تی کولکای قیستی قیع
بولمای یاز یقین تارکیب یاغفای …
اوتیا یاقلی بولور کوزنی ایتیغ هم کوب
بولمای اول یل قیش بسیار بولور آتا …
کلیک لور اول یل اوتیا سنه تی غفا…
اوغلان … لیک بولوبیل …
اوغلان … لیک بولور قاچان
قوی



اوایل قزلیق بولور اول یل یاتیشنده توغغان
اوغلان تنگ کوکلی اچوق قیلیقلغای ییل
اورتاسنده توغغان اوغلان تین
راکینچیلیک بولور اخرینده توغغان
اوغلان خستهلیق بولغای قیچان
تنگری یلی کیلسه اول یل یغمور آز بولغای
توروق بولغای ایکون تیکین یخشی بو
لماغای قیش اوزاق بولغای اول یل یاتیشنده
توغغان اوغلان بوش سوزلیک بولور
اورتاسنده توغغای ایماکلیک بولغای آخرونده
توغغان اوغلان خلق سیز بولغای
قاچان تنگری ایت یلی کیلسه اول
یل تورغاق بولغای آشلیق ده ریع آز بولغای
کیچیک اوغلان کوب بولغای قیشی سوغوق بولغای
ایلا ونقاق تلیم تعکو لکای یل یاتیشنده
توغان

72

توغان بیماننی خلق لیق بولغای اورتاسنده

توغانی اوغلان توغانی فتح لیق بولغای

آخرونده توغان اوغلانی ارحم لیک بولغای

قیلغان دونغوز ییل کیلسه

اول ییل اوغلانلر تلیم اولغای بیک لار خان

لار آراسنده ایکیری یوروغای آدم آتیس راقی

بولغای اون نی نعمت کور علوک قای ایت

یاغار قیش اولوق بولور تموی لای یوت

بولغای بو ییل باشنده توغان اوغلان ایرکی

خلقلی بولغای اورتاسنده توغان اوغلان

اون کونکلو نیم اینسی قیلغوچی بولغای

والله اعلم بالصواب تمام بوب

ابن عباس رضی الله عنه روایت قیلور پیغمبر عم بیلور

هر کیم منم امتلریمنی نک نیاز قیلماغ قالی کفار اوچون

جمع کوف الکوفة ایکی سینی قالغان نهار عم تیغارة بولغای

محسن زاده ایتور بو زمانه ایکی بیر نیل ناجی کمسر

یتنامر دایق ایتور پیغمبر عم ایری آتا انا اروندن

**4. Үҫәргән ырыуы тарихы. Өҙөк.** Ҡулъяҙма Башҡортостан ғилми үҙәгенең Фәнни китапханаһында һаҡлана. Шифры: рб—2279, 7—9-сы биттәр.






صتو لار وعلاسی اورماللار وعلاسنی دوره دوغ تقسیم ایدب الماقی روحسوسه

[illegible] ایلتماج عرضه لار حصوصیده [illegible] شاه محمد باتیل پیشر اوفا مرحمت ایدب [illegible] جبار دی

صلاحیت ایلاه هر قایو لار [illegible] صتو لار وعلاسی [illegible] اورماللار وعلاسی [illegible]

[illegible] اما [illegible] هم شولوق [illegible] اولوق [illegible] ایلان تسمیه

[illegible] معلوم [illegible] یایق [illegible] تو بالگی [illegible]

[illegible] یایق [illegible] صاقی [illegible]

[illegible] باشند [illegible] باشند [illegible]

[illegible] بانگی [illegible] ایدب [illegible] تو باگر

[illegible] باشند [illegible] هم مبارک [illegible] باشند [illegible]

[illegible] باشند [illegible]

[illegible] اورماللار [illegible] اورق [illegible]

[illegible] هم [illegible]

**5. Нуғай һәм Ҡазан юлы башҡорттары үтенесе.** Документ Ырымбур өлкәһе Дәүләт архивынан Р. Х. Халиҡова тарафынан табылған.



6. Тажетдин **Ялсығол. Рисалә-йи Ғәзизә.** Ҡулъяҙманың тәүге бите. Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Шифры: № 7—а 18. 1977 йылда Баймаҡ районы Буранбай ауылында В. И. Әхмәҙиев менән И. Ғ. Ғәләүетдинов тарафынан табылған.


بسم الله الرحمن الرحيم

7. Тажетдин Ялсығол. Рисалә-йи Ғәзизә. Ҡазан, 1908, тәүге бит.


٢

بسم الله الرحمن الرحيم

سانسز حمد اول خالق الكون والفساده كه آدم اوغلانلرنى انواع فصاحت وبلاغت
اوزره آراسته وپيراسته ايلدى * اوزن كنز مخفى اولدىغيچون * اظهار قدرت ونعمتلر
اوچون ( فاردت ان اظهر ) ديدى عن عالم الارواحه جانلرى پسليوب حكمت كامله سى
ايلان آتامز آدم عليه السلامنى عالم هيولى دن عالم صوره كلتوردى * وآدم اسما
تعليم ايلايب ملائكلردن مفضل ايلدى * بو جملەنلك علە غائيەسى بر آدم صفى دن
بر حبيب براتيب آنى كندويه مقرب ايلماق اوچون ايدى ( انى جاعل فى الارض خليفة )
دن مراد بو ايدى شول ايلدين (لولاك لما خلقت الافلاك) ديدى بس عناصر اربعه
اضداد اولمايب بر قالبده جنك وجدال اولمايب توردقى بوسببدندر * يوق
ايرسه بو اصول اربعه هر برنين مهربلر ايدى * چنانكه اول دورت دشمانى جمع
ايدبيب دوست ايلامكى كندونك كنز مخفى دن قدرتنى ظاهر ايدوب اوزينلق
قادرلكن بلدرمك اوچون در كندودن اوزلارى عالم الكون والفساددن عبرت
ايلايب قلبدورطه سندن قورتلمق اوچوندر قوله تعالى (اولم ينظروا فى ملكوت
السموات والارض ) وصلوات صافيات اول شاها كه بو عالم الغيب والشهادةنك
پادشاهى بو عالم العليا والسفلى كلسى آنك طفيلندا اولدىغى مقرر ومشهوردر (نظم)
تعالى الله زهى خلاق عالم * ايدى بر قطرەدن خلقى مكرم * مصوّر خا كدن تقويم
احسن * ايدى كلزار كل لردن مزين * بو صنعتك لازمى توحيد صانع نه ممكندر قرار
باصانع * حبيب حضرت خلاق عالم * عليه وآله صلى وسلم * علو شانته برهان اقوى *
نصوص قاطعه يس وطه * نه رحمتدر سموات وزمينه * نظر قيل رحمة للعالمينه تقربه
ترقى اهتمامى * وراى عقلى ارادنى مقامى * وهم آل واصحابلرينه رحمت اولسون كه

مقتلرى

8. Әбүлмәних Ҡаргалы. Тәржемә-йи Хажи Әбүлмәних әл-Бистәүи әс-Сәғиди. Ҡазан, 1845, тәүге ике бите.



٢

ترجمهٔ حاجی ابوالمنیع البستوی السعیدی

حکایت اول

بسم الله الرحمن الرحیم

بر کون خوجه حسن بصری مکر
ایکی الچوکزلارین محکم دوتوب
دیدی نقره می الکده باکه دُر
اول ایرانلار ناجی اولان مه جواب
سیم دُر ایرماس الده ایکی پول
بیع ایدوب باز اوه ایلک اوشبو حین
دیدی ای زین الرّجال نولاکه خم
الغذ ایدوب بریله تسبیح رسمنی
اول کریمه دیدی ای شیخ جهان
ایکیسین ضم ایلر ایرسم کوب اولور
سندین اوشبو سوزنی ایلرمن عجب

حضرة رابعه عدوینی کورار
اول کریمهٔ نساء واردر اوزوب
بوبله محکم دوتهاقنک آصلی ندر
وردی اول شیخه جوابی باصواب
بیلهسن یا مروری اهل قبول
آلمشم بلکل همام المؤمنین
ایلسنک بر ایلکنکا دو تسانك بیم
نولایاد ایلرسنك الله اسمنی
فتنه دور هم برسی حددین یمان
بوجهتدین نچهلار منکوب اولور
نته فهم ایلامادونك عالی نسب

ذکر

ذکر حقنی دور ایدرلار قلبنی
کم بلورسن اوشبو دنیا کثرتی
تعلیه نندی دنیا کثرتی
دمی فرعونه بو دنیا کثرتی
اولا اول ایدی بل قابوس نام
قیلو ایتوب بازارده پیسه هر کشی
...ر اچنده تخم قاربوز بر زمان
بیع ایدوب بای اولدی غایت اول لعین
ایکی پاره آفتیدین بو قدر
ای بچه معناده اولان کورکر
عف اوچون ویرمبه فروغ نائنی
باغلایوبن ایشکنی برک ایدر
یعنی غلبانک قیوسنلق مراد
دیرور آنکا اسند کمدن زیاده
دیله یور آندین دشی الله اوچون
اول یلیرودن بوزوبن دیوارنی
اول قیپوچین کله هم اهل گدا
بیله اولور ایلیبن مبل مالَ
مالنی عنطا ایتوب ایمانیدین عزیز

دیوبن خوف ایلیوب قیلدم بونی
بی ایمان کنماکنتک آخر آفتی
نیلدی قارونی دنیا دولتی
ایلدی دعوائی الوهیتی
...بزه صاطماق ایدی کاری مدام
تخمنی جمع ایلمك ایردی اشی
ربها بولدی حقی حددن کیران
دیدی آخر انا ربّ العالمین
اهل معنی امثالی قیلدیلار
چان ایله جمع ایلیوبن سیم وزر
کتروبه داقان محب‌لار نامنی
انبیالار سنتنی ترک ایتمد
شبئ لله اسنیو کلور مگر
کیدر آندین قونکشویه اول فرح شاد
هم خلیل الله ایشتور آنی چون
دوزاتر فی الحال دمی بر قاپونی
مالنی انفاق ایلده بهر خدا
عکسیله موصوف اولوبن اهل ضال
اهل حال مایار اوزونی بی تمیز

9. **Мифтахетдин Аҡмулла. Шиғырҙар.** Ҡулъяҙма нөсхә Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Шифры: № 63 — а 18. 1977 йылда Йылайыр районы Үрге Түш ауылында В. И. Әхмәҙиев менән Ә. Х. Вилданов тарафынан табылған.



10. **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. Йәдкәр.** Өҙөктәр. Ҡазан, 1897, 39—42-се биттәр.

٣٩

١٧ نجی نوبابر ١٨٨٥ نجی یل شهر اوفا

کوکرت صوی

١٨٥٦ نجی یل ایبون‌نڭ ٥ نجی کوننده شهر اورنبورغده کاد بتسکی کوریوصدان رالاطوجه سرطاوی برله یعنی قلاق هم‌باش سرطوینه دوا استاب سهار عوبو ناستنده سورئیجی اسکی عوروبوك قرینده عوبنه لقدان ساقلا نمش کوکرت دواسنه بار دی اول بر بیوك طاودور قایونڭ کوزلرونیدین تکرمن اولاعندین آقعان کبی کوکرت صوی آغادر آنده باقعهم کوبرلار یصلعان ساوینڭ جیتدان یوروب صواچالر کول امنده سه یوزه لریوتیعلری بار انداغی منکانی بلروب بولماس هم عجایب و غرایب طاشلار چشمه لرهم نمتلار بار یعه سی معرفت اباسنه معتبر دور پادشاه مضرتی الیکسانتیر ثانی نیکولایویچ نڭ طرنلوا ایعه بیرامنی شول کوکرت شهریندن یصاوق آنندن عودت ایدوب ایکنچی اوعوستده رمضان شریف عیدکنی شهر اورنبورغده تیلفنڭ کادیتلر یعنی شریکلر ومرلاعرده ایکنچی بر قاستقامن پیتربورغدان ریئوبزور کیلوب مرترلی هنرلرومن دین امتحان ایدوب بعضی لرومرکه مدح کاغذلر بیرلدی بر هم انکا لایق بولدق

آقطاش خان

بو آقطاش خانی شهرلرده کور دکمز یوق بکر ساه ذالقرنین دیمکله مشهور ذات شریف شرح قاموس دیدوکی اوقیانوس کتاب قولنیچه یمن و عربستان ملکی صعب ابن الرایش دور دنیانی کیزوب مغرب مشریقنی آلوب روس پادشهی قبلانتی آلوب دشت قیپاق جیکنه یتکاچ ماورنی شهری نڭ پادشاهی خان کیر دین آقطاش خان نڭ کم ایر دکن ایشتدی بو ذالقرنین تواریخنده ایتور که شاه جان کیر ماورنی دشت دیار ندان کیلوب ماورنی شهرین قلعه برلن الوب یور فرق یل آندا اولور ایدی روس دیلری برلن دشت آرا منده کبه برلن یورکانلر دان باج مراجی آلور ایدی اول کبه یورکان موقوللغه بوتیمه کیمرك بو هابی بر ذالقرنین که جواب وبر دیکه ای شاه میان بین هم دشت دیارنده یوش خان نڭ مرلشکری ایدم یوش جهاندین کدیجك اوعلی تعتاسنی کونلارداك ولی معصوم ایدی

اما بهمه دان قالمش بر حائز اده وار ایدی آدینه آقطاش یا که اعطاش دیرلر ایدی
بو آعطاش منك قبلوب تمتاش قورالای مقدم سر عسکر ایدی خان اولدی تمتاش فرح
زاده دشت آلوب قاچوب بوقر بند ده بر اوتماسنده قهلان اسلی قلعه ده قویوب
اعطاشدان خلاص ایتدی یعنی بلدین مسکر مین کلوب قهلان نینك سرورون قویلادوم
بوریکرمی یلدور که بونك اولدوم تمتاش بو قلعه ده محتاج اولتوربر بو قلعه ایکی طاغ آراسی
بر تنك یعنی طار دره دور دیدی بو ملروده یرندان اوچ کونلك یولدور القصه ذالقرنین
تمتاش مینی کیلوب هم آصل نسب هوشنك شاه اولادیدان اولماغون زعامه قبلوب
ایلچی لر ییباروب آلتوردی بابانك هوشنك شاه بورطن آلوب ویرایم دیدی تمتاش شاد
اولوبحق ذالقرنین اولوغ دربری مرطوس حکیمنی یاسغور یرلر که باش ایدوب آعطاشغه
ییباردی ذالقرنین اوزی اون آلتی کرهورمنك عسکر برلن بو یاسبونده آلتی یوز منك
کیشی اولور اولم یبرماس یعنی وقلعی صوفدان طاشدان کویوصالاقالغنی قاصدلار فرق کونلك
بولی ییکرمی دوربنتکونده آنی ایبارسوی اوبرنده آعطاس خان اوردا سغه یتدیلار
بر تعلیب مصر اده یعنی طلع باشنده بربی بالان اوردا کوردیلار شیله کم ایتی هم اوروق
یلی فرتج بری بر اوی توقش اودلر حهیل غارکاهلار موروشی سیوانلار
اورایشی شیله کم ب هذی قباس بی بابان اولوسی قسوم القصه آعطاش خبر
[illegible] آولابده وریرلر یدان حصور [illegible] اسکندذالقرنین نه کشیدور کم ایلچی کوندرمش
وریرلری ایتدیلار ای شاه اسکندر دمی بر شاهدور رومدان چیقیبدی عجم دیارین آلدی
ییل کبیره چقوب ز هندستان الرافنده عیالای مرطلر ونیا ز جیش زنکستانی
اقلیمنی طوتدی اندان کلوب مراسای آلدی هندستان وسندستانی مصر قیلدی آندان
هندامستان دیاری نینك [illegible] دورة یوزجزیره سن کیردی آندان چینه چندان [illegible]
یندان آیعوره که اول یانقرط نوعی ایدی آندان ترکستانه آندان ماورستانه اندان
آلان بر جانه بوهم آخر یالتقر دقه قالمشمش بنه طبرستانه کشمیره ینه تعر غزه اندان کوه
البرز ایتا کنك یاجوج ومه جوجه سدی یابدی اندان زابلستانه وسیستانه کردی آندان

سمنگانه

بنکله آندان نبورستانه اندان کوهستانه کروب عور غرجیه چقدی آنلری دمی
توطدی آندان روسه انلری فتح ایتدیده سکاایلچی کوندردی ای آغطاش مان
اسکندردیدکلری سونک کبی کشیدور اسکندر اردان عاقل مباش دیدیلر انداع اولصه ده
آغطاش مان ایلچی لری چاقروب برطوس وزیردین صورادی اول قلرسو طروب
دشت تلیعه ذالقرنین نینک سوزین سویلادی که آغطاش طبوعه کلسون یعنی استقبال
قلسون بوق ایرسه دشت دیاری بوش مان اوغلی تعتاش ماننک ورقوسون کیشسون
گتمزایسه دمی بلوریسه اوش باروم ایرسه طورسون جواب ویرسون دیدی بوسوزکه
آغطاش شیله قلقدی کداصی طشی غضبله طولدی قصد قیلدیکم قاصدلرمه بقروب
قافیه یلدرم کبی شاقبه ولی درحال حیله قیلماغوچون غضبی اوطن تسکین قیلدی کنتوی دیردی
طوردی ( بوننک مقتده یعنی بر آغطاش قصه سی بتون صورجلد ورامامور قصه
بولصون ) اسکندرننک کم ایدوکن ایشدوب ایتدی هیچ کسم دنیاده شعلاردان
ینکاقلروشمادی امامد ایراوکه یلرداموبرورسه هم بسند ٭ آلور امار حیله ایدالم دیوب
قرقه دورت سرور اوغلی بار ایدی هر بری بر بیرده بکلر ایدی آنلاری کینکاشکه چیدی
اولوغ راقلری اوّل ملاش مان توامش مان اولاش مان میش مان سوج مان کولم مان ترچم
مان دنج مان بشیم مان هر قابوسی اوطرهم قرقمنک ایرایله اون ایکی کیاوی دمی اون ایکی
برده ماتلق قیلوردیلار آنلار اوّل اولوسی تمن تاش قمل تاش اسان من جمن
جمن تیمور بنه تمن تیمور بنه بایتمور بنه قایتمور بنه الالاش بنه تحتمش بنه جانمش بنه
تلراعی تاتلر بونلر ایکی یوز طوقسان منالشکر ایله کیلوب مجمعی آغطاش مان میدی
یوربنک ایر جمع قیلدیلار اسکندر که استقبالغه کتدی بار وب بولا کلادی هم قوناقمه آغ ایندل
صوبندا عی اورداسنه چاقروب قایتدی اسنکدر ذالقرنین اعطاشی دشت قبچاقدا قالدوروزیعه
وده قیلوب تعتاش کلانغه دشت قبچاق اورینه بردی قافکاز دیلرین یعنی دربند تیمور
قپونی تاشیروان شهر بنه بنه شیر ازی آذربیجان دیرلار تاغر اقعوار انجمیله وعده برلن
آنلاری آرام قیلوب اعطاش قرق دورت اوغلی اون ایکی کیاوی برله یارمش ییدی .

بارچه‌سی آغرمدیه‌لار آلوب قایتدیلار شاه ذالقرنین یوزیگرمی منگ‌لار ایله اعطاش
مانعه‌قونالمه‌بارور ایکان اول‌لار افدان آعطاش قارشو آلوب آغیدیل صوی‌نینگ بو‌رطر
افنده قونلردی آلا اوینلر بری آعطاش اوزی آلوب طردی کیاولر بن الار افقه‌یدی
یوزمنگ عسکر بیرلن یوصقون قویدی تاکم اسکندر یلار طعامه مشغول بولماده تاصوب
قروب اسکندری هلاک ایدوب مهانعه داستان قالادیدی شاه ذالقرنین بردوش کوریش
ایدی سیسکاندی وزیرلوبنه صاف بولونگز دیدی وزیرلری اشام اچم که مشغول بولمای
قلر اول‌لار دیلار شاهلار عه‌هم ر ...ت کسه اعطاش نعمت‌یید ورور ایکان اسکندری‌لار
سرعسکرلری قیطاسه آلار افدان چققلن پری کوروب خبر بیردیلار هم اول خبر آلادیق
انکسزدان برگوشیله نعره چقاردیکم نعمت بیرشاه وسلاطین برندان طوراتیه آعطاش
بلادیکم لشکری یتوشمی یوکرتمه هشته بیلارکه قیطاس عقل‌لبن آعطاشه تیغ اوردی
آعطاش قالقان طوطدی سیفی ایله بولاطقالقانن ایکی‌شق ایلاب یغربیننه بررهم اوردی
آعطاشننگ اوغلانلاری قیطاسنی آطلمدان آیردیلار بونلرین صونگ اوچ کون
آغیدل بوینده سکزیوز یگرمی منگ عسکر سوقوشتیلار یوصوغنشه شاه اسکندر
ننگ مصرشاهی ننگ قزی شمائل بانودان طوغان اوغلی قمقران یدی یلنیندالالدی
براه برکه ایدی قان اعطاش عسکری اسکندری لرف صوب سنجاق توبنه سور
دیلار ایرسه قمقران شاه منه ماصرلاندی آی کوروب شمائل بانوغیرته کلوب
نعره اوروب قلیچن بالا چیق قیلدی آی کوروب مهراج حسان قزی داشد
دمنو ...قیزی قمرخ کیگلان قیزی شهربان روس شاهی قیلان قیزی سوتان
لردان ملالی میثران اون ایکی منگ سردلاران سرکیران برله سنجق دوبندان
دریوقویوب اعطاشه هجوم ایدوب کیروسه سردیلار تلپادرینه ایرکور دیلار اندان
ینه اعطاش عیش اسکندره قاچلار اورجوردی حتی دورتنچی کون شاه اسکندر سوار
اولوب سنجق وعلم کوتاروب کوس ونقره‌لر اوروب اعطاشه یورودی اعطاش دمی
سوار اولوب یورودی

نظم

11. **Батыр батшаның әкиәте.** Мирсалих Биксуриндың «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана...» исемле китабынан. Ҡазан, 1869, тулыландырылған 2-се баҫмаһы, 62—66-сы биттәр.

II

НА БАШКИРСКОМЪ НАРѢЧІИ

## باطُر بادشانن آکیاق

باطر بادشانن آطفوصی نیکن بر سیروی بار ایکن بر طمانده‌اسیور خلاف
اشترون هندوب باطر بادشا اول سیروه‌ن نوبن طامرن قورطماغه غصت
قیلغن انی اول سیر و باش طارتوب فارشلق ایتا باشلاق هم آلارنن اسندان
ایکی توره بر برهی بلن کنکاشوب اوذداربنه بر آتس موط هم شوم کشی‌لردی
ایارتوب بادشانی اولتورایك دیب هوذ بروکتوردیلر کوتنارده بر کون
کومکلاشوب کنکاشنی‌لر شوردُنك اورطاهنداغی غرال‌بلارغه اوط هالماغه باطر
بادشانن بر قلوغی بار اینی اوط صققان زیرکا بارهه هنان بورون کُلوب
زماغتقه بولوشوب اوط هەیورکنده آرالاشوب بورور انی بغاناغی ایکن
توره ابداشتری آراهنده بر برهی بلن هوز برکوشتیلر اوط صقغان صافطه
هونده‌رشکن بولوب بلورنماینسه بادشانی قتق زیرکا آلوب قاماب باهوب
اولتورورکا هر نیسوك اول کنکاشترون زیربنه کیلتورمك اوسون وقت
بیلکُولانی‌لر هم اوذداری‌فن آراهنداان هوکونیکوف نیکندُن الدهنه آشقه
زیبولوب کلوب کون بوبنه آر تورلی اشکیلر آراق بال هُرا اسوب ترنکا
صافلی اثروشوب اولطورذیلار تورلی اوینناراوبناب کُلکُوهوزلار هوبلاشوب
کونکلداون ژوانوب قاروندارن طوبغوروب ژوراکترن زبلکوتوب اینندی
بادشانی اولتوروب اوزبزدُن مراطبزغه زیتامز دیب شولاشوب اولطورغن

طماندارنده آلاردن آراغندان ایکاوهی کونکلکه آلغان کینکاشلرون‌دان
قایتوب اوزدارین استده اوکونده‌لار آنان هونك آغزونغنه طشغه صغوب
آولاق زیرکا ایتوب برهی آیتی ای های ایداش منم اسم بیك بوشا
باشلاری بو بندن اشبو الا نیسك بولور شلطی باشبدن کتارن کونکلم
هتوب طورا تینی میتم باوومسه بو اشتی طاشناب قوبوبط یاخشی بولور
ای نیکاس ایکنسوی شوغان غارش بیك دورست ایناهنك هوذنکه من بیلك
راطی من تبنی می اهریکدکم بلن کرسه ایداشترمه ایاروب بر کنکاشنه
بولماطه اوذمدن زورکه بوطا توشوب طور قایغورغه عالنوم آننك اوسون
بو بدن بادشاهیم بیش آرو بادشا بیش بوتی شعلطی بادشانی باشین
زوغانوی بیلك طور یاخق بولور بظاهی قصان بوهالا باشبطغه توشار نینی
اینیوی نی اشنابیك بونان باشده صارا زوق بادشانی اودینه باروب بو اشنی
باشنان آیاق هوبلاب باشبطدی کیمورمکن اوتونوربد تبنی اینسمی اوبلای
اینکنمد بیش اوشار مروك بونان ایداشلر بذدان نیسك ایموب غونواوربد
ایکی کنکمیننی هذدورمابننه تبنی بد آلارغه ایتوربذ ای ژراندار اکر
ارشی نوندن اورطاهنده اوط صفارور بولماق ایندی اسکوی طاشناب
بدکا طارالوشو کراك نیب هر قایسط اطمه‌بطغه قایتوشوب کنکان بولوربط
شزیان هونك نوزدارن برکتوب قول طوطوشوب اطمه اسه ایتوب کیتتی‌لار
ایداشترینه الکی هوذدی ایبلاب‌کنه آیتتی‌لار آلارده راضی بولدولار بروك
نون زاروی بنماهنان بوروث بر برهی ایلان واخده قوبدولار اولطورغی
ژبرکا طاغیله ژبولوزغه اهروکاری قایطاهی کلمانی برکا اولطورروب قطوشوب
نون زارمنعمه ایداشترون کتوب وخت اوزدورماقصی بولدلار نون
اورطاهنده طاغیله زغنان زبولوب بیلکولاکن قرالدلارغه اوط هالوب بادشای
اننوب قولوبطغه توشوروب اولتوروربذ تیب قالدیلار بولار ایداشترینه

بیرده طویب تورمابنچه اترکان بولوب المه‌لار بغچه قاینوب بر آنا زال اینوب
ایقابق نیب صغوب کبنتی‌لار شوتان هونك طوب طورا بادشانی اودینه
باروب کلکنداری تیوشنی کشی‌لاردان بلدورتوب بادشا عضرتتری بلن
کوروشوب هویلاشامی هوذیف بار نیب آیتتی‌لار بادشاغه باروب معلوم
ایتتی‌لر بادشا اول سیرودن وقانطلغن بلوب قارشی‌هنه کیلتورماینچه
بولاردن ککلنداری‌نی تیبن هورانطی آلاربادشانان باشغه کشی بلن هوذلاشور
هوذیف زوق نیتی‌لر آنان هونك باطر بادشا آلداغی بولمهنه صغوب
کوروشلی بادشان کورکاس یوز توبن زیغلوبسر ایتتی‌لر باش خطرة یف
هددن آلدوغزده کناهدی بولدوق ظلات شریفنکزدی اولتورملك قتدنده
بولغاینق المرده اول اوبصدان غاینوب توبه اینتوك رحمنی اشکنکذکا
کلوب کناهبردی معلوم ایتاك موینوبدی خطرنغرغه طابشوردق اولتورهاکرده
یف رامای یروك یددن ایداشتر بر بار آلاردن بارصه‌هی المر هوکونیکوفتن
المه‌هنه زبولوشوب اسوب اولتورادار توبن اورطاهنده قلاتن اسنه لوطا
هانوب کوبتیوروب هددی اوا صنقان زیرکا کلکان ساقطه اولتوروربف تیب
توپادن زارمن کوتوب اولطورادار نیتی‌لر بادشا بو هوذدی ایشوتوب خبر
زاسغن غاینا غاینا هوزاق آلار آنا اسوب آیتتی‌لار بادشا موینوبط
هددن قوارغزده ایندی یفدن بلن تلاهاکز نی اشتاکز بروك اینکابددن
دورسنکن بلملك اوسون اشانصنی برکشی شونف اصابطوروب نی اشته طوغاندارن
اوذکز بلوشوکز المرده توبن زارمنه‌صه شوتدا بر برهن اسکی بلن هبلاب
اولطورادار تینیفر آنان هونك باطر بادشا اول ایکی کشبنی قراولغه قویدی
اوذی بربولك هالدانلار المردانوب‌هم آلارغه اوذی‌نی اشانصنی صیناونکنارندان
براوهن یالغان نیوروغی بلن قوشوب بغاناغی المه‌غه توبن‌دن اون بروضی
هاغتته بارورغه قوشنی اول قرالدون قورشاب آلوب شوندا اولطورطوسا

کشی‌نی بارچه‌هن طوتوب تیلاب آلوغز دیب اول صیناونیك بادشانی
یوروغن کیراکنچه زیر بنه کیاوردی بروك باطر بادشا زوزا کته صدای
آلماینچه بیلکر ۷ گان هاعتنی اونطوب ایندی اش بتوننای بنکان‌نُر تیب
اویلاب اوذی یوری طورغان ایکی کوبشاکتی بر آرباهی بار ایکن بر
خدمتچی‌هی بلن شرغان اولطوروب شوندا آشوغوب کیتتی اول غرالدوغه
فراهه اورامدا کش کورمکاس آبطوراق هالطانتارم ایشك آلدونده بوماهه
اُلمه اُسته‌دور تیب هیسده قورقماینچه ایشك آلدینه اینوب آرباهننان
توشوب یالغط خدمتچی‌هی بلن اُلمه اُستهاینوب کیتتی اولطورغان آلباوطتار
بادشانی قابل کلکنی ایشتوب قوتتاری مخوب آبطوراشوب قالدولار
باطر بادشا هیسه نوتی اوذکارغاینچه زیون آراهنه ایندی آلار شوتطوق
هیکروب طوروب بادشاغه باش اوروب اینکایه بروب موین هوندولار
بادشا آچق یوزی بلن گُلمی بیتی بلن آبتتی اورامدان اوتوب بارا اینوم
المه‌غزدن تذارهننان کوب شام اوطنار کوروب اوشونك یاغتی غوناقدار
بار اوشای تیب اویلانومده شونان مونك کیستن ابرنه‌لوکن بلکانی بوش
قنه اوبه ضابتوب یالقنده اُلمه‌غزغه اینوب حرمتنو غوناقطارغز بلن بر آط
ترکا اولطوروشوب برار طوسطاق اُسوب کیتایم تیب کیلکاینم تینی آنان
هونك بادشانی بغاناغی صیناونیکی هونکغه قالغن اوسون بیك یازهوب
کیلوب اوشو غوناقطارغه برده هندورماینچه توزکا اوضوب اولطورغی اول
آرالا بر آط وقت اونکس زیونداغی کشی‌لر بادشانی قوتتاب هاولغنه
اشکیلر اُسوب بادشا برده آبطوراماینچه هم توهن بوظماینچه آلار بلن آنکا
ملایکن بیلوب اولطورعن صافطا غوناقلاردن براوهی خورانی غولاغنه کلوب
وچمنه جینتی دیب شیرلاتی بادشا شونی اشتوب قالدی اُلمه اباهی بر نرنه
بیلمکن بیلوب زوق الی زیتمکن تینی اول آرالا باطر بادشا اولطورغیسنداِن
طورا کیلوب بیك شب طاوش بلن حُرانتاب آطانکدن ایتنه هادنری هننك

وختنك زيننكن بوهالا منُ كوبدان زيننى نيب هوكوننبكوفتن ميكاهنه
هالوب ابدى لابوانكُن‌نُن ايبى كينوب كُلنه‌لاى نكراب كيننى اول زغننه
بغاناغى صناونيك قوراللى هالطاننار بلن كيلوب زيننى آلاردى كوروب
هورانتاب نيز بو اُنردى بيلاب صرماب قويغن نينى اوزكاميناوت غنم‌لار
بوز نوبن آياغنه زغلوب بردُى كمانبردى كهس نيب اينالدولار شونان
هونك يارصه‌هن برام برام طوطوب طرمىلاب طاشنان‌لار آنان هونك ياطر
بادشا بيك آصولانوب الكُى صناونيك كه ايلانوب طوروب نى‌اوسون هونكه
غالب‌ونك نيب قاق مانغاينه بومروف بلن هالوب اباركس كوذدرننان
اوطنار ساسلوب كيننى شونان هونك الكى صناونيك يان طوقصاهنان بوروف
قاقن صغاروب بادشاغه كورهاننى دوروست صغاى بادشا اوذى‌نن غطاهن
كوروب صناونيكنى مانغاينان اوبوب هويندوله هن منُ ايشانمنى كشم
ايكان هنك نينى آنان هونك نيلاب قويغان الكى ميناوت كشى‌لردى آغا
طابشوروب باسنروك اُسينه انذوروب هالدوردى آنُن هونكه هر برهى‌نن
باذوغنه كوك باخشيغنه يطاهن بيردى

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш *(Э. Ф. Ишбирҙин)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3

I БҮЛЕК. XIX быуатҡа тиклемге башҡорт әҙәби теленең тарихы *(Р. Х. Халиҡова)* . . . . . . . . . . . . . . . 11

*Беренсе глава.* Боронғо төрки, урта быуат ҡомартҡыларының теле һәм Урал — Волга буйы төрки әҙәби теле . . . . . . . . . 11

1. Боронғо төрки яҙма ҡомартҡылар һәм уларҙың башҡорт теленә мөнәсәбәте . . . . . . . . . . . . . . . . . .
2. Боронғо һәм урта быуат әҙәби ҡомартҡыларының теле . . . . 15
3. XII быуаттан алып XIII быуаттың беренсе яртыһына тиклемге Урал — Волга буйы төрки теле . . . . . . . . . . 17
4. XIII быуаттың икенсе яртыһынан алып XVI быуатҡа тиклемге Урал — Волга буйы төрки теле . . . . . . . . . . 27

*Икенсе глава.* Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, төрки яҙма теленең үҫеүе . . . . . . . . . . . . . . . 41

II БҮЛЕК. XIX быуат һәм XX быуат башындағы башҡорт әҙәби теле тарихы *(И. Ғ. Ғәләүетдинов)* . . . . . . . . . . . . . 88

*Беренсе глава.* XIX быуаттың беренсе яртыһындағы Урал — Волга буйы төрки яҙма әҙәби теле . . . . . . . . . . . . . 91

1. Суфыйсылыҡ әҙәбиәте теле . . . . . . . . . . . . 91
2. Әҙәбиәт һәм фольклор традицияларының үҙ-ара тәьҫир итешеүе . 111
3. Башҡорт әҙәби теленең тарихында мәғрифәтселектең урыны . . 116

*Икенсе глава.* XIX быуаттың икенсе яртыһындағы яҙма әҙәби тел . 127

1. Мәғрифәтселек әҙәбиәтенең теле . . . . . . . . . 130
2. Башҡорт әҙәби теле тарихында М. Аҡмулланың урыны . . . . 130
3. М. Өмөтбаев һәм уның башҡорт әҙәби теле тарихында тотҡан урыны 137

*Өсөнсө глава.* Башҡорт шәжәрәләренең һәм тарихи-әҙәби әҫәрҙәренең теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 145

1. Башҡорт шәжәрәләренең теле . . . . . . . . . . . 146
2. Тарихи-әҙәби тәуарих яҙмаларының теле . . . . . . . 150

*Дүртенсе глава.* XX быуат башы әҙәби теле . . . . . . . . 154

1. Хәҙерге башҡорт яҙыуын булдырыуға тәүге ынтылыштар . . . 156
2. XX быуат башындағы башҡорт поэзияһының теле . . . . . 159
3. Башҡорт прозаһының һәм драматургияһының теле . . . . . 165

III БҮЛЕК. Совет осоро — башҡорт әҙәби теленең үҫешендә яңы этап *(Э. Ф. Ишбирҙин)* . . . . . . . . . . . . . . . . 174

*Беренсе глава.* Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең сығанаҡтары . . . 174

1. Урал — Волга буйы төркийе һәм уның хәҙерге башҡорт әҙәби теленә мөнәсәбәте . . . . . . . . . . . . . . . . . 175
2. Башҡорт халыҡ ижадының хәҙерге әҙәби телгә мөнәсәбәте . . . 185
3. Дөйөм башҡорт һөйләү телмәре һәм уның хәҙерге әҙәби телгә мөнәсәбәте . . . . . . . . . . . . . . . . . 196

*Икенсе глава.* Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең яҙыуы, орфографияһы һәм орфоэпияһы тарихынан . . . . . . . . . . . . . . 204

1. Башҡорт әҙәби теле яҙыуының үҫеше . . . . . . . . . 205
2. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфографияһының үҫеш тарихы . . 215
3. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһы . . . . . . . . 222

*Өсөнсө глава.* Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең лексикаһы, фонетикаһы һәм грамматикаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . 227

1. Лексиканың формалашыуы һәм үҫеүе . . . . . . . . . . 227
2. Башҡорт әҙәби теле фонетикаһының үҫеүе . . . . . . . . 237
3. Әҙәби телдең грамматик ҡоролошо һәм уның үҫеше . . . . . 243

*Дүртенсе глава.* Хәҙерге башҡорт әҙәби теле стилдәренең үҫеше . . 250

1. Башҡорт әҙәби теленең китап сфераһында ҡулланылыуы . . . 251
   Матур әҙәбиәт стиле . . . . . . . . . . . . . . . 252
   Ғилми стиль . . . . . . . . . . . . . . . . . . 262
   Публицистика стиле . . . . . . . . . . . . . . . 268
   Рәсми эш стиле . . . . . . . . . . . . . . . . . 273
2. Башҡорт әҙәби теленең һөйләү сфераһында ҡулланылыуы . . . 275
3. Башҡорт әҙәби теленең ижтимағи функцияларының үҫеше (*З. Ғ. Ураҡсин*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . 280

Ҡушымта . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 285

Научное издание

ИШБЕРДИН Эрнст Файзрахманович
ГАЛЯУТДИНОВ Ишмухамет Гильмутдинович
ХАЛИКОВА Раиса Халиловна

**ИСТОРИЯ БАШКИРСКОГО ЛИТЕРАТУРНОГО ЯЗЫКА**

***(на башкирском языке)***

Редакция мөдире *С. Ғ. Мөхтәруллина*
Нәшриәт редакторы *С. В. Атнағолова*
Художество редакторы *В. П. Ковалев*
Техник редакторы *З. Ғ. Сыңғыҙова*
Корректоры *Ә. З. Хажиева*